Зигат Султанов
Йыһат Солтанов

СОЧИНЕНИЯ
В ПЯТНАДЦАТИ ТОМАХ

ӘҪӘРҘӘР
УН БИШ ТОМДА

ТОМ
V

ПЕНЫ НА ВОЛНАХ
ТУЛҡЫН ӨҪТӨНДӘГЕ КҮБЕКТӘР

Сатира

Яуаплы редакторы

Солтанов Й.Ә.

Әҫәрҙәр ун биш томда, том V. Тулҡын өҫтөндәге күбектәр. -- Өфө, Башҡортостан "Китап" нәшриәте, 2005. -- 287 бит, 24 табаҡ.

Был китапҡа әҙиптең төрлө йылдарҙа яҙылған сатира әҫәрҙәре тупланды. Компьютерға һалғанда автор уларҙы шымартҡыланы.

ПОВЕСТӘР

Ҡултыҡ пираттары

Мәшһүр Ҡултыҡ ҡасабаһы аҡ батша заманынан, Ағиҙелгә тирмән ҡуласаһылай ҙур ишкәк-тәгәрмәсле килбәтһеҙ пароходтарҙың беренсеһе килеүҙән үк, гөрләтеп һалына башлаған. Йылғанан ҡороға ярып инмеш оҙонлоғо ун саҡрымдай киң генә тәбиғи ҡултыҡтың дәү ҡалаға терәлеп үк тороуы унда суднолар ҡышлатыу өсөн уңайлы шарттар тыуҙырған. Йәй буйына илдең төпкөл төбәктәренән башҡорт икмәге һәм башҡорт урманы сеймалын һыу түбәненә һәм үренә ташып йөрөүсе һәр төрлө “коробка”лар, ҡара көҙ етеп, һыу өҫтөнә ҡуйы шыйҙым – “сало” аға башлау менән, иген урылып бөткәс һалам эҫкертенә йыйылған сыҫкандар кеүек, ошо йылға ҡултығына инеп һырыша торған булғандар (һәм әлегәсә шулай).

Заманында кәсепсән бер алпауыт шунда килеп, ыламыҡтарҙан йәшелләнеп ойоп ятҡан тымыҡ һыуға, батҡаҡлыҡта кинәнеп үҫкән йыуан аҡтирәктәргә йүкә арҡан менән бәйләп ҡуйылған серек ҡорһаҡлы ағас баржаларға ҡарап уйланып йөрөгән-йөрөгән дә, һыу ситендә талдан һуйыл киҫеп алып, ҡултыҡ ярының башына ҡаҙыҡ ҡағып киткән, ти. Оҙаҡламай бында тишек сабата, керле сәкмән кейеп, һары йүкә бау менән билдәрен быуған бер төркөм зимагорҙар моронлаған да тын яр буйҙарында аһылдауыҡлы “Дубинушка” йыры яңғыраған. Итәге тубығына төшкән тупаҫ киндер күлдәкле, етек сәсле балта оҫталары, ҡалсайып ҡатҡан яҫы устарына сәмле төкөрөп, һалҡын һыулы Ҡариҙелдән һаллап килтерелгән шәмдәй төҙ ҡарағай бүрәнәләрҙән йорт бурарға тотонғандар. Күп тә үтмәй, ҡаланан алдыртылған слесарь ҡорамалдары ла килеп еткән. Шулай итеп, буласаҡ капиталистың ғәзиз хыялдары бойомға ашҡан: ҡултыҡ ситендә Башҡортостандағы беренсе судно ремонтлау мастерскойы, тартынып ҡына булһа ла, зәңгәр күккә мөрйәһенән ҡуйы төтөн көлтәһе урғылтып ебәргән. Ә мастерской тирәһенә бысраҡ баракторҙан һәм ләпәш землянкаларҙан торған эшсе ҡасабаһы үҫкән, уны, әлбиттә, йылға ҡултығына бәйле, Ҡултыҡ тип исемләгәндәр. Халҡы күбеһенсә, йорт-еренән яҙып, эш эҙләп сығып киткән холоҡһоҙ берәҙәктәрҙән торғанлыҡтан, Ҡултыҡ тирә-яҡҡа боҙоҡ бәндәләр үрсетеүсе хәтәр һағыҙаҡ ояһы булып танылған. Төбәктә бойомға ашырылыусы көндәлек алкоголь эсемлектәре миҡдарының аттай өлөшө ошо Ҡултыҡ ҡабаҡтарына тура килгән, томорҡо Ҡултыҡ төндәре бик йыш һәр төрлө ҡанлы ваҡиғалар менән шөһрәт ҡаҙанған. Хатта кастет оҫталары жаргонында, “Ҡултыҡ приемы” тигән исем аҫтында, тик торғанда әҙәм балаһының ҡабырғаһын һуғып һындырырға, йәки ҡул-аяғын бороп сығарырға йүнәлтелгән хәрәкәттәрҙе аңлатыусы яңы терминдар күбәйгән. Ҡара диңгеҙ яғынан ағылған атаҡлы рецидивистар бында хатта бөтә Рәсәйгә кеҫә тунау маһирҙарын етештереүсе Одесса подпол ҡараҡтар академияһының филиалын асырға йыйынғандар, тик революция ҡубынып ҡына эште боҙған. Битербурҙа “Аврора” көбәге ҡубарытҡан дәһшәтле туғыҙынсы вал тонйорауыҡ Ҡултыҡҡа ла бәреп кергән һәм уның тынсыу һыуҙарын, аҫтын өҫкә әйләндереп, ер тетрәгәндәй сайҡалтҡан. Тормош төбөнә тоноп, үҙ ҡорһаҡтары бойороғон хәүефһеҙ генә башҡарып ятҡан йолҡоштарҙы тимер ағын сүп-сар һымаҡ йәлләүһеҙ ағыҙып алып киткән. Һәм өр-яңы осор күкрәп тыуған ҡасаба тарихында. Граждандар һуғышының аҙаҡҡы мылтыҡ шартлауҙары әллә ҡайҙа алыҫта яңғырап баҫылғас,

Совет власының ҡәҙерен үҙ яралары ҡанауында татып белгән ҡыҙыл фронтовиктар ҡайтҡан Ҡултыҡҡа һәм, винтовкаларын кувалдаға, патрондарын сигәгә алмаштырып, яңы донъя төҙөүселәргә генә хас йәшлек дәрте менән суднолоҙың ҡубып ятҡан өлгөләрен сигәләргә лә ямарға – тыныс хеҙмәткә керешкәндәр. Саҡ йылымһырап ултырған сибек мастерской урынына киң ҡоласлы эшләүлек – суднолар ремонтлау заводы төҙөгәндәр, Лениндың үҙенең ҡайғыртыуы арҡаһында, тиҙәр, был завод юғары етештереүсән яңы заман техникаһы менән йыһазландырылған. Унда ябай ремонт ҡына түгел, ә үҙ көстәре менән ҡайһы бер суднолар яһап сығарыу эшен дә көйләр көн килеп еткән һәм Ҡултыҡ, ярайһы ғына дәррәү, ярайһы ғына шәп промышленность үҙәгенә әүерелгән. Үҙ-үҙенән аңлашыла: завод ҡатарынан эшселәрҙең торлаҡ мәхәлләһе лә киңәйтелгән, әлбиттә. Хулиганлыҡ төйәге булған ҡабаҡтар, отош уйнау ханалары һ.б. шуның кеүектәр иҫке тормош менән ҡуша ҡәбергә күмелгәндәр. Культуралы туҡланыу үҙәктәре, магазин, китапхана, клуб асылған, һәр яҡлап бай йыһазландырылмыш иркен стадион ҡоролған йәш-елкенсәккә. Комсомол, профсоюз һәм һәр төрлө бүтән ойошмалар хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик рухта тәрбиәләү эшен гөрләтеп ебәргән. Лағнәтле үткәндең йәмһеҙ ҡалдыҡтары инде тамам бөтөрөлөр, коммунистик көнкүрешебеҙ ал да гөл булыр тип көтөлгән...

* * *

Ҡултыҡ ҡасабаһының балалыҡ осоронда уҡ зимагорҙар “Дубинушка” йырлап һалған һәм яңы биналар күләгәһенә ышыҡланып әлегәсә йәшәп ятҡан баяғы бөкөрө баранторҙың ҡараңғы, бысраҡ тыҡрығы буйлап шул уҡ үткән замандың бөгөнгә ирешкән бер шәүләһе – алкоголгә бүртенгән тере ҡараҫҡы килә. Ел иҫкәндә ялпылдаған һуҡыр шәм ялҡынылай, аҙым һайын улай-былай сайҡала, ҡайһы ваҡыт, ҡараңғы ҡойма төптәренә һарылып, бөтөнләй күҙҙән дә юғала. Кәмәләрҙәй дәү резинка итекле аяҡтарының дөйәләй лап-лоп баҫыуы ишетелмәгәндә уны ысынлап та күләгәгә оҡшатырға булыр ине – ныҡ юғалтҡан ине шул бәндә кешелек сифаттарын. Ауыҙынан бер туҡтауһыҙ ҡубарылған күп ҡатлы-ҡатмарлы һүгенеү иһә шул буйтым ғилем өлкәһендә уның ҙур уңыштар ҡаҙаныуын билдәләй. Шуға күрә уның йәмһеҙ тауышынан көллө әҙәм, хатта һуҡбай-эттәргә тиклем, алыҫыраҡ арауыҡҡа олаҡҡан. Ә һуҡмаҡтары осраҡлы рәүештә уныҡына сатрашланмыш һирәк-һаяҡ уҙғынсылар, ҡараҫҡы бер екереү менән үк, атлап барған ерҙәрендә фалижланып ҡалалар һәм, икенсе секундта уҡ һуштарын йыйып, ут сыҡҡандай ҡабалан ситкә ташланалар. Ҡараҫҡының һумалалай йәбешкәк һүгенеүе, күҙ яҙҙыртҡансы, арттарынан оҙатып бара уларҙы. Һерәйә баҫып ҡарап ҡалған ҡараҫҡы, ашығып елгән ҡурҡаҡ артынан нәфрәтләнеп ҡулдарын болғай-болғай, яңыртылған илһам менән һүгенергә керешә, тәрән күкрәк хистәрен шулай урғылдырып еңелләнгәс кенә йәнә үҙ юлында була. Компасы ҡыйралған судно кеүек, алған юҫығынан тайып, тыҡрыҡтан сығып китә лә киң сиҙәмлектә һалынып ятҡан яңы кирбес йорттарҙың береһенә төртөлә мороно менән, күҙҙәренән йәшелле-күкле оҫкондар сәсрәй; ул да булмай, бейек мачтанан һибелгән үткер электр яҡтыһынан интегеп, ярыҡ эҙләп йүгергән ҡандалалай унда-бында һикергеләй. Яҡтылыҡтан боҫор ек табылмағас, нурлы яҡҡа тупаҫ брезент хөлләле яҫы арҡаһын бороп, алдындағы күләүектәр өҫтөнән

иçке тыҡрыҡ тарафына һуҡмаҡ кеүек ҡарайып һуҙылған үҙ күләгәһенән кинәнеп атлап китә...

Ҡара төн, лас-лос убылмыш батҡаҡ. Көндөҙ ҡойоп яуған ямғыр, әле булһа ергә һеңешә алмай, тәрән һаҙлыҡ яһаған. Ҡарасҡы, үҙе лә абайламаҫтан, тубығынан былай шул лайға батты һәм, аяғын алам тигәнсе, салҡан әйләнеп төштө. Ике ҡабырға аҫтынан бысраҡ фонтан сирғыҫ, саҡ ҡына иҫәнгерәп, бер мәлгә тынысланды. Эреле-ваҡлы йондоҙҙарҙан иләк һымаҡ тишкеләнгән һәм ниңәлер зырлап әйләнгән Күк көмбәҙенә текләп, был һүрәтте үҙ ғүмерендә тәүгә күргәндәй ғәжәпләнеп, берауыҡ өнһөҙ ятты. Мейеһендә осҡон заты ҡабынып, таянсыҡланған ике ҡулы йомшаҡ ләмгә ҡултығынаса батҡас, илереүле ыңғырап, башын ҡалҡыта бирҙе. Тоноҡ ҡарашы, үҙенә таныш бысраҡ ҡойма буйҙарын һәрмәп үткәс, төбәлер нөктә тапты: ыҫпай кейенеп, ҡоронан-ҡороға ырғый-һикерә клуб яғына -- тансыға китеп барыусы сыҫкан ҡойроҡ мыйыҡлы бер шыма франтҡа төртөлдө. Фәҡир мейеһендә быҫҡып янған тоноҡ фекер ишараты уға йәһәт тубыҡланып ултырырға, йөкмәткеһеҙ мығырҙанырға көс бирҙе. Франт та абайлап туҡтаны, тирә-яҡҡа шикле ҡаранды.

-- Зар...режу! – тип үкерҙе ҡарасҡы, тауышына тағылып үҙе атылып китерҙәй көсәнеп. Ялтыр итектәрен һаҡлап осло таш өҫтөндә бизмәнләнеп торған франт, тигеҙлеген юғалтып, батҡаҡҡа шапылданы һәм хәҙер инде эшлектән сыҡҡан хромын йәлләмәйенсә, хатта артына әйләнеп тә ҡарамай, туп-тура һаҙлыҡ уртаһынан һыпыртты. Ҡарасҡы ла, ниһәйәт, икеһенә аяҡланды, шаптор-шоптор батҡаҡ кисеп, ҡалышмайынса, уның артынан ҡыуҙы. Йәнә баяғы ҡот осорғос “зар-режу!” уйсан ҡасаба урамдарын ярһытты. Күләүекте шаптырҙатып ярып барған, көтөлмәгән милиция машинаһы шәүлә тәңгәленә етеп, туҡтала бирҙе лә, шомло аҡырыусыны битендәге оҙон яра бирсәһенән үк танып, жыйлатып үтеп китте, ҡараңғылыҡта ҡыҙыл уттары ғына емелдәп ҡалды. Сөнки һәр бер милиционер ҡарасҡының Дөмпөш Имай икәнлеген, уның итек ҡунысында йәки ең осонда ҡомһоҙ бысаҡ һәр саҡ әҙер тороуын, хужаһы уны күҙ асып йомғансы эшкә егергә һәләтлелеген яҡшы белә. Ә аянысы шунда: Дөмпөш бысағы тәнеңде киçмәй тороп, кобуралағы алтатарыңды ҡулланырға ярамай -- ҡанун ҡушмай...

Ҡасабалағы иң ҙур магазин ишеге алдында беләгенә ҡыҙыл бәйләп, үткән һәр берәүҙең йөҙөнә электр фонарен тоҫкап, кемдең нисә шешә араҡы алыуын блокнотына теркәп торған комсомол патруле Ғәйнитдинов, яңынан-яңы сенсацияға өмөтләндереүсе баяғы хәтәр “зар-режу!” оранын ишетеп, мажараны үҙ күҙҙәре менән күрергә болдорҙан төшөп йүгерҙе. Ул килеп еткәндә теге икәү бер-береһенә көрмәлеп, һаҙҙа ятҡан сыҫка кеүек ҡарайышып, тас батҡаҡта әүмәләшәләр ине. Бер-береһен быуып үлтереү ниәтенән, ахыры, яғаларынан ныҡ итеп тотошҡандар – франт та төшөп ҡалғандарҙан түгел, күрәһең. Ләкин икеһенең дә “теге донъя”ға ваҡытынан элек китергә иҫәбе юҡ иҫәүәндәрҙең – батҡаҡлы һәр танау тик үҙе тере ҡалып, күршеһен генә дөмөктөрөргә яҫҡана, ә Дөмпөш Имай атаҡлы бысағын сығарып өлгөрмәгән -- шуға күрә ҡеүәттәр тигеҙләнеп, икеһе тиң ниәттәренә ирешә алмай интегә. Комсомол патруле Ғәйнитдинов, электр фонарен яҡтыртып, ҡыҙыл тышлы блокнотын йәһәт тартып сығарҙы: тиҙерәк ҡағыҙға теркәргә -- был бит комсомол патруле булараҡ уның намыç бурысы!

Комсомол йыйылышында патруль итеп һайланыуынан бирелә бөтә көсөн бирәп ул иҫереклеккә, хулиганлыҡҡа ҡаршы көрәшә. Шәхси ваҡытын йәлләмәйенсә, араҡы алыусыларҙы сәғәттәр буйына һағалап ғүмерен үткәрә, берәй ерҙә ҡанлы һуғыш, йәки рәнйеш сыға ҡалһа, әләгешкән ғауғасылар йыртҡысланып бер-береһен имгәтмәй йә был ҡанҡойош тәбиғи рәүештә үҙенән-үҙе һүрелмәй тороп, тартышты ташлап китмәй. Һәм бөтәһен-бөтәһен ҙур егәрлелек менән теркәп-яҙып бара. Әгәр йыллыҡ хисап йыйылышында:

-- Ҡайҙа патрулегеҙҙең эше? – тип ныҡыһалар, ул нәҡ ошо яҙыуҙарын сығарып өҫтәлгә һаласаҡ та башҡарған тауҙай хеҙмәте менән илде шаҡ-ҡатырасаҡ...

Кеҫә фонарен яҡтыртып, Ғәйнитдинов батҡаҡтағыларҙың йөҙөнә бағырға – уларҙы танырға тырыша. Ләкин законлы теләген танымайҙар, суҫка кеүек хорхолдашып моронда ры менән ер һөрөүҙәрен дауамлайҙар. Береһе аҫҡа, икенсеһе өҫкә килеп урындары менән алмашынышҡан бер арала ғына патруль Ғәйнитдинов ҡараскының йөҙөндә танауы аша бер битен ярып үткән йәмһеҙ бысаҡ эҙен шәйләй ҙә йөрәккәйе “жыу!” итә -- Дөмпөш Имай!.. (Блокнотына яҙа). Ә көрмәкләшкән франттың йөҙөндә күҙгә салынырҙай айырым билдәләр табылмағас, таный алмау ҡыйынлығына дусар ҡылынпа.

-- Исемеңде әйт! Исемеңде! – тип ныҡый ул хәтәр алышын дауамлаған ҡупшылыҡ ҡолоноң бөйөрөнә аяҡ башы менән төрткөсләп. Франт, көтөлмәгән өҫтәлмә ҡыҫымға түҙә алмай, мускулдарын бушатыңҡыраны, буғай: Дөмпөш Имай, һәләт-йәһәт, дошманының танауына йоҙроғон һылап алды. Франттың ҡара батҡаҡлы танау тишектәренән боҫло ҡан сорғолдо ла серек һыу өҫтөнә йәйелде.

-- Исемеңде әйт! – тип инде әллә ни ҡыҙыҡһыныуһыҙ ҡабатланы Ғәйнитдинов, сөнки уның иғтибарын: “Ҡан туҡталырмы, әллә аҡтыҡ тамсыға са сәптерерме?” – тигән ҡыҙыҡлы уй биләне. Шул арала Дөмпөш Имай, хәл иткес алым өсөн, итек ҡунысынан һурып атаҡлы бысағын сығарҙы -- ваҡиға ҡанлы сиселешкә ыңғайлай. Патруль Ғәйнитдинов инде ап-асыҡ күҙ алдына ла килтерә бысраҡҡа батып һуйылып ятмыш бахыр мәйетте. Дәфтәрендәге “Дөмпөш Имай” тип башланған яҙыуын дауам иттереп: “Минең күҙ алдында билдәһеҙ граждан ды һуйып үлтерҙе”, -- тип нөктә ҡуя ла конфликттың тамамланыуын түҙемһеҙләнеп көтә. Тик юрауы аҡланмай, хәйерһеҙе: франт усын тултырып батҡаҡ-лай ала ла шапылдатып Дөмпөштөң күҙҙәренә сәпәй. Дөмпөш Имай әһелдәре яман зарлы аҡырып ебәрә, матҡып тотҡан бысағын ыҫкындырып, ҡуш ҡуллап күҙҙәрен баҫа. Хоҙай ярлыҡаған франт тиҙ генә ырғып тора ла, фонарь менән блокнот тотҡан ҡыҙыл бәйләмле патрулгә иғтибар ҙа итмәй, тиҙ үк эҙҙәрен һеперә. Ҡыҙыҡһыныуы һүрелгән Ғәйнитдинов та, Дөмпөш Имайҙы ҡазаһы менән яңғыҙ үҙен ҡалдырып, һәр тарафтан төркөм-төркөм йәштәр ағылған эшсе клубы тарафына йүнәлә...

* * *

Был кис клубта илгә аң-белем таратыу йәмғиәтенең атаҡлы сәркәтибе -- биология фәндәре докторы Серәкәй-Ләпәкәйев үҙенең тормош мәрәйе булған һәм юғары доктор дәрәжәһен яулауға тиклем алып барып еткергән талантлы

ғилми хеҙмәте буйынса эшсе йәштәргә лекция уҡыясаҡ ине. Был атаҡлы ғилем яҡтыртҡысын күҙ ҡырыйы менән генә булһа ла күреп ҡалыу өҡсөн, хатта ҡыҙ-ҡырҡындың ғүмерҙә аулаҡҡа сыҡмаған, “монашка” тип йөрөтөлөүсе типтары ла, һәм хатта йөҙ йәшлек тилбер әбейҙәр ҙә, аҙна әлгәре билет алып, клуб асылыуҙан ике сәғәт алдан ишек төбөнә килеп сират торҙолар. Һәр береһе, сикһеҙ көйәләнеп, нисек алданыраҡ инергә лә трибунаға яҡыныраҡ урын эләктереп ҡалырға йөрәкһене (сөнки бында билетҡа урынды күрһәтеп һатыу мәҙәниәте килеп етмәгәйне әле). Ниһәйәт, эстән шылтылдап ишек келәһен ысҡындырыу ишетелде. Шуны ғына көтөп торған түҙемһеҙ һарыҡ, -- әй юҡ, ғәфү итегеҙ! – халыҡ массалары дауыл ҡыуалаған диңгеҙ тулҡындарылай ҡапыл шаулап китте лә, ишек ҡанаттарын шатырҙатҡансы ике яҡҡа ҡайырып, билет тикшереүсене лә иғтибарға алмайынса, дөбөрҙәшеп эскә ябырылды. Ҡыҙҙар – гардеробҡа, әбей-һәбейҙәр туранан-тура тамаша залына, ә мыҡты ир-ат енесе, сос танауҙары әсе һыра еҫе тойоп, буфетҡа йүгерештеләр. Һауаға самум тығыҙлығындағы саң болото туҙғыны, унһыҙ ҙа минут һайын кемгәлер күҙ ҡыҫҡылап торған тәүфиҡһыҙ электр лампаһын томаланы, был иһә комсомол патруле Ғәйнитдиновтың ҡыҙыл сепрәген дә танымаҫ хәлгә килтерҙе. Туҙан араһынан шулай ҙа күптәргә ҡыҙыл тышлы блокноты салынды: “Публиканы ойошоулы ҡаршыламау сәбәпле, залда тәртипһеҙлектәр тыуҙы”, тип осло ҡәләме менән сыйғысланы ла, комсомол патруленең бурысы шуның менән үтәлгәнлеген ҡәнәғәт тойоп, дәррәү генә тамаша залына инеп урынлашты. Бер тиҫтер малай-шалай алғы рәттә әбейҙәрҙе ҡыҫырыҡлап маташа, ә тегеләре, тешһеҙ ауыҙҙарын киң асып, ҡыҙғаныс ауаздар сығаралар һәм, ярһып, ҡорошҡан йоҙроҡтары менән алғы ултырғыс арҡаларын туҡмайҙар. Бер ситтәрәк, үңәстәрен эскә тартып, йыш ҡырыныуҙан яңаҡтары күкшелт-ҡара төҫ алған утыҙ йәштәрҙәге ике “егет”, патрулгә һиҙҙертмәҫкә тырышып, малайҙарҙы “подвиг”ҡа һөстөрөп тора. Ахыры булманы, ҡарсыҡтар йылы урындарынан һөрөлөп, артҡа күстеләр. Улар урынын, ларҡайып, теге ике “егет” биләне. Был ныҡышмал бәрелеште Ғәйнитдинов та күҙ ҡырыйынан ахырынаса күҙәтте, ә шулай ҙа блокнотына теркәмәне. “Батырға ла ял кәрәк, -- тип уйланы ул, үҙен зерә ҡыҙғанып. – Бер миңә генә көрәшергә тимәгән бит хулиганлыҡҡа ҡаршы. Минең дә тыныс булғым, культуралы ял иткем килә!” Һәм, намыҫын тынысландыу өсөн, үҙенең башҡарған героик хеҙмәттәрен ҡыштырҙауыҡ биттәрендә һаҡлап түш кеҫәһендә ятҡан бүртенке блокнотын ҡапшап-һөйөп ҡуйҙы.

Тиҙҙән зал шығырым тулды, сәхнәләге ҡыҙыл япҡан өҫтәл артына клуб директоры Шымарғанов ирәйеп сығып баҫты. “Подполька” итеп алдыртылған муйыл-ҡара сәсле түбәһе мул яғылған бриллиантиндан көҙгөләй ялтыраны.

-- Иптәштәр! Хәҙер һеҙҙең ҡаршыла аң-белем таратыу йәмғиәтенең атаҡлы сәркәтибе, республикабыҙҙың данлыҡлы ғалимы биология фәндәре докторы Серәкәй-Ләпәкәйев иптәш үҙе сығыш яһап, “Һаҙлыҡ серәкәйҙәренең аш ҡайнатыу аппараты һәм СССР халыҡ хужалығында шуның тотҡан роле” тигән бик-бик мөһим темаға лекция уҡыясаҡ. Тәрән әһәмиәт биреп тыңлауығыҙҙы үтенәм! – тине ул, графиндан ағыҙып, тулы стакан һыуҙы тамағына ғорҡолдатҡас. Шуны күреп залдағы баштар баҫыуҙағы ел ҡуҙғатҡан башаҡтарҙай тулҡынланды, шаулашты. “Шымарғановтың эсе яна – кисәгенән һуң махмур!” – тине теге

йылғыр “егет”тәрҙең бере һе, ғаләмгә ишеттереп. Шымарғанов ишетмәмешкә һалышһа ла, залдағылар кинәнеп хахылдашҡас, ҡәләм һуғып стакан сыңғылдатты. Ултырғыс шығырҙауҙары, тамаҡ ҡырып йүткереүҙәр өҫтәлде. Шул арала сәхнәләге йәшел бәрхәт ҡорған артынан, әтәс аҙымдары менән ҡупшы атлап, кәрлә буйлы хөрмәтле лектор сыҡты ла тура телмәр мөнбәренә -- трибунаға уҡталды. Махсус уның буйы өсөн йәшерен өҫтәлгән бейегәйткес-бүкәнгә мыҡты баҫып, олпатлыҡ ҡиәфәте алып, терһәктәре менән кафедраға таянды. Был торошо менән ул залдағыларға һемәген тәнгә батырырға йыйынған ас серәкәйҙе хәтерләтте. Әгәр өҫтөндә европаса яҡшы костюм, муйынында галстук-муйынсаҡ булмаһа, был ҡиәфәтендә уның үҙен, -- ғәфү итегеҙ! – серәкәй тип белеп, яңылыш иҙә һуғырға ла мөмкин ине...

Лекция һөйләнеүгә биш минут үткәс үк, артҡы рәттәр һиҙелерлек яланғаслана башланы. Аңһыҙ һарыҡ, -- ай, ғәфү итегеҙ! -- халыҡ үҙ хужалығы өсөн шундайын да ҙур роль уйнаған ғилми хеҙмәткә ҡарата илтифатһыҙлыҡ күрһәтеп, зал буйынса әле унда, әле бында лекцияның тигеҙ ағылышы өсөн хәтәрлекле ғәйбәт һатып ултырҙы, бөтөнләй башҡа темаларға суҡылдашыу усаҡтары барлыҡҡа килде. Серәкәй-Ләпәкәйев, шуны һиҙенеп, буғай, тирмән шауылай йоҡо килтергес монотон тауышын ваҡыт-ваҡыт тау йылғаһылай ҡапыл гөрөлдәтеп ебәрһә лә, ярҙам итмәне. Ваҡ усаҡтар, киҫкен ауырыу кисергән үпкәләге “Кох таяҡтары”лай тиҙ таралып, бөтә публика организмын зарарланы. Клуб директоры Шымарғановтың кеҫәһендәге бер бәйләм ишек асҡысы менән ҡаты һуғып һигеҙ ҡырлы стакан сыңғырҙатыуы ла файҙаға килтермәне, сығып тайыусылар тулҡыны урта рәттәге ултырғыстарға килеп етте. Алдағыларҙың да күбеһе, форсат тыуыу менән үк һеперелергә йыйынып, кәпәстәрен кейҙеләр. Ошо хәл иткес мөҙҙәттә Шымарғановтың бриллиантинланған йоморо башы сәхнәнән юйылып, сығыу ишеге төбөндә ялтырап салынды. Уның ҡәтғи бойороғо буйынса, штаттағы һәптәндәре ишекте шартлатып бикләнеләр ҙә аҡ ҡағыҙға оло хәрефтәр менән:

Кем дә кем лекция тамамланғансы сығып китә -- 25 һум штраф!

Клуб администрацияһы. –

тип шаҡырайтып яҙып ҡуйҙы. Ошо ҡәтғи әмәлдән һуң ғына шылыусылар ағыны тамам туҡталып, һирәк-һаяҡ ҡалған публика араһында сағыштырмаса тәртип урынлашты. Әммә-ләкин аудитория сиктән тыш тарайғайны.

Биология фәндәре докторы, серәкәй ашҡаҙаны төҙөлөшөн ентекле аныҡлап, унда эшкәртелеп сыҡмыш “экскримент”тың, ябай ғына атағанда тиҙәктең, ниндәй химик элементтар тәшкил итеүен берәмләп һанай башлағас, әҙәп һаҡлаған аҙ һанлы түҙмерҙәр ҙә, үҙҙәренә хас матур сабырлыҡты юйып, шайтандарҙай донъя ҡуптарып һыҙғырырға, тай-тулаҡтай тибенергә, ултырғыс арҡаһын шаҡылдатырға тотондолар. Кафедраға ҡағыҙға төрөлгән көнбағыш ҡабыҡтары, махмурҙан алйыған бәгзе ир-аттың һыра артынан ҡабымлыҡҡа алып килмеш ярымсерек помидорҙары осто. Бер нимә белмәй йоҡлап ултырған әбейҙәр ҙә ошо дәжжал тауышынан тертләп уяндылар ҙа ярымбуш зал һауаһын ярып тап мең туғыҙ йөҙ ун етенсе хәтәр йылдағылай:

-- Долой! Долой! – тигән ҡурҡыныслы талаптар ҡысҡыра башланылар, әйтерһең, улар ҡаршыһына аң-белем таратыу йәмғиәтенең абруйлы сәркәтибен түгел, ә самодержец Николай Ҡанлының үҙен баҫтырып ҡуйғандар. Ҡото осор хәлгә етеп шөрләгән администрация ишекте йәһәт шар-асып ебәрҙе лә ирек тойоп дәртләнгән йәмәғәт шул минут эсендә урамға ағылып бөттө. Залда суҡайып Серәкәй-Ләпәкәйев, Шымарғанов һәм штатлы бер-нисә һәптән менән иҙән йыуыусы ғына ҡалды.

-- Был ниндәй порядкалар һеҙҙә? Совет клубымы, әллә хулигандар тәрбиәләү йортомо был? Ҡайҙа телефон, милицияға шалтыратам! – тип, директорҙың яғаһынан ала яҙып ярһыны серәкәйҙәр белгесе ғалим.

-- Тынысланығыҙ! Зинһар, тынысланығыҙ, иптәш доктор! Кеше-ҡара таралмаҫы элек һөңгөгөҙҙө һапламағыҙ. Һеҙ үҙ гонорарығыҙҙы тейешенсә алырһығыҙ – һеҙҙең ул ике мең һум юғалмаҫ!

Үҙ мәлендә биреп өлгөрөлгән мәғлүмәттән тынысланып, аң-белем таратыу йәмғиәте сәркәтибе, биология фәндәре докторы клуб директоры яурынына дуҫтарса беләген һалды һәм улар, туғандарса ҡосаҡлашып, буфет артындағы аулаҡ бүлмәгә “мәгәрис” эсергә киттеләр.

* * *

Ун биш минутлыҡ антракттан һуң залда тансылар башланды. Лекцияға бәйләнешле өмөттәре һүрелгәс, йәштәр кисәнең бейеү бүлегендә реванш алырға булдылар. Ләкин был юлы ла “әтнәкә” сығып, аяҡтарҙы йөрөтөрҙәй “тере музыка” юҡлығы асыҡланды. Сөнки ҡапыл ғына вафат булған райпо председателен һуңғы юлға оҙатыу айҡанлы тынлы оркестр коллективының етмеш биш проценты өс көн буйы зират янындағы өшәләктә иҫереп ятҡанлыҡтан, таяҡ башы иҫкереп бөткән ҡарлыҡҡан тауышлы радиолаға, уның ауазын яңғыратҡыс репродукторға төштө. Күпте күргән әрһеҙ аппаратты бөтә ҡеүәтенә егеп, сәхнә маңлайына беркетелгән ҡара табаҡ-репродуктор аша көсәйтеп ҡыуаланылар; аппараттың үткер ҡорос тырнағы аҫтына һалынып, атаҡлы музыканттар башҡарышындағы йәнгә үткес классик әҫәрҙәр ҙә, ҡайһы бер яңы заман авторҙарының кәзә баҡырыуына һәм һайыҫкан шыҡырыҡлауына оҡшаш тетрәткес мөғжизәләре лә һыҙма юллы тәрилкәләрҙә өҙлөкһөҙ өйөрөлдө. Араларында ылғый Ҡултыҡ һәүәҫкәрҙәренең дә татлы ижад емештәре бар ине:

Йәйәү йөрөмәҫкә, тип,
Алдым мин виләсәпит... –

тип таҡмаҡланы тәрилкәнән билдәле ҡарт йырсының ҡарлыҡҡаныраҡ ҡалын тауышы һәм тансыла сайҡалыусы бала сәүкәләрҙәй һары ауыҙлы йәш-елкәнсек шул ыңғайҙа аяҡтары менән күҙ эйәрмәҫ “керәндил”дәр бөгәрләп, иҙән таҡталарын төйгөсләнеләр.

...Эспистәре буталлы,
Тотҡостары буяулы –

Өр-яңы виләсәпит...—

Көр дауамланы радиола боғаҙы.

...”Ат”ҡайыма атланып
Эшкә китеп барғанда
Йығылып китеп “ат”ым
Һындырҙы бер ҡанатын –
Тимер-ҡорос ҡанатын.

Запчас эҙләп тилерҙем,
Таба алмай илерҙем.
Һис булмағас, йүкәнән
Бәйләп ҡуйып елдерҙем...

Ә һул яғын тәрилкәнең Шымарғанов әйләндереп һалғайны, яңғырашы заманабыҙға шөйлә ныҡ яҡынлашты:

Бисәм, улым һыйһын, тип,
Алдырҙым мотоциклет.
Багы юҡ ине уның –
Биҙрәнән яһап ҡуйҙым,
Биҙрәнән яһап шыйҙым.

Тик, ут ҡабынып китеп,
Янды шәп мотоциклет.
Бөтәбеҙ ергә ауҙыҡ,
Ярай, төтәмәй ҡалдыҡ
Ярай, төтәмәй ҡалдыҡ...

-- Иҫәүән баш, шулай кәрәк һиңә! – тип һөрәнләне бейеү түңәрәге ҡырыйындағы эскәмйәлә тәмәкеһенән паровоз мөрйәһе яһап боролдатып ултырған теге таныш ике “егет”тең береһе.

-- Лигкәүик алып ебәр, һантый! – тип осланы икенсеһе. Тап шуны ғына көткәндәй, тәрилкә алмашынды ла репродуктор шашынды:

Алдым яңы лигкәүик,
Йөрөрмөн, тип, кинәнеп.
Күкшелт лакка буялған –
“Бына!” тигән лигкәүик,
“Бына!” тигән лигкәүик.

Етешмәй тик был “кәүҙә”:
Тәгәрмәсе Мәскәүҙә,
Шиндары Ярославҙа,
Ә паспорты Өфөлә --

Тауыҡтар минән көлә,
Тауыҡтар минән көлә...

Репродуктор гөрөлтөһө ҡолаҡтарҙы тондорһа, йылғыр табандарҙан ҡупҡан саң-туҙандан һулыш юлдары тығылды. Клубтың мөлкәтен һәр йыл һайын энәнән-ептән тикшергәндә инвентарлыҡ кенәгәһендә вентиляция бар тип иҫәпләнһә лә, ғәмәлдә ул тораһы ерҙә бушлыҡ ине, сөнки, яҡты коммунизм төҙөүсе Ватаныбыҙҙың малсылыҡ тармағын ҡырҡа күтәреү хаҡындағы өс йыллыҡ планды алҡышлап ҡаршылаған клуб директоры Шымарғанов культура төйәгенә вентиляция урынлаштырыу өсөн бирелгән хөкүмәт аҡсаһын баяғы өс йыллыҡ планды арттырып үтәүгә йүнәлтеп, үҙенә сусҡалар һатып алыу өсөн йәтеш файҙаланғайны һәм ул гонаһһыҙ хайуандар Ҡултыҡ урамдарының һаҙлығына тырышып үҙ өлөштәрен өҫтәй ине... Шул туҙанлы мәхшәрҙә ырғаңдап тирләй башлаған ҡыҙҙарҙың тирмәнсенекенә оҡшаш тоноҡ-аҡ биттәренә саң һырып, Ҡырым курортынан ҡайтҡан түрә-ҡара бисәләреләй ҡарайҙылар. Киске күлдәк мәсьәләһендә моданың аҡ төҫлөһөн яратыусыларҙың арҡаһына (тансыла кавалерҙар тотҡан урынға) үҙенән-үҙе ҡап-ҡара ҡул эҙҙәре һүрәтләнде. Бик зирәк егеттәр генә, дамаларын ҡулдарының һырты менән генә йөрөтөп, был тәбиғи биҙәктән мәхрүм иттеләр.

Иң ҡыҙышҡан бер мәлдә репродуктор, Күк ярығына башын тығып Хоҙай Бабай үҙе һөрәнләгәндәй, ҡөҙрәтле тауыш менән:

-- Хәҙер дамский вальс! – тип кинәт иғланланы. Егеттәр, күҙҙәрен бик инсафлы йомғолап, һәр ҡайһыһы иң һылыу ҡыҙҙарҙың һайлауы үҙ өлөшөнә төшәрен өмөтләнеп, тауыш-тынһыҙ ғына стена буйҙарына торҙолар. Радиола маршҡа оҡшаған шатлыҡлы бер нәмә уйнап ебәрҙе лә көллө аяҡтар бер юлы үҙҙәренән-үҙҙәре тыбырсынып, бейергә әҙерләнделәр. Яҙғы иртә һымаҡ йәш һәм саф ике ҡыҙ, аҡ беләктәрен алға һоноп, партнер саҡырыу өсөн түңәрәккә уҡталды.

Тап ошо яуаплы минутта ишек яғында торған кешеләр араһында ҡыҙыу айпалыш ҡупты. Ҡыҙҙар бүре ҡурҡытҡан һарыҡ көтөүеләй дөбөрҙәшеп ҡаршы яҡ мөйөшкә һырыштылар. Әллә ҡайҙан килеп йәштәр араһына ҡыҫылышҡан оҙон мыйыҡлы бер дәү ағай, рогатканан атылған таш киҫәгеләй елтерәп, ҡаҡ иҙән уртаһына тәкмәсте. Ҡулдары ҡысыған йораттар, дәррәү йоҙроҡ йомарлап, ғауға үҙәгенә ташланды, ләкин шунда уҡ ялҡынға көйгәндәй баш баҫып ситкә ҡастылар. Комсомол патруле Ғәйнитдинов сәхнәгә үк йүгереп менеп боҫто.

-- Дөмпөштөр! Дөмпөш Имай үҙелер! – Ҡурҡыныслы юрау дер-ҡалтыратты. Ләкин һөрән яңылыш булып сыҡты: болғанышҡан халыҡ төркөмөн метеор кеүек ярып, бил тиңентен шыр-яланғас, ә осаһын ҡыҫҡа трусик кенә япҡан, ҡуш усына пожарниктар балтаһының ҡыҙыл буяулы оҙон һабын ҡаты йомарлап тотҡан һәм ажғырып башы осона күтәргән елһеү-шешек йөҙлө бәндә атылып сыҡты. Аҡайған күҙҙәрен тәрән маңлай ҡыуышлығында уңлы-һуллы ҡыуалап, ҡоттары оҫкан әҙәми заттар араһынан бәхетһеҙ кемделер эҙләне. Шул саҡ репродуктор тынды ла директор кабинеты яғынан Шымарғановтың телефонға ялбарыуы яңғыраны:

-- Разбооой! Милиция, милиция, милиция!..

-- Ууух! Ҡайҙа ҡасырҙығыҙ Миколканы? Табып бирегеҙ, хәҙер үк йәнен йәһәндәмгә ебәрәм! – тип, быумаһы тотҡандай шылағайҙарын ағыҙып үкерҙе шомлойән һәм, вәғәҙәһен дөрөҫләү өсөн булһа кәрәк, яман рухланып, балтаһы менән уңлы-һуллы һелтәнде. Ситкә һирпелеп стена буйҙарына һырышҡан бахыр йәндәр, хатта табандарынаса ҡалтыранып, шашынған был ҡыҙыл һаплы ҡоралдың һауа киҫеп сыжлаған тантанаһын йөрәктән кисерҙе. Һәр кемгә уның яҫы-үткер һағағы тәғәйен уға тоҫҡалғандай күренде.

-- Бирегеҙ миңә Миколканы! – Екеренеүендә дауам итте балтасы һәм, бер мәлгә генә туҡтап, кабинет яғынан “милиция!” тип һөрәнләүҙе тыңлап торғас, шыйыҡ мейеһендә фекер остоғо ҡабынып китте буғай: *лап-лоп* атлап, һөрән сығанағы яғына ыңғайланы. Ишек тотҡаһын йолҡоп, асылмағас, гөрһөлдәтеп балтаһы менән сапҡыларға кереште. Әммә Шымарғанов та шыма икән – кабинет ишеген судно төбөнә йәбештермәле ҡалын ҡорос таҡта менән көпләткән... Ә шулай ҙа директорға ҡурҡыныс ине, буғай: яуап бирмәгән телефон төрөпкәһен быраҡтырып, күҙ менән ҡаш араһында хәйләкәр йомрандай артҡы ишектән сыҡты *ла* ҡасты...

Балтасы *ла* шунан башҡа дыуамаллана алманы: ялға ҡайтҡан бер хәрби моряк ипләп кенә артынан килеп балтаһын алды.

-- Был бит пожарник Митька. Әллә Миколкаң менән шешәне бүлешә алманығыҙмы? Бар, пожаркаңа ҡайтып ят! – тине *ул*. Тегеһе, ҡабат ярһып, моряктың түшенән алырға иткәйне *лә*, бик тыныс ҡына ҡаҡты *ла* осорҙо дыуамалды. Ваҡиға, бәлки, шуның менән осланыр ҙа ине, әгәр ҙә ки Ғәйнитдиновты эйәрткән комсорг Бикләмешев үҙе килеп ҡыҫылмаһа. Хөкөм итеүсән тон менән морякка *ул*:

-- Эй, тельняшка! Ниңә ҡулдарыңа ирек бирәһең? Беҙҙең цехпрофорг бит *ул*, коммунистик хеҙмәт алдынғыһы! – тине *лә* күҙ алдында хырылдап йоҡоға тала башлаған иҫеректе ятҡан иҙәненән тартып торғоҙҙо. Цехпрофорг, тотанаҡ һиҙеп, ҡабат туланы:

-- Ҡайҙа Миколка? Мин уның башын өҙә сабасаҡмын!

-- Тыныслан, дуҫкайым, тыныслан. Ниңә ҡаныҡтың шул Миколкаға, нимә эшләне *ул* һиңә?

-- Былтыр *ул* мине “антифашист” тип обозвал!

-- Бәй, “антифашист” яҡшы бит *ул*. “Фашист” түгел бит!

-- Барыбер! Мейеһен сәсрәтәсәкмен!

Бәхетһеҙ йорат, күрәһең, пожаркаһында йоҡо һимертеп ятҡан еренән йыл элгәре күтәргән ауыр рәйҙетелеүен ҡапыл иҫенә төшөрөп, ырғып торған *да*, ғәрип аҡылы бойороғона буйһоноп, ярымяланғас көйөнсә дошманынан үс алырға ташланған...

-- Цехпрофорг Хоҙай түгел бит беҙгә. Әйҙә, тышаулап һалайыҡ үҙен! – тип тәҡдим керетте моряк һәм бил ҡайышын ысҡындырҙы. *Ләкин* патруль Ғәйнитдинов ғауғасыны үҙенең киң яурыны артына ышыҡланы, ә Бикләмешев тельняшкалыны ҡаты киҫәтте:

-- Стоп! Хәҙер шәхес культе заманы түгел, моряк иптәш. Ҡулыңды ҡыҫҡараҡ тот! – һәм, иҫерек яғына боролоп, асыулы йөҙөнә сыуаҡ Ҡояш йылыһы сығарып өндәште:

-- Митька, дуҫкайым, ҡәҙерле әшнәләрең хаҡына артыҡ тулама инде!

Митька иһә, киреһенсә, урыҫтар әйтмешләй, “как сапожник” ялҡынланып һүгенергә тотондо ла шул арала ҡәҙерле комсорг коллегаһының нәфис кенә томшоғона йоҙроғон ҡундырып өлгөрҙө. Бикләмешевтең ауыҙ-мороноңан борлап ҡан китте; төкөргәйне, ҡыҙыл төкөрөк менән ҡуша изәнгә, шылтлап, теш һыныҡы төштө.

-- Бәйләргә, бәйләргә, бәйләргә! – Шыңшый-шыңшый ҡуш усы менән ауыҙын ҡаплап тотоп, кепкаһы изәндә аунап ҡалған бәхетһеҙ башын ботлоҡ гер тағылғандай аҫҡа эйеп сығыу яғына йүгерҙе ул. Артынан, өйөрөлөп, йәмғиәт тәртибен һаҡлау рыцаре Ғәйнитдинов етәкселегендәге комсомол патруле төркөмө эйәрҙе. Яҡлаусыһынан яҙған Митька ҡабат моряк ҡарамағына ҡалды. Дыуамалды, йәнһеҙ бүрәнәләй күтәреп, үҙенең пожарный посындағы һыу мискәһе яныңа айныҡтырырға алып киттеләр.

Тертләгән йөрәктәр саҡ ҡына тынысланып, күкрәк ситлектәренә ныҡ тибенмәй генә һуға башлағас, бысраҡ изән күләмендә дәртле йәштәрҙең табандары йәнә шыуышты музыка ыңғайына, аҡрынлап ҡына донъяға йәм өҫтәлде. Ярты сәғәт үтеүгә, янъял туҙғытҡан һаҡ йәндәр ҙә мәҙәниәт усағына ҡабат эркелештеләр. Репродуктор яңынан-яңы тангоны, вальсте, фокстротты иғланлап ҡына торҙо.

* * *

Ә тышта, урам-тыҡрыҡтары бысраҡ, ҡойма буйҙары ҡараңғы-шомло булһа ла, дөйөм алғанда йылы, күңелле май төнө көлә ине. Буйға еткән тополдәр, донъяның бөтә ҡараңғылығын ҡуйы һалма япраҡтары араһына йыйғандай, хәлһеҙ ауырайып, һалынышып ултыралар. Клуб баҡсалығындағы ҡуйы ҡыуаҡтар араһында, киҫәк-киҫәк сыңғырлап, ҡыҙҙарҙың хыялсан-тотанаҡлы көлөүе ишетелгеләй. Урам ашаһындағы ағас өйҙөң икенсе ҡатында, тәҙрә асып, кемдер моңло итеп гармун уйнаны. Клубҡа яҡын баҫаналарҙағы лампаларҙан сағыу яҡтыртылған ҡыҫҡа ғына таҡта тротуарҙы оҙон ҡунислы ботикаларының беҙ үксәләре менән тыҡылдата баҫып, көлөшә-көлөшә үтеүсе йәштәр төркөмө яҡынлашты. Ошо хозур минуттарҙа һәр ҡайҙа ла тыныслыҡ, гармония хөкөм һөрә ине.

Күңел йыуҡыс һиллекте тыныҡ һыу битенә ырғытылған тупаҫ суйырташтай боҙоп, кинәт кенә, матур таҡта тротуарҙың ярымҡараңғылыҡтағы арғы башын:

-- Зар-режу! – тигән йән тетрәткес таныш ажғырыу телгеләне. Көллө тереклек атып-бәрелгән бер ус борсаҡтай ситкә һибелеп, тротуарлы урам күҙ асып йомғансы шәп-шәрә ҡалды, күңелдәргә шом һарыны. Бына дөйөм паниканың ғәйеплеһе ҡалҡып сыҡты: электр яҡтыһы һүрелеп бөткән ҡуйы ҡараңғылыҡтағы шомло шәүлә -- әлеге лә баяғы шул Дөмпөш Имай ине. Өйөнән сығып китере алдынан бер шешә “аҡ”ты болғап-болғап “гурлы”һынан боғаҙына ҡойғанынан һуң, ярһыу йәнен тындырмаҡҡа ҡараңғы тыҡрыҡтар ҡыҙырмалы был сәйер йән, ни сәбәптәндер, ҡапыл яҡтылыҡҡа килеп сыҡҡайны һәм был яҡтылыҡ уның теңкәһенә тейә ине, буғай – шуға ла “зар-режу!” ораны оролғандыр... Ҡултыҡ ҡасабаһының ул, ҡараскы, кире ҡаҡҡыһыҙ бер тәбиғи өлөшө

булғанлыҡтан, ҡәҙерле уҡыусыбыҙҙы шул фигура менән ҡыҫҡаса ғына таныштырып үтәйек.

Дөмфиулла Имаев, йәки Дөмпөш Имай, Баҡалы районының баҡалары хайран йырсан бер ауылында тыуып үҫте. Бала сағынан уҡ тыуҙырыусыларын үҙенең зерә зирәклеге менәнхайран ҡалдырҙы: уға ҡағылырҙай берәй йорт эше моронлаһа, был шылма ҡараморон, һис кемгә һиҙҙертмәйенсә, көнәлгәре өйҙән зым-зыя булыр, донъя аҡтарып эҙләһәләр ҙә һис кенә лә таба алмаҫтар; баяғы йорт эшенең осона сығып, инде юғалды балабыҙ, харап ҡына булды, тип, ҡайғырышып тамаҡ ялғарға ғына ултырһалар, ғәзиз Дөмфиуллалары, китеп юғалғанындағы һымаҡ уҡ һиҙҙертеүһеҙ, иң ҙур ҡалаҡлы табын түрендә ҡурпыр ҙа ҡуйыр ине... Сабый саҡтан уҡ ул йәй көнө -- ағас күләгәһе, ә ҡышҡыһын мейес башы һаулыҡ өсөн ифрат файҙалы икәнлеген төшөндө; ә мәктәптә белем ала башлағас, дәфтәренә шаҡырайтып ялған билгеләр ҡуйыу, шпаргалкалар ҡулланыу өлкәһендә ҙур уңыштар ҡаҙанды. Мәктәп баҡсаһындағы хеҙмәт дәрестәрендә шуҡ малайҙың көрәк тотоп түтәл соҡоғанын һис кемең күрмәй, әммә уҡытыусы биргән йөкләмәләре ялтлатып үтәлә ине – юҡ ҡына әжергә башҡаларҙан эшләттерергә шымарҙы. Был осорҙа уның тормош хыялының иң юғары нөктәһе – иҫке ботинканың ҡалын резинкә табанынан киҫеп колхоз мисәтенә иш мисәт яһау һәм шул мисәт баҫылған ҡағыҙ ярҙамында колхоз келәтенән татлы бал сәлдереү ине...

Ауыл мәктәбенең дүртенсе синыфын яҙа-йоҙа тамамлағас, Дөмфиулла, ғәжәп иркен тын алып, кешелек донъяһы туплаған барлыҡ ғилем даръяһын арҡыры-буй йөҙөп сыҡтым тип ҡыйыу ҡарар ҡылды ла, был мөһим факт бүтәндәргә лә билдәле булһын өсөн, атаһы алдында тәмәке урап тартты. Шул тарихи ваҡиғанан һуң шаҡ-ҡаткан атай әленән-әле улына өҫтәлмә һабаҡ биреү өсөн ҡулланған яҫы бил ҡайышын артабан ҡулына алмаҫ булды; танауы аҫтында ваҡытынан элек ҡара төктәр ҡуйырып, шөйлә йыш ҡына ауыҙынан асы апара еҫе лә аңҡыр булғас, бөтөнләй ҡул һелтәне. Дөмфиулла ҡаршыһында, күңелен елкендертеп, ҡолас ташлап үҙалдына үҫеү форсаты асылды, тирмәнсе урыҫтың үткән-һүткәнгә һатырға тауыҡ буғы ҡушып яһаған “сәмиғулла”һын да ауыҙ иткеләне ул. Шыйыҡ ҡына тороғо менән мыҡты ирҙәрсә ҡыланып, күрше утарҙың Маша тигән тол мәрйәһе ҡуйынында тейешле һабаҡ алғандан һуң, тыуған ауылдың да яңғыҙаҡ бисәләр ишеген йыш ҡаға башлағас, “Кәзәтәкә” тигән ғәжәб ләҡәп тә йөкмәне. Ауылдаштарының, көрәк-һәнәк тотоп, ҡара хеҙмәттә көн күргән ябай тормош юлы һис кенә лә рухландырманы уны. Күҙ алдында, татлы идеал булып, бер ниндәй көс сығармайынса ҡағыҙҙарға ҡул ҡуйып ҡына өҫтәл артында ултырған, персональ автомобиль “Победа”лы (һис юғында яҡшы ҡырандаҫка егелгән атлы), әйткән һүҙе ҡеүәткә эйә түрә образы һүрәтләнде. Ошо хыялына ирешеү өсөн, йәштән үк бөтә һәләтен һалып көрәште. Әммә, ни ҡәҙәре фантазияға бай тәбиғәтле булмаһын, дүрт синыф ҡынаһы ауылдан сығып китергә ҡамасаулауын, һәм үҙ ауылында ла, “һулға” тайпылмайынса түтә юлдан ғына барһаң, бер ырғыуҙа йылы өҫтәл артына менеп ултырыу бәхете ғәмәлдә бик һирәк булыуын белә ине. Шуға күрә лә ҡорос сабырлыҡ һаҡлап, тормош тигән ҡаты ташты тамған тамсылай аҡрынлап ҡына тишергә ҡарар ҡылды. Колхоз түрәләре тәбиғәтен ярайһы өйрәнеп алғас, һынау өсөн тактика итеп ялағайлыҡ ысулын

үҙләштерҙе. Тәүге тәжрибәләре үк бай уңыш килтерҙеләр: “яғаһы аҫтына төшөрөргә” ифрат яратҡан колхоз председателенең ышаныслы шешә ташыусыһы – кучеры итеп тәғәйенләнде.

Был хөрмәтле бейек ҡузланы ул теүәл бер йыл биләне, шул арала үҙен ифрат тыңлаулы, олоно ололаусан һәм, иң мөһиме, юғары хужалары араһындағы ҡыйыш-мыйышты күрмәүсән-ишетмәүсәнлеге менән танылып өлгөрҙө. Октябрь байрамында уны шалтылдап торған “Кировский” кеҫә сәғәте менән бүләкләнеләр ҙә колхоз полеводы дәрәжәһенә үрләттеләр. Тағы ла ике йыл үткәс, ул үҙенең персональ ат-арбаһына ултырып йөрөй ине инде: күпте өмөт иттертеүсе йәш кадр сифатында уны председателдең урынбаҫары итеп үк һайлағайнылар. Хәҙер инде асы менән татлыны һөйгән Дөмфиуллаға тирә-яҡ ауылдарға ла йөрөп шешә асыу, бисә ҡосоу мөмкинлектәре асылды, “Кәзәтәкә” ҡушаматы үҙен ныҡ аҡлай башланы.

Бармағы үҙенә ҡарай кәкре ҡайбер түрәләр тирәһендә оҙаҡ сыуалыу Дөмфиулланы тормош тәжрибәләренә байытты. Колхоз келәте, йәки ырҙын табағы тирәһендә “эйәһеҙ”ерәк ятҡан арыу нәмәләр, кисекмәҫтән, ҡаш менән күҙ араһында уның йортона күсенә торған булды. Күҙе сыҡҡыры бәғзе бер яһилйән күреп:

-- Ҡулыңды оҙонайтаһың! – тиһә, һис иҫе китмәй генә:

-- Бында барыбер әрәм булып ята бит, -- тип кенә мығырҙар ине. Осрағы сыҡҡан һайын, колхоз кассаһын да тиген ҡалдырманы ул. Күҙе-башы тоноп, бисә-сәсә юҫығындағы ҡараңғы урамдарҙа кеше туҡмап йөрөүҙәре йышайҙы. Ҡунысына башлап бысаҡ тығыуы ла тап шул осорға тоташалыр, моғайын...

Урындағы һөрһөгән һәм килгән-киткән түрә-ҡараның һөмһөҙ өҙөп-йолҡоуынан, эшләп тә тамағы туймаған колхозсыларҙың үтә лә ялҡауланып китеүенән ҡаҡшаған колхоз килемен күтәреү өсөн, яҡшы тоҡом йылҡы үрсетеү менән шөғөлләнергә ҡарар ҡылды ауылдаштар. Иң беренсе эш итеп, имеш, бәйгеләрҙә ал бирмәүсе Дон юрғаһы айғырын алдыртыу, уны түҙемле башҡорт тоҡомо бейәһенә ҡушыу бурысы тора ине. Бер үк ваҡытта Эшсе-Крәҫтиән Ҡыҙыл Армияһының кавалерияһын яңы сифатҡа күтәреү мәнфәғәттәре лә талап итә ине быны. Ауылдаштар, уйланылар-уйланылар ҙа, усына ҙур суммалы аҡса йомарлатып, зәһәр тоҡом айғыры алырға йыраҡ Дон тамағына һәр яҡтан да йылғырланған, ҡатын менән ат нәҫелен бер ҡарауҙан үк таныған Дөмфиулла Имаевты фатихалап юлландырҙылар. Кеше күҙенә күренерлек булһын, тип, колхоз иҫәбенән шевьет йөн салбар һатып алып кейҙерҙеләр. Иңендә биш былтыр әсәһе бәйләп биргән, ике терһәге ашалып бөтөп биш урындан ямалған, алғы итәге таушалып бөтөп бысранған йөн күлдәге күрер күҙҙе әллә ни иркәләмәһә лә, аҫҡы яғын шевьет салбар харап балҡыта ине. Айғыр алырға тәғәйенләнмеш сумма менән юллама-дөкәмиттәрҙе ул ошо салбарҙың эске яғына кеҫә әтмәләп текте, ә юл сарыфына тейешлеһен йөн күлдәктең йәшерен бер егенә йәтешләтеп, булавканан ҡаптыртып ҡуйҙы ауыҙын.

Эҫегә көйгән Дон далаларын вагонда елдереп үтеп, Ҡафҡаз яғына ауышҡас, тауҙар араһында көтмәгәндә үрҙән таш ишерелеп, тимер юлды ҡапланы, поезд тигәнең кескенә бер станцияла күпмелер ваҡытҡа туҡтаны. Ир-ат йораттары вагондарҙан һеперелешеп төштөләр ҙә тамаҡ сылатырға вокзалдағы кафеға

эркелделәр. Ишектән барып инеүе менән Дөмфиулланы баштарына аэродромдай яҫы түбәле ҡалын кепкалар кейгән мыҡты кәүҙәле ике грузин ирекәйе һәләт ҡосаҡлап алды ла, “батони!” ҙа “батони!” тип иркәләп, көрән-һары эсемлекле йылтыр шешә суҡайтылған табын түренә ултыртты, бер-бер артлы ҡойоп бирep, ғәжәп ихлас күңелдән һыйларға тотондо. “Көньяҡ” тигән ҡеүәтле был нәмәҫтәне Дөмфиулла үҙ ғүмерендә тәүге ҡат татый ине һәм ул уға ифрат та оҡшап ҡалды. Ҡойған берен ҡолҡолдатып йота торғас, поездың ҡуҙғалыуын, яғымлы ике табындашының юҡҡа сығыуын да һиҙенмәй ҡалған. Өҫтәл ҡырыйына һалған ғәзиз башын күтәреп, күҙен асып ҡарауға, гөрләп торған кафе эсе бушанған, йөн күлдәк егендәге юллыҡ аҡса менән дөкәмиттән дә елдәр иҫкәйне. Ә иң мөһиме – башы сатнап ауырта, ярылып ҡына бара. Салбар эске кеҫәһендәге мөлкәт һау икән алайҙа – бармаҡҡайын йүгертеп кенә ун тәңкәлек ҡыҙылды һурып алды ла өҫтәл һөртөштөрөп йөрөгән ҡыҙыл иренле ханымды ымлап саҡырҙы. Ләкин кафе төнгөлөккә ябылған, буфетсы ҡайтып киткән – баш төҙәтер әмәл юҡ. Ярай әле ҡыҙыл иренле ханым ярҙамға килде:

-- Киттек, әйҙә, минең өйгә -- бер әмәлен күрербеҙ, -- тине. Ә унда ҡәҙерле мосафирҙы баяғы ике грузиндан да олпатыраҡ һәм яғымлыраҡ бер-нисә ир көтөп үк ултыра имеш... Шулай итеп, эске кеҫәнән унарлыҡтарҙы ла йөҙәрлектәрҙе һура-һура ханым өйөндә күпме типтереп ятҡанын, нисә көндәр, аҙналар үткәнен Дөмфиулла бөтөнләй абайламаны, әйтерһең, ожмах ҡосағынан сыҡмаҫҡа кергән...

Әммә алыҫ Баҡалылағы ауылдаштары уйға ҡалды, сөнки Дөмфиуллары китте лә юғалды бит. Аҙна көттөләр, ун көн көттөләр, әммә барып еттем тигән хат-хәбәре килмәне. Өс аҙна үтте, ай үтте – Дөмфиулла мырҙа әйләнеп ҡайтманы. Сөнки ҡайтырлыҡ та түгел ине шул: кеҫәлә төбө таҡырланғас, хатта айныуын да көтмәй, ҡыҙыл иренле ханым уға өйҙән сығып китеү юлын күрһәтте, ә мыйыҡлы ике әзмәүер ике яҡтан осаларына шап та шоп тибеп ҡалды...

Ҡабат вокзалға ҡунаҡлаған йомартйәнде инде берәү ҙә һанларға теләмәне, күрһәләр ҙә, күрмәй үтәләр ине. Ниһайәт, асы үкенес әрнетте мосафирҙы: нисек тә кире ауылға ҡайтып йығылғыһы, барыһын да илай-илай һөйләп бирep, барыһынан ғәфү үтенгеһе килде. Аҡтыҡ байлығы шевьйот салбарын һатып, һоро һурғыс башлы урыҫ араҡыһы менән башын төҙәткәс, керләнеп бөткән оҙон бөрмә балаҡлы аҡ кальсонда ғына ҡалып, һуңғы һумдарына телеграмма һуғырға тәүәккәлләнде. Булған хәлде һис кенә лә йәшермәй, дерелдәгән ҡулында саҡ ҡәләм тотоп һәм, әлбиттә, үҙенә хас орфографик хаталар менән моңло-зарлы үкенесен бланкыға күсерҙе:

КАМАНДИРОВКА АКУНЧЕНА ЗАГНАЛ БРЮКИ ЕДУ КАЛЬСОНАХ ТЧК 26 ИМАЙ.

Телеграфсы мәрйә ханым, ярай, аслан үҙебеҙҙең яҡтыҡы икән – Рәсәй кешеһенең әхүәлен аңланы. “Нисә һумың ҡалды, бедняжка?” – тип һорап белгәс, ҡыҙғаныулы баш сайҡап, аҡыллы кәңәш бирҙе:

-- Тексың оҙон, ҡыҫҡараҡ тот дилбегәне, был ғына аҡсаң етмәҫ.

-- Нисегерәк итәйем һуң?

-- Точка бөтөнләй кәрәкһеҙ, ә шуға тиклемге һүҙҙәреңдең баш хәрефтәрен генә ҡалдырһаҡ та етеп торор – тулыһын үҙең ҡайтып төшкәс тирерһең. Иң мөһиме – 26 менән Имай ҡалһын, шул числола Имайҙың ҡайтып етере аңлашылыр.

--Рәхмәт төшкөрө земляк, мең йәшә! – тине Дөмфиулла Имаев һәм телеграмма тап шулай һуғылды ла.

-- Аҡсаңдың ҡалғанына беренсе станцияға тиклем генә билет ал да, иң тығын вагонға үтеп, кешеләр аяҡ һәләндереп ултырған оҙон һәндерә аҫтына үрмәләп инеп ят. Төндәрҙә проводница үҙ купеһына бикләнгәс кенә, бәҙрәф-мәҙрәфеңә барып кил, крандан туйғансы һыу эс. Кимереп ятырға бына был ҡаласты ал! – тип, ҡатҡан бер бөтөн арыш икмәген һондо...

Донъя тулы яҡшы кешеләр бит ул – һәндерәлә аяҡ һәләндереп ултырыусылар ҙа йәлләне Дөмфиулланы – юл буйынса ҡалған-боҫканын ҡаптырҙы...

Ә ауылда яҡшы айғырҙың ҡайтыуын көн дә, көн дә өҙөлөп көтәләр ине. Юламандың китеүенә ике ай тулып килгәндә, колхоз идараһы исеменә ифрат сәйер эстәлекле телеграмма килеп төшөп шау-шоу ҡуптарҙы:

КАЗБЕК 26 ИМАЙ.

Бөтә идара ағзалары һалҡын хәрефтәр төркөмөнән 26 менән Имайҙан башҡаһын аңлай алмай баш ваттылар. Экспертизаға саҡыртылған “Этморон” ҡушаматлы мөғәллим дә, тойғор моронон һуҙып күпме генә еҫкәп ҡараһа ла, аныҡ фекергә килмәй, ҡул һелтәп сығып китте. Бейек Ҡафҡаз тауы исеме менән йоҙаҡланмыш серле шифрға асҡыс таба алмайынса йөҙәнеләр. Ахыры, төн йоҡоһон керпек ҡаҡмай үткәргән председатель, иртүк килеп, ауылдың барлыҡ әүҙемистарын идараға йыйҙыртты. Көн тәртибенә бер генә мәсьәлә ҡуйҙылар, ул да булһа телеграмманың сихырлы серен сисеү. “26 Имай” тигәнен “26-һында ҡайтып төшәм, Имаев” тип дөрөҫ юраһалар ҙа, “Казбек” тигәне тамам ҡатырҙы баштарҙы һәм фекерҙәр ҡапма-ҡаршы ике лагерға бүленде:

-- Донда айғыр таба алмай, Казбек тауына барып юлыҡҡан икән...

-- Казбек тауындай оло шатлыҡ алып ҡайтып киләм һеҙгә, тип әйтеүелер...

-- Юҡ, егеттәр, “Казбек” ҡушаматлы айғырҙыр ул!

Билдәһеҙлектә тотҡан өсөн колхозсыларҙан идараға дәғүә билдәләре ләүкей башлағас, хисапсының аҡыллы тәҡдиме буйынса, һуңғы ике фекерҙе дөйөм тауышҡа ҡуйҙылар, ләкин яҙмыштың уҫал көлөүенә тарып, ике яҡтың да тауышы бер тигеҙ булып сыҡты. Мәсьәләне ҡайһы тараф файҙаһына хәл ҡылырға белмәй аптырап ултырғанда, идараға баяғы тирмәнсе урыҫ килеп инде лә, түш кеҫәһенән ғәжәп матур ҡағыҙ ҡумта сығарып, председателгә оҙон мөштөклө папирос тәҡдим итте. Шуны ла әйтергә кәрәк: ул саҡтарҙа ауылда ни бары ике кеше – председатель үҙе лә урынбаҫары Дөмфиулла ғына тәмәке тарта һәм улары ла урыҫтың Усман ҡалаһында һары ҡағыҙ ҡапҡа тултырылған тупаҫ махорканан башҡаны белмәй ине. Һәм бына осло күҙ хисапсы, тирмәнсе ҡулындағы матур ҡумтаны һорап алып, әҫәрләнеп һүрәтенә текләне.

-- Ҡафҡаздағы атаҡлы Казбек тауы һәм Дон айғырын менгән абрек! Донъялағы иң яҡшы папирос! – тип ғорурланып аңлатҡайны тирмәнсе, мәсьәләне үҙенсә сискән хисапсы:

-- Эврика! -- тип һөрәнләп, һүрәтле ҡумтаны башы өҫтөнә тантаналы күтәрҙе лә башҡаларҙы ла шаҡ-ҡатырҙы: һүрәттәге осло башлы тауҙар араһында ысынлап та илгә таныш Дон айғырын менгән мыҡты һыбайлы елә һәм ул, өҫтәүенә, осло суҡыш танауы менән тап үҙебеҙҙең Дөмфиуллаға оҡшағайны. -- Казбек! Бына ул беҙҙең Казбек! – тип сәмләнде хисапсы.

-- Казбек! Казбек! – Бер тауыштан шауланы йәмәғәт тә. Эштең асылын дәррәү тойған председатель тылсымлы ҡумтаны хисапсыһы ҡулынан ала һалып, аяғүрә баҫып, башы өҫтөндә һелкә-һелкә иғланланы:

-- Иптәштәр, табылды, ниһәйәт, асылмаҫ йоҙаҡтың аҫҡысы! Беҙҙең хөрмәтле Дөмфиуллабыҙ “Казбек” ҡушаматлы иң яҡшы айғырҙы йүгәнләп алып ҡайтып килә! 26-һында станцияға сығып, үҙенә лайыҡлы һый-хөрмәт менән ҡаршыларға тейешбеҙ!

Ауылдың иң күренеклеләренән һайланған халыҡ вәкилдәре, байрамдағыса яҡшы кейенеп, биҙәнеп-төҙәнеп, ҡыҙыл флаггар елберҙәтеп, 26-нсы числола егерме биш саҡрымды еңеп тимер юл станцияһына килеп еттеләр. Ҡырсынташ һибелгән платформаға ҡаҙ бәпкәләреләй теҙелеп, алыҫтағы боролоштан паровоздың ҡара-ялтыр маңлайы күренеү менән үк, таҡыя сөйөп алҡышларға, тибенеп бейергә керештеләр. Ҡасаба пожарниктарының колхоз яллаған иҫерек-миҫерек ҡорло тынлы оркестры, яҙа-йоҙа яңылышып, “похоронный марш” уйнап ебәрҙе лә, тиҙ үк иҫтәренә килеп, тантаналы “Советтар Союзы Гимны”н гөрөлдәтте. Уны ла шулай үк тиҙ генә өҙә һалып, махсус ошо тантаналы мәл өсөн колхоздың һәүәҫкәр композиторы сығарған шатлыҡлы маршты гөрөлдәтте. Ҡаршылаусылар, оркестрға ҡушылып, көр тауыш менән йырланылар:

Тояҡтарың алтындыр һинең,
Аҫыл малҡай, һай, Дон айғыры!
Һине менеп ҡайтҡан Имайҙың
Ғүмеркәйе оҙон булғыры!..

Тап ошо тантаналы тәңгәлдәге вагон тәҙрәһендә, “йылп!” итеп, оҙаҡ көтөлгән Дөмфиулла Имаевтың туҙғыған сәсле яланбашы салынды, ҡаршылаусыларға ул, ни өсөндөр, йонсоған һәм ҡурҡынған төҫлө күренде.

-- Әнә беҙҙең һөйөклө азаматыбыҙ, әнә! – тип хистәрен түгелдерҙе председатель һәм еҙ тамаҡтарын тыйып көтөп торған оркестрға бойороп ҡул һелекте. Еҙ торбалар шунда уҡ бөтә ҡеүәтенә икенсе маршты осоноп яңғыратты:

Хуш килдегеҙ! Төклө тояғың
Менән атла, Казбек, колхозға!..

Ләкин председатель көтмәгәндә шиңде, оркестр ҙа ҡапыл тынды. Сикһеҙ ғәжәпләнеүҙәренә ҡаршы, таушалғанираҡ йөн күлдәк менән шевьет салбар кейеп киткән азаматтары һис кенә лә көтөлмәгән һүрәттә килеп сыҡты: башында

кемдеңдер сумаҙанынан сәлдергән ҡарайылтыр атлас цилиндр, иңендә бостон френч ә ботонда... керләнеп бөткән ябай сепрәк кальсон ине, уныһының да әле генә вагондан сығып барғанында ишек тотҡаһына эләгеп тап оса тәңгәле айырылып төшкәнлектән, азаматыбыҙ оятлығын усы менән ҡаплап маташа ине... Өҫкө кейемдәргә генә күҙ теклəгән ауылдаштар аҫҡы яҡҡа әллә ни иғтибар итмәнеләр: ҡәҙерлене дәррәү күтәреп алдылар ҙа “ур-ра!” ҡысҡырып күккә сөйҙөләр. Ҡаты ергә табандарын баҫтыртҡас, аҡылын юймаған председатель төп һорауҙы күндерҙе:

-- Ҡайҙа айғырыбыҙ?

-- Самара станцияһының ветеринария хеҙмәте уны карантинда ҡалдырҙы... иң күбе аҙна-ун көнгә тотҡарланыр.

-- Ә колхоздың шевьет салбары ҡайҙа? – тип йәнгә тейҙе хисапсы.

-- Уны мин ҡайыш йүгәнгә алмаштырҙым, аҡсаны етерлек биреп ебәрмәгәнһең! – тип һөжүмгә күскәйне азамат, барыһының өнө бер юлы тығылды. Колхозға ҡайтып етеп, бара-тора эштең яман асылы асылһа ла, йылғырйәндең аяҡ-ҡулын ҡыҫҡартаһы урында, ҡыҙғанып, Дөмпөш Имай тип исем-фамилияһын сонторайтыу менән генә сикләнделəр...

Әммә тап шул заманала аҡ айыуҙар ғына йөрөгән алыҫ төнгө яҡта Беломор – Балтик каналын ҡаҙҙырта башлаған эшсе-крәҫтиән хакимиәте үтә һиҙгер ҙә, сос та булып сыҡты – яҡты социализмдың шул бөйөк төҙөлөшөн төҙөттөрөргә һәм үҙҙәрен дә төҙәлдерергә хас та ошо Дөмпөш Имай ише растратчиктар бигерәкйәтеш, имеш. Күҙ менән ҡаш араһында райондан осоп килеп еткән алтатарлы уҙамандар төн эсендә аяҡ-ҡулын бығаулап алып киттеләр ҙә, дәүләт иҫәбенән поезға тейәп, һалҡын Двина яҡтарына олаҡтырҙылар. Бөйөк пролетар яҙыусыһы Горький үҙе маҡтап атаған -- холоҡһоҙҙарҙың холҡон төҙәтеп, ысын совет кешеһенә әйләндереп сығара торған тәрбиәүи социализм конвейерында бер-нисә йыл эшкәртелеп, Дөмпөш Имай отолмай кәрт уйнарға, араҡыны “гурлы”һынан ғорҡолдатып боғаҙына ҡойорға, ҡурғаш кастет һәм ҡорос бысаҡ менән күҙ эйәрмәҫ йылдам эш ҡылырға оҫтарҙы. Беренсе шлюздарҙан беренсе суднолар киткәс, бөйөк канал буйҙарында гүргә кермәй ҡалғандарҙы иреккә сығарҙылар һәм Дөмпөш, пароходта Иҙелде буйлап килеп, заманса эш ҡайнаған һәм уның үҙе кеүектәрҙе тылсымлап тартҡан Ҡултыҡ ярына төштө.

Тәүге йылдарҙа ул, ябай матрос булып, буксир теплоходында эшләне. Команда ни бары алты кешенән хасил һәм береһенән-береһе ажар эскесе ине. Һыу үренә -- баржа, түбәнгә һал тартып, Ҡариҙел, Сим йылғаларын гиҙҙеләр. Рейс һайын “һулаҡай” пассажирҙар тейәп, уларҙан хаҡ алдылар – аҡсалары, әлбиттә, шунда уҡ шешәгә сумды. Йылғасылар әйткәнсә, “ҡалым”дың иң төшөмлөһө һал йөрөткәндә ине. Үҙбелдекле һал ағыҙыусыларҙы дәүләт һалына тағып, өҫтәүенә, юл буйы дәүләт бүрәнәләрен “һулға осороп” кинәнәләр. Һис бер ниндәй уставты, ҡанунды таныманылар, теләгән ерҙә туҡталып, араҡыға саптылар. Бөтә команда иҫереп, ҡыҙыу йөрөштә ярға килеп төкәлеү, ҡомға ултырыу кеүек ваҡиғалар улар судноһында йыш ҡабатланды. Навигация планын үтәмәү һәм һәр төрлө авариялarға тарыу буйынса пароходствола беренсе урын тоттолар. Хулиганлыҡ өлкәһендә лә ҙур уңыштар ҡаҙанылды: капитандан алып һуңғы матроскаса экипаждың һәр ағзаһы милиция бүлегендә айырым иҫәптә торҙо,

халыҡ уларҙы “пираттар” тип тамғаланы. Ләкин аяҡ-ҡулдарын ҡыҫҡартырға, йәки ҡыуып таратырға бер кемдең дә көсө етмәй, сөнки Дөмпөш бысағының милиционерҙан башлап пароходство етәксеһенәсә теләгән бер боғаҙға барып етәсәге һәр кемгә билдәле ине.

Шулай ҙа ҡоҙғондар ояһының йәшәүенә Хоҙай үҙе сик ҡуйҙы: тәрбиәһеҙлек арҡаһында тамам тутығып, төбө арандай асылған теплоходты ғәмәлдән сығарҙылар ҙа бер ыңғайҙан данлы командаһы ла һепереп түктеләр. Әммә һәр шартҡа яраҡлашырға күнеккән Дөмпөш Имай юғалып ҡалманы – суднолар йүнәтеү цехында балға һуғыу эшенә йәтешләнде. Шунан башлап тормошо икегә бүленде: береһе менән көндәлек эш нормаларын тултырып, хатта арттырып үтәүсе аңлы эшсе ҡиәфәтендә цехта, икенсеһе менән төнгө ҡараңғы урамдарҙа йәшәне һәм унда тиҙ үк үҙенә лайыҡлы әшнәләрен дә табып, өйөрҙөң дәһшәтле атаманына әүерелде. Тутыҡ ҡаҙау ҡайнатырлыҡ ашҡаҙаны асы хәмер касафатынан бирешмәне, бала башындай йоҙроҡтары иһә Ҡултыҡ стилягаларының бөтәһенең, тип әйтерлек, ҡабырғаларын һанап сығыу ләззәтен татыны. Үҙҙәрен баһадир һанаусылар ҙа аҡрынлап Дөмпөш абруйына баш эйҙе, уның кастет һәм бысағын таныны. Бына бөгөн дә ул Ҡултыҡ урамдарының короле булып кинәнеп китеп бара.

-- Зар-режу! – тип үҙе лә һиҙмәй тағы һөрәнләне Дөмпөш, тыҡрыҡ батҡағынан арынған аяғы ҡапыл тротуарҙың яҡты ҡатылығын тойоп. Был юлы ҡурҡып сарбайлаусылар ҙа, баш баҫып ҡасыусылар ҙа булманы – йән эйәләре ул күренгәс тә ышаныслы ек-япҡытҡа боҫоп бөткәйне. Ғәжәпләнеүенә ҡаршы, бер генә бәндә, ул тыуҙырған һил күренеште боҙоп, ниндәйҙер ишектән атлығып сығып йүгерҙе, ул да булһа Ҡултыҡтың был төбәгендәге берҙән-бер именлек һаҡсыһы – участка милиционеры Ҡатыморонов ине. Янбашын туҡмап йүгерергә ҡамасаулаған ауыр кобураһын ҡулы менән тотанаҡлай биреп, ышылдай-ышылдай клубҡа килеп етте лә шуның яҫы ишегенә, ут сыҡҡандай ҡабаланып, белдереү ҡағыҙы йәбештерҙе:

Хөрмәтле граждандар! Урамдан Дөмпөш килә. Һаҡланыу сараларын күрегеҙ. Насар эҙемтәләр өсөн милиция яуап бирмәй. *Ҡатыморонов.*

Бер аҙым ситкә баҫып, әҫәренә кинәнесле ҡарай биреп торҙо ла “йылп!” итеп клубҡа инеп китте. Ҡыҙыл тирәсле фуражка залда күренеү менән дәртле музыка киҫелде, бейеүселәр уңайһыҙлыҡта ҡалды. Ҡатыморонов директор бүлмәһенә елтерәп инеп киткәс, репродукторҙан ашығыс иғлан тапшырылды:

-- Иптәштәр, иптәштәр, һаҡ булығыҙ! Клуб территорияһында Дөмпөш! Рухығыҙҙы төшөрмәгеҙ, коммунистик принципиаллек һәм ҡорос ныҡлыҡ һаҡлағыҙ!

Әммә халыҡ был аҡыллы киҫәтеүҙе тейешенсә аңламаны, күрәһең, һағыҙаҡ ояһына таяҡ тыҡҡандай шау-шоу килеп ҡайнашты. Шулай ҙа ҡайтып китеүселәр табылманы, сөнки Дөмпөш һәм уның шайкаһынан ҡурҡмай яңғыҙ урамға сығыу өсөн арыҫлан йөрәкле булырға кәрәк ине. Сығып баҫып торған милиционер кокардаһы артында Шымарғановтың бриллиантинланған ялтыр башы күренде лә

кабинетының бронлəнгəн ишеге артына ҡапланды. Шул уҡ мəлдə милиционер ҙа ҡайҙалыр һеңеп юҡ булды. Яңы һулыш алған репродуктор моңло көй ағылдырҙы:

Илама, бəғерем, илама, илама,
Ҡауышырбыҙ теге донъяла...

Нескə күңелле ҡатын-ҡыҙ, шыма-ебəк ҡулъяулыҡтарын сығарып, йəшле күҙҙəрен һөрттө. Колхоз ревизия комиссияһы председателенең акушеркаға тотҡан бəхетһеҙ мөхəббəте, араларына "көҙən тешле финагент"тың кереүе арҡаһында "ике һаңдуғас"тың, ҡауыша алмай, Саҡ-Суҡ һымаҡ илашып йөрөүҙəре тураһында шыңшыны радиола.

Тышта ла үҙенə күрə хисле-моңло төнгө тормош ағыла ине. Дөмпөш Имай, милиционер белдереүе йəбештерелгəн ишеккə килеп терəлгəс, ҡуш бармағын ҡабып бик əсе һыҙғырҙы. Яуап булып төрлө тарафтан шундай уҡ шомло һыҙғырыуҙар яңғыраны. Тиҙҙəн Дөмпөш тирəһенə үҙе кеүек үк ярымҡыҙмаса бəндəлəр өйөрөлдө, береһе атаман өҫтөндəге батҡаҡты ағас ботағы менəн ҡырғыслап таҙартты. Баҫып торған килеш оскор кəңəшмə үткəрҙеләр. Дөмпөш Имай, ни юл менəн булһа ла, бөгөн күмəкләп типтерерлек аҡса табыу бурысын һөрҙө алға.

Ресторандағы уларға тейешле аулаҡ мөйөш, затлы-татлы араҡылар һəм тəмле ҡабымлыҡтар ошо минутта ошо тансы залында – портмонеттарҙағы һумдар, сəғəт, беләҙек, яҡшы кейемдəр рəүешендə башҡаларҙа йөрөй ине. Пираттарҙың еңел йəшəргə теләүен аңламаған алйот граждан һəм гражданкаларҙан был байлыҡты ҡайырып алырға кəрəк ине. Үс иткəндəй, күпме һағалаһалар ҙа, ишек тышына сыҡҡан кеше булманы. Ахырыһы күмəкләшеп клубҡа инеп киттеләр. Пираттарҙың береһе, моңға ойоған тансы майҙанына үтеп, иҙəнгə онтаҡ һипкəйне, бейеүселəр буҫлығып-буҫлығып сөскөрөргə, сəсəргə керештеләр, тəндəренең тиргə сыланған өлөштəрен, яман əсетеп булһа кəрəк, түҙə алмай ыуаланылар.

-- Борос һиптеләр иҙəнгə, борос! – тип сыйнаны береһе. Ҡыҙ-ҡырҡын, танауҙарын ҡулъяулыҡ менəн баҫып, туалет бүлмəһенə ташланды. Гардеробҡа сират һуҙылды (кейеп килгəн итектəрен алырға кəрəк ине). Дөйөм аймылыштан файҙаланып, пираттар асыҡ ауыҙҙарҙы тунарға керештеләр. Күҙ алдында уҡ бер ҡыҙыйҙың ҡул сəғəтен киҫеп алдылар, шуны күреп торһалар ҙа, янындағылар ауыҙ асып һүҙ əйтмəнеләр – күрмəмешкə һалыштылар. Ҡыҙ иланы-иланы ла ҡайтып китте. Дөмпөш Имай, өҫтөндəге батҡаҡтарын кешеләргə ышҡый-ышҡый түргə уҙып, гардероб янындағы йəшел хəтфəһе ҡырылып бөткəн диван янында туҡталды, унда сит ҡаланан улына килгəн һəм кеше күрергə сыҡҡан бер ханым хəл йыйып ултыра ине.

-- Эй, убырлы ҡарсыҡ, тор! Һиңə йомшаҡ кəнəфигə түгел, гүргə ятырға ваҡыт!

Үҙ ғүмерендə бындайҙы күрмəгəн ханым, теле таңғайына йəбешеп, өнһөҙ ҡалды.

-- Тор, тор, ниңə аңғыраландың? Сүплеккə сығарып ташлағанды көтəһеңме əллə?! – Дөмпөш Имай, уны яурыны менəн этəреп, диван уртаһына ларҡайҙы,

шул ыңғайы ғарҡылдап ҡоҫоп та ебәрҙе. Сират торған улы килеп, ханымды торғоҙҙо ла, етәкләп, директор кабинетына алып инеп китте. Ул быйыл вуз тамамлағандан һуң бында эшкә ебәрелеп, Дөмпөштө һанларға өлгөрмәгәйне әле: Шымарғановты, яңағы аҡ марля менән бәйле Бикләмешевте эйәртеп кире сыҡты. Хырылдап йоҡлап киткән Дөмпөштө таныҫ та Шымарғанов:

-- Э, юҡҡа маҙаһыҙлап йөрөмә! – тип, ҡулын һелтәп китеп барҙы.

-- Һин был кемгә яла яҡма. Уның фотоһы “Доска почета”ла тора! – тип аҡыл бирҙе теше һындырылған комсорг.

-- Күрәләтә хулиганды яҡлайһығыҙ! Нисек намыҫығыҙ етә? – тине уллыҡ тойғолары ҡыйырһытылған йәш кеше.

-- Ипләп һөйләшегеҙ, гражданин! Заводыбыҙҙың танылған балғасыһы ул. Производство ударнигын “хулиган” тип атағанығыҙ өсөн закон ҡаршыһында яуап бирергә тура килмәһен.

-- Минән алда “ударниг”ығыҙ яуап бирер, рәшәткә артына ултырыр!

Йоҡлағанға һалышып тыңлап ултырған Дөмпөш комсорг киткәс тә керле башын күтәреп, үҙенә тел тейҙерергә батырсылыҡ иткән фетнәсене зәһәр ҡарашы менән киҫте:

-- Беләм мин һинең, Әхмәтушка, ҡайҙа йәшәгәнеңде – ояңа юл табырмын. Ҡайт та көт: бөгөн үк минән тулы расчет алырһың! – Дөмпөш шуны яҡшы белә һәм башҡаларға ла белдерә: быҙаса Ҡултыҡта бер кемдең дә уға ҡаршы һүҙ әйткәне юҡ, ә әйткәне арҡаһына бысаҡ алырға тейеш! – Бөгөн үк көт, падло! -- Бармаҡ янаны ла Дөмпөш, хырылдап йоҡлап китте. Был янауҙың ысынлығын тойоп шомлана башлаған Әхмәт әсәһен таныш ҡыҙының фатирына йоҡларға оҙатты ла яңғыҙ үҙе генә ҡайтырға сыҡты. Тап ул уҙаһы йүнәлеш төн буйына дөмә ҡараңғылыҡта тора, ниңә, тиһәгеҙ, Ҡултыҡ пираттарының эш итеү зонаһына ингәнлектән, баҫаналарҙағы лампаларҙы ҡыра һуғып бөтөргәндәр. Үс иткәндәй, өҫтөндә лә йылы май айының костюмы – аҡ фигураһы теләһә ниндәй ҡараңғылыҡта ла йөҙ метрҙан айырым-асыҡ күренә. Клуб яҡтылығынан яҙлығып, ҡарт тополдәр ышығына ингәс тә ул артында аҫтыртын ҡыштырҙауҙар ишетте. Шуларҙан арыныр өсөн, ҡоймалағы бер тишектән завод ихатаһына үтте, ҡаса-боҫа, ярыҡ-йороҡ суднолар торған яр ситенә барып сыҡты. Бәхеткәме, әллә бәхетһеҙлеккәме ҡаршы, прожектор фокусына алынғайны был тәңгәл. Ҡоймалағы ҡурҡыныслы белдереүҙәр бер-бер артлы барып керҙе аңына:

Бында инеү тыйыла, тәртип боҙғандарға – суд!
Һыуға нефть продукттары түккән өсөн суд!

Ә бына быныһы бөтә булған күсәрлеләргә киҫәтеү:

Иптәштәр! Социалистик милекте һаҡлау хаҡына нефть ҡалдыҡтарын түкмәгеҙ, тәгәрмәс майын тамыҙмағыҙ. Быныҡ менән һеҙ Ватаныбыҙҙың миллионлаған һумдарын янда ҡалдыраһығыҙ. Нәфрәт һәм хурлыҡ көпсәгенән май тамыҙған әрпешкә!

һуңғы ғәләмәтте уҡығас Әхмәт, үҙенең хәҙерге хәле ни тиклем генә ҡурҡыныслы һәм ҡайғылы булмаһын, ҡыскырып көлөп ебәрмәй түҙә алманы. Ҡултыҡ һыуы өҫтөндә йыл әйләнәһенә ике иле ҡалынлыҡ май ятҡанда парадокс ине был. Суднолары һаҡлыҡ бактар булмау сәбәпле, һәр йөҙ сәғәт эш һайын двигателдәрҙә иҫкергән майҙы йөҙәр килограмлап ауҙаралар ине бахыр Ағиҙелгә. Түрәләр ҙә, пожарниктар ҙа быға күҙ ҡырыйы менән ҡаранылар, уларҙың был өлкәләге көрәше таҡтаға иғлан яҙып элеүҙән ары уҙманы. Әүәлге замандарҙа себен кеүек ҡайнашып йөрөгән балыҡтар шул бысраҡтан ағыуланып ҡырылып бөттө. Эшсе йәштәр иҙелдә һыу ҡойоноуҙан бөтөнләйгә мәхрүм булды, ә ошоно белмәгән ҡаҙ-өйрәктәр ихаталарына ҡаҙан таҙартҡан кочегарҙарҙай ҡуйы мазутҡа буялып ҡайталар ине. Әммә Әхмәттең ҡысҡырып көлөүе үҙе өсөн фажиғәгә әүерелде: Дөмпөш Имай, ике ярҙамсыһы менән берлектә, уны ҡамап уҡ алды. Әхмәт, эҙен яҙлыҡтырмаҡҡа, иҫке баржа һөлдәләре өйөлгән ҡараңғылыҡҡа йомолдо. Аяҡ дөпөлдәүҙәрен ишеткән хәлдә, серек траптан баржаға күтәрелде. Ары ҡасыр урын юҡ: йә һыуға һикерергә, йә, үрмәксе ауына ҡапҡан ахмаҡ себендәй, Дөмпөш ҡулына ҡалырға тура киләсәк... Инде генә яғаһынан алдыҡ тигәндәрендә, таштай елләнеп, борт тышына ырғыны, нефть тамсыларын сәсрәтә-сәсрәтә шаптырҙап йөҙөп китте. Пираттарҙың береһе һыу ситенә килеп баҫты ла, төшөргә баҙамай, кире китте. Әхмәт, күпмелер йөҙөп барғандан һуң ярға сығып, металл сүплегенең арғы осона йүгергәйне, тегеләр күҙҙән яҙҙырҙылар, сөнки егеттең майский аҡ костюмы инде мазут һеңдереп ҡара төн төҫөн алғайны. Пираттар, шырпы һыҙып, тимер-томор араһынан эҙләнәләр ине һаман. Береһенең шырпыһынан күләүеккә ут ҡабып, пожарниктар сабышып килеп етте, бер юлы бер-нисә һеләктән һыу һиптерелде...

Әхмәт урау-урау юлдарҙан бата-сума өйөнә ҡайтып ингәндә, сәғәт төнгө икенсе яртыны һуҡҡайны. Өҫ-башын алмаштырып, йыуынып, тәҙрәнән төшкән шыйыҡ Ай яҡтыһында һәрмәнеп ҡапҡыланы – ниңәлер электр һүнгәйне. Оҙаҡ көтөп алған һөйөклө әсәһе эргәһендә булмағас, аш үтмәне тамағына. Шопорлатып бер стакан һалҡын сәй генә эсте ла, ишек һәм тәҙрәләрҙең бикләнешен тикшереп, Дөмпөш янаған һөжүмде кире ҡағырға әҙерләнде. Был баракты тәҙрәләренең күпселеге тимер рәшәткәле булып, Әхмәт өлөшөнә төшкән бүлмәнеке генә ни өсөндөр ҡурсаулыҡһыҙ ҡалдырылғайны һәм пираттарҙы, әгәр ябырылһалар, ылғый шунан көтөргә кәрәк ине. Сикә тамырҙары бүртеп, башы шаулап, тәҙрә яңағы йәнәшәһенә ултырғыҫҡа сүгәләне, утын ярғыс балтаны иҙәнгә һалды. Шыйыҡ ҡына һарҡылған Ай яҡтыһы ла, стенала тығылдап торған сәғәт тә, шулай уҡ яҙғы йомшаҡ төн һәм бөтә бәхетле донъя уға шомло, ҡайғылы зират бушлығылай тойолдо. Моңайып, вузды бөткәндән һуң юллама буйынса Ҡултыҡҡа эшкә килгәнендәге күңел елкеткес нурлы хистәрен хәтерләне. Һис тә былай булыр тип уйламағайны, эшләп йөрөп белемемде арттырырмын, күңел асырмын, яҡшы дуҫтар табырмын, тип хыялланғайны, бөтәһе тәкмәсләне. Юғары белемле булһа ла, “тәүҙә нужа һурпаһын эс әле” тип, ябай слесарь итеп ҡуйҙылар. Зыялы дуҫтар урынына боҙоҡ араҡы мискәләре, мәҙәниәтле күңел асыу урынына хулиганлыҡ һәм йәшерелмәгән йәбер-золомһағаланы. Изге ниәтле алдынғы йәштәр ҙә, дөрөҫ етәкселек булмау сәбәпле, аҡрынлап шул уҡ һаҙға баталар ине. Өҫтәүенә... Дөмпөш тигәне арҡыры төштө бына юлға. “Башҡалар

кеүек, башты алып ҡасһам да булаһы икән был пираттар ҡултығынан”... тип әрнене Әхмәт, үкенеп.

Ҡалғып ултыра торғас, керпектәре тынысһыҙ серемгә тала башлағас, ҡапыл тертләп уянды – тыш яҡлап тәҙрә төбөндә шиклеҡыштырҙау ишетелде -- шулар! Инде ни хәл итергә? Был тәҙрәһенең ике яғынан башҡа тәҙрәләр теҙелеп торһа ла, һөрән һалып күршеләрҙән ярҙам көтөү өмөтһөҙ – ишетмәйҙәр ҙә күрмәйҙәр. Милицияға шылтыратырға телефон юҡ, булғанда ла ул килеп етмәйәсәк. Икенең берен хәл ҡылыу үҙенә генә ҡала... Көллө тәне менән ҡалтыранған Әхмәт, һалҡын стенаға арҡаһын терәп, ситкәрәк шыуҙы, сатнаҡ быяла ярығынан һарҡылыусы тынҡыш мөңгөрҙәүҙәргә ҡолаҡ һалды. Атаман Дөмпөш пираттарына вазифалар йөкмәтә:

Дөмпөш. Мә кастет, мә финка. Өнөн сығартмай тонсоҡтор. Ә һин, Очкастый, ҡапҡа төбөнән күҙәт... һыҙғырырһың. Хәҙер юл асып бирәм (тәҙрә һыламын ҡуптарып, быяла өлгөһөн алды). Бар, Архар, шыуыш (береһенең мышнап нигеҙгә менеүе ишетелде).

Архар. Булмай, бөгөнгә ҡалдырайыҡ... ҡурҡыныс... Ул һағалап торалыр.

Дөмпөш. Коз-зел, ин тиҙерәк!

Архар. Булмай! Мин... (аңлашылманы).

Дөмпөш. Коз-зел! Бир фуражкаңды. (Янап) Табан тайҙыраһы булма, түбә ҡабың миндә. Бына былай итеп инәләр уны!

Дөмпөш үҙе менеп баҫты нигеҙгә. Тәҙрә үтә Ай яҡтыһында ҡаҙандай ҙур башының ҡара шәүләһе ятты иҙәнгә. Йылан телеләй һуҙылған һул ҡулы менән тәҙрә тупһаһының эске ҡырыйына тотоноп, уң ҡулын алға һонғайны, яҫы йөҙлө оҙон бысаҡ Ай нурында янаулы ялтыраны, ***“зар-режу!”*** тигән таныш һөрән бөтә барак күләмен яңғыратып, кешеләрҙе өйҙәрендә уттарын һүндерергә, һулыштарын ҡыҫып, йөрәктәре дарҫ-дорҫ ҡағып, тыңлап ятырға мәжбүр итте. Һулышын саҡ алып баҫып торған Әхмәт, электрланғандай ҡапыл үрелеп, иҙәндән балтаны алды, ҡушҡуллап башы өҫтөнә күтәрҙе лә шым ҡалды. Ҡото осоп, бысаҡ йөҙөндә уйнаған нурҙарға текләне: ике минуттан был ҡырҡҡыс уның боғаҙын саласаҡ... Һәм уны балта күтәрергә мәжбүр иткән йәшерен көс балтаны ҡабат төшөрөргә этәрә. Балта йәшендәй ауа һәм ауыуының аҙағы булған... иҙәнгә түгел, ә бысаҡлы ҡул һуҙылған тәҙрә төбөнә сабыла. Яман аҡырыу тертләтә барак халҡын һәм Дөмпөш Имай, арҡыры сабылған түшкә кеүек бәлкелдәп, нигеҙ буйына кире тәгәрәй. Ҡомһоҙ бысаҡ тыпылдап иҙәнгә ҡаҙала, уның артынан, резинка киҫәге һымаҡ һалмаҡ төпөлдәп, икенсе нәмә төшә...

Шашыныуҙан күҙҙәре аҡайған балтасы, тышта ҡубынған ығы-зығыға ла иғтибар итмәй, хәле бөтөп сүгәләне, балтаһын һаҡ ҡына стенаға һөйәп, иҙәндәге күренешкә текләне. Ишеккәсә һуҙылған Ай яҡтыһында, еүеш-ҡыҙыл киҫкәһенән нәҙек кенә ҡан юлағы бөлкөлдәтеп, Дөмпөштөң якорь һүрәтләнгән батҡаҡлы ҡулы ята, шайтандыҡылай оҙон тырнаҡлы имән бармағы, бер йомолоп, бер яҙлығып, үҙенә ымлай ине. Шул ымлауҙан гипнозланып, күҙен ала алмай күҙәтте Әхмәт һәм әле генә ҡалтыратҡан хәтәр хәле инде уға иҫ китмәҫлек ябай ҙа, ҡыҙыҡлы ла тойолдо. Ауыҙын арандай асып, түшәмгә ҡарап шарҡылдап көлдө, ҡан тамыры өлпөлдәп ятҡан якорле ҡулды оҙон ҡара тырнаҡлы имән бармаҡ осонан күтәреп, үҙенең уйынса алыҫ-алыҫҡа – һауаға быраҡтырҙы һәм уның нисек

күк көмбәҙенә тупылдап барып бәрелеүен, аҡ йондоҙҙар араһында ҡара тап ҡалдырып кире төшөүен күргәс, үкһеп-һулығып иланы. Үргә аңшайып ҡабат айғырҙай кешнәп көлөп, өҫтәлдә уны өнһөҙ күҙәтеп аптырап баш сайҡап ултырған еҙ самауырҙы һуғып осорҙо, һыу тулы ҙур бакты тибеп ауҙарҙы. Үҙе һаман иланы, һаман көлдө...

Иртәгәһен эш урынынан килеп еткән иптәштәре бүлмәһенә керә алмай аҙапланды – ишек-тәҙрә карауат, өҫтәл-ултырғыс менән баррикадланған ине. Шаҡылдатыу, өндәшеүҙәр яуапһыҙ ҡалды, фәҡәт күңел өшөткөс шыңшып илау ҙа шарҡылдап көлөү генә ишетелде. Милиция саҡыртып, ишекте ҡайыра башлағас ҡына бүлмә эсе тын ҡалды. Һынамаҡҡа, асылған ҡыҫыҡтан көрәк тығып ҡарағайнылар, ***"зар-режу!"*** тигән имәнес ауаз ишетелеп, шунда уҡ балта көрәк һабын өҙә сапты. Пожар машинаһы килеп, тәҙрә аша ҙур баҫымлы һыуҙан туҡматҡас ҡына, эскә үтеп керҙеләр, бүлмә хужаһы, күшеккән тауыҡ һымаҡ, стена буйында бөршәйеп ултыра ине. Аяҡ-ҡулдарын бәйләп, санитар машинаһында психбольницаға оҙаттылар.

Ҡултыҡ пираттарының да бәйгеһе тамамланды. Тәүҙә атамандың эҙенә төштөләр. Именлек һаҡсылары барып ингәндә, Дөмпөш Имай, "коммунистик хеҙмәт ударнигы" статусынан файҙаланып, баш ҡаланың атаҡлы хирургия клиникаһында дауаланып ята һәм, йәтеш-йомшаҡ койкаһынан шәфҡәт туташына әйтеп, "цехта бик мөһим хөкүмәт заказын башҡарғанда ҡулһыҙ ҡалыуы" хаҡына дәүләттән персональ пенсия даулап ғариза яҙҙырта ине. Ҡулға алыныуын белдергән ордерҙы күрһәткәс, нәфрәтләнеп ырғып торҙо:

-- Ватаныбыҙҙың коммунизм төҙөлөшөндә һаулығын юғалтҡан намыҫлы эшсене ҡыйырһытҡанығыҙ өсөн Уголовный Кодекстың нисәнсе статъяһы аҫтына эләгәсәгегеҙҙе шәйләйһегеҙме?! – тип ажғырҙы яман янап. Криминалистар һөйләшеп торманылар, бәләкәй генә сумаҙанды шым асып, яҫы йөҙлө оҙон бысаҡты һәм якорь һүрәте төшөрөлгән ҡул өҙөгөн күрһәттеләр. Дөмпөш Имай, бер ни ҙә әйтә алмай, мендәренә ҡапланды.

* * *

Саф елдәр эшсән цехтарҙы, тынсыу кәнсәләрҙе лә таҙартып иҫтеләр, йылдар буйына өйөлөп ятҡан туҙандарҙы, саңлы ҡағыҙҙарҙы осороп Ҡултыҡ һыуына ташланылар. Шымарғанов, Ҡатыморонов, элекке профорг һәм комсорг кеүек эшем эйәләренән күңелһеҙ иҫтәлек кенә ҡалды. Ҡултыҡ пираттарының да эҙҙәренә үлән үҫте. Көндөҙөн – Ҡояш, кистәрен электр йымылдай башланы шыма асфальт түшәлгән урамдарҙа һәм һауаһы йәнгә таныҡ хушбуй-сәскә еҫтәренә тулышып, кешеләрҙең күңелен сафландырҙы. Оҙаҡҡа ғына булһын инде хәйере.

Сәнкем-Биктимер, 31.01.1957.
Өфө, 15.12.2005.

Тулҡын өҫтөндәге күбектәр

Баш һүҙ итеп тыңлайыҡ заманындағы "Ағиҙел" журналы баш редакторы урынбаҫарының кәңәшен

Й. Солтанов. Тулҡын өҫтөндәге күбектәр. (Сатирик повесть).

Минеңсә, әҫәрҙе "С улыбкой" (башҡортса "Уйынлы-ысынлы") йәки башҡа рубрика аҫтында биреп булыр.

Кәңәштәрем: *1) Автор, тағы бер ҡарап сығып, ҡайһы бер үтә ныҡ мажараға киткән ерҙәрен ҡыҫҡартырға тейеш.*

2) Катерҙа барыусы юлсыларҙың бөтәһен дә насар итеп күрһәтеү дөрөҫ булмаҫ (был бит символ). Уларҙың буфет алдында сират тороуын һүрәтләгән эпизод кешеләрҙе бигерәк имәнес, вәхши итеп ебәрә.

3) Ошоға бәйле рәүештә, образдарҙы тоташы менән кире яһауҙан да ҡотола төшөлһөн ине. Был килеш үтә ныҡ "тәнҡит"ҡә һуғылына. Юмористик план өҫтөнлөк итһә, уңайлыраҡ булыр.

4) Көлкө өсөн шаштырған урындарҙа стиль насар. Төҙәтеп булыр.

Әхиәр Хәкимов.
17.07.1966.

Кәңәшкә автор ҡарашы

Ғәфү итегеҙ, хатта тынсыу батшалыҡ заманында ла Салтыков-Щедрин сатираһы юл алған. Быныңменән мин һис тә үҙемде шул бөйөк сатирикка тиңларгә йыйынмайым, бөгөнгө тормошобоҙҙо ла ундай рәхимһеҙ көйҙөрөүгә торошло һанамайым. Ләкин сатира менән юмор бер үк яугир хәйләрҙең үткерләнгән ике йөҙө тип беләм. Уның бер йөҙөн (сатираны) тупаҡлаһаҡ йәки ҡырҡып ташлаһаҡ, яугир хәйләр аш өйөндәге ябай туҡмас бысағына әүереләсәк түгелме?..

Й. Солтанов.
10.08.1966.

Шаулай-гөжләй яҙғы ағын Сим һыуы.

Ҡотороп ташҡан Симде ҡап-уртаға ярып, мыҡты пароход бара. Уның ҡорос ҡорһаҡ-яндарының икеһендә лә, болғансыҡ һыуҙы шап-шоп һуғып һелтәнеүсе ишкәк-ҡуласалары өҫтөндәге яҫылыҡта, эре ҡыҙыл хәрефтәр менән шаҡырайтып, шанлы замана судноһының исем-шәрифе шаҡырайтып яҙылған: ***"КОММУНИЗМҒА – АЛҒА!".***

Пассажирҙар палуба ситендәге тимер тирәскә таянып, ҡурҡыу ҡатыш һоҡланыу менән күҙәтәләр ауыҙлыҡһыҙ йылғаның уҫал тулҡындарын. Төҫтәре ҡаҫкан уларҙың, теҙ-быуындары ҡалтырай, әммә ошондай ҙа дыуамал стихияны иҫән-имен кисеүҙәрен тойоу бәхетенән ғорурҙар. Ирмен, тиһәң, сәфәр сығып йөрөп ҡара һин бындай ташҡын заманаларҙа хәтәр Сим һыуҙарында! Күңелдәренән ана шуны өнһөҙ-тынһыҙ кисереп, судно мороно сирғыткан тос

тамсыларҙы гөжләп иҫкән дымлы ел менән ҡуша йотлоғоп-йотлоғоп һулайҙар, әйтерһең, ғүмерҙәренә етерлек саф һауа байлығын алып ҡалырға теләйҙәр.

Төрлө ғәүем араһынан, айырымланып, өс һын салына күҙгә. Береһе, тупаҫ брезент плащ кейгән яҫы арҡалыһы, бесәй ҡойроғолай һәр ике яҡҡа һалынып төшкән оҙон мыйығы менән, икенсеһе ауыл әбейҙәренең йөн иләй торған ҡолағына оҡшаш нәҙек-оҙон буй-һыны менән һүрә ил иғтибарын. Өсөнсөһө иһә, өҫ-башы энәнән-ептән генә булыуына ла ҡарамай, ошо сәйәхәт барышында уҡ арт яғын мазутҡа буялтып өлгөрткән зәһәр һары макинтошы, әтәс кикерегеләй алһыу йөҙө менән арбай ҡараштарҙы. Өҫтәүенә, уҙамандың утлы-ҡыҙыл прическаһы ала күҙҙәрҙең яуын. Оҙаҡ таралмауҙан, буғай, балға ҡатҡандай уҡмашып, һары һалам эшләпәһе аҫтынан ҡыҙыл ялҡын телдәреләй сосолошҡан сәс ҡолҡамаларын күрһәң, һис шикһеҙ:

-- Эй, эшләпәң янып бара! – тип ҡыскырып ебәерһең. Пассажирҙар ғәжәпләнеүҙәрен йәшермәйенсә:

-- Художниктыр. Йә шағирҙыр. Һис шикһеҙ, интеллигент! Зыялы! – тип әҙәпле шыбырҙашалар үҙ-ара. Үтә әсе теллеләр генә баһаны һанламайҙар, мыйыҡ, йәки танау аҫтынан ғына мыҫҡыллы йылмайып:

-- Фи! Иҫегеҙ киткән икән иҫке сәкмәнгә! – тип һуялар. Хатта:

-- Ышан һин бындай “зыялы”ға! Бер ҡат хөлләһен һалдыртһаң, к...дә ҡатҡан кальсондыр әле! – тип һалдырыусылар ҙа бар.

Был өсәү башлап пароходҡа ултырғанда, әлбиттә, бер-береһен еҫкәшеп белмәйҙәр ине әле. Тулҡындарҙы күҙәтеп бара торғас, Яҙмыш тигәнең һәр ҡайһыһын тиҫтәләгән инсандар араһынан йолҡоп алды ла өсөһөн бергә ослайып бөткән кәмә моронона килтереп баҫтырҙы. Тәүге мөҙҙәттә улар, бер-береһенә ҡарашып, ҡулсыр малайҙар бер мөйөшкә килтереп ырғытҡан ата бесәйҙәр кеүек, бер-береһенән ҡыймай һәм ни итергә лә белмәй, өнһөҙ текләшеп торҙолар. Әммә мәғрифәтле егерменсе быуат уртаһының алға киткән цивилизацияһы үҙенекен итте: тартынып ҡына булһа ла, иҫәнлек һораштылар.

-- Джугашвили, мәңге йәшел кипаристар иленән. Тәғәйенерәк әйткәндә, лимондарға бай йәмле Гутаутанан, -- тип ихлас ҡул бирҙе Ҡаф тау артының улы.

-- Бәй-бәй, мәрхүм Иосиф Виссарионовичтың улымы әллә? – Грузиндың ҡулын ҡыҫып аптыраны оҙон бесәйҡойроҡ мыйыҡлы.

-- Алай уҡ булмаһа ла, инде әйтергә ярай – яп-яҡын туғанымын! – тигәйне грузин, был хәбәр теге икәүҙе быға һиҙелерлек яҡынайтты, сөнки баҡыйға киткән бөйөк юлбашсыны һағыныу, һағынмағанда ла, шуны белдереүҙән ҡурҡыу тойғоһо һүрелмәгәйне әле.

-- Тәк-тәк, бик яҡшы. Беҙҙең ҡарағайҙар һәм... ҡырағайҙар төбәгенә, -- тип, үҙенән-үҙе теле осона килмеш рифмалап әйтте һары һалам эшләпәле, -- ниндәй елдәр ташланы?

-- Ташламаны, ә үҙ теләгемдә биш йыл буйы инде мин Гутаута -- Өфө араһын скорый поезда гиҙәм – сыуаҡ Башҡортостан халҡын ҡыуандырырға вагон-вагон алтын лимондар килтерәм. Ләкин был юлы, башҡорт туғандарыбыҙҙы өҙөлөп яратҡанлыҡтан, сәйәхәтемде ары – ошо шанлы Сим буйҙарынаса дауамларға ҡарар ҡылдым. – Йөнтәҫ беләкле ҡулын һуҙып күреште ҡолға буйлы алсаҡйән. – Ғәфү итә күрегеҙ – үҙегеҙ кем булаһығыҙ?

Зәһәр ҡыҙыл сәсле быға, ҡиәфәтенә тәрән аҡыл һыҙаттарының төркөмөн көр һибелдертеп, берәгәйле яуапланы:

-- Башҡортомдоң иң атаҡлы ауыл шағиры Минһажитдин Поэзовский булам мин. Шиғыр эҙләп, илһам күҙләп ауыл халҡы араһына ижад командировкаһына сыҡмышым. Әҙәм ҡулы ҡағылмаған саф ынйыларҙы йыям.

-- Һе... шағир! – тине шаңҡыбыраҡ ҡалған грузин, һоҡланыуҙан телен шарлатып. – Йәшәһен Шота Руставели, йәшәһен Поэзовский!

-- Ә мин – Садиҡов. Тире иләү фабрикаһы белгесемен. Сеймал эҙләп йөрөйөм. -- Сосолҡо бесәйҡойроҡ мыйыҡлы ла үҙе хаҡында белдерҙе.

Уҙамандар, хистәр даръяһы ошоноң менән ҡороғанлығын тойоп, тәрән аҡыллы ҡараштарын ҡабат Сим һыуына ырғытып, ниндәй ҙә булһа ырғаҡ осо табырға тырыштылар. Эш юҡтан эш яһап, ҡолға буйлы грузиныбыҙ борт тышына лыҫкылдатып төкөрөк оҙатҡайны, эйелешеп текләнеләр.

-- Дә-ә-ә... – Өн сығарҙы шиғри ынйылар тиреүсе, Джугелиҙың аҡ тәңкәһе йылға өҫтөнән корма артынаса китеп олаҡҡас. Артынса уҡ һамаҡланы. – Илебеҙҙең ҡөҙрәтле Сим һыуы был, йөрәктәрҙең шашынып ярһыуы был!

Садиҡов, өндәшмәй (шиғриәткә иҫе китмәй, булһа кәрәк), үҙ сиратында Сим битенә төкөрҙө -- әле генә һамаҡланған илһамиятҡа баһа биреү тип аңларға була ине. Сикәләренә ҡан тиртеп шағирәнә йөрәкһегән Поэзовский быны абайламаны, “дә-ә-ә...” тип кенә ҡуйҙы.

Грузин, танауы аҫтындағы тырпай-дүрткел мыйыҡ йоратын һыпырыу өсөн күтәргән ҡулын ярты юлда туҡтатып, ҡултыҡ аҫтына даими ҡыҫтырып йөрөткән бүртек күн сөмкәһенең биген һәрмәп барланы ла шағир һүҙен хупланы:

-- Батони, шәп әйттең! Һеҙҙең яҙғы Сим һыуы беҙҙең көҙгө Теректе хәтерләтә.

Өсөнсөһө һаман да шул һытыҡ хәлендә ҡалып, мәғрур Симгә бәйле нескә кисерешен асырға теләмәне, ситтәрәк торғаны килеш, һыу өҫтәрен, яр буйҙарын өнһөҙ күҙәтә бирҙе. Ауыҙынан һүҙ һурып булмаҫ йомоҡйән, ахыры, был тире иләү оҫтаһы.

Йөҙ илле ат ҡеүәтле пар машинаһы ҡорос кәмәне үкертеп этәрә алға. Табандар аҫтындағы йәһәндәм төбөндә уның ҡорос рычагтарының, поршендарының ҡырыҫ шаулап-геүләүенән бөтә корпус ҡалтырана, палубаға төшкән сүп-сар пружиналы уйынсыҡтарҙай ырғандай. Тимер йырына күнекмәгән әһле-әҙәм, ҡолаҡтарына мамыҡ тығып, дәһшәтле тәңгәлдән йыраҡҡараҡ ҡасалар. Күберәге палубаның алғы өлөшөндә тән-йәндәрен танауға бәргән саф һауа, йылы Ҡояш нурҙары, һоҡланғыс тәбиғәт күренештәренән иркәләтеп, һыйҙырышлы ағас креслоларҙа иҙерәй. Үҙәктәре өҙөлөп барғанда сөмкәләрен, кәрзиндәрен аса һалып, ҡапҡылап та алалар. Домино ене ҡағылмыш ир-ат, сумаҙандарын өҫтәл итеп, йәки берәй таҡта киҫәге һалып, аҡ күбеккә батҡансы “кәзә яра”. Папиростар төтәй, төпсөктәр бураҡтырыла, әсе көлөү, үсегеп мығырҙаныу, услап һуҡҡан һөйәк шаҡмаҡтарҙың пистолеттан атҡандай ҡаты шартлауы оҙата сәмлейәндәр даирәһен. Ҡыҙыл сәсле шағирҙыҡылай рух ҡылдары романтикаға көйләнгәндәре генә, “ҡара халыҡ уйыны”на иҫтәре китмәйенсә, ағын һыуҙай ике яндан йүгереүсе йәмле тәбиғәтте күҙҙән кисереп, ләззәтле хыялдар даръяһында йөҙәләр. Ошондайҙарҙың дауыл теләгән ҡаһарман тойғоларын аңлап, буғай, суднонан юл

ярҙыртыусы йәш рулевой уны йә ажғырмыш көслө ағын ҡосағынан үткәрә, йә ҡоторонҡо ташҡын аҫтында ҡалған, керпе һырттарылай тал остары ғына тырпайышҡан йәшерен утрау өҫтөнән алып бара, йәки кәмәнең тимер ҡабырғаһы менән яр киртләсе араһында әҙәм һыйырҙай ғына ара ҡалдырып, сая сағыл аҫтынан уҡ елдертеп алып сыға...

Судно морононда фанилыҡтарға битараф суфый йөҙлө, ярһаң ике кеше сығырлыҡ умарта кәүҙәле 45-50 йәштәрҙәге татар әбекәй, сәхнә шаршауылай яҫы итәгенә бешкән йоморткалар өйөп, шап та шоп ашанып ултыра. Муйынында финик-хөрмә емеше һөйәктәренән тишеп епкә теҙелгән оҙон тиҫбе. Күҙҙәрен инсафлы йомоп, алдан әрсеп әҙерләп ҡуйған нәүбәттәге йоморткаһын бер ҡабыуҙа юҡ итә лә, ирендәрен ҡыбырҙатып, йыуантыҡ ҡыҫҡа бармаҡтары менән тиҫбеһен тарта, әйтерһең, үҙен йомарт һыйлаған егәрле тауыҡтарына Аллаһы Тәғәләнән мул йоморткалы оҙон ғүмер теләй. Ә бәлки, тауыҡтары хатта иҫенә лә төшмәйҙер, кисәге Өфө баҙарындағы уңышлы сауҙаһын уйлайҙыр, ауылға барып өҫтәлмә табыш алырға хыялланалыр – ни тиһәң дә, сауҙагәрлек ене ҡағылмыш йәнгә оҡшай был әбекәй... Туйыныу йолаһын үтәгәс, итәге аҫтына бүртек ҡулын йүгертеп, бөрмәһенән керләнеп бөткән төйөнсөк һурып сығара, бәйен сисеп, яңяғына ялт-йолт ҡаранып, йомарланған ҡағыҙ аҡсаларын берәм-берәм тәңкләй ҙә, бармаҡтарына “лас!” төкөрөп, йәһәт һанарға керешә. Ҡәнәғәтлек кисереп, сепрәген ҡабат төйнәй, итәге аҫтына тыға. Эргәһенә сүгәләгән миһырбанлы бисә-сәсәгә итәғәтле вәғәзләй:

-- Донъя малы – дуңғыҙ ҡаны: кеше хаҡына кермәгеҙ, туғанҡайҙарым. Бер-берегеҙгә ярҙам итегеҙ, мәрхәмәтле булығыҙ. Изгелек ҡылыуҙан туҡтамағыҙ, тигән Мөхәммәт ғәлиәссәләм.

Пароход ярға ышҡылыпмы, шытыр-шатыр итә башлағас, ҡортҡа, аҙыҡ-түлеген йәһәт төйнәп, ҡурҡышынан күҙҙәре аларып, баяғы һиммәтле өс ир ҡанаты аҫтына йүгерҙе:

-- Туғанҡайҙарым, төкәлмәһәк кенә ярар ине, туғанҡайҙарым! Ауылға алып китеп барған сынаяҡтарымды селпәрәмә килтермәһен инде бер үк!

Илһамлы йән Поэзовский уны тыныслandырыу сараһын күрҙе:

-- Хөрмәтле гражданка, барын-юғын йөрәктән үткәрмәгеҙ, паника күтәрмәгеҙ. Һеҙ, күреп торам, бөгөн бик күп күләмдә аҡһым ҡабул ҡылдығыҙ, ә ашҡаҙан дөрөҫ эшләһен өсөн ныҡ һиллек, тәрән тыныслыҡ зарур.

-- Ҡайҙан килһен ул тыныслыҡ, алтын буталлы һауыт-һабаң ҡыл осонда ҡалғанда? Ауыл халҡы зарығып көтөп тора, нисек кенә илтеп еткерәм инде?

Теге икәүҙең әллә ни иҫе китмәһә лә, Джугашвили сәмләнде:

-- Батони мадмуазель, Өфөнән был тарафтарға йыш сәйәхәт ҡылаһығыҙмы?

-- Йә, шунан?

-- Һалған капиталығыҙ бер әйләнештә ни тиклемгә ырай, тим?

-- Аныһын үҙем беләм. Анауы иҫерек капитаны берәй бәләгә тарытһа, ырамай ҙа ҡуйыр әле.

-- Хаҡ һүҙ һөйләйһең, ҡортҡа. -- Тире-яры иләү белгесе лә әйләнеп баҡты. – Былтыр шулай Өфөгә етеп килгәндә генә йөҙ илле тунлыҡ һарыҡ тирем баржалары менән ҡуша йәһәндәм төбөнә зәмбөрләне...

-- Абау-абау! – Ҡортҡа, ирендәрен ҡыбырҙатып тиҫбе тартырға кереште.

Грузиндың ҡолағы “ҡарп!” итеп ҡалды:

-- Батони мадмуазель, үҙем һатып алайым да ҡуяйым уларығыҙҙы... сирек хаҡына булһа ла. Һеҙгә -- файҙа, миңә һауабы тейер. Кәмә батһа йә ҡаяға төкәлһә, юҡмышҡа сығасаҡ бит!

-- Аллам һаҡлаһын, Аллам һаҡлаһын!

-- Ә шулай ҙа...

-- Бүлдертмәгеҙ, Аллаһына ялбарһын! – Түҙемһеҙҙең еңенән тартты итәғәтле Поэзовский.

-- Эйе, тегендә ишетһәләр, беҙгә лә файҙаһы тейер, бәлки, -- тине бесәйҡойроҡ мыйыҡлы. Ләкин әбей тиҫбеһен онотто ла грузинға күҙен аҡырайтты:

-- Аҡылың алтын икән, кем... дүрткел мыйыҡ. Әйҙә, ризамын: минән биш хаҡына ал да ауылға барып алты хаҡына һатырһың.

-- Вай-вай батони, һинең аҡыл саф бриллиант икән дә!

Мыйығын һыпырғылап торған Садиҡов кәңәш бирҙе:

-- Һин, ҡортҡа, иң яҡшыһы, ошондағы ҡатын-ҡыҙға бушлай тарат ул тауарҙарыңды. Сәй яһап эскән һайын, тиҫбе тартып үҙеңә рәхмәт уҡырҙар. Ожмахҡа ла керерһең, бәлки... гонаһтарың ебәрһә.

Әбей ҡуҡыш күрһәтте:

-- Һин, аҡмыйыҡ, иҫәргә һанама мине! Буштың атаһы үлгән, ә Рәхмәттеке тыумаған! – Мөлкәтле тоғон һәм сөмкәһен һөйрәкләп, һөмһөҙҙәрҙең күҙ алдынан юйылды...

Ҡояш байый, донъя аҡрынлап ҡараңғылыҡҡа сума. Йылға битен болоттарҙың ҡуйы йәтмәһе ҡаплай. Тал төбө батҡаҡлыҡтарында илһамланып көн күреүсе сарбай тәлмәрйендәрҙең йыйылма оркестры көр аһаңле яҙ гимнын уйнап ебәрә. Туғай яғынан иркәләгән йомшаҡ ел танауҙарҙы муйыл сәскәһенең тәмле аңҡышы менән ҡытыҡлай. Талсыҡҡан пассажирҙар, тинтерәңләп, кластарға йоҡларға китә. Төн еләҫен яратыусылар ғына, палубалағы креслоларҙа йәйерәп, ярымйоҡо аралаш, ялҡау ғына әңгәмә менән мауыға.

-- Дә-ә-ә... Ҡайһындай ҙа заманаға тура килдек бит, дуҫтар, ә?! – Нескә лирик тонда башланы хыялсан ауыл шағиры. – Бынан ҡырҡ йыл ғына элек башҡортобоҙҙоң ерекмәне...

-- Крәҫтиәне, тип әйт! – тип бүлдерҙе тире-яры иләүендә әсә теленең күп һүҙҙәрен юғалтып, урыҫ терминдарында ғына эш итергә күнеккән тоҡостел Садиҡов.

-- Һин нимә, ағайым, суҡынсыҡһыңмы әллә? – тине Поэзовский.

-- Шөкөр, ата-баба динендәмен.

-- Алайһа ниңә һүҙемә арҡыры төштөң? Крәҫтиән тимәк – христиан тимәк бит ул, йәғни муйынына кресть тағып суҡынып йөрөүселәр.

-- Барыбер түгелме ни? – тине грузин. – Иптәш Сталин әйтә...

-- Ярай-ярай, ризамын, ерекмән булһын әйҙә! – тип бүлдерҙе Садиҡов уны. – Иптәш Сталинды илашып күмдек бит инде...

Поэзовский фекерен дауамланы:

-- Эйе... башҡортобоҙҙоң ерекмәне “Ҡара юрға” менән “Ҡуңалтаҡ ҡаталы аяҡ”тан ғәйре транспорт барлығын белмәй ине. Ҡара, ҡайһылай яңырҙы донъя! Аҙым һайын машина ла машина... күптәр ана шуны күрмәй шашына!

-- Белмәйем, кем башына? – Тире иләүселәрҙең дә эсендә йән барлығын, шағирлыҡтан әллә ни йыраҡ түгеллеген тумбытты бесәйҡойроҡ мыйыҡлы.

-- Эйе-е-е... Өфө урамдарында тиҙҙән аяҡ баҫыр урын ҡалмаясаҡ, барыһын машина яулаясаҡ.Әҙәм балалары, машинаға тейәлеп йөрөү “ғазабынан” ҡотолоу өсөн, тротуарҙар мөдиренә аҡса түләргә мәжбүр буласаҡ. Аңлатмаларҙа тап шулай яҙылыр ҙа: “Ватан” кинотеатрынан драмтеатрғаса йәйәүләп үтеү хаҡы – фәләнсә тин”. Шанлы баш ҡалабыҙҙа...

-- Шыттырырға мастак икәнһең, әй, кем... ағайым. – Татлы телмәргә көтмәгәндә әсе әрем ҡатнаштырҙы Садиҡов. – Шанлы баш ҡала тигәнкәйең әле булһа ауылса иҙерәй түгелме?

Фекер сынйыры ҡырт-өҙөлгән Поэзовский ҡыҙышты:

-- Һеҙ ҡайҙа йәшәйһегеҙ? Ышанмаһағыҙ, Өфөнөң Октябрь проспектына сығығыҙ! Юл бирмәй уҙышҡан йөҙәрләгән автомобилдәрҙе, ике яҡлап яңы төҙөлөштәрҙе, бөйөк Ленин бабай кеүек ҡулдарын һуҙып һерәйеп торған күтәреү крандарын күреп шаҡ-ҡатырһығыҙ.

-- Эйе шул, күтәрергә кирбес етмәгәс һерәйешеп ҡатҡандар...

Илһам даръяһында йөҙгән мәшһүр ерекмән шағиры Садиҡовтың әсе боросон ҡапһа ла абайламаны:

-- Белəһегеҙме, иптәштәр, һоҡланып бөтә алмайым мин ул егерменсе быуатыбыҙҙың ҡорос кран-великандарына! Күпме генә торһалар ҙа, арыу-талыуҙы белмәйҙәр! Нисәмә генә ҡарама, оҙон тимер ҡулдарын асманға һуҙып, Галактика йондоҙҙарын һәрмәп алырға йыйыналар...

-- Бер арала бер генә булһа ла кирбес алһындар ине лә бураға һалһындар ине!

Ләкин ауыл шағиры быны ла ҡолағына индермәне, баяғыса фекерен дауамланы:

-- “Тиреҫ ҡорттары соҡсонған Ер беҙҙе ҡыҙыҡһындырмай, беҙҙең эш анауы йондоҙҙарҙа!” – тиҙәр кеүек улар...

-- Әйтәм, төҙөлөш тресы йыл һайын планын үтәй алмай ҡойроҡта һөйрәлә -- шул сәбәпле икән! – Садиҡов, кеҫәһенән килбәтһеҙ оҙон баулы кесәтен сығарып, оҙонсалап киҫеп һалынған гәзит ҡағыҙҙарының береһенә тәмәке төрҙө. – Һин әйткән ул Ленин бабай ҡулдары, саҡ ҡына аҫка ла бөгөлөп, кирбес алып эшләп торһалар яҡшыраҡ булмаҫ инеме?

-- Юҡ! Кирбес – ваҡ нәмә! Бөгөлмәҫ Ильич ихтиярын хәтерләткән һындары ҡаҙерле миңә! Һис бер ниндәй антикоммунистик ел-дауылдар бөгә лә, һындыра ла алмаҫ уларҙы һәм уларҙың ҡулы аҫтында күкрәк киреп коммунизм төҙөүселәрҙе! – Тапмаһы тапҡан шағир, башын күккә салҡайтып, йән ярһыуы менән янып һамаҡлай ҙа башланы, янына кешеләр йыйылды. – Танылған ауыл шағиры булыуым менән бергә, Ватаныбыҙҙың ҡорос нигеҙен тәшкил иткән социалистик индустрияның да шөңгөр йырсыһы мин, тыңлағыҙ (“Ур-ра!” тип атала шиғыр):

Крандар, крандар,
Мәғрур ҡорос ҡорамдар,
Янаһа ла томандар,
Ҡоторһа ла бурандар,
Ильич һынлы тораңдар –
Бөгөлмөҫлек ҡоралдар!
“Ур-ра!” – Беҙҙең орандар!

-- Ура! Ура! – Дәррәү ҡул сабып алҡышланы бушлай кәмитте тамаша ҡылыусы бер килке шантрапа-асығауыҙҙар.

-- Рәхмәт, халҡым, рәхмәт! – Һары һалам эшләпәһен уттай ҡыҙыл башынан бер һалып, бер кейеп баш эйҙе сикһеҙ тулҡынланған илһам эйәһе. – Ошо ғорур алҡышлауҙай көр зауыҡлы туған халҡым менән зерә лә бәхетлемен!

Төбәгебеҙҙең баҙар юлдарын тапай-тапай башҡорт теленә лә шымарып алған грузин юлдашы ла бөйөк ауыл шағирының ҡойоп ҡуйған рифмаларын юғары баһаламайынса булдыра алманы. Ә йөкмәтке йәһәтенән саҡ ҡына хәүефләнде:

-- Батони, һеҙ, моғайын, иптәш Сталиндың даһилығы яҡтыртҡан бөйөк коммунизм төҙөлөштәрендә ял итеп торған крандарҙы фәҡәт байрам, йә ял көндәрендә генә күрәһегеҙҙер. Әйтәйек, урам буйлап демонстрацияла барғанда... Ҡалағыҙҙағы замананың ун биш ҡатлы небоскребтары ла крандар ҡатып тик торғанда ҡалҡына тип шәйләйһегеҙҙер...

Поэзовский юлдашының ҡолға кәүҙәһен ҡыҙғаныусан ҡарашы менән үлсәне:

-- Ғәфү итегеҙ, шағирәнә илһам наҡыҫлығы һиҙелә һеҙҙә...

-- Бәғзеләрҙең илһамы – анауы күн сөмкәһендә, ә бәғзеләренеке һалам эшләпә тишегендә, -- тип һөҙөмтәләне Садиҡов.

-- Бөттө-бөттө, еңелдем, бирелəм! – Джугашвили сөмкәһен йылы тәненә нығыраҡ ҡыҫты.

-- Ә һеҙ, оҙон мыйыҡлы ағай, шыр-пессимист икәнһегеҙ, был һүҙем өсөн шулай уҡ ғәфү итегеҙ, -- тине шағир, тире иләү белгесенә боролоп, түбәһендәге эшләпәһен ғорур ҡалҡыта бирең. – Кеше ғәли янаптары урынына эшләпәһен йә сөмкәһен күрәһегеҙ, ә үҙен күрмәйһегеҙ. Ярамай былай! “Человек звучит гордо!” – тигән бөйөк Горький.

Пессимист иһә артыҡ ҡарыулашманы.

-- Хәйерле төн, әләйһә. Әүен баҙарына китəм. Ҡырт боролоп, киҫте лә ҡуйҙы һәүетемсә ағылмыш әңгәмәне. Тупаҫ брезен плащын аҫтына түшәп, ике аҙым ситтәрәк палубаға һуҙылды. Кепкаһын битенә ҡаплап хырылдар алдынан, башын ҡалҡыта бирең, нәҡ Поэзовскийға төбәлеп яҡынлашыусы бәндәгә төртөп күрһәтте: -- Ана килә бөйөк Горькийыңдың ғорур человегы!

Шулай итеп, Садиҡовтың йылытып киткән креслоһы һыуынырға ла өлгөрмәне, Горькийҙың ғорур человегы оҙон боттарын алға тәртәләй һуҙып ебәреп ларҡайҙы. Өҫтөндә шаҡтай таушалған “септә” костюм, башына бейек йылтыр цилиндр кейгән, муйынына аҡборсаҡ төрткөллө ҡыҙыл галстук бәйләгән, көмөш биҙәкле сағыу таяҡҡа таянған, Сталиндыҡылай тар маңлайлы,

Лениндыңкылай өскөл профессор һаңаллы, Громыконыңкылай ҡара мөгөҙ тирәс күҙлекле 40 йәштәрҙәге аҫыл уҙаман ине был. Үҙенә хас сәйер еҫе лә бар ине.

-- Иҫәнме, ҡәҙерле тәүәриш кеше, ҡайһы тарафҡа тоҫҡалдың? – Тәүге сиратта Поэзовскиға ҡул бирҙе, һирәк һары керпекле бысыҡ күҙҙәрен керләнеп бөткән цилиндры аҫтынан сөкөрәйтеп.

-- Ауылға китеп барам. Һе!

-- Ғәфү итегеҙ, ни йомош?

-- Ни йомош булһа ла – беҙҙең эш! – Кире сирғылтты дуҫы өсөн көйәрмән Джугашвили.

-- Мин һеҙҙән һорамайым, йөҙөнән илһамы ташып торған зыялынан һорайым.

Яҡшы һүҙ – йән аҙығы, тигәндәй, илһамлыбыҙ шөйлә йомшара төштө:

-- Минең йомош, ағай кеше, илдәр гиҙеп йөрөү, күңел ынйылары тиреү.

Цилиндрлы ирекәйҙең күҙҙәрендә оҫкон уйнаны, шағирҙың эсенә инеп китерҙәй уҡтала бireп ҡуйҙы:

-- Һеҙ -- шағир, шулай бит? Исем шәрифегеҙҙе әйтегеҙ, зинһар, ап-аҡ күңел дәфтәремә һары алтын хәрефтәр менән теркәйем!

-- Донъялағы иң таныҡлы ауыл шағиры Поэзовский була ул, кем янында торғаныңды ла шәйләмәйһең! – тип киҫәтте грузин.

-- О! Поэзовский! -- Әҙәмкәй устарын ыуаланы. – Ысынмы был? Ысынмы был?!

-- Ып-ысын Поэзовский – атаҡайы менән әсәкәйе яһап биргән натураль көйө! –Шик ҡалдырманы грузин.

-- Таныш булайыҡ, таныш булайыҡ, ҡәҙерле тәүәриш кеше! – Шағирҙың ҡулын ут сығарырҙай ҡыҫып, ҡаршыһында тубыҡланды. – Шиғырҙарығыҙҙы йотлоғоп уҡыйым, күпме уҡыһам да туймайым! Зинһар, зинһар, автографығыҙҙы бирегеҙ!

-- Их әттәгенәһе, китабым ҡул аҫтында юҡ саҡ! – Ысын күңелдән үкенде шағир. Үтенеүсене ҡулынан һөйрәп алып, үҙ эргәһенә ултыртты.

-- Фамилияғыҙҙы усыма булһа ла яҙығыҙ, ғүмерем буйына юймай йөрөтәсәкмен!

-- Бына ул ысын шиғыр көсө! – тине Поэзовский, бая көфөр һөйләп хәтерен ҡалдырған Садиҡов тарафына хөкөм итеүсән ҡарап. Ҡуйын дәфтәрен сығарып, бер-ике юл һыҙғаланы ла, йыртып алып, үлеп шиғыр яратыусыға тоторҙо. – Кем булаһығыҙ үҙегеҙ?

Яуап биреҙҙән дә элек шағир ҡулын ҡушус араһына ҡыҫты:

-- Таныш булайыҡ, таныш булайыҡ шағирым, хөрмәтле тәүәриш кешем! Кем, тиһәгеҙ, башҡортомдоң аҫаба ғилем эйәһе, яңынан-яңы асыштар яһаусы уйлап табарман Йолҡоғужин буламын. Мин... мин...

-- Ғәфү итегеҙ, һеҙҙе фәндәр академияһының Башҡортостан филиалында осратҡаным булманысы... -- Ике ус араһындағы ҡулын көскә тартып алып, икенен дә йәһәт кеҫәләренә ҡасырҙы. -- Мәскәүҙең үҙендә эшләйһегеҙме әллә, тим?

-- Саҡырғайнылар ҙа ул... форсат ҡына сыҡманы. Хәҙергә Нуриман районында аҫыл мейе майҙарымды яндырам.

-- Кем булып?

-- Кем тип ни... иҫәп-хисап эштәренә етәкселек итәмен. Шул юҫыҡта йәғни математика менән механикала башым зерә лә шәп эшләй минең, хөрмәтле тәүәриш кешем.

-- Бына нисек! Тимәк, һеҙ – ауыл ғалимы?

-- Хәҙергә эйе... ауыл тотҡарлай мине...

-- Ҡайғырмағыҙ, Поэзовский ҙа иң шәп ауыл шағиры бит! – тине Джугашвили. – Шота Руставели ҙа ауылда тыуған.

-- Эйе шул, йүнле нәмә гелән ауылдан сыға! – Шәп фекерҙе ҡеүәтләне шағир. Яңы юлдашына әйләнеп ҡарап һораны: – Ни өҫтөндә эшләйһегеҙ һуң?

-- Колхоз малдарының продуктлылылығын киҫкен күтәреү өҫтөндә.

-- Бына бит ул! Һәм ниндәйен уңыштар?

-- Уңыштар күп, тик йылы ҡанат аҫтына алыусыларым ғына юҡ. Учреждение һайын тупаҫ бюрократ, йәки һөрһөп бөткән формалист сереткеле йоморткa баҫып ултыра, үҙенә кәрәкле себештәрҙе генә сипелдәтеп сығарта. Бөркөттәргә ҡанат кирергә хут бирмәйҙәр ҡоротҡостар...

-- Бына бит Иосиф Виссарионович Сталиндың юҡлығы! – Ысын күңелдән көйөндө Джугашвили.

-- ...Шуларҙың илтифатһыҙлығы арҡаһында, баш мейемде яндырып эшләгән нисәмә-нисә уйлап табыштарым танылмаҫтан, бөйөк коммунизм мәнфәғәттәренә хеҙмәт итә алмаҫтан һәләк булдылар. Улар донъя күргәндә, хөкүмәтебеҙ миллионлаған һум табышҡа ирешер ине. Һәм, иманым камил, мәрхүм иптәш Сталин үҙе юҫыҡлаткан коммунизм таңы ла иртәрәк атыр ине.

Илһамланып тыңлаған Поэзовский, ҡабаланып, ҡуйын дәфтәренә йәбеште:

-- Ниндәй табыштар улар? Һөйләгеҙсе, зинһар!

-- Минең уйлап табыштарым зерә күп.

-- Һис юғында бер-икеһе менән таныштырығыҙ?

-- Ғәзитегеҙгә яҙырһығыҙмы һуң?

-- Әлбиттә, әгәр лайыҡлы булһа.

-- Мин лайыҡһыҙ эштәр эшләгәнем юҡ! Коммунистик хеҙмәт алдынғыһы мин, значогым менән танытмам да бар! Бына, мәҫәлән, коммунизм төҙөүсе Ватаныбыҙ өсөн иң-иң зарури уйлап табыштарымдың береһе. – Йолҡоғужин ҡуйынынан тимгел-тимгел майлы таптар сыбарлаған, тоҙло балыҡ-селедканың йылтыр тәңкәләре йәбешеп ҡатҡан оҙон ҡағыҙ ярпыһы һөйрәп сығарҙы. Күҙҙәрен төймәләндереп, тауышын аҡрынайтып, донъяуи ҙур серҙе асҡандай әтте. – Быны мин һеҙгә, ҡәҙерле тәүәриш кешем, иң шәп ауыл шағиры булғаның өсөн сугубо рәсми рәүештә еткерәм – ғилми интервью тип яҙып сығарырһығыҙ. Һәм ышанам: коммунистик осло ҡәләмегеҙ илебеҙҙең киң йәмәғәтселеген тиңһеҙ ғилми асышҡа ылыҡтырыр. Шулай бит?

-- Әлбиттә, әлбиттә! Әйтеп бирегеҙ, зинһар!

-- Сығып өлгөрмәгән тауыҡ себештәрен үҙенең йоморткa ҡабығы эсендә консервалау аппараты был – егерменсе быуаттың тиңһеҙ ҡаҙанышы!

-- Вай-вай-вай, мандарин ҡабығы эсендәге татлы-һутлы долькалары кеүек ҡылыпмы? – Гутаута улын да сәмләндерҙе.

-- Тап үҙе! – Ғалимдың етек тырнағы аҫтына ҡара кер тулған һуҡ бармағы ҡағыҙҙағы иң эре тәңкәгә төртөлдө. – Бына ул – аппараттың иң мөһим узел-төйөнө! Ошоғаса ҡурылған һыйлы себештәрҙе ҡайҙан ғына алып ашап була ине?

-- Цыпленок-табаканымы?

-- Эйе.

-- Дөйөм туҡланыу дөкәндәрендә, әлбиттә.

-- Тап шулай! Ә был иһә коммунизм төҙөүсе бөйөк совет халҡының үҙенә лайыҡлы тәмле туҡланыу ихтыяждарын сикләй. Һеҙ атаған дөкәндән сығып киттегеҙме – тәмле себештәрҙән ҡолаҡ ҡағаһығыҙ. Юлға төрнәп алғанығыҙ тәүлек эсендә боҙола. Ә беҙҙең сәйәхәтселәр бит социалистик цивилизацияның сәскә атҡан дәүерендә йәшәйҙәр, бына-бына коммунизмға ла барып кереҙәр. Тимәк, иң тәмле ҡурылған себештәр ҙә, ҡайҙа ғына йөрөһәләр ҙә, уларға лайыҡлы булһын! Иң эҫе Сахара сүленең уртаһында ла, мәңгелек боҙло ҡотопта ла һин уларға кулинария сәнғәтенең иң күркәм әҫәрҙәрен бир! Һәм ул мең йыл буйынса ла боҙолмаҫлыҡ, үҙенең күркәм тәүтәмен һаҡларлыҡ консерваланған булһын! Бына мин шуны, һис бер металл-ҡалай ҡулланмайынса, социализм экономикаһына ярашлы иң арзанлы ысул менән кәнсирләүҙе хәл иттем.

-- Батони, кәнсир ҡалайһыҙ ҙамы?

-- Кәнсир ҡалайһыҙ ҙа!

-- Һмм... әтнәкә вопрос... – Аптырап елкәһен ҡашығайны шағир, эшләпәһе төшөп китә яҙҙы.

-- Бер ниндәй ҙә әтнәкәһеҙ! – Ҡырт-киҫте ауыл ғалимы, коллегаһы ауыл шағирының эшләпәһен уның башына баҫыбыраҡ кейҙертеп. – Донъялағы бөтә бөйөк асыштар ҙа ябай ғына хәл ҡылына.

-- Һммм... Ҡалай ҙа кәрәкмәгәс, нимә эсендә консерваламаҡ булаһығыҙ һарыҡай себештәрҙе?

-- Әйттем бит: йомортҡаның үҙенең эсендә!

-- Вай-вай-вай...

-- Бер ниндәй ҙә вай-вай юҡ. Минең ысул ябай ғына өс алымдан ғибәрәт: беренсе – инкубаторҙа йомортҡа эсендә себеш яралдыртыу; икенсе – себеште, ҡабығын тишеп сыҡмаҫы борон, юғары температурала ҡабығы эсендә ҡурыу; өсөнсө – шул ҡабығы эсендә ҡурылған себешле йомортҡаның тышын, һауа үтмәҫлек итеп, полиэтилен яры менән ҡаплау. Арзан, уңайлы, файҙалы. Бындай деликатесты сит илдәргә -- донъя баҙарына сығарып була.

-- Ай-һай, ашарҙармы икән? – Ерәнесенән йөҙөн һытып шикләнде һары лимондар иленең гурманы.

-- Ашарҙар, өйрәтербеҙ. Француздар – баҡаны, бедуиндар сиңерткәне яратып һоғона бит. – Уйлап табыусының күҙҙәре ашҡынып ялтыраны. -- Әгәр минең аппаратты донъя күләменә сығартһаҡ, лицензия һатып ҡына ла Тыуған илгә миллиардлаған һум табыш килер ине. Тотҡарлайҙар шул, тотҡарлайҙар, әпсәләрен фәләп иткерҙәре...

Социалистик ауыл хужалығына туранан-тура ҡағылышлы өр-яңы асыштың даһиҙарса ябайлығынан һәм бөйөклөгөнән һыны ҡатып хискә бирелгән ауыл шағиры, ниһайәт, уянып, ҡала ситендәге өс аҙымлыҡ баҡсаһында көрәк тотҡолап һөйәлләнгән көрәк ҡулын туғандарса ғалим яурынына һалды:

-- Бирешмәгеҙ, ҡәҙерле Йолҡоғужин иптәш! Мин был эште былай ғына ҡалдырмам, төбөнә тоҙ ҡойормон. Матбуғатта шаулатып яҙып сығырмын. Бәлки, поэма ла тыуыр әле. Талантлы ауыл инженерын ҡыҫыусылар тейешле язаһын алыр. Тыныс булығыҙ.

Исем-фамилияһы, иҫ киткес яңы йыһаз хаҡындағы белешмә ауыл шағирының ҡуйын дәфтәренә ҡалын хәрефтәр менән мөһөрләнде.

-- Ни... кем ағай, әжерен ҡасанырағ күрербеҙ икән?

-- Аңламайым.

-- Тити-мити-финти тигәнем инде... хе-хе-хе! -- Уйлап табыусы еткән тырнаҡлы бармаҡтарын бер-береһенә ыуаланы. – Шағирәнә телегеҙҙә гонорария тиҙәрме шуны...

-- Гоноррея тимәксеһеңме? Йәки сифилис? – Дүрткел мыйыҡ эйәһе ауыҙын ҡыйшайтты.

-- Әллә тағы, тити-мити-фитийе булһа, нимә генә тип атаһалар ҙа, минең өсөн барыбер.

Ауыл шағиры, абруйлы ҡиәфәт алып, аталарса аңлатты:

-- Гонорары уның, туған, тиҙ-тиләмә татымаҫҡа ла мөмкин. Бына мин, мәҫәлән, баллада тиклем балладамды ташҡа баҫтыртып та, бал тәмен татығаным юҡ әле. Дөрөҫөн генә әйткәндә, был асышың, ни ҡәҙәре генә бөйөк булмаһын, ауыл хужалығынан да бигерәк, ҡалаға -- промышленноскә бәйле. Ә һин, уҙаман, хеҙмәтеңдең емештәрен тиҙерәк ейергә теләһәң, ылғый ауыл хужалығы мәсьәләләрен иңлә. Әйтәйек, минең өсөн, ауылыма йән атып йәшәгән ауыл шағиры буларағ, ауыл хеҙмәтсәндәренең көндәлек эшенә еңеллек кереткән асыш бик танһығ булыр ине...

Уйлап табыусының күҙҙәре йәшкәҙене:

-- Их! Мин бит тыуа-тыуғандан уҡ шул проблеманы сисеү өҫтөндә эшләйем! Бына, ҡарағыҙ! – Ҡуйынынан икенсе бер ҡағыҙ төргәген сығарып, шағирҙың алдына һалды. Поэзовский ала мөгөҙ тирәсле күҙлеге үтәләй күпме генә тексәйһә лә, һис ни аңлай алманы.

-- Ниңәлер күҙ күрмәй башланы бит әле, әллә ҡартайыла инде... – тигән булды, күҙлек быялаларын эре шаҡмаҡлы ҡулъяулығы менән һөрткөләп.

-- Их ағай! Был чертежда һеҙ әйткәндең тап үҙе – ***һуңғы тамсығаса*** һөт һауып алыу аппараты тасуирланған. Был ғәжәйеб машина өҫтөндә мин теүәл ун йыл эшләнем. Һәм ул минең Тыуған илде яңынан-яңы еңеүҙәр менән данлаясаҡ капитал хеҙмәтем, белегеҙ шуны! – тип ярһыны Йолҡоғужин.

-- Эһеммм... ни бит, кинотаҫмаларҙан күреп белеүебеҙсә, колхоз фермаларында һыйырҙы заманса автоһауғыстар менән ғөрләтеп һауалар. Һеҙҙең машина ни яғы менән айырыла?

-- Иғтибарлыраҡ ҡарағыҙ, ҡәҙерле тәүәриш кешем. Бығаса уйлап сығарылған так называемый автоһауғыстар ҡыҫылған һауа ярҙамында эшләйме?

-- Уныһы шулай.

-- Тимәк, двигатель, компрессор, баллондар, торбалар һәм тағы нисәмә әллә нәмәләр кәрәк. Ә минең асышта уларҙың береһе лә хәжәт түгел.

Һуңғы мәғлүмәт тыңлаусыларҙың икеһен тиң аптырашта ҡалдырҙы:

-- Вай-вай, нисек эшләй уларһыҙ? Ен-бәрейҙәрҙе егәһегеҙме әллә?

Йолҡоғужин кеткелдәп көлдө:

-- Тап шунда ла инде эштең хикмәте, ҡәҙерле тәүәриш кеше! Машинамда сихри көстәрҙе түгел, ә һәүкәштең үҙенең мускул ҡеүәтен ҡулланам.

-- Абба! Башҡорт дуҫтар әйтмешләй, йүкәлә икән лимон! – Ҡолға буйлы әҙәми зат креслонан оҙон аяҡтарын һуҙып, кәүҙәһен салҡайтып кирелде.

-- Ысынлап та, башҡа һыймаҫлыҡ бит был! – тине шағир.

-- Һыйҙырһаң, һыя ул, иптәш кешем! Минең аппарат ыҡсым – һауын һыйырының елен тәңгәленә беркетелә лә ул һыуалғансы ҡала. Күрәһегеҙме бынауы ике рычагты? Һәүкәшкәйебеҙ атлағанда бото менән этәреп, үҙенең мускул энергияһын бирә -- аппаратты эшләтә. Тимәк, һыйыр көтөүҙә йөрөгәндә лә имсәктәрҙе өҙлөкһөҙ һауыу процесы бара, һуңғы тамсы һөт һыйыр арҡаһындағы һауытҡа һауып алынып тора. Тулыу менән көтөүсе уны арбаһындағы рифлережатор-цистернаға тултыра, һөт ташыусы уның тулған берен алып китеп тора...

-- Һеммм... Һыйыр ятҡанда нишләй?

-- Ҡәҙерле тәүәриш кеше, әгәр һеҙ техник яҡтан саҡ ҡына мәғлүмәтле булһағыҙ, бындай һорауҙы бирмәҫ инегеҙ. Бынауы ыҡсым аккумулятор ни өсөн ҡуйыла һеҙҙеңсә? Тап шул миҙгелдә изге эшкә егелеү өсөн түгелме ни?!

Сәсрәп китмәгере Джугашвили шағир ейгән тәмле ашҡа тараҡан ташлай яҙҙы:

-- Батони, Мәскәүҙәге артист Аркадий Райкиндан ишеткәнем бар ине кешеләрҙең бот араһына беркетеп ебәрмәле тап шундай аппаратты...

-- Ул идеяны Аркадийға мин үҙем бүләк иттем! – Дүрткел мыйыҡлының ауыҙын салт яптыртты Йолҡоғужин.

-- Дәәә... Ғәжәп үҙгәйле асыш. Бына ниндәй таланттарға бай башҡортомдоң ауылы! Бер-бер артлы тыуып ҡына торалар!

Тупаҫ брезент плащы өҫтөндә битенә кепкаһын ҡаплап, бер ни белмәй тамағын шарылдатҡан тире иләү белгесе башын ҡапыл ҡалҡытып:

-- Сүп-сарҙы һөрмәйҙәр-сәсмәйҙәр – үҙҙәре үҫә улар! – тине лә, икенсе ҡабырғаһына әйләнеп ятты. Һарыуы ҡайнаған Йолҡоғужин ауыҙына тулышҡан һүлен брезент плащ яғына атырға иткәйне лә, грузиндың да гөрзә йыландай текләүен абайлағас, кире уйлап йотоп ебәрҙе, йәһәт кенә ҡалҡынып, Поэзовскийға өндәште:

-- Туғаным, һөйөклө иптәш кешем, һәүетемсә иртәгә осрашырбыҙ, йәме?. Тыныс йоҡо һеҙгә! – Һәм палуба аҫтындағы әҙәм балалары менән тулы серле төпкөлгә сумып юғалды.

-- Тыныс йоҡо! – тип ҡалды күңеле тулышҡан ауыл шағиры, хисләнеп, үҙ алдына һөйләнде. – Талантлы ғалим һәм ҡыйыу новатор был инсан! Һис шикһеҙ, һис шикһеҙ!

-- Шыр-яланғас шарлатан! – тип төҙәтте дуҫы Джугашвили. Ләкин зирәк юлдашының хаҡ-баһаһы илһам эйәһенә барып етмәне. “Бит Ломоносовтар, Кулибиндар ҙа ябай ерекмән ғаиләһенән үркегән. Урындағы етәкселектең тарихи фактҡарға иғтибар итмәүе бик аяныс. Ләкин мин дә бар әле: күкрәп ҡалҡҡан талант эйәһен быуып ташларға юл ҡуймам!”

Ун биш минут үткәндерме-юкмы, палуба аҫтына сумырыусы йотколоктан, алаң-йолаң ҡаранып, талант эйәһе тап үҙе килеп сыҡты ла шағирға тоҫкалып укталды. Өскөл профессор һаҡалының осонда тоҙло балыҡ тәңкәләре йылтырай, ауыҙынан арзанлы “Тройной” одеколон зәхмәте аңҡый ине. Көтмәгәндә “лөһөр!” итеп тубыҡланды ла һалам эшләпә эйәһенең тубыҡтарына башын һалып һулҡылданы:

-- Һеҙҙән башҡа кемгә генә барып морон төртәйем, иптәш кешем?! Оло идеялар менән лыҡама тулы башҡайымды кемдең күкрәгенә терәп үкһейем? Ошоғаса осраған һәр бере – йә һыуыҡ ҡанлы подлец, йә тупаҫ бюрократ ине...

-- Был ни хәл, тороғоҙ, тороғоҙ! – тине шағир, ырғып тороп, һулҡылдаусыны аяҡтарына баҫтырҙы. Йолҡоғужин “һә!” тигәнсе үк тынып, фажиғәле киҙәнеш менән таба сепрәгеләй ҡара ҡулъяулығын яңаҡтары буйлап йөрөттө, мөлдөр-мөлдөр тәгәрләгән бөрсөк-бөрсөк күҙ йәштәрен һыпырҙы. Ҡыҙғаныс һәм имәнес тауыш сығарып, борт тышына ҡат-ҡат танау һеңгерҙе. Күрәләтә уйналған был трагедияны нескә шағир күңеле күтәрә алманы:

-- Тынысланығыҙ, зинһар, улай өҙгөләнмәгеҙ! – Үҙе ла иламһырап, меҫкенйәнде иңбашҡайынан яҡын дуҫтарса ҡосто.

-- Һөйөклө тәүәриш кешем, һеҙҙең ат башындай оло йөрәгегеҙҙә башҡортомдоң быуаттар буйынса типкеләнгән улдары өсөн әрнеү, ҡайнар мөхәббәт ялҡыны дөрләүен беләм! Тауҙай ғилми эштәремдән арынып ял иткән һирәк минуттарымда, хатта ҡабыр һынығымды ла онотоп, бына ошо ҡулдарыма һеҙҙең тылсымлы шиғри мәжмүғәләрегеҙҙе алам да ынйы бөртөктәреләй теҙелгән тылсымдарығыҙҙы керпек ҡаҡмайынса йомолоп уҡыйым, яңынан-яңы ғилми подвигтарға рухландыра улар мине. Хәҙерге ҡайһы бер әҙиптәребеҙ тарафынан оятһыҙ ситкә тибәрелгән һәм онотолған бөйөк гуманизм тойғолары ҡанат ҡаға һеҙҙең ул ынйыларҙа. Беләм, ***һеҙ ул*** донъялағы иң ҙур гуманист –яҡыны өсөн һуңғы ыштанығыҙҙы һалыу ғына түгел, йәнегеҙҙе йолоп бирергә лә әҙер! – Йолҡоғужин, әҙәпле әҙиптең үҙен маҡтауға ҡаршы әйтергә йыйыныуын салт шәйләп, буғай, шәп-шәп атлап китеп барҙы.

Поэзовскийҙың күңеле уғата ирене. Һәм ул, креслоһына ҡабат әүшәрелеп, хыялдарға бирелде. Бына ул бюрократтар тарафынан ҡыйырһытылған талант эйәһен аталарса етәкләп, баш ҡаланың Академия ҡапҡаһынан индереп ебәрҙе. Унан үрнәк алып, Пегас ҡыуысы башҡалар ҙа бөтә республика төпкөлдәренән бығаса билдәһеҙ күмелеп ятҡан ауыл ғалимдарын баш ҡалаға етәкләп килтерә башланылар, шул яңырыш арҡаһында республиканың ауыл хужалығы машиналары төҙөү сәнәғәте ҡырҡа күтәрелеп, ауыл менән ҡала тигеҙләнде; яңы ысул һауын аппараттары ауыр эштән арындыртҡан һауынсылар яңы ысул менән себештәрҙе йомортҡаһы эсендә ҡурып консервалау һөнәрен үҙләштереп, таҡыр асфальт юлдарҙан таҙа цехтарға эшкә йырлап ҡына йөрөй башланылар; бөтә донъяға татлы себеш консервалары һатып байыған социалистик ауыл яҡты коммунизм ҡапҡаһынан дөбөрҙәп барып керҙе...

Әллә судно, ташҡын Симдең шаян тулҡындары өҫтөндә аунаҡлап, бишектәге сабыйҙай рәхәт тирбәлдерткәнгә инде, әллә төнө әкиәттәгеләй ҡараңғы, серле булғанғамы, хыял менән ғәмәл араһындағы нескә офоҡ юйылып, шағирға был фантазияһы ысынбарлыҡ булып күренә башланы. Иләҫ-миләҫ килеп тамам

күңеле һөйкөмлөләнеүҙән тулышып китте лә ул, күкрәген күмеп барған лирик тойғоларҙы тышҡа ағылдыртыу өсөн, ян-яғына боролоп серҙәш эҙләне, ләкин башын кресло арҡаһына һалып йоҡлап ултырған юлдашы Джугашвилиҙан башҡа уны тыңларлыҡ йән эйәһе юҡ ине. Әммә, бирәм тигән ҡолона – сығарып ҡуйыр юлына, тигәндәй, яҡында ғына тамаҡ ҡырыу ишетелде лә, көллө ҡиәфәте бесәй тырнағынан ысҡынған турғайҙыҡылай йолоҡҡоланып, ҡыҙғаныс хәлгә төшкән Йолҡоғужин пәйҙә булды; артында, бикле буфет стенаһына һөйәлеп, һәлендертеп арыҡ селедка ҡойроғо тотҡан шешәләше тора көтөп.

-- Сәләм бөйөк гуманиҫка, намыҫлы тәүәриш кешемә! – Алыҫтан уҡ алҡышланы ғалим шағирҙы, фалиж-паралич һуҡҡандай, башын сәйер һерелдәтеп; ауыҙынан зәхмәт еҫтәрен борхотоп, Поэзовскийҙың эргәһенә һалып торған һары һалам эшләпәһе өҫтөнә ларҡайып ултырҙы, бәхетһеҙ баш кейеменең хужаһы иғтибар итмәне быға. Ни өсөн, тигәндә, ауыл ғалимы ауыл шағирын үҙенең өр-яңы асышы менән шаңҡытты:

-- Ҡәҙерле тәүәриш кешем, һөйөклө шағирым минең! Күңелемә һеҙ ҡуйып ебәргән изге-тылсымлы ҡанаттарҙа илһамият донъяһында елпенеп, данлы ауыл хужалығыбыҙға егерменсе быуат ҡаҙанышы булырҙай икенсе бер ҡулланма уйлап таптым!

-- Йә-йә-йә! Ни нәмә ул?! –Хатта ырғып тора яҙҙы сикһеҙ сәмләнгән Поэзовский. Үҙәшмәкәр инженерҙың биш ботлоҡ оса баҫымы аҫтынан көлсәләй ләпәшкән эшләпәһен тартып сығарырға итһә лә, уңышҡа өлгәшә алмай, яланбаш ҡына килеш тыңлап бөтөрҙө.

-- Колхоз-совхоз малдарына “Аппетит ҡуҙғалтҡыс окуляр” – бына нәмә ул ҡәҙерле тәүәриш кешем! – Тоҙло балыҡ тәңкәләре ҡатыш йәбешкәкләнеп тирләгән ике усы араһына ихласйәндең көрәктәй ҡулын ҡыҫтырып алып, бәйнә-бәйнә бәйәнләүенә ҡарағанда, яҡшы бесән төҫөндәге йәм-йәшел быялалы күҙлектәрҙән һәм “тәмле еҫ тоҡсайы”нан ғибәрәт икән ул мөғжизә. Йәшел күҙлекте һәүкәшкәйгә кеҙертеп, “тәмле еҫ тоҡсайы”н мороно өҫтөнә беркетәһең дә, тоҡсай эсенә тоҙло һыуҙа ебетелгән бойҙай күмәсе ҡатыларын тултырһаң, һөңгөмөгөҙ мәхлүкйән, йәшел быялалар үтә ымһынып, серек һаламды ла нәҡ тоҙло бойҙай күмәселәй төрөп-төрөп тығасаҡ икән тамағына...

-- Горлопан, сколько можно?! Приступи! – тип түҙемһеҙләнде, ҡулындағы селедка ҡойроғон супылдатып һурып тороусы әшнәһе. Йолҡоғужин асылы ҡул һелтәне:

-- Заткнись, свистун!

Мауыҡтырғыс әңгәмәнән уйы-зиһене бығауланған Поэзовский был икәүҙең әйтешенән саҡ ҡына албырғанды:

-- Ә?! Кем ул?

-- Ассистентым, әлеге яңы асышымды тиҙерәк чертежға һалырға саҡыра.

-- Аңлайым, -- тине Поэзовский, кинәнеп. -- Изге эште һуңлатырға ярамай. Хәҙерге колхоз-совхоз малдарының март башынан уҡ ашарҙарына бөтөп күтәртеүҙәрен иҫәпкә алғанда, данлы ауыл хужалығыбыҙға икһеҙ-сикһеҙ экономия килтерәсәк был яңылыҡ!

-- Ә мин ни тылҡыйым һуң?!

-- Сүбек тылҡыйһың, буғай, әрһеҙ тәүәриш кеше! – Йоҡоһо оҫкан Джугашвили яуапланы.

Тулы көсәнә эшләгән дизель тракторылай тауыш сығарып ятҡан Садиҡов та кинәт тынып ҡалҡына бирҙе лә яңылыҡ уйлап табыусыны күҙҙәре менән айҡаны:

-- Тимәк, һинеңсә, сихриәтле приборың ярҙамында ферманың ас һыйырҙарына ҡыш буйынса серек һалам, күгәргән бесән, йәки ағас юнышҡыһы ашатып аҫырап була?

-- Тап шулай, тап шулай, иптәш кешем!

-- Алайғас, дәүләткә тапшырыр алдынан мал-тыуарҙы ҡар ғына ялатып һимертергә лә булалыр?

-- Башыңды эшләтә белһәң, әлбиттә, тәүәриш кешем!

Садиҡов, донъяның ҡотон осороп, тамаҡ төбө менән оҙаҡ итеп ғыжылдап йүтәлләне:

-- Һинең үҙеңде, күҙлектәреңде кейҙертеп, шул ҡарға ҡушып ҡуйырға кәрәк ине -- әрәм тамаҡтар кәмер ине, исмаһам! – Джугашвили хахылдап көлгән арала кәйефһеҙҙең башы ҡабат яҫтауына терәлдә лә танау тишектәрен һыҙғыртып буран уйната башланы.

-- Ниндәй тупаҫлыҡ, ниндәй тупаҫлыҡ! – Ҡыҙғаныслы һулҡылданы инженер. Ике юлдашының тупаҫлығы өсөн унан ғәфү үтенергә йыйынып, үкенесле баш сайҡаны шағир. Ләкин ошо миһырбанлы ынтылышын буфет ҡырындағы “ассистент”тың әсе һыҙғырыуы бүлде, шул ыңғайҙа Йолҡоғужин, электр тогына ҡағылғандай тартышып, салбарынан билбауын һурмаҡланы:

-- Юҡ! Бындай тупаҫлыҡты күтәрә алмайым – барам да анауы мачтаға аҫылынам! Күрһәндәр кемдең кем икәнен! – Меҫкен ауыл шағирының ҡурҡып ағарынған йөҙөнә ҡарап, күрмәлекле өҫтәне: -- Ҡайыш билбауым менән – Сергей Есенин кеүек!

Һуңғы йөмлә Поэзовскийҙы бигерәк тә тетрәтте, ырғып тороп, шыңшыусыны ҡосаҡланы:

-- Ҡуйығыҙ, зинһар, улай итә күрмәгеҙ! Алтын идеялар менән тулы аҫыл башығыҙҙы харап итмәгеҙ, үҙебеҙҙең социалистик ауыл хеҙмәтсәндәре хаҡына!

Йолҡоғужин шыңшыуынан ҡырт-тымды:

-- Ярай, аҫылынмайым, әләйһә, ***тик һеҙҙең хаҡҡа ғына!*** Һәм әлеге асышымды һеҙҙең исемгә арнайым!

-- Ну мудак, сколько можно тебя ждать?! – тип ашыҡтырҙы “ассистент”. Шул ыңғайҙа Йолҡоғужин ауыл шағирының еңенән эләктерҙе:

-- Туғаным, ҡәҙерле иптәш кешем, үҙегеҙҙең исемгә арналған ҡулланманың чертеждарын һыҙып бөтөрөү өсөн стандарт ватман ҡағыҙы кәрәк бит әле...30 һум ғына бирер тормаҫһығыҙмы?

Илһамиәт эйәһе, бал тип әсеүташ ҡапҡандай, әскелтем-сөскөлтөм йылмайҙы:

-- Ни... былай бит әле... юллығыма етеңкерәмәҫ тип торам бит әле...

Йолҡоғужин, сыҫканын ысҡындырып ебәреүҙән хәтәр ҡурҡҡан бесәйҙәй, ҡорбанының еңе үтә беләген ҡыпҫыуырлап, ныҡыны:

-- Һис юғында 10 һум ғына...

-- Ни... баяғы...

-- Чорт с два, хотя бы пять рубликов! – тип ҡыҫылды “ассистент”ы.

-- Эйе, биш һум булһа ла бирегеҙ, гонорарияға тиклем генә!

Беләгенең ауыртыуы үҙәгенә үткән шағир күҙҙәрен сытырҙата йомоп ыңғырашты:

-- Уй-уй! Мәгеҙ, черт с вами! Ысҡындырығыҙ, зинһар!

-- Пож-жалыста! – Бишлек ҡағыҙҙы йомарлаған Йолҡоғужин ашығып китеп барҙы, көтөп торғаны менән палуба аҫтына сумғандарында алсаҡланып көлөшөүҙәре ишетелде.

-- Бына һеҙгә “чорт с два”! – тине Джугашвили. Поэзовский өндәшмәне, сөнки чертеж һыҙырлыҡ та матди сараһы ҡалмаған талантлы ауыл зыялыһының үргә ҡалҡыныу юлдарының ни ҡәҙәре сутырмаҡлы икәнлеген уйланы, үҙенең шиғриәт юлындағы тормош тәжрибәһе менән тиңләне. Яҫы маңлайын еңе менән һөртөп, креслоға ултырҙы. Матди ауырлыҡ кисергән талантлы ауыл ғалимына тейешле ярҙам күрһәтә алмағаны өсөн кәйефе ныҡ ҡырылды.

Өфөгә терәлеп торған Черниковск биҫтәһендә социалистик удар төҙөлөш – моторҙар эшләү заводын ҡороу иғлан ителгән бит бер заман. Буласаҡ шағирҙың ҡыйыу комсомолец атаһы төпкөл Бөрйәненән арҡаһына бер бөтөн икмәк, ике баш ҡорот һалынған киндер биштәрен артмаҡлап килеп, шунда урынлашҡан да, сарҡылдаҡ татар мәрйәһенә өйләнеп, асфальтҡа тамырланған, буласаҡ Минһажитдингә лә шул саҡ нигеҙ һалынған...

Баш ҡала заводтарының береһендә токарь станогы эргәһендә ҡоростай сыныҡҡан йәшлеген, муза ерлегенә баҫҡан тәүге шөңгөр аҙымдарын хәтерләне ауыл шағиры. Әҙәби гәзиттең ул саҡтағы редакторы яғымлы, оптимистик кеше ине. Йөрәге дарҫлап ҡағыуынан аяҡтары ҡайҙа баҫҡанын тоймай тулҡынланып, беренсе шиғыры менән килгән “эшсе шағир” Поэзовскийҙы (ул ваҡытта әле ябай ғына Минһажитдин Баһауитдиновты) ҡосаҡ йәйеп ҡаршыланы ул, сөнки “эшсе синыфтан сыҡҡан йәш таланттарға юл асырға!” тигән шиғар ифрат модала ине. Хәтерҙә, ҡала үҙәгендә яңы йорт һалған удар ташсыларҙы данлай ине шиғыры. Уҡып сыҡҡандан һуң уйланып ултырҙы-ултырҙы ла:

-- Илһам еле бар-барын, ләкин ысын ҡала еҫе аңҡымай. Станоктар шауы юҡ, сабаталы крәҫтиәндәрсә фекер йөрөтәһең, -- тине редактор. – Тиреҫ еҫе еҫкәп үҫтеңме әллә?

-- Юҡ, атайым ғына Бөрйәндән сыҡҡан.

-- Бына бит ул – гендан килә ауылсанлыҡ!

-- Ни эшләйем икән һуң, ағай?

-- Бына былай итәйек. – Редактор ҡәләме шиғырҙы, строфа һайын “ҡала еҫе” аңҡытып, шар-шорт төҙәтеп сыҡты. – Уҡып ҡара ла әйт: ризамы?

-- Риза! – тине Минһажитдин Баһауитдинов.

-- Ипле икәнһең, ҡустым. Тыңлап ҡына йөрөһәң, эшсе шағир яһармын һинән. Ә эшсе шағир ҡайҙа йәшәй – ҡалала. Һинең исем-фамилия иһә, таш ҡалала тыуып үҫһәң дә, ылғый бөрйәнсә яңғырай. Өҫтәүенә, шағирәнә лә түгел. Эшсе синыфына лайыҡлы шағирәнә фамилия йәғни псевдоним уйлап табайыҡ.

-- Һеммм... нимә тип икән, ағай?

-- Шағирәнәнең иң еллеһе – “Поэзовский” була ул, ҡустым. Килешәһеңме?

-- Әлбиттә!

-- Тимәк, бынан һуң һин ауылдағы олатай-оләсәйеңә генә Минһажитдин Баһауитдинов. Ә әҙәбиәт баҡсаһында – эшсе шағир Минһаж Поэзовский рәүешле сәскә атырһың!

Гәзиттең нәүбәттәге бер һанында Поэзовский, сикһеҙ хозурланып, үҙ ғүмерендә беренсе тапҡыр ташҡа баҫылған яңғырауыҡлы исемен һәм әҫәрен йотлоғоп уҡыны. Әлбиттә, шиғыр шаҡтай ҡыҫҡартылған һәм, авторҙың егәрле ташсылары урынына, тәүге нефть ятҡылыҡтарын бураулаусыларҙы данлай ине. Әммә был әллә ни борсоманы авторҙы. Иң мөһиме – ижад емеше ташҡа баҫылып сыҡты.

Бара-тора ул редакторының бүтәндәргә сәйер тойолған әҙәби зауҡына күнегеп һәм ярашып, хатта түрәһенең бөгөн иртән йоҡоһонан ҡайһы аяғы менән тороуына ҡәҙәр һиҙгер тойомлай башланы. Башҡортостан тупрағы тыуҙырған иң һәләтле йәш шағир итеп һанаҡы Минһаж үҙен һәм, халыҡ рухын әҫәрҙәре менән даими байытыр өсөн, эшләгән станогын, заводын ташлап китте. Шиғырҙары өсөн гонорар алғаны һайын, редакторы менән бергә ултырып уңышын “йыуҙы”. Бисәһенән йәшенеп кенә ресторанда типтереп йөрөгәнендә, үҙе кеүек үк шиғри күңелле Лола менән бәйләнеп, ябай эшсе егет сағында һөйөшөп ҡауышҡан Ғәзимәһенән дә арынды – нескәлекле шағир күңеле ҡырыҫйәндең: “Әрәм тамаҡланып өйҙә ятаһың, ҡағыҙ бысратаһың”, -- тип битәрләүҙәрен кисерә алманы. Лоланың иһә ҡосағы ла ҡиң, шиғриәткә мөхәббәте лә аҡса яҡсығына тиң ине. Йәш кәләштең ошо яғымлы сифаттары Поэзовскийҙа ялҡынлы илһамды көнләп түгел, ә сәғәтләп ләүкетте. Тәүлегенә хатта ун биш шиғыр яҙған саҡтары ла булды. Әле һаман “йәш шағир” тип йөрөтһәләр ҙә, яңы заман башҡорт әҙәби ғәскәренең үткер ҡәләмле яугире итеп һанаҡы үҙен.

-- Маладис! Әгәр шулай мин әйткәнде генә тыңлап йөрөһәң, ҙур поэзия сфераһына сығасаҡһың! – ти торғайны редактор, ҡушҡан һәр бер темаға шунда уҡ шиғыр әтмәләп килтереүсе уҙамандың яҫы иңбашынан аталарса ҡағып.

Бер мәртәбә ул, махсус кеше ебәреп, Поэзовскийҙы саҡыртып алды ла, арҡаһынан һөйөп, былай тине:

-- Ҡустым, изге сәғәтең һуҡты – гендарыңа тулы ирек! Бөгөндән башлап ***ауыл шағирына*** әүереләһең.

Поэзовский албырғанып-ҡаушаны, һүҙҙәрен, әйтә алмай, ауыҙында әүмәләне. Әммә шөһрәтле редакторы ҡолаҡ һалырға уйламаны ла:

-- Юғарынан яңы күрһәтмә төштө -- ауыл шағирҙарын гөрләтеп үҫтерергә; ә беҙҙә ауыл шиғриәте ныҡ аҡһай, крәҫтиән шағирҙары грамоталы итеп яҙы белмәйҙәр, -- тине ул. “Крәҫтиән” түгел, ә ***ерекмән***!” – тип, атаһының Бөрйән һөйләшенсә төҙәтергә теле ҡысытһа ла, тыйылып, Поэзовский:

-- Мин, гендарымды ғына иҫәпкә алмағанда, үҙ ғүмеремдә бер тапҡыр ҙа ауылда булғаным юҡ бит... – тип “кәзәләнергә” итеп ҡараһа ла:

-- Профессор Тиховтың да зәңгәр Марс планетаһында булғаны бармы? Ә яҙа бит ундағы ағын йылғалар, зәңгәр үләндәр хаҡында! – тип ауыҙын тиҙ яптыртты...

Поэзовский, шымарып уҡ алған “эшсе шағир”лығын ташлап, тыңлаусан үгеҙ кеүек, тулыһынса ерекмәнлеккә сумды, ылғый ауыл шиғриәте тәртәһенә егелде. Гендарында етешмәгәндәрен китаптарҙан, кинофильмдәрҙән “һурҙы” һәм яҡшы уҡ уңыштарға ла иреште. Ысынлап та, был темаға рифмалар ҡойоу шаҡтай

еңел икән дә ул. Яңынан-яңы “көн ҡаҙағына һуҡҡан” патриотик шиғырҙар, бөрйән балылай хиссиәттәр татытырға тейешле балладалар, хатта поэма тиклем поэмалар бер-бер артлы атлығып ҡына торҙо йор ҡәләме осонан. Донъя поэзияһы тарихында А.С. Пушкиндыҡынан һуң икенсе мәшһүр “Болдин көҙө” башланды...

Ауылдан шытҡан яҙармандар ваҡиғаларҙы тәбиғи ябайлығында һәм ысынында тасуирларға ярата, шуға күрә әҫәрҙәре күнегелгән социалистик реализм ҡанундарына һыйышмай – редактор уларҙы “натурализм” тип тамғалап кире ҡаға ине. Поэзовский иһә тәкәббер шефының һәр һулышын алдан уҡ самалап белә, юлдың, боролмалы булһа ла, шымарағын һайлап елдерә ине.

Бер-ике йыл донъялар имен торғанда, ул, бәлки, редакция аппаратына ла кереп ҡыҫылыр ине. Бәхетһеҙлеккә ҡаршы, ауыртмаҫ башҡа тимер тараҡ, тигәндәй, яҡты йөҙлө редакторын урынынан йолҡоп ырғыттылар ҙа яңы башлыҡ яңыса һеперә башланы. Аҙна үтер-үтмәҫтән, редакция аппаратын элекке редактор яҡлыларҙан таҙартты, ырашҡылы ҡырыҫ еле ситтәгеләргә лә һуғылды. Яңы әҙәби бүлектең бер киңәйтелгән ултырышында Поэзовскийҙы ауыл тормошон белмәү, формализм, конфликтһыҙлыҡ тигән етешһеҙлектәрҙе үрсетеүҙә ғәйепләп, ҡолаҡтарын әсе боростап ыуаланылар.

Шулай ҙа сыныҡҡан шағир рухы һынманы. Фани донъя малдарына ваҡытлыса ҡул һелтәп, Лолаһының аулаҡ бүлмәһенә бикләнде лә, ҡәләм башын сәйнәй-сәйнәй, ижадының шишмә баштарын таҙартты. Аҙна-ун көн уҙыуға, ҡулы аҫтында яңы редактор зауығына иҫәпләнгән яугир шиғырҙар шәлкеме әҙер ине. Ләкин яҙмыш тигән биҙасыл бисә был юлы ла ҡосаҡлап үпмәне уны – шиғырҙарҙың береһен дә ҡабул ҡылманылар. Кеҫәлек төбө таҡырайғас, Лоланың да йылы ҡосағы тарайҙы, һыуынды. Бик йыш ҡына төшкө ашһыҙ ҙа ҡала башлаған шағирыбыҙ түҙмәне, элеккеһенә ҡайтып йығылды. Ҡатын-ҡыҙ заты шундай ғәжәйеб бит ул: күшеккән тауыҡтай ҡанаттары һәлпәйеп төшкән Поэзовскийҙы ситкә тибәрмәне Ғәзимә, ә, бөтә булған үпкәләрен онотоп, уның ҡойола башлаған түбә сәстәренән ыңғай һыпырып иркәләне, ғариза тотоп Яҙыусылар берлегенең йәш таланттар бүлегенә барырға ризалатты. Һөҙөмтәлә уны, юллыҡ аҡса, танытма биреп, ошо Сим йылғаһы буйындағы тәрән төпкөл районыбыҙға оҙайлы ижади командировкаға оҙаттылар. Ысын ауылды үҙ күҙҙәрең менән күр, тере ерекмәндәр менән аралаш, бесән менән тиреҫ нисек аңҡығанын еҫкәп бел, тинеләр...

* * *

Күҙгә төртһәң күренмәҫ ҡараңғы төн. Айға ла, йондоҙҙарға ла ял бөгөн – болот шаршауы артында иҙерәйҙәр.

Йәш рүлсе, бөтә көс-ҡеүәтен күҙҙәренә егеп, ҡараңғыны быраулап тишерҙәй итеп, алға тексәйеп ҡарай, ләкин файҙаһыҙ. Яр һыҙыҡтары, дегет мискәһе төбөндә ятҡан тәңкәләй, билдәһеҙлеккә сумған.

Рубкаға, ауыр эре аҙымдар ҡайсылатып, ауыҙынан мәңге ҡупмаҫ төрөпкәһенең төтөнөнә ыҫланып этҡайышланған тос кәүҙәле ҡарт капитан инде.

-- Ну, эштәр нисек, салага[1]?

-- Хана! – тип зарланды рүлсе. – Йәнә маяҡтар янмай...

-- Икенсе участкамы?

-- Икенсе.

Капитан, атып ебәргән пушка һымаҡ төтөнләп тороусы төрөпкәһен семерҙәтеп һурҙы ла, "салага"ны ситкә этәреп, ҡорос теҙгенде үҙ ҡулына алды. Ләкин йылға флотына утыҙ йыл буйы тоғро хеҙмәт иткән тәжрибәле күҙҙәр ҙә һис тишеп үтә алманылар болотло май төнө ҡараңғыһын. Йөрөштө кәметеп, прожектор ҡабыҙырға иттеләр, тик уныһы ла янманы – механик үҙ вазифаһын "тырышып" үтәгән, күрәһең...

-- Уф... Икенсе участкаға еттеңме, йәнеңде ҡулыңа алаһың. Бындағы сигнал уттарын ҡасан тәртипкә һалырҙар? – тип көрһөндө ҡарт бүре. Ғәҙәттәге үҙ-үҙенә ышанысанлығы һыпырып алғандай юғалды. Ошо минуттан башлап ул йылға короле түгел. Ҡулдарпы ҡалтырай, һуҡырҙай һәрмәнеп, судноны саҡ алып бара...

Көтмәгәндә күктәге болот кейеҙе бүҫерелеп китте ләһ, һыңар күҙе менән генә йылмайып, көмөш Ай баҡты. Йылға өҫтө ваҡытлыса шыйыҡ нурҙарға мансылды. Шул сәғәте-минутында дөйөм тәбиғәт һиллеген ҡайһылыр ки яралы йөрәк төпкөлөнән һыҙырылып сыҡҡан аяныслы ҡатын-ҡыҙ тауышы киҫте:

-- Ууух... тағарағыбыҙ ярға менеп бара бит!..

-- Разбу-у-уй, һәләк кенә булабыҙ -- селпәрәмә киләсәк!..

Ысынлап та, сәғәтенә ун биш саҡрым тиҙлек менән һөмһөҙ ҡаяташ шыуыша ҡаршыларына – бына-бына төкәлер ҙә "тағараҡ"тан кәлйемә яһар... Шунан һуң йәнгә үткес ауыр, тәрән тынлыҡ урынлашыр мөһәбәт Сим өҫтөндә. Социалистик ауыл үҙенең ҡыҙыл сәсле мәшһүр шағирын һәм һыйырҙары өсөн яңы аппараттар уйлап сығарыусы талантлы ғалимын юғалтыр мәңгелеккә. Суфыйбикә-ҡортҡа ла һыу төбөнә зөмбөрләһә, тауыҡтар ҙа йоморо-йоморо йомортҡаларын кем итәгенә һалыр?.. Битараф Ай ҡара болот кейеҙенән яңы тишек табып бағыр, әммә оторо тулҡындарҙы арҡыры ярып яҡты ***"КОММУНИЗМҒА – АЛҒА!"*** барыусы шанлы замана пароходын күпме генә зарығып эҙләһә лә таба алмаҫ – Симдең һалҡын битараф битен моңло-матәмле сыбарлап өнһөҙ сайҡалыусы етем түбәтәйҙәрҙе, биштәрләнгән тоҡтарҙы, бүртек сумаҙандарҙы ғына яҡтыртыр. Араларында иң аянысы – иҙелеп ләпшәйгән һалам эшләпә булыр. Нескә талдар моңло баштарын эйеп, йәшел толомдарын сайҡап, әсе күҙ йәштәрен ағыҙыр; сөрөлдәүек баҡалар, төнгө туйҙарын бүлеп, матәм тынлығы минутында аяғүрә баҫырҙар. Тик мәшһүр рәссам Айвазовский ғына булмаҫ икенсе участкала маяҡтар янмау сәбәпле ағын Сим һыуында уйналған милли трагедияны килер быуын йылғасыларына ғибрәт итеп полотноға яҙырға...

Ошо хәтәр секундтарҙа хатта һөйөклө төрөпкәһен имергә лә онотҡан ҡарт капитан, сәстәрен ҡыуартҡан утыҙ йыллыҡ хеҙмәт стажын, быуындарын ҡатырған йүнһеҙ ревматизмын да онотоп, бер минутҡа ниндәйҙер һалҡын механизмға әүерелде, штурвал тәгәрмәсен зырылдатып әйләндерергә тотондо. Инде генә гранит сағыл күкрәгенә саҡма сағам тигәндә, әҙәм балалары менән тулы ҡорос "тағараҡ", сите Симде һоҫорҙай ҡырынайып, ҡапыл ситкә тайпылды. Унарлаған

[1] Салага – ваҡ сабаҡ балыҡ, йәш матроска шаяртып әйтелгән һүҙ.

күкрәктәрҙән урғылып сыҡҡан еңел һулыш шаулатты палубаны. Тик күҙ асып-йомғансы хәлдәр үҙгәреп, рүлгә баш бирмәүсән үҙһүҙле карап осло моронон ҡаршы ярға табан борҙо, арттан шайтан этәреүен еңә алмай, яҙғы ташҡынға күмелгән ҡом-утрауҙың һыу сайҡалтҡан тал остарын борттарында шығырҙатып, шулар араһына ҡомло һайға менеп ултырҙы. Ҡапыл төкәлеп туҡталыуҙан меҫкен пассажир халҡы, салғы сапҡан үләндәй артҡа әүешеп, палубаға ҡоланылар. Аяҡ аҫтарында пар машинаһы көсәнеп ухылдай, кормала винт көрән ҡом боламығы болғатып һыуҙы быраулай, ләкин ләм ҡапҡаны “тағараҡ”ты һис кенә лә ысҡындырмай...

Замананың илле робинзоны, һөйкөмлө ҡоро материктан айырылып, уҫал холоҡло даръя уртаһында төнәргә мәбүр була. Уның ҡарауы яр буйындағы маяҡсылар, навигацияға бәйле түрә-ҡаралар йылы, йомшаҡ түшәктәрендә тәмле төштәр күреп йоҡлайҙар ине. Тап ошондағы төнгө маяҡты яҡтыртырға онотоусы ла барҙыр араларында...

Әммә ҡарт капитан ятып тынманы, рубкаға бер менеп-бер төшөп, пар машиналарын әленән-әле көсләкләп, “тағараҡ”ты ҡуҙғалтырға, ҡапҡанынан ҡуптарырға тырышты. Көсөргәнештәре эҙһеҙ юғалғас, командаһына бер-нисә сәғәт серем итерлек отбой биреп, тауыш көсәйткес рупор аша юлаусыларға өндәште:

-- Пассажир иптәштәр, паникаға бирелмәгеҙ! Судно яҡшы хәлендә һәм төбө лә тишелмәгән. Күҙ күреме яҡтыра башлау менән үк тотҡондан сығасаҡбыҙ. Шуға тиклем торлаҡ бүлмәләренә төшөп хәл алығыҙ. ***Коммунизмға – алға!!!*** Еңеү беҙҙә буласаҡ!

Рупор боғаҙына иғтибарлы ҡолаҡ һалып торған Садиҡов төшөнкөлөккә бирелде:

-- Бөттө баш – ҡалды муйын һерәйеп! “Коммунизмға -- алға!” булғас, ҡиәмәт көнөнәсә төпләнәбеҙ икән ошонда...

-- Батони, көфөр һөйләмәгеҙ улай! Бөйөк иптәш Сталин һыҙған тура юлдан тайпылмай ғына барһаҡ, хатта ҡиәмәт көнөн дә уҙып китербеҙ!

-- Бына шул-шул – күрмәйенсә уҙып китербеҙ...

-- Иптәш Садиҡов, дөмөкмәҫебеҙ борон дөмбөр ҡаҡмағыҙ -- пессимизм һаҙлығына батмағыҙ! – тип киҫәтте Поэзовский, бесәйҡойроҡтары мөрәүәтһеҙ һәлберәгән юлдашын. Джугашвили, һәр ваҡыттағыса, ғәмәлилеге менән алдырҙы:

-- Иң яҡшыһы, капитан иптәштең аҡыллы кәңәшен тотоп, тиҙерәк аҫҡа төшәйек тә һәндерәләрҙән урын алып ҡалайыҡ! – Быныҡ менән бөтәһе лә килеште.

Аккумулятор лампалары тоноҡ ҡына яҡтырҡан тимер аранда йәғни дөйөм ятаҡханала пассажирҙарҙың өлгөрҙәре – ҡаҡ һәндерәләргә һуҙылып, бәҙгеләре ҡайғылы баштарын сумаҙандарына терәп ойорға тырышһалар ҙа, күҙҙәре йомолманы. Нервалары ярһыныу сәбәпле аппетит тигән нәмәҫтәкәйҙәре ғәҙәттән тыш киң асылып, уңайһыҙ хәлдә ҡалдылар: тәүлек юлға тәғәйенләнгән аҙыҡтарын күҙ асып-йомғансы тумырып бөтөп, алдағыһын Аллаға, -- ай, юҡ! – пароходство түрәләре ҡулына тапшырҙылар. Ҡорһаҡтарҙың ҡапыл саманан тыш тулышыуы әхүәлде ауырайтып, әйтергә ярамаған уңайһыҙлыҡтар тыуҙырҙы, бигерәк тә был һауа сафлығы мәсьәләһендә һиҙелде. Шанлы шағирыбыҙ ҙа ашҡаҙаны

әҙәпһеҙлеген әҙәпле кикереү рәүешендә кешеләргә һиҙҙертмәй генә баҫыра-баҫыра, ҡаҡ һикегә яҫтаныу хәстәрен күрҙе. Әммә һәндерәләр араһында ауыр ямғыр болотолай һәленеп йөҙгән тәмәке төтөнө әсеттереп быуҙы һулыш юлдарын. Түҙмәй, тороп, “иллюминатор” тигән тәҙрә ишаратын аҫкайны, саф һауа урынына унан, яман сирҡандыртып, зәһәр семелдәүек мәңге арыҡ һәм аҫкорһаҡ серәкәйҙәр өйөрө ябырылды.

-- Эй, ҡыҙылбаш! Яп төндөктө! – Асыуланып һөрәнләне йәмәғәт төрлө яҡтан. Күп тә үтмәй, ҡомһоҙ ҡанәскестәргә ҡаршы дөйөм көрәш ҡубынды. Һуҡранып, һүгенеп, тороп ултырҙылар ҙа ҡанатлы һаҙлыҡ “хайуан”дарын сарт-сорт иҙергә керештеләр. Эштең мөшкөллөгөн тойған уҫал бөжәк нәҫеле, эт баҫтырған һарыҡ көтөүеләй өйөрөлөп, сығыу яғына дөндө, әммә ябыҡ иллюминатор быялаһына төкәлеп, төрлө нескәлектә моңло безелдәргә тотондолар. Бер мәйөштә суфыйбикә-ҡортҡа етәкселегендә аяҡланыусы апайҙарҙың шап-шоп бәргән шәфҡәтһеҙ таҫтамалдары аҫтында өндәре тығылды күптәренең. Арып-талған көрәшселәр, саҡ ҡына еңел һулап, татлы йоҡо хыялы менән ауҙылар урындарына. Тик хәйерһеҙ яҙмыш уларға яңы һынау әҙерләп ҡуйған икән: ауыҙҙарҙы арандай асып иҫнәп, әүен баҙарының хозурына китеп кенә барғанда, һис тәбиғи булмаған тағы бер йәмһеҙ ауаздар шәлкеме ҡолаҡ иттәрен ашаны. Ни икән был, тип, аптырашып, оҙаҡ ҡына ҡолаҡ һалып яттылар. Оло ҡаҙанда тары бутҡаһы ҡайнағандай “боҡор-боҡор-борҡ!” итә лә тәүҙә, аҙағынан станциялағы маневр паровозы һыҙғыртыуына оҡшашлы, йәнгә үткес әсе “фи-ю!” менән ослана; иншалла, ҡотолдоҡмо инде, тиһәләр, шулар бөтәһе яңынан ҡабатлана. Күҙҙәрҙе бөрөштөрөп килгән татлы йоҡо йәтмәһенән һис кемдең дә һис кенә лә арынғыһы килмәйенсә: “Тыныр әле, тыныр!” – тигән йәшерен өмөт менән түҙә бирҙеләр байтаҡ. Әммә йән талағыс музыка көсәйгәндән-көсәйҙе; ҡолаҡтарҙы пальто яғаһы менән ҡаплау ҙа, башты төйөнсөк аҫтына тығып ятыу ҙа араламаны был бәләнән. Ниһайәт, башҡаса әмәл ҡалмағас, барса баштар, ямғырҙан һуң ҡалҡынышҡан бәшмәктәрҙәй суҡайышып, музыкантты самалай башланылар, ләкин ул ҡапыл тынды. Хәйерһеҙең һәр кемгә лә янында -- яҡында ғына булғандай тойолһа ла, һәммәһе тиң уянған һәм тороп ултырғанлыҡтан, инде уны табыуы ҡыйын ине.

-- Шайтан шаяртмаймы икән беҙҙәрҙе, ә, йәмәғәт?! – Үтә ялыҡҡан бабаҡай албырғанып ҡашыны сал башҡайын. Әммә күпселек көр коммунистарҙан да комсомолецтарҙан – замананың инанған дәһриҙәренән ғибәрәт сәбәпле, тәрән фекерле юрауҙы тиңһенмәнеләр – шом эйәһен матди донъянан һәрмәүҙе хуп күрҙеләр.

-- Һыу ҡомағының порхолдауына оҡшай түгелме был, иптәштәр?

-- Ҡайҙан килеп һыу ҡомағы ҡойонһоң, ти, ҡоп-ҡоро һәндерәлектә?

-- Дөрөҫөрәге -- төнгө ябалаҡ булыр. Төрлө тауыш сығарырға мастак ул хәйерһеҙ ҡош.

Һәндерәлектә “тығыр-тығыр” сығыр тәгәрләтеп әүрәүсе йоҡоһоҙ бер малай аҡтығы, башым кесе, тип тормай, оло ғына юраусыны бүлдерҙе:

-- Алдатаһың, олатай, урындыҡ аҫтында ябалаҡ булмай! Әнә, тағы боҡорҙай башланы.

-- Йә Хоҙай, гонаһлыларыңды үҙең ярлыҡа! – тине берәү. – Ысынлап та, бер арауыҡ тынып торған шомло тауыш яңынан ҡабатланды, барыһы ла шаҡ-ҡатып тыңланылар.

-- Батони, төнгө ябалаҡ бында! – Урта буйҙа йөрөп торған Джугашвили бер һәндерә аҫтынан киң ҡара шаршауҙай күлдәк итәген һөйрәп сығарҙы. -- Әһ-һә, йоморткалар һоғонорға яратыусы әбекәйебеҙ бит был! Бына ята тауар тултырылған тоғо менән быуаҙ сөмкәһе!

-- Падло, ҡағылма! – Ҡортҡа, замана йәштәренсә тауыш сығарып, грузиндың йылтыр итектәре янынан тиҫбеле муйынын һуҙҙы ла кире юғалды, итәген тартып алды.

-- Вай-вай-вай, батони мадмуазель!.. – тине тегеһе. Халыҡ шаулаша башлағас:

-- Хөрмәтле ханым, -- тип әҙәпле генә өндәште Садиҡов, ғауғасыл һәндерә аҫтына эйелеп ҡарап. – Ауыҙығыҙҙы асып ятмағыҙ, зинһар, эсегеҙгә тараҡан, йәки кеҫәртке үрмәләп кереүе бар... һәндерә аҫтында мыжғып тора һәр төрлө хәшәрәт әкәм-төкәм...

-- Аллам һаҡлаһын, Аллам һаҡлаһын! Ләхәүәлә ҡеүәтә! – Ҡортҡа йәтеш төйәгенән ҡорт саҡҡандай атылып килеп сыҡты, киндер тоғон, сөмкәһен ҡосаҡлап, маҙаһыҙлаусы ҡолға буйлыны иңе менән этәрҙе лә йәнәшәһенә ларҡайҙы. – Ауыҙ йомоп йоҡлай алмайым шул мин, бәләкәсем, -- тигән булды.

-- Тыйнаҡһыҙлығым өсөн ғәфү итегеҙ: ни өсөн?

-- Ҡороп ҡына китһен инде! Коммунизм ҡорайыҡ та ҡорайыҡ, тип, фани донъя ауырлыҡтарын үҙ иңемә күтәреп, һаулығымды ҡаҡшаттым, тамағыма аш бармай... Ашамағас, тирем ҡоршоп кипте, ҡыҫҡарҙы – күрәһең бит: үҙ тиремә һыйыша алмай ултырам...

-- Һуң, һөйләп бөткәс йомола бит ауыҙығыҙ?

-- Эй балаҡайым, йоҡлағанда булмай шул. Ауыҙымды йомһам – күҙҙәрем асыла, күҙҙәремде йомһам – ауыҙым...

Тирһе ҡыҫҡарып интегеүсенең ауыр хәлен һәндерә аша ғына үҙенекеләй кисереп тыңлаған Поэзовскийҙың күңеле илке-һалҡыланып, күҙҙәренән йәш килде:

-- Эй донъя-донъя, кәкере мөрйә! – Һулҡылдап тәрән көрһөндө. Тирһе ҡыҫҡарған ҡортҡа иһә эргәһендәге ҡолға буйлынан сәғәт нисә икәнен белеште лә, киндер тоғон ашығыс артмаҡлап, сөмкәһен тотоп, трап-баҫҡыстан өҫкө палубаға ашығыс уҡталды.

-- Эй меҫкенкәй, -- иңрәп баш сайҡаны шағир, -- кеше араһында тыныс ҡына йоҡлай алмағасы ни, маҙабыҙҙы ҡайғыртып, яңғыҙ үҙе палубаға сығып китте. Бына кемдән үрнәк алырға кәрәк!

-- Ҡаланан бер тәңкәлек сынаяҡ алып, алты тәңкәгә ауылҡа атҡарырғамы? Полная спекуляция! – тигәйне бесәйҡойроҡ мыйыҡлы, грузин ҡаршы төштө:

-- Батони, шуның өсөн яманларға кәрәкмәй – урлап түгел, ә үҙ аҡсаһына алып кәсеп итә бит ул. Һеҙ юҡта мин үҙе менән әңгәмәләшеп алдым, Ҡазандағы беренсе гильдия сауҙагәр ҡыҙы икән ул. Сауҙа сәме матур итеп уның генына һалынған. Так что, башҡорттоң танылған ауыл шағиры хаҡлы – ҡортҡанан үрнәк алырлыҡ, хатта бөгөндән базарком итеп ҡуйырлыҡ!

-- Алайһа ниңә Ҡазанында ғына тороп ҡалмаған – булһын ине шунда Бесән баҙарының базаркомы! – Ҡырыҫ Садиҡов ал бирмәҫкә маташты.

-- Батони, мәсьәләгә үтә тар ҡарайһығыҙ. Уның атаһын заманында милиция алып киткән дә ҡайтмаған...

-- Хе-хе, баяғы яҡын туғанығыҙ Иосиф Виссарионовичтың бойороғо буйынсамы?

-- Эй, архары, что там как бараны бормочете? Говорите по-русски! – һәндерәләр аша кемдер екереп туҡтатты әңгәмәне.

Ҡалҡынған баштар талығып ҡабат ауҙылар, һөйәлерҙәре һөйәлделәр. Джугашвили ҙа, Садиҡов та һәм, әлбиттә, һалам эшләпәһен битенә ҡаплаған Поэзовский ҙа, тәмле серем йәтмәһенә тарыны. Йәмле Сим буйҙарында, аҡрын ғына һыҙылып, таң атып килә ине.

...Поэзовский, бәлки, ҡыҙыл Ҡояш ҡалҡҡансы ла иҙерәр ине шулай. Әммә өҫкө палубала Сыңғыҙ-хан ғәскәре яуға сапҡандағылай ҡолаҡҡа яғылмаҫ шау-шоу ҡубынды ҡапыл. Унарлаған аяҡтарҙың дөпөлдәтеп тапауынан түшәм буяуҙары ҡупсыны. Сылтырап плафон ватылды, илһам эйәһенең шағирәнә ауыҙына сатнаҡтары ҡойолдо. Тертләп уянған мосафир, нәфрәтләнеп сүп-сарҙы төкөрә-төкөрә, сығыу яғына елтерәне, сөнки күрше һәндерәләрҙә берәү ҙә ҡалмағайны. Күҙҙәрендә әле йоҡо ярыһы ятҡанлыҡтан, һүрән аккумулятор яҡтыһында йүнләп күрә лә алмай, һәрмәнеп саҡ барып етте баҫҡыҫҡа. Тыштан кемдеңдер яҫы арҡаһы терәтеп тотҡан ишекте көс-хәл менән этәреп, башын ғына тыҡҡайны, ҡорос ҡыҫымлы ят ҡулдар “һә!” тигәнсе макинтошы яғаһынан бөрөп алды, әҙәм өйөрмәһе аша һөйрәкләп, яҡтылыҡҡа сығарҙы.

-- Граждандар! Позвольте, мин бит...

-- Беләбеҙ кем икәнеңде! – Унарлаған күҙҙәр, үсләнеп, уны сәйнәмәйенсә үк ашайҙар; төрлө дәүмәлдәге йоҙроҡтар көтөүе, ҡыҙылға ҡаныҡҡан күркәләрҙәй ярһып, һалам эшләпә ситтәренән сосолошҡан сағыу ҡыҙыл ҡолҡамалары өҫтөндә уйнаҡлайҙар, шул уҡ ваҡытта хушсәскә еҫле лирикаһы менән донъя әҙәбиәтен байытырға ярҙам иткән йоморо ҡыҙыл танауын да йәберләргә ынтылалар ине. Ярай, грузин дуҫының тегеләр танауы янында ҡапыл хасил булған ифрат күргәҙмәле йөнтәҫ йоҙроғо һәм көр тауышы араланы:

-- Шалава! Кем дә кем уға тейһә, бына ошоно еҫкәр! Сират боҙоусы ул түгел, ә heҙ үҙегеҙ бит!

Хәлдең асылын көс-хәл менән аңланы: баҡтиһаң, тимер “тағараҡ”тың төн сыҡҡансы бүреләй асыҡҡан халҡы йоҙроҡтай буфеттың “амбразура”һы алдына уның асылыуын көтөп сират баҫҡандар. Ҡолға буйлы юлдашы ла, бесәйҡойроҡ мыйыҡлыһы ла шунда, фәҡәт тирәһе ҡыҫҡарған бахыр ҡортҡа ғына, дөйөм ҡаҙанда буталмай, саҡ ҡына йылмая биреп, бер ситтәрәк әҙәп һаҡлап ултыра. Шарылдап йоҡлап ятҡан еренән әҙәпһеҙ уятылып, йөкмәнеп менеп киткәненән һуң, ниндәйҙер тылсым ҡөҙрәтенән киндер тоғо таң атыуға икеләтә тыңҡыслап тултырылған, ә үҙенең йөҙө ифрат мөләйем. Аптырабыраҡ шуға иғтибар итһә лә, туҡталып тормайынса, ҡорһағында бүрелере олой башлаған шағир, әсә төкөрөктәрен йотоп, оҙон сират ҡойроғона теркәлде.

Йоҡонанмы, төнгө күңел асыуҙанмы күҙ төптәре күгәреп шешенгән буфетсы мәрйә, ҡан эскән эттекеләй сөм ҡыҙыл ирендәрен киреп иҫнәй-иҫнәй,

буфет ишеген асты ла эскә кереп юк булды. Сират шунда уқ йәнләнеп, башы ҡаҙыҡҡа ҡатылған ҡара йыландай борғаланды, ҡойроҡ осо менән шағирҙы ҡортҡа ултырған тимер стена буйына килтереп һуҡты.

-- Разбу-у-у-й, ҡороғорҙары, тауарымды иҙәһегеҙ бит! – Ҡортҡа, ике киҫәк мөлкәтен һөйрәкләп, әҙәм аяғынан һилерәк судно ҡойроғона йүгерҙе. Шул ыңғайҙа саҡ йығылмай ҡалған шағир, осоп барған эшләпәһен тотоп алып, иҙәнгә ҡапланмаҫ өсөн, алдындағы сиратсының билбауына тотонғайны, уныһы уҫал тайҙай тибеп ебәрҙе:

-- Йөрөйҙәр аяҡҡа уралып... күҙлекле-мүҙлеклеләр!

-- Ғәфү итегеҙ! – тине Поэзовский, ала мөгөҙ тирәсле кҙлеген аяҡ аҫтынан һәрмәп алып.

-- Ғәфүеңде ҡайтып бисәңдән үтен! – Ас кешенең асыуы яман, тигәндәре ошолор...

Алдараҡ торған әзмәүерҙәй ике егет: “Раз! Раз!” – тип, бүрәнә киҫкәһе менән бура мөйөшөн төкәткән оҫталарҙай, мыҡты күкрәктәрен алдағыларҙың арҡаһына бәрергә керештеләр. Сират яралы айыу һымаҡ үкерҙе, уфтанды, дуға булып бөгөлдө һәм, ҡыҫымға түҙә алмай, борсаҡ тултырылған серек ҡапсыҡтай бүҫерелде. Сирғытылған ҡатын-ҡыҙҙар, түфли-муфлиҙәрен юғалтып, ситкә тәгәрәнеләр. Поэзовский, шыңшып ятҡан береһен тартып торғоҙоп, тәртип боҙоусы егеттәрҙе ҡыҙҙырҙы:

-- Оят түгелме һеҙгә, ҡустылар? Дуңғыҙ балаһылай йәп-йәш кенә башығыҙ менән гүзәл енес йоратын рәнйетәһегеҙ. Сығынлағанда ла сама белергә кәрәк!

-- Оһо-һо-о-о! – Тамаҡ төбө менән оһолдашып көлдө тегеләр. – Анауы торған гүзәл енескә күҙе төшкән икән ҡыҙылбаш ағайҙың! Кил, бергәләп төкөтәйек... тумпайған тәңгәленә! Раз! Раз!..

-- Сәсрәп киткерҙәре, ауыҙҙарын ҡутарғансы һуғыусы юҡ бит! – тип көйәләнде бер ханым.

-- Их, милициябулһасы!

Ошоно ғына ишеткәйне, ауыл шағирының да майлы көлсәләй түңәрәк йөҙө кинәт кенә күркә кикерегеләй бурҙатланды.

-- Милиция-а-а! – тип көтмәгәндә яр һалды ул, тирә-яғына ялт-йолт ҡаранып. Ихласйән, үҙен ҡалалағы һыра дөкәне алдында торғандағылай хис итеп, буғай, милиция ауыҙындағы йәнгә күркәм һыҙғыртмаҡтың яҡында ғына һауа ярып сөрөлдәүен өмөт итте. Сираттағы ир-ат йораты уға бармаҡ төртөп күрһәтеп көлә башлағас та һыуынманы, йоҙроҡҡа-йоҙроҡ һуғып бик ныҡ көйөндө: -- Безобразие! Кәрәк саҡта ул батырҙарҙы эт еҫкәтеп тә таба алмаҫһың!

-- Үҙеңдең ҡайҙа тороуыңды оноттоңмо әллә, шәп кеше? – тине баяғы уҫал тайҙай тибеүсе.

-- Минең ҡайҙа тороуымдың әһәмиәте юҡ бында. Ҡайҙа ғына булһам да, миңә ошо секундта уҡ хулигандарҙың аяҡ-ҡулын борғосларға милиция хәжәт!

-- Бәлки, үҙең генә борғосларһың, шәп кеше? – Берҙәм хихылданылар. Ғауға сығарыусыларҙың береһе, уғата отороланып, Поэзовскийға яҡын уҡ килде, шәлдәүе тәңгәленә төртөп күрһәтте:

-- Бына һиңә милиция – тот төбөнән!

-- Был ни хәл, ҡайһы илдә йәшәйбеҙ?! -- Шашҡын хистәр йырсыһы, тыны быуылып, алаң-йолаң ҡаранып, ярҙам ырғағы эҙләне, ләкин Садиҡовтың тупаҫ брезент плащлы арҡаһы ғына күренә, Джугели көлөмһөрәп тора, ә ул көткән, өмөт иткән зәңгәр шинелле, сөрөлдәүек һыҙғыртмаҡлылар юҡ та юҡ ине...

-- Мин... мин... өҫтөгөҙҙән жалоба яҙасаҡмын! – Тамағы ҡарлыҡҡан Поэзовский рәйәтеүсеһенең артынан йәшле күҙҙәре менән тексәйеп ҡалды.

-- Яҙ бына бында, яҙ! – Үҙенең осаһына һуҡты хулиган. -- Өйгә ҡайтҡас, бисәмдән уҡытырмын. -- Әшнәһе менән икеһе, ауыҙҙарын салшайтып, уғата йәмһеҙерәк хахылданылар, Поэзовскийҙың ҡолаҡтары ҡыҙарҙы. Көсөргәнешле шул минутта тупаҫ брезент плащлы арҡа йөҙ һикһән градуҫка бороло ла һәленеп төшкән бесәйҡойроҡ мыйыҡтар салынды зиһене симәлгән рәйәтелеүсенең күҙенә.

-- Шағир-шағир, илһам эйәһе! – тине Садиҡов, баш сайҡап. –Бындай йыланбалыҡтарҙы ялыу йәки мөнәжәт яҙып түгел, ә айғолаҡтарынан маҡтып һелтәйҙәр уны! – Даусыларҙы икеһен тиң елкәләренән шытырҙатып әләктерҙе, маңлайҙарына-маңлай бәрҙертеп, күҙҙәренән оҫкон баҙлатты ла ике яҡҡа бираҡтырҙы. Ҡаты палубаға ҡапланып төшкән батырҙар, майлаған ҡайыштай йомшарып, күҙҙән дә юғалдылар.

-- Аб-ба! Ҡуян тигәнең арыҫлан юҡта ғына арыҫлан икән шул! – тип һығымта яһаны бер апаҡай. Сират йәнә ипкә килеп, түҙемһеҙләнеп, бар иғтибар “амбразура”ға төбәлде, сөнки ғәзиз сауҙа нөктәһенең эш сәғәте һуҡҡайны. Әсе төкөрөктәрен ҡат-ҡат йоткан Поэзовский сыҙай алмай ялбарҙы:

-- Иптәштәр, зинһар... алға үткәрегеҙ мине! Туҡланыу режимын боҙоу – ашҡаҙаным өсөн ифрат зарарлы. Мин – ижад кешеһе!

-- Һин ижад кешеһе булһаң, беҙҙе әллә ижаб ҡабул кешеһе тип белдеңме? Йөрөйҙәр бында алдашып! – тигәйне аҡ һаҡаллы бер сабый, күҙҙәрен сөкөрәйтеп теклəп торған Джугашвили телләште:

-- Яңылыш аңланың, олатай. Һаҡалыңдың һәр бөртөгө менән ант итәм: башҡорт халҡының ғорурлығы, танылған ауыл шағиры ул!

Бабай артындағылар сөңкөлдәне:

-- Беләбеҙ ул “шағир”ҙарҙы! “Сыбар тауыҡ йырлап йоморткa һала”, тип “лирика” әтмәләйҙәр ҙә аҡсаһын көрәп алалар, шунан һуң урамға сығып сират боҙалар. Өйҙәрендә ултырып ҡына үҙҙәре йоморткa һалһалар, файҙалыраҡ булыр ине, исмаһам!

-- Китаптарының биттәрен йыртып алып төрөргә илдә тоҙло балыҡ етмә башланы!

Туған әҙәбиәтебеҙҙең ауыл шиғриәте тигән, ижадсылары йөрәгендә ҡан тамырылай һулҡылдап типкән мәңге тере тармағының аңһыҙ төркөм тарафынан шулай нахаҡ баһаланыуын тыңлап тороу асы ла, оят та ине шағирға – башын аҫҡа эйеп мышҡылдап алды.

-- Йәмәғәт, шулай ҙа саманан сыҡмайыҡ! – тине, ниһайәт, иҫенә килгән һаҡалтай. – Индерәйек шағирыбыҙҙы льготалы сиратҡа! – Беләгенән аталарса ҡамтарып, нескә хистәр эйәһен иң алда торған ҡолға буйлының алдына килтереп баҫтырҙы.

-- Маладис, батони, аңлы халыҡ вәкиле икәнһегеҙ! – тине Джугели. Моратына ирешкән юлдашының бөйөрөнә дуҫтарса төртөп, күңелен күтәрмәк булды: -- Күрҙеңме, ҡайһылай алға киткән был туған халҡың!

Ләкин шағир күңеле рәнйеүле ҡалды. “Бөтәһе – үҙебеҙҙән, үҙебеҙҙән... -- тип, йөрәге әрнеп һулҡылданы ул. – Ең һыҙғанып коммунизм төҙөүсе хеҙмәт эйәләрен үҙебеҙ тыуҙырған юғары шиғри зауыҡҡа тиң итеп тәрбиәләмәгәнбеҙ... Үҙебеҙ ғәйепле, үҙебеҙ!..

Шул арала буфеттың тәҙрә пәрҙәһе ситкә шыуышты ла “амбразура” тишеге шылтылдап асылды. Йығылып китмәҫ өсөн тәҙрә тупһаһына ҡушҡуллап тотонған шағир, аҡса йомарлаған һыңарын, ысҡындырып, “амбразура” һуҙҙы:

-- Бирегеҙ берәй нәмә... ҡатҡан икмәк булһа ла!

Буфетсы ханымдың ике иле буяу яҡҡан турҫыҡ ирендәре ифрат мөләйем йылмайҙы:

-- Күгәрсенкәйҙәрем, ниңә боларанһығыҙ? Хәҙер үк таралышығыҙ!

-- Ә?! – “Амбразура”ға яҡын тороусыларҙың көллөһөнөң теле аңҡауҙарына йәбеште.

-- Күрмәйһегеҙме ни, кәштәләр шып-шырым? Тауар юҡ, иртүк һатылып бөттө! -- Ҡыҙған баштарға һалҡын һыу ҡойҙо һатыусы.

-- Ниндәй “иртүк”? Эш сәғәте – туғыҙҙан, тип яҙғанһығыҙ!

-- Бөгөн авария, ЧП. Шуға бәйле эш сәғәттәребеҙ ҙә ғәҙәттән тыш башланды. Ышанмаһағыҙ, капитандан һорағыҙ!

-- Кисә тәҙрәлә теҙелеп ултырған балыҡ консерваларығыҙ күп ине – береһе ләһә ҡалманымыни? Кем алып өлгөрҙө уларҙы? – тип ипле белеште итәғәтле Поэзовский.

-- Ҡалманы. Кем йоҡламай – шул өлгөрҙө. Таң атҡансы һамҫып ятмаҫҡа кәрәк ине!

Сират тәртип боҙоп гөжләй башлағас, Джугашвили, йөнтәҫ ҡулын юғары күтәреп, сыҙамһыҙҙарҙы саҡ ҡына тынысландырҙы ла шулар исеменән көр тауышын буфетсыға күндерҙе:

-- Батони, рәхим итеп кенә прилавка аҫтындағыларын сығарығыҙ!

-- Сығарам, ниңә сығармай, ти, сығарам! Бынаиң аҡтыҡҡыһы! – Ҡыҙыл ауыҙлы ханым “амбразура” тупһаһына, туҡылдатып, ике шешә ултыртты. Береһе – һыу, икенсеһе тройной одеколон ине. Поэзовский менән Джугашвили шаңкып ҡалған арала, аҡса тотҡан ҡул һуҙылып, шешәләрҙең икеһен дә әләктерҙе ләһә йүгерҙе – “ассистент”ын эйәртеп сапҡан сикһеҙ бәхетле ауыл ғалимы Йолҡоғужин ине был. “Амбразура” шылтылдап ябылды, ауыр тынлыҡ урынлашты. Шул ук мәлдә ҡорос сират серек сүс тоҡтай бүҫерелеп китте ләһә, -- сәйер! – барыһы кәмә ҡойроғона табан елтерәне, бикле дөкән төбөндә бер Поэзовский ғына ҡалды. Күрәләтә иртәнге ашынан яҙған, бер нимә ләһә аңламаған ауыл шағиры, мөлдөрәмә маңлай тирҙәрен һөртөп, өмөтһөҙ хәлдә ситән креслоға ауҙы һәм, тоноҡ ҡарашын болғансыҡ Симгә текләп, шомло хистәргә бирелде. Елһенгән мейеһендә, өйөрөлөшөп, Шекспир кимәлендәге трагедияға ярашлы шөңгөр рифмалар көтөүе тупланды. Инкубаторҙа бер юлы моронлаған себештәр кеүек, һис кенә ләһә тынғы бирмәй, илһам эйәһенең маңлай һөйәген суҡыйҙар, туҡылдаталар, киң донъяға сығарыуҙы даулайҙар ине. Рифмаларының тәүгеләрен

ирендәрендә һутлап әүмәләй-әүмәләй, ҡуйын дәфтәрен алды, ҡорос ҡәләм сығарҙы:

Ҡара зинданда ябылып яттым оҙаҡ,
Ҡабым икмәкһеҙ һәм тоҙһоҙ интегеп.
Аҙна уҙғас, түҙмәй, гранит нигеҙҙе
Кимерә башланым ас ҡомаҡ кеүек.
Цынганан ҡойолоп төшкәнештәрем
Батып керҙеләр ҡая күкрәгенә...

Ары дауамларға яҙманы Хоҙай – ғифрит кеүек ер аҫтынан ҡалҡҡан ҡолға буйлы юлдашы, ауырттырып, асығыуҙан ҡатыҡ кеүек ойоу хәлдәге ижадсының бөйөрөнә төрттө:

-- Киттек, батони, тиҙерәк! – тине әкрен тауыш менән, һүҙ әйтергә лә ирек бирмәй, дуҫтарса һөйрәкләп, кәмә ҡойроғона алып китте. – Күрәһеңме, батони? – тип, йөнтәҫ беләкле ҡулын брезент ябылған ҡотҡарыу кәмәһе тарафына һелтәне. Брезентҡа һары ҡатырға ярпыһы беркетелеп, ***"Буффит"*** тип яҙылғайны, ә яҙыу янында ысын буфеттың филиалын аҫҡан тирәһе ҡыҫҡа ҡортҡабыҙ, бәрәкәтле тоғонан алып биреп, хайран табышлы сауҙа ҡылып ултыра. Себендәй һырыған эреле-ваҡлы ир-ат халҡы өнһөҙ генә сиратлап аҡса һона, тирәһе ҡыҫҡарған ҡортҡа иһә оҙонайған итәк аҫтынан кисә генә ысын буфет витринаһында теҙелешеп торған балыҡ консерваларын өнһөҙ генә атҡара. Уңған грузин шағир юлдашына ла сират алып өлгөргән икән – өс кешенең артында торған Садиҡовтың яҫы арҡаһы менән үҙенең араһына һыйындырҙы. Асыҡканда телеңде йоторлоҡ балыҡ консерваларының берәм-берәм алдағыларҙың ҡулына күсеүен сабырһыҙланып күҙәткән ирҙәрҙең ауыҙ һыуҙары аҡты, күҙҙәре мыз-мыз килде, ә шулай ҙа ғәҙеллекте өҫтөн күргән шағирыбыҙҙың уттай ҡыҙыл сәстәре үрә тороп, эшләпәһен саҡ төртөп төшөрмәне:

-- Йәмәғәт, был ни хәл?! Ысын спекуляция – дәүләт хаҡын бишләтә арттырып һатыу бит! Милиция!!! – тип һөрәнләүен һиҙмәй ҙә ҡалды.

-- Шшш, шаулама! – Джугашвили, иҫәнгерәгән юлдашы Садиҡовтың ашаһынан һонолоп, ҡәҙерле кәнсирҙәрҙең бер-нисәһен сөмкәһенә сумырҙы. Поэзовский уны оялтып битәрләргә итеп ауыҙ асҡайны ла, ҡолағы төбөндә генә йәнә:

-- Әкрен, егет кеше, әкрен! – тигән аҡыллы киҫәтеүҙе ишетте. Нәүбәттәге ике банка иҫенә килгән Садиҡовтың плащ кеҫәһенә кереп юғалды. Меҫкен шағир, ниһайәт, быуынһыҙ урынға бысаҡ салғанлығын асы төшөнөп, юлдаштары үрнәген дәррәү ҡабатларға иткәйне лә, һуңланы -- ҡыҫҡа тиреле сауҙагәрбикә уның ҡулына һуҡты:

-- Милицияңа барып ал, күҙемә күренмә! – тине. Шау-шоу килгән "Тимер утрау" халҡы шул арала сауҙа егәрмәнен ҡырмыҫҡаларҙай һырып алып, күҙ асып-йомғансы тоғоноң төбөн әйләндертте. Кәсеп уңышы кисереп ҡомарланған ҡортҡа йәшелле-күкле һумдарын төрнәп тәрән ыштан бөрмәһенә тыҡты ла ашығып китеп барҙы. Ә шулай ҙа бушҡул һемәйеп ҡалғандарҙың рухын күтәрерлек тантаналы белдереү яһалды:

-- Хөрмәтле пассажирҙар! – тип гөрөлдәне мачта башындағы репродукторҙан капитандың төрөпкә тартып ҡырыҫланған тауышы. -- Өфөнән данлы пароходствобыҙҙың аҙыҡ-түлек тейәлгән сауҙа карабы – плавлавка килеп етергә тейеш, рациянан хәбәр иттеләр. Коммунистик рухығыҙҙы төшөрмәгеҙ, палубала йырлап-бейеп ҡаршылайыҡ игелек эйәләрен!

Артынса уҡ йәш рулевой егеттең көр тауышы ялғанды:

-- Үҙәкте өҙҙөрөп йырлаусы һәм оҫкон сәсрәтеп "Әпипә"гә һәм "Гопак"ка баҫыусы ҡәҙерле иптәштәр! Һәүәҫкәрҙәр түңәрәгенә яҙылырға килегеҙ, буфет алдында көтәбеҙ! – Ауыҙ асып тыңлаған йәмәғәт һүгенә-һүгенә таралды. Рифмалар оҫтаһы ла, әсе төкөрөгөн йотоп, кеше ашағанда тексәйеп тормаҫ өсөн, башын эйеп ситкәрәк китте. Эсендә бүреләр олой, көсөк юрта, мейеһе зыңҡый ине. Әммә Джугашвили юлдашы йомшаҡ күңелле икән: шағирҙы саҡырып алды ла көс-хәл менән тапҡан баяғы аш-һыуын уртаҡлашты.

-- Яҡшы түгел, батони, яҡшы түгел! – тип баш сайҡаны ул, дуҫына хөкөмсән бағып. – Кеше үҙ аҡсаһын бирep тапҡан мал менән һатыу итә, ә һеҙ милиция саҡыраһығыҙ. Бер-береңде йәберләргә ярмай улай!

-- Был бит ысын спекуляция!

-- Хе-хе, ниндәй спекуляция булһын, ти, ул? Кәсеп был, дуҫкай, кәсеп. Шундай кәсеп арҡаһында ҡояшлы Грузиябыҙ сәскә ата, Башкирияны ла йылытһын ине ул Ҡояш!

-- Уныһы шулайҙыр ҙа... – тип килешә бирҙе шағир, яҫы ҡафказ хәнйәре йоҡа кәнсир ауыҙын ҡайырыуын ирәүән күҙәтеп.

-- Их, һине ҡотло Гутаутаға алып бараһы ине, дуҫкай. Һөрәнләмәҫ инең унда "милиция!" тип.

-- Бәй, унда милиция юҡмы ни?

-- Бар, ләкин үҙебеҙҙеке. – Хәнйәрен кире тығып, сөмкәһенең шыртлап бикләнмеш йылтыр йоҙағын үпте лә, устарын сәбәкәйләп, бейеп тә алды. – Шағирҙар ҙа унда үҙебеҙҙеке – милиция саҡырмайҙар, мал ҡәҙерен беләләр:

Гутаута, Гутаута,
Лимун, әфлисун... --

Прозаға күсеп, шағирҙы ҡосаҡланы. – Их! Грузия яҡшы, Башкирия яҡшы! Башкирский милиция ғына шаҡшы! Их! Грузия лимон яратмай, Башкирия лимон ярата! Ә Джугашвили червонецтар ярата! – Быуаҙ сөмкәһен башы өҫтөндә бейетеп алды.

-- Мин дә... гонорар яратам да ул... – Күкрәк серен асты хыялсан шағир.

-- Бына бит – икебеҙ ҙә яратабыҙ һәм бер ниндәй ҙә милиция кәрәкмәй!

Бер-береһен тәрәнтен аңлашҡан хәлдә, табынға өңөлдөләр.

* * *

Төш ваҡытында йылға буйҙарын көслө борғо шаңғыртты. Капитан рация аша ишетеп белеүенсә, аҙыҡ тейәлгән плавлавканан да элек, "Тимер утрау"ҙы тотҡонлоҡтан йолҡор өсөн, ҡотҡарыу судноһы сәфәр сыҡҡан – бына-бына килеп етәсәк. Пассажирҙар, тулҡынланып, палубаға эркелделәр, өмөт тулы ҡараштарын алыҫҡа төбәнеләр. Биш минут үтер-үтмәҫтән, күмәк күкрәктән урғылған көр

алҡышлау яңғыраны -- аҡҡоштай аҡ пароход күренде бөгәлдә. “Ур-ра-а-а!” һөрәнләп, унарлаған кәпәстәр күккә сөйөлдө, барса ҡатын-ҡыҙ, ир-ат, бер-береһен тәбрикләп, ҡосаҡлашырға, үбешергә кереште.

-- Әнә килә ғәзиз ҡотҡарыусыбыҙ! Әнә килә һөйөклөбөҙ! – Елтерәп килеп шағирҙың яҫы ҡулын ҡыҫты кәйефе күтәрелгән, күңеле үтә ныҡ бешеп киткән мандариндай йомшарған Ҡафҡаз улы ла. Һөмөрөһө ҡойолоп йөрөгән Садиҡов та, тантаналы ваҡиға хөрмәтенә, әсе ҡауындай һытыҡ йөҙөн яҙғы Ҡояш көлөүенә үҙгәртте. Рубкаһы башында ҡарт ҡарғалай һерәйеп торған капитан ғына дөйөм хозурлыҡты уртаҡлашманы, сөнки ул, тәү күреүҙән үк, быныҡ һис тә ҡотҡарыу буксиры түгел, ә көллө флотҡа мәғлүм ***“НӘСИХӘТСЕ – ПРОПАГАНДИСТ”*** тигән ыҫпай һынлы сәйәси кәмә икәнлеген таныны. Уның сәйәтсе “хужа”һы ла ныҡ таныш ине ҡарт бүрегә: ябай ер мәшәҡәттәренән табаны айырылған, партияның таҫма телле йылғыр өгөт-нәсихәтсеһе рәүешендә танылып, йылғасылар телендә үҙ-ара “Ҡыуыҡбаш – ҡыу батыр” тип ләҡәпләнгән түрә йорағы ине ул. Әле лә шул кәсебе менән “әҙәм аяғы баҫмаған” төпкөл төбәктәргә сәйәси аң-белем таратырға сығҡандыр...

Аҡҡош һынлы пак мөғжизә, ике янындағы шаптор-шоптор ишкәкле ҡуласалары менән болғансыҡ һыуҙы шат түбәләп, “Тимер утрау”ға дәрәжәле яҡынлашты, һөймәлекле наҙлы ҡыҙҙай уның йәнәшәһенә һырнығып, супылдатып һыуға якорь һалды. “Тимер утрау” ләҡәбенә эйә булмыштың шундай уҡ ишкәк-ҡуласаһы өҫтөндәге “КОММУНИЗМҒА – АЛҒА!” тигән ҡыҙыл яҙыу менән аҡҡош һынлы судноның “НӘСИХӘТСЕ – ПРОПАГАНДИСТ” тигән ҡыҙыл яҙыуы үбешкәндәй төкәлеште лә айырылышмаҫтай булды. Арҡандар менән икеһен йәһәт тоташтырып, араға трап-күпер һуҙҙылар. “Тимер утрау”ҙағылар, ашҡынып, ауыҙҙарына, ниһайәт, яңы бешкән хуш еҫле икмәктең ҡайырылып кереүен өмөт итеп көттөләр. Ләкин икмәкле тоҡтар йөкмәп траптан менгән матростар күренмәне. Улар урынына, тос кәүҙәһе ауырлығынан баҫманы һығылдырып, дәрәжәле бер ағай көр атланы. Башында бейек тирәсле күн фуражка, өҫтөндә тап Кремль әһелдәре кейәкәй хәрбиҙәрсә галифе салбар һәм яҫы ҡайыш быуылған гимнастерка ине.

-- Өгөт-нәсихәт бүлеге башлығы фәләншин, -- тип белдерҙе ул, тәү осраған пассажирға туғандарса ҡул бирep. – Ашығыс ярҙам алып килдек, иптәштәр, ярҙам!

Кешеләр, ашығыс ярҙамсыға хөрмәт белдереп, ситкә этәрелделәр, уйылған тар коридорҙан мәртәбәле йән эйәһе капитан каютаһына үтте. Тимәк, хәлдәрҙе асыҡлау, ярҙамды тиҙләтеү өсөн.

Ярты сәғәт буйы барҙы каюталағы ултырыш. Әленән-әле ҡолаҡҡа салынған ҡырыҫ һөйләм өҙөктәре, иллюминаторҙан борлаған тәмәке төтөнөнөң ҡуйылығына ҡарап, пассажирҙар ундағы бәхәс кимәлен самаланылар.

-- Их, аҙыҡ тулы буфетын тиҙерәк асһын ине лә өҙөлөп барған үҙәктәрҙе ялғатһын ине! – тип дөйөм хисте белдерҙе бер түҙемһеҙе.

Ниһайәт, күҙ терәлгән ишек шартлап асылды, ҡаҙанға төшкән ҡыҫалалай ҡыҙарып-бүртенгән “Ҡыуыҡбаш”, әләгә-тәгәрәй, атылып килеп сыҡты. Маңлай тирен һөртөп, капитан төтөнөнән азат таҙа һауала берауыҡ тын алғас, егеттәрсә

етеҙлек менән ҡалҡыу кнехтҡа[2] баҫып, ҡулдарын тап кинолағы Ильичтай етеҙ болғап, Сим йылғаһылай телмәрен ағылдырҙы:

-- Хөрмәтле вә ғиззәтле иптәштәр, беҙҙең шанлы йылға юлдарының ҡәҙерле пассажирҙары! Ғәзиздәрҙән ғәзиздәрем, һөйөклөләрем минең! Бөйөк Ватаныбыҙ ете, -- әй, юҡ! – етмеш ете саҡрымлы етеҙ аҙымдар менән яҡты коммунизмға барған ошо тарихи көндәрҙә мин һеҙҙәрҙе, бөтә йылғасылар исеменән өндәшеп, ирешелгән уңыштарыбыҙ менән ихлас ҡотлайым, ур-ра! Беҙҙең данлы пароходствобыҙ быҫаса күрелмәгән юғары хеҙмәт өлгөләре күрһәтә, гүзәл тормош тулҡындарында бәүелеп бөйөк коммунистик хеҙмәт геройҙары тыуа, тарих биттәрендә данлы пароходствобыҙҙың исеме алтын хәрефтәр менән яҙыласаҡ, ур-ра! Ошо ғәйәт юғары пафослы көндәрҙә беҙ, ҡулға-ҡул тотоношоп, үҙебеҙҙең героик киләсәктең ҡаҡшамаҫ йәш көрәшселәрен тәрбиәләргә тейешбеҙ. Бының өсөн һәр намыҫлы граждан халыҡ массалары араһында яугир сәйәси ағартыу эше алып барырғабурыслы. Ошо, тик ошо ҡотло юл менән генә беҙ үҙебеҙҙең ғәйрәтле аяҡтарыбыҙҙы яугир социализм эпохаһынан йылдам күтәреп, бөйөк коммунизм ерлегенә баҙыҡ итеп баҫасаҡбыҙ. Әммә ҙур үкенескә ҡаршы, рухи яҡтан сыныҡып етмәгән ҡайһы бер кәүек иптәштәр, мәҫәлән, -- ул капитан каютаһы яғына бармаҡ төрттө, -- бөтәбеҙгә билдәле булған ҡарт навигатор иптәш Молчунов, был мөҡәддәс бөйөк бурысты төбөнәсә аңлап еткермәгән, буғай. Сөнки ул, бынан өс минут ҡына элгәре, һеҙҙең арала үҙэшмәкәр художество түңәрәге төҙөлдөмө, тигән законлы һорауымды кире ҡағып, “формалистик алйотлоҡ” тип атаны. Һөрһөп бөткән бындай анархист менән нисек итеп яҡты коммунизм таңына барып етмәк кәрәк, иптәштәр?! – Бер кем дә өндәшмәгәс, тамағын эшлекле ҡырып, туранан-тура тәғәйен эшкә күсте. – Ҡәҙерлеләрҙән ҡәҙерлеләрем, судноғыҙҙа сәнғәттең үҙэшсән түңәрәктәрен гөрләтеү сәғәте һуҡты! Үҙәк өҙҙөрөп йырлай, ут сәсрәтеп бейей, сихриәтләп һүрәт яһай белеүселәр бармы һеҙҙең арала? Дәррәү һәм берҙәм ҡул күтәреүегеҙҙе һорайым.

Дәртле тура мөрәжәғәткә яуап булып, ҡәбер тынлығы урынлашты.

-- Иптәштәр, тартынмағыҙ, зинһар (сәғәтенә ҡарай). Иптәштәр, минең ваҡытымды урламағыҙ, минең график боҙола. Коммунистик рухи аҙыҡты бөтә йылға буйына еткерәһем бар!

-- Һе! Берәй телем икмәк килтерҙегеҙме һуң? – Садиҡовтың ауазы.

-- Икмәк? Ниндәй икмәк? Әһә, һеҙ баяғы рухи аҙыҡ хаҡында! – Массаларҙың аңлауынан ләззәтләнгән Ҡыуыҡбаш, суйын кнехт өҫтөндә тыбырсынып, инәлек алдында ыҫпайланған ата ҡаҙҙай бейене. – Ә как же, килтерҙек, килтерҙек, ҡәҙерле иптәштәр! Беҙҙең пароходтың ҡыҙыл мөйөшөндә саф коммунистик йөкмәткеле ысын рухи аҙыҡ – гәзитә-журналдар етерлек! Айырым зыялылар өсөн марксизм-ленинизм классиктарының билдәле томдары бар. Кереп ултырып рәхәтләнеп уҡығыҙ, рухи һыуһыныҡығыҙҙы ҡандырығыҙ!

Әммә массалар араһынан баяғы һөмһөҙ-ҡырыҫ тауыш тағы ла бүҫерелде:

-- Һыуһын ҡандырыр алдынан ата ҡаҙ ҙа бүкҫәһен көрпә менән тыңҡыслап тултыра. Ҡайҙа икмәк, гәзитең менән ҡуша ҡаҙалып кит бынан!

[2] Судноны ҡайҙа ла булһа тарттырып бәйләү өсөн палуба ситенә суҡайтылған суйын бүкән.

-- Ә?! Был ниндәй контр ауаз? Кем ҡыскырҙы? Фамилияһы?! – Ҡыуыҡбаш, контраны һуңлатмай ҡағыҙға сәпәр өсөн, блокнотын аскайны, әсе телле Садиҡов йәһәт тайыу сараһын күрҙе, әммә уның башҡаларҙан айырылмалы тупаҫ брезент плащлы яҫы арҡаһын йылғыр түрә күҙҙәре һис кенә лә ысҡындырырға теләмәй ине. Ярай, Хоҙанан булып, түрә зиһенен тиҫбеле суфыйбикәнең сәрелдәк тауышы һүрҙе:

-- Бар ундай кеше беҙҙең арала! Йырсы ғына түгел, ысын шағир ҙа, тиҙәр. Яҙып алығыҙ үҙен! Ауыҙын аскан һайын милиция саҡырмаһын, ысын шиғри һөнәрен дә күрһәтһен хеҙмәт халҡына! Мин анауы эшләпә кейгән ҡыҙыл сәслене әйтәм! -- Һәм бәхетһеҙ Поэзовскиға төртөп күрһәтте.

-- Эйе-эйе, ҡыҙыл сәсле – тап һеҙгә кәрәкле ҡыҙыл шағир! – тиештеләр бүтәндәр ҙә, еңел һулап. Телмәрсе тилбер түрә, кнехттан егеттәрсә ырғып төшөп, блокнотын ялпылдатып тотҡан килеш, “шиғри һөнәр” эйәһе яғына уҡталды:

-- Зинһар, исем шәрифтәрегеҙҙе!

Шағирға, һары һалам эшләпәһен зыялыларса ҡалҡытып, түрә менән яҡын танышыуҙан башҡаһы ҡалманы.

Ун минуттан һуң ул аҡҡош һынлы агитпароходтың Ленин портретлы ҡыҙыл каютаһында һирәк теҙемле тыңлаусылар түңәрәгендә ултырып, үлеккә ясин сығҡандағылай, күңелһеҙ тауыш менән үҙенең башҡорт ауыл шиғриәтендә Октябрь революцияһы яһаясаҡ тип нарыҡланған мөғжизәһен һамаҡлай ине:

Фекер траншеялары

Героик поэма. Яҙыла башланған – 29 апрель 1956 йыл, тамамланған – 1 май 1956 йыл.

Алла ҡайҙан булһын мин бар сағымда! –
Ерҙең тәғәрмәстәй әйләнеүе аксиома хәҙер.
Мин үҙемдең мыҡты беләктәремде
Ер күсәре итергә әҙер.

Әгәр Архимед таяныу нөктәһен бирһә,
Ярты секунда мин Ерҙе сирғытыр инем,
Ай меҫкенде, нәҡ бешкән йоморткалай,
Ҡабығынан әрсеп ырғытыр инем!

Һәм һис ятып тынмаҫ инем яҫтыҡта,
Йондоҙҙарҙы епкә теҙмәйенсә тороп.
Серен сисеп ваҡыт йүгерешенең,
Тарихты ла ебәрер инем бороп.

Титандар ҡеүәте яралтҡан мине,
Водород йәҙрәһен егеп космоска осор өсөн.
Ваҡ тормоштан ҡәнәғәтһеҙлек изә ғорур йәнде,
Тынғы бирмәйенсә иртән һәм кисен.

Паровоздың арҡаһылай ҡалын-ҡара елкәмә
Көслө хистәр дейеүе атланып йөрөй.
Йөрәгем иһә -- янар мартен мейес, --
Унда таш һәм быяла ҡуша ирей.

Унда мөхәббәт уты ләүкеп яна,
Водород бомбаһы шартларҙай булып;
Күҙҙәремдән бойоғоу йәше тама
Тын океан һыуылай ташып-тулып.
Ҡыҙыл майҙандай яҫы маңлайыма
Фекер траншеялары ятҡан һырып... –

Поэманың иң шәп тәңгәленә еткәс, кемдер һөмһөҙө шулай уҡ рифмалап һөрәнләне:

-- Эй, тығыл! Фекер траншеяларыңа бер үҙең генә йығыл!

Поэзовский, ыумас эскәндә башына таяҡ төшкән Аҡбайҙай тертләп, телен тешләне; ырғып тороп, сатнаҡ күҙлеге үтә героик поэманың ҡан дошманын эҙләне. Ләкин таба алманы, сөнки йоҡомһорап ултырған Джугашвили дуҫынан ғәйре йән эйәһе ҡалмағайны эргәлә. Рәнйегән йән әҙәпһеҙ шылған тыңлаусыларын ҡыҙғаныс ҡара наҙанлыҡта, ысын шиғриәтте һөйә белмәүҙә ғәйепләп, алтындан да ҡиммәтлерәк ҡулъяҙмаһын һыу үткәрмәҫ клеенкаға бөхтәләп кире төрҙө лә һаҡлыҡ менән ҡуйын кеҫәһенә һыйҙырҙы. Ни күрһәм дә үҙем менән йөрөһөн, тип, йылы тәненән айырмаған күҙ ҡараһы ине шул.

“Килер быуындар аңлар...” – тип йәнен йыуатты ул, үпкәләп тә әсенеп. Ҡалғып ултырған грузинды төртөп уятҡас, ҡушарлашып, алға киткән тормошто ҡыуып етмәккә, өҫтәлдәргә өйөп һалынған гәзит һәм журнал төпләмәләрен барланылар. Түрә уларҙы ҡунаҡсыл елкендерҙе:

-- Молодец, егеттәр, пессимизмға бирелмәйһегеҙ икән! – Шағирҙың үҙенә тейешлеһен дә йәлләмәне. -- Иптәш Сталин лично үҙе гениально нарыҡлаған совет эпохаһының бөйөк шағиры Маяковскийҙыҡына тиңләшерлек эпопея тыңланыҡ, ҙур рәхмәт! – тине лә гәзит-журналдарға төртөп күрһәтте. – Ултырышығыҙ, уҡығыҙ, туйғансы алығыҙ рух аҙыҡтарын!

-- Батони, беҙҙең бахыр пароходты ҡасан сығарырҙар икән? – тип әҙәпле генә белеште сабырлыҡһыҙ грузин, иртәнге балыҡ консерваһы баҫа алмаған әсе төкөрөгөн ҡат-ҡат йотоп.

-- Ҡотҡарыусы буксир килгәс, әлбиттә.

-- Ҡасан килер икән ул? “Пропагандист-Өгөтсө”нән тарттырһағыҙ булмаймы?

-- Булмай, егеттәр, булмай. “Пропагандист”, үҙегеҙ беләһегеҙ, өгөт-нәсихәтсе ул, ярамай. Йәғни ҙә илгә рухи аҙыҡ таратыусы зерә лә зыялы судно. Һеҙҙекен сығарабыҙ, тип, рух аҙығын ҡомға ултырыуыбыҙ бар, иптәштәр. Ә дошманға аҙыҡ бирергә хаҡыбыҙ юҡ, юҡ! Сөнки сереп бөтөп барыусы капиталистик донъялағы синфи дошмандарыбыҙ саң ҡағыр, большевиктарҙың коммунистик сәйәсәте ҡомға батты, тип үсәр. Бында беҙ һеҙҙе рухи яҡтан

туйҙырҙыҡ, коммунистик бурысыбыҙҙы үтәнек. Инде юлға сығабыҙ – башҡалар ҙа өҙөлөп-һағынып көтә беҙҙе, үҙҙәренә татлы рухи аҙыҡ килтереүселәрҙе. Ҡасанмы ҡуҙғалып киткәнсе, анауы ҡыҙыл тышлы томдарҙы асып, һөйөклө даһи Ильичыбыҙ әйтмешләй, уҡығыҙ, уҡығыҙ, уҡығыҙ!

Ҡыҙыу ҡанлы грузин шулай ҙа ҡыҙманы, ирендәрен тешләп ҡул һелтәне лә, трап-күперҙән ҡолға буйын эре-эре һикертеп, кире ғәзиз төйәккә -- "Тимер утрау"ға күсте, күмәкселек уның артынан эйәрҙе. Ҡыҙыл томдар теҙелгән шкафлы залда шағир менән Ҡыуыҡбаш түрә икеһе генә ҡалды. Поэзовский, көрһөнөп, өҫтәлдең иң түрендә ятҡан ғәзит төпләмәһен асты – "Башҡортостан йылғасыһы"ның аҙаҡҡы ай тегелмәһе ине был. Шағирәнә диҡҡәт менән аҡтарып сыҡһа ла, күҙгә салынырҙай текстарҙың береһен дә йүнләп уҡый алманы ул – кемдеңдер дәһшәтле ҡайсыһы, ғәзит биттәрендә дүрткел уйымдар ҡалдырып, мәҡәләләрҙең иң-иң сәмле урындарын мөнтәп-киҫеп алғайны. Албырғанып, түрәгә башын борҙо:

-- Кем хулиганланды икән бында?

-- Ә?! Әһә, аңланым. Хулиганланыу түгел был, ә юғары етәкселек бойороғон теүәл үтәү. Йәғни уларҙы лично мин киҫерттем, "Дело"ға теркәр өсөн.

-- Бына нисек. Тимәк, ҡырҡындыларҙа һеҙҙең етәкселектең уңыштары сағыла?

-- Юҡ, етешһеҙлектәрҙе асып һалалар.

-- Аңлайым, аңлайым... Һеҙ ул тәнҡиттәрҙе, айырым папкаға тегеп, -- Поэзовский тәҙрә үтә тышҡа – төбө ҡомға терәлгән "Тимер утрау"ға күҙ ташланы, -- әрпешлектәрҙе бөтөрөү һәм пароходтар туктауһыҙ йөрөһөн өсөн, үткер ҡорал рәүешендә ҡулланырға итәһегеҙ?

-- Дөрөҫөн әйтәйемме? – Түрә уны "үҙ кеше" итеп мут йылмайҙы.

-- Дөп-дөрөҫөн.

-- Алайһа, саҡ ҡына яңылышаһығыҙ. Беҙ ул тәнҡит авторҙарының эҙенә төшөү маҡсатын ҡуйҙыҡ алға.

-- Бүтән эшсе-хәбәрселәргә үрнәк итеп күрһәтергәме?

-- Хе-хе-хе! – Түрә кеше шағирҙың яурынбашына әшнәләрсә ҡулын һалды. – Ғәфү итегеҙ, сәйәси яҡтан дағаланып етмәүегеҙ һиҙелә... Эш шунда, әгәр ул йүгерек ҡәләмлеләр араһында үҙебеҙҙең пароходство кешеләре килеп сыҡһа, кесерткән менән арт һабаҡтарын уҡытыр, йәғни ҙә ки ҡаты шелтә сәпәр өсөн!

-- Бәй-бәй, күрәләтә тәнҡитте һәм үҙтәнҡитте ҡыҫыу була түгелме был? Партиябыҙ...

-- Партия үҙебеҙҙеке!

-- Шулай ҙа ул, тик...

Ләкин түрә, күҙҙәре уттай янып, ҡул төйҙәһе менән һауаны ҡылыс һымаҡ киҫте:

-- Стоп! Үҙегеҙ коммунисмы әле һеҙ? Әлбиттә, коммунистыр, коммунист булмаған шағирҙан "танылған" яһамайҙар.

Был сетерекле хәлдә Поэзовский "эһеммм... эйе, шулай" тип эйәк ҡағыу менән сикләнде; үҙен, ғариза биреп ҡараһа ла, сәйәси яҡтан өлгөрөп етмәгәнһең, тип, партияға алмауҙарын әйтергә теле барманы.

-- Тимәк, коммунист та, яҙыусы ла булараҡ, биш бармағығыҙ кеүек яҡшы белəһегеҙ: матбуғатҡа өйөлгән ***сүп-сарҙы*** главлит ҡына һыҙып ташлап бөтөрə алмай бит ул – уның ҡулы араһынан һарҡығандарын рəсми баҫма биттəренəн үҙебеҙ ҡырсып таҙартырға тейешбеҙ!

-- Тəңҡит һүҙен ***сүп-сар*** һанайһығыҙмы?

-- Партиябыҙҙы, совет власын ололап маҡтамаһа, -- бөтəһе лə гел сүп-сар!

Ошонан һуң Поэзовский ныҡышыуҙан төңөлдө, йəһəт кенə эшлəпəһен алды ла тайыу сараһын күрҙе. Сөнки бəлəнəн ситтəрəк йөрөү хəйерле – исем-фамилияңды "дело"һына теркəп, Яҙыусылар берлеге аша шелтə сəпəтеүе лə бик ихтимал...

Ул сəйəси пароходтың өгөт-нəсихəт төйəгендə мəғрифəт нурҙары эсеп ултырған арала, "Тимер утрау"ҙа хəлдəр шаҡтай үҙгəреп, дөйөм аврал иғлан ҡылынған, ҡарт капитан, ташҡын һыуҙың сəғəт һайын күпмегə ҡайтышын самалап, яҙмыш ҡулындағы ҡотҡарыу буксирын көтөп тормайынса, эш үтмəҫе борон тотҡондан үҙ көсө менəн ысҡынырға ҡарарлаған. Шул арала аҡҡош һынлы кəмə үҙенең бау-шоуҙарын "Тимер утрау"ҙан ысҡындырып, оҙон һуҙып хушлашыу ауазы бирҙе лə йылға үре тарафына ысҡынды, оҙаҡламай күҙҙəн дə юйылды.

Ҡулына ҡорал тота алған көллө пассажир-яугир, судно морононда һəм ян-яҡтарында ҡайҡайып, шөһрəтле командир бойороҡтарын көттөләр. Шағирыбыҙ ҙа дөйөм ҡорға ҡушылды.

Йоҡлапмы, эсепме шешенгəн механиктың машина майына ҡатып ҡолҡамаланған башы люктан күренеп, ялт-йолт ҡаранды ла, капитандың серле ымына буйһоноп, кире аҫҡа төшөп китте. Гөрөлдəтеп пар машинаһын эшлəткəйне, пассажирҙар, оҙон багор һəм һуйылдарын һыу төбөнə һəм өйəңке олондарына терəп, этəрə башланылар. Ҡайһы берҙəре, борт ситенəн үрелеп, бөрөләре һары көсөкләгəн тал толомдарынан тартты:

-- Һоп! Һоп!

-- Берҙəмерəк, егеттəр, йыр менəн! – тип рухландырҙы уларҙы "Тимер утрау" ҡараҫкыһына əйлəнə барған капитан, төтөнгə сумған төрөпкəле башын тəҙрəнəн һуҙып.

-- Шағир, дауай йыр! – тип ҡыҫкырҙы, яурыны аша ҡыя ҡарап, бите шыбыр-тирләгəн бесəйҡойроҡ мыйыҡлы Садиҡов та. Поэзовский, яҫы устарын төкөрөкләп, бөтə ауырлығы менəн багорға əүеште лə, көсөргəнешле күкрəгенəн ҡыҫынҡы тауыш сығарып, импровизацияланы:

Этəрегеҙ-тартығыҙ ҙа тик тормағыҙ,
Һоп! Һоп!
Түрəләрҙе маҡтағыҙ ҙа үҙегеҙҙе хурлағыҙ,
Лоп! Лоп!

Эсəгебеҙ өҙөлə, тип, ҡурҡмағыҙ,
Һоп! Һоп!
Эр-резинкəнəн ҡуйырҙар,
Ло! Лоп!

Яҡшымы, яманмы, үҙенә күрә ифрат тарихи бер мәлдең хөр кәйефен сағылдырған гимн ине был. Унарлаған боғаҙҙарҙан урғылған ҡеүәтле хор, Поэзовскийҙың тоноҡ яңғыҙ тауышын күк күкрәүеләй ҡеүәтләп, беләктәргә ғәйрәт өҫтәп, бейек аҡтирәктәр башына ырғылды:

Эр-резинкәнән куйырҙар,
*Л*оп! *Л*оп!

Халыҡ тотанағын тойоп дәртләнгән шағирыбыҙ, көр генә бер тамаҡ ҡырып алды *л*а, уғата ҡыуаныслыраҡ, *д*әртлерәк аһаң менән күплеттарҙың аҙағын тылсымланы:

Ҡулҡайыбыҙ бысрана, тип, тормағыҙ,
Һоп! Һоп!
Үлгәс һабынлап йыуырҙар,
*Л*оп! *Л*оп!

Ҡеүәтле хор йәнә гөрөлдәтеп күтәреп алды:

Үлгәс һабынлап йыуырҙар,
*Л*оп! *Л*оп!

*Л*әкин дәртле эшҡырҙылар күпме генә көсәнмәһен, тир ағыҙып ни ҡәҙәре генә һополдамаһын – ҡатып ҡалған “Тимер утрау” ҡупманы-ҡуҙғалманы. Уңышһыҙлыҡ кисергән ҡор, ауыр һулап, капитан рубкаһы эргәһенә эркелде.

-- Былайһа, башҡорт дуҫтар әйтмешләй, бөттө баш... – тине Джугашвили.

-- Да... ҡалды муйындар һерәйеп... – тине Поэзовский. – Киләсәгебеҙ һөмһөҙ ҡара буяуҙарҙа күренә.

-- Ошонда астан үлмәһәк ярар ине... – тип шикләнде уға-быға иҫе китеп бармаған Садиҡов та.

-- “Тимер утрау” ныҡ ултырҙы – ыскыныр тип уйлама *л*а! – Ут өҫтөнә кәрәсин ҡойҙо кемдер. Күңелдәрҙе һиҙелерлек томалап, “Тимер утрау”ҙа шомло паника болото ҡуйыра ине -- төрөпкәһен ауыҙынан ыскындырмаған капитан *д*а шәйләне быны. Йәһәтерәк һаҡлыҡ саралары күреү ниәте менән янып, кочегарка мөрйәһеләй төтәтә-төтәтә, каютаһынан сыҡты. Әммә ауыҙ асырға *л*а өлгөрмәне, дары мискәһенә төшкән оҫкондай, ҡолаҡтарҙы ҡапыл зәһәр шаңҡытып, зәһәрлеге менән әсе *л*ә, ҡурҡыныслы *л*а ҡатын-ҡыҙ сәрелдәне:

-- Разбуййй! Харап ҡына булдыҡ, һәләк булдыҡ, туғанҡайҙарым! Аллаһы Тәғәләнең ҡарғышы төштө беҙгә! Башыбыҙҙы ашанығыҙ, динһеҙ-дәһри мәлғүндәр! Алла бәндәһе батып барғанда ҡул ҡаушарып ҡарап тороп, ҡалҡып сыҡҡанында милициянан типтертеп батыртыусылар! Уф, һәләк булды бәхетһеҙ башҡайҙарыбыҙ! – Халыҡ массалары араһынан сәсе-башы туҙғыған суфыйбикә-ҡортҡа атылып килеп сыҡты *л*а судно артында брезент бөркәп ҡуйылған ҡотҡарыу кәмәһенә килеп йәбеште. – Төшөрөгөҙ йәшереп тотҡан ҡайығығыҙҙы

һыуға, сығарып ҡуйығыҙ ярға! Йәш рулевой суфыйбикәне “ҡайыҡ” янынан ҡысырыҡлай башлағас, ауыҙ асып ҡарап торған йәмәғәт тә дыуамалланып туланы:

-- Кәмәне! Кәмәне!

-- Кәмәне төшөрөргә!

-- Һамсып ятып үлеп ҡалырғамы ни?!

Күҙе аларған бер төркөм, массанан айырылып, кәмәгә ябырылды – иртәнсәк кенә буфет эргәһендә сират болартҡан өтөк егеттәр ине былар. Тәжрибәле капитан хәҙер уларҙың, һуҡыр себендәй өйөрөлөп, кәмәне һыуға ҡапландырасағын йәки ғарыҡ иткәнсе тейәләсәктәрен төшөндө. Паниканың утлы башын ошонда уҡ ҡырҡып һүндерергә кәрәк ине. Ҡарт бүре төрөпкәһен ҡуйы төтәтте, янғын һүндереү көпшәһен ҡулына алды. Тамам ҡыҙышҡан ике-өс әзмәүерҙең битен, сыжылдатып, һалҡын һыуҙан ялатты. Боҙоҡбаштар, тай типкәндәй сирғылып, күшеккән тауыҡтай шаңгеп, артҡа һыпырылдылар.

-- Батып үлергә теләйһегеҙме, каналъялар?! – Екеренеп, төрөпкәһе менән һелтәнде ҡартлас. *Ләкин* икенсе төркөм ҡубарылды *ла* үҙ төтөнөнән сәсәй башлаған төрөпкәсене уратып алды:

-- *Даешь*, ҡартлас, етәкселекте!

-- Пароходты ҡотҡара алырҙай эшлекле бәндә бойорһон!

-- Риза булмаһаң, тағарағыңды түңкәреп үк ташлайбыҙ!

Һуңғы янау капитандың үҙәгенә үтте, буғай. Йыуан тарбаҡайҙары менән елкәһен тырнап:

-- Кем *ул* һеҙҙең ҡор башы? – тип һорарға мәжбүр булды.

-- Ҡыҙыл сәсле бойорһон – зерә *ләкин* грамотный бит! – тине зәһәр телле ҡортҡа.

-- Шиғыр шығырлатып ҡына аҡса һуғып ятмаһын, халыҡҡа эш күрһәтһен!

-- Күрәһегеҙме, табан тайҙырырға самалай – милиция саҡырырға ғына зерә шәп бит *ул*! – Бынығы *ла* суфыйбикәнең ауазы – утҡа ялҡын өҫтәне.

--*Даешь* ҡыҙыл сәслене!

-- Тыңламаһа, һыуға ташлайбыҙ!

Арттағылар Поэзовскийҙы, төрткөсләп, майҙанға сығарҙылар. Шағир, танауы төбөндә айҡалған бала башы дәүмәлле йоҙроҡтарҙан күҙҙәре аларып, һуйылырға барған быҙауҙай һөйрәлде. Һүҙ әйтер әмәле ҡалмаған, ирендәре өҙөлөп төшөргә торған көҙгө япраҡтай ҡалтырай.

-- Батониҙар! Шомло “Тимер утрау”ҙа *ла* ҡанун барын, СССР Конституцияһы һәм Уголовный Кодекс ғәмәлдә икәнен онотмағыҙ, батониҙар! – Үрәпсегәндәрҙән дә үрә ҡарап дуҫын яҡлап бик ҡаты һөрәнләне ҡолға буйлы Джугашвили. – Һеҙ уның танылған шағир, *ләкин* ***ауыл шағыры*** икәнен иҫтән сығармағыҙ. Белгес түгел *ул* һеҙгә бының ише тимер-томорло эштә!

Таяҡ тығып болғатылған умарта күселәй шаулап ҡайнашҡан йәмәғәт ҡапыл тынды – урынлы киҫәтеү булды.

-- Егеттәр, тимер-томорҙарҙың ысын белгесе -- атҡаҙанған инженер бар ҙаһа арабыҙҙа! Шуның икмәге бит *был* какрас. Иптәш кеше Йолҡоғужин уның фамилияһы! – Асылған еккә дәррәү генә сөй ҡыҫтырып өлгөрҙө *был* Садиҡов, маладис! Ҡыҙыубаштар алан-йолан ҡаранды, инженерҙы тоторға самаланы.

-- *Даешь* Йолҡоғужинды! *Даешь* атҡаҙанғандың үҙен!

-- Бына ул Йолҡоғужин! – Халыҡ массаһы урталай ярылды ла тар һәм оҙон коридор хасил ҡылды. Бәләкәс кенә тумалаҡ башы таяҡ осона ултыртылған туп шикелле һерелдәп, сәсе-башы туҙғыған, өскөл профессор һаҡалында тоҙло балыҡ тәңкәләре йылтыраған өтөкйән, осаһына кемдер ҡаты типкәндәй, этәрелеп килеп сыҡты ла төрөпкәһен төтәтеп торған капитанға хәрбиҙәрсә честь бирҙе. Ҡарт бүре, ентекләп, уның тоноҡ күҙҙәренә, йылтырауыҡтар һибелеп, баштүбән ултыртылған елка кеүек өскөл һаҡалсығына текләп торҙо ла:

-- Фу, эсендә ҡырҡ һуҡбай-эт, илле бесәй үлеп ятҡандай аңҡый!

-- Замолчи, дурак! “Ароматы рая” ведь это! – Һәүәҫкәр ғалимдың бер ситтәрәк тоҙло балыҡ кимереп торған “ассистент”ы тройной одекалондың эсеүселәре даирәһендә киң билдәле исемен әйтте.

-- Но однако... алкаш табаһа был белгесегеҙ, егеттәр! – тип көйәләнде капитан.

-- Булһын! Уның ҡарыуы – инженер!

-- Ундай ғына эсмәй булмай инде!

-- Атҡаҙанған булһын да төшөрмәһен, имеш!

-- Дауай-дауай, инженерлығын күрһәтһен!

Йолҡоғужин, тоҙло балыҡ тәңкәләрен һаҡалынан палубаға һыпырып ташлап, бер атламаһы һынып юғалғанлыҡтан сүс бау менән тарттырылған ҡалын ҡара тирәсле күҙлеген һыпырып алды ла быялаларын керле ҡулъяулығы менән һәүетемсә генә һөрттө:

-- Ҡәҙерле иптәш кешеләр, кемдең кемлеген яҡшы белеп мөрәжәғәт ҡылдығыҙ! Мин был ҡарышҡан ҡайыҡты ҡомдан күккә ҡалҡыта алам, белгес ҡулынан килә торған хикмәт был. Тик бының өсөн айырым шарттар кәрәк, иптәш кешеләр.

-- Капитан, шарттар бир!

-- Шартлап китһәң дә үтә! – тип ҡыҙыша башланы ҡыҙыу баштар.

-- Ниндәй шарт-шорт? – Капитан белгескә турылап төтөн өрҙө. Тегеһе ауыҙ асырға иткәйне ләһ, төтөнгә сәсәп ғыж-ғыж быуыла башланы.

-- Ауыҙыңды ситкә бор ҙа шарттарыңды ярып һал! – тип түҙемһеҙләнде йәмәғәт. Йолҡоғужин, ыҫлы бурандан тайпылыбыраҡ хәл алғас, бармаҡтарын берәм-берәм бөкләне:

-- Беренсенән, тәүҙә мине ҡолаҡ һалып тыңлағыҙ. Икенсенән, бар миндә ундай ысул! Мин баҫыуҙа иртә яҙын ер һөргәндә һаҙға батҡан тракторҙарҙы тиҙ үк күтәртеү сараһын уйлап тапҡайным. Өсөнсөнән, был беҙҙең тимер ҡайыҡҡа ла тура килә. Дүртенсенән, ул ысулдың асылы шунан ғибәрәт: батҡан объекттың төтөн торбаһына полиэтилендан яһалған оло тоҡтоң нәҙегәйеп бөткән ауыҙын кейҙерәһең дә бактағы яғыулығын йәлләмәй яндыртаһың. Тоҡҡа төтөн төйгөсләнеп, тап Жюль Верн романындағылай һауа шары хасил була һәм убылған объектты үргә тартып сығара. Бишенсенән...

-- Туҡта әле, мырҙам, туҡта! Һин был тимер дәжжалдың торбаһына кейҙертерлек һәм өрҙөртөрлөк сикһеҙ дәү тоҡто ҡайҙан тапмаҡ булаһың? – тип бүлдерҙе ете үлсәп бер киҫә торған тире-яры һөнәрмәне Садиҡов.

-- Әлегә беҙҙең ҡул аҫтында ундай тоҡ юҡ, әлбиттә, ләкин ул киләсәктә илебеҙҙәге батырға һәләтле һәр объекттың айырылғыһыҙ әсбабы булырға тейеш–

бая ғына капитан ажғырғкан пожар һемәге кеүек! Әммә ул юк һәм бының өсөн мин ғәйепле түгел, ә минең ошо бөйөк уйлап табышымдың чертеждарын ҡабул итеп алыуҙан ҡырҡа баш тартҡан Фәндәр академияһы бюрократтары ғәйепле. Ләкин ышанам: ошо бәхетһеҙ "Тимер утрау"ҙы строгий фән нигеҙендә ҡалҡытыуымдың тарихы, ниһайәт, иң бөтәш бюрократтарҙың да күҙен асыр, ҡырыҫ академиктарҙы, һыҡтай-һыҡтай, терһәктәрен тешләргә мәжбүр итер. Яҡын киләсәктә йылға ҡайыҡтары ла, океан лайнерҙары ла бындай полиэтилен тоҡһоҙ сәфәргә сығмаҫ!

-- Мырҙам, һорауыма тура яуап бирмәнең. Тәғәйен ошо осраҡта нимәгә тынҡыслап тултырырға итәһең ул төтөндө? – Икенселәй бүлдерҙе һөмһөҙ Садиҡов.

-- Бының өсөн ҡатын-ҡыҙҙар колготкаһы ҡулайлы: үҙе – полиэтилендан, үҙе тоҡҡа оҡшап тора. Төтөн үткәрмәһен өсөн, тышына мазут һылайһың да... – Өйкөмләшкән колготкалылар араһында ҡупҡан яман ҡәнәғәтһеҙлек өҙә яҙғайны эшлекле ғилми башланғысты, ярай, капитандың ҡарлыҡҡан тауышы ғәҙеллек урынлаштырҙы:

-- Ниңә колготка-ҡалҡытҡа? Ниңә не салбар-шаровар? Беҙҙә ир-ат та, ҡатын-ҡыҙ ҙа бер тигеҙ – ете саҡрымлы аҙымдар менән коммунизмға барыусы илдә йәшәүебеҙҙе онотмайыҡ, туғандар!

-- Ни эшләргә һуң?

-- Иң ғәҙеле – ир-ат нәҫеленән башлау. Башҡаларға яҡшы өлгө күрһәтеп, ошонда уҡ күҙ алдында хөрмәтле уйлап табыусының ыштанын һалдыртайыҡ. Бәлки, бер ыштан да етер әле был эшкә.

-- Хуп! Ыштаны күтәрмәһә, ыштанһыҙ тәңгәленән үҙенә лә төрөпкә тығып, төтөн өрөп тултырырбыҙ. Ҡорһаҡ та бит бер ни тиклем тоҡто хәтерләтә... – тип йөпләне Садиҡов. Ауыҙ асып ҡатып ҡалған йәмәғәт тәрән тын алып, күк гөрөлтөһөләй көслө көлөү урғылтты. Был көлөүҙән бикле буфеттың тәҙрә быялалары зыңғырҙаны, хатта "Тимер утрау" үҙе лә дер-ҡалтырап, сайҡалып ҡуйғандай булды. Шөр ебәреп теҙ-быуындары йомшарған Йолҡоғужин шунда ултыра төштө. Ныҡ бүҫкәргән тройной одекалон шешәһен ҡуйынынан йәһәт сығарып, ғорҡолдатып уртланы ла, һыңар атламалы күҙлеген палубанан һәрмәп алып, шешә ҡапҡасын кире бора-бора, шаулы йәмәғәттән азатыраҡ тарафтарға йүгерҙе...

Асыуҙары баҫыла төшкән пассажирҙар, бераҙ тынысланып, яҙмыштарын Хоҙай ҡулына тапшырып, һәр ҡайһыһы үҙ мөйөштәренә таралды. Капитан да каютаһына инеп бикләнде. Беҙҙең өс дуҫ ҡына һаман судно морононда ҡалып, борттарҙы һәрмәп йүгерешкән болғансыҡ тулҡын һырттарын кисерҙе күҙҙән. Бараһы ерҙәренә барып етә алмауҙарынан, "Тимер утрау"ҙы ҡуҙғалтырға тырышып та, уңышһыҙлыҡҡа осрауҙарынан, ә ысын ҡотҡарыусыларҙың һаман килеп етмәүенән йөрәктәре янып, тәрән уйға баттылар; капитан ошо хәйерһеҙ ҡомлоҡта йәйләргә йыйынғандай тойолдо...

Һәм бына Поэзовский, Джугашвили, Садиҡов иптәштәрҙән торған абруйлы делегация, көслө нәфрәткә тулышып, киң йәмәғәтселек исеменән ҡарт бүренең каютаһына керҙе. Йылға короле, бөкөрәйеп, диванда ултыра һәм һөйөклө төрөпкәһен сурылдатып имә ине. Делегаттар сәләменә өндәшмәне.

Ҡулында ҡағыҙ ярпыһы һерелдәтеп, ҡыйыуһыҙланып торған шағирҙы юлдаштары этәреп алға сығарҙы һәм ул, һары мөгөҙ тирәсле күҙлеген танауы өҫтөнә элеп, балта аҫырлыҡ төтөнгә саҡ ҡына эйәләшкәс, сәсәй-сәсәй тантаналы уҡыны:

“Йылға экспресы капитаны ип. М.В. Молчуновҡа бер төркөм пассажирҙарҙан
Талап.

Беҙ, түбәндә ҡултамға сәпәүселәр, ныҡышмалы талап итәбеҙ беҙҙәрҙе кәмәлә ҡоро ярға сығарып ҡуйыуығыҙҙы...”

-- Кәмәнең төбө тишек!.. – тип ҡырт киҫте капитан.

“...Сөнки беҙҙең бер ҡабым да аҙығыбыҙ ҡалманы, ә судно буфетында...”

Капитан тарафынан, дөйөм ыҫмаҡты ярып, туп-тура талапсының ауыҙына төтөндөң ҡеүәтле яңы ағымы урғылды ла уның һулыш аппаратын ваҡытлыса сафтан сығарҙы. Шағир мөлдөрәмә күҙ йәштәре аша капитандың Шүлгән мәмерйәһеләй киң асылған, һөрөмләнгән ҙур ауыҙын абайланы, шунан һуң бөтә донъя төтөн ҡоймаһы артына ҡапланды.

-- Ишекте! Асығыҙ ишекте! – тип аҡырҙы ул, һерәйеп ҡатҡан иптәштәренең аяғы янына йығылып. Һәм, эҫе мунсала әсәһе көсләп сабындыртҡан сабый саҡтарындағылай әлһерәп, Садиҡовтың киң айырылған бот араһынан башын һалды тупһаға. Тыштан типкән һалҡынса һауа ирҙең танау тишектәрен иркәләп ҡытыҡланы, сәс бөртөктәрен таратып, маңлайы өҫтөндә уйнатты. Комфортлы был рәхәтлектән һис кенә лә ҡубынғы килмәй ине.

Грузин, һәр ваҡыттағыса дуҫ тоғролоғо һаҡлап, аяуһыҙ көрәштә баһадирҙарса башын һалған әшнәһенең ҡулынан ҡағыҙҙы алды ла йылы эҙенә баҫты.

-- Тыңлағыҙ! Уҡыу продолжается! – тине ул, көр тамаҡ төбөнән әсе йүткереп.

“...Сөнки беҙҙең бер ҡабым да мандариныбыҙ ҡалманы, ә судно буфетында хатта лимон ҡабығы ла юҡ...”

-- Ничего, түҙерһегеҙ. Башҡортостанда бер юлға ҡуян тиреһе лә сыҙаған, ти халыҡ, ә һеҙҙең тиреләр айыуҙыҡылай ҡалын – плавлавка килгәнсе бирешмәҫ.

-- Күпме көтөргә була? Ысынлап та ошонда йәйләргә итәһегеҙме әллә?

-- Ниңә йәйләргә? Күп булһа ике-өс көн, бер аҙна ултырырбыҙ. Ә бәлки... ҡышларға ла ҡалырбыҙ.

-- Мыҫкыл итмәгеҙ, капитан! – Тупһала ятып хәл йыйған шағир егеттәрсә тороп баҫты. – Культуралы учреждениеларҙа бындай һүҙ өсөн баштарынан яҙалар!

-- Ничего. Беҙҙең пароходствола фуражкаһын юғалтыусы ла юҡ әле.

Һарыуы ҡайнап яҡшы аттай сапсып торған Садиҡов, шағирҙы яурынынан ҡамтарып алып, алмалары өлгөргән ағастай һелкетте:

-- Етер телләшергә! Аҡ ҡағыҙға яҙылғаныңды дауамла!

-- Ҡхым-ҡхым... уҡыйым: "...Әгәр беҙҙең ошо коллектив талапты ҡәнәғәтләндермәһәгеҙ, төбө тишек "Тимер утрау"ығыҙҙа донъя мәҙәниәте ҡаҙаныштарын артабан һаҡлап ҡалдырыуҙы өҫтөбөҙҙән төшөрәбеҙ һәм һәр төрлө фажиғәле күренештәр була ҡалһа, партиябыҙ һәм кешелек донъяһы ҡаршыһында һеҙ яуаплы булырһығыҙ. Ҡултамғалар".

-- Ниндәй фажиға тураһында һүҙ бара?! – Капитан, кәкре төрөпкәһен ауыҙынан алып, күҙҙәрен яман аҡайтты.

-- Мәҫәләән... мәҫәләән... каннибализм! – Тейешле һүҙҙе саҡ эҙләп тапты шағир.

-- Һәм быны хәҙер үк – ошондағы төрөпкә эйәһенән үк башлаясаҡбыҙ! – тип ҡыҫтырҙы Садиҡов.

-- Бешереп тораһы ла юҡ – ыҫланған балыҡ кеүек! – Бынығын грузин өҫтәне.

Капитандың ҡарайған йөҙө етен таҫтымал төҫөн алды, уң мыйығы, һикәлтәле юлдан барыусы насар тәгәрмәсле арба кеүек, үрле-ҡырлы һикерҙе. Моғайын, һүҙ әйтер алдынан төрөпкәһен имергә лә онотоп, шикле ҡараш менән ирҙәрҙе үлсәне.

-- Ярай, һеҙҙеңсә булһын, әйҙә, -- тине, баш сайҡап. – Тишегенә эшләпәгеҙҙе тығып, осағыҙ менән баҫып ултырырһығыҙ!

Шатлығы күккә ашҡан Джугашвили, елкенсәк кавказ таҡмағы әйтеп, бер ырғыуҙа тышта булды, уның еленән ҡубарылған эшләпәһен ҡыуалап, шағирыбыҙ ҙа олаҡты. Түрәләр һүҙенә баһа белгән Садиҡов ҡуҙғалманы.

-- Резолюция! – тине һалмаҡ тауыш менән, шағир ҡулынан осоп төшкән талапнамәне капитан алдына һалып.

* * *

...Кәмә төбөндә брезентҡа ҡапланып йоҡлап ятҡан Йолҡоғужинды һөйрәкләп торғоҙҙолар. Аткаҙанған инженер инде одеколонын төпләгән дә, яртылаш сәйнәлгән тоҙло балыҡ ҡойроғон усына ҡыҫып, һауа йыртып хозур хырылдай ине. Иләҫ-миләҫлеген еңеп, тәрән итеп бер иҫнәгәс, ул да "фәндәрҙең "ф" хәрефен дә белмәгән, наҙандар һәм аңышһыҙҙар менән тулы был "тағараҡ"та ҡалмаҫҡа -- "зыялылар менән бергә" ярға сығырға теләне. Матростар кәмәне төшөрөп, ишкәктәрҙе ҡаптырғылағансы, Ҡояш та байып китте.

-- Туҡтағыҙ, мине лә ултыртығыҙ! – Сынаяҡтар тулы сөмкәһен һәм буш тоғон тотоп тайпаңдаған сауҙагәр ҡортҡа борт ситенән эйелеп сәрелдәне.

-- Алырғамы? – тине йәш рулевой. – Бик әсе сарбайлай бит.

-- Түҙер! -- Садиҡов ҡул һелтәне. – Икенсе рейс яһап олаҡтырырһығыҙ.

Ҡайыҡ төбөндә капитан ҡурҡытҡан эшләпәләй тишек шәйләнмәһә лә, таҡталары ҡорғаҡһып асылышҡан – ярыҡтарҙан һыу бытлығып йөҙәтә. Ишкәкселәр ашығып ишә башлағас, йәш рулевой аяғы аҫтында доңғорҙаған тутыҡ

күнәкте “зыялылар” яғына тибеп ебәреп, Симдең этлеген өҙлөкһөҙ һоҫоп түгә барырға ҡушҡайны, Садиҡов уны йәһәт кенә Йолҡоғужинға туғарҙы:

-- Һинең кеүек һәр фәнгә ләмаһир белгестең хәләл кәсебелер был. Сим төбөнә зәмбөрләргә теләмәһәң, сиселеп китеп кереш! – Һәм юл буйы тутыҡ күнәк инженерҙың ҡулында доңғорҙаны.

Ишкәкселәр талапсыларҙы яр ситендә тал түшәп, тиреҫ һалып ҡына әтмәләнгән пристань һымаҡ нәмәгә килтереп төшөрҙөләр ҙә “Тимер утрау” ҡырыйында һаман бер килеш сәрелдәп торған ҡортҡаны алырға киттеләр. Ҡотҡарылған өс робинзон, алаң-йолаң ҡаранып, тирә-яҡты байҡаны Яр суҡайында япа-яңғыҙ бағана, бағанаға ҡаҙаҡланған тутыҡ ҡалай киҫәгендә байраҡтарыбыҙ төҫөндәге ҡан-ҡыҙыл ҡотло яҙыу: ***“КОММУНИЗМ ШАҢДАҒЫ” --*** туҡталыштың исемелер, күрәһең. Шуны уҡыуҙан ғына ла эстәренә йор йылылыҡ йүгергән юлаусылар татлы хистәргә бирелеп, иҫәңгерәп торҙолар. Ләкин шанлы пристандә шунан башҡа күҙ терәрлек нәмә юҡ, төн ҡараһын йырып инде ҡайһы юҫыҡты тоторға? Өстағаныбыҙ ҡаңғырыбыраҡ ҡалғанда, һәр фәнгә маһир Йолҡоғужин әкрен генә иҫкән елгә танау терәп шәйләне лә:

-- Ел үренә йүнәлеү хәйерле, иптәш кешеләр, көмөшкә еҫе килә! – тине. Ләкин ғәйре танауҙар был аңҡышты хупламағас, яңғыҙ үҙе төн ҡабында һүрелде. “Тимер утрау”ға ҡайтып морон төрткән кәмәнән игелекле рулевойҙың сәфәрмәндәргә изге кәңәше бирелде:

-- Ярға перпиндикуляр юҫыҡта ике саҡрым барһағыҙ, “Коммунизм шаңдағы” тигән колхоз үҙәге булыр, күҙ бәйләнгәнсе етергә тырышығыҙ!

Һыу ҡайта башлағанлыҡтан, батҡаҡ ине яр буйҙары. Ластор-лостор аҙымлап, кәзә тырышлығы менән яҙылы бағана төбөнә күтәрелгәйнеләр, өсөһө тиң күләүеккә баттылар, Поэзовскийҙың ҡоро юлға иҫәпләнгән штиблеттары кәлйемәләй ләпшәйеп, сабатаға әүерелде. Ә шулай ҙа итекле Садиҡов һәм Джугели артынан һис ҡалышмай, күләүекте аша сыҡҡас, суҡай ташҡа ултырып, ойоҡтарын һығып кейҙе.

-- Батониҙар, тояһығыҙмы: был түңәрәк күлдән беҙҙең гүзәлдәрҙән-гүзәл Ҡара диңгеҙ еҫе аңҡый! – тип һоҡланды грузин.

-- Ысынлап та, тоҙ еҫе! – тине Поэзовский. Шул арала Садиҡов күләүектән сығып ятҡан йоҙроҡтай ташты алып, танауы аҫтында һәлберәгән бесәйҡойроҡтарын ике яҡҡа ҡайырҙы ла тәүҙә еҫкәп, артынса ялап ҡараны:

-- Шыр-тоҙ бит был – аш тоҙо! Тоҙтүбәлә ыристан сағымда тоҙ шахтаһы эргәһендә күргәнем бар ине ошондай тоҙлокүлде. Бында ла тап шундай тоҙ.

-- Башҡортостан мәғдәндәренең географик картаһынан ҡарап белеүемсә, Сим буйында аш тоҙо юҡ! –Ышаныслы кире ҡаҡҡайны шағир, шул ыңғайҙа табаны тайып, ҡабырғаһы менән һаҙға ҡапланды ла, сәсрәгән һыу ауыҙына тап килеп, күңелһеҙ асышы менән Садиҡовтың тоҫмалын дөрөҫләргә мәжбүр булды. – Тоҙ! Ысынлап та тоҙ бар бында, туғандар! Тоҙлокүл!

Джугашвили ҙа, сәмләнеп китеп, күләүекте сиңәртәй бармағы осона ғына элеп ҡапҡайны, бер үк һығымтаға килде:

-- Эйе, тоҙ, аш тоҙо. Ошо тирәлә тоҙ ятҡылығы булырға тейеш.

-- Их, Йолҡоғужин юҡ! -- тип үкенде шағир. – Ашҡа һала торған ул файҙалы минералдың бында ҡайҙан килеүен шартлатып әйтер ине, исмаһам.

Бакендарына ут ҡабыҙырға йәки ҡабыҙмаҫҡа тип илке-һалҡы төшөп килгән маяҡсы ағай тәрән зыялый юрауҙарға сик ҡуйҙы:

-- Ҡайҙан килһен бында тоҙ, Өфөнөң үҙенән булмайынса! Навигация асылғас та ошонда баржа туҡталып, сельпо магазиндарына күптән көтөлгән тоҙҙо бушатып киткәйне, хужалары ваҡытында килеп алмай, ямғыр аҫтында ятып ирене, ә ауыл халҡы тоҙһоҙ интегә һаман... Кисә генә сельпо әһелдәре килеп, ҡалған киҫәктәрен батҡаҡлыҡтан сүпләп алып тейәнеләр...

-- Һе! Былайһа, йәшәргә була бит, егеттәр: танауҙарыбыҙ – еҫ, телдәребеҙ тәм тоя! – Поэзовский, макинтошы ярты билдән батҡаҡланыуға ла ҡарамай, ихлас тантана итте.

-- Тойоуын тоя ла ул, тайып йығылабыҙ шул... Ҡараңғыла аҙашмаһаҡ ярар ине! – Пессимислығынан арына алмай мығырҙаны Садиҡов.

-- Рухығыҙҙы һындырмағыҙ, батониҙар! Бөтә юлдар ҙа коммунизм шаңдағына илтә! – Көйәнтәләй оҙон ҡулын ярҙан теүәл перпиндикуляр юҫыҡҡа һуҙып дәртләндерҙе оптимист Джугашвили. Ысын ҡафҡаз егеттәренсә һыңар салғыйын билбауына ҡыҫтырып, юл башлау ғазабын үҙ өҫтөнә йөкмәне. Ләкин күп тә бармайынса юҫығынан яҙлыҡҡас, боронғо сержант Сдиҡовтың башлығында ҡаҙ бәпкәләреләй теҙелешеп, бакенщик тапаған тар һуҡмаҡ төштөләр ҙә серле билдәһеҙлеккә уҡталдылар.

Кисәгеләй үк, күҙгә төртһәң күренгенеҙ килде төн. Ҡараңғыла бер-береһен юғалтышыуҙан ҡурҡып, диңгеҙҙә томанға осраған караптар ваҡыт-ваҡыт сың һуҡҡандай, әленән-әле тамаҡ ҡырышып барҙылар. Табандары аҫтында инде ышаныслы ҡоро ер булыуға ла ҡарамаҫтан, йөрәктәре һулығып, “Тимер утрау”ҙы тотҡондан нисек ҡотҡарырға икән?” тип борсолдо әшнәләр, борт ситенән ҡул болғап әсе сәрелдәгән меҫкен ҡортҡа күҙ алдарынан китмәне. Әммә алда уларҙы, моғайын, самауыры борҡоп ҡайнап ултырған йылы фатир, күпереп бешкән колхоз икмәге көтәлер – ләғнәтле сағылдан йыраҡлашҡан һайын, күңелдәре лә көрәйә барҙы.

Саҡрым ярымдай үткәс, шайтан бутап, ахыры, көтөлмәгән соҡорға юлыҡтылар. Биткә сәпәгән шыйыҡ тал ҡыуаҡтарын йырып үтеп, соҡорҙоң теге яғына саҡ сыҡтылар, ләкин һуҡмаҡ дауамы табылманы. Шулай ҙа ҡыйыулығын юймаған төркөм, яҡты коммунизмға барыусы ысын совет кешеләренә хас ҡорос рух ныҡлығы һаҡлап, таш яуһа ла кеше торлағына етмәйенсә туҡталмаҫҡа, барырға ла барырға, тигән ҡаһармандарса көр ҡарар ҡабул ҡылды.

Ҡоторонҡо Сим буйҙарында маяҡтар янмағандай, унан алыҫта ла шул уҡ хөртөй хәл – Күктең яҡты маяғы Ай тоҡандырылмай ҡалдырылған, шайтан ҡараңғылығына тулы хоҡуҡ бирелгән. Һуҡмаҡһыҙ һуҡтырғас ни, әленән-әле төмөздәргә, иҫке йомран убаларына һөрләгөп тәкмәсләнеләр; берәүҙең дә ауыҙ асып һүҙ әйткеһе килмәне, күңелһеҙ тынлыҡ һаҡланды. Был өнһөҙлөк аҡрынлап теңкәләренә тейҙе, кемгә лә булһа тәүге бураҙнаны ярып, тос фекер орлоҡтарын илгә сәсергә кәрәк ине. Быны, әлбиттә, нәфис һүҙ оҫтаһы – шағирыбыҙ үтәне.

-- Их, рәхәт тыуған илемдә! – тип һамаҡланы ул, киң ҡоласы менән һауаны ҡосоп. Аҙыраҡ тәпәйләгәс: -- Бесән еҫе аңҡый елендә! – тип өҫтәне. – Ятам, тиһәң – яҫтыҡ үләне, аяҡ һуҙһаң – ере күләмле!..

-- Ере күләмле лә ул, карманы тарыраҡ шул, хе-хе-хе!..

-- Карманы ла дарманлы! – Ялҡыны ҡабынған шағир, үҫмерҙәй киреләнеп, Садиҡовтың күҙгә төрткән пессимислығына ҡаҙалды. – Иренмәгән кешегә көн итергә була хәҙер. Эшсәндәрҙең хеҙмәт хаҡы көндән-көн ырап арта.

-- Ә беҙҙең тире-яры иләүсе “Напрасный Труд” әртилендә көндән-көн кәмей генә, тап ҡортҡаның ҡыҫҡарған тирехеләй...

-- Әртилегеҙ әрпештер. Нимә әтмәләйһегеҙ?

-- Түрәләр нимә ҡушһа – шуны. Тиренән – яры, ярынан тире яһайбыҙ.

-- Абба, башҡорт ызнакумым әйтмешләй! Әфлисундан – апельсин, апельсиндан әфлисун яһау һымаҡ була түгелме һуң был? – Сәйер яуап грузинды ла, шағирҙы ла сәмләндерҙе. Садиҡовтың түгелеүен көттөләр, әммә бесәйҡойроҡ мыйыҡтар араһынан өн төхөрә сыҡманы.

-- Ғәфү итегеҙ, нисек аңларға һеҙҙе? – тине шағир.

-- Нисек бар – шулай аңлағыҙ.

-- Ана шул “нисек бар”ы аңлашылмай бит, -- тине грузин. Тире-яры маһирының ауыҙы, ниһайәт, асыла төштө:

-- Сиҙәм күтәреү кампанияһын беләһегеҙ бит. Ауыл хужалығыбыҙҙа көтөүлектәр тамам һөрөлөп бөткәс, һарыҡ баштары кәмене, ә тире-ярының бураҙнала үҫмәүен беләһегеҙ. Эшһеҙ ҡалған эшсе синыфын ҡытлыҡтан сығарыу өсөн, әртилебеҙҙең яртыһын тимер-томорға бәйләнеләр ҙә тиреселәр тимерсе булып киттеләр...

-- Шунан?

-- Ултырған да шыуған! Тәүҙә колхоз-совхоздар өсөн һәнәк эшләп сығарҙыҡ. Һәнәктәребеҙҙең йәптәре бер күтәрем бесәндән үк һынғанлыҡтан, һатып алыусылар кәмене, складтарыбыҙҙа урын етмәй башланы. Уйланыҡ-уйланыҡ та, үтмәй ятҡан һәнәктәрҙең йәптәрен ҡаҙауға әйләндерҙек – хәҙерге заманда аҙ ҡаҙау кәрәкме ни, шағирыбыҙ әйтмешләй, ете саҡрымлы аҙымдар менән коммунизмға барған ауыл ерендә! Әммә яңы етештереүсәнлектең ярты йыллыҡ юбилейын тантаналы шаулатырға ла өлгөрмәнек, ҡаҙауҙарыбыҙ йөкләп-йөкләп кире ҡайта башланы. “Тырышҡан – табыр, ташҡа ҡаҙау ҡағыр”, тигән мыҡты мәҡәлгә лә ҡарамай, колхоз-совхоз оҫталары күпме тырышһалар ҙа, ҡаҙауҙарыбыҙ ташҡа түгел, серек ағаҫҡа ла бармағанлыҡтан, уларҙы Белорет металлургия комбинатының мартен мейестәрендә иретергә оҙаттыҡ та, әйләнеп ҡайтҡан саф ҡоростан көрәк ҡойоуға күстек...

-- Ә табыш? – Төп мәсьәләне ҡуҙғатты Кавказ улы, тауар етештереүҙең яңы ысулын сағыу ҡояшлы Гутаутаға күсереү ниәтендәлер, моғайын.

-- Эш табышта түгел, ә тауар әйләнешендә, ти беҙҙең экономияһыҙ экономика белгесе, Карл Маркс “Капитал”ының өҫтөн аҫҡа әйләндергән мут әһел. Ысынлап та шулайҙыр. Сөнки беҙ етештергән тауар түңәрәк буйынса *әртил – колхоз-совхоз – мартен мейесе -- әртил* араһында ситлектәге тейендәй әйләнеп йөрөй, шул әйләнеш һыҙығындағы барлыҡ хеҙмәтсәндәрҙе лә эш менән тәьмин ҡыла. “Социализм ҡоролошонда иң мөһиме – эш урының булыу ул. Табыш килтерһәң дә, килтермәһәң дә, эш урының бар икән – дәүләт ҡаҙнаһынан умырып алыр тариф ставкаң да бар”, -- тип аңлата беҙгә баяғы Карл Марксты ла уҙып киткән белгесебеҙ. Йәғни эшләһәң-эшләмәһәң дә, минимум эш хаҡың гарантияланған.

-- Эээ, булманы былайғас. Беҙҙең Гутаутала был күптән үтелгән этап. Минимумдан уҙып китеп, максимумын тапҡанһығыҙ икән тип торам... -- Өмөтһөҙ ҡул һелтәне Джугашвили. Поэзовский маңлайын баҫып уйланды:

-- Ниңә һеҙ, социализм экономикаһын үҙләштергән башығыҙҙы хур итеп, әҙәм аяғы баҫмаған был яҡтарҙа ҡаңғырып йөрөйһөгөҙ?

-- Ә шулай ҙа тире иләүҙең шәп белгесе бит мин, ҡустым. Был яҡтарҙа аҫыл айыу, төлкө, ҡондоҙ тирелһе күп, тиҙәр.

-- Цехығыҙҙы тергеҙергә форсат бирерҙәрме һуң?

-- Уныһы икеле, ҡустым. Үҙемдең кустарсылыҡ әртилемде асырға хыялланам...

Аяғөҫтө йоҡомһорау кисергән Джугашвили, һуңғы мәғлүмәттән ҡапыл йәнләнеп, үләндәргә әләгә-һөрлөгә бейене:

-- Батони, бына бынығы минеңсә! Ал мине ләә аҫыл компанияңа, подпольный фабрика ойоштороу серҙәрен яҡшы беләм!

-- Ҡарарбыҙ, ҡарарбыҙ... -- Садиҡовтың ауыҙынан башҡаса өн сыҡманы.

Алыҫтан эт өрөүенә юҫыҡлап, юлдаштар хәтһеҙ ҙур ауылдың кәртә арттарына төкәлгәндәр имеш. Бабалары абрек булып дан ҡаҙанған ҡафҡазлы, һауаны тәрән һулап, яңы бешкән бойҙай күмәсе һәм ҡаймаҡ еҫе тойоуын ҡыуанысла белдерҙе.

-- Тумырабыҙ таҡ тумырабыҙ! Үҙем генә ләә Казбектай ҡалас һәм Рица күлеләй ҡаймаҡты юҡ итер инем! – тине ул. Тегеләре ләә сабырһыҙланып алҡымдарын уйнаттылар һәм, Казбек тиклем үк булмағанда ла, Урал үркәстәренең берәйһе дәүмәллеһен һәпелдәтергә әҙер икәнлектәрен белдерҙеләр. Әммә йәнә мажараға юлығырға яҙған икән әле Хоҙай Тәғәлә: урам буйлап типтерергә сыҡҡан шаулы бер өйөргә тура килеп, хәтәр ҡапҡанға ҡапҡанлыҡтарын абайламай ҙа ҡалдылар. Боҙоҡ телле гармун тартып, аҡыра-баҡыра хәшәрәт йырҙар йырлап артҡы ҡапҡанан сыҡҡан унлап хәмерйән һырып алды һиммәтле өстағанды. Егеттәрҙән һаҫы көмөшкә аңҡый, был өсәүҙең ситтән килгән ят кешеләр икәнлеген дә шәйләргә етмәне хәлдәре.

-- Һа, Ғәбделмөбәрәк! Яратам мин һине, дуҫкайым! – Ғырылдауыҡ боғаҙлы әзмәүер Поэзовскийҙы муйынын өҙә яҙғансы ҡыҫып ҡосаҡлап, керпе һыртылай тырпай һаҡаллы яңағын уның яңағына ҡыҫып терәне, ҡайнар туғанлыҡ хисе менән битен шайыҡлап, танауын үбеп алды. – Һәй, шәп булды килеүең! Дуҫтар, типтерәйек һөйөклө ҡунағым хөрмәтенә!

-- Типтерәйек, ур-ра! – Элеп алды шаулы ҡор; мосафирҙарҙың ай-байына ла ҡарамай, һәр берһен икешәр әзмәүер ҡосаҡлап, эргәләге йәшелсә баҡсаһына һөйрәкләнеләр. Түтәлдәр башында бураҙна буйына теҙелешеп ултырып, ҡабымлыҡҡа яңы шытҡан һуған ҡыяҡтарын өҙөп, сирекле шешә боғаҙынан әсе еҫле шыйыҡлыҡты алмашлап һемерҙеләр.

-- Егеттәр, был ни хәл? Уттай ҡыҙыу эш ваҡыты – яҙғы сәсеү бит хәҙер! – тип Садиҡов киҫәтеп ҡараһа ла, ҡолаҡҡа элеүсе булманы:

Әсеме, сөсөмө,
Беҙ эсмәгән кешеме?
Кисен иҫерек, иртән айыҡ –

Даешь, колхоз, эшеңде!

Ғырылдауыҡ боғаҙлыһы шешә муйынын Поэзовскийҙың ауыҙына көсләп тыҡты:

-- Ғорҡолдатып йот әле, туғанҡайым, күрешеү хөрмәтенә!

Поэзовский, күңеле болғанып, ағыу сығанағын кире этәрҙе:

-- Рәхмәт, рәхмәт, теләмәйем! – тип тыбырсынды.

-- Полкташ дуҫыңды хөрмәтләмәйһең, стройбатта булғандарҙы оноттоң дамы әллә? Икәүләшеп офицерҙар бәҙрәфенең ямына төшөп туң төпөрөн таҙартҡанды, ә?! Йот берҙе ғорҡолдатып!

-- Йот берҙе! Йот берҙе! – тип таҡмаҡланы шашҡын ҡор. Бындайҙы татып күрмәгән Поэзовский, күҙ буяу өсөн генә тип, бер йотомон ҡапҡайны, укшып ситкә ҡайырылды *ла* ашҡаҙаны әйләнеп сығырҙай тартышты. *Ләкин ләғнәтле* шешә тағы ауыҙына терәлде. Ғырылдауыҡ боғаҙлы ир шағир муйынын мыҡты беләге менән ҡыпсыуырҙай һығып, башын салҡанайттыртып, "пей до дна, пей до дна, боевой товарищ!" тип таҡмаҡлай-таҡмаҡлай, зәһәр шыйыҡсаны тура уның тамағына ҡойҙо, ярты*лашы* күлдәк яғаһы аҫтынан ыштан бөрмәһенәсә сылатып аҡты.

-- Маладис! Маладис! Йот йәнә! – тип тантана ҡылды шаулы ҡор. Теге икәүгә сират етмәҫе борон, дөйөм бәхеткә күрә, сығанаҡтың ҡороуы асыҡланды. Буш шешәне түтәл эсенә атып бәрҙеләр ҙә, шаулашып, ҡабат иркен тибенлеккә сыҡтылар. Гармун ҡайышын иңенә тарттырған ғырылдауыҡ боғаҙлы, хәрби фуражкалы ҙур башын ярһыу арғымаҡтай сайҡап, тумбыҡҡан йыуан бармаҡтарын телдәр өҫтөнән ҡыуаланы. Кавалерист итегеләй оҙон һуҙылған күректән күкле-йәшелле тауыштар хаосы урғылды – сит илдәрҙән ябырылған яңы заман көйө төпкөл ауылдарҙы *ла* ҡармай башлағайны шул. Гармун ҡабат ауыл көйөнә күскәйне, ғырылдауыҡ боғаҙлының ҡушылып йырлауын әшнәләре күтәрҙе:

Яныйымдан парлы мунса яҡтырттым,
Эләүкәгә ятып арҡа саптырттым... –

Ҡалған ике юлын яҙып бирегә мөмкин түгел...

Ғырылдауыҡ боғаҙлы кинәт моң даръяһын өҙөлдөртөп, гармунының ҡашағаһына башын һалып һулҡылданы:

-- Ғәбделмөбәрәк дуҫкайым! Яугир полкташым минең! Аңламайҙар мине бында, бер кем дә аңларға теләмәй... Әпсәләрен фәләнә иткере ҡорошҡан ҡарсыҡтар *лафканан* шәкәр һаттыртмайҙар миңә, үҙемдең эшләп тапҡан хәләл аҡсама...

-- Һаттыртмаҫтар шул, үҙең шәкәрҙән көмөшкә ҡайнатып ятҡас. Һеҙ алкаштар арҡаһында тоҙ бөттө, шәкәрләп сәй эсә алмайбыҙ! – Көтмәгәндә ситән артынан асыулы ҡатын-ҡыҙ киҫәтте.

-- Тоҙ кәрәкме ни һеҙгә, фәләнсәмде килеп ялағыҙ! – Ғырылдауыҡ боғаҙ ситән аша төкөрҙө. Ошо албырғаныштан файҙаланып, беҙҙең юлдаштар хәтәр

ҡорҙан яҙлығырға итһәләр ҙә, егеттәр ҡосаҡлап алғандар ҙа һис ебәрмәйҙәр ине. Поэзовскийҙың “полкташ”ы, уғата ярһып, ситән артында суҡылдаусыға екерҙе:

-- Молчать,старушка! Ғәбделмөбәрәк дуҫкайым, кем имеет право миңә, Ватан һаҡсыһына, шәкәр-мәкәр һаттыртмаҫҡа? Ҡайҙа күргәнегеҙ бар бындай законды? Молчать, сука! Гәзиткә яҙасаҡмын, прокуроръың үҙенә етәсәкмен!

-- Ет, ет, көмөшкә ҡайнатҡысыңды ла күтәреп илт! Өйөрөгөҙ менән эскегә һабышып, пристандәге аш тоҙон батҡаҡҡа батырыуығыҙҙы ла әйтерһең.

-- Ҡалғанын кем ҡайтарып ҡуйҙы сельпоға, сволочь? Мин түгелме?! – Ғырылдауыҡ боғаҙ ситәндән ҡаҙыҡ һурырға иткәйне, ҡорҙаштары уратып алдылар, ығы-зығылы шул арала өстағаныбыҙ һыпырылып, ҡараңғы урам осонаса эләгә-тәгәрәй йүгерҙе, ауылдан ситтәрәк йымылдаған яңғыҙ утҡа яҡынайып, икеләнеберәк ҡалды: кем белә, унда, бәлки, баяғыларҙан да шомлораҡ шомлойән – әкиәттәге аҫҡы теше түшәмгә, өҫкөһө иҙәнгә терәлгән мәскәй әбей көтәлер?..

Романтик шағирҙың үкенесенә, практик грузин менән бесәйҡойроҡ мыйыҡлының ҡыуанысына ҡаршы, тауыҡ тәпәйе өҫтөнә ҡоролған хәтәр өшәләккә түгел, ә заманса колхоз фермаһының яҡшы уҡ таш нигеҙле ҡарауыл йортона барып инделәр. Һәм уларҙы баяғы ҡарсыҡ түгел, ә алма-алһыу яңаҡлы, көләс йөҙлө утыҙ йәштәрҙәге һауынсы ханым йылмайып ҡаршыланы. Һауынсылар фермала көн дә сиратлап киҙеү торалар, бөгөн уның төнө икән. Туҫтаҡтарға мөлдөрәтеп ҡойоп биргән эсемлеге лә һис тә әкиәти булмайынса, ә телеңде йоторлоҡ ысын ныйыр һөтө, ҡаҙ ҡанатылай дәү телемле икмәк тә ялған түгел ине. Шулайғас, асығып-сарсап килгән мосафирҙарҙың, туҫтаҡтарҙы бер тындан уҡ ҡоротоп, яңынан тултыртыуҙары ла ғәжәпләндермәҫ.

-- Уй бисараҡайҙар, уй меҫкенкәйҙәрем! – тип, йәлләп бөтә алманы йомшаҡ күңелле ханым, мосафир ир-аттың параходтағы пар машинаһы рычагтарылай йылғыр уйнаған яңаҡтарын, аслыҡ ялтырауы сағылтып төпкә батҡан моңло күҙҙәрен күргәс. – Ниндәй дөмөккөрө төшөрҙө икән һеҙҙе был көнгө?!

Уңған бойҙай күмәсе менән яңы һауған һөттөң һуңғы йотомдарын ашҡаҙанға баплап оҙатҡас ҡына, ир-егеттәрҙең йөҙҙәренә төҫ керҙе. Һынған ҡанаттарын күтәреп ҡуйҙылар, теҙгә теҙ һалып, дәрәжәләнеберәк ултырҙылар. Садиҡов, ҡуйы һөткә йылтыраған бесәйҡойроҡ мыйыҡтарын ыңғай һыпырып ебәргәс, олпат тамаҡ ҡырып, былай тине:

-- Һеҙҙең ҡәҙерле ауылдашығыҙ ҡалдырҙы беҙҙе был хәлгә, һылыуым.

-- Нисек улай беҙҙең ауылдашыбыҙ?

-- Бына шулай. Ауылығыҙҙа йәшәгән маяҡсы йораты күп йоҡлай икән. Шуның арҡаһында тимер кәмәбеҙ ҡомға ултырҙы.

Һауынсы кеткелдәп көлдө:

-- Эй, Ғирфанды әйтәһегеҙме? Йоҡламай, ә маяҡ шәмдәренең майын көмөшкәгә алмаштыра ул!

-- Уның үҙен алмаштырырға кәрәк ине, арт яғына мыҡты тибеп!

Һауынсы йәнә кеткелдәне:

-- Эй ағайым, мыйығың оҙон булһа ла, сабый ғына икәнһең! Улың өҫтә түрә булып ултырһа, типтертер инеңме үҙең?

Поэзовский, Садиҡовтың хәлде күрәләтә киҫкенләштереүен шәйләп, һүҙҙе борорға булды: һауынсының кәйефен ҡырыу файҙаһыҙ, сөнки унан ижади маҡсатта колхоз тормошон һорашырға уйлай ине.

-- Эһем... фермала эштәр нисек бара? Уңыштарға ирешәһегеҙме? – тип белеште ул.

-- Ирешкәндә ирешәбеҙ, ирешмәгәндә бирешәбеҙ.

-- Һем... Мәҫәлән, быйыл нисә баш һыйырҙы квадрат-оя ысулы менән үрсетергә йыйынаһығыҙ?

Ошо һорауҙан һауынсы ханым тораташтай ҡатып ҡалды. Саҡ телгә килеп:

-- Ундай ысул бармы һуң? – тип күҙҙәрен мызылдатты.

-- Батони, нисә гектар кукурузды, тип әйтергә теләйһеңдер һин? – Грузин дуҫы Поэзовскийҙың бөйөрөнә ауырттырып төрттө. Ләкин шағирҙың сая ҡарашы Ҡафҡаз улын ҡымшанмаҫлыҡ тышауланы:

-- Юҡ, һыйырҙы! Ауыҙым ни һөйләгәнен ҡолағым яҡшы ишетә!

-- Электән беҙҙә мал-тыуарҙы яһалма ҡасырып түлләндертә торғайнылар, әммә “квадрат-оя” тигән ысул ҡулланылғаны юҡ шул... -- тине, ниһайәт, һушына килгән һауынсы. Поэзовский үҙе лә еңелсә генә хаталанғанын төшөнә башланы, күрәһең – яһалма ҡыуаныслы хихылдап көлдө лә “ҡойроҡто һыртҡа һалды”:

-- Сразу күренеп тора, һеңлекәш, агрозоотехника фәндәре менән яҡындан таныш булыуығыҙ...

-- Ә һин, ағайым, ундай фәндәр өлкәһендә минән дә уҙҙырып ебәргәнһең! – тине телгәр һауынсы. Артыҡ телләшергә форсат ҡалманы.

-- Шабаш! Әүен баҙарына китергә ваҡыт! – тине Садиҡов. Сисенеп, сыланған кейемдәрҙе киптерергә элеп, кәзә тиреләре түшәлгән буй һикегә һуҙылдылар.

* * *

Ҡунаҡтар һуңлап уянды. Торғандарында сәғәт 9-ҙы һуҡҡайны, ә һауынсы ханым иртәнге эштәрен бөтөрөп ҡайтҡан. Ашыҡ-бошоҡ йыуынып, олағыу сараһын ҡараһалар ҙа, көтөлмәгән хәл саҡ ҡына тотҡарланы. Ни өсөн, тигәндә, һауынсы ханымды шағирҙың туҙғыған башы ифрат борсоно. Уҡмашып симәлешкән ҡолҡамаларҙы нисек тә һибелдертеп тарайһы, Садиҡов мыйыҡтары кеүек шымартып, ҡупшыландырткыһы килде, моғайын. Төнгө самогондан шаҡтай елһенгән йөҙлө Поэзовский, тәҙрә төбөндәге көҙгө ярсығына эйелеп, ҡаш-күҙен ипкә килтереп маташҡанда, арттан тороп, оҙон һаплы баш тарағын һалды ханым ҡыҙыл башлының алдына. Тик тегеһе иғтибар итмәне быға, ҡыҙыл ялҡын телдәрен һары эшләпәһе менән мыҡты баҫтырҙы ла көҙгө янынан шылтайҙы. Хәйләһе барып сыҡмаған сәмле ханым, уҡтай атылып килеп, үҙе лә һиҙмәҫтән, буғай, һалам эшләпәне төртөп осорҙо, оҙон тараҡ тештәрен, ләззәтләнеп, ҡыҙыл күбәгә батырҙы. Алйып һыны ҡатҡан шағир, күҙҙәре шаҡырайып, иҙән уртаһында тора, рәнйетелгән сабыйҙай иламһырап, өнһөҙ һорау менән әле Садиҡовҡа, әле Джугашвилиға төбәлә. Ҡафҡаз улы батонийының ғазапланыуын оҙаҡ күтәрә алманы, мауығып тараған һауынсының ҡолағына эйелеп шыбырҙаны:

-- Ни эшләйһегеҙ -- күҙегеҙҙе асыбыраҡ ҡарағыҙ: сәскә атыусы социалистик Ватаныбыҙҙың бөйөк йырсыһы Поэзовский үҙе бит был! Танылған ауыл шағиры!

-- Поэзовский?! – Илгәҙәк ханым ғәжәпләнеүҙән тарағын төшөрөп ебәрҙе, ултыра төшә яҙҙы. – Булмаҫ, шаяртаһығыҙҙыр! Рәзе килә Поэзовский тиклем Поэзовский бындай төпкөлгә?

-- Ай, Ҡояш! Ышанмаһаң, паспортын ҡара.

-- Эйе, Поэзовский буламын, -- тип дөрөҫләне һушына килгән ҡәләм эйәһе үҙе лә. Ханым кеткелдәп көлдө:

-- Ай-буй! Тимәк, һеҙ булаһығыҙ ауыл тормошо тураһында поэмалар фәстереүсе? Һис тә бындай ҡыҙыл сөгөлдөр башлы итеп күҙ алдыма килтермәй инем. Уҡыным мин уларҙы, уҡыным:

Ауыл – минең аяҡ тарамышым.
Ауыл – минең терһәк һөйәгем.
Паровоздай киң елкәмә һалып,
Ауыл йөгөн йөкмәп киләмен!
Ауыл йырсыһы мин, һөйгәнем,
Ауылда – нәҡ балыҡ күлдә мин!

-- Бына бит: бөйөк булғас, тылсымлы шиғри юлдарың ил күңелендә -- береһен-бер ҡалдырмай ятлап алғандар! – тип тел шартлатып һоҡланды Джугашвили.

-- Эйе, бының ише мөғжизәләрегеҙ хәтеремә мәңгелеккә һеңешеп ҡалды! – Ихлас күңелдән һөйләне шиғриәт һөйөүсе һәм авторҙың күңелен тамам иретте:

-- Шул тиклем дә көслө тәьҫир иттеме ни әҫәрҙәрем?

-- О! Мин һеҙҙең ауыл шиғриәтен ғүмерҙә лә онотасаҡ түгелмен! – Ишекте асып һөрәнләне: -- Ҡыҙҙар-ҡыҙыл ауыҙҙар, тиҙерәк инегеҙ бында – беҙгә теп-тере шағир Поэзовский үҙе килгән!

Сыр-сыу ҡубып, ферма халҡы тар өйгә кереп тулды:

-- О Поэзовский! Беҙ һеҙҙе күптән беләбеҙ, һеҙ бит берҙән-бер ысын ауыл шағиры! Колхоз тураһында яҙған һәр һүҙегеҙ көллө халыҡҡа мәғлүм! – Төрлөһө төрлө яҡтан ҡамап алдылар ҙа ҡосаҡлап суп та суп үбергә керештеләр. Бындай хәлде үҙ ғүмерендә тәүгә кисергән автор ҡыуаныстан иләҫләнеп иҫерҙе, шыҡһыҙ ғына ҡарауыл йорто – гөл баҡсаһы, ә ҡыҙ-ҡырҡын шунда осҡан күбәләктәрҙәй күренде. Дәртле хистәрҙән ҡанатланып, клеенкаға төрөлгән баяғы ҡалын ҡуйын дәфтәрен һөйрәп сығарҙы.

-- Иптәш ҡыҙҙар – доярҡалар! Мин һеҙгә үҙемдең яңы ғына яҙып өлгөрткән балладамдан өҙөк уҡымаҡсымын. Ферма тураһында!

-- Просим, просим! – Ус сәбәкәйләне шаяндар. Шағир, сикһеҙ хиссиәтләнеп, бәйгелә ал бирмәй сапҡан толпарҙай ярһый-йөрәкһей уҡыны:

Быҙауҙарын, һөйөп, доярка
Ап-аҡ биләүҙәргә ятҡыра,
Моңло бишек йырын йырлай ҙа
“Билдәшкәй”ҙең күҙен йомдора.
Һәм һөт ҡуя өҫтәл өҫтөнә,
Уянғастын тороп эсһен, тип.

Коммунизм өсөн көрәшкә
Ғәйрәтле, ныҡ булып үҫһен, тип.

-- Нисек, ярайһымы, туғандар?
-- Ярамаған ҡайҙа ул!
-- Зерә ла шәп!
-- Шәптең аръяғында!
-- Иҫ киткес, эс киткес!
Шағирҙы сара күргә саҡырған ханым етди теләк белдерҙе:
-- Аҡ биләүҙәргә биләгәс, быҙауҙың буталлы карауаты ла булһасы!
-- Эйе-эйе! Салфетка ла кәрәк иртән тороп парлы һөт эскән сағында. Һөттө ҡалаҡ тотоп эсһә, бигерәк тә килешер!
-- Быҙауҙарҙың иртән торғас радио буйынса гимнастика яһауҙарын онотмағыҙ!
Поэзовский тыңлаусыларының шаян тел төбөн һис кенә лә шәйләмәне, балладаһы менән артыҡ мәшғүл ине шул.
-- Ярай-ярай! Эш быға ҡалһа, төҙәтеүе еңел уны, иптәштәр. Карауаты ла, салфеткаһы ла – бөтәһе лә булыр. – Уҡыусының ғәҙел тәнҡитен сабыр кисергән автор ҡуйын дәфтәренә бөтәһен бермә-бер теркәне. Хозур осрашыу дөйөм күтәренкелектә -- Поэзовскийҙың шиғырына бер йәш композитор яҙған, күптән түгел радиола шаңғыртылып, бындағылар дәррәү ота һалып алған күңелле маршты башҡарып тамамланды:

Барабыҙ, барабыҙ, һауынға барабыҙ!
Һәүкәшкәй имсәген ҡушҡуллап тартабыҙ!
Ватанға аҡ йылға ағыҙып артабыҙ!
Тартабыҙ, тартабыҙ, һынмаһын тәртәбеҙ!

Мәшһүр маршҡа баҫа-баҫа иркен донъяға сығып, мосафирҙар үҙ-ара ҡалып фекерләшкәс, алдарында торған мөкәддәс бурыс – ҡатып ҡалған “Тимер утрау”ҙы ҡуҙғалтырлыҡ көс-ҡеүәт сығанағы эҙләп табыу, тигән берҙәм ҡарарҙа нығындылар. Садиҡов менән Джугашвили, оҙон трослы дизель һорап, трактор бригадаһына китәсәктәр, ә шағир, ауыл халҡының көнкүрешен тәрәндән өйрәнеү өсөн, күпмелер ваҡыт ауылда тукталасаҡ.
Поэзовский, иртәнге саф һауалы урам буйлап, ауылдың дөйөм төҙөлөшө менән танышып сыҡты ла бер колхозсы йортона инеп әңгәмәләшергә булды. Ҡапҡа бикһеҙ ине; шәп-шәп атлап, тура ихатаға үтте, өйҙөң солан ишеген шаҡылдатты. Әммә сығып асыусы, өн биреүсе юҡ ине. Албырғабыраҡ ҡалған шағир, өй эсен байҡамаҡ булып, бер аяғын ҡаты нигеҙгә баҫты ла ике ҡуллап тәҙрә яңаҡтарына йәбеште. Быялаға маңлай терәгәс кенә, йөрәге “жыу!” итте: ниндәйҙер шомло-хәйерһеҙ көс, арттан килеп, шаҡырайып ҡатҡан баткаҡлы макинтош салғыйынан мыҡты эләктереп алды, дөһөрҙәтеп тәҙрәнән һөйрәне. Табаны нигеҙҙән тайған Поэзовский, “әсәй!” тип ялбарырға ла өлгөрмәй, шап итеп ҡаҡ ергә әйләнеп төштө. Башы сүкеш һуҡҡандай зыңҡылданы, күҙҙәренән оскондар сәсрәне. Ә шулай ҙа егеттәрсә ырғып торҙо һәм шунда, осаһына

һалҡынса ел ҡағылғанын һиҙемләгән ыңғайы, сәбәбен дә аңланы: макинтошынан өҙөп алынған батҡаҡлы салғыйҙы ауыҙында һөйрәлтеп, бурҙай эт ҙурлыҡ ҡурҡыныс бер аҡ яныуар лапаҫ асты на сабып кереп китеүен салт абайланы. Дөпөлдәп һуҡҡан йөрәге ярылыр хәлгә етеп, урамға ташланды шағир, хәтәр йыртҡыс сағыйының икенсеһен дә ялмап алмаһын өсөн, артына әйләнеп ҡарай-ҡарай, түбәһендә ҡыҙыл флаг елберҙәгән ауыл Советы идараһына югерҙе.

Ул барып ингәндә, Совет рәйесе бер-нисә гражданға нимәлер аңлатыу менән ныҡ мәшғүл ине. Хәле бөтөп ярһыған ят кешегә сәмләнеп ҡаранылар.

-- Был ни хәл, әллә совет власы юҡмы бында?! – Көтмәгәндә барыһының ҡотон алды Поэзовский.

-- Бәй-бәй-бәй, осағыҙҙы ҡорт саҡтымы әллә, ағай?

-- Ҡорт саҡманы, ә бурҙай тумырып алды! – Поэзовский салғыйһыҙ ҡалған арт өлөшөн күрһәтте. – Ни өсөн ауылығыҙҙа эттәрҙе бәйләп тотмайҙар? Осраған берәүгә ташланалар ҙа талайҙар, аяҡ атлар әмәл юҡ. Бына ни хәлгә ҡалдырҙылар! Ярай, ҡасып өлгөрҙөм, юҡһа үҙемде лә харап итер ине, -- Өҙөк салғый төбөн болғағлап тамаша ҡылдыртты мосафир.

-- Урамдағы һәр һуҡбай өсөн яуап бирә алмайым, мин эт көтөүсеһе түгел! – тип һырт ҡайырып маташты түрә.

-- Мине урамда түгел, ә ихатала таланы, хатта тотоп ашай яҙҙы!

-- Һәр ихата өсөн дә яуап бирмәйем, уның үҙ хужаһы бар.

-- Тимәк, һеҙ үҙәк хөкүмәттең, райбашҡармағыҙҙың ҡарарын инҡар ҡылаһығыҙ? Алайғас, ниңә бында әлдегеҙ уны?! – тип, стеналағы: "Ҡотороҡ сире таралыуын иҫкәртеп, хужаһыҙ эттәрҙе атырға!" тигән рәсми плакатты төртөп күрһәткәйне, ҡыҙыл япмалы өҫтәл хужаһы бер килке йомшай төштө:

-- Их ағай, ағай, яңылыш аңланығыҙ мине. Ят йортҡа ингәндә абайлабыраҡ йөрөһәгеҙ ни була, тип әйтеүем ине минең. – Һәм шунда уҡ ауыҙ асып тыңлап торған йәш үҫмергә бойорҙо: -- Фәттәх, мылтығыңды ал да граждан менән бар. Эт страховать ителмәгән булһа, юҡ итеп кит үҙен.

Хәтәр йортҡа етеп килгәндәрендә малайҙар көтөүе тағылды. Хатта олораҡ йәштәгеләр ҙә, ҡыҙыҡһынып, кеше ашарлыҡ уҫал эт аҫыраусының ситән буйына теҙелделәр, шырҡ-шырҡ көлөштөләр.

Баштан-аяҡ ҡоралланған Фәттәхтең бер иле лә ҡалмай оҙата килеүе көс бирҙе ялыусыға. Бер тибеүҙән үк елҡапҡаны ҡыйшайтты ла алаң-йолаң ҡаранды.

-- Һеҙ, ағай, яңылышаһығыҙ, буғай – был бит Ҡарун Ғилаж йорто. Ул, артыҡ сарыф сығармаҫ өсөн, үҙ ғүмерендә, эт түгел, бесәй ҙа аҫырағаны юҡ, -- тип, шик аҫтына алып туҡталды Фәттәх.

-- Жыйт минең арттан! Яңылышырға ике күҙем һуҡыр түгел. Тап шул Ғилажығыҙҙың эте таланы мине!

Солан ишегенә барып еткәйнеләр, лапаҫ аҫтында ниндәйҙер йән эйәһенең хәтәр иңрәп мөҙөлдәүе ишетелде лә бая ғына Поэзовскийҙың салғыйын өҙә ялмаған аҡ яныуар елтерәп килеп сыҡты, күҙ асып-йомғансы, шағир макинтошының икенсе салғыйына барып йәбеште.

-- Разбо-о-ой! Ҡотҡарығыҙ! – Үҙәккәйе өҙөлөп, нәҡ үҙенең йәне һөймәгән кухня бисәләренсә сарбайланы Поэзовский, йөрәк өшөткөс шаңдан урам ярһытып; күҙе-башы аларып, елҡапҡа аратаһы аша урам яҡҡа ырғырға итте.

Ләкин дүрт аяҡлы хәтәрйән макинтошты иле лә ыскындырмай, ярым-яңғыҙ һәлберәгән салғыйын да, һеләгәйҙәрен ағыҙып сәйнәй-сәйнәй тамағына оҙата барып, һөйрәлеп килә ине.

-- Шартлат тиҙерәк ҡушкөбәгеңде, ат! – тип илерҙе ҡото осор хәлгә еткән ауыл шағиры. Ләкин мылтыҡлы Фәттәх тә, ситән буйындағы бәгзе бәндәләр ҙә һәммәһе тиң ауыҙ йырып көлөп тора, уны әжәл тырнағынан ҡотҡарырға һис йыйынмайҙар ине. Поэзовский, сәс бөртөктәренәсә һалҡын тиргә сыланып, ошо хәтәр минуттарҙа яҡлаусыһыҙ ҡалғанлығын, тик үҙ көсөнә генә таянырға кәрәклеген аңланы ла, түш һиҙәптәрен ҡойолдортҡансы тартып, макинтошынан арынды, аҡ йыртҡыстың сепрәккә алданып ҡалыуынан оҫта файҙаланып, елҡапҡаның урам яғына йығылды. Эштең уйын түгеллеген аңлап алған ситән буйы әһелдәре шырҡылдауҙан туҡтанылар, көн геройын күтәреп торғоҙҙолар. Фәттәхтең ҡаты талап итеүе буйынса, Ҡарун Ғилаж, ниһайәт, өйҙән сығып, йәмәғәт алдына баҫты һәм тәүфиҡһыҙ хайуаны өсөн ғәфү үтенде.

-- Бурҙайыңды сылбырҙа тоторға кәрәк! – тип киҫәтте иҫенә саҡ килә башлаған Поэзовский.

-- Бурҙай? Ниндәй бурҙай? – тип аптыраны өй хужаһы. – Бурҙай аҫырау түгел, һөтлө тоҡом булыр тип һатып алған ошо яңғыҙ быҙауыма ла ашатырға юҡ әле.

Макинтошынан яҙған зыян күреүсе лә албырғаны:

-- Быҙау? Ниндәй быҙау?

-- Һуң, анауы ҡәһәр һуҡҡыры аҡ быҙауымды әйтәм инде... – Ихата уртаһында һаман макинтош менән мауыҡҡан дүрт тояҡлыһына төртөп күрһәтте өй хужаһы. – Һәм мин һиңә әйтәйем, уҙаман, туҡһан туғыҙ процентҡа һин үҙең ғәйепле – ул хөлләңдең салғыйҙары тоҙға ағарып ҡатҡан бит!

-- Ә?! Ысынлап та быҙаумы ни ул?

-- Быҙау булмай ни... әллә күргәнең дә юҡмы? Күҙеңде асыбыраҡ ҡара!

-- Эһем... мин уны бер кинола күреп ҡалғайным... әллә шул теленокмы?

-- Эйе шул, тап үҙе. Беҙ уны кинола уйнарға ҡалаға ебәреп торғайныҡ, -- тип хихылдашты ла ситән буйындағылар, шәп-шәп атлап яҡынлашыусы ауыл Советы түрәһен шәйләп тыйылдылар. Тамам зиһенен йыйып:

-- Ҡара һин уны, шылманы, ә?! Вәт әртис, вәт әртис! – тип кинәнде ауыл шағиры, әле генә күргән ҡазаһын да онота яҙып.

-- Шылма шул – шылманан ни алаһың? – Өйөнә кире тайырға итте Ҡарун Ғилаж. Ләкин өлгөр Сәүит рәйесе тышауланы йылғырҙың аяҡтарын:

-- Стоп! Күпме тылҡырға була һиңә? Ҡарунланып, яңғыҙ малыңа тоҙ ялатмайһың!

-- Ҡайҙан алып ялатайым, сельпобыҙҙа тел осона семтеп һалыр тоҙ юҡта?

-- Һин сельпоға ҡағылма, йүнле кешегә бөтәһе лә бар.

-- Бөтәһе лә барҙыр ҙа ул шешәнән эскәндәргә, әммә беҙ тик ҡаҙан һапырабыҙ бит. Күпме инде кәрәсинһеҙ сыра яғып, тоҙһоҙ аш ашарға була! Тоҙтүбәнең тоҙо, Ишембайҙың ер майы бөткәнме әллә? Алай тиһәң, гәзиттәрҙә көнө-төнө шапырыналар... – тип һөҙөмтәләп һөҙөргә итте Ҡарун Ғилаж. – Сәүит власы ни ҡарай? – тип оторо бөтөрөп ҡуйҙы.

-- Һин, ағай, Сәүиткә тел тейҙермә -- аҡсаңды йомарла ла магазинға сап, кисә генә тоҙ ҡайтарттыҡ.

-- Тешләнем, алайһа, телемде.

Ситән буйы дәррәү хәрәкәткә килде:

-- Тоҙ! Тоҙ ҡайтҡан! – Ен-бәрей иләүеләй, күҙ асып-йомғансы юҡҡа сыҡтылар.

-- Ә шулай ҙа зыян күреүсенең зыянын ҡаплатырға тура килер һиңә, тоҙ көҫәп сепрәк сәйнәүсе быҙауыңды һатып булһа ла, -- тип киҫәткәйне ерле түрә, Ҡарун Ғилаж йүнһеҙ малын һатып алыусы эҙләп һөрәнләй ҙә башланы. Ләкин макинтош ҡайғыһы юҡ ине шағирҙа был минутта. Аҡ быҙау инде ауыҙынан ысҡындырып, өҫтөнә йәм-йәшел “ҡоймаҡ” ҡойоп та өлгөргән хөлләһен бар икән тип тәбелмәй, оялышынан ер тишегенә инерҙәй булып, хәйерһеҙ йорт тәңгәленән тайыу сараһын күрҙе. Ошо йәшенәсә ҡаланан сыҡмай ултырыуын, уны ауыл шағиры иткән редакторын ләғнәтләй-ләғнәтләй, тыҡрыҡтарҙан тура тартып ауылдың икенсе яҡ осона – тракторҙар гөрлдәгенә йүнәлде, унда Джугашвили менән Садиҡов көтә ине. Юл сатында баганаға ҡаҙаҡланған фанерҙағы белдереү биләне иғтибарын:

Юлсылар, борологоҙ,
Сельпоға юл алығыҙ!
Магазинда һеҙҙе дефицит көтә!
Алмаһағыҙ – эсегеҙ китә!

Иртәнге үҙәкте һауынсы ханым ялғап оҙатҡан булһа ла, төшкөлөгөн хәстәрләргә ваҡыт ине, кеҫәләге аҡсаны бит тамаҡҡа тығып булмай... Трактор юллау хәстәрен ҡуйып тороп, әлеге яҙыу аҫтындағы ҙур ҡыҙыл уҡ төртөп күрһәткән йүнәлешкә тоҫкалды шағирыбыҙ.

Сельпо бинаһы арандай ҙур тәҙрәләрен тирә-яҡҡа хәтәр тоҫкап, иркен майҙан уртаһында ғорур ҡайҡая ине. Бер яғындағы магазин ишегенә ҡаптыртылған быҙау башындай йоҙаҡ, йоҙаҡҡа текләп теҙелгән һыуҙай оҙон сират салынды ауыл шағирының күҙенә һәм ул, тәү ҡараштан уҡ, үҙе лә абайламай, хозурланып һөйләнде: “Даһи Ильич мавзолейына инергә теҙелгәндәй!..”

Сират баҫҡан халыҡ массалары араһында түҙемһеҙ йәш-елкенсәк, тыйнаҡ сабырлыҡ кисергән ҡарт-ҡоро, хатта күрше ауылдарҙан сабып килеп еткән шаян киленсәктәр бар ине. Майҙандың бер яҡ ситендә, тап яҙғы һабан туйындағылай, ергә ҡаҙып эшләнгән усаҡтар төтәй, ҡаҙандарҙа боҫорап аш бешә, сәй ҡайнай – кистән килеп ҡуныусыларҙың иртәнге ризығы булһа кәрәк. Ҡара танаулы бала-саға, уғата ҡарайышып, юл саңында болғана. Аҡ айыуҙай сал һәм олпат бер олатай ҡул эшен тотоп килгән: сиратын көтөп, йоморо таш өҫтөндә үткер салғы бәке менән ҡурыс һыҙыра, ә янында әле генә бөтөрөп һалған сабатаһы һары шаҡмаҡештәрен ыржайтып ята. Мөкиббән эшләһә лә, ҡарттың да күҙе дәү йоҙаҡта.

-- Оһо, ысын ғаләм ҡубынған! – Һоҡланды тәьҫирсән шағир. – Сәғәт нисәнән асыла?

Берәүҙең дә яуап биргеһе килмәне. Суҡмарсыһы бүре артынан баҫтырған арғымаҡтай яфаланған ҡиәфәтле бер ағай мыңғырҙаны:

-- Ишегенең башына яҙылған бит. Күҙең яҙыу таныйҙыр, шәт?

-- Унда сәғәт туғыҙҙан тип әйтелгән, ә хәҙер ун беренсе ярты...

-- Мәскәү ваҡыты менән йәшәй ул беҙҙең һатыусы. Шуға тиклем туғай буйына һаяа һуларға киткән.

-- Муса ағай һаяа һулап ҡайтты, -- тип хәбәр итте тиҙәк тибеп уйнаған ялан аяҡлы малай. – Ебәк юрғандарын елләтергә ҡоймаға элеп тора.

Теүәлерәк белешергә югерткәйнеләр, биш минуттан кире әйләнеп килде:

-- Муса олатай өйҙә юҡ, умарталығына киткән.

-- Ах әттәгенәһе, Ленинград ваҡытына күскән икән ул... – тип ыуаланды сиратта алйыусылар. Әлһерәгән ҡарт-ҡоро, һуңғы ҡарыуҙары ҡайтып, ергә сүгәләне. Тел сарлаусы киленсәктәр ҙә шымды, сабатасы үремтәһен ҡалыбына кейҙерҙе:

-- Ленинградтан да ары китмәһә ярай ҙа ул!

-- Вәт безобразие! Нисек түҙеп тотаһығыҙ быңдайҙы? – тип ғәжәпләнде пряник-фәләң алып ҡабырға хыялланған Поэзовский.

-- Тотмай ҡара, түрә туғаны булғас!

-- Бынығы нисауа әле, һуңлатып булһа ла аса. Элегерәк эшләгән маръя – вәт звир ине ул, исмаһам! Бер көн һатыу итә лә өс көн туғайҙа иҫереп ята торғайны. Төрмәгә ябып һәләк иттеләр бисараҡайҙы...

Малайҙарҙың ҡапылғара һөрәнләүе өйөрмә килеп бәрелгәндәй ҡымшатты:

-- Муса олатай күренде! Муса олатай өйөнә инеп китте!

Әлһерәгән ҡарсыҡтарҙың теҙ-быуынына яңынан хәл керҙе – аяғүрә баҫтылар. Киленсәктәр бер-береһенең бөйөрөнә төртөшөп, “пырх-пырх” көлөшөп, һуған баҙары асты. Сабатасы олатай ҙа, бөтөрөп ултырған сабатаһын ҡуйып, сираттағы урынын алды:

-- Күп ҡалманы инде, йәмәғәт. Баллап-майлап сәй эсеп кенә алыр ҙа елтерәп килеп етер.

-- Асы балдан ауыҙ итеп, көмөшкәһенә керешмәһә ярай ҙа!..

Поэзовский, хайран ҡалып, сельпо магазины алдында ҡупҡан зил-зиләне күҙәтте. Сөмкә, тоҡ тотҡан әҙәм балалары һәр яҡлап сиратҡа тығылды, талаш-тартыш, ғауға ҡупты. Күҙҙәре аларған бәндәләр, ташҡын ҡайтҡанда күлдән кире ҙур һыуға ябырылыусы балыҡтарҙай, бер-береһен иҙешеп, фәҡәт алға, алға ғына дөрәләр ине. Быҙау башы ҙурлыҡ йоҙаҡ ҡубынып, ишек шаран асылып, тере ташҡындың ҡотороҡ башы дөкәнгә кереп тулды. Эстә таҡта шытырҙай, кешеләр ыңғыраша, ә үлсәүескә барып еткән бәхетлеләр, тауар һалған төйөнсөктәрен ауыҙҙарына тешләп, ҡолас ташлап, йоҙроҡ айҡап сығыу юлын йыралар; егеттәрҙең үтә лә йылғырҙары, ҡаптағы шырпыларҙай шыпланып баҫҡан сират өҫтөнә ырғып менеп, аҡырышҡандарҙың яурынбаштары буйлап үрмәләйҙәр...

-- Ҡайһындай ҙа ҡырағай икән халҡыбыҙ... Кинолағы әптән әселәп, тоҙ яларға ябырылған мал көтөүе тип уйларһың... – тип, күңелһеҙ хистәрен йәшермәйенсә, дөкәнгә инеүҙән өмөттәрен өҙөп бер ситтәрәк торған аҡһаҡалдарға ҡарап көйәләнде ауыл шағиры. – Шул тиклем дә күҙе тоноп, ни ала һуң был халыҡ? Ниндәй дефицит?!

-- Тоҙ! Тоҙ! Тоҙ! – тип тәкрарланы сираттағы йәмәғәт. Аҡһаҡалдарҙың аңлырағы Поэзовскийға аңлатты:

-- Эйе, тоҙ. Сельпобыҙ, пристандә ятып яртылаш ергә һеңгән аш тоҙоноң ҡалдыҡтарын ҡайтартып, магазинға ташланы.

Поэзовский кисә генә Сим ярында үҙе тайып йығылған һәм макинтошына тоҙло батҡаҡ һеңдерткән ҡотһоҙ мажараны хәтерләп, бармаҡ тешләп албырғанып торған арала тоҙ һатылып та бөттө һәм шаулы магазин алды, киң майҙан кешеһеҙ тороп ҡалды -- әйтерһең, ен иләүе күсеп китте. Еңел һулыш алған шағир тамаҡ ихтыяжын ҡандырырға кереп баҫты. Әлбиттә, мөкәддәс һорауы икмәк булды.

-- Һеҙ нәмә, күктән төштөгөҙмө әллә? – Күҙҙәрен аҡайтты Муса.

-- Бында күктән төшкәндәр генә икмәк ашаймы әллә? Үҙегеҙҙә икмәк һалалар икән тип ишеткәйнем.

-- Мин ишеткән ауыл шағиры булһағыҙ, яҙын мал-тыуарға аҙыҡ етешмәүен белергә тейешһегеҙ. Икмәкте беҙ, икмәкхананан уҡ, совхоз сусҡаларына оҙатабыҙ.

-- Ә кешеләргә?

-- Уныһы ваҡ мәсьәлә. Ваҡ-төйәк һатып алыусы менән мәшәҡәтләнмәй, фермаларға уптыһы менән китә.

-- Сусҡаларҙан да кәм икән һеҙҙә совет кешеһе.

-- Оскорблять итмәгеҙ. Совет сусҡалары улар!

-- Печенье-фәләп дә юҡмы?

-- Уныһын, кисә ҡараңғыла килеп, батҡан пароходтың бер ҡортҡаһы уптым алып китте.

-- Ах хәйерһеҙ, бында ла өлгөргән икән! – тип ыуаланды шағир, пароход буфетын таҡырлатҡан ҡортҡаны иҫенә төшөрөп.

-- Ул бит бөтә пассажирҙар исеменән һораны, -- тип аҡланды һатыусы.

-- Һем... һис юғында анауы резинка итек менән брезент плащты бирегеҙ. Йылға буйында уҙып барыусы һалсыларҙан аҙыҡ-түлеккә алмаштырырмын, исмаһам.

-- Алайһа, күкәйҙәрегеҙҙе һалығыҙ!

Меҫкен шағир ҡолаҡҡа яғышһыҙ тәҡдимдән ҡойолоп төштө:

-- Йәғни... йәғни... ни һүҙегеҙ был?

Янда торған зыялы ғына берәһе төшөндөрҙө:

-- Тауыҡ йомортҡаһын әйтә бит ул – уны беҙҙә күкәй тиҙәр. Сельполағы һәр дефицит тауарҙың хаҡы фәләнсә дана күкәй, фәләнсә һум аҡсанан хасил.

-- Ни... ни... Мәҫәлән, нисәү кәрәк ул нәмә?

-- Итектең бер кейеменә 50 күкәй һәм 41 һум аҡса, плащ өсөн 100 күкәй һәм 100 һум аҡса.

-- Тимәк...

-- Тимәк, йәмғәһе 150 генә күкәй һәм 141 һум ғына аҡса.

-- Беҙ, ҡаланыҡылар, тәүгенен ҡайҙан алайыҡ?

-- Үҙеңдекен һалып бирһәң дә тулмай шул... – тип хихылданы баяғы аңлатыусы. Муса иһә яғанан ала яҙҙы:

-- Күкәйең дә булмағас, ниңә килдең ауылға?! Выжт!

Шағирыбыҙ, башына эҫе ҡапҡандай, атылып килеп сыҡты. Алан-йолан ҡаранып, уңды-һулды абайларлыҡ иҫ йыйғас, тартыу көсө ялларға тип юлдаштары йүнәлгән трактор бригадаһын эҙләп китте.

Баҫыу башында тракторы талғын ғына дырылдаған сәсеү агрегаты тора; Садиҡов менән Джугашвили, ергә түшәлгән торпошаға аяҡ бөкләп ултырып, сәсеүселәр ҡатарында ирәүәнләнеп ҡайнар сәй һемерә ине. Шулар ҡатарынан ипле генә тубыҡланып, бөйөрҙәрен йөҙҙөрткән арала, шағир шөйлә тынысланды һәм, сәскестәрен көйләп маташҡан сәсеүсе ҡыҙҙарға яҡынлап, ижады өсөн ҡиммәтле тормош материалы һоҫоп алырға ашыҡты. Еңдәрен һыҙғанып, үҙе өсөн асылмаҫлыҡ сер булған сәскес механизмдарын тотоп-тотоп барланы. Райондан килгән нәүбәттәге вәкилдер, тип, ахыры, ҡыҙҙар уға зарлана ла башланылар; агрономдарының, күҙен күрһәтмәй, әллә ҡайҙа йөрөүен, шунлыҡтан сәсеү нормаһын тейешле кимәлгә ҡуя алмай яфаланыуҙарын һөйләнеләр. Шағир быларҙың бөтәһен-бөтәһен ҡуйын дәфтәренә теркәне.

-- Бәлки, һеҙ беләһегеҙҙер сәсеү миҡдарын теүәл билдәләү әмәлен? – тип эскерһеҙ һорағастары, ул да ихлас яуапланы:

-- Күберәк сәсегеҙ, иптәштәр, күберәк! Миҡдарҙы уйламағыҙ, ни иклем ҡуйы төшһә, шунса ҡуйы буласаҡ.

-- Өйрә урынына бутҡа килеп сыҡмаҫмы икән һуң?

-- Бутҡаһы ла кәрәк беҙгә, ете саҡрымлы аҙымдар менән яҡты коммунизмға барған илгә! – Агрегатты абруйлы әйләнеп сығып, юлдаштары янына кире килде. Джугашвили үҙ йомошо менән ситкәрәк киткән, ә Садиҡов бригадирға тел сарлай. Шағир, әңгәмәнең “тары” тигән, йәш сағында студент ашханаһында йыш ашаған арзанлы бутҡа ярмаһының исеме тирәһендә буталыуын салт самалап, белдекле тамаҡ ҡырҙы:

-- Күпме ярма сәсәһегеҙ быйыл, иптәш?

Был һорауҙан телһеҙ ҡалған бригадир, саҡ ипкә килеп, йылмайҙы:

-- Беҙ ярма сәсмәйбеҙ, ағай.

-- Нимә сәсәһегеҙ һуң?

-- Тары.

-- Бик насар, бик насар. Социалистик халыҡ хужалығы өсөн тарының ярмаһы мөһим, ә тарыһы тротуар ситендә темеҫкенгән күгәрсендәргә һибеүҙән башҡаға яраҡһыҙ. Кеҫәһе һайыраҡ әҙәмдәрҙең, бигерәк тә студенттарҙың барлығын да онотмайыҡ, иптәштәр. Күберәген ярма сәсергә кәрәк ине, ярма!

Сәсеүселәр бер-береһенә ҡарашып сәйерһенде. “Беҙҙән көлә, ахыры, был ҡала кешеһе” тип хәтерҙәре ҡалды, буғай – һүҙҙе артыҡ ҡуйыртмай, сәскестәре яғына ыңғайланылар, бригадир ҙа тракторисҡа әмер бирергә китте. Садиҡов иһә ауыл шағирының яурынынан аталарса ҡағып, яғымлы тауыш менән хупланы:

-- Шулай, Поэзовский, шулай – бик дөрөҫ киҫәтәһең. Был бешмәгән малайҙарға ышанһаң, тишек кәмәгә ултырғаныңды хатта тоймай ҙа ҡалырһың: ярма урынына тары сәсеп йөрөйҙәр бит, хәсрәттәр! Моғайын, перловканы ла тын бойҙай килеш, ә буханканы он килеш сәсәлер әле улар!

Поэзовский, был юлы ла аңғармаҫтан әҙәм көлкөһөнә ҡала яҙыуын тойоп, ҡыҙарынды-бүртенде, һыуҙан ҡоро сығырға йәтешләнеп, “эһем... эһем...” тип тамағын ҡырҙы. Ахыры булмағас:

-- Әллә мине тилегә һанайһығыҙмы, буханканың ҡайҙа шытҡанын белмәй тип уйлайһығыҙмы? – тип үпкәләне.

-- Белгәнеңде яҡшы белеп әйтәм дә! – тигән булды тегене. Шул арала эшен бөтөрөп килеп еткән Джугашвили икеһенең яурынына дуҫтарса ҡулын һалды:

-- Туҡтатайыҡ, батониҙар, һәр төрлө һалҡын һуғышты! Сәскә атҡан социализм баҫыуында проблемалар тик үҙ-ара килешеп хәл ҡылына!

-- Шунан?

-- Ултырған да шыуған, башҡорт дуҫтар әйтмешләй. Киттек кире пристангә -- "Тимер утрау"ҙы, ҡорос арҡандар менән тарттыртып, ҡапҡандан ҡотҡарырға!

-- Ҡорос арҡанға тағырлыҡ көс-ҡеүәтебеҙ бармы һуң? – тине Поэзовский.

-- Батони бригадирҙың үҙе менән килешелде – "Коммунизм шаңдағы" хужалығының иң ҡеүәтле дизеле беҙҙең активта!

-- Эйе, "С-80" тракторы, -- тип дөрөҫләне бригадир. – Кәрәкһә, һеҙҙең кеүек хөрмәтле әһелдәргә "Т-75"-те лә ҡушып бирербеҙ. Тик трактор йөрөтөүсенең дә күңелен күтәрегеҙ. Көтөп тора.

-- Ҡайҙа ул?

-- Сельпо магазины ҡатарында. Барығыҙ, Боғаҙ Бәҙәмшаны һорағыҙ.

Дәртләнешкән юламандар кире-ҡабат ауылға уҡталдылар.

-- Ғүмерҙә булмаған хәл: нисек тиҙ йомшарҙы икән бригадир? Зерә лә ҡыҫмыр, ҡаты кеше, тиҙәр ине... – тип аптырағайны Садиҡов, Джугашвили бүртек сөмкәһен башы өҫтөнә күтәреп һөйгөсләне:

-- Ошондағы ҡатылыҡты йомшартһаң, донъялағы бөтә ҡаты нәмә һәлберәп төшә!

Ирәүән генә елтерәп барғандарында, яндағы кукуруз баҫыуы яғынан, оҙон осло түфлиҙәре менән юлдың ҡара саңын борхотоп, ҡулындағы дүрткел шешә боғаҙынан һемерә-һемерә юртып килеүсе әзмәүерҙе күрҙеләр. Өскөл һаҡаллы оҙонса йөҙө трактор майы ҡатыш саңға ныҡ буялғайны; ҡара тирәсле, һыңар атламалы һәм бер быялаһы сатнаҡ күҙлек кенә азаматтың һәүәҫкәр уйлап табыусы Йолҡоғужин икәнлеген танырға мөмкинлек бирҙе.

-- Ҡотҡарығыҙ, иптәш кешеләр, ҡотҡарығыҙ! – тип ялбарҙы өсәүҙең артына малайҙарса ышыҡланып һәм яман итеп аҡырҙы: -- Разбуй, үлтерәләр! Анауы Хоҙай орғоро бәндә майлы йоҙроҡтары менән дөмбәҫләне, тимер алып киҙәнде! – Ысынлап та, ҡулына ҙур трактор асҡысы күтәргән механизатор бәхетһеҙҙең артынан баҫтыра ине.

-- Һеҙҙең әшнәме был мәхлуҡ?! – тип екерҙе ул иң алда торған Поэзовскийға, тимер ҡоралын башы осонда яман уйнатып.

-- Кемде әйтәһегеҙ, ҡустым? – тип шөрләп үк ҡуйҙы шағир.

-- Артығыҙҙа ышыҡланған кәзә һаҡаллы мөртәтте! – Тракторист өсәүҙең аяғаҫтына төкөрҙө.

-- Юҡ, энекәш... ярамай улай... – тип яндая бирҙе донъяның әсе-сөсөһөн күп татыған Садиҡов. Тракторист та һүрелде:

-- Бәхетегеҙ икән. Юғиһә уның менән бергә өсөгөҙҙөң дә тетмәһен тетер инем, ағайҙар! Ә шулай ҙа кәзә һаҡаллыны бирегеҙ, хәҙер анауы ағаҫка к...нән аҫып китәм!

-- Сеү! Иң элек аңлашайыҡ: ни зыяны тейҙе һеҙгә? – тигәйне Поэзовский, Джугашвили йәтеш иҫкәртте:

-- Гражданын, белəһегеҙме, мин кем? Бына бында, -- һары күн сөмкәһенә һуҡҡылап күрһәтте, -- һеҙҙең кеүек ҡыҙыубаштарҙың беләктәренә кейҙертмәле бик йәтеш беләҙектәр бар. Тегендә алып китһәм, нисә балаң илап ҡалыр өйөңдә?

-- Бишəү... – тине ҡыҙыубаш, тимерен артына йәшереп, үҙе тамам һыуынып.

-- Шулайғас, ошонда уҡ яуабыңды биреп ҡотол!

Майлаған ҡайыштай йомшаған ир тиҙ үк ыңғайға килде:

-- Артынан баҫтырыу түгел, төшөмдə лə күрмəҫ инем мин уны, əгəр бригадир үҙе əпкилеп беркетмəһə, өскөл һаҡаллы был ағай – юғарынан килгән уполномоченый, ауыл хужалығы машиналарының ҙур белгесе, кукуруз сəсеүҙең өр-яңы ысулын тыуҙырып йөрөй -- əйткəн берен үтəп, ярҙам итергə кəрəк, тимəһə... Ватан үҙе уполномочить итте, тип, көнө буйы елкəмде мочить итте, ҡырылмаһа ҡырҡ тапҡыр эшемдəн туҡтатты, кəрəкмəгəнсə эшлəргə ҡыҫтаҡланы... Йəнəһе, квадрат-оялап кукуруз сəсеүҙең иң еңел һəм арзанлыҡлы – тимерсыбыҡһыҙ ысулын асып, был эштə ысын революция тыуҙыра. Революцияһын минең баҫыуҙа бойомға ашырырға, дүрт тəгəрмəсле "Беларусь"кə бишенсе тəгəрмəс ҡуйырға, тип ныҡышты...

-- Шуның өсөн генə тимер күçəк күтəрəлəрме? Бригадирың бойорғас, үтəргə кəрəк ине, -- тип киҫəтте Джугашвили.

-- Эйе шул! – тип үкһене өстаған артында иламһырап-һулҡылдап торған белгес, шешəһенəн нəүбəттəге йотомон ғорҡолдатып.

-- Уныһына ла түҙер инем əле мин, һуңғы тəҡдимен əйтмəһə...

-- Ниндəй тəҡдим?

-- Мин уға: етте, төш! Тракторымдың яғылығы бөтə -- төрөпкəнəн түбəнəйҙе! – тигəйнем, яңы тəҡдим керетте -- бак төбөндəген тейешле кимəлгə күтəртеү өсөн, икəүлəшеп бак эсенə "мочить" итергə димлəне...

-- Бригадирың "уполно-*мочить*" тигəн бит, хе-хе-хе... – Джугашвили шаяртмаҡ булғайны ла, тракторист оторайҙы:

-- Уполномоченный, тип, елкəгə баш-баштаҡлыҡ атландыртып йөрөр заман үткəн инде, ағайҙар! Бишенсе тəгəрмəс ҡуйыусылар хəжəт түгел беҙгə! – Танауы аҫтынан тағы əллə нəмəлəр мөңгөрҙəнеп, баҫыу башында мөрйəһенəн төтөн атып көтөп торған тракторына ыңғайланы. Йолҡоғужин да, өсəүҙең яҫы арҡаһы артынан сығып, еңел һулап, шешəһе боғаҙынан ғорҡолдатты ла иламһырап зарланды:

-- Күрҙегеҙме, ниндəй ҡырағайлыҡ? Мейе майымды яндырып яһаған асыштарымды дəррəү илтеп еткереп, төпкөл ауылдарҙы сəскə аттыртайым, тип сыҡҡайным изге сəфəргə -- ҡəҙеремде белмəнеләр. Инде ҡайҙа барырға?

-- Мəскəүгə, Кремлгə. Йəиһə Аллаһы Тəғəлəнең үҙенə, -- тине Садиҡов. Мейе майын яндырыусы, буҫлығыуынан баҫылып һəм күҙҙəрен аҡайтып, кəңəшсеһен ҡарашы менəн баштан-аяҡ һəрмəне лə, өмөтһөҙ баш сайҡап, шешəһенең һуңғы тамсыһын ауыҙына һарҡытты.

-- Бəй, үлəһең бит! – тине Садиҡов, шешə этикеткаһындағы ҡыу баш һөйге менəн арҡыс-торҡос һөйəк һүрəтенə һəм "Денатурат. Ағыу!" тигəн яҙыуға

иғтибар итеп. – Беҙҙең цехта столярҙар буяу болғатырға ҡуллана быны... әжәл килтереүсене...

-- Ә беҙҙең яҡтың йоморо башлы урыҫтары уның әжәл дарыуы икәнен аҫкандар ҙа “гарный” тип атағандар, рәхәтләнеп эҫәбеҙ. Башҡорттоң да минең кеүек зыялылары ҡәҙерен белә уның, гарныйҙың, сөнки үҙе тройнойҙан арзанырaҡ, үҙе күңел күтәрә һәм эсеңдәге бөтә сирҙәреңде ҡыуып сығара. Был төбәктең артта ҡалған халыҡтары әле булһа белмәй шуны – баштан-аяҡ көмөшкәгә һалышып көн итәләр, магазиндарының бүлкәләрендә “гарный” шешәләре йыл әйләнәһенә саң һырытып ултыра...

-- Туҡта-туҡта, кеҫә төбөң шомотор ине ләһә, шешәне ҡайҙан сәлдерҙең? – Белешә һалды Садиҡов.

-- Сәлдермәнем – хәләл күкрәк көсөм менән эшләп таптым.

Талантлы уйлап табыусының ғилми юлдары уңмауынан ихлас көйөнгән Поэзовский йәнләнә төштө:

-- Совхозға эшкә урынлаштығыҙмы әллә?

-- Дуракмы ни мин башымды ҡаҙыҡҡа бәйләргә! “Тимер утрау” ҡаршыһындағы пристандә баҙар аҫкан ҡортҡағыҙға ялландым.

-- Ниндәй ҡортҡа тағы?

-- Буфеттың балыҡ кәнсирҙәрен бишләтә хаҡҡа осороусыны әйтә, -- тип аңлатты Садиҡов.

-- Тап үҙе! Беҙҙән ҡалып яр башына сыҡһа ла, беҙҙән алда ауылға килеп етеп, сынаяҡтарын ҡырҡлата хаҡҡа һатҡан, магазиндың көйшәргә яраҡлы бар мөлкәтен һыпырып алған. Ҡыҫып бәйләгән тулы тоғон пристангәсә йөкмәп илттем, был шешәне шуның хаҡына тамыҙҙы.

-- Тоғонда нимәләр ине?

-- Перәнник тә печенье. Бер-нисә шешә лә бар. Пристандә яңы баҙар асмаҡсы.

-- Ҡәһәр һуҡҡыры ҡортҡа! – Поэзовский магазиндан ҡороғул сығыуының сәбәбен, ниһайәт, шәйләне, Йомағужин яҙмышын да ҡайғыртты. – Инде ҡайҙа бараһың?

-- Әйттем бит, ялландым, тип. Ҡортҡа мине төпкөлдән аҙыҡ-түлек килтерергә экспедитор яһаны. – Буш шешәһен юл ситенә атып-бәреп, әйләнеп тә ҡарамай, йылға ярына перпиндикуляр рәүештәге ҡаршы яҡ тарафҡа ҡарағуранан һуҡмаҡ ярып тәпәйләне. Бара биргәс, бер әйләнеп ҡараны. – Заманында крохоборҙар бөйөк Лобачевскийҙы ла танымағандар; йөҙ йылдан һуң, сәстәрен йолҡоп илай-илай, мине лә таныясаҡтар! – булды һуңғы йөмләһе.

-- Их, ниндәй таланттар аяҡ аҫтында тапалып ятып ҡала! – Ауыр көрһөндө шағир. Джугашвили тейешле һөҙөмтә яһаны:

-- Йүнһеҙ юлға баҫҡан шул. Аҡса баҫыу станогы яһарға ла Ҡаф тауы артына шылырға кәрәк булған уға.

Өстаған ҡабат баҫыу ҡапҡаһын үтеп, бригадир өйрәткән ергә барып еткәндә, Боғаҙ Бәҙәмша тигәндәре, башын трактор капоты аҫтына тығып, нимәлер соҡсона ине.

-- Сәләм, батони! – Тракторист салт әйләнеп ҡарағайны, ауыл шағирының көллө тәне эҫеле-һыуыҡлы сымырҙаны, сөнки ул төндә һуған түтәле ҡырында

үҙен ҡосаҡлап ыҙалаусы, ауыҙына көсләп һаҫы көмөшкә ҡойоусы ғырылдауыҡ боғаҙҙы таныны.

-- Ни йомош? – тине тегеһе, үҙ көйөнсә ғырылдап. Төнгө “Ғәбделмөбәрәк дуҫкай”ын таныманы, әлбиттә, Поэзовский ҙа биштән ҡыҫты бөрмәһен. Бөтәһе исеменән олпат Садиҡов һүҙ алды:

-- Бригадирыңдан бойороҡ: дәжжалыңды йәһәт кенә ҡуҙғалтып, беҙҙең менән яр буйына барырға, ҡомға ултырған карапты сығарырға тейешһең.

-- Тросығыҙ бармы һуң?

-- Уныһын үҙе табыр, тине.

-- Ә тростың был башына тағырға? – Боғаҙ Бәҙәмша бармаҡтарын аҡса һанағандай йылдам ҡыбырҙатты.

-- Уныһы юҡ! – Кинәт өҙҙө Джугашвили, ҡулындағы һимеҙ сөмкәһен ҡултығы аҫтына йәшереп. Садиҡов иһә тәүфиҡһыҙҙы оялтырға теләне:

-- Ҡустым, совет кешеһеме һин?

-- Совет кешеһе.

-- Совет кешеһе булһаң, игелекте буш эшләргә тейешһең.

-- Ә бына бынауыны еҫкәргә теләмәйһеңме? – Боғаҙ Бәҙәмша трактор майы ҡатыш туҙанға ҡатҡан, “ҡуҡыш”ҡа йомарланған бала башындай йоҙроғон ныҡышйәндең танауына терәне. – Буштың атаһы үлгән – бушҡа эшләмәгеҙ, тип, васыят әйтеп ҡалдырған. – Капотты шартлатып япты ла, тракторын тырылдатып, кабинаһына олағырға йыйынды.

-- Ай-бай-бай, Урал тауы кешеһенә оҡшамай – беҙҙең Ҡаф тауы артынан, Гутаутанан килгәндер был! – Джугашвили “һә!” тигәнсе ҡойма артына боҫто.

-- Иптәш, туҡтағыҙ! – Ялыныслы өндәшкәйне Поэзовский, тракторист, тыңлаулыҡлы туҡталып, әйләнеп тә ҡарамай, майға буялған көрәктәй усын һуҙҙы:

-- Һалығыҙ!

Шағир уны-быны уйлаған арала тире иләү оҫтаһының да бесәйҡойроҡ мыйыҡтары трактор артына ҡапланды. Дәжжалсының ташлап китеренән ҡурҡып дер-ҡалтыраған Поэзовский, тештәрен ҡыҫып, Йолҡоғужиндың йолҡоуынан тороп ҡалған Ленин һүрәтле һуңғыун һумлыҡты һондо:

-- Мәгеҙ, тик пароходты ғына ҡапҡандан ысҡындырығыҙ!

-- Айн момент! – Егет елтерәп магазинға йүгерҙе. Артынса уҡ хасил булған ике юлдаш тотанаҡһыҙҙы оялтып баш сайҡаны:

-- Бирмәҫкә кәрәк ине!

-- Буштың атаһы үлгән, ти бит һуң.

-- Асыҡ ишектән күреп торҙом: инеүе менән берҙе ҡойҙортоп кәкте лә тулы шешәне ҡуйынына сумырҙы. Дәжжалы менән ҡуша ауып ҡалмаһа ярар ине.

Йөҙө Ҡояштай балҡып сыҡҡан Бәҙәмша иһә алыҫтан уҡ алҡышланы:

-- Булды, егеттәр! Һеҙҙең ул тимер тағараҡты мин күҙ асып-йомғансы йолҡоп сығарам! – Бейек ҡорос арғымағына кавалеристарса ырғып менде лә штурвалына йәбеште. Өстаған да, еңел һулап, бер иле май һәм туҙан ҡатҡан кабинаға ҡыҫылыштылар. Боғаҙ Бәҙәмша күҙ асып-йомғансы шешә ауыҙын тешләп асып, ярты миҡдарын, тигәндәй, ғорҡолдатып тамағына оҙатты, боғаҙынан ғырылдауыҡ йыр һуҙып, ҡарышлауыҡтары шалтор-шолтор ҡарышлаған ҡорос атын туранан-тура Сим яғына йүнәлтте. Ҡалғанын да

тамағына ҡойоп бөтөрөп, йыр һуҙыуынан төңөлдө, ҡаҙандай дәү башы әүеш-тәүеш килә башланы, шулай ҙа теҙгенде ҡулынан ысҡындырманы. Поэзовский, йығылып ҡуймаһын, тип, “дуҫ”ын ҡосаҡлап тотто, макинтоштан яҙған өҫ-башы икенселәй ҡарайҙы. Һәм, ниһәйәт, яр башына еттеләр, ә хәйерһеҙ трактор, моторы һүнеп, шып-туҡтаны. Боғаҙ Бәҙәмша шунда уҡ янтайҙы ла мотор тырылдауынан да яман тауыш сығарып хырылданы. Өстаған ергә төштө, дәһшәтле Сим өҫтөнә, яр буйҙарына дәһшәтле ҡараш ташланы. Пристандә, кисә генә Поэзовский тайып ҡолаған тоҙло күләүек буйында, иркен генә ҡыҙыл палатка ҡоролған, ишегенең башына: “Аҡсаң булһа – теләгән тауарыңды ал!” тип яҙылған. Яҙыу аҫтында, түңкәрелгән оҙон йәшник өҫтөнә тәмле-татлы мөлкәттәрен теҙеп һалып, йомортҡа баҫҡан күркәләй ҡуҡырайып, барыһына таныш тәсбихле ҡортҡа һатыу итеп ултыра. Палатканың эргәһендә яҡындағы ауылдарҙан май, ҡорот, йомортҡа, һөт-ҡатыҡ алып килгән ҡатын-ҡыҙ теҙелешкән: малдарын һаталар ҙа ун тәңкәнән бер тәңкәһен урын хаҡына – “базарком” ҡортҡаға түләйҙәр. “Тимер утрау” халҡы, асығыуҙы онотоп, баҙарҙа ҡайнашалар -- һатыусылар ҙа, һатып алыусылар ҙа ҡәнәғәт. Ошоно күреп һоҡланған Джугашвили ҡортҡа менән ике-ара аңлашып, ҡул бирешеп килеште: Ҡаф тауы арты лимондарын бирһе – килтереп, икенсеһе һатып торасаҡ, ике яҡ та зерә ҡәнәғәт буласаҡ...

Ә Сим үҙәненда тулаған хәрәкәт өстағанды уғата шатландырҙы, сөнки “Тимер утрау” йәнәшәһенә, ниһайәт, зарығып көтөлгән ҡоткарыу буксиры моторын гөрөлдәтеп килеп туҡтаған да судноны тарттырып сығарыр өсөн ике араға ҡорос арҡан һуҙғандар. Капитан, ҡыуаныстан халыҡтары шау-гөр килгән ҡайығының “КОММУНИЗМҒА -- АЛҒА!” тигән көр яҙыуы тәңгәлендә борт ҡырыйына суҡайып, матростарының арҡан менән булашыуҙарын ғорур күҙәтә, ауыҙындағы төрөпкәһе паровоз мөрйәһеләй боролдап төтәй. Бына трос нығытылды, капитан, хәл иткес эшкә ҡушып, буксир капитанына ҡул һелтәне. Буксирҙың дизель моторы ер-һыу яңғыратып дырылдарға, ҡойроҡтағы винты менән Симде ҡотороноп болғатырға кереште, ҡорос арҡан эскрипкә ҡылылай зыңылдап тартылды. Рупорҙан капитандың: “Тағы ла! Тағы ла!” – тигән түҙемһеҙ йәһәтләүе яңғыраны. Буксир, саҡ ҡына артҡа сигенеп, бөтә булған көсөнә ҡапыл тартҡайны, “Тимер утрау” саҡ ҡына һелкенеп ҡуйҙы ла, көтмәгәндә, трос шартлап өҙөлдө; уның бер башы, һауа сыжылдатып барып, яҡындағы йәш өйәңкене урта биленән өҙҙө, шул ыңғайҙа капитан да һыуға баштүбән осто, “ҡоткарығыҙ!” тигән ҡыҙғаныс ауазы һыуҙағыларҙың да, ярҙағыларҙың да йөрәк ҡылдарын киҫте. Матростар шунда уҡ капитанға ҡоткарыу түңәрәге ташланылар, ә бирһе, өҫ-башын да һалып тормай, һыуға һикерҙе. Был минутта ҡарт бүре, ауыҙындағы төрөпкәһен ысҡындырмайынса төтәтеп, ҡоткарыу түңәрәге өҫтөндә пристангә табан йөҙөп килә ине. Батырлығын, ихтыяр көсөн күреп һоҡланған Поэзовский үрелеп уға ҡул бирҙе, ҡороға тартып сығарҙы. Тауыҡтай күшеккән ҡарт бүре, йоморо ташҡа сүгәләп, “Тимер утрау”ҙың торошон ситтән барлағас, буксирҙағыларға өмөтһөҙ ҡул һелтәне:

-- Мәхлуҡтар, ниңә серек трос алып килдегеҙ? Олағығыҙ күҙемдән! – Һәм буксир, өҙөк трос осон һыуҙа һөйрәлтеп, ағыш ыңғайына кире Өфөгә ҡайтып

китте. Йылға боролошонда ул ҡапланғас, капитандың күҙҙәренән супырлап йәш ҡойолдо.

-- Бирешмәгеҙ, капитан! Дәжжал тигән тракторҙы алып килдек, тағарағыңды "эһ" тә итмәй таҙа һыуға сығарасаҡ! – тине лә Поэзовский, яр башына йүгереп менеп, кабинала хырылдап ятҡан трактористы торғоҙҙо. Уныһы, рәхмәт төшкөрө, тиҙ үк иҫен йыя һалып, моторын тоҡандырһа ла, өмөттәр аҡланманы – тросын онотоп ҡалдырған, хәйерһеҙең...

-- Мәшәҡәтләнмәгеҙ, -- тине капитан, яр киртләсендә Сим ҡалдырып киткән һыҙыҡтың һыу кимәленән күпмегә бейеклеген самалап. – Тәүлек эсендә йылға метрға ҡайтҡан – бер түгел, мең буксир килһә лә, сығарып булмаҫ "Коммунизмға -- Алға!"ны. Алдағы ташҡынғаса, ҡомда ултырып көтөргә генә ҡала...

Шул арала "Тимер утрау"ҙа ниндәйҙер ығы-зығы ҡупты. Баҡтиһәң, кисә генә Симде үрләп киткеп барған өгөт-нәсихәт пароходы, мөҡәддәс бурыстарын үтәп, кире ҡайтып килә икән – бәхетһеҙҙәр ҡырына ҡабат туҡталды. Йәш рулевой ултырған кәмә моронон ярға төртөп, капитан менән бергә теләгәндәрҙең бөтәһен дә "Тимер утрау"ға ҡайтарып ҡуйҙылар, ҡортҡа ғына үҙенең палатка-лавкаһында сауҙа ҡылып тороп ҡалды. Ҡарт капитан ярҙамсыһынан тәмәке һорап алды ла, төрөпкәһенә тынҡыслап, каютаһына кереп бикләнде, ярымҡыҫыҡ иллюминаторҙан тышҡа ҡуйы һөрөмлө төтөн ағылды. Ошо минуттарҙа "Тимер утрау"ҙа, палубаға дыңҡылдата баҫып, үҙенең бер төркөм матросы менән өгөт-нәсихәтсе Ҡыуыҡбаш түрә ҙур эш ҡырып йөрөй ине. Уның зирәк етәкселегендә пароходтың мачтаһынан алып ҡойроҡтағы флагштоккаса ҡомас туҡыма тарттырылды, мәлендә үк тынлы оркестр дәүләт гимнын яңғыратып, көслө "ур-ра!" һыу иңдәрен тетрәтте. Хатта ҡырыҫ Садиҡов та, күңел ҡылдары нескәреп, ҡомастағы ялҡынлы шиғарҙы юлдаштарына ҡыҫҡырып уҡып ишеттерҙе:

Коммунистик рухығыҙҙы юғары сөйөгөҙ, иптәштәр! Бөйөк партиябыҙҙың аҡыллы етәкселегендә коммунизм еңеүенәсә <u>алға һәм алға!</u>

-- Ур-ра-а-а! – Ауыҙын арандай кереп, һалам эшләпәһен үргә сөйөп, күккә ҡарап һөрәнләне тарихи мөҙҙәттең мөһимлеген тойған Поэзовский. Күпте күргән һәм кисергән меҫкен һалам эшләпәһе бая ғына ҡарт капитан йөҙөп сыҡҡан болғансыҡ һыуға осоп төшөп, Симдең оторо тулҡындары араһында күмелде.

Өгөт-нәсихәттәр маһиры Ҡыуыҡбаш Ҡыубатыр, үҙенә тейешле мөҡәддәс бурысты шулай үтәп бөтөрөп, пароходының моронон Өфө яғына борорға әмер бирҙе, кире ҡайтырға теләгәндәрҙең бөтәһен дә үҙенә алды. Хәйер, ундайҙар әллә ни күп түгел, сөнки төбәктең яҡын-тирәһенә ҡайтыусылар күптән таралып бөткән, ә артабан юлланырға тейешлеләр нәүбәттәге пароходтың килеүен көтөп ҡалды. Өстаған иһә баш ҡалаға иҫән-һау әйләнеп ҡайтты.

Артабан ниҙәр булған һуң?

Ышаныслы хәбәрҙәргә ҡарағанда, Сим ярында ҡортҡа нигеҙләгән сауҙа төйәге бөтә төбәк халҡын һәм үткән-һүткән пассажирҙарҙы кәрәк-яраҡ менән хеҙмәтләндереүсе ҙур баҙарға әүерелеп, Джугашвилиҙың һары лимондары һәр йортҡа барып еткән. Садиҡов иһә төбәктең барлыҡ сей тиреләрен йыйып алып китеп, бында әҙер тундар килтереп һата торған булған һәм был кәсеп ерле

халыҡҡа бик оҡшаған. Поэзовский шағирәнә исемен һаҡлаһа ла, ауыҙы ныҡ бешеп, ауыл шағирлығын ташлаған, тиҙәр. Ҡалын журнал мөхәррире тағы биргән айлыҡ ижади командировкаға барып, Бабай ҡасабаһындағы һоро ташкүмер карьераһындағы шахтерҙар тормошон ныҡ өйрәнеп ҡайтҡан һәм, баяғы ҡалын журнал редакторы әйтеүенсә, "зыңғылдап торған саф пролетар үҙәкле" шахтер шағирға әүерелгән, хатта китабы ла баҫылып сыҡҡан.

Ағиҙел пароходствоһы, теплоход-буксир №11, 29.07.1956.
Өфө, 31.01.2006.

ХИКӘЙӘЛӘР

Серле һөнәр эйәләре

Тымыҡ күлдә шайтан була.
Мәҡәл.

Их, яҙыусы булһаң ине! Их, ҡалын журналдарҙа баҫылып, даның донъя йөҙөнә ашһын ине!" Һуңғы көндәрҙә ошондай фекер игәй башланы мейемде һәм тиктән генә түгелдер. Сөнки ҡалаға килеп уҡый башлағас, кеҫәһе һай студент тормошонан зарланып, ауылға хаттар яҙыуымды йышлаттым, хатта шиғыр ҡатнаштырып та ебәргеләй һәм әжеренә тыуған өйҙән почта аша аҡсаһы ла, аҡмаһа ла, тамғылай ине. Шулай ҡәләм шымартҡас, пионерҙар гәзитенә ус яҫыһындай мәҡәлә йә шиғыр-миғыр әтмәләргә өйрәндем дә шуның өсөн, ҡуян ҡойроғондай ғына булһа ла, "гонорария" (йәғни аҡса!) тәтетеүҙәрен белеп алғас, әле генә һүҙемде башлаған татлы сәмдән усаҡтағы ҡоро утындай дөрләнем һәм: "Яҙыусы булыу өсөн нимә кәрәк икән?" – тип уйланырға тотондом. Ләкин, күпме генә баш ватһам да, әҙиплек серен асырға хәлемдән килмәне, минең өсөн әҙиптәр һаман серле һөнәр эйәләре булып ҡалды. Был шөғөлдөң асылын ул һөнәрмәндәр ябай әҙәми заттарҙан бик ныҡ йәшереп һаҡлай кеүек ине.

Үҙ ғүремдә ул ҡәләм ҡәрҙәштәренең тик һүрәткә төшөрөлгән, таш һәм бронзанан ҡойоп ҡуйылғандарынан бүтәнен күргәнем булмағанлыҡтан, "нисек башларға?" тип өҙөлөп барып һорар кешем дә юҡ шул. Ә ҡомһоҙланып уҡыған нәфис әҫәрҙәремдең көллөһө: "Яңылыш юлға баҫаһың! Елкә соҡороңдо күрә алмағаның кеүек, әҙип тә булмаясаҡһың!" тип ныҡлы киҫәтә. Хатта һәр китап бите һайын, хәрефтәр аралығына боҫоп, миңә бармаҡ янап ултырған асыулы тәнҡитселәрҙе ла күрәмен һәм ҡурҡышымдан тәнем эҫеле-һыуыҡлы булып семерҙәп китә. Шулай ҙа хыялдарымдан ваз кисеп бойоғоп ҡалманым, нәпсе – шайтан, тиҙәр бит! Асыулы тәнҡитселәргә ҡыйыу ҡул һелтәп, Пегас-арғымаҡтың конюшня ҡапҡаһын үҙем эҙләп табырға ҡарар ҡылдым: тырышһам, асып та керермен, эйәрләп, атланып та алырмын!

Тәүге бурыс – тема эҙләү, әлбиттә. Нимә хаҡында тибрәтергә ҡәләмде? Һуғыш, никах, урлау, айырылышыу, донъя буржуазияһы һәм төрөк министрының ғәреме – былар бөтәһе ҡырылмаһа ҡырыҡ ҡәләм эйәһе тарафынан ҡырылмаһа ҡырыҡ төргә әйләндереп сәйнәлгән темалар. Ҡайһыныһын ғына алма, күптән яҙылып, ташҡа баҫылып өлгөргән. Хатта ерҙәгеләренә генә мөрәхәтһенмәй, Ҡояш системаһы артына сығып китә башлағандар. Баҫылып ятҡан китаптар һаны төҙөлөш материалы булған кирбестеке менән уҙыша, тиҙәр. Ошондай ҙа ауырлыҡлы заманала ҡайҙан табып алайым эҙләгәнемде?..

Баш ҡаланың ҡырыйындағы бөкөрәйгән ағас өйҙөң бер мөйөшөндә айына биш тәңкә түләп торған фатирымда ана шулай көйәләнеп ултырҙым-ултырҙым да, плащымды иңгә һалып, ваҡиғалар менән мыжғыу шаулы урамға сыҡтым, "Эйелеп ала белгән кешегә тема аяҡ аҫтында ята", тип уҡығайным бер әҙәби тәнҡит мәҡәләһенән. Күҙҙе асыбыраҡ баҡһаң, ысынлап та ифрат бай йөкмәткеле икән дә был донъя! Танау төбөмдән үк сыңғырҙашып, бер-береһен тапай яҙып, трамвайҙар елдерҙе, береһенән тайпылайым тигәнсе, йәнәшәләп саптырҙкан виртуоз шофер "Победа"һы ҡанатына плащ салғыйымды әләктереп йыртып алды

– үҙем көскә мостовойға танау сәнесмәй ҡалдым. Иҫәнгерәп торғанда, артымдағы ҡөҙрәтле һыҙғыртҡыс аҡылға ултыртты тиҙ үк. Муйынымды эскә тартып, уҙғынсылар төркөмөнә йылдам ғына һеңергә итеп ҡараным, әммә милиционерҙың хәстәрлекле икенсе сөрөлдәтеүе таштай ҡатып ҡалырға мәжбүр итте. Бик күңелһеҙ булһа ла, шыҡайып торған килеш, урам хәрәкәте тәртибе буйынса тәрән йөкмәткеле телмәр тыңланым һәм был һабаҡ өсөн ғәзиз биш һумлығым менән һаубуллашып, артабын аҙымланым.

Инде йөҙөмдө һытып, мейемдә фекерҙәр буталып, кәйефһеҙләнеберәк барһам да, алған һабағым арҡаһында тротуарҙан яҙлыҡмайынса уң яҡтан ғына атларға аҡыл етте – биш һумлығым өйрәтте. Әҙәби хыялдарыма ҡабат ҡайтып, үҙәк урамдағы матур биҙәлгән витриналарға баҡтым, аллы-гөллө вывескаларҙан арбалдым. Ә шулай ҙа, уларға арнап шиғыр яҙыу теләгем бик ҙур булһа ла, тәнҡитселәр күп туҡыған “штамп”ҡа юлығырмын тип, сәмле фекеремдән егеттәрсә баш тарттым. Ҡала үҙәге күренештәренән илһамыма аҙыҡ алыу ни тиклем дә һәләкәтле булырын аңлай инем: татар әҙибе Ғалимйән Ибраһимовтыҡылай елкә соҡорон ҡаплатып оҙон сәс еткергән серле һөнәр эйәләренең тап шул тирәлә йәшәүе, урам сатындағы зәңгәр неон яҙыулы ресторан тәңгәлендә йыш буталыуы һәр кемгә лә мәғлүм бит – мин күргәнде күптән инде киптереп элгәндәрҙер... Тимәк, бында эш бешмәй, тип ҡаңғырып торғанда, ала-ҡола тельняшкалы бер азаматты абайлап, ҡаланың йылға пристане келт итеп иҫкә төштө -- бына ҡайҙа һоҫорға тейешмен “свежий материал”ды! Йәш Горький ҙа бит үҙенең Челкашын пристандән һәрмәгән! Бәлки, берәй капитан менән танышырмын, һис юғында матросы ла ярап торор.

Ләкин Хаҡ яҙмаған икән был юлы ысын йылғасыларҙы осратырға. Пристань ҡапҡаһынан инмәҫем борон уҡ мине кинолағы профессорҙыҡына оҡшаш өскөл һаҡалтайлы, аҡ халатлы уҙаман тап итте лә еңемдән эләктерҙе:

-- Саламалейкум, товарищ сын башкирского народа! – тип өлтөрәп тәбрикләне, “ҡотороҡ һыйыр һөтө”нән һемереп алғанлығы сер түгел ине. Ҡиәфәте урыҫ кеүек күренһә лә, ниндәй тоҡомдан икәнлеген шөйлә самалағас, мин дә ҡоро ҡалдырманым, үҙе һымағыраҡ:

-- Малейкумассалам, товарищ потомок Чингис-хана! – тип яуапланым, ә үҙем: “Минән мәйет яһап, анатомировать итергә шәйәләй, ахыры, был эскулап...” – тип шөрләп тә ҡуйҙым, сөнки пристандән бер квартал аша ғына мединститут барлығын һәм унда төн һайын бер профессор студенттарына, мәйет кәүҙәһен ярып, “анатомик театр” тамаша иттертеүен ишетеп белә инем. Хәтәрлекле ошо мәлдә аҡ халат кеҫәһендә медицина бысағы-скальпелгә оҡшаш нәмә уҫал ялтырап, аҡылымды юя яҙҙы – скальпель тигәнемдең төптө гонаһһыҙ сәс алғыс машинка икәнлеген абайлау ғына киҫкен аҙымдан араланы. Йоҙроҡтарымды яҙылдырып, иркен һулыш алып, халатлыға һораулы ҡараш аттым.

-- Әйҙә, рәхим итегеҙ,

Сәс алдырып китегеҙ.

Теләһәгеҙ – ҡырырбыҙ,

Теләһәгеҙ – ҡырҡырбыҙ! –

тип, секерәйгән күҙҙәре менән йылмайып, устарын сәбәкләй-сәбәкләй һамаҡланы ла сәйерйән, ҡулдарын һоноп күрһәтеп, ишеге ҡыҫыҡ торған, зәңгәр вывескаһы

менән ымлаған парикмахерскийға саҡырҙы. Вывесканан алсаҡ йылмайған бөҙрә сәсле баш һүрәтенән арбалып, йәшен атҡандай сағыу нурланды мейем, Күктән бер юлы ике Ҡояш көлгәндәй, көллө донъям яҡтырҙы, йәмләнде, әйтерһең, яңынан рухланып тыуҙым. “Бына ҡайҙа ул тема, бына ҡайҙа материал!” – Шатлығымды тыя алмай, эстән генә ҡанатланып бейенем, сөнки Колумб үҙе лә, бәлки, Американы асҡанында был тиклем елкенмәгәндер. Ысынлап та, яҙыусы өсөн бының ише хазина төйәген күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын. Үҙемдең белеүемсә, донъя әҙәбиәте тарихында парикмахерҙар тураһында бер генә поэма ла, повесть-мовесть тә, хикәйә-микәйә лә (романын әйтеп тә тормайым!) яҙылғаны юҡ әле, ошо көнгәсә был тема карталағы ҡотоптарҙай аҡ тош хәлендә ята, үҙенә йәш, ҡыйыу сәйәхәтсенең килеүен көтә. Әгәр ҙә ки ошоғаса бында аяҡ баҫмаған серле һөнәр эйәләренең (йәғни яҙыусыларҙың!) илһам күҙен томалаған билгеһеҙлек пәрҙәһен, кескәй хикәйә ярҙамында ғына булһа ла, йырта асып ебәрһәм, донъя әҙәбиәтен ул яңы төшөнсәләргә байытасаҡ һәм, -- кем белә! – бәлки, күренекле әҙәби-ғилми мәғлүмәттәр ҡатарында энциклопедияға ла керетелер. Белер ине шунан ағайың ниндәй энә менән ниндәй ҡойо ҡаҙып йәншишмә сығарырға! Мөһим мәлдә ошондай мөһим нәмәне диҡҡәтенә эләктереп тотоп ҡалдыра алған мейемдең уңғанлығына ҡыуанып, саҡырыусыма дәртле аҙымдар менән тағылып эйәрҙем. Барыбер сәсем еткән – тормош серҙәрен өйрәнгән ыңғайҙа алдыртып та сығырмын.

Аҡ халатлы, профессор һаҡаллы был уҙаман – оҫтахананың бер юлы мөдире лә, пристандән клиенттар ылыҡтырыусы йылғыры ла Кәсепйән Шымағаевичтың үҙе икән. Етәкләп әбинеп, көткөлөк мөйөштәге түңәрәк өҫтәл эргәһенә ултыртты, биттәре тетелеп бөткән биш йыл элгәрелекле мода журналдарын ҡарай торорға ҡушты. Үҙе, яҡындағы шкаф тартмаһын асып, мөлкәттәренә өңөлдө. Мин, журналды аҡтарған булып, бүлмәгә күҙ йүгерттем. Тәү ҡарауҙан уҡ, түшәмдең дымға бүртенгән һәм ҡайһы бер урындарында йыртылып һалберәгән бал кәрәҙе биҙәкле обой ҡағыҙы йәлеп итте иғтибарҙы. Ә мөйөш-һәйештәрҙә, ағарып, егәрле үрмәкселәрҙең мөртәт себендәргә ҡорған ауҙары һағалай.

Бер юлы өс оҫта эшләй, өсөһө лә ҡатын-ҡыҙ. Береһе тығыҙлап йөн тултырған оло киндер тоҡтай йыуан, ҡабарынҡы күкрәкле. Сөм ҡыҙылға буялғын турһыҡ ирендәрен супылдатып, көскә тын ала-ала һөйләй:

-- Беләһегеҙ бит Зөләйхә Яппаровнаны? Бөгөн иртән “тиҙ ярҙам”ға тейәп алып киткәндәр. Күрә лә алмай ҡалдым бахырҙы.

-- Теге, былтыр аборттан саҡ үлмәй ҡалған Зөлпөйҙөмө? – Моңһоҙ ғына белеште күршеһе, пасталанған яҫы ҡайышҡа шарт-шорт бәке янап.

-- Эйе шул. Йәнә бәхетһеҙ роман.

-- Апаһы ла уйнаштан бала тапты...

-- Хәҙерге заман ирҙәре бөтөнләйгә намыҫтарын юйғандар. Ҡарап тороуға шундай ябай, бер ҡатлы ғына малай ине, “алам” тип ышандырып йөрөп, ташланы ла китте бисараны. Хәҙерен: “Мин уны күргәнем-белгәнем юҡ!” – тип әйтә, ти...

-- Вәт һиңә малай аҡтығы! Ә ниңә, күптән түгел генә бер ҡарт полковник вәғәҙә биргән тигәйнеләр ҙәһә Зөлпөйгә?

“Әһә, бына темам!” тип ҡуш ҡолаҡ ҡарпайтһам да, ғәйбәт дауамын тыңларға тура килмәне: мөдир үҙе йәнәшәмә төпләнде лә, ҡунаҡсыл алсаҡланып, татлы теле менән һүрҙе зиһенде. Уның менән талғын һөйләшкән хәлдә, ҡатындарҙың ҡайғырып көрһөнөүҙәрен, һоҡланып тел шартлатыуҙарын, ир-атҡа яуҙырған ләғнәттәрен ҡолаҡ артым менән ишеткеләнем.

-- Мырҙам, ҡырынырға яҡшы бәке һатып алырға теләйһегеҙме? – Асыҡ итеп ҡолағым алдынан ишетелде Кәсепйән Шымағаевичтың тура телмәре һәм был әле минең өсөн көтөлмәгән тәҡдим булып сыҡты. Тәүҙә, өнһөҙ генә, морон аҫтымды уң усым менән ҡапшап ҡараным, ә һулаҡайын кеҫәмә тыҡтым. Морон аҫтымдағы себей йөнөм һиҙелерлек оҙоная һәм шөйлә ҡата барһа ла, кеҫә төбөм ҡалынайыуы насар тойола ине, шуға күрә яҡшы тәҡдимде йығырға, киләсәктә ҡырыныу өсөн дә оҫтаханаға йөрөп аҡса сарыфларға кәрәк буласағы ныҡ ҡына бошондорҙо (ярай ҙа ул тиҙерәк тема табып, ташҡа хикәйә баҫтыртып, нәшриәттән гонорар ҡайырып алһым?..) Аҙыраҡ фекер туплағас:

-- Ҡырын китмәҫ ине лә ул үткерен һәм оҫоҙорағын тапҡанда... – тип ҡырыныраҡ һуҡаланым. Кәсепйән Шымағаевичтың күҙҙәре йылтыраны:

-- Бына егет! Сто процентная умница! Бында килеп бик яҡшы иткәнһең әле, минең менән юғалмаҫһың һис ҡасан! – Иңбашыма ҡулын һалып, маңлайымдан супылдатты. Шул ыңғайы шкаф тартмаһынан өҫтәлгә аяҡ кейеменән бушанған оҙонса ҡатырға ҡумта килтереп ҡуйҙы. – Хәҙер мин һиңә шундай үткер, серле бәкеләр күрһәтәсәкмен – иҫең-аҡылың китер! “Ҡайһыныһын һайлап алайым икән?” тип, шаҡ-ҡатырһың. – Ҡумтаны асып, ҡолаҡҡа шыбырҙаны. – Тик кешегә ысҡындыра күрмә, брат, сер! Бөтәһе тиң заграничныйҙар булар. Әләм-һәләм менән бысранмайым мин алай.

Үҙ ғүмеремдә, танау аҫтым ғына түгел, төклө елкәм дә сит мәмләкәт бәкеһен татымаған мин бахыр, тешем араһынан сыҡмаясағын вәғәҙәләп, серле ҡырыныу ҡоралдарының күрһәтелеүен көттөм. Хатта яҙыусы булыу ҡайғыһы ла онотола бireп торҙо.

Кәсепйән Шымағаевич, сәмле хәлемде һиҙенеп булһа кәрәк, ҡабаланыу билдәһе күрһәтмәне. Ҡулын ҡумта ситенә ырғаҡтай элеп, мөлкәте өҫтөнә ябылған иҫке гәзит һүрәтен тамаша ҡылды, үҙе морон эсенән генә “Әпипә”не көйләне. Һүрәттең ысынлап та һүрәт икәненә инанғас, ҡарашын түшәмгә атты ла хыялланып һөйләнде:

-- Дә-ә-ә... була ине, элек брат, бәкеләр – хәҙергеләргә иш түгел! Ә шул бәкеләргә лайыҡлы кешеләре, кешеләре! Бөйөк урыҫ шағиры Лермонтов әйтмешләй:

Да, были люди в наше время,
Не то, что нынешнее племя:
Богатыри – не вы!

-- Шиғри күңелле икәнһегеҙ! – тигән булдым.

-- Бәкене ҡулында йәшендәй уйната белгән һәр маһирйән шиғри күңелле ул, мырҙам. Дә-ә-ә... була ине элек, брат, бәкеләр – ҡулға алһаң, йәшендәй йәшнәр ине! Хәҙерге бәкеләр бәкеме ни ул? План тултырырға ашығып, һыуыҡ тимерҙән әтмәләп сығаралар. Бер ҡырһаң, икенселәй сарға тоторға кәрәк. Их, бар ине бит, брат, заманалар! Кибетемдә ниндәй генә бәкеләр булмай торғайны! Ҡазандағы

минең кибетемдә... – Мөдир бер -- миңә, бер залдағыларға аҡайып ҡарап телен тешләне, ә мин һуңғы һүҙҙәренең мәғәнәһенә төшөнөп өлгөрмәнем – артығыраҡ ысҡындырыуын һиҙенеп, һүҙ ағышын ҡапыл бүтәнгә борҙо. – Инглиз ғына яһай икән хәҙер ысын бәкене: шундайын да үткер, ти, ундағы оҫталар клиенттарының любой һаҡалын, һабынламай-нитмәй, төкөрөкләп кенә ҡыра, имеш...

-- Улай ҡырыу бик килбәтһеҙ ҙә инде. Төкөрөктә ниндәй генә микроб юҡ!

-- Дә-ә-ә... Бөйөк Туҡай әйтмешләй:

Күктә ниләр булмас, дисең,
Очсыз-ҡырыйсыз күк бит ул!

-- Туҡайҙы ла беләһегеҙ икән дә?

-- Әтү? Кибетебеҙгә кереп, һыра эсә торғайны.

-- Бәй, кибетсе инегеҙме?

-- Ғәфү-ғәфү, мин әйтмәнем! Бер байҙың кибете ине... Төкөрөкләп ҡырыуҙы әйтәм: ҡайһындай ҙа экономлы, мәшәҡәте лә аҙ булған. Һабынламай ҡырып ҡара әле хәҙергеләрҙе! Вәт элек бар ине миндә бәке – бөтә бәкеләргә бәке! Клиенттың яңағына тейҙерһәң, ҡулыңды үҙе һөйрәп йөрөтөр ине. Хатта гөбөрнатор һаҡал ҡырыусыһының күҙе ҡыҙа ине уға. Мәкәрйә йәрминкәһендә үткәрелгән һаҡал ҡырыусылар ярышында мин ул бәке менән ысын генерал ҡолағын ҡыйып төшөрҙөм, хатта һиҙмәй ҙә ҡалды. Вәт бәке ине ул, исмаһам! Заграничный!

-- Нисек башығыҙ иҫән ҡалды, нисек тотоп атманылар?

-- Хе-хе-хе, Әрәсәйҙе бәлшәүиктәр сәскә аттыртҡан НЭП дәүере ине бит ул. Генералдың үҙен тотоп аттылар, ә шуны фашлағаным өсөн миңә рәхмәт әйттеләр, хатта сәс алғыс машинкаһы менән бүләкләнеләр.

-- Ә хәҙерге заманда кемдең дә булһа ҡолағын ҡырҡҡанығыҙ бармы һуң? – Хәүефләнеп белештем, тауышым ҡалтыранып. Сәс алыусы оҫтабикәләр, ағарған йөҙөмдө күреп, буғай, шырҡ-шырҡ көлөштө.

-- Хәҙерге бәкеләр бәкеме ни -- уға яраҡһыҙ. Тағы, милиция ҡамасаулыҡ ҡыла... – тине Кәсепйән Шымағаевич, ауыр көрһөнөп. Тыныслана биреп, яҡыныраҡ шыуыштым:

-- Күрһәтегеҙсе шул заграничныйҙарығыҙҙы!

-- Айн момент! – Кәсепйән Шымағаевичтың ике бармағы гәзит ҡырыйын йылдам күтәрҙе лә хазинаның бер данаһын яҡты донъяға сығарҙы. Тәҙрәнән төшкән ҡыя нурҙарға һары еҙ йылмайыуы сағылды. – Американец! – Күҙҙәрен күк сливалай түңәрәкләндерҙе бәке һабын үбеп һәм уның ит балтаһылай тупаҡланған йөҙөн асып күрһәтте. – Рокфеллерҙың үҙе тотоп ҡырынған бәкеһе был, брат! – тип, ҙур сер итеп, ҡолағыма шыбырҙаны. – Мин уны Мәскәүҙә бер дипломаттан ат хаҡына һатып алдым.

Атаҡлы миллиардер бәкеһен йүнләп ҡарарға ла өлгөрмәнем, күп ҡайрауҙан урта биле ашалып, кәкре ҡылыҫка оҡшап ҡалған икенсе бер экспонат ятты мөдирҙең усына.

-- Быныһы төрөк подданныйы. Ҡара диңгеҙ аша шаландала Одесса контрабандисы Жора Бесәй Мыйыҡ үҙе ҡайтарған тауар!

Ҡатын-ҡыҙҙар йәнә шырҡ-шырҡ көлөшкәс, шуны абайлап алдым: “заграничный”ҙарҙың һағаҡ төбөнә үҙебеҙҙең Ленинград заводының “Нева” тамғаһы һалынған – оҫтахананың туҙып ғәмәлдән сығарылған иҫке-моҫҡоларын “төртмәксе” икән был ағай... Ҡыҙыҡһыныуым һүрелеп, йөҙөмдө ситкә бороуым “кибет”семә бик мөшкөл тәьҫир итте, ҡулдары ҡалтыраны. “Төрөк мөғжизәһе”н ашығып гәзиткә ураны ла түш кеҫәмә сумырҙы:

-- Алығыҙ, брат, тиҙерәк алығыҙ – үкенмәҫһегеҙ! Бына бынауы себей йөндәрегеҙ оторайһа, ғүмерегеҙ буйына рәхмәт уҡырһығыҙ. Лермонтов менән Туҡайҙы аңлағанығыҙ, шиғри күңелле булғанығыҙ өсөн генә арзанираҡ ебәрәм.

Кәрәкмәһә лә, ныҡышлығына түҙмәнем:

-- Күпме һорайһығыҙ һуң?

Ҡолағыма шыбырҙаны:

-- Күпме, тип ни, күп түгел инде: йөҙ илле грамм аҡтан, бер көрөшкә һыра, сәйнәргә селедка ҡойроғо.

Кинәт иҫемә килеп:

-- Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт, миңә бәке кәрәкмәй. Йәшмен әле, өйләнмәгәнмен – ҡолағымды ҡырҡырға йә боғаҙымды салырға йыйынмайым! – тинем. Ғазапсым, ҡасып китеүемдән ҡурҡҡан шикелле, шытырҙатып ҡулымдан алды:

-- Ҡасан да булһа өйләнерһегеҙ бит, брат...

-- Ул саҡта мин ниндәй ҙә булһа ябайыраҡ ҡорал ҡулланырмын! Ә хәҙерен сәс алдыртырға килдем. Тиҙерәк...

-- Сират, брат, сират! Һуҡты ла күпте, түгел бит был. Хатта Ленин мавзолейына ла көн элек сират торалар.

Ҡатындар һаман лығырҙап ғәйбәт һата, миңә кресло бушанмай ҙа бушанмай... Бәке аҫтындағы клиенттарҙың да ҡиәфәте вокзалда поезд көткәндәгеләй талғын, бойоҡ – тиҙ арыныуҙан өмөттәрен өҙөп, буғай, яҙмышҡа тапшырылғандар. Сөнки беләләр: яҡты социализм осоронда хатта ҡараңғы гүргә лә сират, үҙ сиратыңды сабыр көтөргә кәрәк. Әммә-ләкин был минутта мин үҙемде, бына-бына яҙыусы булыр, ябай халыҡ көн күргән замананан иң кәмендә бер аҙым алда барыр инсанды, рухым менән коммунизм осороноҡо һананым һәм ошондағы арттан һөйрәлеп килеүселәрҙе алға тартыу теләгенән ҡомарландым. Ошо хистәр тулҡынында тирбәлеп иҙәнгә баҡҡайным, аяҡ аҫтында өйөлгән сәс сүмәләләрен күреп көйөндөм. Аҡ брезент туфлиҙарыма ла хәтһеҙ генә ҡыл һырыған, әгәр был туфлиҙарҙың береһен, ҡағыҙға төрөп, антропология институтына ебәрһәң, шуға ҡарап ҡалабыҙҙа әллә нисәмә расанан торған халыҡ йәшәүен белерҙәр ине. Ул минутта быны эшләү башыма килмәне, әлбиттә, сирҡаныу ҡатыш йәбер генә әрнетте. Характерыма аҡрынлап керә барған әҙип тотанаҡлығын юйып, ҡырыҫ өндәштем:

-- Мөдир иптәш, ниңә иҙәнде һепертмәйһегеҙ? Кейеҙ баҫырға түшәнегеҙме әллә?

Кәсепйән Шымағаевич, осаһына энә ҡаҙалғандай ырғып тороп, бәкеле ҡумтаһын шкафҡа йәшерҙе. Яғаларын, галстугын төҙәтте һәм, бала әтәстәй әзерәйеп, олпат һыны менән ҡаршыма баҫты:

-- Был һеҙгә ҡағылмай, мырҙам. Һеҙҙең хәсрәт – сәс алдыртыу ҙа һаҡал ҡырҙыртыу, аръяғын беҙгә ҡалдырығыҙ!

-- Алайғас, ниңә түшәмегеҙ ялпылдаған, мөйөштәрегеҙгә үрмәксе ау һуҙған, ә тәҙрәләрегеҙ бер иле туҙан?

Әйтеүем булды, өс күкрәктән зәһәр ҡатын-ҡыҙ нәфрәте суйыр ташланып яуҙы башыма һәм үҙемде шул мөҙҙәттә йәмәғәт тыныслығын боҙоусы зарарлы элемент итеп тойҙом. Кәсепйән Шымағаевич иһә коллегаларының фекерен мәҙәнилерәк аңлатты:

-- Тормоштан артта ҡалғанһығыҙ икән, мырҙам, Әрәсәйҙә штаттар ҡыҫҡартылыуын белмәйһегеҙ. Йыйыштырыусы берәмек юҡ бит хәҙер. Гәзит уҡырға кәрәк, мырҙам, гәзит!

Ысынлап та, гәзит алдыртмайым шул, ә ҡалын журналда ундайҙарҙы яҙмайҙар. Ҡолаҡтарым ҡыҙарып, тәртипһеҙ телемде тыйҙым. Аҙ һөйләп күп тыңларға тейеш, тиҙәр бит яҙыусыны.

Шул арала бер оҫта ҡул бушанды ла, кеҫәмде ҡапшап, өс һумлыҡтың иҫәнлегенә инанғас, дермотины эт телеләй һәленке-йыртыҡ креслоға ларҡайҙым. Күпме генә тыйылырға тырышһам да, салфеткаға ҡарата нәфрәт белдерергә тура килде, сөнки уны әле генә тороп киткән клиент муйынында күргәйнем. Ғәжәпләнеүемә ҡаршы, талаш-тартышһыҙ ғына, хәйерһеҙ сепрәкте төпкө бүлмәгә алып инеп киттеләр. Муйыныма бүтәне килтереп һалынғас, тынысланып, башымды сибәрлек маһиры ҡулына тапшырҙым.

Елкәне ҡырҙыртмай ғына (ҡиммәткә төшә!) “полька” алдыртырға кәрәк. Хушбуйлатырға ла ярамаҫ. Их был кеҫәнең һайлығы!..

Арҡа буйҙарымды сымырҙатып елкә сәсемә һалҡын машинка батҡайны, сырт-сырт итеп бер-ике һайраны ла барабанына сүп тығылған комбайндай туҡтаны. Оҫтабикәм уны минең бер семетем үҫенте менән ҡуша йолҡоп алды.

-- Ну сәс! Ну суҫка ҡылы! -- Әллә һоҡланып, әллә хитланып һөйләнде, аңҡауына телен сыртылдатып. Мин иһә сырайымды һыттым, йомғаҡланып кресло төбөнә баттым. Шулай ҙа сер бирмәнем: маһир әҙәби тәнҡитселәр өйрәтеүенсә, әҙип тигәнең эт йәнле булырға тейеш! Оҫтабикәм иһә миңә ғәйепләпме, үпкәләберәкме ҡараны, әйтерһең, “суҫка ҡылы”н уларға этлек эшләмәккә махсус үҫтереп кергәнмен. Өндәшмәй ултырыуымды ла шундайға һаплап, буғай, беҙҙәй ҡарашымды көҙгөнән тотоп алып баш сайҡаны. -- Әллә тимерсыбыҡ инде... Ниңә ҡаты шул тиклем? – тип ҡаҙалды.

Рухым менән коммунизм дәүере инсаны икәнлегемде онотмай, һалҡын ҡанлылыҡ һаҡларға тырыштым:

-- Әсәйем менән атайымдың эше был, ниңә минән һорайһығыҙ? – тинем. Оҫтабикәмдең ҡыҙыл буяулы ирендәре ҡыйшайҙы, күҙҙәре төймәләнде:

-- Оят түгелме һеҙгә, гражданин, шулай тип һөйләшергә? Ҡарағыҙ, ҡайһындай ҙа холоҡһоҙ йорат китте хәҙер, ә?!

-- Ах, ах, грубиян! – Эштәрен туҡтатып тороп ахылдашты коллегалары. Кәсепйән Шымағаевич та абруйлы үҙ фекерен килтереп ҡыҫтырҙы:

-- Д-ә-ә... тифозный бет кеүек ваҡ, аскаҡ, күпкәк, ҡырыҫ, ҡомһоҙ тоҡом үрсене был донъяла, бер тәңкәһе өсөн ҡалтырап тора. Боронғоларға етеү ҡайҙа инде ул, хәҙер уларҙы төшөндә лә күрмәҫһең...

-- Күрәһегеҙ бит, сәсе ниндәй...уф!

-- Ташлағыҙ ул ҡул машинкағыҙҙы, электрлығыҙ бар ҙаһа! – Түҙемлегем ҡаҡшаны.

-- Ә электр энергияһын кем экономлар, планды кем үтәр?

-- Һеҙ нәмә, план буйынса гел ҡуян мамыҡлы баштарҙы ғына көҙәргә тейешһегеҙме?

-- Телләшмә, телеңде ҡыҫҡартырмын! – Машинкаһын ауыҙым алдында сыртылдатты оҫтабикәм. Тороп шылырға самалап, ҡалҡына бирep ҡуйҙым, ләкин мыҡты күкрәге менән яурынымдан баҫып сүктертте.

-- Ярар, ҡәнәғәтләндерегеҙ шуны! – Мөдир ҡул һелтәне. Электр машинкаһының талғын бажылдауына иҙерәп, керпектәремде тоташтырҙым. Оҫтабикәм иһә мине онотоп, түбәм өҫтөндә мышылдап тырышҡан хәлдә, йәнә баяғы Зөләйхә Яппаровнаның асы мөхәббәте хаҡындағы әңгәмәһен дауамланы. Күмәкләшеп ахылдаштылар, ухылдаштылар, кемдәрҙелер тиргәнеләр – бөтәһен төшөмдә кеүек кенә ишеттем. Ниндәй рәхәт машинка яҡшы эшләгәндә башыңды бераҙ әүештергән килеш ялҡауланып, йоҡомһорап ултырыу! Ошоноң өсөн генә лә бит был һөнәр эйәләре яҙыусы ҡәләменән данланырға лайыҡлы.

Шулай иҙерәп ойоғанда кемдер осло нәмә менән арҡама ҡаты төрттө лә минең урынға үҙе “әс-сә-ә-әй!” тип әсе һөрәнләне, машинка шып туҡтаны; йәнә лә бер семетем сәсемде йолҡоп алып, өҫтәлгә менеп ятты. Баҡтиһәң, мәктәптән ҡайтышлайы, әшнәһен эйәртеп, оҫтабикәмдең ебектанау малайы килеп ингән дә әсәһенән еләк таптырта икән. Оҫтабикәм мөйөштәге күнәктән уның кеҫәһенә еләк һала, ә мин инсафлы көтәм. Машинка ҡабат выжлап елкәмә менгәндә, көтә-көтә көтөк булып, танауым өҫтөнә бөрсөк-бөрсөк тир тамсылары сыҡҡайны. Ә шулай ҙа әүәлге ойоу хәлемә ҡайтырға тырыштым.

Сикәм буйлап машинкаһы саманан тыш юғары үрләй башлағас ҡына һиҫкәнеп күҙҙәремде астым да шикләнеп көҙгөгә баҡтым. Һәм, ҡотом осоп, ике йыл буйы һөйөп-һыйпап үҫтергән ҡәҙерле сәсемдән таҡыр ялан ғына ҡалғанлығын шәйләнем. Һөйөклөм, көҙгө төндәй ҡарайып, һис кемгә лә кәрәкмәгән рәүештә алдымда, аяҡ аҫтарымда ята туҙырап. Сикәләрем яп-яланғас, маңлай өҫтөмдә генә футболистыҡына оҡшаш бер семетем үҫенте ҡалдырылған... Бына һиңә яҙыусы! Бына һиңә Ғалимйән Ибраһимовтыҡы һымаҡ сәс!.. Был ҡиәфәтем менән редакцияға ҡулъяҙма күтәреп кереп түгел, күршеләргә күренеүе лә оят! Салфетканы муйынымдан йолҡоп:

-- Ниңә мыҫкыл иттегеҙ?! Ниндәй прическа был? – Олоуымды һиҙмәй ҙә ҡалдым.

-- Бәй-бәй, күҙегеҙ тондомо әллә? “Бокс” бит!

-- Ни өсөн “бокс”? Ни өсөн “полька” түгел?

-- Үҙегеҙ бит ҡуштығыҙ. Ниңә тулайһығыҙ, урам бармы әллә бында?

Башҡалары ла ҡушылды:

-- Аҡырма, юғиһә милиция саҡыртабыҙ!

-- Аҡырмайым. Ниңә “полька” урынына “бокс” итеп мөнтәгән? Мин бит уға башта уҡ “полька” тинем.

-- Алдашма, гражданин. Алдыртып бөт тә иҫән-аман һыпырт бынан трамвайҙар йөрөгән саҡта. КПЗ-ға эләгерһең ату! – тип абруйлы һүҙен әйтте

Кәсепйән Шымағаевич. Илай яҙып, ихтыярҙарына ҡуйҙым: мөнтәһә -- мөнтәһендәр ҙә тиҙерәк ысҡынайым. Тик “тити-мити”йе етерме? Их, кеҫә төбөнөң таҡырлығы!..

Ҡорос ҡайсы, мыҫҡыллап сыртлай-сыртлай, үҙ бурысын үтәне. Ҡыл щетка ла елкәмдән һепереп төшөрҙө. Шөкөр, өс һумымды бирәм дә...

“Туҡтағыҙ!” тип һөрәнләргә лә өлгөрмәнем, оҫтабикәм оҙайлы тәжрибә күнектергән оһоллоҡ менән хушбуй шешәле резинкә ҡыуыҡты алды ла, һорап-нитеп тормаҫтан, башыма бөркөлдөрҙө. Ә мин, һағыҙаҡ өйөрөн ҡыуғандай, ҡулдарымды болғап сәбәләнә-сәбәләнә, ырғып тороп илерҙем:

-- Кәр-рәкмәй, кәр-рәкмәй!

Бүлмәләге барыһы, артабан ни булырын көтөп, тамаша ҡыла ине.

-- Аҡсам... аҡсам етмәй минең... – Иҙән ярығына инеп китерҙәй ҡыҙарып, өс һумлыҡты өҫтәлгә һалдым. Ләкин ғазраилым йәнемде алып:

-- Һеҙҙән дүрт һум да етмеш биш тин, гражданын, -- тип, иҫәп-хисап бланкыһын тотторҙо.

Эй Хоҙайым, ҡайҙан алайым ҡалғанын?

-- Гражданин, түләгеҙ! – Боҙло тауыш киҫте тағы бәғерҙе.

-- Янда юҡ... Көтһәгеҙ...

-- Эйе, ти, аҡылһыҙҙар бит бында! Ошо йәшеңдән алдашып, жуликланып йөрөү оят түгелме?

-- Юҡ, жулик түгел ул, ә бөйөк комбинатор – Остап Бендерҙың балаһы! – тип сирттерҙе Кәсепйән Шымағаевич. – Шар асығыҙ ишекте, ҡәҙерләп оҙатайыҡ!

Ғәрлегемдән яныр сиккә етеп, йыртыҡ салғыйлы плащымды сөйҙән алғанда бер ауаздан хахылдашып көлдөләр. Баяғы шарылдап еләк ашап йөрөгән малай ҡара күмер ярҙамында аҡ плащымдың арҡаһына бысаҡ тоттортоп ҙур танаулы кеше һүрәте төшөрөп өлгөрткән һәм аҫтына “жулик” тип яҙған икән. Ҡалтыранған ҡулдарым менән ыуаларға керештем, ләкин ул юйылманы, буялды ғына. Яҡын килеп күҙәремә тексәйгән Кәсепйән Шымағаевич:

-- Хөрмәтле комбинатор, әллә ҡама тунығыҙҙы закладҡа һалаһығыҙмы? – тине лә асыҡ ишектән елтерәтеп осама тибеп ҡалды.

Бая ғына ошо урамдан, дәртле хыялдарға сумып, шат, көр атлап килгәйнем; хәҙер иһә оло хәсрәткә тарығандай башымды һалындырып бойоғоп барам. Осраусылар ғәжәпләнеп йөҙөмә ҡарайҙар ҙа ашығып юл бирәләр, мин уларҙың күҙҙәрендә үҙемде йәлләү билдәләре уҡыйым. Скверҙағы репродукторҙан яғымлы көй ағыла, тик мин уны ишетмәйем; йылмайышҡан сәскәләр миңә нәфис ҡулдарын һона, мин уларҙы күрмәйем. Зиһенем һыҙлай, күңелем илай һәм был хәлдән ҡотолор сара юҡ кеүек. Их, тиҙерәк был ығы-зығылы социализмды артта ҡалдырырға ла коммунизм ожмахына барып керергә ине!

Туҡта-туҡта, моронлап килгән яҙыусы бит әле мин! Ошо күрмештәрем үҙҙәре үк заманабыҙҙың көҙгөһө булырҙай хикәйә темаһы түгелме?! Ҡайтырға ла ултырырға, яҙырға, яҙырға!

Ҡайттым, яҙҙым, яҙҙым; бөйөк Лев Толстой үҙенең “Война и мир”ын ун ике тапҡыр күсереп яҙыуын иҫтә тотоп, әллә нисәмә тапҡыр күсереп алдым. Көсәнә-көсәнә өс ай самаһы үтеп, мөнтәлгән сәсем ҡабат етеп, нәҡ Ғалимйән Ибраһимовтыҡылай яурындарыма һалынып төшкәс, пионер гәзитендәге

танылған шағирҙыҡы кеүек тегелмә бикле һары күн папка һатып алып, ҡулъяҙмамды ипләп һалып, ҡалын журнал редакцияһына барып керҙем. Хеҙмәткәрҙәр сәғәт элек үк төшкөлөктө ашарға зәңгәр неон яҙыулы бинаға юлланған, ҡағыҙ күбәһе өйөлгән өҫтәл артында һыңар күҙен ҡара күн менән ҡаплатҡан яуаплы секретарь яңғыҙы бөксәйеп ултыра, әле генә сәйҙән бушанған касаһында папирос төпсөгө төтәй. Хәйерһеҙ сәғәттә килеүемде өнәмәй, бүре һымаҡ ҡараны:

-- Йә, ҡустым, ни йомош?

-- Хикәйә яҙғайным, ағай... – Ҡулъяҙмамды төтәп торған каса янына һалдым.

-- Ниндәй темаға?

-- Ныҡ тартыулы эскерипкә ҡылындай зыңлап торған социалистик тормошобоҙ хаҡында, ағай.

-- Һе! – Ҡулъяҙма биттәрен асҡылап, һыңар күҙен арҡыс-торҡос йүгерткәс, үҙенән ситкә этәрҙе. Моғайын, стилемдең ҡытыршылығына, диалект һүҙҙәренә бәйләнер, тип торғанда, көтөлмәгән яҡтан килтереп тондорҙо. – Бер ниндәй ҙә социализм сатҡыларын күрмәйем. Йыйын ҡара буяуҙар. Социализм ундай булмай.

-- Тымыҡ күлдә шайтан була, тигәнде онотмайыҡ. Әле беҙ үҙебеҙ йәшәгән тормош күле – социализм түгелме ни? Мин бит үҙ күҙҙәрем менән күргәндәрҙе -- ылғый тормоштан алып яҙҙым.

-- Үҙ күҙҙәрең менән күргәндәрең генә социалистик тормош булмай ул, ҡустым. Һуҡтым да, күпте лә тип уйлайһың, әҙип һөнәренең төп серен белмәйһең.

-- Ниндәй сер ул, аңлатып бирегеҙ, зинһар! – тип үтендем, өмөтһөҙлөккә төшә барып.

-- Уныһын, ҡустым, шул эште махсус үтәүсе белгесебеҙ – Яҙыусылар ойошмаһының әҙәби консультанты аңлатыр. Коридорға сығығыҙ ҙа ҡаршылағы ишектән инегеҙ.

Был ишектән тегеһенә уҙған арала һығымталап өлгөрҙөм: ағай кеше яҙыусылыҡ һөнәрендәге төп серҙе белмәүемдән башҡа бер нәмәгә лә бәйләнмәне, тимәк, башҡа яҡтары камил. Шуны ғына һорашып белеп алһам, -- ур-ра! – яҙыусы булдым, тимәк!

Әҙәби консультант Сократтыҡы кеүек яҫы маңлайлы, тәрән уйсан ҡарашлы, аҡылы тышына бытлығып сыҡҡан ир ине. Ҡулъяҙманы ентекле уҡып сыҡҡас, өмөтләнеп көткән күҙҙәремә туры ҡарап, суйыр таштай ҡаты тондорҙо:

-- Бармай!

-- Ни өсөн?

-- Әле генә үҙең кереп сыҡҡан кабинетта ни әйтеп ебәрҙеләр?

-- Яҙыусылыҡтың төп серен әҙәби консультант аңлатып бирер, тинеләр.

-- Дөрөҫ тигәндәр. Беҙҙең һөнәрҙең төп сере – социалистик реализм ҡанунына ярашлы яҙыу ул, ҡустым.

-- Үҙебеҙҙең реаль тормош – ысынбарлыҡ ярылып ята лаһа?!

-- Социалистик ысынбарлыҡ ундай булмай. Сереп бөткән капитализм күренештәре аңҡый һеҙҙең яҙманан.

-- Мәҫәлән?.. – тинем, илай яҙып.

-- Мәҫәлән, һеҙҙең яҙыуығыҙса, трамвайҙар бер-береһен тапай яҙып бара, ә хәйерһеҙ автомобиль, тротуарға менеп, геройығыҙҙың салғыйын эләктерә. Социалистик илдә быларҙың булыуы мөмкин түгел, сөнки беҙҙә трамвайҙар – график буйынса, автомобилдәр урам хәрәкәте тәртибенә ярашлы йөрөй. Граждандар ҙа тротуарҙан ғына атлай. Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ иһә социалистик йәмғиәтебеҙҙең иң юғарылығлы әхлаҡ ҡанундары буйынса йәшәй -- уйнаштан бала тапмай. Ә һеҙ яҙған сәс алдыртыу ханаһында, социалистик дәүләт учреждениеһында, һөрһөгән непман ҡалдыҡтары, тупаҫ холоҡло мущан ханымдар эшләй алмай – социалистик ысынбарлыҡ юл ҡуймай быға.

-- Алайһа, үҙ күҙҙәрем менән күргәндәрем, ҡолаҡтарым менән ишеткәндәрем ысын булмай сығамы?

-- Әҙәбиәтебеҙҙең социалистик реализм ҡанундары күҙлегенән ҡарағанда, тап шулай! Бына ниҙә ул һөнәребеҙҙең төп сере!

Ике ҡолағым шаулап, күҙҙәрем тоноп, башым әйләнеп, ҡулъяҙмамды тотоп сығып йүгерҙем. Фатирыма ҡайтып, күҙҙәремде сытырҙатып йомоп, тар тимер карауатыма һуҙылып яттым. Мейемде бер хәтәр фекер бырауланы: бөтә күргән-белгәндәрем ысын булмағас, бәлки, мин үҙем дә ысын түгелдер?..

Өфө -- Сәнкем-Биктимер,
04.11.1956.

Һыңарғолаҡ Әпүш

Һуҡырҙы түрә яһаһаң,
илеңде һуҡырайтыр.

Мәҡәл.

Хикәйәгә башлауыс: авторҙың баш ҡалаға сәләм хаты

Баязит ағай! *Тәүҙә Һеҙгә үҙемдең ялҡынлы сәләмемде ебәрәм һәм ижади уңыштарығыҙ менән ҡотлайым. "Ҡоҙаса"ғыҙҙы радио аша тыңланым (өҙөктәрен генә, әлбиттә), бик оҡшаны. Эшләп ятҡан яңы эшегеҙҙә тағы ла ҙурыраҡ уңыштарға ирешеүегеҙҙе теләйем.*

Был юлы ла Һеҙгә сатирик хикәйә ебәрәм. Уҡып ҡарағыҙ әле. Бәлки, "Һәнәк"тә баҫырҙар, ә? Ә тегеһен кире ҡайтарһағыҙ яҡшы булыр ине, мин уны Һеҙҙең замечаниелар буйынса ҡабаттан эшләр инем. Сөнки ҡыш үтеп бара, ваҡыт тар – яҙып ятҡан бүтән әйберҙәремде яҙғы эштәргәсә бөтөрә алмам, тип уйлайым. Ошо бер-ике ваҡ хикәйәне эшкәртеп, донъяға сығарырға ярҙам итә алмаҫһығыҙмы икән, ағай? Бер нәмәм дә баҫылмағас, ҙур әйберҙәрҙе дауам итергә лә ҡул бармай. Тағы отказ булыр, тағы ғүмер бушҡа үтер, тип ҡурҡам. Колхозда йәшәйем бит, даими төшөмлө эш юҡ, тамаҡты көнлөклә эшләп кенә туйҙырырға тура килә...

Хушығыҙ, хат көтәм. Ҡулығыҙҙы нығ ҡыҫып, ***Йыһат Солтанов.***

Адрес: Оренбургская обл., Буртинский р-н, Рыскуловский с-совет, дер. Санким-Биктимир, Султанову Зигату Адигамовичу.

11. 01.1960.

Ике күҙен сырт йомоп, һуңғы йотомон уртланы. “Их, заманалар болғансыҡ, шайтан ҡотҡоһо ҡаты, йотомдо ҡанун тыя: түрә икән был, тип тә аралап тормай – бер үк ыстатъя менән ҡыя!..” – тип бәғерен ҡанһыратып уйланы. Хәләл аҡса бирep алған “ярты”ңды ла юрған аҫтында ҡаса-боҫа һемерергә тура килә. Хатта унда ла ауыҙыңды ҡайырырлыҡ контроль бар – теңкәгә тейгән бисә!..

Кисә генә юғарынан иҫкән замана һулышын вәкилдәр йыйыны аша ауылдарға уҙғарып, тап ҡанун ҡушыуынса, айныҡ йәндәр йәмғиәтен “ялт!” иттереп ойошторҙо ла ҡуйҙы ул, урындағы хакимиәт рәйесе. Ил алдында беренсе булып шәхсән үҙе ҡотороҡ шайтан ҡотҡоһонан баш тартыуын, бынан ары тамсы ла ҡапмаясағын күҙ ҙә йоммай ҡыҙыулыҡ менән иғлан ҡылып өлгөрҙө. Тимерҙе шул ҡыҙыуында һуғышып, түрә ауыҙынан тирткән изгелекте тотанаҡлап, борон-борондан уҡ уның шешәләш ҡоҙаһы менән ҡайнағаһы, устарында тулы туҫтаҡ тоткандай, күҙ йомоп “һәп!” иттереп күтәреп алды – үҙгәртәп ҡороу заманында бер ауыҙҙан үҙҙәрен үҙгәртеп ҡороп, таңғы ысыҡтай саф йәшәргә ант итте. Саманан ашыу өлгөрлөктән, башына тай типкәндәй, шаңҡыбыраҡ ҡалған ир-ат йорaты, ҡулдарын йор күтәреп, яңы тыуған йәмғиәтте раҫланы, дөйөм айныҡлыҡтың рәйесе һәм урынбаҫары итеп, уның дәррәү тәҡдименә таянып, ҡоҙа менән ҡайнағаны һайланы... Йыйыйндан һуң шул уңышлы берҙәмлекте нығытмаҡҡа өсәүләшеп ҡайнағаһының мунсаһында бикләнделәр ҙә, әләүкәлә ҡалай көрөшкә тотоп, һуңғы тапҡыр һуңғы йотом, тип, бер-береһен хөрмәт итешә-итешә, таң әтәстәре ҡыскырғансы серләшеп ултырҙылар...

Бына хәҙер башы сатнап ауырта, етмәй ҡалған һуңғы йотомдо таптырта... Их, ҡайҙа китте үткәндәр, юғарынан түрә өсөн – бер талап, ялпы өсөн төп талап фарман итеп төшөрөлгән миһырбанлы заманалар! Юҡ! Тонйорап ойоған торғонлоҡ осоро тиһәләр ҙә, боронғоға етмәй ул! Етәксе ҡор – бер башҡа, халыҡ тигәнең икенсе башҡа гөрләшеп кенә көн итер, берәүҙең күҙендәге сүпте икенсең күрмәҫ ине. Шайтан ҡотҡоһо ҡытҡылдатҡан йүнһеҙ тамаҡты сылатыу мәсьәләһендә ла айырым ҡорға тупланһаң, йәғни ҙә ки күҙ күргән, теш араһынан тел сығармаған ҡоҙаң менән ҡайнағаң, юғарыраҡ түрәң менән генә аулаҡта зауыҡланһаң, көн яҡтыһында “махмур”лығыңды күҙгә төртөлдөрмәһәң – юғарылағы органдарға, контролдәргә шул еткән, ә баш тоноп сығырыңдан сығыуҙарҙы йә грипп киҙеүе, йә йөрәк өйәнәге менән ҡаплатырға була ине, шуға күрә бүре ла туҡ, һарыҡ та теүәл килде. Хәҙер иһә эсеңдәге уйыңды ла үтәнән-үтә күрәләр, таңғы ысыҡ йәки гәлсәрҙәй сафлыҡ талап итәләр...

Һәй хәйерһеҙең, иртүк тороп босмаҡ яҡта шаршау артында туҡмас йәйеп маташа икән “контрол”е – дыңғыр-даңғыр уҡлау таҡмағы интектерҙе. Күҙҙәрен көскә яртылаш ҡына асты ла ыңғырашып урындыҡ аҫтына ҡулын һуҙҙы, бисәһенең көйә эйәләтеп ятыусы иҫке быйма ҡунысына йәшереп ҡуйған, ярты иле генә ҡалған тройной одеколонын ҡармап алып, бормалы ҡапҡасын тағатып, әйләнәһен шырт-ҡыл баҫҡан, мәмерйәләй өңөрәйгән ауыҙына нәҙек быяла боғаҙынан сәптертте. Буш шешәне урынына атҡарып, яндырғыс хуш еҫле шыйыҡлыҡты теш ҡаҙналары уратаһында ғорҡолдатып йөрөтөп ләззәтләнгәс, аҙлап ҡына үҙәк буйына йүгертте – оҙағыраҡҡа һуҙылһасы был бәхетле мәл! Тамағын ғына ҡырғайны, хәйерһеҙе шаршау ситенән башын сығарып һуҡранды:

-- Ах Алланың ҡәһәре һуҡҡыры иблес, таң тишегенән өлгөргән! Көҙ етте, балаларыңды мәктәпкә оҙатыр ваҡыт, өҫ-баштары шапшаҡ, козыректары китек, сөмкәләре йыртыҡ, ә һин һаман ғорлаңды ебетәһең. Тамағыңа арҡыры торғоро, быуылып йығылғыры! Ҡотолор инем, исмаһам, апара мискәһенән!

Зарар юҡ, ағас игәүен ышҡып йәнен тындырһын. Көн-төн ҡолаҡ итен ашап елкәне кимерһә *ла*, хәләл ефетенең тел-теше тығыҙ -- өйҙә ҡуптарған буранын тышҡа сығарып елгәрмәҫ, туҡмаһа *ла*, һөйәк һындыра һуҡмаҫ. Түрәнең үҙенән ҡалһа, өйҙән сығып китеүе менән турая, дүрт тояҡлы ат һөрлөккән шыма боҙҙан да шыптын йөрөргә белә -- себей саҡтан уҡ сәйәси яҡтан дағалы!

Ағас игәү уның һайын арымай игәүендә:

-- Йөрөгән ерендә дөмөгөп кенә ҡалғыры, сәсрәп юҡҡа сыҡҡыры! Эте менән дә, бете менән дә һөйрәлеп йөрөп эсә, ә ихатала ҡаҙан аҫтына яғыр, туҡмас ҡайнатыр утын юҡ. Күҙе йомоҡ туң бүкәнде түрә итеп нисек һайлай был халыҡ?

-- Биғәләш, ҡыҙлығыңдан ҡуйынымда ҡартайып, томана баш килеш ҡалған икәнһең: минең күҙҙәр төндә һинең эргәлә генә йомоҡ, ә иртәнән кискә тиклем шар-асыҡ. Унан килеп, мине үҙемдән юғары түрәләр һайлай, ә мөңгөрҙәк һарыҡ-халыҡ тауыш ҡына бирә.

Ләкин хәләл ефетенә, һәр саҡтағыса, йөмләнең сәйәси өлөшө үтеп кермәне, тик үҙенә төртөлөшлө тәүге яртыһы биләне иғтибарын:

-- Минме ҡартайған, минме?! – Артабан ни тиергә белмәй тотлоҡто. – Абышҡа! Бетле тун! Юғарыла үҙем булһам, һине күптән, арт һаныңа шартлата тибеп, ауылский башҡармаңдан сүплеккә атыр инем! Ошо *ла* булдымы силсәүит!

-- Тссс! Контра! Совет власына тел тейҙермә! – Ишек тупһаһына еткәс туҡталды. – Артыңды уйла, сонтор аҡыл, миндә *ла* ир зиты көр! Сыҡтым-киттем-олаҡтым – дүрт яғым яҡты ҡибла. Тороп ҡара минһеҙ, муйыныңа дүрт балаңды бауландырып. Совет ҡанундарын беләм – үҙем рәйес! Ҡолағыңа ныҡ киртеп, тел осоңдо көрмәп йөр: кисәге көндән алып инде мин тамсы *ла* ҡапҡаным юҡ һәм ҡапмайым, башҡаларға *ла* кәңәш итмәйем! – Ҡаушап төшкән тәнҡитсеһенең “*ләхәүлә*”ләрен ҡолаҡ ҡырыйынан уҙғарып, боролоп килеп, өҫтәлдәге ҡоторсоҡтан теле өҫтөнә тоҙ семетеп һалды *ла*, түшендәге онтаҡтарҙы ҡаҡҡылап, тышҡа олаҡты.

Ауыл Советы башҡармаһынаса атлап үтелгән өс йөҙ аҙым юл араһында һуңғы йотом үҙ тәьсирен яһаны. Сатнаҡ баш төҙәлә төштө, сикә тамырҙары бүртеп, көллө тәненә яғымлы эҫелек йүгерҙе. “Һаумыһығыҙ, Әпүш ағай!”, “Салют, сәүит олатай!” тип тәбрикләнеләр уны ошоғаса олоно ололай белмәгән, укыу йылы яҡынлашып килгәнгә күрә генә тәртип сығырына керә биргән малай-шалай, пионерҙарса ҡулдарын юғары сөйөп. “Ах шылмалар, үҙгәрештәр заманында нисегерәк йәшәргә *ла* беләләр!” -- Әпүш уларға яғымлы яуапланы, хатта береһенең тырпай түбәһенән иркәләп тә һыйпаны. Балаларҙың өҫ-башы тип юҡҡа сығынсылай бисә -- илдекенән бер иле *ла* артыҡ та, кәм дә түгел! Илгә һыйышып йәшәгәне, осоноп ҡарпымағаны өсөн түрә ҡылып ултыртыуҙарын аңламай шул кәбәк баш.

Башҡармала ике ятбауыр ишек төбөндәге эскәмйәлә зарығып көтә имеш. Бер-береһенә арҡа бирep ултырған, ҡаштары емерелгән, әммә бер юлы ырғылып торҙолар. Ҡарауҙан уҡ уларҙың ошаҡ ҡапсыҡтары икәнен төшөндө, етәкселек

юғарылығынан вайымһыҙ күҙ йүгертеп, бик ҡоро иҫәнләште. Әммә ошо һаран иғтибар билдәһе лә, бигерәк тә түрәнән аңҡыған һәм күптәргә мәғәнәүи аңлайышлы “тройной” еҫе танау һәлендергәндәрҙе дәррәү ҡанатландырҙы: торған урындарында юрғалай бейеп, һыйыр тиҙәгендәй ләпшек кепкаларын баштарынан һыпырып бил бөктөләр. Ҡуйы ҡара һаҡаллы береһенең түбәһе болот араһынан сыҡҡан Ай кеүек ялтыраны – сәс мөлкәтен таҙ ашаған ҡырҡ биш йәштәрҙәге бәндә ине был. Ә әшнәһе ун йәшкә кесерәк булып, ауыҙ тирәһен һаҡалға ла, мыйыҡҡа ла оҡшамаған, сусҡа ҡыллы итек щеткаһын хәтерләткән шырт төк баҫҡайны.

Әпүш, йөҙөн һытып, дәрәжәле ҡиәфәттә өҫтәле артына төпләнде лә яҙыу быялаһы аҫтындағы календарҙан бөгөнгө һанды йыуан ҡыҙыл ҡәләм менән һыҙып ташлап, ҡараға мансылып ҡорос перо сиҡылдаған күрше өҫтәлгә өндәште:

-- Секретарь иптәш, был граждандар ни йомош менән йөрөй?

Яуап бирелеп тә өлгөрөлмәне, шул ике граждан, итәктәренә ут ҡапҡандай ҡабаланып, Әпүш ҡаршыһына һөрөлдө:

-- Беҙ...

-- Мин...

-- Һеҙ һәм һин икәнде әйтмәһәгеҙ ҙә беләм. Эштән башлағыҙ!

-- Ул үҙе ғәйепле, Әптерахман ҡусты!

-- Ахмаҡ! Сәүит үҙе әйтеп бирер кем ғәйепле икәнде! – тине икенсеһе.

-- Алйот! Әйтмәҫе борон ғәфү үтен! – тине беренсеһе.

-- Ах, шулаймы ни әле! – Йәшерәге ялтасбашты һелкетеп яғаһынан алғайны, тегеһе, иңкәйеберәк торҙо ла, йәберләүсеһенең ҡорһағына ямаулы кирза итегенең ҡалын үксәһе менән тибеп ебәрҙе, тибелеүсе ишек төбөнә тәкмәсләп барып ятты, буҫағаға башы “зыңҡ!” итте. Шуға күрәме инде, ни булғанын аңлап еткерә алмай, ҡулындағы керле сепрәк йыртығына текләне –ялтасбаштың керле кәзәкей яғаһы ине был. Шуны абайлағас иҫенә килеп, ситән һөҙгән бүгәй һымаҡ үкереп, яға эйәһенә кире-ҡабат ташланды, бахырҙың таҙ ҡазаһы бөлдөрөүҙән һуң тороп ҡалған һуңғы сәс төктәренә ике ҡуллап йәбеште. Шул арала секретарь иҫен йыйып, күҙен ҡан баҫҡан әзмәүерҙең йөҙөнә “шап!” иттереп бер стакан һалҡын һыуҙы түңкәрҙе лә икеһен, ике яҡҡа айырып, эскәмйәнең ике башына дөңкөлдәтеп ултыртты:

-- Ошонда йәбешеп ҡатығыҙ, юҡһа шешек танауҙарығыҙҙан серек помидор ҡағыты яһармын!

Секретарҙең киле төйгөсөләй беләктәре осонда суҡмарланып уйнаған бала башындай йоҙроҡтарынан тамам арбалып, шымды ҡыҙыубаштар. Ошонан һуң ғына секретарь түрәһенең һорауына яуапланы:

-- Әлеге лә баяғы, һөрһөп бөткән көмөшкә ҡыуыусылар. Торонбаш ауылынан.

-- Әллә тағы ут сығарып, ауылдарынан торонбаш яһағандармы?

-- Юҡ, был юлы ауыл янмаған.

-- Алайһа, әллә аҙашып килеп сыҡҡандармы?

-- Елкәләренә шайтан атланғанды шәйләп, дружинасылар тотоп килтерҙе, зәхмәт тулы шешәләре менән бергә. Тояһығыҙҙыр еҫен...

Әммә түрәнең танауы был минутта ауыҙындағы “тройной”ҙан башҡаны һиҙеүҙән мәхрүм ине. Шулай ҙа һуңғы мәғлүмәт сәмләндерҙе:

-- Күпме миҡдарҙа?

-- Ауылда күпме ҡалғанлығы билдәһеҙ, бындағыһы тулы бер сирек. -- Өҫтәле аҫтынан өс литрлы шешә һөйрәп сығарып, түрәһе алдына ҡуйҙы.

-- Ай-яй-яй!.. – Ғәйепләп баш сайҡаны рәйес. – Ниндәй оятһыҙлыҡ, дорфалыҡ! Кисә генә йыйында уполномоченный вәкилдәрегеҙ эскеселекте туҡтатырға, бөгөндән ҡаршы торорға ҡарар ҡабул ҡылып ҡул күтәрҙе, ә һеҙ унда...

-- Көмөшкә ҡыуаһығыҙ! – Түрәһенең өҙөлөп ҡалған өнөн ялғаны секретарь.

-- Ялған! Беҙ көмөшкәсе түгел, ап-айыҡ инсандарбыҙ! – Бер боғаҙҙан һөрәнләне ике гонаһ шомлоғо.

-- Ә был нимә? -- Әпүш һыҙғыс таҡта (линейка) менән сирекле шешәгә сыртлатты. – Был нимә?!

-- Был ни... Әптерахман ҡусты...

-- Молчать! -- Әпүш, һыҙғыс таҡтаһын өҫтәлгә шартлата һуғып, ырғып торҙо, пистолеттан атҡандай ошо киҫкен тауыш тертләтте теге икәүҙе. Урындағы хакимиәт башлығының шәфҡәтһеҙ күҙ ҡарашы, ҡыйғасланып маңлайға күскән ҡаштары електәргә үткәҙеп шомландырҙы. Әпүш уның һайын шикте ҡуйыртып, ауыр хәрби аҙымдар менән арылы-бireле йөрөнө; зәңгәр йылтыр йөн салбарының галифеләре, тәҙрә тәңгәленән үткән һайын, киршәү ҡояш нурҙарынан ҡабынып, ҡылыстай ялҡ-йолҡ килә, һәр һүҙен теш араһынан пүлә һымаҡ атып осора ине. – Вәхшиҙәр! Вандалдар! Өҫ-башығыҙға, ҡиәфәтегеҙгә ҡарағыҙ: хәләл ефеттәрегеҙ, бала-сағаларығыҙ таныймы икән һеҙҙе? Торонбаш ауылығыҙҙың төтәй-төтәй хәмер һаҙлығына тамам батып барыуын шәйләйһегеҙме? Ил һаулығын ыуландыртып елгә осороусылар! Халыҡты ағыулаусылар! Төбө-тамырығыҙ менән йолҡоп ташлармын һеҙҙе, һөрөмлө торонбаштарҙы!

-- Эйе, ағыу ҡыуалатҡыс аппараттары менән ҡуша! – Ҡеүәтләне секретарь.

Ир йораттарының, түрә атҡан хаҡ һүҙ һайын ныҡ шиңеп, халаслатып ҡамыт кейҙертелгән үгеҙҙәрҙәй буйһоноулы баш эйеүен, танауҙарын мырш-мырш тартып, күҙйәш аралаш ихлас тыңлауын күргәс, Әпүш, тәрбиәүи вәғәзен иң юғарылыҡлы нөктәһендә төйнәп, исем-фамилияларын белеште; ә өлгөр секретаре, ҡорос перо осон уҫал сиҡылдатып, аҡ ҡағыҙға бәйнә-бәйнә теркәне: Сайҡалаев Тәржеман, Болғанаев Мотиғулла.

-- Әптерахман ҡусты, зинһар, бында мин минауный түгел. Өҫтәлендә ултырған был “көмөш яллы”ны мунсаһында Тәржеман үҙе ҡыуҙы! – тине ялтасбаш ашығып һәм, Тәржеман тигәненең ҡыпсыуырҙай ҡулдарына ҡабат тарыуҙан ҡурсаланып, буғай, тос йоҙроҡло секретарь ҡырынараҡ тайпылды.

-- Таҙ шайтан! Мине ҡапҡанға ҡаптыртып, үҙең таймаҡ булдыңмы? Өйөңдәге аппаратты ла япһармаҡсыһыңмы миңә? Мә, тот бынауымды! Кисә бөтә күршеләрең күреп торҙо: бисәң апара сығарып ауҙарғайны, шуны ашаған ике кәзәң күҙ алдында алйып ауҙы! Түрә алдында әйтеп бир: төн сыҡҡансы нисәне ҡыуаланың?

-- Ҡыуалаһам да, һинең кеүек харамлашмайым. Көмөшкәгә тәмәке оно бутайһың.

-- Ә һин, мутйән, тилебәрән орлоғо һалаһың!

-- Ә һин, шаҡшы, тауыҡ буғы ҡушаһың!

-- Ә үҙең...

Сығырынан сыҡҡан “алхимик”тар серле кәсеп алымдарын, ихтимал, аҙағынаса тиреп һалырҙар ине, Әпүш түрәнең ҡырыҫ тауышы ҡырҡты:

-- Молчать! Аныҡ итеп тураһын әйтеп ҡотолоң: көмөшкә ҡыуалайһығыҙмы? Шул хаҡмы?

-- Аҙ-маҙ ағыҙғалайбыҙ, үҙең белмәгән ни бар, ҡустым...

-- Көмөшкәгә тәмәке, тауыҡ тиҙәге ҡушыуығыҙ ысынмы?

-- Уныһы ла булғылай инде... кешеһенә ҡарап... – Йәшерәге елкәһен ҡашыны. Рәйес сирекле шешәгә һыҙғыс таҡтаһын сиртте:

-- Ә быныһына ни һалдығыҙ?

-- Бер ни ҙә һалманыҡ, ҡусты.

-- Үҙебеҙ өсөн бит ул, ағай...

-- Ярай, райондағы эксперттан тикшертеп аныҡларбыҙ. Үҙегеҙ өсөн тигәнегеҙ ҙә шыр-ағыуҙыр әле. Ә шуғаса арестовать ителә! – Рәйес сирекле шешәне тимер сейфына шартылдатып бикләне. “Арест” һүҙен ишеткән икәү ҡойолоп уҡ төштө:

-- Әптерахман ҡусты, минең кем икәнде оноттоңмо әллә? Былтыр үҙең аҡ өйөмдә, маҡтай-маҡтай, көн оҙоно һемереп ятҡайның бит. Толобоңдо онотоп ҡалдырғайның...

-- Ә мин һине шул төндә, ағаҡайым, ҡулың дилбегә тотмағас, өйөгөҙгә үк үҙем илтеп ҡуйғайным...

Һыҙғыс таҡта өҫтәл йөҙләгән һындырырҙай шартлатты:

-- Маааалчать! – Быйыл ғына эшләй башлаған секретарь егет ҡаршыһында түрә абруйын һындырта яҙған ике “алхимик”ты Әпүш дәррәү тышҡа һөрҙө. – Марш! Марш! Дәүләт йортон апараға һаҫыттығыҙ, шаҡшылар! Мутлығығыҙҙы, ауылығыҙға үҙегеҙҙе алып барып, төп-тамырынан ҡуптарып хәл ҡылырмын! – Буҫағала туҡтала бирep, ҡаты әмерен бирҙе. – Яҙ, секретарь: бөгөндән үк эскеселеккә ҡаршы дәһшәтле ут асырға! Бер кемгә лә шәфҡәт юҡ, бер кемгә лә!

Ат ҡараусынан ҡырандасын ектертеп, ғәйепле икәүҙе йәнәшәһенә суҡайтып, Торонбаш ауылына юлланыр алдынан башҡармаһына һуғылды, теге икәү ҡырандаста көтөп ултырып торҙо. Төшкө тәнәфес ваҡыты – секретаре ашарға ҡайтып киткәйне. Әпүш, сейфты асып, үҙ кәүҙәһе менән ышыҡланған хәлдә шундағы сирекленән туғыҙ ҡырлы стаканды мөлдөрәткәнсе ҡойҙо ла, еҫкәп ҡарап, ҡәнәғәтләнеп, тамағына ғорҡолдатып түңкәрҙе. Ауыҙын еңе менән һөртөп, “ыристан”ды биклəп ҡалдырып сығып китте. Ыристан булыуҙан шөрләй төшкән икәү иһә түрәнең кәйефе күтәрелеүен шәйләп еңел һуланы. Ләкин быныһы иртәрәк булған икән: Әпүш түрә, көтмәгәндә, күҙҙәренең ағын әйләндереп ҡараны ла йәндән алды:

-- Саботажниктар! Әпүште һыйлап ҡына закон статъяһынан ҡотолоп ҡалырбыҙ, тиһегеҙме? Бөтә ауылығыҙ менән ҡаптыртырмын мин һеҙҙе!

Бахырйәндәр, хәлдәре мөшкөлләнеп, юл буйынса һыу уртлағандай барҙы. Йомшаҡ һиртмәле “сәүит ҡырандасы” улар өсөн әнәле яза ултырғысына әүерелде. Уның ҡарауы Әпүш күңеле иллә кинәнә ине: партиябыҙ, совет хөкүмәте йолҡоп ташларға бойорған золом тамыры маҡтыла закон кулында! Бына хәҙер, бөтә районға яманатлы Торонбаш ауылына барып, ошоғаса баш бирмәгән “көмөш яллы” аҫауҙы ҡороҡлап йығасаҡ та ауыл Советы ҡанаты аҫтында айныҡйәндәр йәмғиәтенең өлгөр эше тураһында юғарыға рапорт юлландырасаҡ. Үҙгәрештәр башланды, рапорттар заманы үтте инде, тиһәләр ҙә, әүәлгенең рапорт сүпрәһендә ҡабарған етәкселәр бар әле юғарыла! Ә өйҙәге “прокурор” йәғни бисә бушҡа сөңкөлдәй: эсмәгән йән бармы һуң был донъяла?! Телеграф баҫанаһы ғына эсмәй ҙә (сөнки уның стакандары түңкәреүле!) тейешле урынын һәм ваҡытын белмәгән әрпеш түрә генә һемермәй ул шылманы. Ә Әпүштең уртлаһа ла ауыҙ ҡоро, сөнки башы йоморо.

Ауылға яҡынайып, Сайҡалаевтар мунсаһы өҫтөнән һүрелеп кенә күтәрелгән шыйыҡ төтөндө шәйләгәс, Тәржемандың эс-бауыры өҙөлөп төшә яҙҙы. Атаҡайы Ғиззәтулла шул мунсала мискәләге кинйә апараны еҙ торбанан ҡыуалай ине, күренеүенсә, ошоғаса һүндермәгән усаҡты... “Ах ҡарт алаша, Хоҙайҙың оҙон төнө етмәгәндер һиңә. Моғайын, һыйыр һымаҡ һемергәндер ҙә бөкләнеп йығылғандыр!” – Йәне һуйылып рәнйене балаҡайы Тәржеман. Бәлки, сәүит беҙгә төбәлмәҫ әле, бынауы таҙбаш Мотиғуллаға уҙыр тәүҙә, тигән өмөт сатҡыһы йылытты йөрәген. Тик уларҙың тәңгәленә етер-етмәҫтән үк, Мотиғулла һөрәнләп тә өлгөрҙө:

-- Әпүш ҡусты, бына тора Тәржемандарҙың ырыҫлы йорто! – Һәм сәүиттең ҡаты ҡулы, Тәржемандың бәғерен ҡанһыратып, дилбегәне туп-тура уларға төбәп тартты. Ҡапҡанан кермәҫе борон үк, ҡунаҡ ҡаршыларға, дүрткелләп ябынған яулығын ялпылдатып, Тәржемандың әсәһе Мәрфуға йүгереп сыҡты. Ҡолға буйлы арыҡ ҡарсыҡ, етмешен ҡыуалатыуға ҡарамай, сиңерткәләй ырғандаҡ һәм сәрелдәк ине. Ҡаш менән күҙ араһында Әпүш беләгенән ҡамтарҙы ла өйгә табан һөйрәне:

-- Әйҙүк, Әптерахман улым, ҡотло аяғың менән! Иншалла, былтырғынан һуң нурлы йөҙөңдө күрер көнөм бар икән! Мәрхүмә әсәң Зөлхәбирә ҡоҙаса менән заманында бик татыу, бик килешеп йәшәнек – бер оянан сыҡҡан ҡаҙ бәпкәләре кеүек. Хәҙерге йәштәр генә улар бер-береһен суҡыша, тай-тулаҡтай тибешә. Әхирәт менән һүүңғы семетем сәйебеҙҙе лә бүлешә инек, эйе.

Шул арала Тәржеман да әсәһенә йәне сығырҙай өндәште:

-- Мунса мейесен һүндерергә оноттоғоҙмо әллә, ниңә төтөнө быҫкый?

-- Ah-ah, быҫкымай ни. Бынауы Мотиғулла ҡоҙаның әрпешлеге арҡаһында инде: үҙҙәрендә эшен бөтөрмәй киткән дә, ул эште белмәгән Гөлзәғифә инәйең, таң тишегенән апараһын алып килеп, бер ыңғай эшен бөтөрөп бирергә һораны. Шуға күрә атайыңдың шөғөлө оҙаҡҡа һуҙылды...

Мәсьәләнең хәтәр йүнәлеш алыуын йәне-тәне менән тойған Мотиғулла, үҙҙәре яғына юҫыҡлап, ҡойроҡто һыртҡа һалырға иткәйне лә, Тәржеман уны шытырҙатып итәгенән көрмәне:

-- Туҡта, үрәпсемә! Еҙ мөгөҙлө айғырыңды йыйыштырып, мине генә ҡаптыртырға итәһеңме? Мәшәҡәтләнмә, сәүит үҙе йыйыштырыр!

Барыһын да ҡолаҡ баҫып тыңлап торған түрә Әпүш, ҡарсыҡтың ырғандап сәрелдәүҙәренә артыҡ иғтибар итмәй, ихата төбөндә нәҙек кенә зәңгәр төтөн сөйөрөлдөргән мунсаға юҫыҡланды. Көтөлгәнсә, ишеккә эстән типке һалынған имеш. Дөбөрҙәтеү һис һөҙөмтә бирмәгәс, хаҡ ғәмәлгә тәүәккәлләнгән хакимиәт башлығы яңаҡ егенә һөймән тығып шаҡарҙы. Дөһөр-шатор ишек ҡайырылыуға, йоҡоһонан уятылған айыу кеүек тайпаңдап, Тәржемандың атаһы – һаҡалына үрмәксе ауы аҫылынған Ғиззәт ҡарт килеп сыҡты: бер ҡулында – мөлдөрәмә көрөшкә, икенсеһендә ҡыштырҙауыҡ иҫке миндек. Ҡарттың йәшкелт шешек битең, илереп аларған күҙҙәрең, апара йәбешеп сеймәлгән һаҡалын күргәс, заманында ябай ғына һалдат килеш ысын генерал ҡаршыһында баҫып торғанда ла ҡаушамаған Әпүш тертләп сигенде – Ғиззәт ҡарт һынында мунса бәрейенең үҙе һынланмыш ине...

-- Йә, Ғиззәт ағай, мунса шәпме, ҡайын миндек менән сабынып буламы?

-- Була, кем, һәй әттәгенәһе...

-- Ҡулыңдағы көрөшкәнән эҫе ташҡа һыу һалдыңмы?

-- Һа-һалдым, кем...

-- Бир әле, төбөндәген ҡарайым – ҡайһы шишмә һыуы икән?

-- Һыу, һыу – ҡоҙоҡ һыуы! – тип сәрелдәне Мәрфуға. Ҡарты иһә көрөшкәне ауыҙына түңкәрҙе, күҙҙәре оторо аҡайып, тубыҡтары бәлкелдәп, яҫы арҡаһын мунса ишегенә ҡапланы:

-- Ҡарауыл! Емерәләр! – Ишек таҡтаһына арҡаһы менән ышырылып төшөп барған Ғиззәт ҡарт, һауалағы нимәгәлер тотонорға самалап, кешеләрҙең башы аша мәғәнәһеҙ ҡараны ла гөрһөлдәп йөҙтүбән ауҙы.

-- Әсәй! Ниңә төндә үк бөтөрмәнегеҙ эшен?! – тип ныҡыны Тәржеман.

-- Сеү, балам! – Уланының ҡолағына үрелеп шыбырҙаны. -- Беҙ бөтөргәйнек тә ул, бынауы ҡыубаш Мотиғулланың йылан аяғын ҡыйған килене ҡуларбаға апаралы икенсе мискәһен тейәп килеп еткән: “Бер ыңғайҙан бының да шешәгә үткәрегеҙ, юҡһа барҙым-тирҙем ауыл Сәүитенә, унда ҡолаҡ һалмаһалар, елдем-киттем район башҡармаһына!” – тип йәнен алды атайыңдың... – Мәғәфүрә ҡарсыҡ, бесәйҙәй етеҙ ташланып, Әпүш яғаһын бөрҙө. – Һәпрә малайы! Атаң да һөмһөҙ ине, үҙең дә һөмһөҙ йылан! Сәүит башың менән ни тип бикле ишеккә дөрәһең?! Әле генә мунсабыҙҙы булдырып, бабайҙы тәүге быуына ебәргәйнем. Сисенеп тә өлгөрмәгән, бахырым, баҫып килеп ҡотон алдың. Был ниндәй Сәүит власы? Былай булһа, үҙ өйөңдә көн күрһәтмәйҙәр икән. Бабаюлла, тор әле, башыңа еҫ ҡаптымы әллә? Тәржеман, ниңә һерәйеп ҡаттың, мунсаның ишеген йоҙаҡлап ал!

Ғиззәт ҡарт, әбейенең сәрелдәүенән иҫәнгерәп, һуғыш ҡырында һушын юйып ятып ҡалған һалдаттай кире терелеп, баш ҡалҡытты, уҡшып-уҡшып ауыҙынан тос фонтан урғылтты ла, ҡоҫоғона арҡаһы менән ҡапланып, күккә ҡарап ас һыйырҙай мөңрәне:

Әсеме, сөсөмө,
Беҙ эсмәгән кешеме.
Кисен иҫерек, иртән айныҡ –
Даешь, колхоз, эшеңде! --

Зәңгәр күктең иркәләүен тоя алмай томанланған күҙҙәре быялаланып, башын ҡалҡытырға итеп ҡараны, кемгәлер ни әйтергәлер яңаҡтарын көсәнеп ҡимылдатты, тештәрен шығырҙатты...

Бушлай кәмит ҡарарға тип ситән буйына ир-ат, ҡатын-ҡыҙ, бала-саға һырығайны, Әпүш иһә һәр төрлө йыйылыштарҙан биҙеп бөткән массаларҙың саҡырылмайынса ла йыйылыуын көн ҡаҙағына һуғышлы сәйәсәт өсөн файҙаланырға булды. Утынлыҡтағы тупар балта сабылған түңгәк өҫтөнә баҫып, эскеселектең донъя күләмендәге тотҡан яуыз урыны тураһында үлтергес телмәр һөйләне. Түмәренән егеттәрсә ырғып төшөп:

-- Бына күрәһегеҙме, нимәгә килтерә ул? – Үлек кеүек ҡымшанмай ятҡан Ғиззәтте хром итегенең осо менән төртөп күрһәтте. – Һөйөклө партиябыҙҙың һәм совет хөкүмәтенең антиалкгольный сәйәсәте юҡҡа түгел! “Йәшел йылан”ды эсәгеңә буйлатһаң, әмәлһеҙҙән хулиган да, уғыры ла, үлтереүсе лә булырһың, бынауының кеүек танауы менән ер һөрөп ятҡан суҫҡаға ла әүерелерһең!

Шул арала Мотиғулланың “йылан аяғын ҡыйған” килене, болғансыҡ шыйыҡса тулы дәү шешәне бәпеселәй ҡосаҡлап, “йылп!” итеп үтеп китте, Әпүш алаң-йолаң ҡаранған арала эҙен дә һүрелдерҙе. Серек ситән буйы “гөж!” итеп ҡалды.

-- Молчать! Еҙ торбанан йәшел йылан һурыусыларға хөкүмәттең хөкөмө ҡыҫҡа булыр! -- Әпүш, улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла, тигәндәй, елеккә үткәреп, ситән буйына уҫал бармаҡ янаны. – Тимер йәмкәгә ҡыҫтырып сығарып ырғытылған торонбаштай ыҫмаҡланып һүнерһегеҙ Магадандың ҡарында! – Шаңҡып ҡалған йәмәғәт иҫенә килеп, һәр береһе үҙ аппараты менән апараһын йәшерергә тырым-тыраҡай таралғас, ҡәнәғәт тамаҡ ҡырып, Тәржеман менән Мотиғулланы үҙ конвойлығында алдан тертәңдәтеп, хәрби тәүәкәллек менән хәтәр буҫағаны аша атланы. – Күрһәтегеҙ һөнәрегеҙҙе, ике аяҡлы мөртәттәр! Өҫтөгөҙҙән мотлаҡ төҙөләсәк акт-факт-протоколдар!

Мунсаның сисенеү бүлмәһе бәләкәй генә “төшөрмөшлө төйәк”те хәтерләтте: ҡырсып йыуылған яҫы таҡталы һикелә иҫке гәзит ҡыртышында эре бөртөклө тоҙ, башлы һуған, ҡорот, ҡаты-ҡото икмәк һыныҡтары көтөп ята, сәйгүн менән сынаяҡтар ултыра. Төпкө ишекте тартып асыуға унда керосинка ялҡыны өҫтөндә боҡор-быҡыр тулаған “шайтан ҡоралы”ның таныш ауазы ишетелде, танауға шайтандың һаҫы кикереүе бәрелде. Әпүшкә был бая ғына кәнсәләрҙә сейфтан алып ҡаса-боҫа ҡапҡан йотомон хәтерләтте. Кесе теленән үтһә лә, төпкөлгә төшөп етмәй, үҙәк буйын үсектереп кенә ҡуйғайны – бына инде ҡабат үлтереп баш сатнай, тамаҡ төбөн ҡытҡылдатып шайтан ҡотҡоһо тырнай. Күҙ менән ҡаш араһында яңынан бер йотом ғына сәлдереп ебәргәндә лә, төҙәлә төшөр ине...

Тәржеман менән Мотиғулла шул арала ашғәзитле эләүкәгә төпләнеп алғандар ҙа эҫе ташҡа һыу һипмәле сите емерек тимер сүместән туғандарса алмашлап һыуһын ҡандыра. Ауыл Советы башҡармаһында ғәйәр төкөшһәләр ҙә, аяҡ бөкләшеп ултырып алғастары ни, баштары һис ауыртмай – ирәүән генә ғолҡолдатып йоталар, өҫтәүенә, күҙ ҡыҫышып көләләр.

-- Һәй тәмле лә һуң үҙебеҙҙең ҡоҙоктоң һыуы! – ти Тәржеман, ике күҙен майланған төймәләй ялтыратып. Ә шулай ҙа Мотиғулла игелекле йән икән – сарсап тамағы кипкән түрәне ҡайғырта:

-- Әпүш ҡусты, Мәғәфүрә инәйеңдең соландағы һары айғыры кешнәгәнсе, ҡоҙоҡ һыуы менән генә булһа ла сылатып ал тамағыңды, һыйлағандан һыу эс, тигәндәр бит... – Суйын таба ҡапланған тутыҡ күнәктән һоҫоп алып, сүмесен түрәгә һондо. – Акты-макты-пртакулыңды шайтандың арт сатына ҡыҫтырып тор, өлгөрөрһөң!

-- Ысынлап та һыумы был?

-- Ah-ah, һыу булмай ни...

-- Һыу булһа ғына эсәм! – Ысынлап та, ниңә әле ҡоҙоҡ һыуын йотмаҫҡа? Һыу бит ул, хатта батшалар ҙа баш тартмаған һыу бит ул! Әпүш йәмерек сүместе еҫкәп ҡарамай, еҫкәһә лә, танауы инде һиҙмәй – мунса ҡуйы быулы еҙ менән тулы. Башын артҡа салҡайтып, ауыҙын арандай асып, күнегелгән киҙәнеш менән тамағына атҡара ла сүмес төбө күренгәнсе йота ла йота ҡылҡылдатып. Сүмесе ҡулынан төшөп китеүен дә һиҙмәй, ике күҙен шарландырып, һөрөм баҫҡан ишек яңағына һөйәлә, эләүкәне бәүелдертеп кеткелдәүселәрҙең Ҡояш һымаҡ түп-түңәрәк йөҙҙәренә төбәлә, тамағын томалаған әсе быуҙы көсәнеп тышҡа өрә. – Oh-ho! Һыу икән ысынлап та. Бирегеҙ ҡоротоғоҙҙо!

-- Бошонма, Әпүш ағаҡай, сыуаштарға һатырға тип тәғәйенләнгәне түгел, үҙебеҙгә тигәне! – Ҡаты ҡорот киҫәге һуҙған Тәржемандың ҡулын томан аша саҡ абайлай ағаҡайы.

-- Йәғни тилерткес зәхмәт һалып буталмаған, яңы тыуған сабыйҙың күҙ йәшеләй йылтыр, хе-хе-хе... – Мотиғулла бынығы. Үҙенең түрәлеген, юғарынан йөкмәтелгән сәйәси бурысын иҫенә төшөргән Әпүш, һөрөмлө ишек яңағынан егеттәрсә айырылып, төпкө бүлмәгә -- закон тарафынан ыристанлыҡҡа алынырға тейешле шайтан ҡотҡоһо тарафына ынтылды, ләкин унан инде елдәр иҫкәйне, өҫтөндәге йөгөнән бушанған керосинка ғына зәңгәр ялҡынланып яна ине.

-- Ҡайҙа булды аппарат? Тарамышығыҙҙы киҫермен! – тип ажғырҙы күҙ менән ҡаш араһында һемәйеп ҡалған түрә, керосинка эргәһендә үк торпоша аҫтына йәшерелгән ҡоролманы абайлай алмайынса.

-- Бәй-бәй-бәй, ни һүҙең был? Юҡты һөйләмә, ағаҡай, ундай затты ғүмерҙә лә күргәнебеҙ ҙә, белгәнебеҙ ҙә юҡ, эйе! – Тәржеман уға, тоҙ һибеп, һуған киҫәге ҡаптыра, Мотиғуллаһы тулы сүмес һоноп тора:

-- Һәпес-һәпес-һәпестә, бигерәк матур бәпес тә -- бер үпәс ит, ҡустыҡай!

Ауыҙына килтереп терәгәс ни, ни ҡылһын -- йотто ла ебәрҙе Әпүш...

-- Бррр! Төбө-тамырығыҙ менән ҡоротормон! Һуңғы тамсыһынаса юҡ итермен!

-- Әпүш ҡусты, мин дә уның дошманы! Һуңғы тамсыһынаса юҡ итәм уны! – Мотиғулла, тап баяғы Әпүштәй, башын салҡайтты ла ҡара һаҡалы араһында аҡ тештәре арбайған аранға сүмес мөлкәтен ағылдыра башланы.

-- Ағай, етер һиңә! – Тәржеман сүместе тартып алырға иткәйне, тегеһе уны асыуланып бер ситкә быраҡтырҙы. Сүмес ҡапланып төшкән керосинканы ҡапыл күбәләй ут алып, яныңдағы турпышаға дөрләп ҡабынды, керосинкамы,

аппаратмы, тирә-яҡҡа ялҡын сәсеп шартланы, шул мөҙҙәттә сыжлап һыҙғырған ҡорос ярсығы Әпүштең уң ҡолағын яндырып уҙҙы.

-- Әс-сәәәй! – тип илереп ҡысҡырҙы ла түрә, өсөһө тиң баш баҫып тышҡа ташланды, арттарында мунса өҫтөнәсә дәһшәтле ялҡын бағанаһы ләүкене. Әпүш, яндырып һыҙлаған уң ҡолағын һәрмәп ҡарағас, уның юҡҡа сыҡҡанлығын, өҙөгөнән эҫе ҡан тибеүен шәйләп, үләнгә йығылды ла сабыйҙарса сарбайлап иланы...

...Ҡояш байырға яҡын, бер ҡолағын сепрәк менән ҡыҫып бәйләгән Әпүш түрә ҡырандасында ҡырын ятып ҡайтып бара. Башы аҫтында – септә, септә аҫтында бесәндә сирек шешә тулы тәүмал[3] бөлкөлдәй. Дилбегәне көскә көрмәгән түрә, башын ҡалҡыта биреп, таныш түгел әрәмәлектә быҙау юллап әлһерәгән малай-шалайға инәлә:

-- Әй, ауыл ҡайҙа?

-- Ауыл – ауыҙ артында, Ер менән Күк араһында! – Ҡороғорҙары, тейешенсә яуаплау урынына, “Һыңарғолаҡ Әпүш! Һыңарғолаҡ Әпүш!” тип үсекләп, сыулашып көлөшәләр. Таңғайы кибеп ҡатҡан Әпүш, телен ҡуҙғалта алмай, йән көсөнә һүгенеп, тонйорап батып барған Ҡояшҡа бармаҡ янай, малай аҡтыҡтары ҡайҙалыр һеңә. Артта, әрәмәлек ашаһында, Күк көмбәҙен ҡара төтөн ыҫмаҡлай – Торонбаш ауылы яна.

Өйөрөлөп ябырылған серәкәйҙәрҙе ялбыр-йолбор ҡойроғо менән туҙҙырып, ат һалмаҡ ҡына юрта; ергә һеңеп һүрелеп барған Ҡояштан, тыҡырҙауыҡ тәгәрмәс көпсәктәренән Әпүш күңеленә һағышлы моң һарҡыла: “Тиҙҙән һайлауҙар етә, ә йәмәғәт тигәндәре етәкселек һәләттәремә вайымһыҙ. Юғарыла ла күҙгә элмәй башланылар...” Эскеселеккә ҡаршы дөйөм кампания ҡыҙыулығын әүҙем файҙаланып, Торонбаш ауылы көмөшкәселәренең тамырын ҡырҡып рапорт биреү хыялы ла күҙ асып йомғансы юҡҡа сыҡты – Тәржеман мунсаһы менән ҡуша көл булып Күккә осто. Их, ниңә яңғыҙы тотондо – шаһитлыҡҡа бер-ике йылғыр депутат, пүнәтәй алып барманы?! Әлеге лә баяғы шул һуңғы йотом зәхмәте... Их, был үҙгәртеүҙәр заманаһы тигәндәрен нисек итеп үҙгәртмәйенсәрәк оҙаҡҡараҡ һуҙырға, түрәлеген юймай ғына иҫән-имен пенсияға сығырға?..

Әпүш һау ҡолағы төбөндәге моңло-моңһоу бөлкөлдәүгә һиҫкәнеп, сиреклене тырнап ала ла юл ҡырында тумырайған ташҡа тоҫкап юғарыраҡ күтәрә. Һуңғы сиктә ҡырт ҡына кире уйлап, бөкөнө тешләп һура, күҙ йомоп уртлап ҡаба – их, татлы шул һуңғы йотом!.. Ҡалғанын ташҡа селпәрәмә ҡылырға, иртәгә үк милиция саҡыртып, шайтан төбәген айҡарға! Әммә хәйерһеҙ ат шуны белмәне, ҡырандас та таш тәңгәлен елтерәп уҙып өлгөрҙө һәм тәүәккәллек тә шиңде – хәлһеҙләнеп ҡыйыулығы кире ҡайтҡан түрә ҡулындағы шешә ҡабат тығыҙ бөкөһөн ҡабып, септә аҫтына сумды. Тоткан урында һыңдырырға ярамай – йоморо баш ни өсөн бирелгән беҙгә?! Эйе, тынсыу замана тип нарыҡланған миһырбанлы ул йылдарҙа ауыл Советы күләмендә йәмәғәттә ысынлап та билсән ҡотороп үҫте, энәләрен тырпайтты. Хәҙер шуны Әпүш ҡулы услап йолҡорға тейеш. Ә юғарылағы түрә-ҡара ни ҡарай?!. Юк инде, Әпүш тә шыр наҙан түгел –

[3] Тәүмал – көмөшкәнең зәңгәр ут булып яна торған □еүәтлеһе (первач).

ул да белә мәсьәләне ниндәй һапҡа һапларға, үҙ ускайын һаҡларға! Әйтәйек, донъяла бар “милли йола”, “милли сикләнгәнлек” тигән бик йәтеш ышыҡшалар. Йәғни мәҫәлән, шайтан ҡотҡоһоноң ҡотороуы өсөн асы балдан “көмөш яллы”ға илтеүсе милли йола ғәйепле, тигән төшөнсәне ыҫпай һаплаһаҡ, юғарыға шыма итеп үткәрһәк, урындағы барлыҡ гонаһ шомлоҡтарын милли сикләнгәнлек менән ҡаплатаһы ғына ҡала, ә ул бәдбәхеткә ҡаршы көрәш шундай ҡатмарлы – ҡалҡып сыға ҡотҡарғыс “ваҡыт факторы”... Ошо ҡалҡыуыс-ҡотҡарғыс уны, бәлки, нәүбәттәге һайлауҙың да сират күперенән имен үткәрер?!.

Ҡабырғалары талып, Әпүш икенсе яғына әйләнеп ятырға итеп ҡарай, әммә өҫөк ҡолағының үлтереп һыҙлауы иҙә йәнде. Кеҫәһендә ҡайтып килгән гәзит йомарлағын сығарып, һаҡлыҡ менән генә аса: унда, осраҡлы килеп кергән һуған телеме менән бергә уҡмашып, суйын ярсығы өҙгән ярты ҡолағы ята. “Ғәзизем! Кем өсөн алышып өҙҙөрттөм ҡолағымды? Партиям һәм Совет власым өсөн! Ә томана халыҡ шуны аңламай... “Һыңарғолаҡ Әпүш” тип инде тел сарлай!..” – Һығылып-һығылып һыҡтай ул, киреһе тотҡан малай сағындағылай ҡырандасында үрһәләнеп-тибенеп. Хәйер, йыйылыштарҙа түрәләрҙең ҡушыуынса ҡул күтәреп, тауыш бирep кенә күнеккән томана халыҡ-һарыҡ әүәлдән үк уның егетлеген белештермәне. Заманында райбашҡармала эшләгән Ғапсаттаров ағай ғына уның һәләттәрен дөрөҫ баһалап, ауыл Советына рәйес итеп үткәрткәйне. Хәҙер килеп ул бахырың үҙе һәнәк-көрәк тотоп колхозда йөрөй, тиҙәр...

Башы аҫтындағы сирекле шешә бөлкөлдәүе ыңғайына күҙе алдынан бала сағы йүгерә. Ана шул осорҙа ла, малайҙарға ни ҡәҙәре игелек игеп ҡараһа ла, уны һис яратмайҙар, “Һыйыр ҡолаҡ, һимеҙ кулак!” тип йәберләй торғайнылар. Хатта Әптерахман тигән ауыҙ тултырып әйтерлек исемен дә сонторайтып, Әпүшкә ҡалдырҙылар. Ҙурая төшөп комсомолға кергәс кенә “һимеҙ кулак”ты оноттолар, әммә “һыйыр ҡолаҡ”ы менән Әпүшен ҡуймаҫтылар – ошоғаса күләгәләй ҡалмаҫтан йөрөнөләр эйәреп. “Кәнсәләрҙәге урынымдан ҡубынып тәкмәс атһам, тағы ҡандай ләҡәп тағырҙар инде?..” тип йөрәге өҙөлә ине. Инде килеп бөгөнгө көн, тәхетенән тәкмәсләүен дә көтмәй, “Һыңарғолаҡ Әпүш” тип өлгөрҙөләр... Ирекәй был минуттарҙа үҙ-үҙенә бик ҡыҙғаныс тойола, яҙмышынан яңы бәләләр көтөп, бәғеркәйе һуйыла. Ҡолаҡ өҙөгө ятҡан гәзит ярпыһына, ямғыр яуғандағылай мул тыпырҙап, эре күҙ йәштәре түгелә -- ир илай.

Септә аҫтындағы сирекле шешәлә, шыңшыуына моңло йырҙай ҡушылып, зәхмәтле тәүмал бөлкөлдәй...

Сәнкем-Биктимер, 07.09.1959.

Ослауыс: хикәйәсегә баш ҡаланан яуап хат

15.12.59.
Уфа.

Йыһат Мырҙа!

Күп сәләм.

Риф[4] *эшкә урынлашты, арыу ғына көн күреп ята. Хәйер, был хаҡта ул үҙе лә яҙғандыр әле.*

Хикәйәңде уҡып сыҡтым. Телең һоҡланғыс матур. Тел – яҙыусының иң төп ҡоралы ул. Ә бындай яҡшы ҡоралға эйә булған кеше яҡшы ла эшләй ала. Әммә уны дөрөҫ ҡуллана белергә кәрәк. Хикәйәңдә һин быға ирешә алмағанһың. Ауыл Советы председателе ни өсөн ул тиклем түбәнлеккә төшкән? Маһайғанмы, әллә үҙе шулай дорфамы? Ә бит һуңғыһы булһа, халыҡ ундай типтарҙы етәксе органға һайламай ҙабаһа... Уны шулай батҡаҡҡа һөйрәгән сәбәптәр асылмағас, хикәйәң бер яҡлы – тик ҡара яҡты ғына асыу, көлөү кеүек кенә булып сыҡҡан. Яҙыусы, совет яҙыусыһы, ундай маҡсат менән эш итмәй.

Уйла ошоларҙы. Әгәр төҙәтә алһаң, ҡабат эшләп ҡара. Булмай икән, яңыны яҙ. Темаға, материалға һин мохтаж булмаҫҡа тейешһең: ҡайнап торған тормоштоң үҙ эсендә йәшәйһең бит!

Мин иҫән-һау. Әкеренләп эшләп ятыу. "Аҡселан ташҡанда" тигән романым -- былтыр, ә быйыл бер томлыҡ һайланма әҫәрҙәрем сыҡты. Күптән түгел "Ҡоҙаса" исемле музыкаль комедиямды ҡуйҙылар (Заһир Исмәғилев музыкаһы). Хәҙер яңы опера либреттоһы яҙып ятам. Алда эштәр күп, сәләмәтлек кенә етһен...

Ҡулыңды ныҡ ҡыҫып ***Б. Бикбай.***

Сәләмгә ҡаршы сәләм

Хөрмәтле Баязит ағай!

Сәләмегеҙҙе алдым, ҡиммәтле ваҡытығыҙҙы бүлеп хикәйәмде уҡыуығыҙ, хат яҙыуығыҙ өсөн ҙур рәхмәт.

Шулай ҙа минең дә яуап итеп әйтәһе һүҙ әсте тырнап тора бит әле...

Эйе, бөтәбеҙ ҙә совет кешеләребеҙ, совет ҡояшы аҫтында йәшәйбеҙ. Тимәк, өҫтән ҡояш яҡтыртҡас, иң шәп совет кешеһенең дә күләгәһе күренә -- шуны юҡка һанауы яҙыҡ булыр. Әгәр беҙҙән күләгә төшмәй тип барһаҡ, тимәк, ҡояш та яҡтыртмаймы? Әллә үҙебеҙ юҡмы?..

Һеҙгә сәләмәтлек, ижади уңыштар теләп, ***Йыһат мырҙағыҙ.***

ӘЖӘРҒӘП МАЖАРАЛАРЫ

Ветеринар

[4] Риф Ярышев, Йыһат Солтановтың я□ташы, башлап я□ышыусы.

Бригадир менән хисапсы колхоз идараһы бүлмәһендә көн үҙәгендәге мәсьәләне алға һөрөп һөйләшә. Сит кеше юҡ, иркенләп фекер алышалар. Хисапсы һүҙ ыңғайында һары ҡатырға тышлы папкаһын асып, юғарынан төшөрөлгән ҡағыҙҙарҙы уҡып ишеттерә. Бына уның ҡулы аҫтында мөһәбәт ат башы һүрәтләнгән мөһим документ.

-- Тағы ветучасткананмы? – тип баш сайҡаны бригадир.

-- Шунан. "Ҡасан бригадағыҙға ветеринар табып ҡуйырға итәһегеҙ? Әгәр ҙә мәгәр эпидемия сыға-нитә ҡалһа, башығыҙ менән яуап бирәсәкһегеҙ!" – тип яҙалар.

Бригадир, ҡыһылдап, йүткерек аша кәйефһеҙ көлдө:

-- Был скотийный врач тынғы бирмәй ғуй беҙгә. Алты ай инде, ветсанитарығыҙ юҡ тип, ҡолағымдың итен ашай. Юҡҡа ғына теге юлы ветеринарыбыҙҙың эш хаҡын ҡырҡып ташланыҡ. Ул эшләр ине әле...

-- Шунһыҙ булмай. – Ҡоро һөйләште хисапсы. – Беҙҙә бит экономиканы нығытыу, сығындарҙы экономиялау өсөн ҡыҙыу көрәш бара. Ҡайһы бер еңел эшлеләрҙең эш хаҡын ҡыҫҡартабыҙ.

-- Шулай ҙа, сәсрәп китеп булһа ла, ветеринар табырға кәрәк.

Хисапсы, маңлайының тәрән фекерҙәр бураҙнаһын һыпырып, күҙҙәрендә кинәт ҡабынған аҡыл осҡонон еткерҙе:

-- Әжәрғәпте ҡуйһаҡ ни була? Үҙе – төнгө ҡарауыл, үҙе ветеринар буласаҡ. Дүрт клас белеме бармы – бар, мал духтырына шул еткән! Штатыбыҙ ҙа артмаҫ, яңы эш хаҡы ла кәрәкмәҫ – ике эшкә бер ҡул, тигәндәй. Барыбер ҡарауыл өйөндә төнө буйы йоҡо һимертеп ята.

-- Дәәә, идея был! Алтын аҡыл! – Бригадир, еңел һулап, ҡарауыл өйөнә китте.

...Әжәрғәп ҡарауыл өйөнөң ветпункт тип аталған күрше бүлмәһендә элекке ветеринарҙан ҡалған ваҡ-төйәк тутыҡ инструмент, һаҫыҡ дарыу-маҙарҙарҙы ҡабул ҡылып алды. Пунктҡа инеп, йышылмаған тупаҫ таҡтанан әтмәләнгән өҫтәл артына ултырҙы. Үҙен колхоз идараһының иң төп өҫтәле артындағы рәйес һымаҡ хис итте. Ниндәй генә тиһәң дә, вазифалы өҫтәл бит!

Күп тә үтмәй, кемдер атаһын үлтергәндәй енләнеп, бригадир килеп керҙе.

-- Ветеринар! Һин ни эшләп малдарҙы дауаламайһың? Өҫтәл артында ҡайҡайыр өсөн ҡуйғанмы ни беҙ һине?

-- Әжәрғәп, сөршәйеп, өҫтәле аҫтынараҡ сүкте, ғәйепле рәүештә күҙҙәрен йәшереп һөйләнде:

-- Дауалай белмәйем бит мин, ағай...

-- Белмәһәң – белерһең. Беребеҙ ҙә белеп тыумаған. Хаталар өҫтөндә өйрәнәбеҙ!

Был һүҙҙәр Әжәрғәпкә тыныслыҡ ҡанаттары үҫтерҙе. Ветеринарға тейешле аҡһаҡ Күк алашаны егеп, тау артындағы һарыҡ ятағына барҙы. Унда, башын уң яҡ ҡабырғаларына терәлгәнсе кәкерәйтеп, бер урында түңәрәк һыҙып әйләнеп йөрөгән сәйер һарыҡтар салынды "духтыр" күҙенә. Һарыҡ көтөүсеһе шуларҙың бейеүен күҙәтеп тора.

-- Былар ниңә ергә циркуль һыҙалар? – тип һораны Әжәрғәп, ҡасандыр мәктәптә циркуль тигән нәмәкәй менән аҡ ҡағыҙға түңәрәк һыҙырға өйрәнеүен хәтерләп.

-- Әйләнсек һарыҡтар! – Көтөүсе түңәрәк уртаһына төкөрҙө. – Дауалап булмай торған сир.

Әжәрғәп, ирәйеп, ҡарашы менән тегене баштан-аяҡ үлсәне:

-- Пессимист һин! Беҙ дауалай алмаған ауырыу юҡ ул, ҡустым донъяла! – Дәрәжәле кирелеп, арбаһынан төштө, биш-алты киҫәк бау табып бирергә ҡушты. Көтөүсе, тиреҫлектә аунап ятҡан тупар балтаһын тотоп, шишмә буйындағы ағас араһына йылдам ғына инеп китте *лә* бер бәйләм ҡарама ҡайырыһы күтәреп сыҡты. Әжәрғәп, устарына төкөрөп алып, әйләнсек һарыҡтарҙың бөтәһенең дә уң яҡҡа кәкерәйгән башын киреһенсә -- һул яҡ ҡабырғаларына шаҡарып бәйләне.

-- Бынан һуң улар һул яҡҡа әйләнә башлаясаҡ. Шулай кирегә әйләнеү һөҙөмтәһендә баштары әйләнеүен бөтөргәс, үҙҙәренән-үҙҙәре тура йөрөй башларҙар! – тине.

-- Вай-вай, күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән яңы ысул! – тип аптырап ҡалды көтөүсе. *Л*әкин яңы дауалау ысулының авторы аҡһаҡ алашаһын ҡуҙғалтырға *л*а өлгөрмәне, хафаланып ҡысҡырҙы. – Ағаҡайым, әйләнсектәр йығыла!

Баҡтиһәң, -- аңһыҙ һарыҡ, тигәндәре шул инде! – дауа асылын аңламаған сырхаумандар, баштары һул яҡҡа шаҡарып бәйләнгән килеш, әүәлгесә уң яҡҡа әйләнергә маташып аяҡтан ауалар ҙа, тора алмай, ерҙә тумарлашалар.

-- Ни эшләйбеҙ инде, ағай?

-- Зарар юҡ, зарар юҡ! – тип тыныслandырҙы Әжәрғәп. – Кирелектәренә барып, бер-ике көн шулай ыҙаланһалар, аҡылға ултырырҙар – үҙҙәренән-үҙҙәре тура йөрөй башларҙар!

Әжәрғәптең ҡайтыуына пунктта, йөҙөн әсе ҡауын ҡапҡандай һытып, бригадир көтөп ултыра ине.

-- Ҡайҙа батып ҡалдың? Ирәүәнләнеп сәхрәләрҙә гиҙеү өсөн ҡуйғанмы ни беҙ һине? – тип яғанан ала яҙҙы. Әжәрғәптең яуабын да көтмәй, ҡабаланып бойорҙо. – *Л*енин бабайың әйтмешләй, мәсьәләнең алтын ҡулсаһына тотон! Береһе көнгә райондан комиссия килә. Ике кеше бирәм. Шуға тиклем мал ҡәбере ҡаҙҙыртып, ауыҙын ҡапҡаслап ҡуй. Юғиһә, үләкһә ташлар соҡор юҡ.

...Ер тигәнең сыҡырҙап ятҡан ташлы булып сыҡты, көрәк уға бер иле *л*ә батмай ине. Тимер һөймән менән соҡоп маташтылар, *л*әкин ул да барманы. Өҫкө сиҙәм ҡатламынан һуң бер көрәклек алырға *л*а өлгөрмәнеләр, күлдәктәре арҡаларына йәбеште. Үләкһә соҡорон әйтелгән көнгә өлгөртөү тураһында һүҙ ҙә булырға мөмкин түгел ине.

-- Иҫке мал зиратын ғына ипкә килтерһәк булмаймы?

-- Ул лыҡама тулған шул, -- тине Әжәрғәп.

-- Һөйәктәрен алып ташлап бүҫкәртәйек.

Яңы фекер Әжәрғәпкә оҡшаны. Ағайҙар ағас ырғаҡ яһанылар, мал һөлдәләрен эләктереп өҫкә һөйрәнеләр. Кискә тиклем эш ҡыҙҙы – ям шаҡтай бүҫкәреп ҡалды...

*Л*әкин көтөлгән комиссия килмәне.

Көндәрҙән бер көндә, кинәт кенә, колхоз һәм ауыл һыйырҙары араһында ауыҙ иҙелмәһе тигән ҡурҡыныслы сир таралды. Бригадир менән хисапсы, ҡоттары осоп, ветпунктҡа ябырылдылар. Ветеринар Әжәрғәп, стенаға эленгән дәү плакатҡа ҡарап, ауыҙ иҙелмәһенә ҡаршы нисек итеп көрәшергә өйрәнеп ултыра ине.

-- Ветучаскаға шылтыратҡайным, врач Ырымбурға командировкаға киткән, -- тине бригадир, бөрсөкләнгән маңлай тирҙәрен һөртөп. – Ҡасанмы ул килгәнсе, ауырыуға ҡаршы көрәште үҙең башлап ебәр, ҡустым.

-- Малдарға сыворотка ҡаҙарға кәрәк, -- тип төшөндөрҙө хисапсы. – Шәхсәнә үҙебеҙҙең малҡайҙарға ла! – тип өҫтәне. Әжәрғәп, әүәлге ветеринарҙан ҡалған дарыуҙар тулы шкафын асып, шешә алды. Төбөндә иле ҡалынлыҡ ҡына ҡуйы һорғолт шыйыҡса сайпылды.

-- Беҙҙең бөтә байлыҡ – ошо! – тине, шешәне юғары күтәреп. – Тик был сыворотка ни бары ике дозалыҡ ҡына.

-- То есть?

-- То есть, ике генә баш малға етә, тигән һүҙ.

Бригадир менән хисапсы, һағайышып, бер-береһенә ҡаранылар ҙа, көтмәгәндә кинәт кенә ҡуҙғалып, ҡабалан китеп барҙылар.

-- Беҙ килгәнсе сабыр итеп көтөп тор! – Булды бригадирҙың һуңғы бойороғо. Ун биш минут үтеүгә, икеһе ике яҡтан, шыпыртын ғына, ветпункт ихатаһында пәйҙә булдылар. Хисапсы – һыйырын, бригадир иһә һыйыры менән бер йәшлек үгеҙен етәкләгәйне.

-- Баяғы ике доза сывороткаңды минең бынауы аҡылһыҙҙарға ҡаҙап ҡына ебәр әле, Әжәрғәбитдин ҡустым! – тип үтенде бригадир. Хисапсы ярһып ҡаршы төштө:

-- Ояла белергә кәрәк, әшнә! Бөтәһен үҙ малдарыңа ҡаҙатып, мине яңғыҙ һыйырымдан яҙҙыртмаҡ булаһыңмы?!

Үҙ-ара әрләш-тартыш...

Әжәрғәп, тыныс ҡына эш ҡылып, шыйыҡлыҡты шприцкә тултырҙы, бәхәсләшкән түрәләре яғына әйләнде:

-- Йә икегеҙҙекенә лә тигеҙ бүлеп ҡаҙайым, йә ошо урында уҡ сыворотканы түгәм!

Тегеләр шунда уҡ тынды, йәһәт уртаҡ тел табып, ашығыс рәүештә, һыйырҙарының муйынына әжәл дарыуын ҡаҙаттылар. Бер минут та үтмәгәндер, укол ҡабул иткән ике һәүкәш гөрһөлдәп аяҡтан ауҙы, боттарын дүрт яҡҡа тәртәләй һуҙып ебәреп, биҙгәк тотҡандай дер-дер ҡалтырап йән бирҙе. Өс ир өс яҡта һерәйеп, үлгән һыйырҙарға текләгән килеш ҡаттылар. Улар һуштарын йыйғансы, ветпункт алдына гөрөлдәп машина килеп туҡтаны. Ишеген сыйылдата асып, милиционер сыҡты, артында район ветврачының башы күренде.

-- Кем ул иҫке мал ҡәберен асып ящур эпидемияһын таратыусы?! – Уң ҡулын наган ҡумтаһына терәп, уҫал екерҙе милиционер.

-- Ветеринар ул ысын ҡоротҡос!

-- Шприц ҡаҙап һыйырҙарыбыҙҙы үлтерҙе... – Иламһырап ялбарҙы әле генә ҡазаланған ике ир. Әммә Әжәрғәп тә төшөп ҡалғандарҙан түгел шул: шешәһе менән шприцын болғап һөрәнләне:

-- Ялған! Мин сыворотка ҡаҙаным! Ышанмаһағыҙ, бына этикеткаһын уҡығыҙ!

Ветврач резин бирсәткә кейгән ҡулы менән һыйырҙарҙы төрткөсләп ҡараны, Әжәрғәп ҡулынан алып, шешәне еҫкәне.

-- Сыворотка шешәһенә икенсе бер дарыу һалынған булған, ихтиола, -- тип белдерҙе ул. Өс ирҙең өсөһө лә, аһылдап, ҡаҡ ергә ултыра төштөләр. Сетерек хәлде милиционер уғата ҡатмарлаштырҙы:

-- Үткән аҙнала һеҙҙең ауыл кешеләре скотомогильниктан һөйәктәр алып, "Утильсырье" агентына илтеп һатҡандар. Шуның арҡаһында эпидемия район буйынса таралған. Мин шул ғәйепле кешеләрҙе ҡулға алырға килдем.

Тынып ҡалған ихатаны бригадир менән хисапсының сәстәрен йолҡоп аһылдауы, Әжәрғәптең үкһеп илауы яңғыратты.

Сәнкем-Биктимер, 15.12.1962.

Мине нисек муйынлы-ҡойроҡло иттеләр

Редакциянан. *Түбәндә Әжәргәп Мөғәрәпович Тоҙлоҡаповтың милиция бүлегендә яуапҡа тарттырылыуы айҡанлы үҙ ҡулы менән яҙып биргән аңлатмаһы теркәлә.*

Яңы йыл алдынан ғына колхозыбыҙҙа штат ҡыҫҡартыу кампанияһы башланды. Йыл ағышында аппаратты ағас олоноңдағы бәшмәктәрҙәй һырып алған һәр төрлө замдар, помдар, хисапсылар, кладовщиктар йып-йылы урындарынан юнысҡы кеүек шартлап остолар. Быны күреп хайран ҡалған сейле-бешле түрә йораттары бригадаларҙан, фермаларҙан эркелешеп конторағa йыйылдыҡ, күҙҙәрҙе дүрт итеп, идара рәйесе һәм сыбыҡ осо туғаным бухгалтер Фәйзулла алдында ятҡан шомло штат исемлегенә төбәлдек.

-- Шулай, туғандар... Йыллыҡ хисап йыйылышына тиклем күбегеҙҙең ҡойроғон, байтағыҙҙың муйынын киҫергә тура килә -- юғарынан әмер шулай, -- тип башланы, бөтәбеҙгә ҡыҙғаныусан ҡараш ташлап, сыбыҡ осо туғаным Фәйзулла. Ошо йылы хәбәренән эс-бауырҙар өҙөлөп төшкәндәй булды. Хисап әһеле телмәрендә ҡойроҡ киҫеү – ярты окладты, муйын киҫеү – бөтөнләй штат ҡыҫҡартыуҙы аңлата.

-- Һәнәк-көрәк тотоп эшләргә өйрәнерһегеҙ, сәбәкеләр! – Тантана итте штаттар ҡабарыу бәләһенән башы ҡатҡан рәйесебеҙ. Клуб мөдирлегемдең аҡтыҡ сәғәте һуҡҡанлығын һиҙенеп, бүлмәнән үк олаҡтым...

Хәл йыйып ҡабат ингәнемдә, майлы урын ҡоҙғондарының күбеһе таралышҡан, исемлектә иһә улар яҙмышын билдәләүсе аҫыл-ҡыҙыл түңәрәктәр, шомло ҡара тәреләр һүрәтләнгәйне. Рәйес менән бухгалтер, идара ағзалары, тып-

тын ҡалып, төтөн менән түшәм терәтеп, исемлектәге үҙгәрештәргә һуңғы төҙәтмәләр керетәләр. Бер ситтәрәк ҡыҙара бүртеп ярһыған ветсанитар тора.

-- Аңла һин, кирегә бөткән бәндә, шунһыҙ беҙҙең киләһе йыл финанс планын хупламаясаҡтар! Штат ҡыҫҡартыу графаһын буш ҡалдырып булмай. Әле муйының имен ҡалғанға шатлан, яңы елдәр иҫкеләгәнсе ярты окладҡа эшләп тор. Ошо ҡәләм һау булһа, йыйылыштан һуң бер ай ҙа үтмәҫ, муйынлы башҡа ҡойроҡ ялғаныр йәнә. Әүәлгеләй, туп-тумалаҡ оклад эйәһе булырһың, -- тип йыуатты уны бухгалтер.

-- Һе, ҡапсығыңды киңерәк тот! Минең дүрт баланы дүрт ай буйы һеҙ туйҙырмаҫһығыҙ. Ярты хаҡҡа табан өйкәүсене атайығыҙҙан барып һорағыҙ! – тип ҡырт-киҫте ветсанитар. – Вәғәләйкүм әссәләм! – Контора ишеген тыштан шартлатып япты. Уның өсөн ҡауғалашырҙай ҡөҙрәт эйәһе бында юҡ – колхоздың ветврачы ҡайҙалыр ялда, Ҡырым ярында ине. Шуға ла таяҡтың башы санитар башына нығыраҡ төшкәндер...

-- Китһең, ялынмайбыҙ. Артына бер күнәк ҡарама көлө һибегеҙ сәбәкәнең! – Рәйес төкөрөп ҡалды. – Бер санитар муйыны һынғандан йығылып үлмәбеҙ. Бик тә кәрәкһә, вазифаһын ваҡытлыса күрше бригаданыҡы йөкмәп торор. Экстренный осраҡтарҙа ветврачтың үҙен юлландырырбыҙ.

-- Ай-һай, уҙаман, яҙа баҫып ҡуймайыҡ. Тирә-яҡта бешмә сире йөрөй, тиҙәр. Һыйыр малының ауыҙы иҙелә лә үлә икән. Лутсы уны урынында ҡалдырып, бригадир ярҙамсыларының, йәки конторала оса ышҡыусы эреле-ваҡлы хисапсыларҙың ҡойроғон ҡыҫҡартайыҡ, -- тип киҫәтте идараның күпте күргән бер ағзаһы. Бригадирҙарҙың, бухгалтерҙың сикә тамырҙары тартышты:

-- Беләбеҙ беҙ һинең оторо сиреңде! Оло башың менән, оялмай, бригадирҙың уң ҡулына киҙәнәһең. Уйлабыраҡ һөйлә һин, Ғимаҙислам!

-- Эйе! Ошо йәшеңә етеп, финанс политикаһын аңламайһың, ағай! Иҫәп-хисап работниктарына ҡул күтәреп, быуынһыҙ урынға бысаҡ салаһың! – Бухгалтер ҙа алышта һыр бирмәне.

-- Мал духтыры өрә бит һуң, мырҙалар...

-- Өрһөн. Өргән һәр бер эткә ҡалъя эләкмәй. Ҡайһы саҡ ундай сәбәкәне ҡыу һөйәк менән дә тешен һуғып һындыралар.

-- Ай-һай, йәмәғәт, ул-был була ҡалһа, мөгөҙлөләрҙе кем дауалар?

-- Ҡайын дегете лә креолин уның дауаһы, ағай.

-- Әммә шуныһын мал-тыуарға аслан кем һөртөр икән?

Сыбыҡ осо туғаным миңә күҙ һалды:

-- Бына бынауы бөтәбеҙгә ҡусты тейешле культура-ағартыу ҡараҫкыһы шәп һөртөр уны, ағай. Фермаға яҡын йәшәйем, әлеге хәйерһеҙ ветсанитарҙың һүлпән эшләүен беләм. Шул уҡ ваҡытта бер-нисә тапҡыр был егеттең... – Яурынбашымдан һөйөп алды ағайым. – ветеринарға ярҙамлашып, малдарға энә ҡаҙашып торғанын үҙ күҙҙәрем менән күргән бар. Йыллыҡ хисап мөҙҙәте уҙғылағансы, яңы кеше тапҡылағансы, үҙенең клуб эше менән бер ҡатарҙан мал духтыры вазифаһын да йөкмәп торор. Үҙем күҙ-ҡолаҡ булырмын.

-- Уға мин дә күҙ-ҡолаҡ, -- тип ҡушылды үҙебеҙҙең бригадир. -- Ә кәкже, йәш активист бит. Елкә ҡалын.

-- Дөрөҫ тәкдим, Фәйзулла Фазлыевич! – Рәйесебеҙ ҙә хупланы. – Тальян уйнап, ҡул сәпәкәйләп, тыныс ҡына аҡса ашап ятмаһын әле ул сәбәкә малай. Ауырлыҡты йөкмәшһен. Беҙҙең кеүек, яуап та бирһен. Актив булғас, пассив булмаһын!

-- Дөрөҫ, дөрөҫ, теркәгеҙ протоколға! Ике ҡойроҡ урынына -- бер ҡойроҡ!

Бая ғына ҡарыулашҡан идара ағзаһы ла, тәнҡит уты үҙенә ныҡ ҡағылғас, тиҙ үк иҫен йыйып, коллектив аҡылға ҡиммәтле өлөш керетергә ашыҡты:

-- Финанс-минанс политикаһы улай ҡушҡас, ниңә беҙгә яртылыҡ юлда туҡталып ҡалырға, йәмәғәт? Төнгө ҡарауыл мылтығын да тотторайыҡ ошо талъянсы мырҙаға. Булыр йәнә ҡырт-киҫелгән бер муйын!

-- Дөп-дөрөҫ!

-- Вәт бынығы, исмаһам, елле фекер! Барыбер төнөн урам ҡыҙырып, талъян тартып тиҙәк тибеп йөрөй. Беҙҙең ише тир ағыҙып та ҡараһын. Келәт йоҙағы өйөнөң ҡаршыһында ғына. Колхоз фермаһы ла кәртәһенең артында – ҡарауыллар! Атаһының башына ла китмәҫ! – Күпселек тауыш аныһат хәл ҡылды ғәзиз яҙмышҡайымды. Ҡобараларым осоп, ҡойроғон ишек ҡыҫҡан бесәйҙәй тажылданым:

-- Риза түгел мин быға! Ике, йәки өс йәнлеме ни мин? Баш тартам!

-- Ипләберәк, егет, сәбәкә булма! Коммунизм төҙөүсе йәш активист икәнеңде онотма! – Ҡаты киҫәтте рәйес.

-- Танауыңды һалындырма, ағайҙарың әйткәнде тыңла. Бер юлы йөҙ процент муйынлы-ҡойроҡло булдың! – Елкәмдән һыйпап йыуатты сыбыҡ осо туғаным Фәйзулла. Шау-шоу ҡыҙыуында өҫтәле артынан сығып, ситкәрәк алып китте мине. Маңлайына төртөп күрһәтеп, аҫтыртын бышылданы. – Ошо көршәктәге ысшут төймәләре һау булһа, шау-шоу тынғас та уҡ, йәнебеҙгә яҡын ағай-эне ҡабат үҙ урынына ултырасаҡ: ветсанитар ҙа, төнгө ҡарауыл да һәм башҡалар ҙа!.. Ә һин элекке урыныңда әле килеп өс вазифа уҡмашынан үҫтерелгән түп-түңәрәк яңы оклад эйәһе булып ҡаласаҡһың. Күҙ йомоп кереш, ҡустыҡай!

Шөйлә ныҡ тетрәнһәм дә, өлкән ағайҙарымдың әйткәнен иҫәпкә алып, баш эйҙем, йәш активист исеменә тап төшөрмәҫкә һүҙ бирҙем: тәүәккәлләгән – таш йотҡан, тиҙәр ҙәһә.

Бер башыма өс кәпәс ҡыҫтап кейҙертелгәс ни, ҡайҙа – муйын, ҡайҙа ҡойроҡ икәнен дә шәйләмәҫ хәлгә килдем. Теүәл өскә ярылып та имен ҡалыуҙың тәрән серҙәрен шәйләп, көнө-төнө баш ваттым. Түбә сәстәремде йолҡоп та эш сыҡмағас, бындай осраҡтарҙа әҙәм балаһы ҡулланған берҙән-бер ышаныслы юлды һайланым. Активислығыма эстән генә төкөрөп, эштәремде тыныс ҡына үҙ ағышына ебәрҙем. Шулай түшәмгә төкөрөп кенә көрәп аласаҡ айлыҡ аҡсамдың осо-башына сығып ятҡанда, бәғзеләрҙең көнләшеүҙән эсе көтөрҙәй башланы. Миңә үс итеп, төнө буйы тәҙрәм ҡаршыһындағы колхоз келәтенең мин һаҡларға тейешле йоҙағын шалтыраттылар – рәхәтләнеп йоҡлап ятмаһын, йүгереп сығып ҡурсалаһын йәнәһе. Ысынлап та йәнгә тейҙе был. Өҫтәүенә, талъянын ҡыҙғанып уйнатмай, клубтың ишеген асырға һәм йоҙаҡларға ла әсәһен йә ҡустыларын йөрөтә, малдарҙы дауаламай, келәтте ҡарауылламай, тип тейҙеләр тере теңкәгә. Сүп өҫтөнә сүмәлә, тигәндәй, ауылға бешмә ауырыуының да ҡапҡа шаҡыуы

һиҙелде. Тамам тәҡәтем ҡороп, йәш активист абруйын ҡабат ҡайтарырға тәүәккәлләнеп, урамға һыпырылдым.

Фермалағы башмаҡтар көтөүендә башланған бешмә сире. Ауыҙҙарынан шайыҡтары ҡойолоп, ҡаты бесәнде ашай алмай торалар, дүрт тояҡтарын ҡушарлатып, шаҡырайып ҡатҡандар. Астан үлеп ҡалмаһындар, тип, июнь айында йәш быҙауҙар өсөн махсус әҙерләнеп ауыл һыртындағы кәртә эсенә өйөлгән йомшаҡ бесәнгә илтеп ҡуштым бахырҙарҙы. Ветврач Ҡырымда һаман, ә ситтән килеп эшләп йөрөгән әүәлге ветсанитарыбыҙ беҙҙе ташлап ҡайтып киткән. Был һөнәрҙең берҙән-бер белгесе булып, тимәк, үҙем тороп ҡалғанмын. Элек күргәндәремде иҫкә төшөрөп һәм төрлө плакаттарҙан уҡып өйрәнеп, ауыҙ иҙелмәһе эпидемияһына ҡаршы профилактик сараларҙы киҫкен үтәргә тотондом. Егерме күнәк һыу һыйҙырышлы шанға ике күнәк креолин, бер күнәк тауар дегете һалып болғаттым, шыйыҡсаға фермалағы бөтә ҡапҡа бәйҙәрен, ишек тоткаларын ҡапҡа һәм ишектәре менән ҡуша буяным, саналарҙы, тәртәләрҙе, һәнәк-көрәк һаптарын ҡандырҙым. Ҡарауыл өйөнөң иҙәненә шул ҡуйылтмаҡ һеңдерелгән быскы онтағы түшәттем. Фермала шулай эштәремде теүәлләгәс, ат егелгән санаға шанды тейәп, осраған һәр хайуандың арҡаһына, йорт ҡапҡаларына, телеграф баҫаналарына зәһәр еҫле шифа һыуын һөртә-һөртә, ауыл урамдарын буйланым. Клубҡа барып еттем, бер аҙ уйланып торғас, тәүәккәлләнеп, сәхнә һәм тамаша залының мөйөш-һәйештәрен бумалаланым. Үҙебеҙҙең өй ҡаршыһындағы келәт эргәһенә етеп, шан төбөндә ҡалған зәхмәтте күнәкләп келәттең һалам түбәһенә һирпенем, бер сүместәйен йоҙаҡ эсенә ҡойҙом... Инде минең үҙемдән дә саҡрым араға зәхмәт еҫе аңҡый ине, шул көйөмсә, талъянкамды сыйылдатып, клубҡа йөрөй башланым...

Хеҙмәтем бик тиҙ арала татлы емешен бирҙе: күҙемә сүп булып ҡаҙалған иң сая тел сарлаусылар ҙа, ҡапҡаларын икенселәй буяуҙан ҡурсаланып, ауыҙҙарына һыу уртлап, “өйҙә бот күтәреп” ятыуымды күрмәҫ-белмәҫ булдылар, ә өмә яһап клуб эсен йыуып сығарған йәштәр, ялынып-ялбарып, культура усағының ишеген асып-ябыу вазифаһын әүәлгесә бүтәндәрҙән башҡартыуымды һоранылар. Шул көндән һуң өйөм ҡаршыһындағы хәйерһеҙ йоҙаҡ та шалтырауҙан туҡтаны.

Иртән уянып сыҡһам, ни күҙем менән күрәйем, бер төркөм ир-ат, танауҙарын ҡаплап, келәт алдында тапана.

-- Кил әле бында, сәбәкә малай! – Сиңәртәй бармағын һелкетеп саҡырып алды рәйес. Келәттең туңып ярылған йоҙағын тоторҙо. -- Әйт әле, ҡарауыл, эсенә ул һыҡраны ниндәй һеңәктән тултырҙың? Үҙеңдекенәнме?

Ир-ат хахылдашып кешнәште.

-- Һыҡра түгел был, ағай, -- тинем, -- донъялағы иң алдынғы совет фәне һәм париябыҙ ҡушҡан дез-ин-фекция шыйыҡсаһы был. Креолин һәм дегет. Ышанмаһағыҙ, еҫкәп йәки ялап ҡарағыҙ.

-- Һи алйот, еҫкәмәй ҙә беләм мин уны. Бөтә ауылды ҡотороҡ майына һаҫыттың, сәбәкә малай. Тын алыр ҙа әмәл юҡ.

-- Уның ҡарауы йәнегеҙ тыныс – кәртә-ҡура сир-сырхауҙан ҡурсаулы. Штатта ла артыҡ муйын-ҡойроҡ юҡ!

Йәнәш торған бригадир иһә елкәмдән шаҡарып алды:

-- Атла, кәнәлйә, келәт эсен инеп күр! -- Күнәкләп һипкән шыйыҡлығым һалам түбәнән үтеп, буралағы он өҫтөндә ҡара боҙланып ҡатҡан. Танауымды шунда килтереп төрттө. – Тояһыңмы бының еҫен – нисәмә йөҙ тәңкәлек он сумары суҡмарланып кеҫәңә һуғасағын? Креолин менән келәт түбәһен түгел, ә үҙеңдекен майларға кәрәк ине!

Хәле бөтөп көтөүсе килеп етте:

-- Духтыр ҡустым, йүгер – бесәнлектә башмаҡтар үлеп ята! Ветврач һине килеп етергә бойорҙо.

-- Ҡайҙа – Ҡырымғамы? – тинем, аптырап.

-- Ҡырымдан ҡайтып төшкән, эштәр хөрт, бөтә ир-ат бесәнлеккә килеп етһен, рәйес үҙе лә ҡалмаһын, тип ҡаты ныҡыны...

Мыйыҡтарына ҡырау атҡан ветврачыбыҙ ысынлап та бесәнлектә башмаҡ үләкһәләре эргәһендә көтә ине. Тере ҡалған малҡайҙарҙы кисекмәҫтән ныҡ һаҡ аҫтында айырым аҙбарға ябырға, үләкһәләрен бесән кәбәне менән ҡуша яндырырға, ферма һәм ауыл мал-тыуарына бешмәгә ҡаршы вакцина ҡаҙарға кәрәклеген йәнде алырҙай туҡыны. Сәғәтендә үк ауыл һыртында оло ялҡын ләүкене – бесән кәбәне яна...

Ә минең хәл нисек, тиһегеҙме? Муйынлы-ҡойроҡло килеш, ҡыл осонда ултырам. Тәүәккәл башыма ла, кеҫә төбөмә лә бер юлы бүре ҡойроғо менән һуҡмағайҙары, тип ҡурҡам.

Милиция бүлегенән иҫкәртмә. *Яуапҡа тарттырылыусы граждан Әжәргәп Мөгәрәпович Тоҙоҡапов ветсанитар вазифаһын башҡарғанында бригадир һәм бухгалтерҙың мөгөҙлө эре малдарын ағыулы дарыу ҡаҙап үлтереүен таныуҙан ҡырҡа баш тартты.*

1967.

Аймылыш

Ошоғаса фани донъяла рәп-рәхәт, тып-тыныс ғүмер кисереп ятыусы егет инем. Иҫләмәҫтән-нитмәҫтән... Төшөммө был, әллә асы өнөммө?..

...Бөтәһе йәш күңелемдең шаулы тормош ҡосағына ашҡынып-талпыныуынан килеп сыҡты. Ҡала ерендә йән башына аҙна һайын ике ял көнө бирелгәнде ишеткәс, үҙ алдыма рухланып, ҡаланыҡыларға оҡшатып яурынғаса ял еткерҙем дә, ялтыр асфальт тирәһенә тиҙерәк төпләнер өсөн, үҙебеҙҙең "ҡала тибындағы" район үҙәге ҡасабаһына морон төрттөм. Билдәле, эштең башы, баштан уҡ, паспорт өҫтәленә төкәлде. Барған көндә үк инеп һөйләшеп, мөһөр-мисәт баҫтыртмаҡҡа кәрәкле ҡағыҙҙарымды тапшырҙым да иртәгәһен иртүк тороп, өҫтәл эйәһе әйткән сәғәте-минутына "тып!" итеп ҡалдым, сөнки бындай хәтәр мәлдә тимерҙе ҡыҙыуында һуғыу хәйерле, ти торғайны олатайым.

Йоҙроҡтай ғына бүлмә эсе тынсыу – минән башҡа ла бында паспорт ала йәки алмаштыра килгән унлап хан һәм ханым бар ине. Бөтәһе өҫтәлгә өңөлгән, өҫтәл эйәһенең күҙенә текләп, телефон сымының теге осондағы"ҡәҙерле"һе менән

аңлашып бөтөүен көтәләр. Был яҡтың сая сәменә ҡарағанда, “Спартак” һәм “Динамо” футбол командаларының яҙмышы хәл ҡылына.

-- “Спартак”тың киләсәге салт аяҙ! – Осло үксәһен иҙәнгә шығылдата был ят.

-- Юҡ, томанлы! – тип хәнйәр ҡаҙай тегеһе.

-- Иштең ишәк сумарын, хи-хи-хи! – Татлы күҙ йәше аша көлә быныһы.

-- Белдең бесәйемдең ҡойроғон, хо-хо-хо! -- Әсеткән еккә әсе борос ҡыҫтыра тегеһе. Шулай байтаҡ ғүмер-замандар уҙа. Мөһөрлө ҡатырға көтөүселәр, бер көлтә паспорт бланкылары ятҡан сихырлы өҫтәлдән күҙҙәрен алып, донъяларына ҡайталар. Талған аяҡтарын яҙып, ойоған боттарын һуҙып, иҫкеләнгән урындарын яңыртып ултыралар. Ҡайһылары тәмәке тартырға китә. Әммә сымдағы алыш һаман өҙөлмәй.

-- Ҡәһәр төшкөрө, тамағы ҡарлыҡҡыры! – Танауы аҫтынан мыңғырҙай яңағын кәбеҫтә күсәнеләй итеп иҫке таҫтымал менән сорнаған бабай. – Ниңә был Эдисон тигәндәре телефон аппаратын уйлап сығарған?

Тел сарларға, тигәндә, Аллаға шөкөр, олатайҙан да, атайҙан да уҙҙырабыҙ:

-- Мейес башында иркәләнеп ятып ҡына ҡортҡаң менән телләшергәлер! – Ауыҙына шулай май ҡаптырам, сиратымды уның алдынараҡ күсерергә йәтешләнеп: кеше бер телемгә үрелгәндә, һин икене йол, ти торғайны олатайым. Ниәтемә шыма ғына өлгәшеп, телефондан һайрашыусыға күҙ ҡыҫтым.

-- Хи-хи-хи! – тине ҡыҙ, һыңар күҙен генә миңә йылтыратып. Тағы барлыҡ иғтибарын трубкаһына бирҙе. – “Динамо”ңа ҡайғы телеграммаһы һуҡ – беренсе күн туп “Спартак”та ҡала!

-- Ах, бөтә футбол туптарығыҙ шартлап ярылғыры! – Һыҙланып, яңағын баҫты бабай. Өҫтәл эйәһе саманан тыш хисләнеүҙән өҫтәл һуғып, аяҡ тибеп көлдө теге сым осондағы серҙәшенән:

-- Ху-ху-ху, хо-хо-хо! Шуны ла күрмәгәнһең, йоҡо тоҡсайы! Нимә? Эш сәғәттәрендә нисек күрә алдың, тиһеңме? Һантый, хи-хи хи, ха-ха-ха! Ишек тышына “ремонт” тигән белдереү элеп, телевизорҙы эш өҫтәленә ҡуйып... Эйе, ике көн ял хәҙер беҙҙә. Ләкин матч күрһәтмәйҙәр бит көн дә!

-- Ых, бысағымамы аҙнаһына ике көнлөк ялды уйлап сығарғандар! – Быныһын ҡартлас өҫтәл артындағыға барып етерҙәй ҡыскырып әйтте. Һәй афарин! Йөйөн табып телә белһәң, тел тигәнең суйырташты ла яра, ти торғайны олатайым. Мин дә өҫтәл артындағыға ишеттереп яуапланым:

-- Һинең кеүек артта ҡалған тупаҫйәндәрҙе культураға ултыртыр өсөн ваҡыт күп ҡалһын өсөн ул. Күрмәйһеңме ни: башлыҡ иптәш һинең ише һөрһөгәндәрҙе тәрбиәләргә телефон аша культура-ағартыу эше үткәрә, ә һин ҡамасаулайһың. Культура кәрәк, культу-у-ура!

-- Сөскөрөп бирәйем көлтүрәһенә! Биш көн сүбек сәйнәйҙәр ҙә ике көн һыу эсәләр! – Бирешмәне тиҫкәре.

-- Сәйнәһә, һинекен сәйнәмәйҙәрҙер, ниңә эсең боша?

-- Бошмаҫ ине лә, эш урынында тел тылҡымаһа. Яуапһыҙлыҡ был!

-- Яуапһыҙҙан ишетәм! – тине өҫтәл эйәһе.

Бабайҙың сей сөйәленә кейеҙ ҡыҙҙырып баҫтым:

-- Гөбөр-гөбөр гөрбөйән һин, ташһыҙ тартҡан елтирмән һин, һаҡалы оҙон, аҡылы ҡыҫҡа әҙәм. Яуаплы иптәштең дә, сым буйлатып ҡына булһа ла, туп тибергә хаҡы бар, ул да ата балаһы!

Өҫтәл эйәһе салт әйләнеп ҡараны, миңә иғтибар итте. Теге сым башындағы серҙәшенә:

-- Алло-алло, трубкаңды ҡуймай көтөп тор, -- тине. Үҙенекен яурынбашы менән ҡолағына ҡыҫҡан килеш, бланкылар күбәһенән береһен тартып сығарҙы. – Исем-фамилияң?

-- Тоҙлоҡапов Әжәрғәп Мөгәрәпович! – Ҡыҙыу тимергә һуҡтым.

-- Ултыр бына бынауында. -- Өҫтәл-мөһөр эйәһе, телефондан йылмайып нимәлер тыңлай-тыңлай, ваҡытлыса бирелә торған паспорт бланкыһын тултыра башланы, колхоздан саҡ ыскынған беҙҙең кеүектәргә уныһын тәтеткәнгә лә рәхмәт! Сымдың арғы осонан ниҙер ишетеп, ҡапыл яҙыуҙан туҡтаны, өҫтәлен һелкетеп көлдө. – Ха-ха-ха!.. Енесең ниндәй, әйт тиҙерәк! – тип миңә екерҙе. Ҡурҡышымдан йәнем сыға яҙып (сөнки баш тартыуы ла бар!), һорауҙың үҙемә төбәлгәнен шәйләһәм дә, ауыҙ асып әйтергә өлгөрә алманым, сөнки:

-- Һәй, оҙон сәс! Ҡыҙый тип әйтәйемме, малаймы... один чорт! – тип елкә усламымдан тартты яңағы бәйле бабай. – Ниңә сират боҙоп алға ырғының?

-- Йә, енесеңде әйт тиҙерәк! – тип ныҡыны паспортсы, ләкин арттан салғыйға йәбештеләр.

-- Ҡатын! Кәпәсле ҡатын! – Сәсемдән тартҡан бабайға булды был яуабым.

-- Кәпәсле ҡатындан ишетәм! – тип ғыжылданы тиҫкәре ҡарт. Телефондан ҡыҙып телләшеүен һаман дауамлаған паспортсы туташ шул арала бланкыны тултырып бөтөп, мөһөр мисәтен “дөңк!” иттереп сәпәне лә паспортымды ҡулыма атты. Хәл иткес был минутта ике ҡулы ла, үҙе лә буш булмағанлыҡтан, минең ҡағыҙҙар араһындағы “Тыуыу тураһындағы таныҡлыҡ”ҡа ҡарай алманы, буғай...

Инде эшкә урынлашыу ҡайғыһы. Һуҡмаҡ осом пекарня – Икмәкхана контораһында. Кадрҙар бүлегенә дөрөп барып керҙем, сөнки ҡыҙҙырған тимерҙе һыуытыу – егет эше түгел, тир ине олатайым. Әммә-ләкин ни күрәм: кәүҙә йәһәтенән береһе баллы умартаға, икенсеһе әсе эркет тәпәненә тартым ифрат мөләйем ханымдар ҡара-ҡаршы ултырышып алғандар ҙа, бик ҡыҙышып, “һалабаш һүтәләр, һуған баулайҙар” ине. Алдарына яҫы “Правда” гәзите түшәп һалынған, унда кәбәндәй көнбағыш ҡабығы өйөлгән. Яңғырауыҡ сәләмемә лә иғтибар итмәгәстәре, ауыҙҙары бушаныуын һағалап, мөйөшкәрәк һырныҡтым.

-- Был ни заман! -- тине умарта ханым. -- Элек симешкәне эшкә барған-ҡайтҡанда яра торғайным, инде шуға ла ваҡыт юҡ. Ике көн ялға күскәндән һуң, эш аҙнаһы бөткәс тә, өйгә һуғылып тормай, тура баҡсаға китәбеҙ; шуға күрә эшкә барышлай – баҡсалағы плитәгә газ баллоны йәки башҡа нәмәләр, ә ҡайтышлай аҙыҡ-түлек һатып алырға кәрәк. Шуға күрә коноторанан ике сәғәт элек сығып таябыҙ. Дәүләтебеҙ фарманлаған хөрриәт -- һәр минутты ялға арнағы килә.

-- Эйе, культурнай йәшәргә ваҡыт. Культурнай ялға хилафлыҡ килмәһен өсөн, ирем менән мин көн дә киске ужиныбыҙҙы, буфеттан бәлеш, ҡатыҡ-фәләп һатып алып, эш урыныбыҙҙа уҡ ашайбыҙ ҙа ҡайтабыҙ – эштән һуңғы ваҡытыбыҙ янға ҡала. – Илһамланып ялғап алды тәпәнбикә.

-- Уй әхирәткәйем, ҡалай башығыҙ эшләй!

-- Хәҙер культурнай заман, баш менән йәшәргә кәрәк.

Һыналған аҡыл иҫкә төштө: асылған еккә бармағыңды ҡыҫтырһаң, баратора башың һыйыр, Әжәрғәп улым, тигәйне олатайым.

-- Һе! Ужин ғына нимә ул! – Мөйөшөмдән ҡушылдым, -- Вәт минең бухгалтерияла бил бөккән ағайым менән еңгәйем беләләр эштең асылын, исмаһам. Өйҙән кәрәк-яраҡты алып китеп, иртәнге сәйҙе лә бухгалтерияның иҫәп-хисап өҫтәлендә гөрләтеп ҡайнатып эсәләр – иртәнге татлы йоҡолары янда ҡала. Ә госбанкыла ҡыштырҙатып аҡса һанаусы инәйем, һәр кис һайын ясленән алғандан һуң, игеҙәк ейәнсәрҙәрен аҡса сейфе өҫтөндә ғәсәл ҡойондороп алып ҡайта!

Ханымдар шым ҡалдылар, ҡалҡынып ҡаранылар.

-- Бәй, бында һеҙгә ни кәрәк? – тине береһе.

-- Он складығыҙға грузчик булып ялланырға килгәйнем.

-- Ниңә башта уҡ шулай тимәнегеҙ?

-- Эшегеҙ бөтөүен көттөм.

-- Ғариза яҙып бирегеҙ. Әммә беҙҙә өҫтәл, ҡара-ҡәләм буш түгел.

-- Шуны алдан уҡ һиҙеп, яҙып килтерҙем, туташтар.

-- Ниңә баштан уҡ күрһәтмәйһегеҙ, ҡиммәтле ваҡытты урлайһығыҙ? Паспортығыҙ менән ҡуша ҡалдырығыҙ. Иртәгә иртәнсәк фәләнсә ваҡытҡа килерһегеҙ, -- тине умарта ханым.

Район ҡуналҡаһында ҡандалаларҙан таланып йоҡо һимерткәс, иртән һыу ғына эсеп, ғаризам менән паспортымдың хәлен белешә киттем. Кисәге умарта ханым да, тәпәнбикә лә -- зым-зыя, улар урынында төптө лә таныш түгел, һары сәсле ҡыҙ бала ҡәләм юна.

-- Ҡағыҙҙарығыҙ икмәк цехы башлығында, -- тип белдерҙе ул, журналға ҡарап алғас.

-- Мин бит икмәк цехына түгел, складҡа грузчик булып инергә һорағайным.

-- Беҙҙә ҡатын-ҡыҙ енеслеләр ауыр эшкә алынмай.

-- Минме ҡатын-ҡыҙ?!

-- Барығыҙ-барығыҙ, ҡыланмағыҙ. Мин үҙем дә кәрәккәндә тауышты ҡалынайтып, сәсте туҙғытып ир-аттай йөрөй беләм. Икмәк цехы башлығы көтә һеҙҙе! –Дилбегәне ҡыҫҡа тотто.

Әммә быныһына ла ҡушҡуллап риза: урамы – асфальт, шөғөлө -- цех эше, колхоз һәнәк-көрәге түгел инде! Ҡойроҡто һыртҡа һалып, асығыуҙан һәлберәй башлаған телде арҡыры тешләп, эҙ һыуындыртмаҫ элек, икмәк бешкән тирәгә тәпәйләнем. Мейестәр дөрләп, ондар борлап, әсе ҡамырҙар шартлап торған тамуҡ төйәгендә мине тәпәнгә төшкән тараҡандай башкөлләй онға батҡан урта йәштәрҙәге мыҡты ир – цех башлығы ҡаршыланы. Кем икәнемде, йомошомдо белдереү менән үк, документтарымды ҡулыма һондо ла, уңды-һулды абайламай, вулкан тауылай ажғырып ташып барған оло ҡамыр шанына ҡарай йүгерҙе:

-- Әй, ҡыҙый! – Ярты секундҡа артына ҡайырылып, бойорҙо. – Иң элек медицина комиссияһы үтеп, һаулығыңа ҡағыҙ ал. Проходной двор, йәки ирҙәр һағалаусы юл саты түгел был һиңә, ә икмәк заводы. Һәм бында эшләр булһаң, ҡолағыңа киртеп ҡуй: мода артынан ҡыуам тип йәп-йәш башың менән толомоңдо

ҡыҫҡартып, йәмеңде ебәреп, ирҙәр кейеме кейенеп, ҡарасҡылай әҙәм көлдөрөп йөрөмә, әүәлге хәленә ҡайт! Гүзәл енес – гүзәл булырға тейеш!

Тәүгеләрен бик яҡшы аңлаһам да, һуңғыларына шаҡ-ҡаттым. Яңаҡтарымды усым менән ышҡып та, ҡулға эләгер дәлил – төк төхөрө тапмағас, күңелемде шом алды; бындай шыма тоҡом ҡалдырған атай-ҡартатайҙарымды ләғнәтләп, ғәрлегемдән сәсемде йолҡорҙай булдым. Ниңә мин “ҡыҙый”, ниндәй кейем кейергә?..

Күп уйлап һәм әрепләшеп торор форсат ҡалманы: башлығым, ең һыҙғанып, ажғырып ташҡан ҡамыр тауы менән көрәшә башланы. Танауҙы “мырш!” тартып, ул йүнәлткән больницаға ашыҡтым. Күрһәтелгән йүнәлештә бер сисенеп, бер кейенеп бер-нисә ишектән ингәс, бер-нисәһенән сыҡҡас, кәмә мороном лаборатория ярына килеп төртөлдө, ә унда паспорт өҫтәленә ҡарағанда ла ҙур сират. Етмәһә, ҫс иткәндәй, бөтәһе лә йә -- көбө, йә умарталай йыуан-йыуан бисәләр. Түштәре менән дә, терһәктәре менән дә бер-береһен төртөп, ҡыҫырыҡлап, зыҡ-ҡубалар. Баҡты иһәң, лаборант ҡатын иртәгә эшләмәй, ә сираттағыларға, киреһенсә, иртән уттай көн икән. Ете аҙым өҫтәлгә еткәнсе ете тиргә батып, шалтор-шолтор һауыт-һаба, ызбурыйҙарын әүеш-тәүеш килтергән, йөҙөмә әйләнеп тә ҡарамаған лаборанткаға тейешле ҡан-маҙарҙарымды саҡ тапшырып өлгөрҙөм. Беҙ, анализ ҡағыҙын яҫканыусылар, коридорҙағы оҙон эскәмйәгә ҡарлуғастарҙай теҙелешеп, яҙмышыбыҙ хәл ҡылыныуын көтәбеҙ. Бына ишек “шылт!” итте лә өҫтөндәге аҡ хәлләһенән арынған, башына йәшел тауис ҡауырыйлы эшләпәһен кейгән, ҡулына селтәр моҡсай тулы бәрәңге тотҡан лаборанткабыҙ шым ғына шылып “һәп” булды.

-- Был ни хәл?! – Боғаҙым салынғандай, йән әсеһе менән ҡыҫҡырҙым. -- Әле бит эш көнө бөтмәгән – теүәл ҡырҡ биш минут ҡалды!

-- Уның бәләкәс улы бар, оҙайтылған көн төркөмөндә уҡый. Шуны мәктәптән алырға ашыға, -- тине хәбәрдар бер ханым.

-- Оҙайтылған көндә булғас, ниңә эшен ослап китмәй?

-- Китер ине лә, ике көн ялға күскәс, мәктәптәге тәрбиәсе лә бәпескәйен ясленән алырға ашыға. Сөнки яслеләгеләр ҙә иртәрәк ыҫкыныу яйын ҡармай.

Тимерсе олатайымдың, тимер тамам ҡыҙһын өсөн, ҡуҙҙы дөрләтә белергә кәрәк, тигән алтын аҡылын иҫкә төшөрөп, ҡуҙраған усаҡҡа аҫтыртын күрек өрҙөрҙөм:

-- Дөрөҫ эшләй был ханым. Хәҙерге ике яллы заманда һәр эштә лә үҙеңә файҙалы ваҡытты көрмәргә кәрәк, ти торғайны мәшһүр бер. бабай. Үтә лә белеп әйткән. Шундай уҡ белдекле атайым, мәҫәлән, ошо көн дә лә иртән етәкләп мине пекарня складына эшкә оҙата. Шунан һуң, врачтарҙың ҡәтғи бойороғонбойомға ашырып, сәғәт теп-теүәл унда диеталы ашханаға үҙәк ялғарға керә. Сәғәт ун берҙә эшкә барып, өҫтәле артына ултыра ла, папкаларын асып һалып, туалетҡа тәмәке тартырға һәм башҡа ихтыяждарын үтәргә сыға. Ярты сәғәттән һуң эшенә ҡайтып, көндәлек гәзиттәрҙәге яңылыҡтарҙы һөҙә. Сәғәт ун икене һуҡҡас, врачтар ҡушыуынса, бер стакан һыу ҡойоп эсә лә эшкә башлай. Һәм беренсе яртыға тиклем утыҙ минут буйынса баш күтәрмәй тир түгә. Шунан йәнә төшкө ашҡа тәнәфес, тәмәке тартыу, киске гәзиттәрҙе күҙҙән кисереп сығыу... Бер стакан һыу эсеп, тағы бер сәғәттәй тир түккәс, ҡәҙерле атаҡайым, бер сәғәт элек кейенә лә

мине алырға китә. Шулай итеп, бер ял заманындағы бер көнлөк эште ул сәғәт ярымда эшләп өлгөрә...

-- Безобразие!

-- Мәсхәрә!

-- Ишеген ҡайырып кереп алырға кәрәк! – Йәмәғәт аяҡланды, таяҡ тығып болғатылған умарта күсендәй шауланы. Тимер тамам ҡыҙып етте, тигәндә, бәхеткә ҡаршы, лаборатория ишеге асылды ла күк халатлы әбекәйҙең сөрөш йөҙө салынды:

-- Рәхим итегеҙ! Үҙегеҙ таратып алығыҙ! – Бер ус ҡағыҙҙы алда торған ғауғасыға тотторҙо. Бағтиһәң, лаборантка ошо иҙән йыуыусы әбекәйгә бланкылар ҡалдырып, дөйөм исемлектәге фамилиялар буйынса тултырып биреүен үтенеп киткән икән. Ҡыуанышып, ҡиммәтле ҡағыҙҙы ҡулға төшөргәс, уҡып та ҡарамай, тиҙерәк икмәк цехына саптым. Бында ла көндө йомғаҡлап, таралышырға ғына торалар икән. Шулай ҙа цех башлығым ипле әҙәмкәй булып сыҡты, ваҡланманы. "Әһә, килдеңме, ҡыҙый?" – тине лә, ҡағыҙҙарымды ҡармап алып, эш бүлмәһенә саҡырҙы. Еҙ тирәсле күҙлеген элеп, ҡағыҙға күҙ йүгерткәс, ҡапыл төҫө үҙгәрҙе, йөҙөмә һөҙөп ҡараны:

-- Не выйдет! Күҙ буяп эшкә инермен дә декрет отпускыһы алып, эшләмәй ашап ятырмын, тигәйнеңме? Миңә бала табыусылар кәрәкмәй, ҡамыр баҫыусылар кәрәк, мут ханым!

Һушымды бер юйып, бер йыйып, аңыма килә алмай интеккәс, телемде саҡ ҡуҙғалттым:

-- Ниндәй "ханым"? Ниңә мәсхәрәләйһегеҙ?

-- Һәй ханым, ханым... Ниңә мине һуңғы сиккә етергә мәжбүр итәһегеҙ?! – Документтарымды өҫтәл тартмаһына ырғытып, мине тышҡа этәрҙе.

Ҡуналҡа бүлмәмә ҡайтып, тар койкаға йығылдым, иртән барып ғауғалашырымды сәмле уйлап ята торғас, күҙ эленеп киткән. Яурынымдан цех башлығы һелкетәме, тип, күҙ асһам, башым осонда бынамын тигән милиция сержанты баҫып тора.

-- Тоҙлоҡапов Әжәрғәп Мөғәрәпович тигән граждан йәки гражданка һеҙ булаһығыҙмы?

-- Тап үҙе. Ләкин гражданка түгел.

-- Кейенегеҙ, участкаға китәбеҙ.

-- Ни сәбәп? Урлағанмы мин, әллә кемделер һуйғанмы?

-- Барғас һөйләрһегеҙ!

Башты ташҡа ороп булмай, олатайым әйтмешләй, -- буйһонорға тура килде. Унда дүрт күҙ төбәп көтәләр имеш: берене йәш кенә тәфтишсе, икенсене үҙемә билдәле икмәк цехы башлығы. Ә өҫтәлдә онға батҡан ваҡытлы паспортым, башҡа ҡағыҙҙарым, шул иҫәптән баяғы кисә илткән медицина белешмәм ята.

-- Йә, һөйләп ебәрегеҙ әле, гражданка-гражданин. Ни өсөн Тоҙлоҡапова түгел, ә Тоҙлоҡапов? Ҡатын-ҡыҙ башығыҙ менән ниңә ир-ат булып ҡыланаһығыҙ? Берәй афера-этлек ҡылыр өсөнмө?

-- Ялған! Мин һис ниндәй *Тоҙлоҡапова* түгел, ә теп-теүәл енесле Тоҙлоҡапов!

-- Алайһа, ниңә паспортығыҙҙа фамилияғыҙҙың аҙағында “а” хәрефе өҫтәлгән? – Ҡағыҙҙы алдыма ырғытып, йөрәгемә шом һалды – ысынлап та Тоҙлоҡапова ине...

-- Йә, инде ни әйтергегеҙ?

-- Ялған! Үҙегеҙҙең паспорт өҫтәле башлығы ялғанлап яҙған! – Аяҡты ныҡ терәп һөрәнләнем.

-- Сеү! Алайһа, был белешмә лә ялғанмы? – Лабораториянан иҙән йыуыусы әбекәй биргән ҡағыҙҙы күргәтеп күҙҙәремде шаҡырайтты. – Уҡы әле бынауы графалағыны, ҡыҫҡырып уҡы!

Сәстәрем үрә торҙо: быуаҙ, өс айлыҡ, тип яҙылғайны...

-- Мин уның аферистка икәнен бер күреүҙән үк үтәнән-үтә таныным, -- тине цех башлығы. – Ирҙәрсә ҡыланып һүгенеүен ишетһәгеҙ икән әле уның!

-- Тәк, барыһы ла аңлашылды. Һеҙ, гражданка, яуыз ниәт менән енесегеҙҙе алмаштырып, алдашыу юлына баҫҡанһығыҙ. Прокурор хәл иткәнсе, үҙегеҙҙе берике көнгә бында ҡалдырырға тура килер. Сержант, илтегеҙ был гражданканы ҡатын-ҡыҙҙар камераһына!

Эс-бауырым өҙөлөп төштөмө ни!

-- Туҡтағыҙ, унда илтә күрмәгеҙ! Мин бит ҡатын-ҡыҙ түгел, түгел! – Йән әсеһе менән олоном.

-- Ха-ха-ха! – Быуынды киҫте цех башлығы. – Бритва килтерегеҙ, битен һаҡал-мыйыҡ баҫҡан бит бахырҡай ир-егеттең!

Тәфтишсе көҙгөләй ялтыр йөҙөмә төбәлеп баш сайҡаны. Хәлдәр эт илағыс ине. Башҡаса әмәл ҡалмағанлығын төшөнөп, ялт-йолт ҡаранып алдым да, бүлмәлә фәҡәт ир-ат заты ғына барҙан файҙаланып, үҙемдең дә енесемдең тап уларҙыҡындай икәнлеген баҡтыртып дәлилләү өсөн, шәлдәүемә йәбештем...

Милли ғәҙәт

Беләһегеҙме, нимә ул милли ғәҙәт? Иң еллеһе -- ҡыҙ урлау, тиһегеҙме? Белеп еткермәйһегеҙ милли ғәҙәттә! Милли ғәҙәткә, мәҫәлән, егет урлау ҙа керә икән. Тап үҙе – егет урлау! Быны һеҙгә төплө теүәллек һаҡлап иҫбатлай алам. Сөнки мин бит шәхсәнә үҙем ошо бисәм тарафынан тап шул милли ғәҙәт буйынса урландым.

Һуғыштан һуңғы аслы-туҡлы наҡыҫ колхоз ерлегенән табан тайҙырып, райуполминзагка налог агенты булып эшкә инергә тип тупһа шымартам, малай. Йәшмен. Кеҫәлә һуҡыр тин дә юҡ. Райбашҡарма ҡарауылсыһынан үтескә бер стакан сәйлек ваҡ көмөш һорап алып, сәйханаға индем, кеше күрмәгәнерәк мөйөшкә төпләндем. Танауҙы бик мөшкәл һалындырып, меню тигән ҡағыҙҙарын ҡарайым. Нимәләр генә юҡ унда! Ҡорһаҡ иһә бик килбәтһеҙ боҡорҙап, ауыҙ һыуҙарым ҡойола.

-- Нимә алаһың, сибәр егет? – тип өндәште аҡ алъяпҡыслы туташ.

-- Бер стакан сәй.

-- Шул ғынамы?

-- Шул ғына.

Боҫо борлауығ оҙон стакан “һә!” тигәнсә алдыма килеп ҡунды. Уны ике усым араһына ҡыҫтым да, танауға бәргән йылы боҫка иҙерәп, уйға талдым.

-- Бәлки, берәр телем икмәк тә кәрәктер, сибәр егет?

-- Бәлки...

Алдыма ике телем икмәк менән бәрәңге иҙелмәһе килеп ултырҙы. Туташтың йөҙөнә күтәрелеп ҡараным. Йәш әле, тик битендә саҡ ҡына шаҙраһы бар. Әммә тауышы күкрәк төбөнән күгәрсендекеләй гөлдөрләп кенә сыға. Иҙелмәне йылдам һыпырып ҡуйҙым. Үкенеп, ҡалағыма ҡараным...

-- Сибәр егет, бәлки, котлеттан да ауыҙ итерһегеҙ?

-- Бәлки...

Өҫтәлгә “шып!” итеп ике котлет, шарап һалынған ике стакан менде. Туташым, күгәрсендәй гөлдөрләп, күҙҙәремә текләне.

-- Үҙем дә һеҙҙең менән бергә кискелекте ашап алырға булдым. Яңғыҙ ғына тамаҡҡа аш бармай – аппетит юҡ. Һеҙ ҡаршы түгелдер бит?

-- Юҡсы, ниңә ҡаршы булайым, ти?

Сәйхананың эш сәғәте тулып, ишек эстән эленгәйне инде. Кухнялағы бешкәкселәр, шалтыратып, һауыт-һаба йыуа, беҙ мөйөштә икәүҙән-икәү генә. Ҡулыбыҙҙа шарап тултырылған һырлы стакан.

-- Танышыу хөрмәтенә! – тине шаҙраҡай туташ.

-- Танышыу хөрмәтенә! – тинем мин. Үҙәк буйлап төшкән ялҡын башты әйләндереп ебәрҙе. Туташым, сәнсеп алып, миңә котлет һоғондорҙо. Яҡыныраҡ һырнығып, күбек сәсле ялбыр башын иңемә үк терәне. Күңелем тулып китеп, күмерҙәй ҡара бөҙрәләрен һыпырҙым.

-- Исемең кем, сибәр егет? – Бер-беребеҙгә исемдәрҙе әйтештек.

-- Бәлки, ҡуныр урының да юҡтыр әле һинең? – тине туташ.

-- Юҡ...

-- Беҙгә барайыҡ, булмаһа.

-- Барайыҡ.

Йорттары тап халыҡ суды бинаһының ҡаршыһында ғына икән. Бик яҡшы йыһазландырылған зиннәтле бүлмәлә ултырам. Өҫтәлдә биш йондоҙло ҡыҙғылт шешә, алтын буталлы нәфис рюмкалар һәм бик һимеҙ ит бәлеше...

-- Атайымдар күрше ауылға ҡунаҡҡа китте, беҙ ҙә икәүләп күңел асып алайыҡ әле, -- тип йылмайҙы, гәлсәр сыңлы рюмкаларҙы сәкәштереп. Наҙлы һыны менән ышҡылып алдыма уҡ менеп ултырғайны, йөрәгем йылғыр арғымаҡтай ныҡ тулап, күңелем шул арғымаҡҡа яйҙаҡланып ныҡ елде – нескә биленән ҡосоп, үбә-үбә, диванға әүештерҙем...

-- Әжәрғәп, йәнем, ашыҡма! – тине туташ. – Ишетмәйһеңме ни, атайымдар ҡайтты! – тип һиҫкәндерҙе. Ҡосағымдан шыма ебәктәй шылып, һыпырылды. Ихатала, ысынлап та, дуға ҡыңғырауы сыңлаған, ат туҡтатып ҡысҡырынған тауыш ишетелде. – Бөттө башыбыҙ! Йәһәт-йәһәт! – Ҡулымдан һөйрәп бер бәләкәс бүлмәгә индерҙе *лә* йоҙағын шартлатып бикләп тә ҡуйҙы һылыуым. Йортта туҡ-туҡ атлаған, нимәлер шыуҙырған һәм ауҙарған, асыуланып екеренгән тауыштар ишетелде. Күп тә үтмәй, туташ ҡынам ашығып ишекте асты:

-- Әжәрғәп, йәнем, тиҙерәк сығып ҡасайыҡ! Атайым уҫал, иҫерек, сөйҙәге һинең фуражканы күреп ҡоторона. Милиционер, үҙе яман атеист, тип

иҫкәрткәйнем шикелле? Кисә генә бик аҫтынан бер ырыстан ҡасҡан да, йәшеренеп ятҡан шул бандитты эҙләп, бөтә йорт йыһазын ауҙарып йөрөй. Әгәр күренә ҡалһаң, наганынан икебеҙҙе лә атмаҡсы!

Бөтә донъя күҙҙәрем алдында бишек кеүек тирбәлде, табандарым ергә тейеп-теймәүен дә һиҙмәнем. Нимәгәлер һөрлөгөп, танауым менән болдор таҡтаһын һөрҙөм...

-- Тиҙерәк, йәнем, тиҙерәк, атайым атмаҫы борон! Егеүле аты ҡапҡа төбөндә тора – ултырайыҡ та һыҙайыҡ!

Башҡынамдың ҡурғаш кеүек аҫҡа баҫыуын саҡ еңеп, туташымдың хәстәрлекле етәгендә ҡырандас төбөнә ҡоланым. Тәгәрмәстәр тыҡыр-тыҡыр әйләнде, дуғалағы ҡыңғырау ҡыңғылданы, ярымүлек кәүҙәмде яҙмыш туташымдың ҡосағында ҡайҙалыр алып осто. Байтаҡ ҡаңғырғас, тәгәрмәстәр туҡтаны, туташым кемдеңдер йылы өйөнә күтәреп индерҙе мине. Иркәләп-һөйөп кенә сисендереүен, йомшаҡ ҡына мамыҡ мендәргә ятҡырып, гонаһлы яланғаслығы иҫеректе лә иҫәрләтерлек, ҡаты ташты ла иретерлек ҡосағына убылыуымды тойҙом...

-- Эй, уян! Прокуроҙың егеүле атын урлап ҡасҡан бандит һинме?

Күҙҙәремде саҡ тырнап астым. Фәрештәм күптән тороп, кейенеп, көҙгө ҡаршыһында борғаланып ултыра, ә янында, сатаҡ башлы тупаҫ сыбыртҡы һабы менән бөйөрөмә шөҡәтһеҙ төрткөләп, гориллаға оҡшаш сажин кәүҙәле әҙмәүер – милиционер баҫып тора. Ауыҙымдан атлыға яҙҙы йөрәгем. Ауыҙ асырға иткәйнем:

-- Әйҙә-әйҙә, кейен! – тип екерҙе горилла. – Прокурор һине тереләй тотоп килтерергә ҡушты, тоҙ ҙа һипмәй ашаясаҡ!

Шул уҡ ҡырандас, шул уҡ ҡыңғыраулы дуға фәрештәм менән икебеҙҙе кисә үҙебеҙ сығып ҡасҡан шул уҡ йортҡа дәррәү ҡайтарып ҡуйҙы. Кисә беҙ табын ҡорған өҫтәл артында прокурор үҙе ултыра, ҡулында ҡәләм, алдында -- яуап алыу ҡағыҙы һәм минең козырегы китек фуражка.

-- Атайыңды милиционер тигәйнең бит? – Шыбырҙап өлгөрҙөм фәрештәмә.

-- Прокурор тиһәм, ҡотоң осор тип уйланым... Һөйләшкәндә һаҡ бул, ул бер ниндәй ҙә милли ғәҙәттәрҙе танымай...

Өҫтәл артындағы тороп ажғырҙы:

-- Әһә, ошомо ат ҡарағы, өҫтәүенә, ҡыҙ ҙа урлап, шаҡшы милли ғәҙәтте яңыртыусы? Тоҙ ҙа һипмәй ашаясаҡмын башыңды! – Һерәйеп баҫҡан милиционерға бойорҙо. – Ике аяғын бер ҡунысҡа тығырға -- ябығыҙ каталажкаға!

Сәстәрем үрә торҙо, ауыҙымда бер йоторлоҡ төкөрөк заты ҡалманы.

-- Мин... мин... һеҙҙең ҡыҙға өйләнәм бит...

-- Молчать!

-- Бер-беребеҙҙе үлеп һөйәбеҙ, атай... – тине ҡыҙы.

-- Эйе, һөйәбеҙ!

Прокурор, мәғәнәле тамаҡ ҡырып, һорау алыу ҡағыҙын китек козыреклы фуражкам аҫтына тыҡты.

-- Бәлки һиңә, милли ғәҙәт ҡолона, боронғоса ҡоҙалап туй яһарға ла кәрәктер әле?

-- Юҡ, атай, ҡоҙалап туй яһау һис кәрәкмәй беҙгә! – тине ҡыҙы.

-- Бәлки, һиңә, милли ғәҙәт ҡоло, минән фатир, йорт йыһаздары алырлыҡ аҡса ла кәрәктер әле?

-- Юҡ-юҡ, кәрәкмәй! Һис нәмә лә кәрәкмәй! – тип сарбайлап саҡ ҡотолдом.

-- Алайһа, каталажкаға илтеп япмаҫтары борон хәйерле сәғәттә икәүләшеп бынан олағығыҙ ҙа никах тураһындағы танытмағыҙҙы бынауы фуражка яныңа килтереп һалығыҙ!

Еренә еткерелде, әлбиттә...

Прокурор ҡайнатам һуңынан таныш-белештәренә: "Үгәй булһа ла, ҡыҙымды ҡәҙимгесә әҙәм рәтле туйлап бирергә ине ниәт, милли ғәҙәт ара төштө: кейәү булаһы бәндәм, туй һәм ҡәйнештәргә бәке биреү йолаһынан биҙәрләп, ҡыҙҙы ҡасырып алды, тип һөйләнеп йөрөгән. Һәм халыҡтан ысынын да ишеттем: "Прокурор үҙенең үгәй ҡыҙын: "Һине кем алһын! Аяҡлы расход" -- тип исемләп битәрләй торғас, ҡыҙ үҙе яйын тапты, кейәүҙе ҡасырып алып, прокуроръы туй сығымдарынан ҡотҡарҙы!" Әммә бер ямандың бер яҡшыһы ла була, тиҙәр бит: әгәр яман прокурор ҡайным мине бөтә район күләмендәге түрәлек вазифаһына – "Заготживсырье" конторанаһының ауылдарҙа халыҡтан дәүләт ҡаҙнаһына һалым йыйыу инспекторы итеп урынлаштырмаһа, бөгөнгө киң профилле етәксе кадр Әжәрғәп Мөғәрәпович Тоҙлоҡапов булыр инемме ни мин?! Абынмай йәшәһен ул да! Ә мин иһә шул ҡасандыр район сәйханаһынан үҙемде урлап ҡасҡан фәрештәм менән ошо көнгәсә наҙлы күгәрсендәрҙәй гөрләшеп донъя көтәм. Берике йыл барак бүлмәһендә тороп, ағастан өй бурап керҙек, күп йылдарға һуңлап ҡалған ҡауышыу туйыбыҙҙы үткәрҙек. Ҡунаҡтар менән өйөбөҙ шығырым тулды, фәҡәт прокурор ҡайнатам ғына килмәне. Ул: "Нигеҙ ҡотлап бүләк бирә торған иҫке милли ғәҙәт бар. Прокурор башым менән милли ғәҙәт ҡоло була алмайым!" – тип ҡырт киҫкән. Ә шулай ҙа милли түгел шәхси ғәҙәте лә ғибрәт өсөн йәшәһен!

Сәнкем-Биктимер, 06.04.1965.

Кем мин?

Әлегәсә белә алмайым шуны: кем мин? Кешеме, әллә кеше түгелме? Дөрөҫ, ошо көнгәсә үҙемде Әжәрғәпкә иҫәпләп йөрөй инем. Ауыҙ тултырып әйтһәк, Әжәрғәп Мөғәрәпович Тоҙлоҡапов тип. Ошо үҙе үк минең кемлегемде бөтә район күләмендә таныта ине. Ләкин көтмәгәндә генә хәүеф ҡунды башыма.

Йәшермәй генә энәһенән ебенәсә теҙеп һалһаҡ, эт илағыс хәл инде. Ауылдағы ящур эпидемияһы йәғни ауыҙ иҙелмәһе менән булған ҡойто хәлемде ишетеп беләһегеҙҙер – шул бит инде колхоздан табан тайҙыртты. Ярай әле мин батҡанда бергәләшкән түрәләрем, үҙҙәре лә ҡуша сыланмаҫ өсөн, һыуҙан ҡоро сығарттылар мине лә. Артабанғыһы билдәле: прокурор ҡайнатам тыуҙырған ыңғай сәбәптәргә тарып, бөтә төбәккә билдәле етәксе кадр булып етештем.

Район һайын тере тәндән тиреләрҙе һыҙырып йәшәп килгән, бөйөк атайыбыҙ Сталин үҙе дәүләт ҡаҙнаһын ишәйтеү өсөн уйлап тапҡан "Заготживсырье" ойошмаһы барлығын беләһегеҙҙер. Наҙан башҡорт теленә күсереп әйткәндә, ауыл халҡының барса мал-тыуарының, ҡош-ҡортоноң көндәлек килемен – итен, һөтөн, күкәйен, тиреһен, йөнөн, тауыҡ ҡаурыйына тиклем, ҡырсып алып, дәүләтебеҙ ҡаҙнаһына еткереүсе контора була инде. Мин бына шул конторанаң баяғы эште башҡарыусы агенты рәүешендә ауылдан-ауылға, өйҙән-

өйгә ҡырсып йөрөй башлағас, исем-фамилиям хатта ыштанһыҙ бала-сағаға ла мәғлүм булып, шөһрәт-абруйым артты. Сөнки закон ыстатъяларын ҡулда ныҡ ҡыҫып тотам: Сталин бабайға бурысығыҙҙы фәләнсә числоға тиклем үтәмәһәгеҙ, үҙегеҙ белгән асы Тоҙтүбә төрмәһендә тоҙға ултыртып, тере тирегеҙҙе тунармын, йөнөгөҙҙө йолҡормон, тип киҫәтәм. Шыңшый-шыңшый сығып китәләр ҙә юҡ ерҙән табып килтерәләр, ә миңә дан өҫтәлә...

Ә шулай ҙа йылдың йылы үҙ йылы өйөндә тормау, һыҙырым юллап ауылдан-ауылға һертәңдәү минең кеүек сыныҡҡан ҡорос кадрҙарҙы ла ныҡ йонсота икән ул. Тәржемәи хәлем хаҡында уйланып йөрөй торғас, башҡа идея төштө бит, әй. Ниңә әле, мин әйтәм, донъя малын дуңғыҙ ҡанылай туҙҙырыр ғына мәлемдә, никахлы ҡатыным менән айына бер күрешеп, минең һымаҡ илсе түрәләргә ауыл һайын никахһыҙ ғына өйләнеү йолаһы барлығын да онотоп, аҙғын кәкүккә оҡшап, кеше ояһына йәшерен генә йомортҡа һалып йөрөйөм? Баяғы йолаға ярашлы, өҫтәлмә рәүештә башлы-күҙле булыр саҡ!

Аҡыллы идея яралғас, үҙебеҙҙең ауылдың Өммөй ҡарсығы төштө бит иҫкә. Ҡыҙы шәп ине ҡәһәрҙең. Нисәмә егет шуның артынан йөрөп, үҙ муйынында Өммөй ҡарсыҡтың муйыл таяғын һындыртты. Бер мин түгел. Әммә инде минең ауылдан киткәнгә лә өс былтыр бит. Элекке Әжәрғәп менән хәҙергеһенең араһы – почти ер менән күк араһы. Өммөй ҡарсыҡтың ҡыҙы ла инде как раз -- кейәүгә сыҡмайынса бәҫәреп бара, тиҙәр. Тик әлегәсә әсәһенең һүҙенән ситкә тайпылмай, ти, диуана... Ҡыҫҡа ғына әйткәндә, үҫеп еткән олпатлығым, абруйым менән ҡарсыҡтың һушын алһам, никахһыҙ ғына ҡауышырға ҡыҙы ла ҡаршы килмәҫ – ағайыңдай малтабар егеттәр аяҡҡа уралып ятмай ул. Елле кеше, район кешеһе!

Өммөй ҡарсыҡтың ҡыҙы электән үк минең менән кешнәшеп бармай ине барыуын. Әле булһа түбәмдә әсәһе таяғынан ҡалҡыу иҫтәлек һаҡлана. Әммә текә ҡаяның да артынан менер юл ҡала. Ҡарсыҡ менән нисек тә бер ҡаҙанда бутҡа боҡорҙатһаҡ, ЗАГС-маҫ кәрәк, тип ныҡышһа ла, ҡарыулығын ҡыҙ ҡуйыны аша онотторторға мөмкин.

Райондың сәсалғысханаһында еткән түбәмде көҙәтеп, мыйыҡты ҡараға буятып, өр-яңы заграничный костюмымды кейеп, һары сусҡа күненән тегелгән быуаҙ портфелемде тотоп ауылға барып кергәс, үҙем менән шешәләш бригадир дуҫымдың ишеген ҡаҡтым. Аҡбашлыны уртаға алып үҙ-ара аңлашҡас, бригадир дуҫым юл һалырға Өммөй ҡарсыҡтарға китте, мин бригада конторанаһына йүнәлдем. Өҫтәл артында ҡайҡайып ҡына ултырам. Көтә торғас, тирләп-бешеп дуҫым да килеп етте.

-- Әжәрғәп иптәш, һары ҡатырға тышлы папкаңды асып, йыуан ҡыҙыл ҡәләмеңде ал ҡулыңа! – тине ул, ишек төбөндә һерәйгән ир-атты дәррәү тышҡа һөрөп. – Спектакль башлана!

-- Майланыңмы? Тәгәрмәс тәгәрләйме?

-- Зырылдап әйләнеп китте, хәҙер үк килеп етә!

-- Нимә тинең?

-- Мин, әлбиттә, үҙебеҙ һөйләшкәнсә, исемеңде әйтмәнем. Райондан килгән ҙу-у-ур кеше көтә, тинем.

-- Бик дөрөҫ майлаганһың, үҙеңдең дә ауыҙыңды майлармын. Элекке ул белгән Әжәрғәптең хәҙер кем икәнен күреп, күҙе маңлайына күсhен ҡәһәр төшкөрө ҡарсыҡтың!

-- Тап шулай!

-- Нимә тине һуң үҙе?

-- Райондан килгән ҙу-у-ур кеше кейәүең булырға самалай, тигәс, танауы шунда уҡ еҫ тойҙо. Артыңды уйла, ҡыҙыңдың йәше уҙып бара бит, тип тә нығыттым.

-- Муйыл таяғын да алманымы?

-- Юҡ, аныһын да онотто. Эсмәйме, тартмаймы, тигәс, фәрештәләй пак, тинем. Ҙур урында эшләүеңде тумбыттым. Мишкәт менән һинд сәйе табып бирерме һуң, тип шығырыҡлағайны, башыңдан аштырып өйөр, тинем. Ебене лә төштө, әй.

-- Маладис, ауыҙыңа бал да май!

-- Әнә килә үҙе, мин юйылып торайым! – тип бригадир сығып киткәйне, шул арала соланда Өммөй ҡарсыҡтың:

-- Ошондамы райондан килгән ҙур кеше? – тип дөңгөрҙәүе, ә бригадир дуҫымдың:

-- Ошонда, инәй, ошонда! Ул һине күптән зарығып көтөп ултыра! – тип йүпәләүе ишетелде. Мыйыҡты үргә ҡайтарып, быуаҙ портфелде лә өҫтәлгә ҡуйып, түрәләрсә олпат ҡиәфәтләндем. Ышаныс өсөн ҡаты итеп тамаҡ ҡырып ҡуйҙым. Өммөй ҡарсыктың йәнгә тейгән муйыл таяғы күренде тәүҙә ишек ҡыҫығынан. Түбәмдең инде ул шаҡшы ҡоралдан шаҡтай өҫтөн икәнлеген уйларға ла өлгөрмөнем, таяҡ хужаһының башы ишектән yртылаш тығылып, дүрт күҙ менән йөҙөмә текләне лә ҡарашы менән баштан-аяҡ үлсәне. “Әһә, мин әйтәм эстән, күрҙеңме буласаҡ кейәүеңдең кемлеген?! Иреп төшәһең хәҙер!”

Ләкин көтөлмәгәнсә килеп сыҡты:

-- Ah-ah, кешеме, тиһәм, Әжәрғәп икән дә!.. Теффү! -- Өммөй ҡарсыҡ, ишекте тыштан шартлата ябып, муйыл таяғының үсен солан иҙәненән алды.

Был ни хәл, какое право имеет?! Тимәк, Әжәрғәп тиклем Әжәрғәпте муйыл таяғын һыларға ла лайыҡлы һанаманы, аяҡ аҫтында тапалған үле таҡтаны ла минән өҫтөнөрәк күрҙе?!.

Ҡойолоп төшкән бригадир дуҫым хәле бөтөп килеп ингәндә таштай ҡатып өнһөҙ ултыра инем. Әллә кеше түгелме мин? Кем мин?!.

Сәнкем-Биктимер, 1963.

Ырымбур ысулы

Мин ғүмерем буйына район масштабындағы яуаплы эштәр башҡарҙым. “Утильсырье” агенты булып та, янғындан ҡурсаланыу инспекторы булып та, сәйханала мөдир булып та эшләргә тура килде. Аҡрынлап төбәк күләмендә абруйым артты. Аҙаҡҡы ваҡыт район ауыл хужалығы етештереү идаралығында яуаплы ғына вазифала йөрөнөм.

Быйыл, үҙегеҙ беләһегеҙ, күп кенә йылы урындарҙың штатын ҡыҫҡарттылар. Йәшермәйем, мин үҙем дә эсемә ут йотоп йәшәнем. Ләкин бушҡа янғанмын. Минең ише тәжрибәле эшмәкәрҙе кем ҡулдан ысҡындырһын!

Башлығым бер заман үҙ кабинетына саҡыртып алды ла ситләтеп кенә ҡайырҙы:

-- Шулай, Әжәрғәп Мөғәрәпович, һине беҙ яуаплы эшкә күсерергә булдыҡ, -- ти. – Беләһеңдер, хәҙер бөтә район күләмендә ырымбурса һарыҡ йөнө ҡырҡыу ысулын үҙләштереү кампанияһы бара, шуны юлға һалыу өсөн беҙҙән уполномоченныйҙар кәрәк. Әлхасил, беҙ һине, партиябыҙ ҡушҡан һәр эштә лә массаларҙы алға этәреүсе тапҡыр көс булараҡ, артта һөйрәлгән “Маяҡ” колхозына уполномоченный итеп тәғәйенләнек, ырымбурса ысулды киң йәйелдереүҙә тирә-яҡтың яҡты маяғы булырһың, тип ышанабыҙ.

Ни хәл итмәк кәрәк, йылытып алған ғаилә усағынан, уҫал булһа ла типмәгән бисәм ҡуйынынан ваҡытлыса ғына булһа ла нәүбәттәге мәртәбә ситкәрәк китеп йөрөү перспективаһы әллә ни күңелле түгел ине, түгелен, ә шулай ҙа сер бирмәй:

-- Мин – партия һалдаты, туған партиям ҡайҙа ҡушһа, шунда барырға әҙер! – тип, бер һүҙһеҙ ризалаштым. Етәкселек эшендә, урыҫ туғандар әйтмешләй, эт башын ашаған баш бит мин!

Колхозда зарығып көтөп кенә торалар икән – асыҡ сырай менән ҡаршыланылар. Артта һөйрәлгән, тиһәләр ҙә, арыу ғына мәҙәниәткә эйәләр – минең һымаҡ килгән-киткән түрәләрҙе ҡәҙерләп-һыйлап урынлаштырырға әҙәм рәтле ҡуналҡалары ла бар. Үҙемә айырым бүлмә бирep, йәнең теләгәнсә тор, ә ашарыңа ҡуналҡа ҡараусы апай бешерер, ҡулы аш-һыуға ипле! – тинеләр (ысынлап та шулай булып сыҡты). Электр машинкаһы менән һарыҡ ҡырҡыу маһирҙарына ферма мөдире үҙе алып барып таныштырҙы.

-- Бына һеҙгә, иптәштәр, етәксе, йәғни уполномоченный. Ырымбурса һарыҡ ҡырҡыу ысулын үҙләштереүҙә бөтә мәсьәләләр буйынса уға ғына мөрәжәғәт итегеҙ, тулыһынса буйһоноғоҙ. Был – юғарынан төшкәнфарман! -- тине.

Һарыҡ йөнө ҡырҡыусылар ун биш кеше. Бынамын тигән ун биш егет. Ысул яңы булғанлыҡтан, төрлөһө төрлөсә эшләй. Берәүҙәре мәхлүктең дүрт тояғын ҡуша бәйләп һыҙыралар. Икенселәре ҡуш тояҡлап көрмәйҙәр. Өсөнсөләре ергә дүрт ҡаҙыҡ ҡаҡҡандар ҙа йөн эйәһенең дүрт тояғын дүрт ҡаҙыҡҡа беркетеп баҫтыртҡандар. Ә бәғзеләре уғата әкәмәтерәк ҡылана: бәйләмәй-нитмәй, алғы тояҡтарын һыңар ҡулда услап тотоп, таҡта иҙәнгә эт шикелле бөкөрәйтеп ултырталар ҙа меҫкен малҡайҙы тумар кеүек тумарлатып йөрөтөп һыҙыралар. Шашынып күҙҙәре аҡайған һарыҡ баҡырмай ҙа, туламай ҙа. Күҙ асып йомғансы шәп-шәрә ҡала үҙе. Шулай ҡыланып маташҡан бер егет йораты, тештәрен йылтыратып, һораны:

-- Ошолай буламы ырымбурский метод?

Тәкәббергә уҫал итеп ҡараным, елегенә үткәҙерлек һеңдерҙем:

-- Варварский метод. Меҫкен хайуанды ихтирам итмәйһегеҙ! – тинем. Тегенең кәйефе ҡырылды:

-- Мин сменаға алтмыш һарыҡ ҡырҡам, бүтәндәр – егермене. Һеҙҙеңсә, нисек була һуң ул яңы метод?

Бына шунда уйға ҡалдым да инде. Ысынлап та, нисек була икән һуң ул ырымбурса ҡырҡыу ысулы? Дүрт тояғын ҡуша тоташтырыпмы, йәки икешәрләп кенәме? Дүрт тояғын дүрт ҡаҙыҡҡа ҡатыпмы, әллә ошо егет эшләгән кеүек

бөтөнләй бәйләмәйме? Ҡырылмаһа ҡырыҡ ысул, шулар араһынан тап ырымбурскийын. Башың ҡатыр! Район күләмендә күпме генә етәкселек эштәрен башҡарһам да, бындайын күргән юҡ ине. Беҙҙең ауылда ғүмер-илаһи һарыҡты йығып һалып, дүрт тояғын ҡуша бәйләп ҡырҡалар. Төбәгебеҙ Ырымбур ере тип аталғас, ырымбурса ысул да тап шул түгелме икән ни? Уйлағаным һайын әйләнде башым. Ахыр сиктә бер ҡарарға килеп, дүрт тояғын дүрт ҡаҙыҡҡа бәйләп ҡырҡыуҙы ырымбурса ысул итеп танытырға тәүәккәлләндем. Бындай ауыр саҡтарҙа мин кәңәш һорап берәүҙе лә борсомаҫҡа, кәрәкле ҡарарҙы үҙем эҙләп табырға яратамын.

Төшкө аштан һуң егеттәрҙе бер урынға өйөрөп, мөһим белдереү яһаным:

-- Иптәштәр, ошоғаса һеҙҙең күбегеҙ варварский ысулдар менән эш иткән. Меҫкен хайуандарҙы ыҙалағанһығыҙ, йонсотканһығыҙ. Ошо минуттан башлап ул вәхшилектәргә сик ҡуйыла. Ошо минуттан башлап бөтәгеҙ ҙә ысын ырымбурский ысулға күсә. Быға тиклем арағыҙҙа бер-нисә энтузиаст ҡына ырымбурса эшләгән икән. Ләкин бөгөн бөтәгеҙ ҙә шулай эшләй башлаясаҡһығыҙ. Нимәләрҙән хасил һуң ул ысын ырымбур ысулының асылы? Беренсенән, ул ергә ҡағылған дүрт имән ҡаҙыҡтан тора. Икенсенән, дүрт киҫәк йүкә бәйҙән ғибәрәт. Өсөнсөнән, һарыҡ иптәштең дүрт тояғын дүрт ҡаҙыҡҡа шаҡарып бәйләү мотлаҡ. Дүртенсенән, һарыҡ иптәште оҙаҡ интектермәй, йәһәт кенә йөнөн һыҙырып алыу...

Тояҡ бәйләмәй ҡырҡыусылар кәйефһеҙләнеп шаулаша. Баяғы, көнөнә алтмыш һарыҡты ҡайыҙлаусы ялтыр тешле егет, тупаҫ рәүештә тауыш күтәреп, телмәремде бүлдерҙе:

-- Ялған! Ырымбурский метод түгел был! Ысын ырымбурский метод – беҙ эшләгән метод!

Тояҡ бәйләп ҡырҡыусылар күберәк ине, берҙәм ҡубынып, сапсып сыҡҡандың ауыҙын ҡапланылар:

-- Шаулама, Кәрим! Һин кем дә, ул кем – уполномоченный һинән күберәк белә! – тинеләр.

-- Ҡаҙыҡ менән йүкәне ҡайҙан алырға? – Елкә ҡашыны берене.

-- Дә-ә-ә...бүре абламы...

-- Проблема тип әйт, һантый! – Зыялырағы төҙәтте.

-- Миңә ҡалһа, барыбер. Әммә нисә имән ҡаҙыҡ, нисә шәлкем йүкә кәрәгер икән?..

-- Ун биш урынға алтмыш ҡаҙыҡ, алтмыш киҫәк бәй кәрәк. – Күҙ ҙә йоммай иҫәпләп сығарҙы хисапсы. – Ысынлап та, уларын ҡайҙан табырға?

Ғүмерем буйына етәкселек иткәнемдә бындай ғына мәсьәләләрҙе сискәнем бар ине:

-- Юҡҡа башығыҙ ҡатмаһын. Хәҙер үк урманға барып, алтмыш төп йүкә ағасы ҡырҡып алып ҡайтығыҙ. Ҡабығы бәй булыр, һөйәненән ҡаҙыҡ осларһығыҙ. Уның имән булыуы не әбәҙәтелне! – тинем. Шунда уҡ ике ылауға ат ектертеп, һигеҙ кешене урманға ебәрҙем. Кискә табан ғына әйләнеп ҡайттылар. Иртәгәһен төшкә тиклем бөтә коллективым ҡурыс һыҙырыу, ҡаҙыҡ ослау менән шөғөлләнде. Төштән һуң ҡаҙыҡтарҙы ҡағып, һарыҡтарҙы бәйләп эшләй башлағас, ҡурыс бәйҙәрҙең эҫе көндә ҡулланырға ярамағанлығы беленде: ярты сәғәт эсендә кибеп

ҡаттылар ҙа кимерсәк һымаҡ шартлап һындылар. Көн тәртибенә яңынан бәй мәсьәләһе килеп баҫты.

-- Ҡабыҡтарҙың бөтәһен бергә төрөп, күлгә батырығыҙ, -- тинем. – Ике аҙнанан ул һалабаш шәлкем йүкәләнеп серейәсәк. Ә йүкә өлгөргәнгә тиклем кәрәкһеҙ ун машинканы туҡтатабыҙ...

-- Йәғни ҙә тәғәйен кемдәрҙе? – тип тағы сығынсыланы бер үҙе көнөнә алтмыш һарыҡты ыҙалап ҡырҡыусы Кәрим.

-- Тәғәйене, әлбиттә, малды ихтирам итмәүсе һеҙ үҙегеҙ һәм дә һеҙҙең кеүектәр!

-- Быға беҙ риза түгел! Беҙҙе туҡтатҡас, дөйөм эш тә туҡталасаҡ!

-- Социализм дәүерендә дөйөм эштәр туҡталмаҫ! Социализм кешеһеме һеҙ, әллә серек капитализм ҡалдығымы? – Ғурлапанды ғурлаһынан уҡ алдым. -- Әйтеп ҡотолоғоҙ!

-- Социализмдыҡы, әлбиттә... – тип шиңеп төштө ғауғасы.

-- Шулайғас, уполномоченный һыҙып биргән тура юлдан барығыҙ. Бөтәһе биш кеше ҡырҡасаҡ. Ҡалған унау уларға һарыҡ боттары тотоп торасаҡ. Ә һалабаш батыртырға бригадирҙан өҫтәлмә ике кеше һорап алырмын. Берҙәм тотоноғоҙ эшкә! – Һәм шунда уҡ, берәү йөн һыҙырған саҡта ике яҡтан тотоп тороу өсөн, һәр машинка эйәһенә икешәр ярҙамсы тәғәйенләнем. Кәримгә эйәргән егеттәрем, һуҡрана-һуҡрана, машинкаларын сөйгә элделәр ҙә, һарыҡтың алдынан – береһе, артынан икенсеһе ергә сүгәләп, һәр ике ҡулға икешәр тояҡ ҡыҫып тоттолар. Көндөкөн-көнгә эш шул рәүешле барҙы.

Ике аҙна уҙҙы, *ләкин* күлгә һалған һалабаштың йүкәһе ҡупмаған – төбө һалҡын шишмәле булып сыҡты. Ҡабыҡтарҙы алып, йылыраҡ күлгә батырҙыҡ. Шуларҙың сереп өлгөрөүен көткән арала, һарыҡ ҡырҡыуҙы һаман баяғы алым менән башҡарҙыҡ.

Һуңғы көндәрҙә мин ярҙамсылыҡҡа беркетелгән егеттәрем араһында ниндәйҙер ҡәнәғәтһеҙлек тыуғанын тойҙом. Тояҡ тотмаҫҡа, ә машинка йырлатырға уҡталалар ине, буғай... Өҫтәүенә, конторанан бухгалтер килеп, наряд яҙып киткәйне, бик түбән эш хаҡы аласаҡтары мәғлүм булды. Шау-шоу ҡупты.

Ығы-зығыны ишетмәҫ өсөн, фермаға көнөнә ике тапҡыр: иртәнсәк эш башлағанда һәм кис эш тамамлағанда ҡыҫҡа ғына арауыҡҡа килеп киткеләй инем. Көндөң ҡалған өлөшөн һалабаш һалған күл буйында, йүкә өлгөрөүен көтөп, балыҡ ҡармаҡлап үткәрҙем. Өс көн шулай шөғөлләнгәс, йөн ҡырҡыу эштәренең яҡшыға ыңғайлауы беленде. Инде мине килгән-киткәнемдә, ҡаштарын емереп түгел, яғымлы ҡаршылайҙар ҙа яғымлы оҙаталар, ә йөнө алынған һарыҡтарҙың һаны артҡандан-арта...

Күҙәтеп йөрөй торғас, бер ғәжәйеб хәлгә иғтибар иттем: көн дә көтөүселәрҙең береһе мин килер юлда ҡайҡайып киҙеү тора имеш. Хисапсымдан:

-- Был ни хәл? – тип ҡыҙыҡһынғас:

-- Эй ағай-ағай, шуны *ла* белмәйһегеҙме? Уполномоченный тиклем уполномоченныйға күл буйында, аҙып-туҙып йөрөгән ҡош-ҡортҡа тап булып, бер-берәй күңелһеҙлек килеп ҡуймаһын, тип ысын күңелдән хәстәрләүсе бит улар, -- тип ҡыуандырҙы. Тик шуныһы: хәстәрләүселәремдең һәр береһе, күл буйынан фермаға табан атлауымды абайлағас та, йөн ҡырҡыусылар эшләгән

һарай яғына йән-фарман дөнә. Шөбһәләнеп уҡталһам да, фермаға килеп етеүемә бөтәһе камил: тап мин ҡушҡанса, икешәр кеше тояҡ тота, бер кеше йөн һыҙыра. Еңел һулап, ҡәнәғәтләнеп сығып китәм тәбиғәт ҡосағына: эштәр бара, контора яҙа – шунан башҡа ни кәрәк? Өҫтәүенә, иртәгә тыуған көнөм, һәр төрлө етәкселек тәжрибәмдең дә егерме биш йыллығы... Ырымбур ысулын гөрләтеп алға ебәрһәм, бәлки, тағы ла бер баҫҡыҫҡа үрләтерҙәр?.. Шуға күрә юбилейымды үҙемә ышанып тапшырылған етәкселек вазифамда ең һыҙғанып йөрөп эшләп үткәрергә, һарыҡтарҙың йөнөн һыҙырып бөтөп, ырымбурса ысулдың уңыштары тураһында районға рапорт биргәс кенә, ғаиләмә ҡайтып, бөтәһен бер юлы байрам итергә тип тәүәккәлләндем...

Матур уйҙарға талып, бөгөн дә үҙ ваҡытында килгәйнем күл буйына, көтмәгәндә, хисапсымды осраттым. Минең һымаҡ уҡ, дөйөм эш өсөн көйөнөп, һалабаш ҡарарға төшкән икән. Һүҙҙән-һүҙ сығып, ырымбурса ысулдың социалистик ауыл хужалығында тотҡан бөйөк урыны, шуны уңышлы башҡарыу хаҡына шәхси мәнфәғәттәребеҙҙе онотоп торорға тейешлегебеҙҙе әйтә һалдым. Бына мин үҙем, мәҫәлән, бөгөн мотлаҡ өйөмдә -- ғаилә байрамында булыу урынына, янып-көйөп, ырымбурский ысул буйынса колхозығыҙҙы алға сығарыу өсөн көрәшәм, һеҙ ҙә мине тыңлап ҡына йөрөгөҙ, тинем.

-- А как же, уполномоченный һүҙе – беҙҙең өсөн закон! – тип йәнде тындырҙы хисапсым. Арауыҡ һөйләшеп торғас, хәҙер үк фермаға барасағымды белдергәйнем, ҡаушабыраҡ ҡалды:

-- Көндәге бара торған ваҡытығыҙ етмәне бит әле, иптәш Тоҙлоҡапов? – ти.

-- Дөйөм эште ҡайғыртып тынмай йөрәк – иртәрәк барам бөгөн, -- тим. Ҡушарлашып киттек шулай фермаға. Ғәжәп, көн дә был ваҡытта юлымда күҙгә дегәнәк булып төшкән әрһеҙ киҙеүҙсем күренмәй. Әллә шуғамы инде, хисапсым ныҡ борсола, мине арттараҡ ҡалдырып елергә самалай. Әммә мин дә төшөп ҡалғандарҙан түгел – һарайға ҡушарлап килеп керҙек. Индем һәм шаҡ-ҡатып ҡалдым: ун биш егеттең ун бише лә, ҡулдарында машинка сыжылдатып, ун биш урында һарыҡ йөнө алалар. Берәү ҙә тояҡ тотмай, барыһы тиң ҡырҡыусыға әүерелгән. Ул ғына ла етмәһә, һарыҡты бәйләмәгән килеш, әлеге Кәрим ҡулланған варварский метод менән ҡаҡ иҙәнгә ултыртып, тумарлатып ҡырҡалар. Башым әйләнде, күҙҙәрем тондо – ни хәл был?!

-- Отставить! – тип йән әсеһенән һөрәнләүемде һиҙмәй ҙә ҡалдым. Лағнәт төшкөрө машинкалар сытырҙап эшләй бирҙеләр, егеттәрҙең берҙәм хахылдап көлөүе яман ярҙы ҡолаҡты.

-- Был ниндәй башбаштаҡлыҡ?! Башығыҙҙы ашармын! – Бармаҡ янап аҡырҙым. – Иртәгә үк һалабашты күлдән сығарырға, дүрт тояҡты дүрт ҡаҙыҡҡа бәйләп кенә эш ҡылырға!..

Етәкселек вазифаларын күп йөкмәп, әсеһен-сөсөһөн күп татыған ғүмеркәйемдә тәү тапҡыр булараҡ йөрәгем бәлтерәне: күҙ алдарым ҡараңғыланып, коллектив алдында йығылып мәсхәрәгә ҡалмаҫ өсөн, мах бирмәй сығып киттем.

Күл буйында йөрөп кисте еткергәс, шомтайып ҡына ҡайтып керҙем бүлмәмә. Кәйефем ҡырылып, иртәгә күрәсәк сараларым тураһында уйландым. Баш – тубал кеүек, күңелдә насар тойғолар шауҡымы. Нисек итеп коллективты

хаҡ юлға күндерергә? Етәкселек абруйымды аяҡ астында тапатһам, үҙем тәҡдим итеп хаҡ юлға һалған, яныҫ-көйөп бойомға ашырған ырымбурский ысул һәләк буласаҡ, ә ул саҡта уполномоченныйлығымдан ни ҡала?..

Кемдер йыуаш ҡына ишек шаҡыны. Тупһала, күҙҙәрен мызылдатып, хисапсым баҫып тора.

-- Хәйерле кис, Әжәрғәп Мөғәрәпович! Һеҙҙе тыуған көнөгөҙ, бөйөк юбилейығыҙ менән ҡотларға рөхсәт итегеҙ!

-- Бәй, ҡайҙан белдегеҙ быны?

-- Хәләл ефетегеҙ, һеҙҙе һорап, телефондан конторағa шылтыратты: иртәгә тыуған көнө һәм юбилейы, әйтегеҙ, бер көнгә генә булһа ла, ҡайтып ҡыуандырып китһен, тине...

-- Юҡ! Тәүҙә -- ырымбурский ысул – йәмғиәт, шунан һуң ғына шәхсиәт! – тип ҡырт өҙҙөм, гәрсә бисәм әҙерләгән байрам табынына ҡайтып ултырғым килеп йөрәк башҡайы семетһә лә.

-- Аңлайбыҙ. Ә шулай ҙа һеҙҙең шанлы юбилей – ырымбурса ысулды алға этәреүсе сәйәси көс булып тора, тип һанаусылар күбәйҙе коллективта...

-- Әллә башҡаларға ла ысҡындырҙығыҙ?

-- Әлбиттә! Һеҙҙең байрам – бөтәбеҙ өсөн дә ҙур байрам! Әгәр шуны күрәләтә билдәләмәй ҡалдырһаҡ, тарих ғәфү итмәйәсәк, Әжәрғәп Мөғәрәпович! – Хисапсым, кеҫәһенән һурып, шешә ҡуйҙы өҫтәлгә. – Бөгөнгө абруйлы һүҙегеҙҙе ишеткәс, егеттәр бөтәһе һеҙҙең яҡлы. Хатта Кәримгә тиклем: иртәгәнән башлап уполномоченный ҡушҡанса ғына эшләйек, бөгөн кискә, күмәкләшеп барып, шуны үҙенә белдерәйек, тип ең һыҙғанып йөрөй.

-- Вәт шылмалар, баштан уҡ шулай кәрәк ине! – тинем, шөйлә күңелем күтәрелеп. Өҫтәүенә, хисапсым ике соҡортайға тегене ҡойоп булаша. Бындай көндө билдәләмәү эт ботонан да кәкере булыр ине.

-- Тоттоҡ, Әжәрғәп Мөғәрәпович, һеҙҙең кеүек илгә билдәле етәксенең бәхетле тыуған көнө, илгә иккән игелектәре өсөн!

-- Ырымбурса ысул өсөн!

Тағы ишек шаҡылдаттылар, ун биш кешелек коллективым, берәһе-бер ҡалмай, гөрләшеп килеп керҙе. Кәрим һәм уның егеттәре – иң алдан, сәскә услап тоткандар, кеҫәләренә йылтыр шешә тыҡҡандар. Һәр берәһе йылмайып күҙемә ҡарай, ҡулымды ҡаты ҡыҫа, тыуған көнөм менән ялҡынлы тәбрикләй.

-- Әжәрғәп Мөғәрәпович, беҙҙе ғәфү итә күрегеҙ инде, бөгөн генә, һынамаҡҡа, күрһәтмәләрегеҙҙе боҙҙоҡ – тояҡтарын тотмай, бәйләмәй ҡырҡып ҡараныҡ... – тиҙәр.

-- Ләкин ул барып сыҡманы, -- тине Кәрим. – Ырымбурский ысулдың иң дөрөҫө -- һеҙ күрһәткән ысул, ә һеҙ үҙегеҙ ул ысулдың атаһы икәнен аңланыҡ...

-- Ярар, -- мин әйтәм, -- ауыҙы бешкән -- өрөп эскән була инде был. Бынан һуң дүрт ҡаҙыҡҡа дүрт тояғын бәйләп ҡырҡырһығыҙ. Таң атыуға бөтәгеҙҙе һалабаш сығарырға ебәрәм!

-- Ур-раaa! – тип дәррәү күтәреп алды егеттәрем, булған бөтә соҡортайҙарға байрам шарабын ҡойоп. – Ырымбурса ысулдың атаһы Әжәрғәп Мөғәрәпович Тоҙлоҡапов йәшәһен!

-- Уның бөйөк тыуған көнө хөрмәтенә, иптәштәр!

-- Ырымбурский ысулдың дүрт ҡаҙығҡа дүрт тояҡ бәйләп ҡырҡыу алымына дан!

-- Ур-ра! Ур-ра!

Бәхетемдән башым Күккә тейерҙәй күтәрелдем. Бөтә шиктәрем, барлыҡ борсолоуҙарым ел осорған төтөн һымаҡ таралды. Вива, Әжәрғәп, вива, ырыҫ йондоҙоң йылмайҙы! Рапортымды юғарыға тапшырһам, Ырымбурса ысулдың атаһы, тигән затлы абруйым, яҡты маяҡ булып, районды балҡытасаҡ! Ура!

...Тамағым кибеп, башым сатнап уяндым. Тәүге фекерем – күлдән һалабаш сығартыу ине. Тик ниндәҙер сәйер тойғо йәһәт тороп китеүҙән тотҡарланы. Ни ғиллә был?.. Одеялымды битемдән алмайынса, шикләнеп ҡолаҡ һалдым. Ятҡан ағас карауатым, ябынған нәмәҫтәкәйем, хатта өйҙөң һауаһы ла йәнгә үтә ныҡ таныш -- өҫтөмдәге күлдәгем кеүек яҡын. Ишекте шартлата тибеп, дөңк-дөңк баҫып берәү инде – колхоз ҡуналҡаһының ҡараусыһымы? Улай тиһәң, һулышы башҡасараҡ, ә аяҡ тауышы мине һуштан яҙыр хәлгә еткерҙе.

-- Бөгөн торорға итәһеңме һин, юҡмы, һамҫыған сүлмәк? Тыуған көнөңә әҙерләгән табынға ла ҡайтмайынса, кемдәр менән типтерҙең? Берәй мәрйә менәнме?! Ҡояш төшлөккә еткән, ә һин һаман тамағыңды шарылдатып ятаһың. Ундағы ваҡытлыса вазифаға алдаштырып, бында урыныңа бүтән кеше алғандар, шул көйөңсә әллә ҡайҙа һөйрәлеп эсеп йөрөйһөң. Аҡыллы кешеләр бер урынға оялаһа, талпандай теше-тырнағы менән йәбешә, ә һин, ҡалталы хәйерсе, һаҡалың биленә еткәнсе күтеңә урын таба алмай, бер урындан икенсеһенә күсенеп йөрөйһөң. Олаҡ күҙемдән! – Хәләл ефетем бөркәнсекте тартып алып ырғытты, ботомдан һөйрәп төшөрҙө. Аҡылымды йыйырға ла өлгөрмәнем, гөп-гөп итеп, бер-бер артлы, арҡама ике утын ағасы ҡунды...

Кеҫәмдә хисапсым ҡулы яҙған ҡағыҙ ярпыһы ята:

“Ырымбурский ысулдың бөйөктәрҙән-бөйөк белгесе, ғәфү ит инде беҙҙе. Ғәжәп аҡыллы етәкселегеңдән талаҡтарыбыҙ ташһа ла, тыуған көнөңдә өйөңә таяҡлап ҡайтарырға тартындыҡ, ҡулдан килгәнсә һыйлап-хөрмәтләп, машинала ғына елдертеп килтереп ташланыҡ. Юҡһа егеттәр һарыҡ бәйләй торған ҡаҙыҡтарыңдың һәммәһен елкәңә һуғып һындырырға йыйыналар ине. Тәк ышту, хушығыҙ, ырымбурский ысулығыҙҙы һеҙҙе беҙгә уполномоченный-моченый иткән түрәләрегеҙҙең йөнөн алырға уңышлы ҡулланығыҙ!”

Аҫтараҡ, моғайын, Кәрим ҡулы менән йөмлә өҫтәлгән:

“Һанһыҙ һалабаш короле! Башыңа тай тинһә лә, кешегә аҡыл өйрәтергә өйөңдән сығып йөрөмә. Ҡысыулы аяҡтарыңды бик тә тыя алмаһаң, галстугың менән тышаулап ҡуй. Галстугыңды ҡыҙганһаң, беҙ һиңә тышау ишерлек йүкә ҡалдырҙыҡ”.

Бөтә коллектив ағзалары ыҫпайлатып ҡултамғаларын сәпәгән...

Аптырап, елкәмде тырнаным, ҡабат уҡып ҡараным. Шик юҡ, кәмә ҡомға ултырҙы...

Сәнкем-Биктимер, 01.09.1962.

Беҙ нисек сик мәсьәләһен хәл иттек

Тыуған ауылымда сельпоның сеймал әҙерләү пункты асылған, шунда эш башларға кадр эҙләйҙәр икән. Гәрсә вазифа бик ҙурҙан булмаһа ла, ризалығымды бирҙем. Ни тиһәң дә, үҙ ауылың – үлән түшәгең бит инде...

-- Һин, Әжәрғәп Мөғәрәпович, яуаплыларҙан яуаплы поҫка баҫтың. Ҡара уны, эшләгән зонаңа сапҡынсыларҙың сиңәртәй бармағы ла баҫмаһын! – тип ҡаты киҫәтте сельпо рәйесе үҙемде.

-- Ниндәй сапҡынсылар ул?

-- Сит зона әҙерләүселәрен әйтәм. Әҙерләү сезоны етһә, күгәүендән тешләнгән туҡал һыйыр кеүек, күҙҙәре аларып, сиктән бәреп инәләр ҙә халыҡта ятҡан барса тире-ярыны һыпырып алып китәләр.

-- Әһә, аңланым.

Ҙур ағас һандыҡ ултыртылған арбама йөнтәҫ арғымағымды егеп, зонамды байҡарға сыҡтым. Урам буйынса йөрөп, байтаҡ ҡына төймә, резинкә һаттым, байтаҡ ҡына һөйәк, йөн кеүек нәмәләр тейәп алдым. Ҡул арбаһына оло ике үгеҙ тирене һалып, аршин мыйыҡлы һимеҙ бер ағай килеп туҡтаны эргәмә. Мыйыҡ остарынан, яҙғы кәрниз буйы сосолҡо-боҙҙарынан тып-тып тамған тамсыларҙы хәтерләтеп, тир тыпылдап тама ине.

-- Кем, мырҙам, бынауы мөлкәттәрҙе ҡалҡытып арбаңа һал әле, -- тине ағай, ҡул һырттары менән алмаш-тилмәш маңлай тирен лыҫҡылдата һөртөп.

-- Миңә тире кәрәкмәй.

-- Бәй, нисек инде – кәрәкмәй? Мин уларҙы ҡайҙа ҡуйыр тиһең?

-- Уныһы – һеҙҙең эш. Беҙҙең сельпо тирегә муйындан күмелгән. Хатта 200 процентҡа. Ҡомалаҡ килтерегеҙ, ағай, ҡомалаҡ!

-- Уны, алайһа, ана теге тау артынан байҡағыҙ инде, Әжәрғәп мырҙам. Беҙҙең Ырымбур далаһында аҙашып, әрем башынан ҡомалаҡ һәрмәп йөрөмәгеҙ!

Ағай төртөп күрһәткән яҡҡа төбәлеп уйға ҡалдым. Тау артында беҙҙең ауылдың икенсе яртыһы урынлашҡан, тик ул башҡа өлкәгә ҡарай – туғайлы-урманлы зона. Тауҙың был яғы, йәғни беҙ – ҡылған далалы Ырымбур өлкәһенеке. Теге яҡта ҡомалаҡ шәп үҫә, беҙҙең яҡ һарыҡ тиреһенә бай. Ләкин ике яҡ әҙерләүселәрҙең дә юлында, ҡарлы ҡаратау булып, күҙгә күренмәҫ сик һыҙығы ята. Ә шулай ҙа морон төртөргә кәрәк.

Биләнтауҙың биленә күтәрелгәс, баҙаңҡырап, дилбегәне ҡыҫҡарттым. Минеке кеүек үк һандыҡлы арба теге яҡтан яҡынлап килә ине. Бына беҙ, ике күрше зонаның мөстәкил әҙерләүселәре, танауға танау төртөшөп, туҡтаныҡ. Ихлас хәл һорашҡан булдыҡ, әммә эстә бесәй тырнай, көсөктәр юрта ине. Күршем көрәк һаҡаллы, хәйләкәр күҙле урыҫ ҡарты икән.

-- Быйыл ҡомалаҡ харап ныҡ уңды, знаком, -- тине ул. – Пландың өс йөҙ өҫтөнә һикерттем. Тик бына тире мәсьәләһе хөртөрәк...

-- Ә беҙҙең яҡта, киреһенсә, тиренән тау өйөрлөк. Минең пландың ҡомалаҡ ҡына боҙоп тора...

Үҙ-ара аңлашып, күҙ ҡыҫыштыҡ.

-- Биләнтауҙы ашып, һеҙҙең яҡтағы знакомдарҙа сәй эсергә китеп барам әле... – тигән булды көрәк һаҡал.

-- Мин дә, эсем көтөрҙәп, берәй кеүәҫ-фәлән осрап ҡалмаҫмы, тип сыҡҡайным... Билән тау аша...

Дуҫтарса ғына яҙлығышып, зонабыҙҙың ҡапма-ҡаршы яғынан тауҙы төштөк. Билдәле: мин – ҡомалаҡ, көрәк һаҡал – тире тейәп ҡайтып киттек. Бисәм мине урыҫ агентынан тире бирең алып ҡалған яҡшы һиндостан сәйе менән һыйланы. Шикләнмәйем, көрәк һаҡаллы ла, сөскөрә-сөскөрә, минең хуш еҫле ҡара борос менән аш ашағандыр...

Оҙаҡламай, бүлмәм тынлығын ҡаты телефон ауазы ярҙы:

-- Иптәш Тоҙлоҡапов, кем рөхсәте менән һеҙ зонаға сапҡынсы индерҙегеҙ?

-- Беҙҙең складтар тире менән шығырым-тулы бит, Кем Кемович... Артабан ҡайҙа ҡуябыҙ уны?

-- Уныһы һеҙҙең эш түгел. Хатта сыҫкан тирене лә ситкә сыҡмаһын!

-- Барыбер дөйөм ҡаҙнаға керә түгелме һуң ул? Бесән өҫтөндәге эттәй ырылдап ятһаҡ, сеймал әрәм-шәрәм ителеп бөтөр бит?

-- Кемде өйрәтергә йыйынаһығыҙ?! – тип ғыжылданы телефон. – Аҡыллынан да аҡыллы баш булмағыҙ. Инструкцияларҙы күберәк уҡығыҙ, Әжәрғәп Мөгәрәпович! Юғиһә... – Трубканың шап итеп эленеүе ишетелде.

Шул уҡ көндә почтальон ике ҡағыҙ килтереп тотторҙо. Береһендә (үҙ сельпобыҙҙан) мине эштән бушатыу менән янау, икенсеһендә (көрәк һаҡал эшләгән сельпонан) кеше зонаһына сығып сеймал йыйыуҙы ҡәтғи рәүештә тыйыу беркетелгәйне. Ләкин ҡара борос менән һиндостан сәйе һаман үҙенекен итте: сеймал беҙҙе үҙе үк эҙләп килде. Тау артынан миңә -- ҡомалаҡ, ә көрәк һаҡалға беҙҙең яҡтан тире яуып ҡына торҙо. Ошоларға бәйле телефон уғата йышыраҡ һәм оҙағыраҡ, нәфрәтлерәк шылтырай башланы. Хәлдең үтә мөшкөлләнеүенән шөрләп, һандыҡлы арбама атландым да, тиреләрҙең артабан тегеләй шылыуын сикләр өсөн, тау артындағы юлды быуырға сик һыҙығына сыҡтым. Унда мине тире йөкмәгән әҙәмдәрем ҡамап алды, йоҙроҡтары менән янай башланы. Өгөт-нәсихәтемде ҡолаҡтарына ла элмәнеләр, ҡырмыҫҡалай ябырылып, тауға үрмәләнеләр. Мин, ярһып, йөнтәҫ атымды улар эҙенән саптырҙым. Тау артында ла шундай уҡ ҡиәмәт ҡупҡаны мәғлүмләнде. Бер яҡ – тире, икенсе яҡ – ҡомалаҡ тоҡтары артмаҡлап, ҡапма-ҡаршы килделәр ҙә тау түбәһендә йөҙгә-йөҙ төкәлештеләр. Мин үҙемдең көрәк һаҡал әшнәм менән күрештем.

-- Әмәл юҡ, знаком, -- тине көрәк һаҡал, -- халыҡҡа ҡара борос кәрәк.

-- Ә беҙҙекеләргә һиндостан сәйе танһыҡ.

Арбаларыбыҙҙы тау түбәһенә ҡушарлап ҡуйҙыҡ та, икебеҙ ике яҡтан сик һыҙығына үксә терәп, ифрат ҡыҙыу сауҙа итә башланыҡ. Ике яҡтан да, шау-гөр килеп, халыҡ ағыны урғылды...

Тиҙҙән елле-ямғырлы көндәр башланды. Беҙ, ике әҙерләүсе, яҡындағы туғайлыҡтан тал-ҡаҙыҡ ташыныҡ, ситәндән бик ыҡсым итеп ышыҡша -- уртаҡ келәт үреп ҡуйҙыҡ. Ишек башына уртаҡ вывеска элдек. Тыныс түбә аҫтында, бер тәүлек тә туҡтауһыҙ, уртаҡ сауҙа ҡошо ҡанат елпене. Аҙна араһында мин – ҡомалаҡ, ә ызнаком – тире әҙерләү планын арттырып үтәнек. Бәрәкәтле ысулыбыҙҙы илгә таратыу өсөн, дүрт тарафтың гәзит әһелдәре һуҡмаҡ

шымартты. Беҙҙең был һис көтөлмәгән уңыштан шаҡ-ҡатҡан башлыҡтарыбыҙ эштең төбөнә туҙ ҡуйырға ашыҡтылар. Күрше ике сельпоның да рәйесе бер үк ваҡытта ситән ышыҡша алдында пәйҙә булды, аптырауҙарын саҡ еңеп, сәләм биреште. Берсә, уртаҡ ишеккә, берсә, уртаҡ вывескаға ҡарап, баш сайҡап торҙолар.

-- Ҡәҙерле иптәш рәйестәр, һеҙ нисек уйлайһығыҙ, шәп сыҡҡан бит беҙҙең эштәр? – тип һораныҡ икебеҙ бер ауыҙҙан. Түрәләребеҙ, яуапларға ашыҡмай, елкә тырнанылар, уйланылар. Ләкин ике яҡтан тартылып тире, ҡомалаҡ йөкмәп килеп еткән һәм бер төркөмгә уҡмашҡан ағай-эне хор менән элеп алды:

-- Бик шәп сыҡҡан, бик шәп! Артабан да ошолай дауамлағыҙ!

Меҫкен түрәләребеҙ, халыҡ массалары алдында ҡарыулашырға баҙмай, баш эйҙе, аҙаҡтан ҡул биреште. Ҡурҡыныслы инструкциялары гәрсә кеҫәләрен яндырып ятһа ла, күренмәҫ сик һыҙығы өҫтөндә улар икәүҙән-икәү генә, ә яуап көтөп тороусы йәмәғәт иҫәпһеҙ күп ине шул...

Сәнкем-Биктимер, 1963.

Тағы ла сыландым

Исем-фамилиямды беләһегеҙ инде: Әжәрғәп Мөғәрәпович Тоҙлоҡапов буламын. “Маяҡ” колхозында ырымбурса ысул менән һарыҡ йөнө ҡырҡтырыу буйынса уполномоченный булып ятҡайным. Бына шундағы яуапһыҙҙар арҡаһында кәмәм ҡомға терәлде лә яуаплы вазифамдан ваҡытлыса ҡолаҡ ҡағырға тура килде.

Идаралыҡҡа меҫкен булып ҡына ҡайтып индем.

-- Ah-ah, Әжәрғәп Мөғәрәпович, кемде күрәм?! – Ҡолас йәйеп ҡаршыланы башлығым. – Ниңә сырайың һытыҡ?

-- Тишек кәмәгә ултырттығыҙ... – Үкһей бирep яуапланым. – Бындағы йылы урынымды ла алғандар...

Түрәм, яурынбашымдан баҫып, йомшаҡ урындыҡҡа ултырты:

-- Ҡайғырма, Әжәрғәп Мөғәрәпович, беҙ һине ситкә ҡағырға йыйынмайбыҙ. Урының алынһа ла, үҙеңде даими күҙ уңында тотабыҙ. А как же, шымарған старый кадр бит...

-- Тупар балта боҙ сабырға ла ярай! – тип ҡыҫтырҙым.

-- Эйеее... – Башлығым, уйланып, елкәһен ҡашып алды. – Кисә генә бер сельпоның рәйесе “һыналған, шымарған һәм әлегә буш йөрөгән номенклатурный эшмәкәрегеҙ юҡмы?” тип шылтыратҡайны: экспедиторҙары урлашып тотолған. Тимәк, социалистик ҡоролоштағы бер мөһим звенола тишек барлыҡҡа килгән. Тәжрибәле эшмәкәр булараҡ, беҙ һине шул тишеккә тығабыҙ.

-- Бөкө итепме?

-- Бөкө итеп.

Юкҡа әйтмәйҙәр икән шул, Хоҙайҙың ҡөҙрәте киң, тип. Ризалаштым. Йөкмәтелгән бурыстың тауҙай яуаплылығын аңлап, яңы урында үҙемде яңыса тоторға, экспедиторҙар тоҡомон хурлыҡлы бур исеменән ҡотҡарырға ҡарар ҡылдым.

Сельпо идараһында эшләүселәр яңы вазифам менән ҡотлап, минең ҡулды ҡыҫырға, яҡындан танышырға итеп ҡаранылар – бирешмәнем. Ауыл магазиндарына таратыу өсөн тауар ҡабул иткәнемдә склад мөдире *лә* яҡты йөҙө, таҫма теле менән эс-бауырыма үтеп инергә тырышты.

-- Минең янға аулаҡ бүлмәгә кереп сыҡ әле, бында һин яңы кеше бит – тауарҙы әйләнештә нисек йөрөтөү тураһында үҙеңә генә әйтәһе һүҙҙәр бар, -- тине. Тыңлап торған шоферым, бынан ҡәнәғәтһеҙләнеп, һәленеп төшкән оҙон мыйығының осон теле менән һәрмәне.

-- Беҙ уны һинһеҙ ҙә беләбеҙ. Иптәш экспедиторҙың башын әйләндермә! – тип мөңгөрҙәне ул.

-- Беҙ, тауар тейәгәс, аулаҡҡа инеп йөрөмәйбеҙ, иптәш мөдир, -- тинем мин. – Туранан-тура юлға сығабыҙ.

Шоферым, ҡәнәғәтләнеп, мыйыҡ осон ауыҙынан ыҫкындырҙы.

Иҫке “газик”, ҡултығы аҫтына бысаҡ ҡаҙалған суҫка һымаҡ әсе сыйнап, һикәлтәле юлдан ҡағыла-һуғыла тәгәрләне. Кузовта араҡы шешәләре зарланып сөңкөлдәштеләр, шәкәр тоҡтары, уфылдап, артҡа шыуҙылар. Ниндәйҙер ҡараңғы тау аралығында шоферым машинаны туҡтатты:

-- Яғыулыҡ тултырып алайыҡ.

-- Ниндәй яғыулыҡ? Сығыр алдынан ғына бензин ҡойҙоң бит.

Теге тағы теле менән мыйығын эләктерҙе:

-- Шешәлене әйтәм!

Аптырап, йүкәләнгән һары мыйыҡтарына баҡҡан килеш, ҡатып ҡалдым.

-- Шешәлеһен, илтеп еткереп тапшырғас, магазиндан алырһығыҙ, ә мин һатыусы түгел! – тинем.

Шоферым, хөкөм итеүсән баш сайҡап, мыйығын ауыҙынан ыҫкындырмаған килеш, ғыжылдатып стартерға баҫты.

Тағы *ла* юлдағы соҡор-саҡырҙы ухылдап, түбәләребеҙ менән кабина түбәһен түбәләп үттек. Бара торғас, түҙә алмай, шайтан арбаһын туҡтаттырҙым: өҙлөкһөҙ һикертеүҙән эсәктәрем, ҡырмыҫҡа иләүенә батҡан йыландай тыпырсынып, тәбиғи йомошома өндәй башлағайны.

Ә шулай ҙа сослоҡто юймаҫҡа кәрәк! Кузовка менеп төштөм, тауарҙарҙың теүәллеген барланым. Ҡыуаҡ төбөндә эш бөтөрөп килгәс, икенселәй менеп ҡараным. Ғәжәпләнеүемә ҡаршы, әле генә мөлдөрәшеп теп-тере ҡалған шешәләрҙең дүртәүһе, тулындыларынан арынып (ә һурғыслы баштары иһә бөп-бөтөн!), муйыны боролған ҡаҙ бәпкәләреләй бойоғошоп ҡалғандар. Ҡулдарым ҡалтыранып, берәм-берәм ояларынан һурып сығарҙым: һәр береһенең, ни тылсым менәндер, төбө уйылып төшкән.

-- *Л*әхәүәллә-ҡеүәтә, ярыҡ-йороҡ сүгәтә, быларға ни булған тағы?

Шоферым, ғәҙәтенсә, йыландай телен ян-яҡҡа ҡайҡайтып, ҡәҙимге улъяһын һәрмәне, әммә эләктерә алманы оторайған мыйыҡты. Уның ҡарауы ауыҙынан ҡырыҡ градуслының зәхмәт-еҫе бөркөлдө.

-- Был ни хәл?!

-- Бөтәһе лә законно – шито-крыто. Улар... ватылыу-түгелеү статъяһына ингәндәр, Әж... Әж... кем кемович...

-- Нимә, нимә?!

-- Шешәләрҙең боғаҙын юғалтма, тим, һурғыслы мисәттәренә зыян килтерә күрмә -- бөтәһе лә асылмаған килеш торһон. Акты-фактыға теркәгәндә кәрәк булыр, йәғни юл ҡазалары... Ҡайһылай ырғытып-һикерткәнде күрҙең бит.

-- Ә ни өсөн йәшник төбө ҡоп-ҡоро? Ҡайҙа аҡҡан ул араҡы? Тамағыңамы?

-- Аныһы не важны. Акты-факты яҙып списайт итеү өсөн, төбө әйләнеп төшөп, һурғыс мисәтле башының бөтөн ҡалыуы важны. Йәғни тряскы-мряскыла ватылып килгәндәр.

Шоферым инде машинаны уғата йәһәтерәк осортто: ҡайҙа – тигеҙлек, ҡайҙа түмәләс икәнен дә айырып булмай ине. Кабиналағы бензин еҫенә араҡы еҫе болғанды. “Дүрт шешәләген эсеп бөтөп тә, нисек бирешмәй был мәлғүн?” – тип аптырабыраҡ барғанда, хитлы сере лә асылды: әленән-әле ҡуйынынан резин грелка боғаҙын сығра ла, һыңар ҡулы менән бөкөһөн тағатып, йәһәт һемереп ала, еҫ-зәхмәте миңә килеп һуғыла. Һулышым ҡысылып, хәлем бөтөп, күҙҙәремде сырт-йомған килеш, артҡа салҡайҙым, ауыҙымды ярға һөйрәп ырғытылған балыҡ кеүек ҙур асып, көскә тын алып барам. Йәнем сығыр-сыҡмаҫ булып, донъя менән бәхилләшәм инде, тип ултырғанда, ауыҙыма йылы шыйыҡлыҡ ҡойолдо. Ҡороҡһоған ҡомһоҙ тамағым иһә, ҡытҡылдап, ашҡаҙанға мул ғына төшөрөп өлгөрҙө.

-- Һе! Күптән шулай кәрәк ине, кем кемович. Юҡһа, кейәүенән ҡурҡҡан гонаһһыҙ ҡыҙ кеүек, шешә төптәре тикшереп йөрөйһөң. Беҙҙең юлдарҙа башың ватылмаһа ярай...

Машина буръяҡланып аҡҡан кисеүгә килеп төштө, чих-чах сөскөрөп, урталыҡҡа етте лә тораташтай ҡатып ҡалды. Шоферым, һүгенеп, стартерҙы типкеләне.

-- Булмай! – тине. Сыйылдатып, тутыҡ кабина ишеген асты. Аяҡ аҫтына бысраҡ тулҡын бәреп керҙе. Атылып тышҡа сыҡтым, тубыҡтарымды ағын һыуҙан талатып, кабина башына үрмәләнем. Тәгәрмәстәр, таш түшәлгән ҡаты түтәнән тайпылып, яр ҡумшырығына төшкән, янға салҡайған кузов төбөндә һай ғына күләүек ойой, шырпы ҡабы, папирос төпсөктәре йөҙә. Шәкәр тоҡтары, ларҡайышып, һыуҙы ҡосаҡлап ята. Башымды тотоп уфтандым.

-- Зыян юҡ, зыян юҡ, -- тине шофер. – Аҙ ғына һемерә бирһендәр ҙә беҙ уларҙы, күтәреп, ҡороҡ урынға ҡуйырбыҙ.

-- Хәҙер үк күтәрәйек, һыу һеңә бит!

-- Һеңһен. Кибеү-мибеү менән һыуланыу-сыланыу беҙҙең кеүек сельпо эшмәкәрҙәренең тоғро союзнигы ул. Шәкәргә бер нимә лә булмай: һыуланыуҙан фәҡәт һимерә генә, йәғни вес арттыра, хе-хе-хе!

Шулай ҙа, ах-ух килеп, тоҡтарҙы кабина башына һөйрәп өйҙөк. Шоферым, шаптыр-шоптор һыуҙы кисеп сыҡты ла, шаҡтай олағып торғас, ҡайҙандыр эҙләп табып, майға ҡатҡан бер тракторист етәкләп килтерҙе.

-- Беҙҙе һөйрәтеп алырға риза был егет, тик тәүҙә аҙ-маҙ тамаҡ сылатыуҙы һорай.

-- Сылат грелкаңдағынан.

-- Грелкалағы – “НЗ”, беҙҙең кеүек юл кешеһенә ҡайтҡан саҡта кәрәгер.

-- Нишләргә һуң, алайғас?

-- Нишләргә, тип ни... – Йәшниктән бер шешәне һурып алып, башын аҫҡа әйләндереп тотто ла ҡулындағы гайка асҡысы менән сыртлатып бер сирткәйне, ғәжәп! -- түп-түңәрәк төбө әйләнеп төштө; үргә ҡалҡытып тотолған ватыҡ ситенән тәүҙә үҙе ауыҙ итеп, ҡалғанын трактористың, башын салҡайтып тотоп, тамағына ҡойҙо. – Пор-рядок, булдыҡлы егет икәнһең! -- Бушанған шешәне, ҡупҡан төбөн беркетеп, кире йәшниккә -- ояһына ултыртты ла бөтөн төплө икенсеһен һурып алды.

-- Етәр, башымды ашатаһың бит!

-- Һыуҙа сыланып сыҡҡандан һуң кем ҡалтырап ултыра – һинме, минме? Температураңды ҡырыҡ градуслыға күтәрмәһәң, һыуыҡ тейҙереп үлһәң, эт тә ашамаҫ башыңды! – Гайка асҡысы сырт итте лә үҙегеҙ белгән ҡырыҡ градуслы ауыҙыма ҡойолдо. Тәнемә таралған эҫелектән иҙерәп, кузовта әлһерәнем. Ни хәл итәһең, тауыҡтай күшеккәйнем шул...

Шарылдап трактор һөйрәне, ҡороға сығарып ҡуйылған машина дырылдап ҡуҙғалып китте. Көллө кәүҙәм, тартып торған тирмәндең иләге өҫтөндәге көрпәләй, иңке-тиңке аунаҡларға тотондо, кузов төбөндәге дәрйә, шыбырҙап, ярыҡтарҙан һарҡыны, кабина башынан төшөрөп һалынған тоҡтар өҫтөнә һуҙылғайным, сәңгелдәктәй бәүелтте...

Мин уянғанда, кисә төшлөк тәңгәлендә байыған Ҡояш яңы сығып килә ине. Хәйерһеҙ машина таныш түгел магазин алдына килеп морон төрткән, шоферым кабина эсендә ер-күк йыртып хырылдап ята. Усым менән түбәһен дөбөрҙәткәс, көсәнеп башын ҡалҡытты, алйыған күҙҙәрен сөршәйтеп, һис ни аңлай алмай оҙаҡ текләне лә аңына килде:

-- Ҡайғырма, тауарҙарың теп-теүәл. Мин уларҙы кисә үк магазинға тапшырҙым, бына накладной-ҡағыҙы. Ни бары ун биш шешәнең генә, сутырмаҡлы юлға сыҙамай, төптәре әйләнеп төшкән дә бер тиҫтәләп балыҡ консерваһы кәрәсин мискәләре араһына ҡыҫылып иҙелгән. Ҡурҡма, беҙҙең яҡта законлы хәл был. Ватылыу-кителеү статъяһына индереп акты-факты төҙөһәк, ошо аҙнала үк списайт итерҙәр.

-- Һин... һин... элекке экспедиторҙар менән дә ошолай ҡыландыңмы?! – Йөрәкте үтәләй ҡапыл бер нәмә сәнсте, һулышымды ала алмай, кузов төбөнә бөкләндем. Баш осомда таныш грелка боғаҙының ғорҡолдауы ишетелде...

Өс көн үтеүгә инде мин, бер нисә тиҫтә төпһөҙ шешә, төрлө миҡдарҙа һыу һеңдергән шәкәр, тоҙ өлгөләре теҙеп һалынған өҫтәлгә күҙҙәремде сөкөрәйтеп, следователь ҡаршыһында ултыра инем.

-- Был әйберҙәр һеҙгә таныштыр, граждан экспедитор?

-- Таныш. Быларын һыу сылатҡан...

-- Үҙегеҙҙе сылатмағанмы һуң?

Өндәшмәнем. Элек һыуға батһам, геләп генә тымау йонсотор ине. Был юлы танауым иркен тын алып ултырам. Сыланманыммы икән ни? Әммә яуапҡа тарттырыусым, күҙҙәремә уҫал текләп, “сыланғанһың!” тип сәпәргә ниәтләй...

Сәнкем-Биктимер, 31.08..1964.

Характеристика

Прокурор бүлмәһенән абруйҡайым шаҡтай сыланып сыҡтым. Һиҙгерлегемдең һәм йылғырлығымдың тайшаныуы әлегә тәүтапҡыр булғанлыҡтан, мине ысын имән эскәмйәгә ултыртманылар-ултыртыуын. Ауыл клубының ябай ҡарағай эскәмйәһенә генә тегеп хөкөм ҡылдылар. Йәмәғәт хөкөмө минән ватылған, сыланған сельпо тауарҙарының хаҡын ҡайтартырға һәм һиҙгерлегемде алты айлыҡ һынау аша үткәрергә ҡарар сығарҙы. Әлбиттә, минең ише кадровый эшмәкәр өсөн был бик ауыр ине. Шулай ҙа билде турайтып, иркенләберәк тын алдым, табан аҫтына ҡаскан йөрәгем үҙ урынына ултырҙы.

Етәкселек итеү талантымды халыҡ бәхете хаҡына артабан нисегерәк сәскә аттыртыу тураһында уйланып, өй генәмдә шаңкеберәк ята инем, сельпо идараһына саҡыртып алдылар.

-- Кем, Әжәрғәп Мөгәрәпович, -- тине рәйес, йөҙөмә күтәрелеп баҡмаҫҡа тырышып, -- һеҙҙең артабан да экспедитор булып ҡалыуығыҙ ҡулайлы түгел. Иҫән-имен саҡта был тирәнән табанығыҙҙы ялтыратыу хәйерле...

Өндәшмәнем. Рәйес иһә күлдәк иҙеүемде йыртып олоуымды, ҡалтыранған ҡулдарым менән һауаны ҡосоп, салҡан әйләнеп төшөүемде көттө, буғай: графиндан болҡолдатып һыу ҡойҙо ла йәһәт кенә алдыма шыуҙырҙы.

-- Хәстәрлекләп ҡайғыртыуығыҙ өсөн рәхмәт, -- тинем. – Тик, үкенескә ҡаршы, аҡыллы күрһәтмәләрегеҙҙең аҙаҡҡы пунктын үтәй алмайым.

-- Нисек инде улай?

-- Шуп-шулай.

-- Тимәк, уйығыҙ – һәмишә экспедитор килеш ҡалыу?

-- Юҡ, һеҙҙең иң беренсе урынбаҫар булыу, ҡәҙерле иптәш рәйес!

--Ә?! -- Түрәмдең сикә тамырҙары туҡмаҡтай тумырайып бүртенде, маңлайына һыҙлауыҡлы тапма тирҙәре ҡалҡты. -- Как это так?!

-- Вот так! Минең бында юғарынан – һеҙҙең серек конторaны һипләтергә төшөрөлгенлегемде онотмағыҙ! Ҡулға-ҡул тотошоп бергә эшләһәк...

-- Бррр!.. – Түрәм, өҫтөнә бер сүмес һалҡын һыу ҡойғандай, сирҡанып баш сайҡаны. – Уйлайһы ла булмағыҙ! Һеҙҙең ише ишәк сумары урынбаҫарым булһа, мине генә түгел, бөтөн сельпоны сылатыр, йә булмаһа тамырынан ҡоротор. Һеҙҙең кеүек арҡыры тыуған мәхлуҡты мин, Моталлап Зәғәфурановичтың ҡош телендәй ҡағыҙын күтәреп килмәһәгеҙ, сельпо тирәһенә уҡ атыр араға ла ебәрмәҫ инем. Алйот мин, алйот! – Түбәһеңдәге өс бөртөк ҡылын йолҡоп бөтөрә яҙҙы. -- Ә Моталлап Зәғәфуранович минән дә алйотораҡ: осраған бер берәҙәккә ҡултамғаһын һалып фатиха бирә!

-- Һеҙҙең алйотлоҡҡа шикләнмәйем, -- тинем. – Быны әле яңы ғына теҙгән дикломацияғыҙ иҫбатлай. Әммә-ләкин Моталлап Зәғәфуранович тураһындағы һығымтағыҙ минең аша юғарыға барып етһә, сикәгеҙҙең һуңғы бөртөк төктәрен дә ҡырау көйҙөрмәҫ тимәгеҙ. Үҙем ишетеп торҙом!

Рәйесемдең алҡымы көсөргәнешле тартышып, борҡ-борҡ иткән хәтәр ауаз сығарҙы. Графиндан стакандың күҙенән аштыра ҡойоп, ауыҙына шапылдатып түңкәрҙе лә, ике усы араһына “алйот” башын ҡыҫтырып, йомшаҡ арҡалы креслоһына ауҙы.

-- Ишетеп торҙоғоҙ бит, йәмәғәт хөкөмө һеҙҙе вазифағыҙҙан бушатырға ҡарар сығарҙы, -- тине хәлһеҙ.

-- Шул уҡ ваҡытта мин фәҡирегеҙҙе үҙегеҙҙең ҡул аҫтында алты ай буйы тәрбиәләргә хөкөм ҡылды. Ә быны үтәмәккә иң ҡулайлы юл – мине үҙегеҙгә иң беренсе урынбаҫар итеп алыу: һәр ваҡыт ҡул аҫтығыҙҙа булырмын.

-- Бррр!.. Быуынһыҙ урынға бысаҡ салаһығыҙ, Әж... Әж... Мөғәрәпович! Әгәр бик тә сельпоға тамырланғығыҙ килһә, егеттәрсә, яҡшылыҡ менән килешәйек. Теләйһегеҙме, мин һеҙҙе идараның үҙенә ҡарауылсы итеп ҡуям?

Көмөш портсигарымдың өс баһадир һүрәтле ҡапҡасы шартлап асылды. Ауыҙға оҙон мөштөклө папирос ҡаптым, иренеп кенә, өрлөк аҫтына зәңгәр мунсала элдем:

-- Батмай. Номенклатуралағы һыналған кадровый етәксене мәғәнәһеҙ файҙаланыу була был.

-- Алайһа, юғарыға китә торған йәшниктәргә йоморткa тултырыусы итеп?

-- Батмай, юғарылығымдан түбән!

-- Һммм... һммм... – Түбәһен ашығып тырнаны. – Беләһегеҙме Ильичтың электр лампалары килеп етмәгән беҙҙең төбәктә социализмды балҡытып сәскә аттыртыу өсөн кәрәсин шәмдәренең бөйөк ролен? Кәрәсин ларегына һатыусы итеп?

-- Батмай! – Тартып бөтмәгән папиросымды рәйес бушатҡан стаканға бураҡтырҙым. – Йә беренсе урынбаҫар, йә хәҙер үк Моталлап Зәғәфурановичҡа шылтыратам!

--Һөмһөҙ! – Һөҙөргә килгән бүгәй кеүек күҙҙәрен яман аҡайтып, ҡапыл ҡалҡынды ла йомарланған йоҙроғо менән өҫтәлгә ҡаты һуҡты. Терт-терт баҫып, эргәмә яҡынланы, ҡулымдан һөйрәп торғоҙоп, ишекте төртөп күрһәтте:

-- Вооон бынан! Эҙегеҙҙе неперегеҙ, Әж... Әж... Ғәләмәтович!

Бойороғон ҡолаҡҡа элмәһәм дә, йәшермәйем, күҙ алдарым ҡараңғыланды: өтөк сельпо рәйесенең һуҡ бармағы һыналған кадр Әжәрғәп Мөғәрәпович Тоҙлоҡаповҡа ишек күрһәтһен, имеш. Етмәһә, исемде лә хөрмәт итмәй бит әле! Бындай туңбаш менән нисек бергә эшләмәк кәрәк!

-- Һеҙ минең кем икәнде белерһегеҙ әле, -- тинем, көмөш портсигар ҡыры менән рәйес өҫтәлен шыҡылдатып, -- Ауыҙ тултырып Мөғәрәпович тип әйтергә лә өйрәнерһегеҙ. Бик тә белгегеҙ килһә, һеҙҙең кеүек тиҫкәре бәндә етәкләгән идарала ҡалырға мин үҙем дә ҡаршы! Етәкселек даирәһе киң – ҡайҙа ғына барып морон төртһәм дә, ҡосаҡ йәйеп ҡаршылаясаҡтар, һеҙҙән һорап тормаҫтар! Ә кәрәкле яҡшы характеристиканы, һеҙ бирмәһәгеҙ, юғарынан да ала алам! Моталлап Зәғәфуранович һау булһын!

Кабинет һәм коридор ишектәрен ашыға-ашыға ҡайырып, рәйес үҙе артымдан йүгереп сыҡты:

-- Әжәрғәп Мөгәрәпович, туҡтағыҙ әле, туҡтағыҙ! Вәт беҙ иҫәр баштар, ә! Юҡҡа нервы туҙҙырып ултырғанбыҙ! “Һеҙҙең сельпонан китәм” тип баштан уҡ әйтһәгеҙ ни була? Ысынмы был?

-- Һеҙҙең кеүек киртекбаш кәртәһенән, ҡулымдан килһә, ракетаға атланып ҡасыр инем.

Тупаҫйәндең ауыҙы киң йырылды, хатта ҡосаҡлап уҡ алды үҙемде:

-- Вәт маладис Әжәрғәп Мөгәрәпович, мең-мең рәхмәт һуңғы һүҙегеҙ өсөн! Тимәк, беҙҙе яратмайһығыҙ? Вәт татлы һүҙ! Һеҙҙең кеүек талантлы кадровый етәксегә хәҙер үҡ, бынамын тигән итеп донъялағы иң яҡшы характеристика тултырып бирәбеҙ. Беләбеҙ, беләбеҙ, а как же! Һеҙҙең кеүек киң масштаблы эшмәкәрҙе кем белмәһен! Әйҙәгеҙ, өҫтәл ҡырына кире инеп ултырып, дуҫтарса ослайыҡ эште!

Ысынлап та, дуҫтарса һаубуллаштыҡ. Бындай характеристика менән барыусыға һәр ҡайҙа ла ишек асыҡ!

Сәнкем-Биктимер, 1964.

Ғәҙелһеҙлек

Ауылыбыҙҙың бәләкәй генә магазины бар, шунда төнгө ҡарауылсы булып урынлаштым. Ваҡытлыса, әлбиттә, -- экспедитор сағымдағы йәмғәт хөкөмө ҡарарының алты айлыҡ һынамыш осорон үткәреп ебәреп онотоу һәм оноттортоу өсөн генә. Юғарылағылар ҙа иҫәңгерәй бирһендәр, тип, кеҫәмдәге алтындай алтын характеристикамды ҡулланыуҙы алдағы имен көндәргәсә ҡалдырып торҙом – сыланһам да ҡоро сығыусан Әжәрғәп Мөгәрәпович Тоҙлоҡапов бит әле мин!

Йәйге төндәр ҡыҫҡа, тиҙәр бәгзеләр. Ләкин ул миңә йылдай оҙон тойола. Уйлай-уйлай уй ҡалмай, тарта-тарта тәмәке янсығыңды таҡырлайһың. Ошо ҡәһәр төшкөрө ауыр төндәр мине тәрән мәғәнәле фәлсәфәгә керергә, көмөш портсигарлы нәҙек папиростан төңөлөп, бармаҡ йыуанлыҡ төрөлгән тәмәке тартырға ла өйрәтте.

Мин шулай фараз итәм: атайыбыҙ Сталиндың кешеләрҙе бик ҙур механизмдағы шистирнаның (йәғни һырлы тәгәрмәстең) бик бәләкәс шөрөбөнә тиңләүе инде иҫкерҙе. Хәҙерге заманда һәр кем үҙен баяғы ҙур шистирнаның шөрөбө итеп түгел, ә *шистирнаның үҙе* итеп тойорға тейеш. Шистирнаны беләһегеҙ: ул күп тешле һәм шундай уҡештәре булған икенсе шистирнаны ғына әләктерә ештәренә. Минеңсә, кешеләр ҙә шулай булырға тейеш. Йәғни: *мин һине әләктерәм, сөнки һин мине әләктерәһең. Һин мине әләктермәйһең, сөнки мин һине әләктермәйем.* Ҡыҫҡаһы, *үҙ күлдәгең тышындағыһын тоймаһын йылы тәнең.* Йәғни, үҙеңә ҡағылмаһалар, башҡаларҙың күҙен соҡоп маташма. Ағайығыҙға һуңлабыраҡ килгән алтын аҡыл был. Әгәр ҙә баштан уҡ шулай булһам, экспедитор сағымда уҡ баяғы хөкөм залындағы ҡаты имән эскәмйәгә ултыртмаҫтар ҙа ине минең кеүек социализм өсөн фиҙакәр йәнле кадрҙы...

Бына шундай минең был донъяла кешелек вазифаһы тураһындағы алтын уйҙарым. Ә икенсе мәсьәләгә йәғни тәмәкегә килһәк, һуңғы ваҡыттарҙа Черчилль һымаҡ ауыҙ тултырып баяғы ураулы тәмәкене -- сигара тартыуҙы хуш күрәм. Кем

өсөн нисектер, әммә төнгө ҡарауылсыларға ул бик уңай. Бер тоҡандырып алһаң, ярты төн буйына танауың аҫтында төтәй. Серәкәйҙәрҙән дә һаҡ, йоҡоға ла өшкөткөс. Тик кистәрен йүнһеҙ малайҙар ғына һис тынғы бирмәй миңә. Өйөрө менән сабышып киләләр ҙә, сигарама ҡул һуҙып: “Черчилль бабай, торонбаш давай!” – тип теңкәгә тейәләр.

Ә ҡайһы бер баҫлыҡтырғыс ауыр төндәрҙә ошо йыуан сигара ла араламай хәйерһеҙ йоҡо зәхмәтенән. Көндөҙҙәрен үҙ йортомдоң эштәренә мауығып йөрөгәс ни, ҡара төндә керпек ҡаҡмай йәмәғәт милкен һағауыллап ултырыуы ҡыйыныраҡҡа төшә. Мылтығыма таянып ултырып ҡалғыштырғылай торғас, һиҙҙертмәҫтән күҙ эленеп киткеләй. Төнгө уйын уйнап йөрөгән йәшүҫмер, ошонан файҙаланып, мылтығымдың көбәгенә услап саң тултырып китә. Йә булмаһа иҫке сепрәк, тауыҡ йөнө тығыслай. Иртәгәһен үҙемә, һуйҙан тал менән көргөп, сәғәттәр буйына таҙартырға тура килә. Сыбыҡ тотоп һары таңдан малдарын көтөүгә ҡыуған ыбыр-сыбыр, ауыҙҙарын йырып, эргәмдә тексәйеп торалар, осоношоп сыйнайҙар:

-- Черчилль бабай, мылтығың быуаҙынымы?

-- Черчилль бабай, һин әллә саң менән атаһыңмы?

Их, атаһы ине ла үҙҙәренең осаһына тоҙ менән! Тик өндәшмәйем, тештәремде ҡыҫып, вазифамды башҡарам. Соҡсонғанда көбәк эсенә өрөп, бер көлтә саң туҙратыуым ифрат кәйефләндерә ҡарағолаҡтарҙы, сырылдашып, ямғыр алдынан ҡурпып сыҡҡан баҡа балаларылай, арылы-бireле һикерешәләр:

-- Бабай, тимерлеккә барып, мылтығыңдың көбәген урталай телдерт – таҙартырға уңай булыр.

-- Юҡ, алай түгел! Көбәген бөтөнләй алдыртып ташларға кәрәк – атырға барыбер эшкашмай бит!

Шунан һуң миңә, атылған ҡарт бүрегә, атыу ҡоралының иң әһәмиәтле өлөшө -- ағас приклад менән элмәк ҡайыш икәнен, ә көбәктең кәрәкмәгәнен төшөндөртөргә итәләр.

Ҡайһы төндәрҙә һиллегемдән яман әсе төтөнгә сәсәп уянам. Бындай осраҡтарҙа мылтыҡ көбәгемдең осонда ниндәй ҙә булһа иҫке бишмәттән һурып алынған алама мамыҡ төтәп тора...

Бер мәртәбә магазинға төшөп талап та киттеләр, әммә зәһәр еле миңә ҡағылманы – “Уголовный кодекс” тәңгәлендә, мөрйәм ҡыйыш булһа ла, төтөнөм тура йөрөй бит. Сөнки ҡараҡ тауарҙарға мин ултырған ишек яғынан түгел, ә арткы стена аҫтынан нигеҙҙе һүтеп ингән. Ә сельпо инструкцияһында төнгө ҡарауылсы ишекте, ишектәге йоҙаҡты һәм ишеккә йәнәшә тәҙрәне күҙ ҡараһылай һаҡларға тейеш, тиелгән. Мин бурҙарҙың магазин артында мәшәкәтләнеүен үҙ ҡолағым менән ишетеп ултырҙым, әммә посымды ташлап китергә баҙманым. Мылтыҡ шартлатып өркөтөргә итһәм дә, атылманы – яҫауын һурып алғандар ҡыҙырмыштар. Хәйерлегә ла булғандыр, сөнки шистирнаның тештәре минекенә эләкмәне бит... Яуап биреү мәсьәләһенә килгәндә, беҙҙең яҡта кодексты беләләр: арт яҡтағын күрмәүгә йә ишетмәүгә йәй көндәрендә -- ҡараңғы төн, ҡышҡыһын буран ғәйепле булып ҡала.

Ун өсөнсө числоға ҡараған хәйерһеҙ төндө бигерәк тә ныҡ талығып ҡаршыланым. Кистән үк күҙҙәрем бөтәште: биғәйни, әсе ҡамыр һылағандар!

Ваҡыт-ваҡыт ҡулдарым бушаҡланып, мылтығымдың “дөңгөр-р!” итеп таҡта болдорға тумарлауы ғына тертләтә ине. Ахыр сиктә, түҙә алмағас, “йоҡо-батша”ны алдаштырырға иттем. Тупһаға буш йәшник түңкәрҙем дә, өҫтөнә ларҡайып (ауа башлаһам уянырмын!), яҫы арҡам менән йоҙаҡты ҡапланым. Тимер рәшәткәле тәҙрә ләв яурыным тәңгәлендә: ҡайыра ҡалһалар, “йоҡо-батша” аяҡланып ҡасасаҡ. Баш осомда түбәне ҡуптарһалар, балсыҡ ишелеп төшәсәк. Һәр хәлдә, мин һаҡлаған алғы яҡтан “эш” башлау мәғәнәһеҙ. Артҡы стенаны тоташлай күтәреп алып китһәләр ҙә “не мое дело!” йәғни...

Арҡаны ныҡҡа терәгәс, хәйерһеҙ Черчилль тарта торған әлеге йыуан сигараны алып ҡаптым ауыҙға. Әйләнәмде ҡуйы төтөн сырманы, ҡанығып зәһәр семелдәшкән серәкәйҙәр мине ташлап ҡастылар...

Август төнө бит: таң һыҙылып килгәндә өшөп уяндым. Күҙҙәремде тырнап асыуға, шикле ҡыштырҙау салынды салт ҡолаҡҡа. Ишекте, йоҙаҡты, тәҙрәне барлап алдым – иҫән-һауҙар. Йәшнигемә баҫып, тишек һыулыҡтан ҡыйыҡ аҫтына күҙ йүгерттем. Ләхәүәллә-ҡеүәтә! – арт яҡлап түшәм таҡтаһын ҡуптарып төшкәндәр! Тауарҙарҙы берене өҫтән һона, икенсене аҫтан ҡул ялғай...

Күҙҙәремде сытырҙатып йомдом, “шап!” итеп кире ултырҙым. Йоҙаҡты арҡам менән ҡаплап, мылтыҡты ҡулға алдым. Мин һаҡлаған алғы яҡтан йәмәғәт мөлкәтенә шайтан да үтеп кермәйәсәк!

Яуыз бәндә, дөпөлдәп, ергә һикереп төштө, әшнәһенә нимәлер мөңгөрҙәне. Мин иркенләп тын алдым, йөрәк ҡағышым тигеҙләнде. Шөкөр, был яҡтан умырмағандар -- посым имен-аман ҡалды!

Тик иртәрәк шатланғанмын икән шул. Тауыҡ мейене эскән әҙәм аҡтығы, арт яҡлап һыҙаһы урынға, арҡаһына оло тоҡ артҡан килеш, кирза итекле аяҡтары менән айыуҙай алпан-толпан баҫып, салғыйыма ҡағыла яҙып китте, йөҙөн күрһәтмәҫ өсөн башына кейгән ала-ҡола капрон ойоҡтоң магазинға күрше һалам түбәле өйҙә йәшәгән Әпкәләй бисәһенеке икәнен таныным, әммә эште тәрәнгә ебәрмәҫ өсөн күҙемде йомдом, ирендәремде ҡымтыным – милиционер йә тәфтишсе түгелмен бит! Шул уҡ Әпкәләй бисәһе ойоғоноң һыңары менән ҡапланған ер йотҡор әшнәһе хатта танауыма сиртеп үк үтте.

-- Постовой, борсолма, һиңә ел-ямғыры теймәҫ. Әммә телеңде тешлә, юҡһа башһыҙ ҡалырһың! – тип киҫәтә үҙе, тауышын ныҡ үҙгәртеп, танауына сөй ҡаҙалғандай тыңҡышланып. Әммә Әжәрғәп ағаңды, урыҫ туғандар әйтмешләй, “на мякине не проведешь!” – аяҡ тауыштарынан уҡ таныйым һәм баяғы киҫәтеүен дә урынлы тип һанайым.

Ах хәйерһеҙең, ярылып ҡалған эҙҙәресе, эҙҙәре! Милиция килгәс, эттән еҫкәтеп булһа ла, уларҙы бит мин ултырған алғы яҡтан, хатта минең эргәмдән үк табасаҡтар! Өҫтәүенә, һурып ебәреп тынысланырға итһәм, юҡҡа сыҡҡан бит ауыҙымдағы кистән ҡапҡан сигарам!.. Йөрәкте, өшөтөп, бесәй тырнай башланы. Кисекмәҫтән, хәҙер үк, ошо секундта уҡ мылтыҡ шартлатыу мөһим! – кемдәр икәнен белмәһәм дә, посымдан иле ләв таймай, арттарынан атып ҡалдым, тиермен. Тикшереп ҡараһалар, мылтыҡ көбәгендә бөгөн генә ләүкегән дарының саф ыҫы булырға тейеш!

Көбәгем, ғәҙәттә, ун тапҡыр сағылтҡас ҡына ата торғайны. Ә был юлы, үс иткәндәй, ғәҙәти шул нормаһына ла һыйыша алманы, шайтан! Күккә тоҫкап, ун

тапҡыр сағылдырҙым, ун бер, ун ике... Ун өсөнсөгә саҡма сағыр алдынан, кинәт кенә абайлап, кистән үҙем ауыҙыма ҡабып алған һәм таң атҡансы юҡҡа сыҡҡан баяғы хәйерһеҙ сигараның, ҡыҙыл ут быҫҡытып... көбәк осонда төтәп тороуын күрҙем. Күрҙем һәм... саҡма телен тартырға ла өлгөрҙөм – туптан атҡандағылай гөрһөлдәне. Көбәк эсенән саң, төтөн, әллә нәмә осҡондары ләүкеп күккә һибелде. Сигарам, “зыр-р-р!” итеп хәтәр һыҙғырып, юғарыға сөйөлдө, һауала ҡыҙыл дуға һыҙып, магазинға терәлә яҙып торған, ябыу һаламы ҡорғаҡһыған баяғы Әпкәләй-мөртәт йортоноң ҡыйығына ҡаҙалды. Ҡоролоҡло йәй буйна ямғыр күрмәгән һалам, “һә!” тигәнсе, күккә оҙон ялҡын теле һуҙҙы, урамда шау-шоу ҡупты. Битендәге бисәһе ойоғон һыпырып ташларға ла өлгөрмәгән, ике ҡулына күнәк тоткан Әпкәләй, “пож-жаааp! Ярҙам итегеҙ!” тип яман аҡырып, урам аша һиртмәле ҡойоға дөндө; шашынып артынан килеп еткән бисәһе унан ойоғон һалдыртып алды ла осаһына берҙе типте. Күҙ асып йомғансы янғынды һырыған халыҡ уҡа күнәкләп һыу ҡойорға кереште; ҡыйыу егеттәр, тәҙрә рамдарын ҡуптарып, эскә үттеләр ҙә Әпкәләйҙең кейем-ҡаралтыһын тышҡа бираҡтырҙылар. Мин дә юғалып ҡалманым, магазиндың таланыуы, тоҡ йөкмәп ошо ут сыҡҡан тарафҡа ыңғайлаған бурҙарҙың артынан атып ҡалыуым тураһында илгә ишеттереп разбой һалдым. Дружинниктар эркелеп, магазинды һаҡ açтына алдылар, ә береһе Әпкәләйҙең тышҡа ырғытылған йорт ҡаралтылары араһынан магазин тауарҙары төйгөсләнелгән тоҡто һөйрәп сығарҙы...

Янғын һүндереүселәр килеп етеп, өй ҡыйығын ялап алған ялҡын баçтырылғас та халыҡ һис таралманы; магазин алдында төркөм-төркөм йыйылып, аптыраштан баштарын болғай-болғай, телдәрен сыртылдата-сыртылдата гәп ҡорҙолар:

-- Бына һин, әй, ә! Осраҡлы янғын ҡараҡты тотторҙо бит.

-- Өйө янмаһа, ептең осо һыуға сумаһы икән!

-- Осраҡлылыҡ та ярҙам итеп куя икән шул!

Кемде генә тыңлама, бөтә һүҙ шул осраҡлы янғын хаҡында бара. Әйтерһең, быға төнгө ҡарауылсының тырнаҡ ҡараһындай ҙа өлөшө кермәгән. Ғәҙелһеҙлек иҙҙе йәнемде, һарыуымды ҡайнатты, ҡан тамырҙарымды утлы ҡурғаштай көйҙөрҙө -- һис кенә лә түҙеп торғоһоҙ ине.

-- Дундуктар! Бик тә белгегеҙ килһә, ул янғынды мин сығарҙым, мин! – тип ярһып һөрәнләүемде һиҙмәй ҙә ҡалдым. Әйткән һүҙ – атҡан уҡ, уны, артынан ҡыуып етеп, кире ҡайтара алмайһың. Көллө йәмәғәт шым ҡалып тыңланы мине. Хатта аҡһаҡалдарына тиклем һуштан яҙыр хәлгә етеп, ауыҙҙарын киң асып бөртөк-бөртөк һүҙҙәремде аулауы кинәндерҙе йәнемде: мин сәбәпсе ҡараҡтың тотолоуына! Йөрәктәге шөһрәт ҡылын шайтан сиртеп, тешләргә тейешле телемде сиселдергәс, үҙ-үҙемде белештермәй тағы тирҙем дә һалдым. – Һеҙ, бәлки, был уҙаман-ағайығыҙҙы төндә йоҡлап ултыра тип белəһегеҙҙер? Юҡ инде, кустыҡайҙарым, ағайығыҙҙың ике күҙе лә һәр саҡ асыҡ ул! Ағайығыҙ, ул, үҙ посында сыҫкан шырт иткәнен дә күреп-ишетеп ултыра. Ағайығыҙ, ул, бик тә белгегеҙ килһә, Әпкәләйҙең бурлығын тәүтапҡыр ғына күрмәй!

Һәм ғәжәп хәл: дружинниктар мине, яратып-маҡтау урынына, ҡулымдан эләктереп алып, ауыл Советына һөйрәнеләр. Шул уҡ көндә наган аҫкан ике милиционер килеп, бур Әпкәләй менән бергә мине лә алып киттеләр. Юл буйы

башымды баҫып бойоғоп барҙым: ни өсөн был бәләгә тарыным әле мин? Әллә ҡәһәрле ун өс һанының шауҡымымы? Булһа ла булыр шул. Был ун өсөнсө числола миңә бөтөнләй эшкә сыҡмаҫҡа – ауырып өйҙә ҡалырға кәрәк булған. Йәки мылтығымдың саҡмаһын ун өсөнсө тапҡыр сағылдыртмаҫҡа ине... Әйтеүҙәренә ҡарағанда, социалистик йәмғиәт өсөн мин -- Әпкәләйҙән дә күберәк зыян килтергәнмен булып сыға. Йәнәһе оғролокка “бармаҡ аша ҡараған”мын. Ә яуаплы вазифаны еренә еткереп ентекле үтәүемде, посыма беркетелгән алғы стена, ишек, тәҙрә, йоҙаҡтарҙың иҫән-имен ҡалыуын береһе лә иҫәпкә алырға теләмәй. Ғәҙелһеҙлектең аръяғына сыҡҡан ғәҙелһеҙлек был!

Сәнкем-Биктимер, 15.12.1962.

Билсән

Күҫәктәй тәмәкеһен тешләп, зәһәр хәмер ене һуҡҡан йәш үҫмер колхоз идараһы соланына бәлкелдәп килеп ингәйне, касса алдында сиратҡа баҫҡан ағай-эне берҙәм ҡалҡынып ҡараны. “Төтәтмә, малай аҡтығы, атаңдан өлкәндәр барҙа оял бәләкәй!” – тип кем дә булһа әйтер төҫлө ине уға. Әммә тел ҡалҡытыусы булманы. Ағайҙар һәм апайҙар, инәйҙәр һәм олатайҙар, тын ҡалып, ҡырын ғына күҙ һалып, артабан ни булырын һағаланылар. Күпте белгән кешеләй, ике күҙен сөкөрәйтә ҡыҫып, үҫмер иң арттағы бабай эргәһенә килде.

-- Хи-хи-хи! – тип кәйефләнде эш юҡтан эш табып елкә ҡашып торған ағай кеше – пожарник Фәйзулла. – Самай настаяшшый егет булғанһың бит, ҡустым Ғилмияр, нисә йөҙ грамды һелтәнең?

-- Беҙ ул грам-мрамдарҙы иҫәпләмәйбеҙ! – Үҫмер танау аҫтынан мығырҙаны. Пожарник Фәйзулла көслөрәк хихылданы:

-- Һәй маладис Ғилмияр! Әйткән һүҙең уҡ икән!

-- Бындай ирҙән сикүшкә лә йәл түгел! – Элеп алды кәрәсин ташыусы Ғәйзулла. Ә маҡтаулы Ғилмияр, тәмәкеһен пох-пох төтәтеп, бабай башына зәңгәр салма ураны:

-- Ҡартлас, ниңә кәкерәйеп ҡаттың?

-- Пенсиямды ала килгәйнем, улым.

-- Баҫыу артындағы йәннәткә китер сағыңда аҡса кәрәк булдымы?

-- Кәрәк шул әле, улым...

-- Кәрәкһә, бар, өйөңә ҡайт та, әбейеңде ҡосаҡлап, мейес башына менеп ят. Пенсияңды, үҙең тегендә барып еткәс, телеграф менән һалырбыҙ!

Бабай, күҙҙәрен сырт-сырт йомоп, ҡылғандай аҡ һаҡалын тартҡыланы. Йәмәғәт кеткелдәшеп көлдө.

-- Һәй, сос телле лә һуң беҙҙең Ғилмияр! – Тел шартлатып һоҡланды пожарник Фәйзулла. – Телә лә һала мәгәр!

-- Һуя ла ҡаплай, тиген! – Күтәреп алды кәрәсин ташыусы Ғәйзулла. Ғилмияр, бала әтәстәй ҡиҡырайып, касса эргәһенә үтте:

-- Ниңә һаман асмайҙар был мәмерйә тишеген?!

-- Кассирҙың ҡулы теймәй – вареньеләп сәй эсә, -- тине пожарник Фәйзулла.

-- Юҡ, бында ул. Иҙән ярығына йүгергән баҡыр тинен юллайҙыр, -- тип ялғаны кәрәсин ташыусы Ғәйзулла. Ғилмиярҙың ҡаштары емерелде:

-- Ҡанымды бик ҡыҙҙырһа, баҡыр-маҡырҙарын сылтыратырмын әле мин уның!

Ғәйзуллалар, Ғәйзуллалар хихылдашып, кеткелдәшеп көлдөләр. Ғилмиярҙың йоҙроҡ төйҙәһе касса тәҙрәһенең ҡапҡасын төйҙө. Эстән кассир ҡыҙҙың һуҡраныуы ишетелде:

-- Дөбөрҙәтмәгеҙсе! Ведомоска ҡул ҡуйылмаған, председателде көтәбеҙ, тип әле генә аңлатҡайным даһа үҙегеҙгә!

-- Давай аҡса! Беҙ башҡаһын белмәйбеҙ! – тине пожарник Ғәйзулла.

-- Һәм белергә лә теләмәйбеҙ! – Йәһәт элеп алды кәрәсин ташыусы Ғәйзулла.

-- Һәй ридикүлле һайыҫкан! – Ғилмиярештәрен шаҡырҙатты, һелтәнеп, тәҙрәнең йоҡа фанера ҡапҡасын ҡайырып ырғытты. Кассир ҡыҙ, нәфрәтле ҡыҫкырынып, тәҙрә тишегенә иҫәп-хисап төймәлеген һөйәне, йүгереп сығып китте. Сираттағылар аптырап баш сайҡанылар.

-- Кантур ләтсәһе! Ерле-юҡҡа егет кешене “хулиган” тип хур итә! – Ҡорғаҡһыған һаламға ут ебәрҙе Ғәйзулла.

-- Был һүҙе өсөн, Ғилмияр ише егет түгел, мин йығылып үлерлек! – Кәрәсин һипте Ғәйзулла. Ғилмиярҙың көллө кәүҙәһен ҡапыл ярһыу ҡалтыратты, тәҙрәнән ул төймәлене төртөп осорғайны, уныһы кире кереп ултырған ҡыҙҙың күҙҙәрен күгәртте. Эстә лә, тышта ла шау-шоу ҡупты. Эштең хөрткә боролоуын һиҙенгән ағай-эне йылдам ситкә тайпылды, ярһыған егеттең яңғыҙ үҙен ҡалдырып, солан ишеге төбөндәрәк өйөрөлдө. Әле генә булып үткән ғәҙәлһеҙлек дер-һелкетте күңелдәрен:

-- Ах, ҡыҙый йәл!

-- Их! Милиция юҡ, милиция!

-- Кассирҙың битен ҡанға туҙҙырҙы бит, әй!

-- Ҡулдарын шаҡарып, арт һабағын уҡытырға ине хулигандың!

Ағайҙар һәм апайҙар, инәйҙәр һәм олатайҙар, ярҙам көтөп, тирә-яҡҡа борсоулы ҡараш аттылар. Ә иҫерек үҫмер уғата яманыраҡ боларҙы. Шөйлә замандар уҙғас, идара йыйыштырыусы апай үҙе барып саҡырғас, ахылдай-ухылдай, идара ҡарауылсыһы сулаҡ Рәхим бабай килеп етте, кемдеңдер башына ҡундырыу өсөн мейес ҡаҙнаһынан кирбес ҡуптарып маташҡан баламуттың ҡулдарын артҡа шаҡарҙы. Бәләнән шулай арынғас, ауылдаштар, берҙәм еңел һулыш алып, ҡабат тәҙрә эргәһенә баҫтылар. Пожарник Ғәйзулла менән кәрәсин ташыусы Ғәйзулла ла, хөкөм итеп баштарын сайҡай-сайҡай, үҙ урындарына торҙо. Йәмәғәт аңында көслө нәфрәт уты дөрләне:

-- Вәт хулиган, әй, ә?! Көпә-көндөҙ һәм күрәләтә эш кешеһенә ҡул күтәрҙе бит!

-- Билсән кеүек сәнсте!

-- Милиция ни ҡарай? Йолҡоп ташланһын билсән!

Сәнкем-Биктимер, 1964.

Хөрмәт күҙлегенән ҡарағанда

-- Мин был сельпо ҡоҙғононоң ауыҙын ҡайырырмын! – Үҙ алдына һөйләнде Хөрмәт, устарын ыуғылап. – Минең ҡулға килеп ҡапһа, тауарға хаҡ өҫтәп һатыуын да, итәк аҫтынан оҙатыуын да онотор бер юлы!

Ул күп йылдар һике аҫтында саңланып ятҡан төймәле иҫәп-хисап ҡоралын – счетын һөйрәп сығарҙы, саңын өрөп осороп, төймәләрен шаҡ-шоҡ уйнатты. “Белеп һайланылар мине! Был төймәләр, был бармаҡтар үҙ заманында бөтә түрәҡараны бейетер ине! Тарамышын өҙөрмөн ул Лотфулла һатыусының!” – тип, кинәнеп мыйыҡ һыпырҙы. Бер ҡултығына кенәгә, икенсеһенә төймәле счет ҡыҫтырып, магазинға китте. Лотфулла һатыусы уны ишек төбөнә үк йүгереп килеп ҡаршыланы:

-- Әйҙүк-әйҙүк, ҡоҙа, әйҙүк! Күптәнән биреле көтәм мин һине, ҡоҙа. Нишләп килмәй икән, мин әйтәм. Һин ҡоҙамды эрвизиә рәйесе итеп ҡуйғандарын ишеткәс, түбәләрем Күккә тейҙе. Кисәгенәк кенә әле, бәләкәс улыңды урамда осратып, башҡынаһынан һыйпап һорашып торҙом. “Атайың менән бергәләп, мәмәй ашарға бараһыңмы беҙгә?” – Мин әйтәм. Аптырап ҡалманы, шылма малай: “Атайым барһа – барам, ҡасан саҡыраһың?” – ти бит, әй... Бер табаҡтан ашауҙы онотоҡ шул, ҡоҙа, оноттоҡ! Донъя мәшәкәттәренә биреldек, һинең ише йөрәгемә яҡын бер килке ағай-эне-уҙамандарымды табынға йыйып, һауыт-һаба сайпылтып, күңел асып алырға ла ниәт ҙур ҙурын, ҡоҙа. Ирешербеҙ, Аллаһы бойорһа, изге ниәткә, ирешербеҙ... Эрвизиәне мин уны, ҡоҙа...

-- Мин һиңә инде ҡоҙа түгел, ә сельпоның һайлап ҡуйылған ревизия комиссияһы рәйесемен! – тип ҡаты киҫәтте Хөрмәт. Йөҙө, ҡыш зәһәренән ҡатҡан көҙгө батҡаҡлы юл һымаҡ, һыуыҡ һәм ҡырыҫ ине.

-- Йә ярай... Эш алдынан бөйөрҙәрҙе сәйгә йөҙҙөртөп алабыҙмы әллә, ҡоҙаҡай? Иң яҡшы индийский сәй бешергәйнем...

Хөрмәт, шартлатып, счет төймәһен тартты:

-- Күлдәгеңдән сыҡма, һатыусы иптәш, туңырһың! Мин бында һинең менән сәй эсергә килмәгән. Башлайбыҙ иҫәп-хисапты!

-- Ярай-ярай, ҡоҙа, бик ярай. Башлап ебәрәйек, алайһа, ҡоҙа.

-- Тағы ла бер ҡат әйтәм: мин һиңә ҡоҙа ла, моҙа ла түгел был урында!

-- Булды-булды, рәйес иптәш, булды.

Ишеккә типке һалып, тауар иҫәпләргә тотондолар. Счет төймәләре, шаҡ-шоҡ таҡмаҡлап, кәштәләр тирәһендә бейетте һатыусыны. Тауарҙарын прилавка өҫтөнә ташый-ташый, йән тирҙәре сыҡты. Ләкин күңеле көр ине:

-- Өйөр һөйгән – көйөр, тигәндәй, яңғыҙ үҙең генә килеп бик шәп иттең әле ҡоҙа... һем... рәйес иптәш. Ул сейле-бешеле эйәрсендәреңдән ярҙам – һуҡыр тин көмөш һиңә!

-- Ниндәй эйәрсендәр хаҡында лығырҙайһың?

-- Эрвизиә комиссияһы ағзаларын әйтәм, ҡоҙа. Бысағыма ла кәрәкмәй улар, һөйрәлткеләр!

...Прилавка аçтынан ярты йəшник дефицит -- ирис кəнфите килеп сыкты. Төрнəк ҡағыҙына бесəй башы һүрəтлəп биҙəлгəн татлыҡайҙарға теклəп, уйланып торҙо Хөрмəт. Уның баяғы бəләкəсе, Хөппөлгəрəйе, йомолоп осор ине был иристəрҙе күрһə! Ауыл магазинын һирəк байҡай торған тəмлекəс. Тикмəгə генə илдəн йəшереп тотмағандыр Лотфулла...

Ə уныһы иристəрҙе услап алды ла, ашыҡмай ғына, ашлыҡ елгəргəн кеүек, йəшник өçтөндə ҡомарлатты:

-- "Кис-кис" тип атала был, ҡəһəрең! Малай-шалайҙың ауыҙына ҡаптырһаң – телен йота ла ебрə инде!

-- Һем... Минең баяғы бəләкəс тə бик ярата "Кис-кис"те... – Хөрмəт, уйланып, ауыр көрһөнөп ҡуйҙы.

-- Һи ҡоҙ-а-а, яратмаған кеше бармы ни уны? Ирис-иблис ул, сабыйҙың ғына түгел, олоһоноң да эсен тишмəй. Бер бөртөгөн генə ҡапһаң, супылдатып һурып көнө буйы туҡ йөрөйһөң. – Лотфулла шул ыңғайҙа уҡ бер дана иристе əрсеп, арандай ауыҙына ырғытты, икенсеһен Хөрмəтулланың ирендəре араһына ҡыçтырҙы. – Ҡап инде, ҡоҙа, ҡап, ҡабып ал. Əстерханский емештəн эшлəнгəн был!

Тик игелеге көтөлмəгəн ҡаршылыҡҡа осраны:

-- Оятһыҙ! Ем еçкəтеп кенə елендəн тартырға, иçəүəн һыйыр тип белдеңме мине? Мəмəйеңде тауыҡҡа сығарып һип! Тфү! -- Хөрмəт кəнфитте төкөрөп үк ташланы.

-- Бəй-бəй-бəй... Ололарҙан-оло башың менəн ниңə мине былай рəнйетəһең, ҡоҙа? "Оторо башҡа аш бирһəң, ике күҙеңə йəш бирер", тигəндəре ошо икəн. Быны бит мин һиңə фəҡəт баяғы бəләкəсеңдə һөйөп, бəләкəскенəңдең атаҡайын йəнемдəй яҡын күреп кенə ҡаптырттым.

-- Ярар-ярар, ялағайланма!

Хөрмəт сөйҙəн плащын алып кейҙе. Хəтһеҙ күп эшлəгəйнеләр -- киске аш ваҡыты ине – ҡайтырға сыҡтылар. Магазин ишеген йоҙаҡлап, пломба һалып торғанда, Хөрмəттең бөйөрөнə төрттө Лотфулла:

-- Яратам мин һинең ҡаратанау Хөппөлгəрəйеңде, ҡоҙа, яратам. Йылан аяғын киçкəн сая сабый ул! Ундайҙарҙан ирис-мирис йəл түгел!

Хөрмəт, эйəген алға сөйөп, туҡ өйрəктəй ҡайҡайыбыраҡ атланы. Почта тəңгəлендə туҡтап, тышҡа ҡайырып асылған ишек быялаһынан үҙ шəүлəһен ҡараны. Ҡапыл сырайы һытылды.

-- Дəəə... Костюмды яңыртырға кəрəк, туған! Ил күҙенə ҡаш булдыҡ бит инде беҙ. Килешмəй былай! – Үҙ алдына һөйлəнде.

Өйгə ҡайтып, сисенеп түргə уҙғас, Хөрмəт, аш өйө яғында, бисəһенең күгəрсендəй гөлдөрлəүен ишетте:

-- Хөппөлгəрəй, бəпесем, кил əле бында! Бына атайың беҙгə, плащ кеçəһенə тултырып, ниндəй тəмле ирискалар апҡайтҡан! Ҡосаҡла, үпəс ит атайыңды, бəпесем!

-- "Кис-кис"! "Кис-кис"! – тип сыйылданы "бəпес", Хөрмəт яғына туптай атылып килеп сыҡты. Ауыҙында əле ҡағыҙы ла əрселеп өлгөрмəгəн ике ирис күбекləнеп тора ине. "Алйот, хəҙер үк төкөрөп ташла!" – тип аяҡ тибеп əйткеһе килде Хөрмəттең, ləкин сая "бəпес" уның муйынына аçылынып өлгөрҙө. "Атаҡайым "Кис-кис" апҡайтҡан, "Кис-кис", -- тип, супылдатып, Хөрмəттең

эйәген, танауын үбә башланы. Шуның менән кеҫәһенә абайлатмай ирис һалған һөмһөҙйәнгә асыуын да һүрелтте. “Нисек итеп сабыйҙы мәхрүм ҡылмаҡ кәрәк? Мин дә кеше бит әле” тип уйға ҡалды Хөрмәт. Кисен ҡатыны янында йомшаҡ түшәккә һуҙылғас, Лотфулланың ошо ҡылығын хәтерләп, йоҡлай алмай ятты байтаҡ...

Уның карауатты шығырҙатып уңлы-һуллы әйләнеүенән уянып, ҡатыны талғын өндәште:

-- Ҙур кеше булдың, аламаң ҡойолоп йөрөүҙе бөтөр инде -- өҫтөңә костюм йәһәтлә.

-- Ҡайҙан алып йәһәтләйем? Юл баҫырға сығайыммы?! – тип мығырҙаны Хөрмәтулла. Кеҫә төптәре тишеклеген иҫәпкә алмай шыҡырыҡлай был бисә...

-- Йөрөгән ерҙә йүрмә эләктереп йәшәй аҡыллы кешеләр... Бына Шаһибәрәк ҡайнаға...

Хөрмәт, уфтанып, икенсе яғына әйләнде...

Иртәгәһен магазинға ревизор Хөрмәт, яуа алмай яфаланған болоттай, ҡобараһы осоп килде. Беренсенән, быуынһыҙ урынға бысаҡ салып бисәһе маҙаһыҙлаһа, икенсенән, төндә күлдәксән көйөнә тышҡа сығып, тымау эләктергәйне.

-- Абау-абау, ни күрәм, ҡоҙаҡайым, ни күрәм? Әллә берәй сир-фәлән йоҡторҙоңмо? -- Өтәләнеп-сәбәләнде Лотфулла, уның тәгәрмәс тапап йәмшәйткән ҡомғандай емерек йөҙөн күреп. Яуап урынына Хөрмәт, көллө магазинды дер-ҡалтыратып, бик-бик әсе сөскөрҙө.

-- Абау-абау, киҙеү ҡапҡан бит һиңә, ҡоҙаҡайым! Хәҙер үк шифалы сәй эсеп ебәр, хәҙер үк мәлгүнде ояһынан ҡыуып сығар, ҡоҙа! Юғиһә, аҙағы хөрт бөтә торған уның, ҡара күкҫәүгә әүерелә күрмәһен! – Лотфулла стакан тултырып сәйгүндән ҡойҙо, уға бер балғалаҡ ҡара борос һалып бутаны:

-- Ҡылҡылдатып ҡына йотоп ебәр әле ошоно, ҡоҙам, йотоп ебәр – һыпырып алғандай булыр.

Сәй тигәне әллә ниндәй мәй булып сыҡты ҡороғорҙоң, ҡапмаҫ элек үк тел осонда ләззәте тоҫмалланды. Таныш еҫ Хөрмәттең танауын, тын юлдарын ҡытыҡланы. Хеҙмәт күҙлегенән ҡарағанда, эсмәҫкә кәрәк ине быны. Әммә ҡыҫтаҡлаусы шылма йәнгә үтеп, эс-бауырға кереп бара:

-- Эй ҡоҙа, ҡоҙа, шулай ҙа үҙ бәхетенә үҙе төкөргән әҙәм булырһың икән! Дарыуҙың да дарыуы бит был! Мин һиңә уны әллә нәмә уйлап түгел, хөрмәт күҙлегенән ҡарап тапшырам.

“Хөрмәт күҙлегенән... Моғайын, был дөрөҫтөр ҙә... Моғайын, мин, ауыл һатыусыһы тарафынан булһа ла, хөрмәт күҙлегенән ҡаралырға, хөрмәт ителергә лайыҡлымындыр!” – тип хәл ҡылды ревизор һәм, күҙ йомоп, стаканды ауыҙына түңкәрҙе. Тәне буйлап йәйелгән яғымлы ҡыҙыулыҡ йөҙөндәге һалҡын болоттарҙы ҡыуаланы. Ирис-иблис мәсьәләһе лә, хөрмәт күҙлегенән ҡарағанда, яҙыҡ түгел төҫлө тойолдо уға. Сабый бәхетен кәнфит менән биҙәкләү ҡасан яҙыҡ булғаны бар? “Бәләкәсеңде яратам”, ти бит шаҡшыйан. Ҡоҙғон тиһәләр ҙә, себеш-һәбештә типмәй – кешелек һыҙаттары ҡалған икән әле!” тип уйлап алды Хөрмәт.

...Ревизия ахырында Лотфулланың елкәһенә тауар артыҡ сыҡҡанлығы беленде. Хәтәр генә сумма булып моронланы был бәлә. “Ҡоҙғон, тауар хаҡын

арттырып һата”, -- тигәндәре дөрөҫ икән! Хөрмәт, күҙҙәренән оскон сәсрәтеп, счет төймәһен шаҡылдатты.

-- Ай әттәгенәһе, ай әттәгенәһе, был, моғайын, Фазлый оҫтаның аҡсаһылыр. Магазинға гардероб ҡуйғайны һатырға... – тип ыуаланды тегеһе. Счет төймәһе икенселәй шаҡылданы.

-- Ай әттәгенәһе, ҡоҙаҡай, складтан яңылыш артыҡ ебәргәндәрҙер берәй тауарҙы...

-- Счет төймәһе уҫал итеп өсөнсөләй шартланы. Лотфулла бармағын тешләне.

-- Таптым, таптым, ҡоҙа, таптым! Туҡта, яҙмай тор, ҡоҙа. Әй әттәгенәһе, онотоп ҡуя яҙғанмын бит, ә! Эй был хәтерһеҙ башты! Өсөнсө көн генә, ҡоҙаҡайым, үҙеңдең хәлән ефеткенәң – Мәмдүҙә ҡоҙағыйым килеп: “Хөрмәт ҡоҙаң үҙе инер ҙә буй-һынына таманлап үлсәп палыр”, -- тип, бынауы йөн костюмлыҡ аҡсаһын ҡалдырып киткәйне бит. Оноткан да ҡуйғанмын шуны, ҡоҙаҡайым! Эй был тинтәклекте! – Лотфулла, күҙҙәрен йомоп, бармаҡ осо менән маңлайын суҡыны.

Хөрмәт счет шаҡылдатыуын туҡтатты. Лотфулланың танау тишектәре елһенеп өрөлгән, бөрсөк-бөрсөк эре тир ҡалҡҡан йөҙөнә текләп уйланып ултырҙы: “Ах шаҡшыйән, һыуҙан ҡоро сығырға тыпырсынаһың!” Ауыр көрһөнөп, ҡәләмен ситкә этәрҙе. Лотфулла ымлап күрһәткән, сөйҙә элеүле ҡара-йылтыр йөн костюмды шәйләгәс, ревизорҙың асыуы шөйлә баҫылып, йөрәккәйен туғандарса ҡыҙғаныу хисе ялмап-телгеләп үтте. Шаҡшы булһа ла, арыу ғына зат күренә ләһә был Лотфулла! Ул да әҙәм балаһы! Йәне барҙың тәне бар, тигәндәй, ваҡ-төйәк хатаһыҙ йөрөмәҫ инде кеше – дүрт тояҡлы ат та һөрлөгә. Ниңә инде уны ҡоҙғон тип атарға?

-- Бәләһенән башаяҡ, хәйерле сәғәттә костюмыңды алып китә күр, ҡоҙаҡайым! – Йығылып ятып, тигәндәй, үтенде Лотфулла. Хөрмәт, ҡарышырға хәлһеҙ икәнен белдереп, ике яҡҡа йәйҙе ҡулдарын: ни хәл итмәк кәрәк!..

...Өйлә ваҡыты етеп, прилавка өҫтөнә ҡояш төшкәйне. Хөрмәт менән Лотфулла, ҡушарлашып, тәҙрә пәрҙәһен ҡорҙолар ҙа сәйгүндән баяғы мәйҙе ҡойоп һыуһындарын ҡандырҙылар. Кейемдәр бүлегенә үтеп, “намыҫлы” ревизорға ифрат килешле ҡара-йылтыр костюмды кейҙерҙеләр. Икеһе лә бер-береһенә хөрмәт күҙлегенән ҡарап өндәште, үбеште...

Өфө, 1965.

Бәҫле бүрек

Ошондай ҙа татлы тойғо булыр икән! Кисә генә муйынымды гер ташылай баҫып торған баш – кәбәк тултырған тоҡ кеүек! Юҡ, алай ғына ла түгел. Әйтерһең, буш ҡыуыҡ – кәүҙәне күккә күтәрәм-күтәрәм тип кенә үрһәләнә!

Был ни хәл?! Элек кәмендә ярты сәғәт тарап интеккән сәсем – бер һыпырыуҙа йәпләште лә ятты. Аптырап, ике ҡулды юғары ҡаушарҙым. Шунда

йөрәгемде ҡапыл ғына ҡара шом бөрҙө, ике күҙем көҙгөгә төбәлде. Аһ тәҡдиркәйем, ни күрәм?.. Башымды алмаштырғандар! Көйәнтә иңле яурыным өҫтөндә йомортҡалай ғына йөнтәҫ түң остоғо суҡая...

Был бәләкәс тауығбаш менән инде ни хәл итермен, кеше күҙенә ҡалайтып күренермен? Суҡайған ғына сауҡалыҡ менән ҡайһылай көн итермен? Баштың да иң баш тиерҙәйе, иң кәмендә суйын ҡаҙан ҙурлығындайы кәрәк заман бит әле: быйылғыһын диссертация яҡлайым. Нисек итеп яҡлармын да баш исемен аҡлармын?..

Етмәһә, бөгөн кискә абруйлы ергә ҡунаҡҡа ла барырымды иҫләгәс, тас салҡан әйләнеп төшә яҙҙым. Йөрәк-бәғерем балта сапҡандай аҡтарылып, тауыҡ супайындай ғына түбә сәсемде йомарлап тотҡан хәлдә, бисәм һиҙмәҫе борон өйҙән сығып йүгерҙем. Быйыл ғына медицина институтында кешенән-кешегә тере ағзалар күсереп ултыртыу лабораторияһы асылғанын ишеткәйнем. Бәлки, алмашынған урындан эҙләп табып, улар минең ап-аруҡ ҙур үҙ башымды кире ҡайтарып ҡуйырҙар?

Әсе ҡайғынан күҙ йәштәрем супырлап тамып барғанда, иҫләмәҫтән, бик-бик таныш бер вывескаға күҙ төштө. Үҙем биш йыл буйы интегеп, ҡаҙандай ҙур башҡайыма таман бүрек эҙләп йөрөгән баш кейемдәре магазины ине был. Туҡта әле, мин әйтәм, хәҙер килеп баш бәләкәс булһа ла, тағы ла инеп сығайым, бәхетте һынап ҡарайым. Бәлки, баштарҙы күсереп ҡуйыусы хирург бысағы аҫтынан был тауығбаш урынына әүәлге башты тергеҙеп тороуыма, фәрештәләрҙең амин тигән мөҙҙәтенә тап килеп, ҡаҡ түбәмә үлсәгәндәй йәпләшерлек алтмыш икенсе ҡалып бүрек тә табып бирерҙәр?

Урамдағы барлыҡ баштарҙы үҙ башыма хайран ҡалдыртып, магазинға барып керҙем. Бүрек һатмалы мөйөштә әүәлгесә ғәрәсәт: ике дилбегә оҙонлоҡ сират, башына ҡаҙыҡ ҡаҡҡан йыландай тыпырсынып, уңлы-һуллы борғалана. Бындағыларҙың бөтәһе лә миңә таныш ҡаҙанбаштар: һуңғы биш йыл дауамында мин уларҙы әллә нисә тапҡыр күреп-белгәнмен. Байрам алдынан прилавкаға бәҫле бүрек сыҡмаҫмы, тип килгәндәр. Әүәлгесә һуҡыр себендәй йырып инеп барыуымды абайлағас, һәммәһе берҙәй тын ҡалып, сәйнәмәйсә йоторҙай өңөлдөләр. Әммә-ләкин ни күрәм! – сират ҡапыл шына ҡаҡҡандай ҡап-уртаға ярылды, яғымлы хуплау ауаздары яңғыраны:

-- Тауығбашҡа юл бирегеҙ, юл! Бәхетле баш килә!

Ҡыуаныстан башты һәрмәп ҡарайым -- әйтеүҙәре хаҡлы шул. Ысынлап та бәхетле шул тауығбаш! Пәйҙә булыуым булды, урта бармаҡ шикелле дәү директорҙар, замдар, мөдирҙәр, һатыусылар, тегенселәр, дәртләнешеп бер-береһен этешә-төртөшә, складта тулып ятҡан бәләкәй үлсәмле бәҫле бүректәрҙе килтерергә йүгерҙе. Әүәлге минекеләй ҙур башлылар, һерәйешеп, минән көнләшеп торалар. Һис иҫем китмәй генә, бер йөнтәҫ “пыжик”ты һайлап кейгәнсе, сауҙа залына ниндәйҙер ҙур делегация ут ҡапҡандай сәсәп килеп керҙе, һатып алыусыларҙы арбарға кереште. Баҡтиһаң, шул уҡ сауҙа тармағының төрлө өлкәләренән эркелгәндәр. Тирене, йә туҡыманы аҙ тотоноп, һан буйынса күп тауар етештерергә лә планды арттырып үтәп бүләктәр алырға ныҡ йәтешләнгән өҫ кейеме, аяҡ кейеме, күн бирсәткә кеүек хөллә тегеүселәр ине былар. Тауарҙары складтарҙы тултырып, магазиндарҙа үтмәйенсә ыҙалағас, ни ҡылырға белмәй

сәбәләнәләр. Минең тауығбашҡа ҡарап, бер талай тел шартлатып һоҡланғас, ҡабаланып аяҡты, ҡулды, яурын баштарын үлсәргә керешеп киттеләр. Ни бары бер баштан ғәйре тән ағзаларым һәммәһе үҙ урынында, үҙ самаһында ҡалыуы асыҡланғас, бисараларҙың күҙҙәренән ҡанлы йәштәр ҡойолдо: указ буйынса илдең әҙәм балаларын кесерәйтеү башланған, шундайҙарҙың бер килкеһе бында килеп тә еткән, тип ишетеп ныҡ ымһынғандар икән бисараҡайҙар...

-- Их тәҡдир, беҙ тигәнсә булманы!.. Ҡалабыҙға бер урам ғына кәрлә күсереп килтерһәңсе! – тип теҙ сүгеп, ҡулдарын Күккә һоноп, ысын-ихлас йөрәктән һыҡтанылар.

“Һеҙ, ҡәҙерлеләр, күктән кәрлә көткәнсе, ерҙәге һәйбәт әҙәмдәргә үлсәп-таманлап текһәгеҙ икән, барлыҡ ҡаҙанбаштарҙы ла бүрекле итһәгеҙ икән!” – тип кенә өгөтләргә ауыҙ асҡайным да мин, яҡында ғына бисәмдең зарлы инрәүе ишетелеп, алдыма килтереп өйөлгән, үҙем бәхетле тәхет итеп менеп ултырған бәҙле бүректәр өҫтөнән ырғып торҙом. Һөйөклө йәмәғәтем, бахырҡай, минең бындалығымды күрмәйенсә, әлеге бүрекһеҙ ҙур башлылар артынан сиратҡа баҫҡан да, сөңкөлдәп, бер әхирәте менән серләшә:

-- Уф, аяҡһыҙ ҡалдым бит, әй. Ҡаҙанбашлыма бүрек эҙләп ҡырыҡ урам ҡыҙырҙым, ҡырыҡ магазиндың тупһаһын шымарттым...

-- Юҡмы ни?

-- Минең әзмәүергә яраймы ни ул...

-- Ә һин тот та йүнәтеп бир, -- тине әхирәте.

-- Йүнәтә-йүнәтә йүн ҡалманы инде. Тәүҙә, бүркен арттан һүтеп ебәреп, ая яҫылыҡ ин һалып биргәйнем, “ҡыйыҡ елкә” тип көлдөләр. Бахырҡайым, шунан биҙәрләп, пальто яғаһын торғоҙоп йөрөй башлағайны, “көпәш муйын” ҡушаматы таҡтылар... Белмәйем, бөгөн ҡунаҡҡа ни кейеп барыр инде?..

-- Әлеге сите ҡырылған ҡырма бүрке ҡайҙа һуң?

-- Атаһынан ҡалғанды әйтәһеңме? – тине бисәм. -- Ул да һыймай шул хәҙер. Пеләш түбәһен ҡаплатырға сәс еткерҙе бит һантый...

Ҡатынымдың шундай ихлас ҡайғыһынан бәғеркәйем ҡанһырап, ҡыҫҡырып уҡ ебәргәнмен.

-- Ah-ah, минең ҡаҙанбашлының тауышы килә ләбаһа? – Аптырап ҡаранды бисәм. Бәҙле бүректәр күбәһе ситендә ғорур ҡайҡайып тороуымды, бынамын тигән бәҙле бүрек кейеп алыуымды күргәс, ҡапыл ҡыуаныс йәштәренә күмелде лә елтерәп килеп ҡосаҡланы. – Йәнекәй генәм, ни күрәм?! Ah, ниндәй ҙур бәхет!!! Ниһайәт, минең дә әҙәм рәтле тауығбаш ир күрер көнөм бар икән! Был баш менән бер ҡасан да бүрекһеҙ булмаҫһың, аҫылым!

Бисәм кисергән икһеҙ-сикһеҙ шатлыҡтан әллә нәмәләр килеп төштө иҫемә. Күңелкәйем балы һығылмаған балауыҙҙай тулышты. Ғәзиз тауығбашҡайымды хәләлкәйемдең мамыҡтай йомшаҡ ҡулдарына йәпләп һалып, татлы күҙ йәштәре аша әкрен генә һулҡылданым:

-- Тик кандидатлыҡ диссертациямды ғына яҡлап өлгөрмәгәйнем бит әле мин...

-- Йәнекәй генәм, аҫыл тауығбашҡай ғынам минең! Ҡайғырма юҡҡа! Йыйын тауығбашлылар профессор ҙа академик булып йөрөйҙәр. Башҡа бүрек

табылғас, диссертацияһы ғына яҡланыр инде уның! Кандидат та, доктор ҙа булырһың. Иң мөһиме – бүрек! Баштың бәҫе – бүректән, тигән ҡарттар.

Башҡайымды һалып һулҡылдаған бисәмдең ике ҡулы көтмәгәндә ике тимер ҡоршауға әүерелеп, бүрек өҫтөнән баш һөйәгемде сатната яҙып ҡыҫты. Үкереп илап ебәрҙем...

Уянып күҙемде асҡанда, бисәм, һуҡранып, башыма әлеге атайҙан ҡалған ҡырма бүректе ҡыҫтаҡлап маташа ине. Бажай менән иртәнге төшөрмөшөмдән һуң башым зыңҡыған килеш табындан саҡ тороп, кейенеп булашҡанда... хәйерһеҙ ҡомартҡы, түбәмдән ҡубынып, иҙәнгә төшкән булған. Ҡунаҡ мәжлесенә китер алдынан хәләл ефетемдең күрше бүлмәлә кейенеп бөткәнен көтөп ултыра торғас, саҡ ҡына күҙ эленеп киткән дә татлы төш күренгән икән шул...

Өфө, 1965.

Кемдән – хеҙмәт, кемгә -- хөрмәт

-- Бөгөн төшкөләккә аш әҙерләй алмайым – кер йыуам, -- тине бисәм бер ял көндә. – Мә, фәләнсә һум да фәләнсә тин бол. Күптәндән күҙеңде ҡыҙҙырып, тешеңде төшөрткән “алтын балыҡ” авторучкаһын һатып ал, бөҙрәханала көҙрәләреңде көҙәт. Үҙ йүнеңде үҙең күреп, берәй ерҙә үҙәк ялғап сыҡ. Шунан һуң теүәл фәләнсә һум да фәләнсә тин ҡалырға тейеш. Ул аҡсаға ике йөҙ ҙә егерме биш грамм вологод майы менән бер бөтөн дә бер ҡыйырсыҡ аҡ икмәк апҡайт.

Әйткән һүҙ – ҡаҡҡан баҫана, бисәнеке закон. Кеҫәгә селтәр моҡсай тығып, табан ялтыраттым.

Тәүбашта аяҡ, туп-тура баҫып, “Шараптар – емеш һуты” магазинына йүрмәлде. Ҡулды кеҫәгә сумырып, көмөш-һәмеш байлыҡтарын барланым. Тик... теләктәрҙең осо-осҡа ялғанырлыҡ түгел шул, ҡәһәрең! Йәбе килһә -- һабы килмәй, һабы килһә -- йәбе килмәй тик тора. Бисә әйткәндәрҙе теүәл үтәгәс, һуҡыр тин дә йә артыҡ, йә кәм ҡалмаясаҡ. Электронлы-иҫәпләгес машина һанап һалған тирһең... Алҡымымды уйнатып, мәҙәниәт тауарҙары магазинына киттем. Витринаға терәлгәс, мышылдатып танау тартырға тура килде бында ла:

-- Ханым, кисә генә ошонда “алтын балыҡ” бар ине... – тип үтендем.

-- Бөгөн дә барсы ул.

-- Ниңә ҡойроҡ һелкетмәй һуң?

-- Сирттерә белмәйһегеҙҙер. Әнә теге витринанан ҡаптыралар ул алтын балыҡты, ағай кеше!

Бына эш ниҙә генә. Шатлығымдан ҡыҫкырып уҡ ебәрҙем:

-- Һәй Хоҙаның хикмәте, әл дә миңә тигәне ҡалған икән. Бер бик еллеһен эләктереп ебәрегеҙсе, ханым!

-- Рәхим итегеҙ, фәләнсә һумығыҙҙы ҡаптыртығыҙ ҙа алығыҙ.

Ҡояштай йөҙөм шул секундта уҡ һытыҡ ҡауынға әүерелгәндер, моғайын. Үҙемде бик ғәйепле тойоп:

-- Ниңә фәләнсә һум, ә, ғәҙәттәгесә, төгәнсә һум түгел? – тигәнемде тоймай ҙа ҡалдым.

-- Ағай кеше, ҡайҙа ҡармаҡ һалғанығыҙҙы белегеҙ!

Абау! Ни күрәм? “Алтын балык”, ҡойроғона ебәк таҫма менән лотерея билеты тағып, баҙарын арттырып, “бүләктәр” бүлексәһенә ҡарпыған даһа! Һәй был күҙ тигәнеңде!

-- Ханым, ғәфү итегеҙ. Минең бисәм дә, ҡыҙым да таҫмалап сәс үрмәй. Башкөлләйгә һуңғы мода сыйнауын ихтирам итеүселәр. Ә үҙемә килһәк, кисә генә тап ошоноң ише лотерея билетына “Москвич” отоп алдым!

-- Алайһа, быныһы “Москвич”ыҙҙарға ҡалһын. – Һатыусым, күп уйлап тормай, ыҫпай ғына арҡа шәрифтәрен күрһәтте. Минең эстә ут тоҡанып, үт һумалаһы ҡайнай башланы. Тамаҡ төбөм тығылып:

-- Ханым, мин – ҡороғул. Яҙырға авторучка кәрәк, -- тинем.

-- Автомобиль кәрәктер тип уйламайым да мин, ағай кеше, -- тип ҡыйшайтты ауыҙын.

-- Нимә-нимә?! – Үҙемде бер метр аҫка сүккәндәй хис иттем. Бик мөләйем икенсе бер һатып алыусы ханым да, миңә боролоп ҡарап, матур күҙҙәренең ағын әйләндерҙе:

-- Һәй мөрәүәтһеҙ әҙәм, талпан кеүек ҡаҙалыусан бер бәндә икәнһегеҙ ҙә. Алай бик тә кеҫәгеҙгә ҡушҡуллап йәбешеп ятҡас, сәпсим өйөгөҙҙән үк сыҡмағыҙ. Сауҙалашып ҡырҡышырға, үҙ малын һатамы ни ул? Хеҙмәт кешеһен хөрмәт итә белергә кәрәк!

Телемде тешләнем. Уйлап ҡараһаң, дөрөҫ әйтә бит был сәбәкә апай! Хәҙер мин кем? Хеҙмәт ҡәҙерен белмәгән бер һөмһөҙ бүрәнә. Был һатыусының да, моғайын, производство планы, ире, ҡәйнәһе барҙыр бит. Минең ҡыҫмырлыҡ арҡаһында ғына айлыҡ сауҙа планы үтәлмәй ҡалһа, бахырҙарының күҙҙәренән ниндәй эҫе йәш бырғыр! Юҡ, кешелек выжданым юл ҡуймай бындай ҡатылыҡҡа!

-- Хөрмәтле ханым, зинһар, ғәфү итегеҙ. “Алтын балык”ты шул көйөнсә мәскәүләп, ҡыҙыл айғолағынан тоторорғоҙсо миңә!

...Ҡолаҡ тамырҙарын наҙлап, электр машинкаһы йырлай түбәмдә. Тәнде татлы йоҡоға арбай. Әммә күҙҙәр эленмәй, эстә ҡайнар ут яна – быныһы яңы ут. Кеҫәм төбөн ҡармап, энә осонда ултырам: сәсте алып бөтә килә машинка хужаһы нисегерәк өндәшер? Әгәр һөйләм аҙағында тауышын ҡатылатһа – бөттө баш, ҡалды муйын һерәйеп... Бына сәсте мөнтәп бөтөрҙө. Елкәләрҙе елпене. Яңы сепрәк ҡыҫтырҙы.

-- Хушбуйлайыҡмы, йәш егет?!

Һәләк булды баш – һөйләм аҙағына ҡаты баҫым төштө -- ҡоростай сыңланы ауазы! Былайғас, бисәм бюджетын үтәү хыялы ҡырҡылған сәстәй ҡоланы. Уйлап ҡарағыҙ: әгәр ҙә хушбуйға аҡсаны ҡыҙғанһам, елпеүесен дә йәлләйәсәк -- елкәм соҡоро урам буйы төк туҙҙырып ҡайтасаҡ. Хуш бул тағы ла, һанаулы көмөштәрем!

Юҡ-юҡ, рәнйемәйем. Сәс алыусы ла бит әҙәм балаһы. Уның да, моғайын, янып барған производство планы, премия көткән бисәһе, ҡәйнәһе барҙыр. Шуны аңлай белеү генә лә ни тиклем ҙур кешелеклелек, ҡыуаныс! Булһын, әйҙә, булғас, минән хөрмәт!

Үҙемде шулай рухландырып, кафеға инеп ултырҙым. Ир – баш, ҡатын – муйын: бисә ҡушҡан икән – сәсрәп китеп булһа ла ашап ҡайтырға тейешмен.

Йәнәш өҫтәлдә танау аҫты ҡара төклө Ҡаф тауы кешеһе ултыра. Уның йөҙө мөләйем. Официанткалары ла бик итәғәтле: күршем тамаҡ ҡырыуы булды, “йылп!” итеп бер тутыйғошбикә килеп тә сыҡты. Мыйыҡлы һыңар бармаҡ ҡалҡытып һелкене – боҫланып торған фирмалы аш, осоп килеп, бармаҡ аҫтына ҡунды. Мыйыҡ эйәһе ике бармаҡ ҡалҡытты – һимеҙ өлөш осоп төштө. Өс бармаҡ күтәреп кенә һелкегәйне, мөлдөрәп торған өс йондоҙло йәннәт һыуы килеп тә етте, алтын буталлы бокалға тулып та ултырҙы. Мин, һоҡланып, ел уйнаған ауыҙҙы ғына астым. Тутыйғош үҙ тәңгәлемә тиңәлгәс:

-- Ғәфү итегеҙ бер үк: аппетитым хөртлөгөн ғәйепкә алмағыҙ, -- тинем. Эште шулай көйләй биргәс, шулай ҙа ҡыйынһынып, ярты ғына бармаҡ шәрифен һелкенем. Әмерем шунда уҡ теркәлде ҡағыҙына. Тағы ла яртышар ғына ике бармаҡ ҡалҡытҡас, ауыр һулап, ҡарашымды икенсе яҡҡа күсерҙем. Әммә тутыйғош ҡанат елпемәй тик кенә тора бирҙе.

-- Тағын-тағын-тағын да? – тине ул, ҡәләм осо менән, әйтерһең, минең йөрәк тамырына сәнсеп.

-- Тағы ла... тағыла... бер стакан крем-сода, хөрмәтлем!

Тутыйғош, яурынбашын тәкәббер һелкетеп, бүтән өҫтәл яғына аҡҡоштай йөҙҙө. Ҡаф тау арты кешеһенең, мине күҙәтеп, мыйыҡ сите ҡыйшайҙы. Фирмалы ашының тәрилкә төбөн ялтыратып, коньяклы ҡара кофегә керешкәйне. Ә мин һаман әсе төкөрөк йотоп, “гәзит уҡып” ултырам.

-- Ханым, әллә хәтер ҡанаттарығыҙ һындымы?! – Зал яңғыратып өндәшергә мәжбүр булдым, тағы ла бер күлем сыҙағас.

-- Һе! Сабыр иткән – мораҙына еткән, өлгөрөрһөгөҙ, -- тип гөлдөрләне елпенеп килеп мыйыҡлыны әүрәткән тутыйғошҡайым. Елп-елп осоп китте лә инде икенсе өҫтәлде ниғмәтләндерҙе. Үҙем урыҫса белеп еткермәһәм дә:

-- Безобразие! – тип, көсөргәнешле эске тойғомдо рәсми телдә белдерҙем. Ҡаф тауы кешеһе, ҡапыл боролоп, хөкөм итеүсән ҡарашы менән үлсәне:

-- Эй-боу! Ниңә шаулайһығыҙ? Ниңә тыныс ултырмайһығыҙ?

-- Ултырып ҡарағыҙ, тамағығыҙҙа ел уйнап, эсегеҙҙә бүреләр олоғанда!

Мыйыҡ эйәһе миңә ҡыҙғанып ҡараны, тамам өмөтһөҙ итеп баш сайҡаны:

-- Эй-боу! Инвалидмы һеҙ? Бармаҡтарығыҙҙы эт ашанымы? Һелкергә өс бармаҡ таба алмайһығыҙмы? Эй-боу, һеҙҙе бит матур ҡыҙый хеҙмәтләндерә, ә һеҙ уның ҡәҙерен белмәйһегеҙ. Һеҙ уға, хөрмәт итеү урынына, ике генә бармаҡ күрһәтәһегеҙ, алары ла яртышар. Ярамай алай!

-- Бында әллә ҡайҙан килеп инәләр ҙә... – тип, миңә һөҙөп ҡарап сыйылданы тутыйғош. Минең маңлайға, әйтерһең, биш бармаҡлап сирттеләр. Шул сиртеүҙән, мейе юлаҡтарын тулатып, илһамиәт яралды. Һәй афарин әҙәм, мыйығы мәңге ҡарағуҫкыл булғыры, дөрөҫ киҫәтеү яһай бит! Берәү һине хеҙмәтләндергәс, хөрмәткә ирешергә тейеш. Бик мәслихәт! Мин дә бисәне, балаларҙы, аяҡ-ҡул талдыра-талдыра икмәк-һөт ташып, көн дә, көн дә хеҙмәтләндерәм дәһә. Ә хөрмәт? Юҡ, хөрмәт тәтемәй миңә! Хәйерһеҙ бисә, тиндәрен хисаплап, янсыҡ ауыҙын көс етмәҫлек электронлы-хисап машинаһы менән йомдортҡан. Етте, хәл ителде! Сәғәт һуҡты янсыҡ бауын үҙ ҡулыма алырға, хөрмәтләп һәм хөрмәтләнеп ҡалырға! Беҙҙең Урал тауы әллә Ҡаф тауынан ҡайтышмы?!

Иң түрҙәге табында хозур типтереп ултырған ҡалын кеҫәле танышыма яҡынлап, унан үтескә алып, ысын егетлек хисенә күтәрелдем...

Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы шул: егетләнеп, хатта бөкләмәйенсә, бер юлы биш бармаҡ һелкеп күрһәттем. Өйгә бик кискырынлап, ауа-түнә, умарта ватҡан айыу кеүек алпан-тилпән атлап ҡайттым. Шөкөр, хеҙмәтләндереүселәремде хөрмәтләнем.

-- Ҡайҙа алған икмәгең, ҡайҙа майың?! – Ғәҙәтенсә, бик елле ҡаршыланы бисә, оҙон уҡлауын тотоп. *Л*әкин быныһы *л*а тәьҫир итмәне.

-- Мин... мин... беләһеңме, мин кем? Хеҙмәт эйәһе! Мин – хеҙмәт егәрлеһе! Йүгереп йөрөп хеҙмәт итәм, *л*әкин ҡайҙа миңә хөрмәт?! – Хистәремде шул ыңғайҙа өҫтәл төйөп аңлатмаҡсы булғайным, әммә ауыҙ асырға *л*а бирмәне хәйерһеҙ бисә.

-- Хөрмәт? Бына һиңә хөрмәт! Бына һиңә рәхмәт! – Ике яҡтан ике усы менән сикәләремде ялтыратты. Күҙҙәремдән утлы тәңкәләр сәсрәп, шулар араһында *л*отерея билетлы-таҫмалы “алтын балыҡ”тар, йор ҡуллы сәс алыусылар, ҡылтымбый холоҡло тутыйғошбикәләр – барыһы, барыһы бергә буталды. Бүтәндәрҙе ысын күңелдән хөрмәт итеп ҡайтҡан ҡаилә башын ғаилә муйыны ошолай хөрмәтләне...

Ни әйтмәк кәрәк: кемдән – хеҙмәт, кемгә -- хөрмәт, тигәндәре ошолор. Хәйер, бер уйлаһаң, зарланаһы *л*а юҡ кеүек. Үҙеңде үҙең хеҙмәтләндерергә тип юғарынан нығытып бирелгән производство планың булмағас, пландан тыш шәхесеңә кемдән хөрмәт талап итәһең инде...

1965.

Ҡойроҡло компот

Ресторандар тресы ревизоры Ҡотлоғужа Ҡотлозаманов, күңеле тулышып, үҙенең ҡул аҫтына ҡараған иң бәләкәс аш-һыу төйәгенә -- Көтөүлек һәм Ҡаҙ Юлы тыҡрыҡтары сатындағы сәйханаға туҡталды. Кисә *у*л бында махсус рәүештә үҙәк складтан берҙән-бер йәшник Африка емеше компотын ебәрткәйне. Ошондағы киң ҡатлам массаларҙың ят күстәнәскә нисек *л*әззәтләнеп тейенгәнен үҙ күҙҙәре менән күрергә уҡталып, инеү менән иң урталағы өҫтәл артына ултырҙы *у*л. *Л*әкин бер стакан компот ҡойҙортоп алыуы булды, күҙҙәре шар асылып, ҡалын ҡаштары ялтас түбәһенә һикерҙе. Татлы эсемлек эсендә ошо минутта күлкеп йөҙөргә тейешле, һыртарҡаһына ҡайтарылмыш эт ҡойроғо кеүек кәкере һабаҡлы сит ҡитға емеше урынына, ерле сельпо селтәрендә етештерелгән ябай ғына кипкән алма киҫәге ята ҡалтайып.

-- Ҡайҙа кисә ҡабул ҡылынған йәшел йәшникле компот? – тине Ҡотлозаман, сәйхана складына тура үтеп.

-- Кисә үк шеф-поварға тапшырылды, иптәш нәсәлник.

-- Саҡыртығыҙ үҙен!

Ҡойроҡло емеш һүрәте мөһөрләнгән йәшел буш йәшникте күтәреп, тирләп-бешкән шеф-повар килеп етте, генерал алдында торған һалдаттарса шығайҙы.

-- Йәшниктәген ҡайҙа иттегеҙ?! – тип екерҙе Ҡотлозаманов.

-- Компот итеп ҡайнаттыҡ, иптәш нәсәлник, киң ҡатлам халыҡ массаларына еткерҙек.

-- Ниңә ҡойроғо күренмәй, кәнәлйә?

-- Ҡойроғо... ҡойроғо юҡ ине...

Бер ситтәрәк торба борғослап маташҡан слесарь күҙ ҡыҫты, Ҡотлозамановты сағырып алды:

-- Ышанмағыҙ, иптәш нәсәлник, ҡойроҡ тоттортмаҫҡа итәләр. Йәшел йәшник эсендәгеһен итек-ситек артеле буфетсыһының йыуан сөмкәһенә бушатып, урынына кипкән алма индереп тултырҙылар. Үҙ күҙҙәрем менән күрҙем!

Ҡотлозаманов эҙ һеперткән ҡойроҡло компот артынан артабан тоҫкалды. Ул ярһып барып кергәндә, итек-ситекселәр табыны буш ине. Буфетсы бисә, дөйәләй күркәм кәүҙәһен ҡалтыратып, бүлмә яңғыратып сеңләп ебәрҙе:

-- Мин белмәнем, иптәш нәсәлник! Мин ул компоттың барыһын да Мәғрифә әхирәтемә атҡарҙым, иптәш нәсәлник!..

Ҡотлоғужа Ҡотлозаманов, моронлаған енәйәттең осо-башына сығыуҙы урынбаҫарына бойороп, төшкөнө ашарға өйөнә ҡайтты. Янып-көйөп йөрөп бик ныҡ сарсағанлыҡтан, эсергә һораны. Бисәһе уға гәлсәр стакан тултырып һалҡын компот килтерҙе.

-- Мәғрифәкәйем, йәнем, был... һинме ни?!. – тип тертләп һикереп торҙо Ҡотлоғужа, компот эсендә ирәүәнләнеп йөҙөп йөрөүсе кәкере ҡойроҡло емештәрҙән һис күҙен ала алмай.

-- Нимә, әллә бисәңде бөгөн тәүтапҡыр күрҙеңме?! Таный алмайһыңмы? – Мәғрифә, ҡыҙҙарса осоноп, һимеҙ янбаштарын һикертте.

-- Мин ул Мәғрифәне һиндер тип уйламағайным...

-- Нимә?! Әллә башҡа Мәғрифәң дә бармы һинең?

Ҡотлоғужа яуап ҡайтарманы. Тәрән йөрәк төпкөлөнән һығылып, телефон трубкаһына үрелде.

-- Алло, урынбаҫармы был? Немедленно отставить! Ҡойроҡлоно юллауҙы туҡтатырға! Эйе, ҡойроҡһоҙ булған икән дә ул, мәлғүн...

Күңеле тулышып, ҡабат табын түңәрәгенә ултырҙы, эстән генә сеңләп илай-илай, гәлсәр стакандан компот һемерҙе. Ошо көндә мут бәндәләр арҡаһында гүзәл кәкере ҡойроҡлоларҙы һемереп ҡабыуҙан мәхрүм ҡалған киң ҡатлам халыҡ массаларын ҡыҙғанып илай ине ул.

1965

Хәсән трибун.

Һеҙ, моғайын: “Мәшһүр ораторҙыр был”, -- тип уйлай торғанһығыҙҙыр. Яңылышаһығыҙ. Оратор түгел, ә бик ябай ғына телмәрле ауыл Советы рәйесе ул. Хатта һөйләгәндә һүҙенең ярты ҡойроғо ауыҙында өҙөлөп ҡалыусан. Ләкин ирҙә тырышлыҡ ҙур, гөрләтеп һөйләргә тырышлыҡ ҙур.

Телмәрҙе лә күктән генә һоҫоп алып һөйләп булмай. Уның өсөн таяныс, факттар кәрәк. Хәсән ана шул факттарҙы булдырыу өсөн тәүге аҙымдарынан уҡ ҙур көс һалған уҙаман. Ләкин тәүмәлдәрҙә донъялар уның өсөн имен булманы: ауылдағы ике күлде бергә тоташтырырға тигән проектын да, шулай уҡ ул ултырған идара тәҙрәһенән йәмле туғайлыҡты ҡаплап торған ҡом убаһын күсереү, йәки пожар ҡалансаһына икенсе манара өҫтәп ҡороу кеүек бүтән пландарын да юғарылағылар хуп күрмәнеләр. Үҙ-ара һалымдан килгән аҡса йыл һайын уның үҙе теләгәнсә ҡулланылманы. Хәсәнгә телмәрҙәрен бары тик шул юғарылағы етәкселәр күрһәтеүенсә эшләнгән эштәрҙе генә миҫал итеп килтереп һөйләргә тура килде. Ә ул үҙенең, фәҡәт үҙенең өлгөлө етәкселек итеү факттарын баҡтыртып һөйләргә ни ҡәҙәр ынтыла ине! Ахыры, булманы, Хәсән көллө зиһенен кешеләрҙе шаҡ-ҡатырып аптыратырлыҡ трибуналар уйлап сығарыу эшенә екте. Кабинетында ул береһенән-береһе ҡатмарлыраҡ конструкциялы тукһан туғыҙ трибуна проектының һыҙмалары тупланы. Көн һайын сәғәт туғыҙҙан килеп эш бүлмәһенә бикләнә лә көнөнөң секретарь индергән ҡағыҙҙарға ҡул ҡуйыу һәм мисәт һуғыуҙан ҡалған оҙон өлөшөн һыҙмалары араһында ҡәһәтләнеп үткәрә. Их, үҙ башыңдан уйлап сығарып, тарих һоҡланырлыҡ берәй етәкселек эше эшләйһе ине лә ошо үҙ һыҙмаларың буйынса ҡоролған бейек трибуна артына баҫып, шул турала илгә шаңғыртаһы ине!

Өҫтән төшөрөлгән ете йыллыҡ план ғәмәлгә ашырыла башлағас, Хәсәндең райондағы ҡайһы бер етәкселәре лә, тормош инде уның аръяғын үҙ ағышында алып барып еткерә, тип иҫәпләп, күберәген хыял ителгән бөйөк уңыштар, еңеүҙәр хаҡында телмәр тоторға йәтешләнеп алдылар. Уларға ла трибунан фәстереү өсөн яңынан-яңы факттар кәрәк булғандыр инде, күрәһең: Хәсән үҙен ауыҙлыҡлап тоткан теҙген бушай төшкәндәй тойҙо. Алай ғына ла түгел, райбашҡарма рәйесе үҙе үк Хәсәндең, әлеге ике күл, ҡом уба, пожар ҡалансаһы тураһындағы проекттарын һөйрәп сығарҙы архивтан.

-- Их рәйес, рәйес! Рәзе быңдай баҡ-төйәктәр беҙҙең үҫеш ҡоласына тиң була? Эпоханың иң ҙур һәйкәле нигеҙҙәрен һалырға ваҡыт хәҙер! Киң ҡолас мөһим, киң ҡолас! – тип ҡыҙҙырҙы ул Хәсәнде.

Хәсән ҡанатланып эшкә тотондо. Бер йыл араһында ул, үҙенсә, ауылында "эпоханың һәйкәл нигеҙҙәрен" һалып та ҡуйҙы...

...Хәсән өсөн кискә байрам: һайлаусылары алдында йыллыҡ эше хаҡында иҫәп-хисап бирәсәк. Был мөкәддәс эшкә ул алдан уҡ ең һыҙғанып әҙерләнде. Уның туранан-тура етәкселегендә Ҡаф тау артынан килгән сабышсылар (шабашниктар) бригадаһы, бына бер аҙна инде, идара ҡаршыһындағы майҙан уртаһында серле төҙөлөш ғәләмәте алып бара. Иң элек тәрән соҡор ҡаҙып, бик бейек итеп бетондан нигеҙ ҡатырҙылар.

-- Моғайын, пекарня һалаларҙыр, юҡһа икмәк етешмәй бит, -- тип күңелле юраны халыҡ. – Һайлау алдынан йыйылышта рәйескә шундай наказ биргәйнек.

-- Юҡ, мунса был! – тине икенселәре. – Дөйөм мунса емерелеп төшкәнгә нисәмә йыл бит инде!

-- Бәлки, балалар йәслеһелер әле, -- тине өсөнсөләре. Хәсән иһә мыйыҡты ҡырын һыпырып ҡына хәйләле йылмайып йөрөнө.

Нигеҙ һалынып бөткәс, ай эләк промкомбинатта әҙерләткән ағас конструкцияларҙы килтереп ауҙарҙылар. Хәсән уларҙы, өҫтәлмә эш хаҡы түләп, шабашниктарҙан ил аяғы һил саҡта – төндә ҡорҙортто: һайлаусыларына сюрприз яһау теләге ине. Таң һарыһында әҙер булған ҡоролмаға колхоздың ырҙын табағына яба торған дәү брезент торпошаһын бөркәп, тантаналы сәғәткә әҙерләп ҡуйҙылар.

Көткән мәл килеп тә етте. Ауыл халҡы брезент ҡаплаған серле ҡоролма эргәһенә эркелде. Хәсәндең секретары ҡыҙыл япмалы өҫтәл йәтешләтеп, патефон ҡуйҙы, уйнатҡыс ҡолағын борҙо. Һәр кемде был ваҡиғаның серлелеге сәмләндерҙе.

-- Һәй, бейек! Мунса түгелдер был, егеттәр, ә ҡояшҡа йылынмалы бак ултыртылған душтыр. Ана, үрҙә шул бакка оҡшаш нәмәһе тумырайып тора.

-- Эштән саңға буялып ҡайтҡан трактористарға иллә шәп була икән был! Йүгереп кенә киләһең дә, баш осондағы кранын ғына бороп, йылы һыуҙа ҡойонаһың.

-- Ҡарт-ҡороларыңа ла ярап ятыр.

-- Ә патефон нимәгә икән бында?

-- Ахмаҡ! Музыка уйнатып, торпошаһын тантаналы асырға!

Секретарь торпошаның бер мөйөшөн ҡайтарып башын тыҡты ла ундағы кемгәлер өндәште. Артынса уҡ ҡоролманың башында, оҙон итеп, әҙәм балаларын татлы йоҡонан уятҡыс сәғәт сыңғырҙаны. Шул уҡ секретарь патефондың муйынын бөкләгәйне, тантаналы марш шаңғыртты майҙанды, шул ыңғайҙа торпоша өҫтән аҫҡа шыуышып төштө. Шаңҡып ҡалған кешеләрҙең күҙ алдында мыҡты бетон нигеҙгә ултыртылған бик ҙур ағас трибуна, ә трибунала ҡулын Ленин бабай кеүек алға һоноп ҡатып ҡалған ауыл Советы рәйесе Хәсән үҙе тора ине. Башы өҫтөндә шиферлап ябылған ҡыйыҡ – ямғыр күнәкләп яуғанда ла үткеһеҙ – һөйлә лә һөйлә генә!

Марш уйналып бөтөп, халыҡ иҫенә килгәс, Хәсән ҡулы кинәт хәрәкәтләнде:

-- Иптәштәр, хөрмәтле һайлаусыларым минең! Был ғәжәйеб ҡоролма...

-- Һантый! Дөйөм мунса һалырға тип йыйған аҡсаны ҡайҙа иттең?! – тип ҡысҡырып бүлдерҙеләр түбәндән.

-- Ул аҡсаны, ауылыбыҙҙың ике мең дә бишенсе йылда ун ике мең йәнгәсә артаһын иҫәпкә алып, бер юлы дүрт йөҙ кеше инеп йыуына алырлыҡ капиталь мунса комбинатының проектын ватман ҡағыҙына һыҙырға сарыфланым мин, хөрмәтле һайлаусылар...

-- Ул ҡасан ҡағыҙҙан ергә һалынып өлгөрә?

-- Ике мең дә унынсы йылда, туғандар.

-- Аб-бау!..

Шаҡ-ҡатҡан йәмәғәт ҡапыл иҫенә килеп, ҡабат шаулай башланы:

-- Район бюджетынан бүленгән мәктәп ремонтлау аҡсаһын ҡайҙа иттең?

-- Ике мең дә илленсе йылда түбәһенә алтын ялатылған белем һарайының...

-- Долой! Емерелгән клуб ҡасан төҙәтелә?

-- Хөрмәтле һайлаусылар, үҙегеҙ беләһегеҙ, мин уны ике мең дә...

-- Долой, долой! Былай ҙа аңлашыла!

Бер аҡһаҡал нәҙек кенә муйынлы һерелдәк башын һоноп илерҙе:

-- Хөсөт! Пенсионерҙарҙың тәржемәи хәлен яҡшыртыу өсөн ҡаралғанын ҡайҙа тыҡтың?

-- Бына ошо сихриәтле трибунаға кереп китте ул сумма, иптәштәр...

-- Долой, долой!

-- Ике аяғын бер ҡунысҡа тығырға!

-- Үҙебеҙ яһап ултыртҡан балсыҡ сүлмәк – тибәйек тә ауҙарайыҡ! – Ҡурҡыныслы ауаздар яңғыраны.

-- Иптәштәр, хөрмәтле һайлаусыларым минең! Нисек шуны ла аңламайһығыҙ: үҙегеҙҙең киләсәк быуындарығыҙ, ейән һәм ейәнсәрҙәрегеҙ өсөн эшләнде бит был мөһәбәт трибуна! Ике мең дә алтмыш бишенсе йылда йәшәгән вариҫтарығыҙ, бөйөк коммунизм еңеүҙәрен ҡотларға ошо трибунаға күтәрелеп...

Телмәрсене Мырҙағол ҡарттың бик аҫтыртын, бик яғымлы тауышы тоткарланы:

-- Тыңла әле, мырҙам, һөйөклө Хәсән трибун. Ул ике мең дә фәләнсә йылдағы алтын түбәле мәктәптә уҡыясаҡ вариҫтарыбыҙ донъяға нимәнән яраласаҡ: әҙәми заттанмы, әллә дөмә бушлыҡтанмы?

-- Һинең менән минән, беҙҙең балаларҙан тыуасаҡ алар.

-- Тимәк, мотлаҡ беҙ кәрәк инде аларҙың яралышы өсөн?

-- Әлбиттә!

-- Алайғас, шанлы вариҫтарыбыҙҙың яралыуы өсөн беҙ мотлаҡ кәрәк булғас, аларҙы иҫән-һау һәм бәлә-ҡазаһыҙ яралтырға бөгөндән үк беҙгә пекарня, мунса, клуб, балар йәслеһе давай! – тип һүҙен осланы Мырҙағол. Көслө ҡул сабыу, алҡышлау трибунаның нигеҙҙәрен ҡаҡшатты. Йәш үҫмерҙәр үргә серек помидор, ҡыяр ҡалдыҡтары аттылар, береһе Хәсән трибундың танауына тейеп сәсрәне. Теҙген осон усына көрмәмәк булып, трибун ярһып сәбәләнде, сыйылданы:

-- Иптәш һайлаусылар, оят һеҙгә! Оят, оят, оят!.. – Телмәрен осламаҫ борон уҡ, ҡапыл, трибунаның аҫты дөбөр-шатор килде, йән тетрәткес көлөү шуға ялғанды. Хәсән түбән ҡараны: кемдәрҙер тарафынан трибунаның баҫҡысы ҡуптарып алынып, ситкә бираҡтырылғайны. – Мин... мин... нисек төшәм бынан?! – Күҙҙәрен алартты Хәсән трибун.

-- Күккә төбәлеп телмәреңде дауам ҡыл, үҙең әйткән ике мең дә алтмыш бишенсе йылда осоп килеп төшөрһөң!

24.07.1965.

Трактарист һәм ғорурлыҡ

Трактарист булып тәүге йыл ғына эшләүем. Ауыл мәктәбен бөткәс, алты айлыҡ курста уҡып ҡайтҡайным. Үҙ һөнәремде бөтәһенән дә өҫтөн күреп яратам һәм ғорурланам. Бүтәндәр ҙә шуны белергә тейеш. Сөнки илгә икмәк үҫтереүсемен.

Үткән көҙ шулай туңға һабан һөрәбеҙ. Сменамды тапшырғас, өйгә лә инеп тормай, йылға һыуында һабынһыҙ ғына арылы-бireле сайынып, уйынға саптым. Бөтә йәштәр ауыл һыртына йыйылған. Төн йылы, һәйбәт. Ҡыҙҙар ап-аҡ күлдәктәрҙә яҙғы күбәләктәр кеүек талпына. Һәр ҡайҙа шаярыу, көлөшөү. Тальян гармун янып таҡмаҡ өҙҙөрә. Теләмәгән ерҙән сорғоп, орсоҡ кеүек өйөрөлөп

китерһең. Үксәләрем үҙҙәренән-үҙҙәре тыпырҙанылар, таҡырға таҡмаҡ сиртterҙеләр. Ҡыҙҙарҙың да иң матурҙарын, һығылмалы биллеләрен генә ҡосоп бейенем -- ә кәкже, тракторист ғорурлығы! Береһе менән бөтәм дә икенсеһен елтерәтәм, өсөнсөһөн...

Бына тау артынан тәңкә башын һуҙып аҡрын ғына Ай ҡараны, аҡланлыҡты көмөш нурға мансыны. Шул саҡ көтмәгәндә уйын боҙолдо ла ҡуйҙы бит, әй. Ҡыҙҙар, сылашып, яулыҡ менән бер-береһенең арҡаларын һөртөшә. Ҡайһылары шыңшып илап та алды. Баҡты иһәң, байтаҡтарының күлдәгенә трактор майынан елле һүрәт – биш бармағы биш яҡҡа тырпай ҡул эҙе ҡалған икән. Нәҡ минеке ҙурлыҡта! Эсем ҡатып көлөп торғанда, комсорг Фәттәх килеп яғамдан алды:

-- Әҙәм аҡтығы! Ниңә уйынға бысраҡ кейемдә килдең? – тигән булып бәйләнә. Ә үҙенең йоҙроҡ терәр ере юҡ – көҙгө себеш тәк себеш.

-- Һин мине, егәрле механизаторҙы, әҙәм аҡтығы һанайһың? Тракторист ғорурлығына яҫҡанаһың? Хөрмәтле эш кейемемдән көләһең?! – тип туҡый-туҡый, яңағына ипләп кенә бер-нисәне ҡундырҙым. Сиңерткәләй сырылдап барып төштө бахырың. Тамам өйрәтә инем, ярай иптәштәре алды аралап. Сыр-сыу ҡубып битәрләй-битәрләй, аҡландан һеперелделәр. Хатта ҡыҙҙарына тиклем ҡуҡыш күрһәтеп китте. Тракторист ғорурлығын ҡурсалап ҡырҡышыуымды аңламағанлыҡтарына хәтерем ҡалды...

...Октябрь байрамына ҡарата йәштәр концерт әҙерләй ине. Фәтих ахылдап килеп еткән:

-- Үҙең алдынғы тракторист, үҙең йәмәғәт эштәренән ситтә тораһың. Ярамай алай, әй. Үҙәшмәкәр художество түңәрәгендә ҡатнашырға кәрәк, -- тигән була.

-- Ундай түңәрәккә беҙҙең ише майлы кейемдәр кәрәкмәйҙер ул, -- тинем.

-- Юҡҡа үпкәләйһең, әй. Культуралы кеше обществоға сыҡҡанда эш кейемен ҡалдырып йөрөй инде ул, -- тип һуҡалай.

-- Общество майлы эшемде ярата бит. Шулайғас, майлы кейемемде лә өнәһен! – Ауыҙын томаланым да ҡуйҙым бахырҙың. Йүнле бер һүҙ ҙә әйтә алманы: “Һинеңсә мин дә, мал янында эшләгәс, кеше күҙенә тиҙәк ҡатҡан халатым менән итегемде кейеп сығырға тейешмен икән, алайһа... – тип мыңғырҙап китте...

Иртән байрам тигән алтынсы ноябрҙә автобуста ҡалаға ҡарай юл тоттом. Пар ҡаҙ һалған тоҡто яныма ҡуйып, алғы ишектән ингәс тә уң яҡтағы оҙон креслола бәүеләм. Өҫтөмдә яҡшы йөн костюм, трактор майы тигәндең еҫе-коҫо юҡ. Ҡалалағы ағайымдарҙа ҡунаҡ булырымды күҙ алдыма килтереп барам. Вәт унда аңларҙар, исмаһам, трактористың ғорур йөрәген. Ауылдыҡылар түгел инде һәр хәлдә. Ундай ысын обществола тракторисмын тигән трактористың яҡшы кейенә лә белгәнен күрһәтермен!

Ҡатырып үтекләнгән салбарбалаҡ киртләстәрен таушалыуҙан ҡурсалап, боттарымды тәртәләй һоноп ултырғанмын. Үткән-һүткән һантыйҙары эләгеп йығыла яҙалар ҙа күҙҙәрен аҡайтып ҡарайҙар. Тәмләп-баплап әрләгеләре киләлер бахырҙарҙың. Ләкин шымартылған таҡта балаҡтарымды күргәс, йөҙҙәре яҡтыра:

-- Ҡунаҡҡа китеп баралыр, күрәһең. Байрам алды бит. -- Йылмайышып һөйләшәләр үҙ-ара. Аяғөҫтө тороусылар ҙа бүтән саҡтағыса: "Креслонан тоғоңдо ал. Урын бир!" – тип бәйләнмәйҙәр. Форсат табып ҡалаға байрам күргә китеп барған эш кешеһе икәнемде танып хөрмәт итәләр.

Ҡалаға етәрәк туҡталышта ике һөмһөҙ – бензин мазутлы көпәйкә, икенсеһе аҡ эзбизгә ҡатҡан комбинезонлы иҫеректәр ырғып менде. Мазутлыһы, тоғомдо этеп ебәреп, уң яғыма ҡыҫылышып ултырҙы. Эзбизләһе ҡаршыма баҫты. Шуларҙан ҡурсаланып, тайшанырға итеп ҡарайһам да булмағас:

-- Эй, һөмһөҙ һыйыр! Ҡаҡашҡан өҫ кейемең менән ҡайҙа өңөләһең?! – тип һөрәнләнем. Исмаһам, ҡолағын да һелкетмәне:

-- Дөмфиулла, бынауы йөнтәҫ хөллә-ҡараҫкының тоғон алып еллә лә осаңды йомшаҡҡа йәпләштер! – тип әшнәһенә өндәште. Эзбизләһе минең аяҡты тапап, тоҡто иҙәнгә бираҡтырҙы, ә үҙемде тоҡ урынына этәреп, "лап!" итеп һул яғыма ныҡлы төпләнде. Мин, тәпегә төшкән сыҫкандай, мазутлы һәм эзбизле ике яурын араһында өп-өр-яңы костюмда килеш ҡыҫылып ҡалдым.

-- Культураһыҙ хайуандар! Ниңә бысраҡ кейем менән автобуҫҡа индегеҙ? – Ярһып, урынымдан ырғылдым.

-- Фәләнсә баш! Беҙҙе хайуанға һанайһыңмы ни әле?! – Эргәмә баҫтылар ҙа икеһе ике терһәк төбөмдән ҡамтарҙылар. – Эш кешеһен хөрмәт итергә өйрән, паскуда! – Шул ыңғайы креслолар аралығынан көлтә кеүек ышырылып, кемдәрҙеңдер аяҡ аҫтына һөрләктөм. Ҡатын-ҡыҙ сырылданы, тормоз сыйылданы, автобус туҡтаны. Бала башы ҙурлыҡ ҡара йоҙроғомдо бизмәнләтеп, йәберләүселәремә ташландым. Ләкин һис көтмәгәндә беләгемдән милиционер әләктереп алды – ҡала урамында тора икәнбеҙ...

Милиция бүлегендә теге ике шапшаҡты бик шәп итеп утлы табала бейеттеләр. "Был дундук бит беҙҙе хайуандар тип атаны", -- тип аҡланып маташты бахырҙарың.

-- Атар ҙа шул. Ниңә культуралы халыҡ араһына бысраҡ өҫ менән индегеҙ? Күрегеҙ: культуралы егетте үҙегеҙ кеүек үк бысратҡанһығыҙ. Башҡаларҙы әҙәмгә һанамайһығыҙмы әллә?

Миңә артыҡ бәйләнмәһәләр ҙә, әллә ниңә ике битем ҡыҙарҙы, ҡолаҡтарым сыңланы. Протоколға нисек ҡул ҡуйғанымды ла белештермәнем...

...Ағайыма пар ҡаҙлы тоҡто тапшырып, байрамға ҡалмайынса, шул уҡ кисен ауылға ҡайтып төштөм. Йыуынып-таҙарынып, иң яҡшынан кейенеп, Фәтих ойошторған байрам концертында бынамын тигән ике бейеү номеры менән ҡатнаштым. Тракторист ғорурлығым ҡушты.

1965.

Бер көнлөк браконьер

Яҙ булды, йылғалар ажғырып ташты, Ҡаҫмарт һыуын ау һәм мурҙалар ҡапланы. Күптәр араҡыны, ең еҫкәүҙән туҡтап, балыҡ ҡабып эсә башланы. Мырҙағол бабай бер көн эсендә генә лә ҡырҡ биш һумлыҡ балыҡ һатты. Ҡаҙанында балыҡ һурпаһы ҡайнамаған йорт ҡалманы бөтөнләй. Тик мин меҫкен генә һаман гәзиттән рыбнадзорҙың балыҡ тотоуҙы ҡәтғи тыйған дәһшәтле

ҡарарҙарын уҡып, өлөшөмдө ҡалай кәнсир эсенән аулауҙы дауамланым. Тик был да оҙаҡҡа барманы – нескә нервы тамырҙарым тарттырылған арҡандай шартлап өҙөлдө.

-- Ниңә бүтәндәр суртан арҡаһы тумыра ла, мин сельпоның бынан өс йыл әүәл ҡайтартҡан күкен ҡойроғон һурып сикләнәм? Мырҙағол бабайҙыҡы кеүек ҡарын миндә лә барҙыр бит ул, яҡшы ашҡа ямаулыҡһыҙ яҫы ауыҙ миндә лә асылып торалыр! – тип нәфрәтләндем, сыҙамай. Бер ял көндә, йортомдоң әүәлге хужаһынан ҡалған иҫке мурҙаны аҙбар сарҙағынан һөйрәп төшөрҙөм дә йылға буйына дөндөм.

-- Юл булһын, мырҙам! – тип сәләмләп осратты мине Мырҙағол, оҙон күпер ауыҙында. Арҡаһына ярты тоҡтай балыҡ йөкмәгәйне, хәйерһеҙең. “Ах йыртҡыс! – тип эсемдән нәфрәтләндем. – Ҡаҫмарт балығын бер һиңә генә ҡороторға тимәгән! Закон тигән нәмәне уны ҡағыҙға баҫыу өсөн генә ҡулланалар, ахыры, юҡһа былай тоҡлап ташымаҫ инең! Рыбнадзор менән урындағы хакимиәт ни ҡарай?!”

Асыуымды шулай ҡандырғас, Мырҙағол бабай һалған һуҡмаҡҡа төшөп, мурҙамды уның мурҙаһы алдына батырҙым – балыҡтары минекенә кереп һемәйһен әле ҡарт шайтан!

Сытыр-сатыр йыйҙым, усаҡ дөрләтеп ултырып солғау киптерҙем. Төшкә ҡәҙәр шулай һағалап аҙапланғас, оло тоғомдо йәтешләп, мурҙаны ҡараным. Йәлдәү тотҡан саҡта ярһып ҡаҡҡан йөрәк, мурҙа өҫкә сыҡҡас, туҡтап ҡалғандай булды: һуҡыр сабаҡ та төшмәгән бит, исмаһам! Ҡалтыранған ҡулдар менән услап, мурҙаны ҡабат батырҙым, ҡабат ут яҡтым. Тик кискәсә көтөргә түҙемлек ҡалманы. Эңер төшкәс килеп ул минекен ҡарар – иҫәп-хисап теүәлләнер, тигән тоғро фекергә таянып, Мырҙағол бабайҙың мурҙаһын һәрмәнем. Күтәреп, ярға сығарыу шаҡтай көс талап итте. Ярты ботлоҡ бер суртан, көрәк яҫылыҡ бер сазан һәм быйма ҡунысындай йыуан бер шамбы менән йылтыр ҡабыҡлы бер ҡорбан, шап итеп, тоғома инеп ятты. Ситлек төбөндә ырғышҡан бармаҡ буйы ике күкенде лә буш ебәрмәнем, иш янына ҡуш итеп, дөйөм табышҡа өҫтәнем. Белһендәр беҙҙең кем икәнде!

Ә шулай ҙа көноҙоно ярҙа суҡайып ултырғас, ҡорһаҡта бүреләр олой, тайҙар юрта башлағайны. Малай саҡта көлгә күмеп ашаған сабаҡтар иҫкә төшөп, ауыҙ һыуҙарым ҡойолдо; йылтыр тәңкәле ҡорбанды тиҙ генә йәшел әрекмән япрағына төрнәп, усаҡҡа йәтешләнем. Тап шул мәлдә эргәмә, ауылыбыҙ магазинының һатыусыһын ҡырандасына ултыртып, фуражкаһын имән япраҡ һүрәте менән биҙәгән зәңгәр кителле бер бәндә килеп туҡтаны.

-- Әһә! – Тантаналы екерҙе ул миңә, -- Эләктеңме, айғолағыңдан ҡаптыңмы яуыз браконьер! – Һәм тоғомда борғосланған һимеҙ шамбы ҡырандасына “шап!” итеп менеп ятты.

-- Хаҡығыҙ юҡ! – тип әсенеп нәфрәт белдерҙем. – Был – һыу балығы! Шәп булһағыҙ, имән япраҡлы фуражкағыҙҙы кейеп, урманығыҙҙы һаҡлағыҙ!

Бәндәм яурынына арҡыры ҡайышлап аҫылған, дөкәмиттәр тултырылған ҡыр сөмкәһенә йәбеште:

-- Әллә ҡағыҙ-ҡәләмдәремде һурып сығарғанды, акты-факты төҙөгәнде теләйһеңме, браконьер?! Ике күҙе уттай янған шаһит та ҡарап тора – бына ул!

Шымдым, телемде тешләнем. Шамбым иһә ҡырандастан аҡрын ғына ҡойроҡ болғап хушлашты...

Көлгә күмгән ҡорбанымды әйләндереп һалырға ла өлгөрмәнем, дөбөр-шатор итеп, бер төркөм мылтыҡлы ағай-эне тейәлгән “Москвич” килеп төртөлдө усағыма. Ишеген сыйылдата асып, ҡырыҡ дүрт үлсәмле резин итек кейгән дәү ағай килеп төштө. Һыңар ҡулы тоҡтағы сазанға һуҙылды, икенсеһе район һунар инспекцияһы башлығының ҡатырға тышлы танытмаһын танауыма елпене. Мылтыҡлы ағай-энеләр ҙә эркелешеп ергә төштөләр, мурҙалар ятҡан тәңгәлгә саптылар. Күҙ асып-йомғансы суйын ҡаҙан аҫылды, боҡорҙап балыҡ һурпаһы ҡайнай башланы. Шап та шоп бөкө ырғылған, стакан сыңлаған ауаздарға күмелде төйәк. Көл аҫтынан ҡорбан балығымды тырнап алып ҡуйынға тығып, тоғомдо әләктереп, тиҙ генә тайырға булдым. Ләкин танһыҡ улъямдың был өлөшөн дә иҫән-имен апҡайтып еткереү яҙманы миңә. Оҙон күпер ауыҙында ғына, балта ҡыҫтырған олатаһын эйәртеп, урман төбәгенән сығып килгән ауыл Советы рәйесе осраны. Тоғом эсенә күҙ һалып, кәшкәй ауыҙлы суртанды күргәс, шып-туҡтаны. Кеҫәһенән йыйылмалы метр сығарып, суртандың буйын, йыуанлығын үлсәне, түбәһендәге төртөктәрҙе хисапланы – бөтәһен ҡуйын дәфтәренә теркәне. Браконьерлыҡҡа ҡаршы закондың ҡурҡыныслы статъяһын яттан һөйләп ишеттергәйне, арҡам буйлап тараҡандар йүгерҙе. Иртән ауыл Советына тарттырасаҡтары шөбһәһеҙ ине.

-- Хәйерле сәғәттә суртаныңды ысҡындырып ҡотол, мырҙа, эшең тәрәнгә китеп бара! – тип бышылданы ҡолағыма рәйестең олатаһы. Иҫем-аҡылымды йыйып, суртанды ҡулына тоторҙом:

-- Мин быны... һиңә... һиңә бүләк итергә тип килә инем, олатай...

...Ике күкенде тоҡ төбөнән һәрмәп алып, тоҙға мансып, кәрниз буйына ҡаҡларға элдем. Ауыҙ һыуҙарым ҡойолоп, аш өйөндә өҫтәлгә һалған беше ҡорбанымды ауыҙ итергә йүгерҙем. Ауыҙымды асам ғына тигәндә, ишекте дөп-дөп ҡаҡтылар. Күршем Фәтҡулла килеп инде. Ул, һәр ял көндәгесә, шөйлә ҡыҙмаса ине.

-- Минең халыҡ дружинаһында ағза икәнемде беләһеңме һин, ағай? Ниңә көпә-көндөҙ браконьерлыҡ ҡылып, кәрниз буйыңа бер түгел ике балыҡ аҫтың? -- Өҫтәл эргәһенә ларҡайып ултырҙы, тәрилкәләге ҡорбанға күҙ төбәне.

-- Аша, күрше, аша! – тинем, инәлеп. -- Әле генә һинең инереңде белеп, еңгәң бешереп ҡуйғайны...

-- Ярар, алай бик тә ялынғас, тәрилкәһе менән алып китәйем, киленең балыҡ көҫәгән.

...Фәтҡулланы оҙата сыҡҡанда, кәрниз буйында шомло шытырҙауға иғтибар иттем. Йөрәгем өҙөлөп төшөрҙәй булды: теҙгестәге ике күкенемә дружинник күршемдең һағыҙ ҡомғанына оҡшаған ҡара бесйе аҫылынып тора ине...

Ҡәһәр төшкөр бер көнлөк браконьер яҙмышы! Ысын браконьер булыу өсөн донъяла күп нәмәләр белергә кәрәк икән!

1965.

Иблескә көн бөттө

I

Байрам һайын саҡырышып, гөрләтеп ҡунаҡ булыша инек ут күршем Фәсҡитдиндәр менән. Һуңғы ике йылда арабыҙға ҡара бесәй йүгерҙе. Күрше ҡатынының, алты айлыҡ курс бөтөп, повар дипломы алып ҡайтыуы сәбәпсе булды быға. Ҡунаҡҡа барған һайын, табындаштар был хужабикәнең аш-һыуын маҡтанылар, һәр ҡабымын телеңде йоторлоҡ итеп әҙерләүен әйттеләр. Мин дә маҡтаным. Маҡтаным һәм... Фәсҡитдин ҡатынының даны ни ҡәҙәр артһа, үҙемдең Мәфрүзәмдең миңә булған йылы ҡарашы шул уҡ миҡдарҙа һүрелеүен тойҙом. Тик һуң ине инде. Күршеләрҙе айырған күҙгә күренмәҫ ҡойма ырғып сыҡҡыһыҙ бейегәйҙе, рәхәтләнеп ҡунаҡҡа йөрөшөүҙәр төштәгеләй генә ҡалды. Бисәм ағас игәүгә әйләнде. Ҡунаҡ саҡырыу, табын өсөн аҙыҡ-түлек мәсьәләһе ҡупҡан һайын, ғүмерҙә ҡыланмағанын ҡыланып, муйынымды игәне. Бигерәк тә байрам табыны әҙерләгәндә ныҡ ышҡыны был игәү. Мәжлес етерҙән өс көн элгәре үк, минең кәйеф боҙола, уң күҙемдең өҫкө ҡабағы тарта. Күп тә үтмәй, ҡаныма ағыу тамыҙа бисәм:

-- Кеше ирҙәре – ир кеүек, минеке диванға тоташҡан ата бесәй кеүек. Ишекле өйҙөң түре дүртәү, тигәндәй, ҡунаҡ-килем булырын белеп тораһың, һый яғын ҡайғыртмайһың.

Язаның башланыуын һиҙеп, ҡулымдан гәзитте һалам:

-- Һөйөклөм, мин ҡайғыртҡандан ни науа? Барыбер яратмайһың алған нәмәмде.

-- Яратырлыҡ итеп эшлә. Кеше ирҙәре...

-- Ай Алла, үҙең әйтмәгәс, һиңә нимә кәрәген ҡайҙан беләйем?

-- Белмәгәндең беләге тыныс шул. Кеше ирҙәре, сөмкә аҫып, ҡара таңдан баҙар ҡыҙыра, өс көн элгәре сират йөрөп иттең аҫылын ала, ә һин...

Дивандан һыпырылам, сөмкәне беләгемә элəм.

-- Ҡайҙа йыйындың? – Муйылғара күҙҙәрен төймәләй түңәрәкләндерә Мәфрүзәм.

-- Һуң, үҙең баҙарға ҡыуаһың дабаһа.

-- Хәстерүш! Ишерһең ишәк сумарын! Һиңә ышанып, минме һуң инде кеше бисәләреләй йәнем тынып өйҙә ултырған? Аҙым һайын артыңдан һаҡсы кәрәк. Бисәңдән етәкләттертеп йөрөмәгәс, эшең эш буламы ни һинең! – Мәфрүзәм ашығып кейенә, минең менән бергә йүнәлә.

Ит баҙары буйҙарын бер-нисә ҡат әйләнеп үтәбеҙ. Бисәм, сөмкәһенән сәнске алып, һәммә иттәрҙе лә төртөп ҡарап сыға. Бәҙзе киҫәктең һөйәге күп, бәҙзеһенең һум ите ҡалын, бәҙзеһе һурпалыҡһыҙ. Шунан сәнскеһен ит өҫтәленә атып бәрә лә миңә боролоп ҡарай:

-- Ниңә ауыҙыңа һыу уртлап ҡаттың, күҙле бүкән? Һинең өсөн кем һатыулашырға тейеш? Ана, кеше ирҙәренән фәһем ал, исмаһам.

-- Ана шул тотҡан киҫәгең арыу бит инде, -- тим.

-- “Арыу-арыу!” Һинең кеүек һуҡыр тауыҡҡа барыһы ла тары, фәҡәт бешеп, алдыңа ғына килеп ултырһын. Байрам табынында ҡатыныңдың йөҙө ҡыҙарыры ике ятып бер төшөңә кермәй шул.

-- Һуң, ни тип әйтәйем инде былайғас?

-- Йыбытҡы! Һиңә эйәреп баҙарға сыҡҡан мин – алйот. Һиңә ышанһаң, ауыҙыңдың һыуын һурып ултырырһың! – тип зарлана бисәм, шулай ҙа мин әйткән киҫәкте үлсәтә.

-- Ҡайтып барышлай, гастрономға һуғылабыҙ. Бисәм – ашамлыҡ, мин – эсемлек бүлегенә ҡайырылабыҙ. Йомошто йомошлап, сығыр юлда ҡабат килеп ҡауышҡас, хәләл ефетем сөмкәне астыртып ҡарай:

-- Уйланым да, бер-бер эш бөлдөрөп йөрөйҙөр, тип! Ниңә ҡара шешәлеһен алдың, әллә күҙең тондомо?

-- Шешәһендә ни хикмәт, эсендәгеһе аҡ булғас, -- тип ҡотолорға тырышам.

-- Һәй, сей ҡамыр, бешмәгән! Күпме туҡыным мин һиңә, ҡара шешәлене алма, табынға ҡаралыҡ бөркә, тип. Ни битең менән табынға ҡуйырһың икән инде шуны?.. – Ай-вайыма ҡарамай, ҡара шешәлене аҡҡа алмаштырырға ебәрә. Һатыусыны күндерә алмай, ҡара тиргә батып ҡабат киләм. Бисәм юл буйы игәп ҡайта.

Өйгә ингәс тә, араҡыны – шкафҡа, итте һыуытҡысҡа тығып, “күршеләрҙең тынын тойорға” йүгерә. Ярты сәғәттәй үткәс, ҡобараһы осоп ҡайтып керә:

-- Кеше ире – ир кеүек, минеке туң утын кеүек. Кәпәслең йүнсел булмағас, ҡайҙан килеп йортҡа ҡот ҡунһын да аш-һыуыңда тат булһын, -- тип игәүләй, ишекле-түрле йөрөп. – Бынамын тигән һыйлы билдәмә алып ҡайтып ҡуйған Фәҫкитдин күршең, бөйөр майҙарын күрһәң, иҫең-аҡылың китерлек. Һин генә ул ҡатыныңа һалынып көн итәһең.

Тештәремде ҡыҫып, гәзиткә тотонам, ә бисәм, һыуытҡысты шартлатып аса:

-- Кил, күр “арыу” ҙа “арыу” тип алдыртҡан үләкһәңде! -- Өндәшмәй ултырыуыма, һаман гәзит ҡыштырҙатыуыма талағы ташып, бүлмә буйынса арылы-бирелә йүгергеләй, өҫтәлдәге журналдарҙы бирәң-тараң килтерә. – Күҙле бүкән! Һин, моғайын, әҙәмсә һыйлай ҙа белмәҫһең әле ҡунаҡтарҙы. Мөкиббән китеп һыйырҙай эсерһең дә, картуф танауыңды өҫтәлгә терәп, “Ҡолой кантон”ыңды үгеҙ кеүек үкерерһең.

-- Ҡунаҡтар ҙа ҡушыла бит...

-- Ҡушылмай нишләһендәр, үҙҙәре лә тап һиндәй булып алғас...

-- Алайһа, тамсы ла ҡапмам был юлы, һөйөклөм, -- тип хәлде төҙәтергә тырышам. – Табынға ла ултырмам, аяҡсы булып ҡына йөрөрмөн...

-- “Йөрөрмөн, йөрөрмөн!” Һинең урынға мин ҡыҫтармынмы ни ҡунаҡтарҙы? Мин сәкәштererменме?

-- Һуң, ни хәл итәйем инде, алайһа? Һиңә -- эсһең дә яман, эсмәһәң дә нехорошо, – тип ҡылтаям. – Был юлы ҡунаҡ саҡырмайыҡ та ҡуяйыҡ, булмаһа, һөйөклөм. Ниңә алай бер-беребеҙҙең бәғерен телгеләргә? Рәхәтләнеп, үҙ ғаиләбеҙ түңәрәгендә генә ҡаршылайыҡ байрамды.

Телемде тешләрҙәй булдым – бисәмдең муйылғара күҙҙәре бильярд шарҙарылай тумалаҡланып, әсе йәшкә мансылды:

-- Һинән йүнле һүҙ ишетеү ҡайҙа инде ул! Күрше-күлән өй тултырып ҡунаҡ саҡырғанда ҡатыныңды ил ҡаршында хур итер инең, буғай. Фәскитдин күршеңдән үрнәк ал, исмаһам! Байрам һайын түренән ҡунаҡ өҙөлмәй, шаталаҡ ҡатынын бөтәһе маҡтап һөйләй. Кеше ҡатындары күргән ҡәҙер-хөрмәт юҡ шул инде ул миңә...

Байрам алды көнөнөң кисен еткерәбеҙ шулай. Ҡунаҡтар килеп бөтөп, байрам табынына йыйылғанда нервы тамырҙарым эскерипкә ҡылылай тартылған була. Бисәм, май сәскәһеләй асылып, ҡунаҡтарға ҡәҙер-хөрмәт күрһәтә, ә мин, ҡобарам осоп, суйын ҡомғанға оҡшап ҡатып ултырам. Һабан һөргән ас үгеҙҙәй йонсоп, мәжлесте саҡ ослайым, ниһайәт. Табын таралып бөтөүгә, тамам хәлдән тайып, ишек төбөндәге кушеткаға ауам.

-- Ниңә башына ҡаҙыҡ ҡағылған ҡара йыландай һуҙылдың? Ҡунаҡтарҙы туҡталышҡаса оҙатып та ҡуйманың, исмаһам. Тумҫайыуың ҡасан бөтөр икән һинең? Кеше ирҙәре, ҡатыны мәжлес ҡорһа, алмалай тәгәрләп йөрөй. Фәскитдин күрше...

Эскерипкә ҡылым шунда шартлап өҙөлә кинәт. Ғәҙәттәге бошмаҫлығымды юйып, ырғып торам, иҙән тибеп аҡырам. Асҡан ауыҙын йома алмай иҙән уртаһында ҡатып ҡалған ҡатынымды тамам алйытып, ҡунаҡтарҙан ҡалған тулы стакан араҡыны тамағыма ҡаплайым, ҡолаҡтарымды баҫып, кушеткаға кире ауам...

II

Яңы йыл алды ығы-зығыһы ла тап әле һөйләгәнсә барҙы. Әммә айырма шунда: был байрамда күп ҡунаҡ саҡырылмай, яҡын туғандар менән генә ултырып ҡаршылайбыҙ. Ә шулай ҙа, оло өйгә нимә кәрәк – кесе өйгә лә шул кәрәк, тигән бит аҡһаҡалдар. Табын ҡоройға өс көн ҡалды, тигәндә, нервы тамырҙарым тамам ҡаҡшаны.Эштән ҡайтып инеүемә яғанан алды бисәм:

-- Ишетһен ҡолағың: Фәскитдин күршең был юлы ла танауыңа сиртәсәк. Осонорға әҙер бит шаталағы – беҙ белмәгән әллә нисә төрлө һый буласаҡ, ти табындарында. Бер-берәй аҡыллы ир булһаң, хәл белә ингән булып, аңдып-күреп сығыр инең, исмаһам. Ҡайтаһың да тутыҡҡан тәреләй һерәйеп ултыраһың.

-- Кеше табынын барлап йөрөү килешмәҫ, үҙебеҙсә эшләйек, -- тинем. Мәфрүзәм өндәшмәне. Дөрҫ-ларҫ баҫып, кухняға сығып китте.

-- Һөйөклөм, -- тип стена аша ялынырға мәжбүр булдым, -- ниңә байрам алдынан кәйефте боҙаһың?

Алъяпҡысын ялпылдатып, уҡтай атылып сыҡты:

-- Һиңә кәйеф кәрәк тә, миңә кәрәкмәйме? – Һыулы таҫтымалын өҫтәлдәге гәзитемә шапылдатып һуҡты, шарылдап илап ебәрҙе. – Һиңә нимә: үгеҙ үлһә -- ит, арба ватылһа – утын. Ҡатыныңдың абруйын ҡайғыртмайһың! – Дивандағы мендәргә ҡапланып иланы. Күҙ алдарым ҡараңғыланып, иңбашынан ҡосаҡланым:

-- Мәфрүзәкәйем, ташла шул ғәҙәтеңде – күрше менән ярышып ҡунаҡ саҡырыуыңды! Бер генә байрамды булһа ла әҙәм рәтле шатланып үткәрәйек.

Ишетмәне лә, өндәшмәне лә -- һулҡылдап ята бирҙе.

-- Алайһа, Фәсҡитдин күршеләргә кереп ултырайыҡ. Үҙең беләһең, һөйөклөм, улар беҙҙе быйыл да Иҫке йылды бергә оҙатышырға саҡырҙы. Шунда үҙебеҙ күрербеҙ һәм тәмләп тә ҡарарбыҙ.

Бисәм мендәр туҡмап үкһене:

-- Күршеләрҙән кәм-хур итмәк булаһың икән мине. Үҙем ҡунаҡ саҡырмайса, шаталағының ҡунағына барып ултырмам инде мин! Уныҡынан ҡай ерем кәм? Үҙ ҡатыныңдың абруйы һуҡыр тин икән һиңә!

Ике ҡулым менән башымды тотоп, сығыу яғына йүгерҙем.

-- Ҡайҙа бараһың, эй, туҡта! – Ырғып торҙо илаусым.

-- Ҡайҙа булһын, әлеге лә баяғы, шул атаҡлы Фәсҡитдиндәреңә инде – табын хозурын байҡарға!

Йылғалары күҙ асып-йомғансы ҡороно:

-- Бөтә аш-һыуына күҙ һал, холодильниктарын асып ҡара, береһен-бер ҡалдырма, абайла уны! – Майлаған ҡайыштай йомшарып, артымдан оҙатып ҡалды. Илар сиккә етешеп, “Ниңә был донъяла байрам тигән бәлә бар икән?” тип һуҡрана-һуҡрана, күршемдең ишеген ҡаҡтым.

Мин килеп ингәндә, Фәсҡитдин күршем, көн элгәре байрам һыйҙары йыһазландырып булашҡан тәкәббер сырайлы хужабикәһенә арҡаһын әйләндереп, һөмһөрө ҡойолған хәлдә, диванда гәзит ҡыштырҙата ине.

-- Абба! Күрше килгән бит! Был күршенең дә байрам алдынан килеп ишек асыры бар икән! – тип аптыраны ул.

-- Беҙҙең күршеләр эре: саҡырып та килмәйҙәр, -- тигән булды ҡатыны.

-- Ә үҙегеҙ килдегеҙме һуң беҙгә? Ике атлап, бер аяҡ баҫмайһығыҙ.

-- Үҙебеҙ ҡунаҡ саҡырабыҙ шул һәр ваҡыт.

-- Беҙ ҙә тап шулай инде.

Шул арала Фәсҡитдиндең һөмөрөһө асылды:

-- Баҫып торма әле, күрше, ултыр. Яҡынлашып килгән байрам хөрмәтенә икәүләшеп бер төшөрөп алайыҡ! – тип шатланды. – Юҡһа, бынау сепрәк башлым менән низаҡлашып, кәйеф китеп тора ине. Ни өсөн, тигәндә, һинең сепрәк башлың менән кемуҙарҙан ярышып ҡунаҡ саҡыра-саҡыра, теңкәгә тейҙе бит, әй. Һуңғы ике йылда һин күршем менән бер рәхәтләнеп табында ултырған юҡ: һеҙ саҡырған ғына һайын, үс иткәндәй, беҙ ҙә ҡунаҡ саҡырабыҙ...

-- Минең дә хәл шундайыраҡ, Фәсҡитдин күрше...

-- Әйҙә, алайһа...

-- Әйҙә, Фәсҡитдин күрше...

Шул арала “шаталағы” буласаҡ байрам табынының һыйҙарын килтереп өйҙө, күршем мөлдөрәтеп ҡойҙо. Гөлдөрләшеп кенә берәр бәләкәсте бушаттыҡ.

-- Күршемә һүҙ юҡ, -- маладис, -- тип дауамланы Фәсҡитдин, -- тик ҡатыны уҫал.

-- Һинең менән миңә ҡалһа, бер ҡалаҡтан ашар кешеләр ҙә беҙ, бисәң эште боҙа шул, -- тинем. Артынса уҡ берәр ҙурҙы ла шыпылдатып түңкәрҙек.

-- Күршебикәнең һыйҙары тәмле икән – бер ҡабыуҙан ожмахҡа илтеп һала, -- тинем. – Беҙҙеке лә, һантый, кешенекенән уҙҙырам, тип маташа әле.

-- Әү? – Хужабикә елтерәп килеп етте. – Нимәләр әҙерләне?

-- Күп, һанап бөтөрөрлөк түгел. Мин белмәгән әллә нәмәләре бар.

-- Ә шулай ҙа?

-- Ниңә төпсөнәһең, -- тине Фәскитдин күршем, -- кәрәк булһа үҙең бар ҙа күр. Ике аҙым ара... – Һәм йәне көйөнөп өҫтәкләне. – Бына күршем килгән бит – аяғы өҙөлөп ҡалмаған!

-- Барырмын да! Әллә һеҙгә генә байрам да беҙгә байрам түгелме?! – Хужабикә, барлыҡ эштәрен ташлап, ишекте “шарт!” ябып сығып китте. Бер юлы тәҙрәгә ҡапландыҡ:

-- Бәй-бәй, минең ҡатын, ысынлап та, тура һеҙгә кереп китте түгелме, күрше?

-- Ысынлап та, тура беҙгә кереп китте шул.

-- Хәйерлегә була күрһен! Тотайыҡ тағы берҙе.

Ҡыҫҡаһы, икәүләшеп “Азамат”ты һыҙҙырҙыҡ, иҙәндәге түңкәреүле самауырҙы ҡолатҡансы бейенек. Ҡосаҡлашып, һауа һуларға сыҡтыҡ.

-- Әйҙә, киттек беҙгә! – тинем. – Бисәләребеҙ, беренселекте бер-береһенән көнләшеп, сәстәрен йолҡаларҙыр...

-- Киттек, күрше. Бысаҡҡа-бысаҡ килешәләрҙер.

Индек һәм... ишек төбөндә шаҡырайып ҡатып ҡалдыҡ. Ике күршебикә, игеҙәктәрҙәй йылы ҡосаҡлашып, ҡуш ауаздан “Сәлимәкәй”ҙе һалдыралар, алдарында аш-һый, мөлдөрәмә бокалдар.

-- Ҡхым... – тип һүҙ башланы Фәскитдин. – Табын түңәрәгегеҙҙән, бәлки, хәләл ятыларығыҙға ла йылы урын бирерһегеҙ? Күрше хаҡы – Тәңре хаҡы бит.

-- Яҡынлашып килгән Яңы йылдың аяғын йыуыр алдынан бергәләшеп ошо Иҫке йылды оҙатып ҡалыу, моғайын, беҙ фәҡирҙәрегеҙгә лә мотлаҡтыр? – Бығыһын мин өҫтәнем. Тамаҡ ҡырып, ҡаш һикертеп, бер урында күпме тапанһаҡ та, әйләнеп ҡараманылар, ҡосаҡлашҡан килеш бәүелә-бәүелә, аҙағынаса йырлап бөттөләр. Шунан һуң ғына, мөлдөрәмә тултырып, нескә билле бокалдарҙы беҙгә лә тотторҙолар:

-- Рәхим итештек, ғүмерлек һөйөклө күршеләр! Иҫке йыл менән ошо сәғәттә ошонда хушашлабыҙ! – тине ҡыҙҙарҙай ҡыҙышып алған Мәфрүзәм.

-- Һәм хәйерһеҙ иҫке ғәҙәттәр менән дә! – тип сәкештерҙе бокалын күршебикә лә.

-- Ур-ра!.. – Бығыһы беҙ икәүҙән. “Һаҡмар-һыу”ҙы дүртәүләшеп бер ауаздан көйләгәс, Фәскитдин күрше аҡыллы тәҡдим итте:

-- Иншалла, Иҫке йылды бергәләшеп һеҙҙең өйҙә оҙаттыҡ, күрше. Яҡынлашып килгән Яңы йылды инде ошолай уҡ гөлдөрләшеп беҙҙең өйҙә ҡаршылайыҡ!

-- Булды, беҙ ҡушҡуллап риза! – Һөрәнләүемде һиҙмәй ҙә ҡалдым...

Ә төн уртаһында бисәм ҡабырғама ҡаты төртөп уятты:

-- Һантый, ниңә “риза” тип әйттең? Мотлаҡ беҙҙең өйҙә ҡаршылайыҡ, тимәнең?

-- Барыбер түгелме ни? Ут күршеләр...

-- “Ут” түгел, ә мут күршеләр икәнен аңғармайһың. Иртүк тор ҙа: “Беҙ риза түгел, байрам табыны мотлаҡ беҙҙә булырға тейеш!” – тип електәренә һеңдер! – Шулай тине лә пырхылдап йоҡлап китте. Йөрәгем яман ҡағып тороп ултырҙым, кухняға кереп крандан һалҡын һыу эстем. Үткәндәрҙе бәйнә-бәйнә хәтеремдән

кисереп, бөгөнгөһөнә ялғап, киләсәкте күҙ алдыма баҫтырғас, таң атыуға тура эшемә киттем. Эштән ҡайтышлай Яңы йыл менән ҡотлаған ҡатын-ҡыҙҙар календары, сөм-ҡара түш буяуы, ҡылҡәләм һатып алдым. Өҫтәлгә йәйеп һалып, эшкә ултырҙым, байрам көндәрен билдәләгән ҡыҙыл һандарҙың бөтәһен тиң ҡалын ҡара тирәс эсенә алып сыҡтым. Шөғөлөмдө тын да алмай күҙәткән бисәм һорау бирмәйенсә түҙмәне.

-- Бына һиңә йыллыҡ календарь – күҙ алдыңа элеп ҡуй, -- тинем.

-- Ә ниңә ҡыҙылдарын ҡараға буяның?

-- Күңелеңә ауыр алма, Мәфрүзәкәйем. Хәләл ефетлек бурысым, ҡыйын булһа ла, дөрөҫөн әйтергә ҡуша. Егет саҡта нисәмә йылдар һөйөп йөрөнөм үҙеңде, беләһең... Сәсебеҙ сәскә бәйләнгәс тә һүрелмәне һөйөүем. Тик һуңғы ике йылда ғына арабыҙға иблес инеп ҡыҫылғанын төшөндөм. Ул яуыз, әленән-әле ҡара мәкерен ҡуйыртып, телдәребеҙҙе сарлай, табаҡ-һауытты шалтырата. Аҡты – ҡара, ҡараны аҡ итеп күрһәтә. Ике йыл буйы эҙмә-эҙ һынай торғас, Иблестең айырыуса ҡотороноу көндәрен теүәл билдәләнем. Календарҙағы ҡыҙыл көндәрҙе генә һайлап хөсөтләнә икән ул...

-- Шунан? – тине Мәфрүзәм, тауышы ҡалтырап.

-- Шул, бисәкәй, ултырған да шыуған! Календарҙағы гелән генә ҡыҙыл көндәр ғаиләгә кәйефһеҙлек килтергәнен, өйҙә буран уйнатҡанын иҫәпкә алып, мин уларҙың бөтәһен ҡараға тамғаланым. Бынан һуң ул “байрам” исемләнгән ҡара көндәрҙең бөтәһен дә өйҙән ситтә -- шаулы эш зауҡында үткәрергә, фәҡәт һинең, һөйөклө хәләл ефетем, кәйефең булған көндәрҙе генә байрам итергә булдым. Сумаҙанға таҫтымал, һабын, теш порошогы, алмаш күлдәк-ыштан һал: байрам осоронда үҙем теләп күрше ҡалаға командировкаға осам...

Бисәм танауын “мырш!” тартты ла өндәшмәне, ҡайҙалыр тайпаңданы.

Иртән тороуға баш осомда яңы календарь көтә ине. Ирҙәр календары. Ғәжәпләнеүемә ҡаршы, был календарҙың өс йөҙ алтмыш биш көнө лә байрамса сағыу ҡыҙыл төҫкә буялған булып сыҡты. Был юлы мин ғәжәпләнеп һораным:

-- Бәй, ниңә бөтәһе лә ҡыҙыл? Иблес-шаҡшы көн һайын киләсәкме ни?

-- Юҡ, аппағым, көн һайын беҙҙә татыулыҡ, байрам хөкөм һөрәсәк.

-- Ә Иблес?

-- Иблескә көн бөттө хәҙер!

Һуңғы ике йыл эсендә беренсе тапҡыр бисәмде ҡосаҡлап үптем.

-- Битеңде йыу ҙа, киске табынға тиклем, ауырткан башыңды төҙәтеп ал, аппағым. – Алдыма коньяк ҡуйҙы. – Ҡара уны, муллахмәтләп ташлама тағы, ҡунаҡ һыйына урын ҡалдыр. Үҙең һөйләшеп ҡуйғанса, Фәҫкитдин күршеләрҙең байрам табынына инәбеҙ.

Аллаға шөкөр, ысынлап та, Иблескә көн бөттө!

1966.

Авторучка

Муллыҡул Муллаҡаевич, ҡобараһы осоп, ҡыңғырау шылтыратты.

-- Автручка ҡайҙа олаҡҡан? – тине ул өтәләнеп килеп кергән секретарь ханыма.

-- Белмәйем шул, Муллығул Муллаҡаевич. Кисә генә яҙыу приборығыҙҙа – үҙ урынында тора ине.

-- Кисә генә торһа ла, бөгөн тормай шул. Барығыҙ, йыйыштырыусыны саҡырығыҙ!

-- Өйөндә бит әле ул...

-- Сығһын, елтерәһен!

Ике минут үтеүгә, тирләп-бешеп, йыйыштырыусы килеп етте. Өҫтәл өҫтөн, өҫтәл аҫтын, шкаф баштарын "дыу!" килтереп һәрмәне. Мөртәт яҙғыс бер ҡайҙа ла моронламағас, сүп кәрзинен түңкәрҙе иҙәнгә. Ләкин тырышлығтары елгә осто.

-- Ер аҫтынан булһа ла эҙләп табығыҙ! – тине Муллығул Муллаҡаевич, иҙән тибеп. – Үҙемдеке булһа, бер хәйер ине. Контора инвентаре – дәүләттеке бит ул. Дәүләт милкен күҙ ҡараһындай һаҡларға кәрәк!

Секретарь үҙ бүлмәһенең мөйөш-һәйештәрен айҡарға, ә йыйыштырыусы кисә сүп түккән урынды байҡарға ашыҡтылар. Муллуҡул Муллаҡаевич, маңлай һырландырып, кисә генә кабинетында кемдәр менән осрашҡанын, ниндәй ҡағыҙҙарға ҡул ҡуйғанын хәтерләне. Ләкин барыбер авторучканы ҡайҙа һалғанын иҫенә төшөрмәне.

-- Гаражға шылтыратығыҙ, -- тине ул, секретарен йәнә ҡыңғырау ярҙамында саҡырып алып, -- хәҙер үк бында машинаны жыйлатһындар!

-- Муллығул Муллаҡаевич, ғәфү итегеҙ, "газик" ремонтта, ә һеҙҙең "Волга"ға, үҙегеҙ рөхсәт иткәнсә, склад тикшерә барыусы инспекторҙар тейәлеп китергә тейеш. Аҫтыртын бурҙарҙың тамырын ҡороторға.

-- Эштәре таш түгел, өлгөрөрҙәр! Бында аҫтыртын түгел, ә күрәләтә дәүләт милке юғала – кисекмәҫтән эҙенә төшөргә кәрәк, аңлайһығыҙмы шуны?!

Секретарь ханым әмерҙе тапшырып телефон трубкаһын элеүгә, тәҙрә төбөндә генә өр-яңы "Волга"ның, һуҙып ҡына, "пу-у-умп!" иткәне ишетелде. Муллаҡай Муллаҡаевич, көйәләнеп, машинаға сығып ултырҙы. Кисә төшкә тиклем балыҡ магазины директорының серегән тауарҙарын, Аллаһы Тәғәләнең үҙенә тапшырып, кабинетынан алып киткән шул авторучка менән списать итеп ултырғайны. Дәүләт милке, бәлки, шунда тороп ҡалғандыр?

Балыҡ магазины ишегенә "Переучет" таҡтаһы аҫылған булып сыҡты. Муллығул Муллаҡаевич, туҡталып тормаҫтан, артҡы ишектән керҙе. Ихатала йөк машинаһы тора, уға тоҙло балыҡ еҫе аңҡыған ауыр-ауыр мискәләрҙе тәгәрләтеп мендерәләр. Үтеп барышлай ғына:

-- Ҡайҙа аткараһығыҙ? – тип саҡ ҡына ҡыҙыҡһынды.

-- Ванька Жуков яҙғанса, "ауылға – бабайға"... – Хихылдап көлдө бер ир.

Директор, клеенка алъяпҡысын бәйләп, склад мөдире менән берлектә кисәге "списанный" балыҡ мискәләрен әүеш-тәүеш килтерә. Түрәһен күргеп баҙаны – тубыҡтары ҡалтыраны.

-- Кисә һеҙ списать иткән боҙоҡ балыҡ, ыуылдырыҡ-фәләндәрҙе сускаға оҙатыу хәстәрлеген күрәмен, -- тине ул, ниңәлер ғәйепле йылмайып.

-- Ҡара уны, машинаңдың кузов төбө ныҡ булһын. Һикәлтәләрҙә һикерткәндә бер һуҡыр сабаҡ та, һыңар бөртөк ыуылдырыҡ та ҡойолмаһын.

Дәүләт милкен әрәм-шәрәм итеү ҙур енәйәт икәнде иҫтән сығарма! Кисә минең авторучка тороп ҡалмағанмы һеҙҙә?

-- Юҡ шул, Муллығүл Муллаҡаевич, ах әттәгенәһе!

Шәп-шәп атлап машинаһына ыңғайлағанында күрҙе: кузовтағы йөк тейәүселәр, мискә бөкөһөн асып, "боҙолған" ыуылдырыҡты ҡалаҡ менән ҡайырып-ҡайырып ҡаба, әммә авторучка ҡайғыһы иғтибар иттертмәне быға. Машина ишеген асам тигәндә кемдер еңенән тартты:

-- Әллә кисә "сусҡа" әфәнделәргә күстәнәс иткәндәрегеҙҙе ҡабат тикшерә килдегеҙме, Муллығүл Муллаҡаевич? Серек тигән ыуылдырыҡтан серемәгән еҫ килә... хатта ауыҙ һыуҙарын ҡойолдорта... – Күкрәге ал билдә ҡаҙаулы бер йәш комсомолка иҫкәртте быны. Муллуҡүл Муллаҡаевич ҡүл һелтәне:

-- Ул мәсьәлә хәл ителде бит инде! Ваҡыт тар. Мөһим эш менән йөрөйөм. – Эшсе ҡыҙға иғтибарын һүрелдереп, оҙатырға тип килеп сыҡҡан директорҙы күҙҙән кисерҙе. -- Әйт әле, кисә актыға ҡүл ҡуйғанымда ниндәй ручка ҡулландым, һеҙҙекенме?

-- Үҙегеҙҙең һары алтын ҡаурыйлы авторучканы, Муллығүл Муллаҡаевич.

-- Шунан һуң мин уны ҡайҙа һалдым?

-- Урынына һалдығыҙ, Муллуҡүл Муллаҡаевич.

-- Йәғни ҙә?

-- Һәр ваҡыттағыса, тышҡы түш кеҫәгеҙгә, Муллығүл Муллаҡаевич.

-- Дауам ит эшеңде!

Йылтыр "Волга" Муллығүл Муллаҡаевичты үҙенә бойондороҡло икенсе бер ойошма контораһына килтереп еткерҙе. Бында бысҡы зыңлай, өҫтәлдәр шыуҙырыла, шкафтар индерелә -- яңырыу мәхшәре бара ине.

-- Ғәфү итегеҙ, Муллығүл Муллаҡаевич! – Контора башлығы өлтөрәп килеп сыҡты. – Уңайһыҙ ваҡытҡа тура килдегеҙ бит әле... Яҡшы итеп ҡаршылай алманыҡ үҙегеҙҙе...

-- Нимә ҡуптараһығыҙ?

-- Кисә мин һеҙҙән конторама яңы штат берәмеге – "зам"ыма "пом" һорап барғас, ғаризама рөхсәт һуғып ҡүл ҡуйғайнығыҙ бит, Муллығүл Муллауаевич, хәтерегеҙҙәме? Бына шул өр-яңы вазифаға өр-яңы кабинет әтмәләп мәшәҡәтләнеү... Инеп күрегеҙ, Муллығүл Муллаҡаевич?

Оҫталарҙың береһе, бындағылар өсөн иң өлкөн етәксенең килеүен шәйләп, буғай, бысҡы тартыуын туҡтатты, мыйыҡ аҫтынан ғына мыңғырҙап ҡуйҙы:

-- Һе, штат өҫтөнә -- штат, нимә ҡарай был штаб?! Шыма ерҙән шеш сығарып, вазифа уйлап табалар, дәүләт аҡсаһын елгә осоралар!..

Ләкин үҙ ҡайғыһы башынан ашҡан Муллығүл Муллаҡаевич быны ла хәтер һандығының тышында торғоҙоп ҡалдырҙы, контора башлығына бороло:

-- Ваҡыт тар, ваҡыт тар! Хәтерләйһегеҙме, кисә мин, үҙегеҙ әйткән ул ҡағыҙға ҡүл ҡуйғас, авторучканы ҡайҙа һалдым?

-- Ғәфү итегеҙ, бөтәһе лә иҫемдә, тик ошоно ғына һис тә хәтерләмәйем бит әле...

-- Тимәк, дәүләт милкен бар, тип тә белмәйһегеҙ?

-- Ғәфү итегеҙ...

-- Һеҙҙең арттан минең кабинетҡа кем керҙе?

-- Местком рәйесе, Муллыкүл Муллаҡаевич. Хәтерегеҙҙәлер, банкет мәсьәләһе менән йөрөй ине. Һеҙ уға ла ҡул ҡуйып ебәрҙегеҙ.

-- Һем... Бынағайыш тамаша, -- тип һөйләнде Муллыкүл Муллаҡаевич, "Волга"һының йомшаҡ креслоһына ларҡайғас. – Ҡайҙа был авторучка? Көпә-көндөҙ, ҡаш менән күҙ араһында дәүләт милкен юғалт, имеш! Башҡа һыйырлыҡ түгел!

Муллыкүл Муллаҡаевич ул көндә кабинетына кереп ултыра алманы. Киске һигеҙҙе һуҡҡас, хәләл ефетен етәкләп, местком рәйесе ойошторған баяғы банкетҡа китте. Футбол командаһының бер ағзаһы ҡала тарихында тәүге тапҡыр "гол" тибеү айҡанлы ойошма фонды иҫәбенән бер төнгә "Суҡмуйыл" кафеһы арендаға алынғайны. Ләкин оркестр шауы менән аралашҡан тантаналы телмәрҙәргә лә, һыйҙан һығылған өҫтәлдәргә лә Муллыкүл Муллаҡаевичтың күңеле иремәне. Эргәһенә әленән-әле эштәштәре килеп, юғалған милектең табылыу-табылмауы хаҡында барлаштылар, хафаһын уртаҡлаштылар.

-- Кафе счетын ныҡлап тикшерегеҙ. Һәр пунктын табында бар нәмә менән барлап сығығыҙ. Дәүләт аҡсаһының тине лә елгә осмаһын! – Ҡәтғи күрһәтмә бирҙе ул. Көтмәгәндә, ошо табында ҡиммәтле шарап һемереп тә етәкселек ҡәҙерен белмәгән ҡыҙған баштар араһынан:

-- Футбол тубын типкән һайын табын ҡороу – үҙе дәүләт аҡсаһын туҙҙырыу түгелме?! – тигән зәһәр әсе ауаз ишетелде. Тик тупаҫты шунда уҡ бүлдерҙеләр, ике беләгенән ике мыҡтыйән тотоп, тынысландырырға алып сығып киттеләр. Муллыкүл Муллаҡаевичҡа, шәхсәнә таныштырыу өсөн, табын сығымдарын сағылдырған ҡағыҙҙы килтереп тотторҙолар. Ул, әҙәп өсөн генә булһа ла күҙ йөрөтөргә теләп, күҙлеген һәрмәне, ләкин таба алманы. Аптырап, ҡулын эске түш кеҫәһенә тыҡты. Шул саҡ уның маңлай һырҙары яҙылып, йөҙө ҡояштай балҡыны, кинәт ырғылып торҙо:

-- Табылды, иптәштәр, табылды! Дәүләт милке юғалмаған – бына ул! Ҡыҫтамағыҙ, көсләмәгеҙ, тотмағыҙ – ваҡыт тар! Хәҙер үк бара һалып, авторучканы кабинеттағы үҙ урынына ҡайтарырға тейешмен. Яҙыу приборына. Дәүләт милкен сәбәпһеҙҙән сарыфларға беребеҙҙең дә хаҡы юҡ! Бисәкәй, хушлаш табындаштар менән! Шофер, ҡыҙҙыр машинаны!

-- Ах-ах, тамағына аш барманы! Беҙҙең Муллыкүл Муллаҡаевич шулай бит инде ул -- дәүләт милкен ҡурсалау юлында йәнен фиҙа итергә әҙер! – тип бот сабып ҡалды табындағылар. Бокалдар сыңлауын фанфаралар гөрөө күмде.

Эйе, тынғыһыҙ йән Муллыкүл Муллаҡаевич, ашар ашын, эсер шарабын онотоп, өҙөлөп һөйгән бисәһен болоҡһотоп, күңелле ял сәғәттәрен ҡорбан ҡылды, юғала яҙған дәүләт милкен – авторучканы – төн үҙәгендә йылтыр "Волга"ла эш кабинетына елдерҙе.

1966.

Боғаҙ Бәҙәмша

Бәҙәмшаның Боғаҙға әүерелеү тарихы һуғыштан һуңғы ауыр осорға ҡарай. Ығы-зығылы, шау-шоулы колхоз йыйылыштарында ул ауылдағы иң шәп боғаҙ

йыртыусы “оратор” булған. Хикмәтле был ләкәпте алыуҙа Боғаҙға түрә һәм ялпы араһындағы күренмәҫ екте һунар эте һиҙгерлеге менән еҫкәп тоя белеү һәләте ныҡ ярҙам иткән. Етәксенең әгәр үҙ урынында ныҡ ултырғанын һәм ултырасағын шәйләһә, аҡты ҡара тип иҫбатларға тура килгәндә лә, Бәҙәмша мотлаҡ уның яҡлы булып боғаҙ сарлаған. Түрәнең хәле мөшкөлләнһә, тәнҡит итеүселәр яғында ажарланып боғаҙ ярған, төкөрөк сәскән. Һәм үҙенән-үҙе уға “Боғаҙ” ләкәбе йәбешкән. Бара-тора Боғаҙ даны йәмғе бригада күләменә киң таралып, хатта һуңғы быуын бригадирҙарының да йөрәген дерелдәткес, теҙ быуынын ҡаҡшатҡыс шомло көскә әүерелгән. Һөҙөмтә шул: “Боғаҙ ветераны” ошо көндә лә, ниндәй юл менәндер, бригада аттарын һәм һоло келәтен үҙенең ихатаһына күсертеп, ат ҡараған булып, шуларға тейешле мал аҙығы иҫәбенә үрсегән үҙенең ҡура-ҡура мал-тыуарҙары, ҡош-ҡорттары араһында “ҡарҡ!” кикереп, мыйыҡ бороп көн итә. Әмәлгә ҡалғандай, һуңғы бригадирыбыҙ ҙа уның ыңғайына шөйлә шымарып, Бәҙәмша “һайт!” тигәндә “тайт!” тиергә әҙер генә торған “азамат” булып сыҡты, мәлғүнең... Шул нигеҙҙә бригадала – ай-һа-а-ай! – иҫ китмәле эштәр шаһиты булып йәшәп ятыуыбыҙ. Мәҫәлән, йыл да көҙ еттеме – бер һимеҙ ат үҙ ағзаһын үҙе имгәтә лә брак малдар исемлегенә теркәлә лә ҡуя; ахырҙа, сәмле кешнәп, Боғаҙ бысағы аҫтына боғаҙын һалып ята. Һөҙөмтәлә ҡаҙы менән ялыға әүерелеп, ике өйҙөң (бригадир менән Боғаҙҙың инда!) ҡаҙан төбөнә сума...

Миңә быйыл Боғаҙ менән яҡындан танышырға тура килде. Колхоз йомошо менән ситтә командировкала йөрөгән күршемдең бәләкәс ҡыҙы ҡапыл ауырып китеп, больницаға илтеү өсөн ат һорарға барғайным бригада йортона, бригадир тура Бәҙәмшаға ебәрҙе.

-- Ҡағыҙыңды күрһәт! – Ҡапҡанан инмәҫем элек үк һыртарҡаһын ҡабартып екерҙе Боғаҙ. Бригадир һыҙғалаған рөхсәтнамәне сығарып бирҙем.

-- Әнә тора ат. Йүгәнеңде әпкил дә тотоп ал.

-- ?!.

-- Ҡағыҙға йүгән хаҡында яҙылмаған!

Боғаҙ менән һөйләшеү ҡыйын: билемдәге ҡайышты сисеп, атты муйынынан әләктерҙем. Бер егеп алһам, дилбегәһенең осо менән нуҡталап булһа ла барып етермен. Ләкин Бәҙәмша мине ҡырандас эргәһенән төртөп осорҙо:

-- Юлыңда бул!

-- ?!.

-- Ҡағыҙға арба-ызбурый хаҡында яҙылмаған!

-- Буш ултыра бит?! Мин балниска ауырыу алып барам.

-- Буш булһа, тулыр. Бүтән нәмә егеп кит.

-- Алайһа, анауыһын егәйем. – Лапаҫ эргәһендәге йәшел бесән тейәүле көлтарбаға ҡарай йүнәлдем.

-- Ул минең субственный үҙемдең арбам!

-- Үҙеңдеке булһа ла, бирep тор. Ауырыу бала...

-- Үҙеңдекен булдыр ҙа шунан егерһең! – Туғыҙ ботло олпат кәүҙәһе менән тап йөк атылай егелеп, бесәнле көлтарбаны, дөбөрҙәтеп, аҙбарға һөйрәп индереп бикләне. Ых-ых итеп, минең эргәгә сыҡты, урамға төртөп күрһәтте. – Жыйт бынан, выжт!

-- Туҡта! Колхоз арбаһы бит ул – тәгәрмәстәренән күренеп тора!

-- Кемдеке икәнен бригадир әйтер, жыйт бынан, выжт!

-- Һөмһөҙйән! Былайһа, бригадирыңдың да эҙенә төшөп төбөнә туҙ ҡуйырмын әле мин!

-- Ысматри, ошо әйткән һүҙҙәреңде онотма! Үҙеңдең кем икәнеңде танытырмын бер юлы! – Боғаҙ төкөрөк сәсеп бармаҡ янаны. Ҡайҙандыр сырылдап әбейе килеп сыҡты, ҡушарлашып, төрткөләй башлағайнылар, атты ысҡындырып ебәрҙем.

-- Хәстерүш! Атыңды алып кит бынан!

-- Арбаһыҙ ат нимәгә миңә?

-- Алып кит, тигәс, алып кит! Хәҙер ул һинең елкәңдә тора, бына ҡағыҙы! – тине Бәҙәмша, бригадирҙың яҙыуын башы осонда болғап. Ҡапҡаны асып, сыбыртҡыһын шартлатып, атты урамға ҡыуып сығарҙы. – Ысматри! Әгәр ҙә юғалһа, йәки игенгә төшөп потрава-фәләп ҡылһа, башың менән яуап бирәсәкһең! Жыйт! – Һыртарҡаһын ҡайыш сыбыртҡы һыҙырған йылҡы урам буйлап яланға ҡарай сапты, ә мин, елкә тырнап, өйөмә тәпәйләнем. Ярты сәғәттән һуң Боғаҙ ҡырандаҫка әбейен, бригадир бисәһен тейәп тауға еләккә елдерҙе.

-- Үҙеңдең кем икәнеңде төшөндөңмө инде хәҙер?! – Бармаҡ янаны үтешләй. – Күрәһеләреңде алда әле, ахмаҡйән!

Шул төндә үк өйөмдөң тәҙрә быялаһын ҡоя һуҡтылар. Иртә менән юллап ҡарағас, сатнаҡ быялалар араһында Бәҙәмша ейәндәренең күсәт һуғып уйнай торған таяғын табып алдым...

Икенсе кис алма баҡсамды тунап киттеләр.

Таң атҡас, урмандағы утынымды килтерергә ат һорай барғанымда, бригадир һис сәбәпһеҙ һүгеп ҡайтарҙы.

Көндөҙ ауыл Советына саҡырттылар һәм баяғы аттың иген баҫыуындағы ҡылығы өсөн ун һум штраф һалдылар. Өҫтөмә бер-бер артлы ябырылған бәләләрҙән баш ҡатты.

-- Ниңә барып ҡағылдың шул Боғаҙ Бәҙәмшаға? Ғүмер-баҡый һис кемгә ал бирмәгәнен беләһең дәһә! – тип һуҡыранғайны бисәм, ирлек намыҫыма тейҙе.

-- Минең кем икәнде белмәй хитлана ул мөртәт. Тырнағым ғына батһын – мыйығының һуңғы бөртөгөн усымда ҡалдырып ҡасыр!

-- Үҙеңә пеләш ҡалырға яҙмағайы. Лутсы уртаҡ тел тап шул йүнһеҙ менән.

-- Юҡ! Мин ул йүнһеҙҙән йүнле яһаясаҡмын!

Кисен көтөү ҡаршыларға сыҡҡанымда баяғы атҡа атланып алған Боғаҙ үҙе осраны.

-- Йә, көлтарбаның дүрт тәгәрмәсе лә субственный кемдеке икәнен белдеңме инде хәҙер? – тине, сыбыртҡыһының һабын күҙемә төртә яҙып, ат өҫтөнән мәкерле йылмайып.

-- Бик яҡшы белдем. Дүртеһен дә “субственно” колхоздан сәлдергәнһең. Өҫтәүенә, колхоз бесәнен, һололарын да һыйыр-һарыҡтарыңа шыуҙыраһың!

-- Ә-ә-ә, шулаймы ни әле?! – Боғаҙ тирә-яғына ялт-йолт ҡаранып алды. – Шулай тиһеңме?! Ых! – Ҡолас киреп һелтәнгәйне, ҡайыш йыланы билемә яндырып уралды. “Ыһ!” итеп, өҫтөмә ҡапыл эҫе һыу һипкәндәй бөгөлдөм. Ярҙам көҫәп ҡаранһам да, сыбыртҡыһын һөйрәлтеп саптырып киткән Боғаҙҙан башҡаны күрмәнем.

-- Бөгөн үк яуапҡа тарттыртам! – тип ярһыным үҙ алдыма. – Бөгөн үк!

Бәҙәмша иһә атының теҙгенен тартты ла артына әйләнеп ҡарап төкөрҙө, иҫе китмәй генә атлатып китте.

“Вәт йыртҡыс! – Ергә таянып саҡ ҡалҡындым. – Ибен таба бит мәлғүн мотлаҡ ҡайҙа һәм ҡайһы мәлдә үс алырға! Төптән уйлаһаң, жалыу ҙа бирep булмай – шаһиттар юҡ...”

Билем кәкерәйеүен бисәмә һиҙҙертмәҫкә тырышып, йорттағы киске эштәремде башҡарҙым. Әммә йөрәкте ағыулы хәнйәр айҡаны. Төн яҡынлашыуға ла ҡарамай, ярһып, йәмәғәт суды рәйесенә йүгерҙем. Ҡапҡамдан ун аҙым китергә лә өлгөрмәнем, тештәремә, күҙҙәремдән ут баҙраҡҡансы, кемдер йоҙроҡлап бик оһолло тондорҙо. Йыландай бөгөлөп, бүреләй олоп ергә ултыра төштөм. Һөрәнләүемә бер юлы ҡатыным, командировканан ҡайтҡан күршем атылып килеп сыҡты, ике яҡтан ҡамап алып, йоҙроҡ эйәһен ҡаптырҙылар. Ул... әлеге лә баяғы Боғаҙ Бәҙәмшаның кесе кейәүе ине. Шулай ҙа мин йәмәғәт судына барыуымдан төңөлдөм, Боғаҙҙың боғаҙынан шәхсәнә үҙем маҡтап алырға булдым. Әммә был да еңелдән түгел ине.

Артабан ни ҡылырға ла белмәй көйөнөп йөрөгәнемдә Боғаҙ менән бригадирҙың “кәзәләре төкөштө”.

Ул көндә мин һаман, баяғы утынымды урмандан ҡайтарырға ат ала алмай, урамда бригадирҙы һағалай инем. Арғы остан ҡапыл төтөн бағанаһы ҡурпыны, “пожар! Пожар!” тип халыҡ йүгереште. Биш аҙымды бер баҫып барып етһәм, ни күҙем менән күрәйем, түрәбеҙҙең мунсаһын башкөлләй ут ялмаған. Бригадир үҙе, шыбыр тиргә батып, эшкинмәгән янғын һүндереү насосын көйләп маташа, йән әсеһе менән аҡырып, шиңеп төшкән пожарникка “күрһәтмә” бирә:

-- Уңмаған йоҡо тоҡсайы, мәхлуҡ, әпсәңде фәләп иткере! Бәҙәмшанан бөтә аттарҙы ектерт, мискәләп йылғанан һыу ташыт. Күҙ асып йомғансы үтәмәһең, тамырыңды ҡоротормон, өҫтөңдәге һуңғы һаплам ебеңде һүреп алырмын!

Пожарниктың юл саңын төтәтеп Боғаҙ йортона табан елеүе булды, уғата ҡоторонған “ҡыҙыл әтәс” мунса башынан бригадирҙың мунсаға яҡын аш өйөнөң түбәһенә ырғыны, унда ла ялбыр ялҡын теле ләүкетте. Ең һыҙғанып һыу һибергә, түбә һүтергә, ситән ауҙарырға тотондоҡ. Бригадир, насостан йүн сығра алмай, ҡоҙоҡ сиртмәһенә барып йәбеште. Ыһылдап һыу тарта-тарта, өй түбәһен, урам буйын зарығып күҙәтте, ләкин көтөлгән һыулы мискәләр юҡ та юҡ һаман. Ҡоҙоҡ төбө таҡырайып, мунса артынан аш өйө лә сыраҡҡа әүерелгәс, урам буйынса сәсәй-сәсәй сабып килгән пожарник күренде, ниһайәт.

-- Бәдбәхет! Ылау ҡайҙа, һыу ҡайҙа?! – Ҡушйоҙроҡлап ташланды бахырға бригадир.

-- Анауы Боғаҙың, падлис, ат бирмәне бит. Янғын өйөңә ҡапмағас ни, ҙур түгел -- төтөнө улар тыҡрығына күренмәй – Һуҡыр Ғәлиәхмәттең өйәңкеләре ҡаплай...

-- Етәр, асылын әйт! – Ауыҙынан ут сәсеп ажғырҙы түрә.

-- Боғаҙыңды беләһең бит: уртаҡ тел таба алмай, ҡапҡаһы төбөндә ҡанға батып һуғыштыҡ падлис менән. Ут сыҡты, тигәнгә лә ышанмай, түрәнән ҡағыҙ яҙҙыртып килтер, тип даулай...

-- Ах һөмһөҙ ҡараҡ! Боғаҙың салынғыры Бәҙәмша! -- Бригадир, иҙеүен өҙә тартып, төтәп ятҡан торонбашлы бүрәнә өҫтөнә сүкәйҙе. Күҙҙәренән аҡҡан йылғаны ҡара һөрөмлө еңе менән һыпыра-һыпыра лауланы:

-- Йәмәғәт, шаһит булығыҙ! Госстрах агенты килгәндә, телегеҙҙе йотоп, битараф ҡалмағыҙ. Был аҡ мунса урҙаһында, ыҫлап элгән еренән, ҡаҙыҡҡа төшкән Ҡола бейәнең егерме ике тултырған ҡаҙыһы һәләк булды!.. Бәҙәмша менән уртаҡ һуйған һуғымлыҡ ҡаҙыһы ине...

Иртәгәнен Бәҙәмшаның ихатаһынан колхоз малдарын дөйөм аҙбарға күсерҙеләр, һоло келәтен һүтеп алып киттеләр, әүеҫлеккә өйгән колхоз бесәнен ҡуптарҙылар. Ҡыш үҙәгендә ҡапыл ғына ем етмәүҙән миктәгән мал-тыуарын кәметергә тура килде Боғаҙға. Ләкин бының менән генә осланманы эштәре. Ҡайныһының үсен алыр өсөн бригадир өйөнөң тәҙрәһен һуғып ватҡан Бәҙәмша кейәүен таш ҡалалағы аҡыл оҙонайта торған урынға оҙайлы мөҙҙәткә ултыртып ҡуйҙылар, Боғаҙға ла ел-ямғыр тейҙерҙеләр. Йорто тирәһендә ошоҫа күрелмәгән милиция әһелдәре сыуала башлағас, ғәйәр йәндең талағы ташыуҙан туҡтаны, ул, ҡапыл шиңеп, күшеккән тауыҡтай бөршәйҙе. Шөйлә йыуашланып ҡалғас, уның элекке һөмһөҙләнеүенә ауыл үҙе ғәйепле икәнен аңланыҡ. Сөнки, әгәр үҙебеҙ баштан уҡ юл ҡуймаһаҡ, ҡыҙған түбәһенә үҙ ваҡытында һалҡын һыу һибеп айнытып торһаҡ, Бәҙәмша ла Боғаҙ рәүешенә етеп шашынмаҫ ине.

Беҙҙең ауыл урамынан саптырып үтер булһағыҙ, абайлағыҙ: урыҫ ҡапҡалы йорт алдында бүрәнәлә бик миһырбан ҡиәфәтле, ап-аҡ етен һаҡаллы ҡарт Ҡөрьән сүрәләрен уҡып, тәсбих тартып ултырыр. Туҡталып һүҙ ҡушһағыҙ, үҙенең был донъялыҡта Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында ҡылған иҫәпһеҙ күп изге эштәре хаҡында теҙеп китер. Аптырамағыҙ: “Боғаҙ”ын юйған “Бәҙәмша мулла” булыр ул.

1966.

Яҡуп Яҡубыч

Быға тиклем ҡырҡ йыллыҡ эш дәүерендә ул ябай ғына “Яҡуп”, “Яҡуп ҡусты”, “Яҡуп балаҡай”, йәки хатта бәләкәс кенә “Яҡупчик” та булып йөрөнө. Дуҫтарына – дуҫ, бисәһенә -- “әй”, балаһына “әтәй” ине. Бөтәһе кинәт кенә, көтмәгәндә емерелде.

Конторала тыйнаҡ ҡына тәбиғәтле, өнһөҙ-тынһыҙ, зыянлыҡһыҙ расчет хисапсыһы булып эшләгән еренән өлкән бухгалтер итеп үрләттеләр үҙен. Башы аңҡы-тиңке килгән ир янына шул уҡ көндә рәйес үҙе килеп инде лә, бөтә бухгалтерияны яңғыратып, уны Яҡуп Яҡубыч тип атаны. Яҡуп ғүмеренең изге сәғәте ине был. Иҫәп-хисап халҡы хәрәкәткә килде, яңы вазифа менән ҡотлап, Яҡуп Яҡубычтың ҡулын ҡыҫырға ашыҡты. Әленән-әле татлы-ләззәтле өндәр тыуҙырып: “Яҡуп Яҡубыч!”, “Үрләү менән һеҙҙе, Яҡуп Яҡубыч!” – тигән ҡотлауҙар ябырылды. Йомошһоҙҙан – йомош табып, кесе бухгалтерҙар ауыҙ аҫкан ғына һайын уның аҡыллы фекерен ауланылар, ҡиммәтле кәңәштәрен аулап алырға елкенделәр. Тыумышынан бер ҡатлы “Яҡуп” булып күнеккән ирҙең ҡолағын: “Яҡуп Яҡубыч! Яҡуп Яҡубыч!” – тигән сихырлы ике һүҙ өҙлөкһөҙ

ҡытыҡланы. Быҕаса өҫтәле артында бөршәйеп кенә ултырырға күнеккән кәүҙәһе ярты метрға үҫеп киткәндәй булды... Счет төймәләрен ир, әүәлгеләй, сит ҡолаҡтар маҙаһын һаҡлап түгел, бөтә бүлмәләрҙе мылтыҡтан атҡандай шаңғыртып тартты, тартҡаны һайын шаңғырауҙан наҙлы көй ишетелде: Яҡуп Яҡубыч! Уны элеккесә расчет бухгалтеры тип белеп, айлыҡ эш хаҡын тикшертергә ингән колхозсыны ул иғтибарына ла әлмәне.

-- Әллә ҡолағы тонған инде был Яҡуптың? – тип аптыраны ағай кеше. Тәбиғи генә әйтелгән ошо бер ҡатлы “Яҡуп” һүҙе Яҡуп Яҡубычты башы бураға төкәлерҙәй һиҫкәндерҙе, ә эргәләге кесе бухгалтерҙарға йәшен һуҡҡандай тәьҫир итте: һикерешеп торҙолар:

-- Был ни хәл, тупаҫлыҡ!

-- Ниндәй Яҡуп?!

-- Яҡуп түгел, ә Яҡуп Яҡубыч!

-- Культураға күнегергә ваҡыт! – Бер-береһенән аштырып киҫәттеләр аңһыҙ мөрәжәғәтсене. Ағай кеше ғәрләнде, ауыҙын ҡыйшайтты ла:

-- Ниндәй “ыҵ” та “пыч” ул тағы? Һеҙгә “ыҵ” булһа ни, миңә “тыч”тыр ул, бәлки. Үҙ теле менән яуап ҡайтарырға әллә шул “ыҵ”ына ҡаҡалғанмы? – тип йәберһенеп сығып китте.

-- Ах, ҡайһындай ҙа һөмһөҙ, культураһыҙ! – Ah ороп ҡалды контора.

Төшкә табан бухгалтерия тупһаһын пенсия юллаусылар өйөрө сыбарланы. “Рәйес беҙҙе ошондағы иң өлкән түрәгә ебәрҙе”, -- тинеләр. Йыйын ҡарт-короноң, ә асылда әүәлге “зам”дарҙың һәм “пом”дарҙың, мөдирҙәрҙең өҫтәл ҡаршыһында шаҡырайып баҫып тороуы Яҡуп Яҡубычты уғата сәмләндерҙе. Счет төймәләре бик киҫкен, бик илтифатһыҙ шығылданы, ә көтөүселәргә ваҡыт бик-бик оҙаҡ үтте. Ҡарттар түҙмәне, бөтәһе бер юлы тамаҡ ҡырышты.

-- Яҡуп балаҡай, ошо ҡағыҙҙарҙы һиңә тапшырырға ҡушҡайнылар... – Ҡыйыуһыҙ ғына башланы сал олатай. Яҡуп балаҡайы уны ҡырыҫ өндәшеп бүлдерҙе, әйтерһең, яланғас осаһына зәһәр кесерткән менән сәпәләнеләр.

-- Ышту за Яҡуп? Ышту за балаҡай?! – Башын эйгән һаҡалтайға ҡалҡынып та ҡарамай, ниндәйҙер ҡалын кенәгәгә “шыҡ!” та “шыҡ!” штемпель баҫты.

-- Пенсия ҡағыҙҙарын... – тине ҡарт.

-- Ышту за пенсия?!

-- Яҡуп балаҡай...

-- Әпәт балаҡай!

Ҡартлас ҡаушаны, яраҡлы һүҙ таба алмай йөҙәне. Ахыры, булмағас, кейеҙ эшләпәһен башынан алып, усына йомарланы. “Яҡуп Яҡубыч” тип әйт, һантый!” – Аҡыл бирҙеләр арттан.

-- Яҡуп... Яҡубыш... – Саҡ ҡыймылдатты яңағын. Тешһеҙ ауыҙы “ш” өнөн килбәтһеҙ, шыйылдатып сығарҙы. Яҡуп, күңеле мөшкөлләнеп, артҡа салҡая биреберәк ултырҙы, ерәнесле ҡул ишараһы яһаны:

-- Ыш-быш! Ташла өҫтәлгә ярпыларыңды!

Үтенеүселәрҙең икенсеһенең тырышлығы мөслөрәк осланды, буғай: тимер тештәрен бик ҡупшы йылтыратып, түп-түңәрәк “ч” өнө тыуҙырҙы. Яҡуп уның ғаризаһын, бөхтәләп, ашығыс ҡағыҙҙар делоһына теркәне.

-- Яҡуп Яҡубыч, -- тип асыҡ итеп әйтте эштең асылына төшөнөп алған нәүбәттәге ерән һаҡаллы бабай, тел-тештәрен ғәжәп оҫта эшләтеп, -- минекеләрҙе ләҙ ҡарағыҙ инде!

Теүәл өнлө "ыч"ты был юлы ла арыу ғына ишеткән түрә йылмайҙы, ҡағыҙҙы алырға ҡул һоноп, дәүләт эше баҫҡан һалынҡы керпектәрен өҫкә күтәрҙе. Ләкин бабай түбәһендә ҡолаҡтары ҡарпайып торған итәғәтһеҙ бүрек көтмәгәндә бөтәһен кирегә тәкмәстерҙе. Һуҙған ҡулын ситкә һелтәп ебәрҙе Яҡуп Яҡубыч, счет төймәләренең көллө көтөүен шартлатып янға ҡайтарҙы, штемпелде мендәренә ултыртты, кенәгәне тартмаға ташланы:

-- Тамам! Яҡуп Яҡубыч төшкө аш ашарға туҡтала! – тине. Ҡарпыш бүрекле күпме генә тырышһа ла, ҡолағына әлмәне: белһендәр бынан һуң Яҡуп Яҡубычҡа баш кейемен һалып ҡына өндәшергә кәрәклеген!

Ҡарттар өйөрөн йырып үтеп, Яҡуп Яҡубыч төшкөлөккә өйөнә ҡарай атланы. Юл буйы ҡолағын кесе бухгалтерҙар хорынан хасил шаңдау оҙатып барҙы: "Яҡуп Яҡубыч! Яҡуп Яҡубыч! Ни әйтергегеҙ, Яҡуп Яҡубыч? Нисек итәйек икән, Яҡуп Яҡубыч?.."

Өй ишеген асып ингәс кенә, был илһамлы музыка кинәт боҙолдо, Яҡуп Яҡубычтың ҡолаҡ пәрҙәһен ҡырыҡ ҡаҙаҡлы тимер сүкеш емергәндәй булды – ябай көндәгеләй үтә ябай итеп: "әй!" тип өндәште уға ҡатыны!.. Яҡуп Яҡубычтың ҡаштары емерелде, күҙ алдары томанланды. Атлар аҙымын онотоп, күҙе-башы аларып, йоҙроҡтарын суҡмарландырҙы ла:

-- Ахмаҡ! Мин һиңә "әй" түгел! – тип, тештәре араһынан һығып сығарып ыжғырҙы.

-- Атаҡ-атаҡ, кем булаһың, алайғас, һин миңә? Ата ҡаҙмы әллә?

-- Яҡуп Яҡубыч тип олола һин мине, һантый!

-- Бәй-бәй-бәй, ҡасандан бирелә алай "ыч" та "мыч" булып киттең әле, әй?

Яҡуп, ҡатынының һис ни аңламай аптырап торған көлсә йөҙөнә йоҙроҡлап берҙе һалып ебәрҙе, һауыт-һаба шалтыратырлыҡ итеп иҙән типте:

-- Молчать! Бөгөндән ары андай әй-һәйҙәреңде ишетәһе булмайым!

Киске ашты ла ғаилә ҡәбер тынлығында ултырып ашаны. Яҡуп Яҡубыч ҡына йылмайыуҙан арынманы – күңел күтәренке ине: аңышһыҙ ҡатыны ла, ҡолағы боролоп аҡылға ултыртылған шалапут малайы ла инде уға Яҡуп Яҡубыч тип кенә өндәштеләр.

Яҡуп Яҡубыч аштан һуң ҡарҡ-кикереп, алдағы көндәрҙә исемгә лайыҡлап үҫтерер мыйығының һыҙылышын тәңгәлләне көҙгө алдына баҫып; олпат абруйлы әҙәмдәрсә, ике ҡулды артҡа ҡаушарып, тышта һауа һулап керҙе. Тештәре араһынан счет төймәһе һуғыуына оҡшаш көйҙәр һыҙғырып, үҙ ғүмерендә тәүге тапҡыр, бераҙ иҫәрләнеп ҡалған ҡатынынан алыҫлыҡта башҡа бүлмәлә йоҡларға ятты.

...Төн урталарында Яҡуп Яҡубыч һалҡын тиргә батып ҡурҡып уянды. Ырғып тороп, һуҡыр лампа тоҡандырҙы, сисеп һалған салбары кеҫәһенән уртаға бөкләүле конверт һурып сығарҙы. Алыҫтағы ҡарындашы ҡулында зарығып йәшәгән әсәһенән кискырын ғына алынған хат ине был.

"Ҡәҙерле Яҡуп улым! – тип уҡыны Яҡуп Яҡубыч. – Йәйҙе уҙғарырға һиңә ҡунаҡҡа ҡайтмаҡсы инем. Яҡуп бәпесем..."

Яҡуп Яҡубычтың умырткалығы буйынан бик эре, бик эҫе тир бөрсөгө тәгәрләп төштө, ҡолаҡтары түҙҙертмәҫлек ҡаты янып сыҡланы. Бошоноп, тирә-яғына ҡараны: һәр бүрәнә ярығынан әсәһенең сөрөш ирене күренә, хәйерһеҙ ҡарсыҡ, көллө бәндә ҡолағына ирештереп: “Яҡуп улым”, “Яҡуп балам”, “Яҡуп”, “Яҡуп бәпескәй”, -- тип өндәшә ине. Шуның менән ил алдында олпат абруйын ҡаҡшата... Яҡуп Яҡубыч, ярһып, хатты ваҡ киҫәктәргә йыртҡылап ырғытты; ул да булманы, ваҡ остоҡтарҙы берәм-берәм иҙәндән ҡабат йыйырға, ҡалтыранған бармаҡтарын бешерә-бешерә, уларҙы лампаның һөрөм осло ҡыҙыл телендә төтәтергә тотондо. Бүлмәне әсе ыҫ баҫты. Сәсәй-сәсәй йәшерен эшен тамамлап, ҡул һырты менән маңлайын һыпырҙы Яҡуп Яҡубыч. Таң атырға йыраҡ ине әле. Ятып ҡараһа ла, күҙенә йоҡо ҡунманы. Бөтә өй эсе уға яғымһыҙ таныш – баяғы әсәй ауыҙы һәм ауазы менән өндәшә кеүек ине. Таң атыуға, моғайын, ҡатыны менән малайы ла кистән алған һабаҡты оноторҙар, әүәлгеләй, “Яҡуп” тип кенә өндәшерҙәр. Ә бит рәйес биргән буйтлы “Яҡубыч” уға ҡырыҡ йыл көттөртөп килде...

Яҡуб Яҡубычтың күҙҙәренә һуҡыр шәмдән ҡупҡан ҡара һөрөм һөрөлдө, күңеле болғанып, баҫып торған урынында төптән ҡырҡылған ағас кеүек бәүелде. Ашыҡ-бошоҡ салбарын тартты ла боттарына, көн дә кейгән пинжәген, кепкаһын онотоп ҡалдырып, аҡ күлдәксән генә килеш конторағa йүгерҙе. Балдай татлы “Яҡуп Яҡубыч” яңғыраған стеналар тартты уны, таңға тиклем түҙемлеге ҡалманы... Бухгалтерияны асып керҙе, шәм ҡабыҙырға теләмәй, күп ғүмерҙәр шкаф башында ҡулланыуһыҙ аунап ятҡан майшәм ҡалдығын һәрмәп алып, ут ҡабыҙҙы. Алпан-тилпән баҫып, эш өҫтәле артына барып ултырҙы. Ләкин һаман әсәй хатын яндырғанындағы һалҡын ҡурҡыу ташлап китмәгәйне әле уны, лайлаланған боҙ киҫәге кеүек, йөрәк аҫтын һыуытып ултыра ине. Бөтә зиһене менән, шикләнеп, тирә-яғынан әлеге сөрөш әсәй ирендәрен шәйләне. Стеналағы сәғәт теле, туҡтауһыҙ “шаҡ!” та “шоҡ!”, “ыҫ”ын төптө онотоп: “Я-ҡуп, Я-ҡуп”, -- тип сүкей төҫлө ине. Тертләп, сәғәт телен йолҡоп ырғытты. Башҡаса “шылт!” иткән дә тауыш ҡалманы, бөтә донъя, әйтерһең, унан нимәлер көттө. Ошо үле тынлыҡта: “Яҡуп Яҡубыч! Яҡуп Яҡубыч!” тигән ләззәтле ауаздар теге донъянан ишетелгәндәй тертләтте: ишек төбөндә кепкаларын, бүректәрен, таҡыяларын устарына йомарлап тотҡан, кеселекле түбән эйелгән күмәк-күмәк баш шәүләләре теҙелде, әммә сөрөш ауыҙҙарында әсәй ирендәре ине – бына-бына “Яҡуп бәпесем” тип әйтерҙәр... Яҡуб Яҡубыч тамам иҫәнгерәне: үҙенең кәүҙәһе тышында ошо бүлмәгә һыймаҫлыҡ хәтһеҙ зур, бөйөк-мәғрур икенсе бер Яҡуп Яҡубыч булып, эсендә иһә икенсе бер бәләкәс кенә ҡурсаҡ -- әсәһенең “Яҡуп бәпесем” тигән ысын үҙе икәнен тойҙо, ваҡытһыҙ өҙөлгән сәтләүектәй сөрөштө. Тышындағы зур Яҡуп Яҡубычҡа ҡарата сикһеҙ ихтирам кисереп, шул шанлы Яҡуп Яҡубыч ҡабығын һаҡ ҡына асып сыҡты, өҫтәл артындағы түрәлек ултырғысынан төштө һәм әле һаман шул бер килеш өлкән бухгалтер өҫтәле артында ҡуҡырайып ултырып ҡалған олпаттарҙан олпат Яҡуп Яҡубычҡа түбәнселекле эйелгән күмәк баштар ҡатарына барып баҫты. Нимәнәндер ҡурҡҡан сабый балалай, ике ҡулын ҡушарлатып боттары араһына ҡыҫҡан килеш, уға, ҡәҙерле түрәһенә, бик-бик оҙаҡ күҙ тилмертте, сират теҙемен йырып, биҙгәк тотҡандай ҡалтыранып өҫтәлгә яҡынланы. Үҙенең яланбаш килгәнен, кәпәс һалаһы урынға, ауырттырып, үҙ сәсен

үҙе тартыуын да абайламаны. Йолҡоноп сыҡҡан сәс лоҡманын кәпәс урынына усында йомарлап тотоп, хоҙайына әүерелгән мыҡты шәүлә Яҡуп Яҡубычтың тимер терһәге терәлгән өҫтәлгә маңлай орҙо:

-- Яҡубыч! Яҡуп Яҡубыч! – тип илереп табынды...

1966.

Яҙлыҡҡан игелек

“Эш башларҙан элек һин түрәңә алсаҡ йөҙөңдө күрһәт”, -- ти торғайны атайым. Аллаға шөкөр, ата һүҙен аяҡ аҫтына һалып тапаманым, шуның арҡаһында бик күп игелектәр күрҙем. Тик һуңғы тапҡыр ғына, яңы түрә ҡулы аҫтына ҡапҡас ҡына...

Туҡтағыҙ, әнәнән-ептән теҙеп, баштан-аяҡ һөйләп бирәйем быны.

Үҙ урынына майлы ҡайыш кеүек йәпләшкән түрәбеҙ Мөхәммәт Садриевичты көтмәгәндә бүтән яҡҡа шыуҙырҙылар. Кәнсәләрҙең дүрт өҫтәлендә тырыш ҡомаҡтарҙай ҡағыҙ кимереүсе беҙ, дүрт эшмәкәр, үҙебеҙҙе ярлыҡаусы дәү өҫтәлдең етемләнеп ҡалыуынан хафалана төштөк: ниндәйерәк бәндә йоратын килтереп ултыртырҙар? Ул “а” тигәндә “а” әйтергә кәрәк бклырмы, әллә “б”мы? Йә булмаһа өнһеҙ йомшаҡлыҡ, йәки ҡатылыҡ билдәһе менән генә төңөлөргәме? Баш ҡатты, әйтерлек тә түгел.

Бер-нисә көн шулай уйланып, ҡулға эш бармай интеккәс, көтөлгән ишек көтмәгәндә асылып, яңы түрә алдыбыҙға “ялп!” итеп килеп баҫты. Самауырҙай быуаҙ портфель тоткан, тулы тоҡтай ҡорһаҡ аҫтын яҫы ҡайыш менән уратҡан. Һәммәбеҙгә ҡул бирҙе, әммә ҡулды әүәлге түрәләй уты табанға үтерлек итеп ҡыҫманы. Күҙе менән дә йән иретеп ҡытыҡланманы. Әйтерһең, күҙ урынына боҙ, ҡул урынына һалҡын шамбы ҡойроғо ҡыҫтырып килгән. Ә йөҙөнә инде ҡалҡынып та ҡарайһы түгел: тәгәрмәс тапап һытҡан әсе ҡауын! Өҫтәленә портфелын һалып, терһәктәренә таянып, боҙло ҡарашын стенаға төбәгән, әйтерһең, беҙҙе әҙәмгә лә һанамай. Үҙе туҡтауһыҙ танау шыйылдата, көлсә йөҙө менән бәпес йүргәгеләй олпат ҡулъяулығына күмелә. Ай аҡыллы атаҡайым, түҙемһеҙләнеп түрә көткәнеңдә ошондай туң ташйомғаҡ тәгәрләп керһә, ҡайһы осонан тотоп һүтер инең икән!

Түрә артҡа салҡайҙы, солоҡ кәмәләй ҙур танауын, йүргәгенән айырып, һауаға сөйҙө. Майлы көлсә бүртектәреләй түңәрәк күҙҙәре йомолдо, һулышы туҡталды, ауыҙ тирәһен нәҙек йыйырсыҡтар сыйырҙы. Әһә, мин әйтәм, кәрәкле сәғәт һуҡты!

Түрә, ауыҙын арандай асып, күрек кеүек гөжөлдәтеп эсенә һауа тултырҙы ла бүлмә түшәмен күтәреүҙәй ҡаты сөскөрөп ебәрҙе. Был ҡөҙрәттән артындағы дәү тәҙрәнең быялалары зыңҡылданы. Киҫкен кисерештән аларған күҙҙәрен төҙәтеп, аҡылын йыйырға ла өлгөрмәне түрә, мин, ырғып тороп, аяғүрә шыҡайҙым да борон-боронда һыналып килгән игелек тәбриген һөрәнләнем:

-- Ярхамикалла, ағаҡайым, ярхамикалла, күп йәшә!

Түрә иҫенә килде, ҡалҡынып ҡараны һәм, тәүге тапҡыр күргәндәй, баштан-аяҡ күҙ йөрөтөп сыҡты. (Әһә, мин әйтәм, хәйерле сәғәттә хәйерле сифатта күҙенә

элендем түрәнең!) Көрәктәй ҡулы менән: “Ултыр инде, ултыр”, -- тигән ишара яһаны. Яғымлы йылмайып:

-- Борсолмағыҙ, егеттәр, эштәрегеҙҙе дауам итегеҙ, -- тине. Һиҙәм: һалҡын боҙҙоң кинәт майға әүерелеүен күргән хеҙмәттәштәр көнләшеп ҡарай миңә. Ашығып, ҡағыҙҙарын ҡыштырҙатырға, пероларын шығырҙатырға тотондолар...

Төшкөлөккә тукталғас, түрә үҙе минең эргәгә килде. Бик ентекләп, кем булыуымды, ҡасан эшләй башлауымды һорашты. Эштәштәрем иһә был юлы йығылып үлә яҙҙылар. Мин үҙемде күктең етенсе ҡатында кеүегерәк тойҙом.

-- Уф, һеҙгә тымау төшкән бит, ағаҡайым. Моғайын, эҫелегегеҙ ҙә артҡандыр, һаулығ менән былай шаярырға ярмай, -- тинем, түрә маңлайын усым менән баҫып ҡарап. Түш кеҫәмдән ингалятор алып һоңдом: -- Ошоно ғына “һүф!” иттереп бер еҫкәп ебәрегеҙсе, ағаҡайым, ҡул менән һыпырып алғандай булыр.

Түрә ингаляторға үрелергә иткәйне лә, эштәштәремдең һорау билдәһеләй өнһөҙ текләп тороуҙарынан уңайһыҙланыпмы, ҡайҙалыр китеп барҙы – коридорҙа йөрөнөргәлер, буғай.

-- Был бәндәне кем тип уйлайһың? – Күҙҙәремә тура ҡарап өндәште һорау билдәләренең береһе.

-- Кем булһын, беҙҙең яңы хужа инде.

-- Ай-һай. Хужа булһа, ул иң элек үҙенең кем икәнлеген әйтеп таныштырыр ине. Ә был, һөмһөҙ һыйыр кеүек килеп инде лә, йәнһеҙ бүкәндәй упайып тик ултыра. Өҫтәүенә, һауа ярып сөскөрә. Йә эшләмәй, йә кешегә эшләргә ирек бирмәй. Шикле бәндә был!

-- Их һин, кәбәк тоҡсайы! – тинем. – Түрәнең бит кәйефе насар. Уға тымау тейгән. Сафсата һатмаҫҡа бында, ә түрәне нисек тә ҡотҡарыу сараһын күрергә кәрәк!

Ашығып аптекаға йүгерҙем, бер ҡап антибиотик – тетрациклин һатып алып килдем. Түрә тымауының ҡара киҙеүгә әүерелеү ҡурҡынысына ҡаршы көрәшергә кәрәк.

Тәнәфес тамамланып, эшкә ултырышҡас, урынына кире килеп төпләнгән түрә уғата маҙаһыҙланды. Тәҙрә ярыҡтары гөжләткән һыуыҡтан сөрөшөп, уңлы-һуллы борғаланды, яурындарын һикертте. Ваҡыт-ваҡыт дер-ҡалтыраны. Хатта тешкә-теш бәрҙертеп сыҡылдатҡан саҡтары ла булғыланы. Зарығыулы күҙ ҡарашын тышҡа төбәп, урамдағы ҡар өйөмдәрен күҙәтте.

-- Әллә форточканы ҡыҫтап ябайыммы, ағаҡай? – тип тәҡдимләнем. Түрә форточкаға ҡалҡынып ҡараны ла пинжәк яғаһын торғоҙоп:

-- Ярар, кәрәкмәй, ябыулы бит, -- тине. Тын алмаҫлыҡ, һүҙ әйтмәҫлек булып тонғайны танауы. Ул, ирекһеҙҙән, моңло ҡарашын минең өҫтәл ҡырыйында бүлтәйеп ятҡан ингаляторға төбәне. Салт абайлап, шифалы ҡулланманы ҡулыма алдым, бормаслы ҡапҡасын асып, танауыма терәнем дә мыш-мыш еҫкәп:

-- Һәй рәхмәт яуғыры, Хоҙаның хикмәте, йәннәтме ни, әсәйем яғып ҡуйған ҡайнар мунсамы ни! – тип һамаҡланым. Хужа кеше һүҙ ҡушырға мәжбүр булды:

-- Ҡайҙасы, булмаһа, бер еҫкәп ҡарайым әле шул нәмәкәйеңдән!

Дәррәү ырғып тороп, йүгереп килеп, абруйлы түрә танауына үҙ ҡулымдан шифа бөркөттөм. Шул таҫыллыҡ менән уңыш яулауымды күргән эштәштәрҙең

эсендә ҡара көсөк юртты. Арҡаны ныҡҡа терәп, үҙемде хужаның уң ҡулы итеп тойҙом.

Кискә табан түрә бөгөлөп үк төштө, йөҙөнә ҡыу үлән төҫө тарыны. Өҙлөкһөҙ сөскөрә, йүткерә, танау шыйылдата ине. Ваҡыт-ваҡыт ауыр көрһөнөп тә ала. Ысынлап та хәле мөшкөллөгөн самалап, күрше өҫтәлдәгеләр ҙә ҡәләм ҡуйҙылар, тынысһыҙландылар. Түрә күңелен күрмәккә улар ҙа бер әмәл ҡора һымаҡ ине. “Уң ҡул булғас, уң ҡул бул, -- тип бойорҙом үҙемә, -- кеше сығарма алдыңа!” Тетрациклин ҡабын түш кеҫәнән йәһәт һурып, ашығыс ярҙамға ташландым. Тик... әйтеүе лә ҡыйын артабанғыһын... Түрәм, үлектәй төҫө ҡасып, ултырғыс арҡаһына ишерелде, маңлайынан бөрсөк-бөрсөк тир бәрҙе.

-- Темпер-ратура... – тип йәмһеҙ хырылданы ул, усын маңлайына баҫып. – Тыным ҡыҫыла, арҡамдан сәнсеү ала, уҙамандар. Һәләк булдым: үпкәмә һыуыҡ тейҙе. Зинһар, тиҙерәк такси саҡыртығыҙ!

Эштәштәрем ҡуҙғалырға ла өлгөрмәне, телефон төрөпкәһен ҡулға эләктерҙем. Ун биш минут та үтмәй, шаҡмаҡ билле, йәшел күҙле автомобиль “Волга” эттәй сабып килеп етте. Үҙ ҡулдарым менән күтәрмәкләп, ағаҡайымды машинаға ултырттым, күҙе алдында ҡыштырҙатып өп-өр-яңы өс һумлыҡты тотторҙом шоферға:

-- Ишетһен ҡолағың, бер тәгәрмәсең бында, икенсеһе тегендә булһын, егет кеше. Йәшен тиҙлегендә алып барып еткер ағаҡайымды!

-- Уҙаман, -- тип өндәште түрә, ҡайнар ҡул ҡыҫышы менән эс-бауырҙарыма үтеп, -- иткән игелегеңде, кешелеклелегеңде һис онотасаҡ түгелмен. Күрәм, һин Мөхәммәт Садриевичҡа яҡшы уң ҡул булғанһың. Был йәһәттән миңә һинән күп өйрәнергә кәрәк әле...

Бытлығып сыҡҡан игелекле күҙ йәштәремде ҡулъяулығым менән һөртөп, түрә маңлайына ирен тейҙерҙем:

-- Мин һеҙгә лә бик яҡшы уң ҡул, ағаҡай! Тыныс булығыҙ, эргәмдәге эш өҫтәлегеҙгә тиҙ көндәрҙә терелеп ҡайтығыҙ, ағаҡай!

-- Әгәр бөгөн Мөхәммәт Садриевич кабинет буятмаһа, һин әйткән ул эш өҫтәленә юлығыу, һинең менән танышыу бәхетенән мәхрүм ҡалаһым икән, -- тине түрә. – Беләһеңдер, Мөхәммәт Садриевич менән мин эшләгән кабинет нәҡ һеҙҙеке тәңгәлендә, дүртенсе ҡатта ғына бит. Мөхәммәт Садриевич үҙе, буяуҙар кипкеләгәнсе тип, бухгалтерия бүлмәһенә күсенеп ултырҙы, ә мине, урын етмәгәнлектән, һеҙҙең юғары башлыҡтар менән килешеп, бер-ике көн ултырып торорға һеҙҙең бүлмәләге баяғы буш өҫтәлгә ебәргәйне... Хәйерһеҙ киҙеү йыҡты аяҡтан...

Күҙ алдарым ҡараңғыланып, арҡаны яғымһыҙ һыуыҡ тулҡын ялманы.

-- Һеҙ... һеҙ... кем булаһығыҙ? – тип ҡалтыранған тауыш менән һораным.

-- Кем, тип ни, элек һеҙгә хужа булған, ә хәҙерен дүртенсе ҡаттағы кабинетҡа күсеп ултырған Мөхәммәт Садриевичтың замы – урынбаҫары буламын инде.

Артыма салҡан ҡапланып төшә яҙҙым – игелегем елгә осто, яҙлыҡты былай булғас!..Тамағыма ҡаты төйөр тығылды. Бәкәлдәрем бәлкелдәп ҡалтыраны. Ғәзиз өс һумымды кире йолоу өсөн, тымаулының башы аша шоферға ынтылдым. Ләкин

һуң ине инде: “Волга”ның йылғыр тәгәрмәстәре аҫтынан ҡупҡан төтөн ҡатыш һалҡын еле генә килеп бәрелде битемә...

1966.

Мин бригадир булғас

Колхозсыларҙың дөйөм йыйылышында бригадирлыҡҡа һайланғас, беренселәрҙән-беренсе эш итеп, элек эшләгән бригадирҙың хатаһын тамыры менән йолҡоп ташларға кәрәклеген аңланым. Һайлаусыларым ҡаршыһында ошо изге бурысты кисекмәҫтән үтәргә һүҙ беркеттем.

Ни яғы менән ҡыңғырланған ул бригадир? Әүҙемәндәр менән ҡулға-ҡул тотоношоп эшләмәгән. Бригадалағы яйлы-майлы урындарға үҙенең яҡындарын, туған-тыумасаларын, яратҡандарын тығҡан. Яратмағандарына эт ҡойроғо ҡыҫылырлыҡ та ек ҡалдырмаған. Әүҙемәндәр фекерен ҡолаҡҡа элмәйенсә: “Мин кем, мин кем?!” – тип күкрәк ҡаҡҡан.

Бригада әүҙемлегенең иң әүҙеме итеп үҙем һанаған бер килке иптәште һайлап алып, конторға йыйҙым, етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү мәсьәләһен тиҙләтеп сисергә ултырҙым. Ҡул аҫтына кергән бөтә түрә-ҡараларҙың исемлеген төҙөнөм тәүҙә. Шуларҙың иҫке бригадирға ярамһаҡлы булғандарының фамилияһы өҫтөнә ҡара ҡәләм осо менән ҡарға ҡундырып сығтым. Шым ҡалып шул эшемде күҙәткән әүҙемәндәргә күҙ аттым:

-- Әүәлге бригадир ярата инеме быларҙы?

-- Әлбиттә, ярата ине! – тине хисапсым.

-- Алайһа, алдыңа ал исемлекте, тот ҡара һәм ҡыҙыл ҡәләмеңде, төҙөйөк яңы әүҙемәнлекте. Ҡыҙыл ҡәләм тамғаһына лайыҡлыларҙың лайыҡлылары етерлек беҙҙә! Быға тиклем ҡайһылай ине? Бригадир яратһа, әргендектәрҙең әргендектәре лә йылы урынды биләне. Бынан һуң алай булмаясаҡ. Эше менән аҡлаһа, бригадир яратмағандарға өҫтөнлөк биреләсәк, ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡҡа юл ябыласаҡ. Хатта шуны киҫәтәмен: бригадир яратҡан бер иптәш тә артабан был ҡыҙыл аҫтына морон ҡыҫтыра алмаҫ! Беҙ яңыса эшләйбеҙ. Беҙҙең өсөн Алла ла, мулла ла, бәндә лә бер. Яратыу-яратмауҙарға, ғәйбәттәргә юл ябыҡ.

Хисапсымдың танауы кипкән помидорҙай сөрөштө. Уның янында ултырған бригада советы ағзаһының һәм келәт асҡыссыһының, клуб мөдиренең дә ҡанаттары һәленде. Ҡарға һикертелгән тәүге фамилиялар ошо өсәүҙеке ине.

-- Йә, йәмәғәт, нисек ҡарайбыҙ был эшкә?

-- Бик шәп! Элекке бригадир яратҡан яран-марандар көллөһө тиражға сығһын! – Иң артҡы ултырғыстан ҡысҡырҙы берәү.

Хисапсым елкәһен тырнаны. Миңә ҡалҡынып ҡараны ла күҙкәйҙәрен мөлдөрәтеп өндәште:

-- Дөрөҫ курс тота яңы бригадир. Иҫкеһенең мине аҙ-маҙ яратыуы, бәлки, хаҡтыр ҙа. Әммә-ләкин хәҙер ул түгел, ә һеҙ бригадир бит, Әжәрғәп Мөғәрәпович. Ә һеҙҙең менән мин үҙ ғүмеремдә күп тапҡырҙар асыуланышҡаным бар. Хатта бер саҡ, егеттәрсә ҡыҙмасаланып тәбил тикшертергә килгәнегеҙҙә мин һеҙҙе ысын

мәғәнәһендә кәнсәләрҙән һүгеп сығарғайным. Ул саҡ һеҙ тракторист булып эшләй инегеҙ әле.

-- Тимәк, һин мине, йәғни хәҙерге бригадирҙы яратмайһың?

--Эһем... Нисек тип әйтергә...

-- Булды. Факт, яратмайһың. Тимәк, мин дә яратмайым. Шулайғас, урыныңда ҡалаһың – осор башыңдан ҡара ҡарғаны, ҡундыр ҡыҙыл тамғаны.

-- Мин дә һеҙҙе бер-ике тапҡыр ҡыҙҙырып алғайным шикелле, туңға һай һөргән өсөн... – Ҡыйыуһыҙ ғына өндәште бригада советы ағзаһы. Хәтерләйһегеҙҙер бит, Әжәрғәп Мөғәрәпович?

-- Факт, факт – ҡара ҡарға осорола!

Энә өҫтөндә ултырғандай борғосланған әүҙемән – клуб мөдире телгә килде:

-- Ә мин, Әжәрғәп Мөғәрәпович, элекке йыл үҙегеҙ вәкил булып фермала Ырымбур ысулы менән һарыҡ йөнө ҡырҡтырып ятҡанығыҙҙа үткәргән тыуған көнөгөҙ кисәһендә сикәгеҙгә берҙе эләктергәйнем, һеҙ болдорҙан йығылып төшкәйнегеҙ...

-- Эһем... мин үҙем һөрлөгөп ҡолағайным түгелме һуң?

-- Юҡ шул, Әжәрғәп Мөғәрәпович, сикәгеҙгә мин бит берҙе биргәйнем...

-- Факт, яратмайһың. Клуб мөдире өҫтөнән ҡара ҡарғаны осор, иптәш хисапсы!

Исемлектә идара күләмендәге әүҙемән түгелдәрҙең генә фамилияһы ҡалды. Минең ҡәләм, хисапсым алдындағы исемлеккә әллә нисә ҡатлы түңәрәк һыҙып, келәт асҡыссыһы ҡарғаһын ситлеккә бикләне:

-- Был аҙғынды теге бригадир яратҡан, факт. Хәҙер үк һыҙып ташла, урынына Әптерәй Шәйхуллаһын күрһәт!

-- Һем... үҙегеҙҙең бер туған ҡәйнешегеҙ ҙә баһа ул Әптерәй Шәйхуллаһы! – Абайламаҫтан тейешһеҙ урынға тел ҡыҫтырҙы хисапсы. – Бисәкәйегеҙҙең ҡустыһы булғас, һеҙ уны яратаһығыҙҙыр, шәт?

-- Был ниндәй шик-шөбһә тағы?! Кем тип беләһең мине?! -- Һарыуым ҡайнап, ярһып, хисапсының әле генә ҡыҙыл ҡәләм менән беркетелгән фамилияһына ҡәләм осон тоҫҡаным.

-- Бөттө-бөттө, ағай, бүтәндәр шикләнмәһен, тим...

-- Һи ахмаҡ, суҡраҡ ҡолаҡ! Ишетмәнеңме ни тап шул Шәйхулланың бер туған апаһын, йәғни үҙемдең бисәмде, былтыр Ғәйзулла улының туйында үкертеп ярғанымды?! Ишетмәһәң...

-- Булды-булды, ағай! – тип тертләне хисапсы. – Ишеттем, бик шәп ишеттем! Ысынлап та, апаһы ла, үҙе лә яратмай һеҙҙе! Факт!

-- Алайһа, фәләнсәмде сәйнәп ултырма, ҡулыңа ҡыҙыл ҡәләмеңде ал да яңы тирмәнсе итеп арғы остоң баяғы Айыу Ғәйзуллаһын тамғала.

Һиҙәм, бригада советы ағзаһы: “Айыу Ғәйзулла һинең ҡайның дабаһа!” – тип ысҡындырырға самалай. Ләкин үткер күҙ ҡарашымдан уҡ аңҡауына йәбеште теле. Нисәмә-нисә тапҡыр Айыу Ғәйзулланы: “Ҡыҙыңды айырам, мал-тыуарын килеп ал!” – тип илгә рисуай итеүҙәрем эҙһеҙ ҡалмаған, күрәһең.

Тирмәнсе менән дә эште шулай көйләгәс, контора аттарына ем ташыусыны билдәләргә етте сират. Оҙаҡ уйлап торманым. Ҡыҙыл ҡәләмле исемлеккә үҙ ҡулым менән шаҡырайтып: “Тоҙлоҡапов Мөғәрәп” тип яҙып ҡуйҙым. Эргәләге

әүҙемәндәрем, һүҙһеҙ генә, бер-береһенә ҡарашып алдылар. Шөйлә шымып ултырғас:

-- Был да дөп-дөрөҫ кандидатура, -- тип нығытты, ҡоңғор йөҙөнә йылмайыу билдәһе сығарырға тырышып, бригада советы ағзаһы. – Һеҙ, иптәштәр, беләһегеҙ: әле генә бригадирыбыҙҙың осло ҡәләме яҙып ҡуйған Тоҙлоҡапов Мөгәрәп беҙҙең хөрмәтле... ҡхым, ҡхым... хәҙерге яратмаған бригадирыбыҙ Әжәрғәп Мөгәрәповичтың яратмаған атаһы ул. Яратмай ул үҙенең атаһын, факт. Яратмағаны арҡаһында быйыл, дөрөҫөрәге, үҙе бригадир булмаҫтан элек үк, берҙән-бер улы була тороп та, пенсионер атаһы ҡартҡа бесән сабышып бирмәгән – мал-тыуары ҡышҡылыҡҡа бер һәнәк тә бесәнһеҙ ҡалған. Малайым шаҡшының шаҡшыһы, тип һөйләнеп йөрөй, ти, хәҙер... Ул кәнәлйә ҡарттың, йәғни Тоҙлоҡапов Мөгәрәптең, үҙенең ихатаһына ҡыуалап керетәйек, ҡышҡылыҡҡа ҡуйҙыртайыҡ беҙ контора аттарын – емен-бесәнен шунда көн-төн ташып, колхозға эш күрһәтһен!

Иң арттағы ултырғыстан ҡәнәғәтһеҙ мөңгөрҙәү ишетелһә лә, “дөрөҫ, дөрөҫ!” тип елкенеп ҡул сапты әүҙемәндәр. Хисапсым иһә тәҡдимгә теүәллек керетте:

-- Беҙҙең хәҙерге яратмаған бригадирыбыҙ Әжәрғәп Мөгәрәпович ул ғәйбәт эйәһе Тоҙлоҡапов Мөгәрәпте енеләй күреп яратмай, факт. Шуға ла эште оҙон-оҙаҡҡа һуҙмай, бөгөндән үк ул ҡартластың ихатаһына контора аттарын тултырып, трактор менән һөйрәтеп бер кәбәнде килтертәйек – телен сәйнәп йөрөмәһен, кәбәндән бесән йолҡһон!

Мәсьәләнең тәүге өлөшө ошолай теүәлләнгәс:

-- Ҡалған яуаплы урындарға тәғәйенләү буйынса үҙ тәҡдимдәрегеҙҙе сәпәгеҙ, -- тип юл астым киң даирәле әүҙемлек фекеренә. Шуны ғына көтөп ултырған әүҙемәндәрем таяҡ тығып болғатҡан күстәй шаулап, өҫтәлде тұңкәрә яҙҙылар. Бригада советы ағзаһы, ярһыуҙан күҙҙәре аларып, исемлеккә тупыс бармағын төрттө:

Бына был урынға, апайымдың улы булһа ла, енем һөймәгән Насирҙы ҡаптырырға кәрәк ине, Әжәрғәп Мөгәрәпович. Бәләкәс сағында мин нисәмә тапҡыр уны ҡолағынан һөйрәп йөрөттөм, үҙегеҙ беләһегеҙ бит!

-- Хаҡ һүҙ!

-- Факт, факт!

Бүтәндәр ҙә ҡуҙғалыштылар, хатта иң артҡы ултырғыстағы кәйефһеҙ йән дә килеп һырышты:

-- Был урынға...

-- Ә быныһына, Әжәрғәп Мөгәрәпович... – Биттәренә тапма тире бөрсөкләнгән әүҙемәндәрем бармаҡтарын исемлеккә ныҡышмаланып төрттө...

Аяғүрә торҙом, өҫтәлгә усым менән шапылдатып һуҡтым:

-- Шауламағыҙ, йәмәғәт! Бында яңы етәкселек: бөтә мәсьәләләр коллегиаль рәүештә, бригадирҙың симпатия-антипатияларынан ситкә сығып хәл ҡылына. Әле генә исемдәре һыҙып ташланған иптәштәрҙе, бәлки, мин үҙем яратҡанмындыр ҙа, ләкин, күрҙегеҙ, дөйөм файҙа хаҡына мин уларҙы үҙем яратмаған һәм улар мине яратмаған иптәштәр менән алмаштырҙым. Элекке бригадирҙай: “Мин, мин!” – тип күкрәк ҡаҡманым мин, бүтәндәрҙең фекерен

тибәрмәнем. Быға үҙегеҙ шаһит. Теркә, иптәш хисапсы, әле генә әүҙемлек аҡылы һайлап алған исем-фамилияларҙы өр-яңы ҡыҙыл ҡәләмең менән өр-яңы исемлеккә!

1966.

Һөйәлле бармаҡ

Беҙҙең совхоз бүлексәһе управляющие Һарымһаҡ Һарымһаҡович көн дә иртәнге фармандарын һуҡ бармағы ярҙамында төйгөсләргә ярата. Конторала наряд көткән эшсе халҡы ҡатарына елләнеп килеп керә лә, салбар кеҫәһендә нимәләрҙер һәрмәнеп ятҡан ике ҡулының уңын, сығарып, юғары күтәрә:

-- Приказ. Пункт беренсе. Хәҙер үк тышҡа һеперелегеҙ! Кабинетҡа сиратлап, берәмләп килеп инеүегеҙ талап ителә. Пункт икенсе. Баш кейемен һалмай һәм ишек шаҡымай инеү тыйыла. Иҫкәртмә: управляющий менән ҡул ҡыҫышырға рөхсәт юҡ (һөйәл ауырта).

Ысынлап та, турғай йомортҡаһы дәүмәлендәге һөйәл үҫкән шул түрәнең һуҡ бармағына. Нәҡ икенсе быуын өҫтөнә генә. Аяғүрә өҫтәл төйөп эш башҡара-башҡара, күп йышылған, күрәһең, бисараҡай...

Һөйәлле бармаҡ шыпылдатып өҫтәл ҡырыйын төйгөсләргә тотонһа, наряд көткән эшселәре шым ғына сығып һыҙалар. Фарман бойороуынса, түрә ҡатарына яңғыҙ-ярпы ғына инә башлайҙар. Һарымһаҡ Һарымһаҡович, ҡылдай ҡаты тартылып, уларҙы иҙән уртаһында ҡаршылай. Күҙҙәрен йомоп, күкрәк күреген тултырғансы тын ала ла сәйер суҡмарлы һуҡ бармағын дирижер таяғылай һелтәп ебәрә:

-- Приказ. Параграф беренсе. Бер ҡулыңа һәнәк, икенсеһенә көрәк алып бесәнгә елдер. Параграф икенсе. Йөктө ҙур тейә, юлда юғалтма, бау-шыуҙы өҙмә. Параграф өсөнсө. Бесәнлек ҡапҡаһын ябып сық. Иҫкәртмә: приказ үтәмәгәндең ҡойроғо борола! – Шулай тигәс, һөйәлле бармаҡ һуңғы аккорд итеп фарман алыусының күкрәк ситлеген төйә. Тертләп артҡа сиккән түштән айырылып, "юғал бынан!" ишараһын аңлатып, ишек яҡҡа тоҫҡала. Эшсе эһ тә итә алмай олаға. Ә бармаҡ, ҙур эш бөтөргәндәй ғорур бөгәрләнеп, яҫы салбар балағындағы йылы ояһына сума.

-- Эт тешләгер һөйәлле бармаҡ! Бер төртөүҙә йәнде сығара яҙҙы! – тип һөйләнә эшсе, конторанан олағып һулышын алғас.

-- Аҙ-маҙ ҡаршы әйткеләп, ҡалыпҡа ултыртһаң ни булды? – тиҙәр ҡыйыуыраҡтары.

-- Ултыртырһың, ултыртмай ҙа ни! Үҙеңде боҙға ултыртыр. Һәнәк-көрәк тотмаған ҡулға һөйәл үҫһә, тикмәгә түгелдер ул, егеттәр...

Һарымһаҡ Һарымһаҡович, фармандарын биреп бөтөп, саф һауа һуларға сыға. Әҙәм балалары уны ихтирамлап, ҡырыҡ саҡрымдан уратып үтәләр. Шәйләмәҫтән килеп ҡапҡан асыҡ ауыҙҙарҙың күкрәгенә, ҡәҙимгесә, боҙҙай һалҡын һөйәл суҡмары һуғыла:

-- Һин, туҡта, ҡайҙа табан тәпәйләйһең?

-- Һыйыр һуғарырға.

-- Ҡайҙа һыйырың? Һыйыр һуғарырға был юлдан йөрөмәйҙәр. Эт һуғарырға китеп бараһың һин. Тыңла приказымды... Һөйәлле бармаҡ күкрәк төйөргә тотона.

Ҡайһы саҡта күңелһеҙлектәр ҙә булғылап ала уға. Мәҫәлән, таяҡҡа таянған берәй ҡартлас күҙгә салынып, ҡаж-ҡаж йүткереп, уның атылырға ғына торған татлы параграфтарын ҡап-урталай бүлдерә лә ҡуя. Һөйәлле бармаҡ, теләмәй генә, һандалынан айырыла, кеҫәгә инеп ята.

-- Һарымһаҡ Һарымһаҡович, -- тип өндәшә таяҡлы, -- больницаға барырға ат кәрәк ине.

-- Кем ауырый?

-- Үҙем.

-- Ҡай ерең?

-- Билем.

-- Ә ниңә һуң бүтән ерең ауыртмаған?! – Һөйәлле бармаҡ, йылы кеҫәнән ярһыу аттай һурылып, танһыҡ бәйге ҡырына – таяҡлының күкрәк ситлегенә күсә. – Приказ. Параграф беренсе. Ниңә билең ауыртҡан? Эсеп-иҫереп, дружинниктар ҡулына эләкмәгәнлегеңә ауыл советынан танытма ал. Параграф икенсе. Һатыусынан һуңғы өс көндә спиртлы эсемлектәр һатып алмауыңды ике шаһит дөрөҫләгән ҡағыҙ килтер. Параграф өсөнсө...

-- Һай, бармағыңды эт тешләгер боҙло туҡмаҡ! – Биле биртенгән ҡартлас, һөйәлле бармаҡ төйөүенә сыҙай алмай, инде уға күренмәҫкә, дауахана юлдарынан үҙаллы ғына үрмәләп барырға ант итә. Ә Һарымһаҡ Һарымһаҡовичты киске табын түңәрәгендә хәләл ефете битәрләй:

-- Шул һөйәлле бармағыңды кешегә күрһәтмәһәнә, исмаһам. Мал духтыры менән бергә туғыҙ ҡырлы стакан тота-тота һөйлләткән, тип зәһәр ғәйбәт сәсәләр!

Һарымһаҡ Һарымһаҡович, ҡабар ҡашығын атып-бәреп, үҙ күкрәген үҙе төйөп-йәнсеп, төкөрөктәрен сәсә-сәсә нәфрәтләнә:

-- Мин кем, ниңә шуны белмәйҙәр?! Был халыҡҡа изге хеҙмәт итеп тә игелек юҡ! Ә һин шуларҙы тыңлайһың! Бик тә белгең килһә, хәләл хеҙмәт һөйәле был, бисәкәй! Шәхси ғорурлығым! Ун алты йыл буйы өҙлөкһөҙ ил хеҙмәтендә өҫтәл төйөп, күкрәк төйөп, тышта сатлама һыуыҡтарҙа ла бер алып, бер һалып, төйә-төйә тура юл күрһәтеп йөрөп ҡараһындар шәп булһалар. Белгең килһә, һин әйткән ул мал духтыры Әфләтүнгәрәй был һөйәлде сәпсим башҡа сифаттарҙан нарыҡлай!

-- Алайғас, бармағыңды төймәй генә һөйләш һуң.

-- Алйот һин, ҡатын, алйот! Ошо һөйәлле бармаҡ даими төймәһә, совхоз эшен кем алға этәрер ине? Бына ҡайһы тәңгәлдә бит ул әтнәкә!

Һуңғы аҙнала ғына бер ҙур яңылыҡ ауыл халҡын хайран ҡалдырҙы: түрәкәйҙең ике ҡулы тиң салбар кеҫәһенә кереп йәбешкән. Һис кенә лә уйламаған-көтмәгәндә һөйәлле бармаҡ өҫтәлгә лә, әҙәм күкрәктәренә лә төйөлөүҙән төңөлгән. Ауыл буйлап береһенән-береһе хәтәрерәк фараз йөрөнө.

Ә асылда эш бына былай булған. Һарымһаҡ Һарымһаҡович, һөйәленең ни сәбәптәндер ҡап-урталай сатнай башлауын күреп, “мал духтыры” Әфләтүнгәрәй әшнәһенә хафаланып барып кергән. Һөйәл һаулығына бер стакан спиртты

төңкәйтеп сығҡас, ҡаны ҡыҙышып китеп, магазинды күҙ ҡараһылай һаҡлаусы төнгө ҡарауыл эшен тикшереү сәме ҡуҙғалған да, имгәкләп, тигәндәй, шул тәңгәлдә хасил булған. Ҡаушап ҡалған ҡарауылсының күкрәк ситлеген суҡмарлы һуҡ бармағы менән төйгөсләп, параграфлы приказ бирергә тотонған. Шул яуаплыларҙан яуаплы мәлдә ҡапыл һыңар табаны тайып китеп, үҙе лә абайламай, ҡарттың ырылдап ултырған бурҙай этенең томшоғона таянған һәм... "һәп!" иттергән дә өҙә ҡапҡан сәбәкә атаҡлы һөйәлде... өс быуынлы һуҡ бармаҡтың төбөнән...

Меҫкен Һарымһаҡ Һарымһаҡович, нисек итеп етәкселек итер инде?!.

1966.

Бер атаның өс улы

Атанан ала ла тыуа, ҡола ла тыуа, тигәндәре хаҡ икән. Әйтәйек, ниңә беҙгә, бер туғандарға, тырым-тыраҡай таралмай, ҡош балаларылай бер ояла өймәкләшеп донъя көтмәҫкә ине? Юҡ шул. Ҡоштар ҙа ояһын ҡалдырып оса, тинек тә өсөбөҙ өс тарафҡа тарттыҡ табанды. Ғәҙәт яғынан да, эш яғынан да бер-беребеҙгә оҡшаманыҡ.

Өлкәнебеҙ Йомабай ағайымды ғына алайыҡ. Икенсе синыфта уҡып йөрөгәнендә үк ул, Ярбашы Фәтҡелислам олатайҙың утын дүңгәгенә ултырған килеш ташҡында ағып китеп, бөтәбеҙҙең ҡотон алғайны. Атайымдар үҙен һыбай ҡыуалатып барып, ике саҡрым һыу түбәненән тотоп алып ҡайттылар. Туп-тура Тын океанға юлланған булып сыҡты.

Икенсе әкәмәтен клубта күрһәтте. Ҡаланан бер ғалим-лектор килгәйне. Бик ҡыҙыҡлы итеп шахта, ер аҫты мәғдәндәре, уларҙы ҡаҙып сығарыусы ҡатмарлы техника-машиналар тураһында һөйләне. Халыҡ һорау бирә башлағас, Йомабай ағайым да, кеше рәтенән күтәрелеп, тейһә -- тейенгә, теймәһә ботаҡҡа, тигәндәй:

-- Африкалағы ҡауын ағасын бында күсереп ултыртһаҡ, беҙҙең тупраҡта ла үҫәме? – тип бөтә залдың эсен ҡатырҙы. Беҙ ер аҫты хазиналары менән хыялланғанда ул Африка джунглиҙарын йырып йөрөгән, ҡауын ағасына барып төкәлгән...

Бына шул ағайыбыҙ, Айға осоу уйы менән хыялланып сығып китеп, донъяның әллә ҡайһы өлөшөндәлер төйәкләнде инде хәҙер.

Уртансыбыҙ Фәтҡулланы атайым, үҙе әйтмешләй, бураҙнаға тәртәләп егергә һыҙғанды. Үҙем егерме биш йыл буйы ер һөрҙөм, иген иктем – улым да ергә берекһен, тине. Тракторын һүтһә лә, ҡорһа ла ҡултығы аҫтында Фәтҡуллаһын йөрөттө. Шайтандай майға буяла-буяла техниканың нескәлектәренә төшөнгәс, Фәтҡуллабыҙ ҡойрокто һыртҡа һалды ла ҡуйҙы бит.

-- Самолет моторҙары яһағым килә, күккә оҫком килә, авиатехникумға китәм! – тине. Хәҙер Өфөлә иң ҙур заводта станок әйләндерә.

-- Булмаҫ был шайтан малайҙарҙан, -- тине атайым, ҡул һелтәне. Тупраҡ еҫен тойғанираҡ егеттәргә трактор һөнәрен һеңдереүгә башкөлләй бирелеп, минең уҡыуыма ла, зауҡыма ла иғтибарын һүндерҙе. Һәм мин хатта армияға

киткән саҡта ла үҙемдең кем буласағымды томан артында тоя инем. Оҙатҡан көндә атайым, яурынға һуғып, ошоно ғына әйтте:

-- Хәйерле булһын, улым, берегеҙҙе лә игенсе итә алманым. Кем булһаң да кеше бул.

Хеҙмәтемдең аҙағында эсемдән генә һулығып һыҙлай башланым. Ниңәлер, тик-томалдан, ергә ятып аунағы, йомшаҡ тупраҡ араһына ҡул батырып ҡарағы килде. Ер күҙәнәктәре нурға тулышып ҡояшҡа боҫорап ятҡанын күрҙем дә, түҙмәнем, сиҙәм ерҙәргә ҡайтыусылар исемлегенә яҙылдым. Көтмәгәндә үҙебеҙҙең Башҡортостаныбыҙҙың Хәйбулла районына дөбөр-шатор килеп төштөк... Өфө аръяғында ҡалған, пенсияға сыҡҡан атайым хәҙер гәзит аша донъя хәлдәре менән ҡуша минең ерекмәнлек эшен күҙәтеп, нисек итеп сифатлы туңға һөрөргә һәм сәсергә хат аша кәңәштәр биреп, исемемде гәзиттең хөрмәт таҡтаһында республиканың алдынғы трактористары ҡатарында күргәне һайын, ҡотлау телеграммалары һуғып ята.

Ала-ҡолалыҡ шауҡымы ошоноң менән генә төпләнһә икән! Юҡ шул... Тормоштоң иң тантаналы мәлдәрендә лә тоҡ эсенән осло беҙ төртә лә сыға. Әйтәйек, быйыл Октябрь байрамында аймылыш булырбыҙ тип кем уйлаған? Бисә менән ең һыҙғанып йөрөп тай һуйҙыҡ, өй тултырып ҡунаҡ саҡырырға йыйындыҡ. Ошо уттай ығы-зығы араһында килеп төшмәһенме Фәтҡулла ағайымдан ҡолас буйы телеграмма. Һеҙгә бара алмайым, сөнки нәҡ алтынсы ноябрҙә үҙем табын ҡороп яңы йыл ҡаршылайым. Донъяһына төкөрөп, килен менән һуңламай Өфөгә килеп етегеҙ, тип тондорған. Аптырауҙан ҡойолдоҡ та төштөк, әй. Был ағайым, оло башын кесе итеп, ошо тантаналы мәлдә беҙҙең менән шаярырға итәме әллә, мин әйтәм. Алтынсы ноябрҙә ниндәй яңы йыл? Әллә аҡылға самаланып барамы?..

Йәнә бер-ике көн үткәнмелер, юҡмылыр, тәүгеһенән дә хәтәрерәк икенсе телеграмма, быныһы еңгәйемдән: "Ҡәйнеш, яңы йыл шыршыһын биҙәнек, балаларҙы ла ҡалдырмағыҙ!" Бөтә өй эсе йыйылып ултырып хәүефләндек – икеһе тиң килделе-киттеле икән...

-- Ҡуй, был ҡайнаға менән ҡайынбикәнең зиһен сүлмәгенә зәхмәт тейгәндер. Аҡылы камил әҙәм ноябрҙә яңы йыл ҡаршылап донъя ҡубартмаҫ, -- тине бисәм. Бер туған ағайым тураһында быны ишетеү – теште ярып сығып килгән ҡанды йотоу менән бер булды. Икенсе көндә, йыл оҙоно күрешмәгән атайымдарҙы станцияла ҡаршыларға машина йүнләп йөрөгәнемдә, әлеге уртансы ағайҙың йәшен уғына элеп ебәргән өсөнсө сәләме тамам иҫәнгерәтте: "Етеһенә ҡараған төндә сәғәт ун икелә минең менән сәкәштереп яңы йыл ҡаршыламаһаң, мәңге туғаным түгелһең!" Күп уйларға ҡалманы.

-- Бисәкәйем, йәнем, бер үк атайҙарҙы үҙең ҡаршыла инде. Хөрмәт ит, күңелдәрен күр. Ырымбур өлкәһендә командировкала – бына-бына ҡайтып төшәсәк, тиген. Әгәр ағайымдарҙың хәл-әхүәле үтә насарҙан булмаһа, баш төҙәтеүегеҙгә ҡайтып етермен, -- тинем дә, уңды-һулды ҡарамай, аэродромға елдерҙем. Ауыр хәлгә ҡалған ағайым менән еңгәйемде йәлләй-йәлләй, Өфөлә өсөнсө ҡаттағы фатирына дөбөрҙәп барып ингәндә, бүлмә уртаһында ысынлап та Ҡыш бабайлы шыршы күреп, тамам иҫәнгерәнем. Төпкө бүлмәлә уйнап-көлгән, ҡашығаяҡ шалтыраған тауыштар ишетелде. Аш-һыу тулы буй өҫтәл башына мин,

моғайын, йөҙөм үлек төҫөләй һырнығҡанмындыр. Бокалдарын сөйөп тотҡан йәмәғәттең миңә баҡҡан гүр тынлығын ағайым менән еңгәйем бүлдерҙе:

-- Ура, яңы йыл менән ҡотларға алыҫтарҙан ҡубынып ҡустым килгән!

-- Ҡотло аяғың менән, ҡәйнеш! Яңы йыл менән, ҡәйнеш! Ниңә килен дә килмәгән, ҡәйнеш?

Ике яҡтан икеһе ҡосаҡлап, табын түренә ултырттылар, ҡулыма киле ҙурлыҡ бокал тотторҙолар. Был бахырҙар икеһе тиң “ысҡынған”, өҫтәүенә, табын тулы ҡунаҡтары ла күгәндән тайған икән шул тип уйларға ла өлгөрмәнем, дыңғылдатып түр сәғәте төнгө ун икене һуҡты.

-- Ура, яңы йыл менән!

-- Яңы йылымды ҡаршылашырға килгән ҡәйнеш һаулығына!

Гәлсәр шишмәләр сыңланы, йондоҙҙар ташып аҡты, ләкин улар күҙемә күренмәне. Ағайым менән еңгәйемдең ҡайғыһынан һулҡылдап, башты түбән эйгәнмен...

Уянып күҙемде асыуға, тәҙрәләрҙә салт ҡояш һаҡҡа баҫҡан, ағайым менән еңгәйем баш осомда көтөп ултыра.

-- Маладис, йөҙ ат ҡеүәтле трактор моторы кеүек гөрләйһең, ҡустым!

-- Ҡәйнеш, тор. Яңы йылды оҙаттыҡ, инде бөгөн Октябрь байрамының аяғын йыуабыҙ.

Шөкөр, ноябрь икәнен белгәндәр, быларҙың баш ҡабат күгәненә ултырырға итә, тип шатланып, һаҡлыҡ менән һораным:

-- Кисә Октябрь байрамын туйламанығыҙмы ни, еңгәм?

-- Ah-ah, оноттоңмо әллә? Яңы йылыбыҙҙы ҡаршыланыҡтаһа.

Башҡа тағы ла тай типте. Икеһенең һис ни һиҙмәй шат йылтыраған күҙҙәренә ҡалҡынып ҡарап алдым да, өмөтөмдө өҙөп, аҡылын юйған бахырҙарҙы ҡыҙғанып илап ебәрҙем, күҙ йәштәремә бутай-бутай, мөлдөрәмә тулы ике стаканды күтәрҙем...

Ҡабат уянып күҙемде асҡанда, икеһе тиң миңә ҡарап илашып тора ине.

-- Ниңә иланың, килен ташлап киттеме әллә, ҡустым?

-- Ҡәйнеш, ҡәйнеш, ниңә беҙҙән ҡайғыңды йәшерәһең?

Минең яуап шул булды:

-- Тимәк, һеҙ кисә, байрамлап, ысынлап та, яңы йыл ҡаршыланығыҙ?

-- Шулай шул, ҡустым. Һинең оло ҡайғың барын белмәнек.

-- Минең һеҙҙән башҡа хәҙер ҡайғым юҡ. Икегеҙҙең тиң ауыр сиргә тарыуығыҙ илата мине. Икегеҙҙе лә больницаға һалмай тороп, китмәйем.

Бер-береһенә йәһәт ҡарашып алдылар.

-- Бәй, бәй, ни һүҙең был, ҡәйнеш? Аңлатып бир?

-- Яңы йылға тиклем теүәл бер ай ҙа егерме өс көн бар бит әле, еңгәйем...

Икеһе бер юлы шарҡылдап көлдөләр.

-- И ҡустым-ҡустым, ҡотто осора яҙҙың бит! Әллә нәмәләр һөйләйһең -- аҡылдан яҙаһың тип торам.

-- Икегеҙ ул аҡылдан яҙмаһа ярар ине.

Еңгәйемдең саф шишмәләй селтерәгән көлөүе һиҫкәндерҙе.

-- Ҡәйнеш-ҡәйнеш, тракторыңа мауығып, гәзит уҡымайһың икән. Ағайыңдарҙың цехы йыллыҡ планын Октябрь байрамына тиклем үк арттырып үтәне бит. Улар өсөн бөгөн – законный яңы йыл!

-- Әсәһе, ҡәҙерле ҡунаҡ хөрмәтенә бер көнгә генә булһа ла иҫке йылға әйләнеп ҡайтайыҡсы. Ура, данлы Октябрь байрамы менән ҡустым!

Иншалла, ҡайғым осто башымдан! Шпатлығымды күтәрә алмай бөгөлдөм дә бөгөлдөм... Ә шулай ҙа самолетта осоп ҡайтып төшкәнемдә, -- үкенес! -- атайҙарҙы тап килтерә алманым, үҙҙәренә саҡырып ҡайтып киткәндәр...

Декабрҙең мамыҡтай аҡ ҡарҙарына аяҡ баҫып, илебеҙҙең Яңы йыл байрамын туйлағанда ла әкәмәт хәл килеп сыҡты. Иҫке йылдың һаҡалынан тотоп һелкергә генә йыйынғанда, бер ҡосаҡ тәбрикнамәләр килеп керҙе: Фәтҡулла ағайымдан, атайымдан, ә иң ҡыҙыҡлыһы – Тын океан флотындағы Йомабай ағайымдан. Бай кеше ни, аҡсаһын һанап тормаған – фототелеграмма елдергән. Түңкәрелгән ҡаҙанға оҡшаш көмбәҙ-түшәмле ниндәйҙер сәйер бүлмә эсендә бәләкәс кенә шыршы эргәһендә хәрби кейемле өс уҙаман бокал сөйөп төшкәндәр. Түңәрәк тәҙрә тышында беҙҙең яҡтың һыуҙарына ғүмерҙә лә хас түгел серле балыҡтар, диңгеҙ хайуандары йөҙә... Ә текста ошо һүҙҙәр яҙылған: “Ике йөҙ метр һыу аҫтында Яңы йылды илдән алда ҡаршылап, Ҡыш бабайҙың аҡ тоғонда аҡ сәләмдәр йөкмәтеп оҙатабыҙ. Һеҙгә һигеҙ сәғәттән һуң барып етәсәк Яңы йыл менән ҡотлайбыҙ! Координат: фәләнсә-фәләнсә градус, төгәнсә-төгәнсә минут”, -- тип билдәләнгән. Телеграмманы тоттоҡ та элек үҙебеҙҙең ауылда уҡытып киткән география уҡытыусыһы Әхмәт ағайға йүгерҙек.

-- Хай-ха-а-ай, -- тип баш сайҡаны Әхмәт ағай, -- күрһәтте бит күрмеште был уҡыусым. Һаҡмар буйлай дүңгәктә ағып китеп, Тын океанға барып сыҡҡан!

-- Бисараҡайым, зарығып эҙләгән ҡауын ағасын эҫе Африканан түгел, ә океан-диңгеҙ төбөнән тапҡан икән ҡайнаға, -- тип ҡуйҙы бисәкәйем...

Атай ҡартҡа килһәк, ошо Яңы йылды ҡаршыларға бөтәбеҙҙе лә тыуған нигеҙгә саҡырған булып сыҡты. Өҫтәүенә, баяғы әллә ҡайҙарҙағы Йомабай ағайыбыҙ ҡайта тигән.

-- Был атай, ахыры, ҡартлыҡ алйыуына һабышҡан тамам! Иртән Яңы йыл тигән көндә килеп етергә бойороп сың ҡағыуы етмәгән, Тын океан төбөндә шарап эсеп ултырған улын ҡайтып етәсәк тип фәстерә!

-- Бик боларып барма әле, атаһы, числоһын ҡара, числоһын! – тине бисәкәй. Һәм һәр ваҡыттағыса хаҡ булып сыҡты. Баҡтиһәң иҫке Яңы йылға – ун өсөнсө ғинуарға саҡырған икән атайым.

-- Эйе-е-е, -- тип уфтанып һөйләнергә тура килде, -- ҡомо ҡойола, буғай ҡартластың. Ғүмерҙә иҫке стиль менән йәшәмәй торғайны...

-- Күр ҙә тор: кәбеҫтәләй башына салма урап, мәсеткә лә тәпәйләгәндер әле. Ҡартая төшһә, уларҙың барыһы ла бер һап та бер ҡалып!

Яңы йылдың тәүге ун көнө буйынса, ҡылсыҡ йотҡан бурҙайҙай, дуғалай бөгөлөп йөрөнөм – партиябыҙ тарафынан дәһри итеп тәрбиәләнгән затмын бит. Атай ҡарттың мәсет юлын ҡырт киҫергә бер күбәләй атеистик китаптар йөкмәп алып, бисә менән сәфәр сыҡтыҡ...

Тыуған яҡтың яңы күренеше иҫте китерҙе: элек атайым һөргән баҫыу күкрәгендә нефть вышкалары тора. Өйгә инеп, атай менән күрешеп, тыныуын

тойоп алғайным, магазинда үтмәй ятҡан китаптарға түккән аҡсамды ҡыҙғанып, сәсте йолҡорҙай булдым. Баҡтиһәң, мәсет юлында йөрөп түгел, нефть вышкаһында моторист булып зауыҡлана икән ҡартласым. Һәм эш иҫке стилдә лә түгел! Фәтҡулла улынан күрмешләй, иптәштәре менән ике йылда үтәсәк ер ҡатламдарын бер йылда бураулап төшөп, бер йылда ике Яңы йыл шарабын татыу хоҡуғын яулағандар!

Ун өсө көндә “тып!” итеп Йомабай ағайым ҡайтып төштө, Фәтҡулла ағайымдар ҙа килде. Шулай итеп, беҙ бер йылда өс яңы йыл байрамын шаулатып үткәрҙек. Ата балалары шулай ала-ҡола тыуһа ла ҡыҙыҡ икән, тик йөрәктәре генә ала булмаһын – бөтәһендә бер изге ут дөрләһен!

21.12.1967.

Түңәрәккүл әкиәте

Колхоз күленә үрсетергә ҡорбан балығы ебәргәс, Ҡорбанғәли Фәррәх улының йоҡолары йоҡо булманы. Таң нурында ал ҡояшҡа ҡабырғаларын ялҡылдатып, фирүзә ярҙар һынын алтын-көмөш тәңкәләрендә балҡытып, тымыҡ ҡына һыуҙа ирәүәнләнеп ҡойроҡ ҡаҡҡан йоп-йоморо билдәмә эйәләре бригадирҙың һушын-зиһенен һүрҙе. Бигерәген дә эстә, йөрәк төбөндә, шешәнән кергән “һөҙгәк һыйыр” боларып, табында быяла манаралар йылтырап-шылтырап торған сихри мәлдәрҙә ныҡ интектерҙе. Мөлдөрәмә соҡортайҙарҙы шапылдатып ҡуш иренгә ҡаплаған ғына һайын, сыжлатып-һыҙҙыртып таба төбөнән улъя тотоу теләккәйҙәре тилмертте нескә күңелен.

Эйе, бригадирҙың башҡарған көндәлек вазифаһы юл буйында шытҡан шайтан таяҡтарын услау кеүек ҡырыҫ һәм яуаплы булһа ла, нескә ине күңеле, бисәһенең көн дә һыу ҡойоп наҙлап үҫтергән көршәкле гөлө кеүек, айырым бер иғтибарға, ҡәҙер-хөрмәткә лайыҡ ине, үҙенә ҡалһа. Әйтәйек, ниңә уның нескәлекле хыялдарын да, гөлгә һыу ҡойған һымаҡ, һиммәтле ҡорбан балығының татлы һуттары менән ашлап-наҙламаҫҡа?.. Ошо хыялдары ирҙе үтә моңайыусан итте, үҙенә ҡарата тәрән ҡыҙғаныс тойғоларына һуғарҙы. Ауыр хәлен нескәлекле минуттарҙа ихлас аңлап кисереүсән бисәһе менән уртаҡлашҡас, тегеһе, иҫе китмәй генә, һарыларға һабышыу сирен баҫа торған әмәлде асты ла һалды:

-- Ah-ah, ниңә энә йотҡан эттәй бойоғоп-кәкерәйәһең? Түңәрәккүл, шөкөр, үҙ ҡулыңда бит.

-- Үҙ ҡулымда ла... асҡысы үҙ ҡулымда түгел шул.

-- Ah-ah, ҡарауылсыһын ҡулға төр.

-- Хөппөлгәрәйулла мырҙанымы? – Елкәһен ҡашыны ир. – Ай-һай, булдырып булмаҫ уны, оторойәнде...

-- Шул иҫәүән һаҡалтайҙы ла иҙеүенән бөрөп тота алмағас, ниндәй ир, бригадир һин? Башыңдағы бүрегеңде үҙем кейәйем!

Ҡорбанғәли Фәррәх улы, үҙ ғүмерендә бына нисәнсе тапҡырҙыр инде, бисәһенә ғәжәпһенеү ҡатыш һоҡланып ҡараны. Тура әйтә, әммә тура юлды күҙеңә баҡтыртып яра әйтә!..

Ҡорбанғәли Фәррәх улы, бисәһен һауын фермаһына көндәлек эшкә оҙатып, үҙенең ярҙамсыһы үҫмер малайҙы бригадала эш барышын тикшерергә, килгән-киткәнгә күҙ-ҡолаҡ булырға, ә шул ыңғайҙа Түңәрәккүлгә лә һуғылып, Хөппөлгәрәйулла мырҙаны үҙенә ҡарай юҫыҡлатырға төшөндөргәс, өйөнә ҡайтып, өҫтәл ҡырыйына сүкәйеп ултырҙы, үҙенең ғәҙәти моңһоулығына талды...

Ишек туҡылдаттылар.

Хөппөлгәрәйулла мырҙа, ҡыҫыҡтан башын һоноп, түрә кешенең ҡаҡ өҫтәлдә йәшел быяла манара суҡайтып яңғыҙ үҙе генә интегеүен абайлағас, албырғап, инер-инмәҫ үк “ых!” итеп ҡуйҙы. Ике аяғын ҡайҙа ҡуйырға ла белмәй, бер урында тапанды. Был йыуаш ир, ауылдың иң хәйләһеҙ бер бәндәһе булып, әллә шул һантыйлығы өсөнмө, әллә тулыр-тулмаҫ ҡырҡ биш йәшенән үк кинәндертеп күперек сүбек һаҡал үҫтергәнгәме, ауыл халҡы тарафынан мәрәкәләнеп, былай ҙа оҙон исеменә ҡушымтаға “мырҙа” ләҡәбе һөйрәлтеп йөрөй ине. Ҡорбанғәли Фәррәх улы ирмәкләп алырға булды.

-- Һе-һе-һе! Һаҡал эйәһе, тимме, кем... Һәй, исемеңде эт ялағыры! Әйтәйем тиһәң, осона сыға алмайһың. Ниңә атайың, башыбыҙға имгәк итеп, исем урынына муйыныңа оҙон арҡан ураған?

-- Кех-ҡых! Арҡалыҡ таба алмағандыр, Ҡорбанғәли Фәррәхович! – Балыҡлы күл ҡарауылсыһы, көлөргә итеп, һаҡал-мыйыҡ араһындағы ауыҙын ут-ҡыҙыл дағалай асылдыра биреп ҡуйҙы. Хужа кәйефе түрҙә саҡҡа тура килеүен шәйләп ҡыуанды ул.

-- Маладис! Мә, туғыҙ ҡырлыны бер төңкәйтеп ебәр әле! – тине табын эйәһе.

-- Һе! Булдыра алмайым, Ҡорбанғәли Фәррәхович, булдыра алмайым. Эшем яуаплы, тегендә мине йылтыр тәңкәлеләрем көтә. – Хөппөлгәрәйулла мырҙа, күҙҙәрен мызылдатып, кет-кет көлгән булды.

-- Ҡыланма инде, күҙеңде йом да ҡапландыр. Һин ҡарт төлкө булһаң, беҙ бүре – эсеңдә ниндәй көсөк олоп-юртҡанын үтә күреп торабыҙ! – тип мәрәкәләне бригадир.

-- Булмай, Ҡорбанғәли Фәррәхович, булмай.

-- Һин нимә, кәләш һайларға килдеңме әллә?

-- Кех-кех-ҡых!

-- Әллә урамға сығып, бригадир эсә тип, ғәйбәт сәсеп йөрөмәкселеңме?

Хөппөлгәрәйулла мырҙаның үңәсе эскә тартылды.

-- Ышту һин, ауыҙыңдан ел алһын, Ҡорбанғәли Фәррәхович! Кеше-ҡара абайлап, ул-был фәлән уйламаһын тип әйтеүем. Кәк ни гәүәри, уттай ҡыҙыу эш ваҡыты... маллы келәт эйәһе бит әле мин... Балыҡтарымды әйтәм...

-- Һәй ҡарт төлкө, ҡарт төлкө! – Күҙ ҡыҫып бармаҡ янаған булды өй хужаһы. – Дарым һаҡал ебәрһәң дә, күңелең сос: һөймән осо ҡайҙа төртөлгәнен аныҡ тояһың.

-- Һиҙмәҫкә ни, Ҡорбанғәли Фәррәхович.

-- Һөймән тигәндән... Күлдең төбөн күккә аҫкан Әбйәлил батыр әкиәтен беләһеңме?

-- Белмәҫкә ни, Ҡорбанғәли Фәррәхович.

-- Маладис, шулай ҙа төңкәйт берҙе. Белгән өсөн дә беҙ һине, ҡуш ҡулыңа күл тиклем күл тотторып, алтмыш тәңкә оклад ҡосаҡлатып ҡуйҙыҡ. Ир муйынында ҡыл еп серемәҫ, тинек.

Хөппөлгәрәйулла мырҙа ишек төбөндә ятҡан олпат киндер йыуғыҫка табандарын ышҡыны. Бик һаҡ баҫып, өҫтәл ҡырына уҙҙы. Һаҡалтайын һыпырып, "һә!" тигәнсе стакандың төбөн күккә сөйҙө. Кәйефле тамаҡ ҡырып, һыңар күҙе менән генә өҫтәл өҫтөн барланы. Унда ни бары ҡатҡан икмәк ҡыйырсығы ғына ята ине һыҡтанып.

-- Ҡых-кех... Хужабикә ҡайҙа, Ҡорбанғәли Фәррәхович?

-- Ҡайҙа булһын, иләк тотоп, күленде һөҙә китте.

-- Ҡых... һым... Сәйнәргә юҡмы ни, Ҡорбанғәли Фәррәхович?

-- Булғаны алдында, булмағаны күл төбөндә.

-- Ҡых! Бында ни, ике тараҡанға бер ярма, тигәндәй... Теш араһына ҡыҫтырыр ҙа ризыҡ юҡ.

-- Бары менән байрам инде, байтүрә! Түңәрәккүлдең бүкәне була тороп та, ҡултыҡ аҫтың ҡумшырыҡ көйө килгәс ни үҙең...

-- Кех-кех-кех! Еңгең бая тауыҡ йолҡоп ҡалғайны ла ул, мырҙа...

Өҫтәл көтмәгәндә үрәпсеп һикерҙе, шешә менән стакан хәүефле зыңланы.

-- Төкөрҙөм мин һинең тауығыңа! – тип ҡаты ебәрҙе йоҙроҡ һуғып ике күҙе аларған, ҡолаҡтары ҡыҙарған бригадир.

-- Һых... Ни тиһәң дә, бындай саҡта тауыҡ бото арыуыраҡ инде ул, Ҡорбанғәли Фәррәхович. Асубинне бынауының артынан, кех-кех-кех!..

Бригадирҙың ирендәре йәмерәйҙе:

-- Бахырйән-бахырйән, тауыҡ ботон бит мин уны – тфү! – Ҡунағының аяҡ аҫтына төкөрҙө.

-- Кех... тауыҡ бото менән ҡуша еңгәң бер-ике буй һарыҡ ҡабырғаһы ла һалмаҡсы ине, тип әйтеүем...

-- Тфү! Һарыҡ ҡабырғаһын мин уны һинең ише һалыуһыҙ ауыҙҙарға ҡалдырам! – Ҡорбанғәли Фәррәх улы, сикәләре ҡыҫылып, икмәк ҡыйырсығын һелтәп осорҙо. Ҡаушап ҡалған ҡунаҡтың зиһене таралды, әмәлһеҙ, һаҡал остоғон ыуалап, түрә күҙҙәренә текләне. Ифенә нимәлер килгәндәй, ҡалҡына бireп ҡуйҙы. Сабыйҙарса хәйләһеҙ пак күҙҙәре, көҙгөлө ҡорбанбалыҡ тәңкәләре шикелле йылтырап, табын түңәрәгенә төбәлде ләә таштай ҡатып ҡалды: бригадир бармағы унда, төкөрөкләп, балыҡ һүрәте төшөрә...

-- Төшөндөңмө инде, оҙон арҡанулла мырҙа, хәҙер беҙҙең был табынға именне ни ҡабырғаһы етмәүен?!

-- Төшөндөм... төшөндөм, буғай, Ҡорбанғәли Фәррәхович... Әммә ни...

-- Бахырйән-бахырйән! Күл ҡарауылсыһымы һин, әллә...

-- Күл ҡарауылсыһы.

-- Күлдең күтен күккә аҫкан Әбйәлил әкиәтен беләһеңме?

-- Беләм... белмәйем шикелле, Ҡорбанғәли Фәррәхович...

-- Белмәһәң, бел: күлдең күте күккә аҫылыуын, ҡуша үҙеңдең дә сүс һаҡалыңдан аҫылыныуыңды теләмәһәң, күлдең төбөндәге алтын ҡабырғаларыңды берәмтекләп бында ҡыу! – Бригадир үҙе төкөрөкләп төшөргән балыҡ һүрәтенә һөймән осолай йыуан, ҡара бармағын төрттө.

-- Кех-кех-кых... Мин ул әкиәтте беләм: Әбйәлил батыр күл эйәһен алдаған, күлде күккә аçмаған!

-- Мин һиңә Әбйәлил түгел – бригадир! Әйткәнемде үтәмәһәң, һаҡалыңдан бермә-бер аçып ҡуйырмын!

-- Һых... -- Хөппөлгәрәйулла мырҙа уйға ҡалды, һаҡал осон интегеп ыуаланы.

-- Төшөндөңмө инде хәҙер бының артынан нимә кәрәген?

-- Төшөндөм... Ҡорбанғәли Фәррәхович... балыҡ...

Аяғөçтө тороп, ҡарауылдың яурынбашынан ҡаҡты:

-- Яратам мин һине һаҡалтай мырҙа! Ошо оҙон исемең менән оҙон һаҡалың өсөн үлеп яратам! Тик ҡара уны, яҙыҡ аңлап, ауыҙыңдан турғай осороп йөрөмә. Йылтыр ҡабырғалар бөгөндән ошонда килеп ятһын. Тамаҡ зауҡым өсөн түгел, ә мөһим ғилми тәжрибә үткәреү хаҡына. Йәғни мәçәлән, аҙна һайын һәр береһенә нисәшәр йылтыр тәңкә ҡунып, нисәшәр грамм билдәмә өçтәлә икән? Аңлашыламы?

Хөппөлгәрәйулла мырҙаның маңлайынан бөрсөк-бөрсөк тир сыҡты.

-- Булды-булды, ҡыххх... – тип кенә әйтә алды ул.

...Көн шаҡтай киçкырынлағас, арттан һәрмәнеп килеп, түрә ишеген ҡаҡтылар. Хөппөлгәрәйулла мырҙа ине был: бригадирҙың бисәһе ишек асыуға бесәйҙәй “йылп!” итеп керҙе. Көллө кәүҙәһе бөрөшөп, шомтайып төшөүенә, һаҡалынан әллә тамсы, әллә күҙ йәштәре тәгәрләүенә ҡарағанда, ул, ысынлап та, аңғармаçтан һыуға төшкән, шунан саҡ йөҙөп сыҡҡан меçкен бесәйгә оҡшай ине. Дымлы тоғон төбөнән ике ҡуллап услап, усаҡ алдындағы тәрән ашлауға һелкте. Тыпырҙашып ҡойолған иçәүән айғолаҡлылар шунда уҡ бысаҡҡа юлығып, алтын-көмөш тәңкәләренән арынып, майлы табала һикерешә лә башланы. Ең һыҙғанып еңелләнеп алған Ҡорбанғәли Фәррәх улы, танау буйлатып ҡына моңло көйләп, бисәһенең беләк аçтында бешкәкселәй ҡыçтырылышып, һаулыҡ өсөн шаҡтай әһәмиәтле “ғилми тәжрибә”гә кереште...

Ошонан һуң бригадир йортоноң сүплегендә, көндән-көн ишәйә барып, үткән-һүткәндең күҙҙәрен сағылдырып, көҙгө кеүек ялтыр тәңкәләр таңғы ҡояш нурҙарында йылҡылдап ята башланы. Был тәңкәләр бара-тора Түңәрәккүл һуҡмағынан бер-бер артлы ферма мөдире, бухгалтер, зоотехник, келәт аçкыссыһы һәм хисапсы йөрөй торған юлдарға ла һибелеп, ауылдағы ағыулы телдәрҙең аҙығына әүерелде. Түңәрәккүлдә колхоз үрсеткән тәңкәлеләр күккә осоп бөткән, оҙаҡламай күл үзе лә осасаҡ, тип сәйнәнделәр. Бер заман халыҡ контроленән саҡырылмаған ҡунаҡтар килеп, күл тирәһен “еçкәнеп” әйләнә башлағас, алтын тәңкәләр яҡтылығынан яҙған Түңәрәккүл ҡапыл боларҙы, баш осонда йәшенле ямғыр дөһөрҙәп, эскерһеҙ Хөппөлгәрәйулла мырҙаның тамам ҡото алынды – ситкә оскан ҡорбан балыҡтары өсөн Хоҙай башҡа һуғасаҡ тип уйланы. Йөҙө күмерҙәй ҡарайып, эре тоҙ йәҙрәһе һалып яһаулаған, көбәгенә турғай башы һыйырлыҡ тутыҡ мылтығын яурынына зәһәр аçып, күл тирәһендә осрағандарға ҡаш аçтынан һөҙөп ҡарап, атыу менән янап йөрөй башланы, етәкселек тураһында әҙәпһеҙ һүҙҙәр таратты. Түңәрәккүлдең асыулы ҡоһорон һиҙенеп, балыҡ ҡорбаны килтертеүҙән күптән инде төңөлгән Ҡорбанғәли Фәррәх улы, тел-теш

баҫыуҙан бауырына таш ултырғандай һыҙланып, ҡарауылсыны конторағa саҡыртты. Уныһы бында ла тутыҡ мылтығын һөйрәп килде.

-- Шабаш, ғилми тәжрибәләр көҙгәсә туҡтатыла! – тине түрә, өҫтәлгә йоҙроҡ төйөп. – Мылтығыңдың дарыһын ҡоро тот. Хәҙер үк инеп, бухгалтерҙан ем яҙҙыртып ал. Көнөнә өс тапҡыр күлде ашлап тор. Билдәмә ауырлыҡтары айына мыҫҡаллап түгел, ә ботлап артһындар. Әгәр ҙә мәгәр көҙгә тиклем самауыр ҙурлыҡ карптар ҡарпымаһа, -- ишетһен ҡолағың! – үҙеңә карп булып күккә ҡарпырға тура килер!..

Шул уҡ ваҡытта бригадир ашығып артын ныҡытырға тотондо: абайлатмай елкәнән алмаһындар, иҫәүән ҡорбан балығылай, айғолаҡтан ҡаты матҡып, ҡыҙған табаға һалмаһындар!.. Район күләмендәге бер кәңәшмәлә ул трибунанан, ике күҙен әлеге сихырлы балыҡтың көҙгөлө тәңкәләреләй ялтыратып, лаф орҙо:

-- Ике айҙан ике ботло балыҡ үрсетеп бирмәһәмме...

-- Ике ботло?.. Быны нисек аңларға? – тип ҡысҡырҙылар залдан. Бының нисек булырын әле ораторҙың үҙе лә аңлап еткермәгән – ҡыҙыу баштан ысҡындырып һалғайны. Шулай ҙа ул теле осонан алтын ҡыуыҡ итеп осорған шәүләһен ҡулдан ысҡындырға теләмәне:

-- Әләккән берен айғолағынан алып бизмәнгә аҫһаң, һәр береһе ике ботло, йәғни теп-теүәл утыҙ ике килограмлы ҡорбан балыҡтары тип аңлағыҙ!

Йәмәғәт “ah!” итте. Ә шулай ҙа: “Яңы тоҡом балыҡ үрсеткәндәр, ҡойроҡтан тыш, ярға сығып йөрөмәле ике бото ла бар икән... – кеүек хәбәрҙәр таралды...

Ауылға ҡайтҡас та бригадир үҙенең ғәжәп идеяһын юғалтырға теләмәне, Хөппөлгәрәйулла мырҙаны тағы саҡыртып, айғолағынан алды:

-- Көнө-төнө йоҡламай ижтиһад ит. Ошо әкиәти Түңәрәккүлдә лә иң кәмендә ике ботло балыҡ үҫтереп бирмәһәң, ҡара уны!..

Көндәр үтте, көҙгө муллыҡ миҙгеле ҡаш һикертте. Күңелле байрам, туйҙар осоро етте. Ауыл халҡы, көҙгө уттай эштәренән арынып, ҡулдарын яҙылдырғас, теләгәнгә -- тынысланып тын алырға, теләгәндәргә, ҡырын ятып хыялланырға – “һаya караптары” осорорға ла форсат тейҙе. Бындай караптарҙың береһе, әлбиттә, мут бригадир трибунан өрөп ебәргән “ике ботло балыҡ” ине. Түңәрәккүлдә, имештер, самауыр ҙурлыҡ ҡорбан балыҡтары күлдең һыуын ярынан аштыртып ҡайнашыу, хатта әҙәм һымаҡ атлап ярға ла сығыу даны таралды тирә-яҡҡа. “Рыбнадзор”ҙан, һунарсылыҡ инспекцияһынан һәм тағы ла әллә ҡайҙарҙан мөғжизәне үҙ күҙҙәре менән күреп нарыҡларға юғары белгестәр киләсәге асыҡланды. Тауарҙы һатырҙан алда табынға һалып баһаларға һәүәҫ бригадир-түрәбеҙ бисәһенә тиҙ генә, ҡаҙан аҫтын ялматып, батша уханың һыуын ҡайната торорға ҡушты ла, йылғыр айғырын дәррәү эйәрләп, күл буйына елдерҙе. Ҡобараһы ҡойолоп төшкән Хөппөлгәрәйулла мырҙа ашыҡ-бошоҡ үреп кергән ситән аласығында аяҡ бөкләп ултырып, йылым төрнәп маташа ине. Түрәһенең сәләмен ҡабул ҡылманы. Ҡорбанғәли Фәррәх улы төпкәрәк үтте:

-- Әссәләмәғәләйкүм, тим, әллә ҡолағың тондомо?

Тегеһе һәмишә башын да ҡалҡытманы, сәйер ҡылығы менән түрәне албырғатты.

-- Теленде йоттоңмо әллә, Хөппөлгәрәйулла мырҙам? Ишетәһеңме, арҡан оҙонлоҡ исемеңде лә еткерә әйтергә өйрәндек.

-- Һөйөнсөһөнә тараҡан бото, кех-ҡых...

Бригадир, уйынға һабыштырҙы:

-- Хи-хи-хи, шылмайән! Ҡаҙ бото тиһәң дә иҫ китмәҫ, эргәлә генә бынауы алтын төплө күл барҙа! Әкиәттәгеләй әйләндерә һуғып, айғолағынан баулап килтер, булмаһа!

-- Уныһын башҡа ергә барып һәрмәрһең.

-- Ярар-ярар, һыртарҡаңды ҡабартмайыраҡ тор әле. Лутсы ҡолаҡты майла: эштәр нисек тәгәрләй? Күлдең төбөн күрмәгәнгә күп булып китте бит инде.

-- Кех-ҡых... Күккә аҫҡас күрерһең.

Ҡорбанғәли Фәррәх улы, кеселекләнеп, йөҙөнә йылмайыу ишараты сығарҙы:

-- Һәй саҡмател-саҡмател, төлкө булһаң да, өҙә тешләүеңде яратам, -- тигән булды. – Бар әле, йәтмәңде сылатып кил! Ҙур түрәләр килгәнсе, хәстәрлек күрә торайыҡ.

Хөппөлгәрәйулла мырҙа, алҡымын уйнатып, һүҙ әйтә алмай торҙо. Күҙҙәренән ике бөртөк йәш мөлдөрәп сыҡты ла ап-аҡ сүбек һаҡалы буйлап тәгәрләне.

-- Һеҙгә аныһат ул быуынһыҙ ергә бысаҡ һалыуы! Түрә-ҡара өйөрөлөп киләһегеҙ ҙә китәһегеҙ, ә мин бында йәмғеһенә әтвисәй. Таң тишелдеме, тынғы юҡ, һәр береһе ныҡый-ныҡый ыйыҡ итә...

-- Сөскөрөп бир һин ул ныҡыусыларға! Елкәләренең соҡорон күрһендәр. Минең һүҙҙе генә тот!

-- Улар ҙа шул һин әйткәнде әйтә шул... Һәр береһе: “Арт яғыңды уйла, мырҙа. Балыҡ айғолағын билгә аҫмаһаң, һаҡалыңдан аҫылғаныңды көт тә тор!” – тип ҡурҡыта... Бөтәһе лә бүтәндәргә сөскөрөп бирергә ҡуша...

-- Һин мине ул шалай-валайҙарға тиңләмә. Кем мин, беләһеңме?

Хөппөлгәрәйулла мырҙа төкөрөп үк ҡуйҙы:

-- Кых-ҡых! Барығыҙ ҙа бер сыбыҡтан ҡыуылған. Һеҙгә түлке дауай ҙа дауай, ә күл төбө өсөн һаман Хөппөлгәрәйулла мырҙа әтвисәй. Үткән төндә генә галаунай ревизорығыҙ килеп, ай-вайма ҡуймай, ятыуҙа эзбизле шешә шартлатып китте. Өҫтәүенә бармаҡ янап екерә, ниңә һыу өҫтөнә ике ботло балыҡ ҡалҡманы, тип ҡаңғырта. Кех-ҡых! Етте һеҙгә, елек майымды күп һурҙығыҙ! Алҡымығыҙҙан ағылғансы ашанығыҙ! – Ҡарауылсы йылымын атып-бәрҙе, күҙҙәрен алартып, бригадирҙың өҫтөнә килә башланы. Йыуаш бесәйҙең көтмәгәндә арыҫланға әүерелеүенән тертләп сикһеҙ йәберһенгән Ҡорбанғәли Фәррәх улы аяҡ тибеп аҡырҙы:

-- Ма-алчать! Туйып ҡоторонаһың! Ысматри, елкәңдең соҡорон күрһәтербеҙ! Иләк менән күл һөҙҙөртөп, энә менән эт тунатырбыҙ. Һәр сабағын айғолағынан үткәртеп, бөртөкләп һанатырбыҙ! Беләһеңме, был күлгә нисәмә-нисә центнер ҡиммәтле ем киткән? Етте, хеүәтит, бөгөндән үк комиссия, инвентаризация!

Һуңғы һөйләм донъяны үҙ урынына ултыртты. Хөппөлгәрәйулла мырҙаға кәфен төҫө йүгерҙе. Күҙҙәрен сырт-сырт йомоп, былай ҙа туҙғып-симәлеп бөткән һаҡал осон ыуаланы. Саҡ һушына ҡайтып, йылымын елкәгә һалды.

-- Туҡта әле, кем... Хөппөлгәрәйулла мырҙа! – Күңеле шөйлә йомшарып өндәште түрә. – Ул һынным уҡ ауырға алып бармасы. Атабыҙҙан ҡалған малмы ни был Түңәрәккүл, зыҡ-ҡубып бүлешергә! – Уйынға һапларға итеп, томһораған мырҙаның бүлтәй бөйөрөнә төрттө. – Ҡара әле, кем... кемдәр килеп төшәһен беләһеңдер, шәт? Иң-иң кәттәһен әләктерергә онотма, ҡара уны! Иң өлкәндәре килә, беҙҙең ғилми тәжрибә менән улар ныҡ ҡыҙыҡһына, эйе... Аҡ йөҙөбөҙгә күләгә төшөрмәйек, иң дәүен тотоп бирәйек.

-- Кех-ҡых... – тине Хөппөлгәрәйулла мырҙа.

-- Тәк... әйт әле, һуңғы өс айҙа был атам арбаулылары иң кәмендә күпмегә артты икән?

-- Кем?

-- Кем булһын, ҡорбан балыҡтары. Мин ҡушҡанса, ике ботло булырҙармы?

-- Ҡых... Ике ботло!.. – Хөппөлгәрәйулла мырҙа йүткеренде.

-- Тимәк, ике ботло!

-- Кех-ҡых, ике ботло.

Ҡорбанғәли Фәррәх улының түңәрәк йөҙө тулған Айҙай балҡыны:

-- Ҡара әле, кем... йылым тартышыр кемең бармы?

-- Табылыр!

...Бына түрәнең ишеген тартып астылар – шыбыр тиргә батҡан йылымсы инде.

-- Йә, эштәр бештеме, мырҙам? – Сәмләнеп усын усҡа ыуҙы бригадир.

-- Ал да гөл, кех-ҡых...

-- Һал уртаға! Юғары түрәләр килеп етмәҫе борон!

Хөппөлгәрәйулла мырҙа кәтүкләп төрөлгән һыулы йылымын елкәһенән алып өҫтәлгә орҙо. Ауыр уфылдап, эскәмйәгә ултырҙы.

-- Бәй-бәй-бәй, был ниғайыш тамаша? Ҡайҙа балығың, ике ботлоң?

-- Йылымы эсендә.

Ҡорбанғәли Фәррәх улы ҡабаланды:

-- Бысағымамы ни уны ете ҡабат хөллә эсенә төрҙөң? Ишетәһеңме, юлда машина гөрләй? Киләләр! Тағат тиҙерәк! Мәшәкәт арттырғанһың!

-- Ah-ah, ҡых... Кеше-ҡара күҙенә салынмаһың, тинем.

-- Һаҡаллы һантый! Әрекмәнгә төрәләр ҙә тоҡ эсенә ырғыталар ине уны! Киләләр!.. – Ҡорбанғәли Фәррәх улы төргәк өҫтөнә эйелде, дәррәү һүтергә кереште. Ҡулдары ҡалтыраны, ҡаштары һикерҙе, ауыҙ-мороно салшайҙы. Лайлалы ылымыҡтар уралып, еңе терһәк төбөнәсә сыланды. Бына төргәк һәүетемсә тағатылып, еҙ самауыр йоморолоғон да еллəтте, аҡ сәйгүндәй генә соңҡайып ҡалды. Ошоно күргәс, Ҡорбанғәли Фәррәх улының күҙҙәрендәге дәртле оскон ҡапыл һүрелде, йөҙөн һоро тут баҫты. Үҙ-үҙен белештермәй, йылым эсенән килеп сыҡҡан төрнәкле әрекмән япрағын йыртып асты һәм, иҫен-аҡылын юғалтып, тештәрен шығырҙатып ыңғырашты. Япраҡҡа төрөлгән ылымыҡ араһында, ауыҙын ҙур асып-ябып, йәм-йәшел һыртлы әрмәнде аҡайып ултыра ине. Хайуан йорағы, ташбайҙарын оятһыҙ тызырайтып, туп-тура бригадир күҙҙәренә төбәлгән.

-- Был-был... был... нимә?! – Ҡом йотоп тамағы ҡаҡалған уҫал ата ҡаҙҙай ҡарлығып екерҙе бригадир.

-- Ҡых! Ике ботло тап ошо була инде, һеҙҙең ғилми тәжрибәләрҙән һуң үрсегәне! – тине ҡарауылсы, япраҡ өҫтөндә шыҡайған йән эйәһенә төртөп күрһәтеп. – Ана, сатаһы асыҡ: теп-теүәл ике ботло!

Әрмәнде, ике ботон сөйөп ебәреп, ҡып-ҡыҙыл бригадир танауы аша мейес аҫтына ырғыны. Ҡапҡа төбөндә машиналар тырылдап килеп туҡтауы, тикшереүсе әһелдәрҙең мөңгөрҙәп кереп килеүе ишетелде.

1967.

Аҡыл теше

Директорыбыҙ кабинетынан таяҡ тығып болғатылған һағыҙаҡтар кеүек туҙғып килеп сыҡтыҡ. Йүгереп барышлай бухгалтерҙың кәлпәге осоп китте, склад мөдире иҙән егенә эләгеп тәгәрәне. Ә мин, директорҙың абруйлы урынбаҫары, көллө кәүҙәм ҡалтыранып, диванға әүшәрелдем.

Эштәр эт илағыс ине. Беҙҙе, нисәмә йыл бергә тырышып хеҙмәт иткән эшмәкәрҙәрен, хужа иртәнге сәғәттән үк эттән алып эткә һалды. Ул ғына ла түгел, мөгөҙҙәй осло штиблетын минең артҡы йомшаҡ еремә төртөп ҡалды...

-- Был ни хәл, был ни ҡиәмәт?! – тип, өсөбөҙ тиң иҫәңгерәп ҡабатланыҡ алғы бүлмәлә. Ә күн көплө ишек артында һаман ажғырып дауыл дулай, ҡойон уйнай, күктәр күкрәп ерҙәр һелкенә ине. Бына дөбөрҙәп өҫтәл ауғаны, сыңлап графин селпәрәмә килгәне, кабинет эйәһенең ҡапҡанға төшкән ҡарт бүреләй, теш араһынан һулығып:

-- У-у-ух, мин һеҙҙе... бөтәгеҙҙе!.. – тигән йән тетрәткес уҫал янауы ишетелде. Секретарь ҡыҙ, төҫө ҡағыҙҙай ағарып, хужа янына атлыҡты, ә беҙ, аҡтыҡ түбә сәстәребеҙҙе услап йолҡа-йолҡа, тышҡа сығып йүгерҙек. Көн яҡтыһын күрмәй тонған күҙҙәребеҙҙе ҡабат асып ебәргәндә өсөбөҙ тиң үҙебеҙҙең складта – бүҫкәреп барған ҡайғы шешәһе эргәһендә бойоғошоп ултыра инек.

-- Их заманалар-заманалар, ҡалай тиҙ үҙгәрәһегеҙ! – Танауын мышҡылдатып, яҙыу ҡараһы күкшелләткән еңе менән танауын һөрттө бухгалтер. – Директорыбыҙ шундайын да мәрхәмәтле, йомшаҡ күңелле зат ине. Телефондан ғына сирттереп: "Әүхәт Әбләисович, бер минутҡа ғына минең янға инеп сығығыҙ әле!" – тип ымлап алыр ҙа көндөң-көнө буйы кроссвордтар сисешергә ҡушып ҡуйыр ине. Шундайын саҡтарҙа һуҡыр нолгә таяҡ өҫтәп яҙып индерһәм дә, башын ҡалҡытып та ҡарамайынса ғына, ҡултамғаһын сәпәр ҙә ебәрер ине...

Мөдирҙең дә күҙҙәренән супырлап әсе-татлы хис йәштәре ҡойолдо. Бахырым, сөрөш маңлайын ҡаҡ өҫтәл ситенә туҡмаҡтай ороп, сабыйҙарса үҙәген тартып үкһене:

-- Шәп кенә тиһең, йомшаҡ күңелле генә тиһең... Юҡ, Әүхәт әшнә, бик тә беләһең килһә, беҙҙең директор ул торғаны менән изге әүлиә, төкәнмәҫ хазина ине! Өсөнсө көн генә әле, егерме биш йәшник сигаретты сыҫкан ҡайыҙлаған тип барып ингәс, "эһ!" тә итмәй, "списать!" тине лә сығарҙы. Ә бөгөн... Их!.. китте генә башҡайҙарыбыҙ... Моғайын, теге үҙегеҙ белгән ике йәшник һиндостан сәйенең осо-башына сыҡҡандыр...

Өсөбөҙҙөң дә һуңғы бөртөк сәстәребеҙ үрә торҙо.

-- Тимәк, эш харап – зәмбөрләп бата беҙҙең карап!.. – Һығымталап өлгөрҙө сос бухгалтер, элекке диңгеҙ бүреһе. – Полундра! Иҫән-имен саҡта тиҙерәк ҡотҡарыу кәмәһен көйләйек – баланс-маланс һуғып, итәк-еңде йыйнап ҡалайыҡ!

-- Әүхәт Әбләисович, зинһар, кәмәгеҙҙән мине ҡалдыра күрмәгеҙ, карап менән ҡуша батыра күрмәгеҙ... балаларым хаҡына!.. – Бухгалтерҙың аяғына йығылып ятып ялбарҙы склад мөдире. Үҙебеҙҙе ысынлап та батып барған караптың ҡомаҡтары һымаҡ тойоп, күҙ алдарым ҡараңғыланды, телемде арҡылы тешләп, складтан сығып йүгергәнмен...

Иртәгәһен һары таңдан уҡ баштарыбыҙ ҡаңғырып, йәнә өсөбөҙ бер ҡойонға өйөрөлөп, күн көплө ишек төбөнә йыйылдыҡ. Сығырҙан сыҡҡан директорыбыҙҙың өсөбөҙгә лә бер иштән кәзә билеты тотторо олаҡтырасағына инде шөбһә юҡ, тик фәҡәт ғәзиз башҡайҙарҙы ташҡапсыҡтан аралау ине ниәт...

Секретарь ҡыҙ килеп эшкә ултырҙы, баш-күҙен төҙәткеләне. Беҙ фәҡирҙәргә әйләнеп тә ҡарамай, ҡағыҙҙарын ҡыштырҙатты. Сәғәт туғыҙҙы һуғып, ун биш минутҡа китте һәм, ниһайәт, буҫағала дәһшәтле көс – мөгөҙ башлы штиблеттар күренде. Ҡөҙрәтле хужа үҙе, штиблеттар артынса уҡ пәйҙә булып, күк күкрәтеп тамаҡ ҡырҙы ла урталыҡта туҡтаны, беҙҙең моңһоу мөйөшкә күҙ ташланы. Өсөбөҙ бер юлы тертләнек, ырғып торҙоҡ. Арҡа буйҙарыбыҙға яғымһыҙ һыуыҡ йүгерҙе, ҡотобоҙ бот буйына ҡасып, таяҡтай шаҡырайып ҡаттыҡ, һулышыбыҙҙы туҡтаттыҡ... Үле тынлыҡта беҙҙе биҙгәк тотҡандай ҡалтыратып, хужабыҙҙың биш мәшриҡҡә тырпай бармаҡлы ҡулы яурынбаштарыбыҙҙан ҡағып уҙҙы:

-- Йә, осоп килеп тә еттегеҙме бөркөттәрем! Кәйеф-сафалар шәпме, бала-сағалар иҫәнме?.. Секретарь, ҡарале, оло байрам етеп килә түгелме? Тантаналы приказ яҙ, күп йыллыҡ намыҫлы хеҙмәттәре өсөн бөркөттәремдең өсәүһенә лә минең исемдән ат башындай рәхмәт ҡундыр! – Кабинет ишеген ярым асҡас, хужа беҙгә мөләйем боролоп ҡараны, ҡулындағы яңы кросвордлы журналын болғап, бухгалтерға ишараланы:-- Әүхәт Әбләисович, бер минутҡа ғына минең янға кереп сығығыҙ әле!

Күн көплө ишек ябылғас, беҙ, һаман әҙәм рәтенә килә алмай, секретаргә тилмерешеп ҡараныҡ, ә бухгалтер һыҡтап илап ебәрҙе. Ҡыҙыбыҙ иһә бүлмәне шаңғыртып көлдө:

-- Их һеҙ, күшеккән бөркөттәр! Кабинетҡа ҡыйыу рәхим итегеҙ! Кисә ни, Хоҙаның хикмәте булып, директорыбыҙға аҡыл теше сыҡҡан бит. Һуңлап сыҡҡан ул теште белəһегеҙ: үлтереп һыҙлаусан була. Шуны һурҙыртып килгәндер...

Шөкөрана ҡылып иркен тын алдыҡ: Тәңре әгәр бәндәһенә көн һайын аҡыл теше сығарып торһа, ни хәлдәр итер инек? Беҙҙең ише аҫыл бөркөттәргә оялар урын ҡалмаҫ ине...

1968.

Виртуоз

Әссәләмәғәләйкүм – вәғәләйкүмәссәләм, ҡапҡа келəһе ысҡынды. Был ҡапҡаның ҡарауылы булам мин. Ҡалабыҙҙа төҙөлөп ятҡан бик мөһәбәт объекттың ҡапҡаһы төбөндә баҫып торған минең кеүек һағауылдың ысынында

кем икәнен белəһегеҙме əле һеҙ? Белмəйһегеҙ, төшөндөрөп бирəйем. Ҡарауыл-һаҡауыл – шаулы тормош урғылының иң мөһим клапаны, көйләүесе. Ҡарауылдың ике күҙенəн үтеп, ике ҡулы аша бүленеп, бармаҡтары араһынан мул урғыл уң яҡҡа ла, һулға ла ағыла ала. Ҡарауыл көйləмəһə, ағындарҙың ҡайһылары бүҫкəреп, ҡайһыһы туҡталып уҡ ҡала. Донъялағы иң тəрəн тормош тəжрибəһен, иң үткер зирəклекте, иң юғары белемде талап итə ул ысын ҡарауыл һөнəре. Ҡапҡа һағына баҫҡан бəндə һəләте менəн күп төрлө -- виртуоз булырға тейеш. Күп кешеләр белмəй шуны.

Исемемме? Мөһим түгел уныһы. Объекттың аҡыл эйəләре мине Виртуоз тип йөрөтə. Ни өсөн? Һəр яҡҡа ла башым эшләгəне өсөн. Ҡарауылға боронғоса ҡарауыл тип кенə ҡараһағыҙ, мине аңламаҫһығыҙ. Мин – яңыса ҡарауыл-һаҡауыл.

Белемемме? Икеләтə юғары – университеттың тарих һəм дə филология факультеттары. Тимəк, кеҫəмдə герб мөһөрləнгəн ҡыҙыл ҡатырға тышлы, һыйыр ҡолағы дəүмəлле ике дипломым бар. Ҡуйынымда – Япония ла ҡоштар йырын яҙа торған кескəй генə диктофон, ауыҙымда Черчилль тартҡан алтын буталлы махра, ҡулымда аҡ бирсəткə. Икеләтə дипломланған ҡарауыл.

Тəүге тапҡыр ошонда морон төрткəс, төҙөлөш башлығы штатҡа алырға ҡыйынһынып маташты:

-- Диплом-юрғаларығыҙҙың икеһенə бер юлы сата киреп атланмай, ни өсөн бында тəпəй-тəпəй килдегеҙ?

Һиҙҙертмəй генə кеҫəләге диктофондың төймəһенə баҫтым да, яңы мəшəҡəттəр ыратмаҫ өсөн, “һеҙ” урынына “һин” тип һөйлəшергə килештем.

-- Тəбиғəтем теләй быны, -- тинем. -- Мин көндəрен, ҡапҡа төбөнə шыҡайып, заманабыҙ машиналарының гөрлəүен, ə төндəрен һандуғас йырҙарын тыңларға бик яратам. Зыңлап торған тормош заңдарына һыуһаным!

-- Беҙҙең эш – ағас та таш, бетон да кирбес. Белем яғынан техникум да бик еткəн. Тарихсы һəм филологтарҙың юғары белемлеһе ла, түбəнлеһе ла кəрəкмəй.

-- Туҡта, ағай, сабыр ит. Ағасты ла, ташты ла, бетонды ла, кирбесте ла тоткан ерҙəн һындырып барма улай. Тəүҙə уның төрлө ҡырын əйləндереп ҡарайыҡ.

-- Күпме сəйнəһəң дə -- бер балыҡ башы, тигəндəй, таҡта-тоҡта, кирбес-мирбес өйөлөп ятҡан ихатала дипломлыларға урын юҡ. Улар урыны мəктəптəрҙə, вуздарҙа.

-- Ə мин йəшлек ҡөҙрəтемде төҙөлөшкə арнайым. Тарихсының зирəклеге, филологтың откорлоғо, күпте күргəн тумыртканың тапҡырлығы кəрəкмəйме ни һеҙгə?

-- Һммм, -- тине башлыҡ, башын ҡашыны. – Ниңə йыйын юҡ-бар һөйлəп башты ҡатыраһың əле? Ҡушала ҡыярҙай юғары белемле башыңды мин ҡайҙа илтеп тығайым?

-- Тишектəрең аҙмы ни?

-- Һммм, уларға иң түбəн белем бөкөһө ҡулайыраҡ.

-- Белем мəсьəләһен онот, теләгəн бер тишегеңə шыпылдат.

-- Бер-ике көн күҙ буярһың да прописканан үтерһең дə тайырһың.

-- Мин һиңə тай-тулаҡ түгел – табандарым дағалы. Ышанышлы уң ҡулың менəн һул ҡулың булырмын.

Башлыҡҡа был ыңғай тәьҫир яһаны.

-- Ярар, һайлап ал: кирбес апиреп торорғамы, бетон болғатырғамы, буяусыларға баҫҡыс шыуҙырышырғамы?

-- Көллөһө лә бик ҡулай, әммә минең профилгә тап килмәй, -- тинем.

-- Әйттем бит...

-- Әйтмәнең шул әле, ағайым. Был төҙөлөш объектында бер генә лә ҡапҡа заты юҡмы ни?

-- Ҡапҡаларға килгәндә, беҙҙән байырағы юҡ.

-- Ҡапҡалар байлығы зарарлы. Бер дәү ҡапҡа ғына ҡалдырасаҡбыҙ. Уңдан инеп, һулдан сығып йөрөмәһендәр. Минең һымаҡ бер виртуоз-ҡарауыл ғына булырға тейеш!

Башлығымдың сығынсыларға итеүен алдан киҫәтеп, диктофонды сығарҙым:

-- Пардон, беҙҙең һөйләшеүҙәр таҫмаға яҙыла. Теләһәгеҙ, асыҡ ҡапҡалар тураһында радионан, гәзиттәрҙән шаңғыртам. Ҡыҙыл дипломлы филолог икәнемде иҫтә тотоғоҙ!

-- Ғәфү итегеҙ, оклад мәсьәләһе...

-- Уныһы үҙмаҡсат түгел.

-- Йөҙ тәңкәгә лә етмәй...

-- Тәңкә ҡоло булырға йыйынмайым. Минең өсөн иң таныһығы – оло ҡапҡа күгәненең моңло һандуғас йыры. Бик тә белгең килһә, тыумыштан уҡ мин һәүәҫкәр ҡарауыл!

Шапылдатып ҡул бирешеп килештек.

Ҡапҡаларҙы тик берәүгә ҡалдыртып, һағауылға баҫҡан тәүге сәғәттә үк ҡойроғон бот араһына ҡыҫкан йүнһеҙ алабайҙай шөмтөрәйеп сығып барған малярбайҙы тышауланым.

-- Һәп-һәп, һәпестәй – беләгеңә элгәнкәйең нәмәстәкәй, ағайым?

-- Күрмәйһеңме ни, ҡустым, йомошҡа тип еңгәйең элеп ебәргән хужалыҡ сөмкәһе бит.

-- Эсендәге сылтыр-шылтырҙарҙы ла еңгәйем үҙе һалдымы?

-- Эйе-эйе, еңгәйең һалды! – Ҡыуанғандай итте маляр. – Урамдағы баҡсаға сығып аша – төшкөлөккә быҡтырылған ит, тине.

-- Ошо данлы объекттың нәҡ бишенсе ҡатындағы изән ярыҡтарын бөтәштерергә тигән ҡиммәтле паста менән һары эмальгә йылтыр лакты соус итеп быҡтырғанмы ни еңгәкәйем? Тәмлеме?

Ағайымдың йырыҡ ауыҙы ябылды, тубыҡтары ҡалтыраны. Ян-яҡҡа һаҡ ҡарап алып, һыра һөрөмө бөркөп ҡолаҡҡа өрҙө:

-- Ҡустым, үҙең белмәгән ни бар? Бригадир үҙе йомош ҡушып йүгертте анауы һыраханаңың артҡы ишегенән атҡарырға. Һинең менән алдағы көндәрҙә лә бергә-бергә эшләйһе, йәшәйһе. Һин күрмә лә мин белмәйем, тим йәғни...

-- Ә юғарыраҡ ағайың күреп ҡалһа?

-- Уға ла ҡапҡа кәрәк, ә ҡапҡа берәү генә... Уның да бит үҙенә күрә килем-китем хәсрәттәре етерлек...

-- Бригадирыңдың да, юғарыраҡ башлыҡтың да өлгөрбай шәкерте икәнһең, -- тинем. – Килтер, шәкерт көндәлек дәфтәреңде – белемең өсөн сәпәйем әле “өслө”нө. Ҡабат ҡайһылай әйләнеп ҡайтыуыңа ҡарап алырһың, бәлки,

“дүртле”не. Бел беҙҙең игелекте! – “Быҡтырылған ит” банкыларының береһен алып ҡалып, ары үткәреп ебәрҙем.

Тиҙҙән ағай сөмкәһендәге баяғы йоморолар, килбәттәрен алмаштырып, бүлк-бүлк көлгән һыра шешәләре рәүешендә кире әйләнеп ҡайтты, береһе минең йылы усымда ҡалды. Ҡапҡаға келә һалып, өшәләгемдең өҫтәле аҫтында улъяларымдың икеһен ҡауыштырып, хеҙмәт даирәмде киңәйтмәккә ихата буйлап йүнәлдем. Бинаның беренсе ҡат йөҙлөгөнә -- буласаҡ магазин витринаһына көҙгөлө быяла киҫтертеп торған прораб янына һуғылдым:

-- Әссәләмәғәләйкүм!

-- Вәғәләйкүм, -- тип мығырҙаны ҡырыҫйән.

-- Алмас алмаймы әллә?

-- Ниңә? – Хәүефләнеп күҙҙәремә ҡараны.

-- “Китек-ҡотоҡ”тар бик күп.

Прораб тың йөҙө яҡтырҙы, нигеҙ буйына һөйәп ҡуйылған быяла киҫәктәренә ишараланы:

-- Әйтмә лә инде, яҡташ, тоташлайына брак. Заводтан уҡ, йәшниктәренә балға менән ҡундырып, онтаҡлап ебәргәндәр...

Һайрап бөткәнен көтмәнем: йәшерен диктофонымды йәтешләп, быяла киҫеүселәр төркөмөндә бер ситтәрәк шымтайып торған оҙон һираҡлы иргә ҡарсыға ҡарашымды ҡаҙаным. Утлы ҡуҙға төшкән ҡалъялай сөрөштө, муйынын эскә тартты. Кем был? Көсөк ҡойроғоноң осолай ҡулсаланған аҡ мыйығы шунда уҡ кем икәнлеген иҫкәртте: үҙем күреп йөрөгән, сепрәк-сапраҡ баҙарында ҙур стена көҙгөләре һатаҡай үҙаллы һөнәрмән был. Бер һүҙ менән әйткәндә, ҡаланың мебель фабрикаһы конкуренты. Нигеҙ буйындағы китек-митек артындағы бөтөн табаҡ “брак”тарға ҡарағанда, ниңә бында тороуы ла аңлашылды.

-- Их был иҫәүән дәүләтте! – тинем. – Затлы көҙгө быялаһын завод ҡапҡаһынан уҡ һулға ғына оҙатмай, витринаға тип килтереп хур иткән. Ярамағанмы дәүләт йортона йоҡа-моҡа быяла?.. Ҡайҙа резолюция – китһен рекламация! – Прораб тың йөҙө уғата балҡыны, әсәһен күреп ҡыуанғандай йылмайҙы:

-- Шулай, шулай! – тине.

-- Ғәфү итегеҙ, объектта себен сәсрәп ауһа ла ҡарауыл белергә тейеш, -- тип өҫтәнем, бармаҡ осом менән генә быяла “брак”ты ҡытыҡлап. – Был йыйын юҡ-бар нәмәне, тим, ҡануни списать итеп, акт төҙөнөгөҙмө?

-- Төҙөнөк, төҙөнөк, иптәшетдин ҡарауыл!

-- Тимәк, былар – хәҙер үк ҡала сүплегенә?

-- Ҡала сүплегенә, ҡала сүплегенә, иптәшетдин ҡарауыл!

Ҡырыйҙараҡ боҫоп торған самосвалдың шоферын сиңәртәй бармағым менән генә ымлап алдым:

-- Ҡәҙерлем, минең бынауы күҙҙәрем алдамаһа, баянан бирле сараһыҙ интегәһең. Бираҡтырып киләйек әле ошо эшкә ашмаған быяла ватыҡтарын минең ҡала ҡырыйындағы картуф баҡсам ҡырыйына – хәйерһеҙ һуҡыр сыҫкан юлын быуырға.

Оҙон һираҡлының да, прораб тың да ике күҙе шар булды:

-- Юҡ-юҡ, кәрәкмәй, беҙ уны үҙебеҙ! – тине икеһе бер юлы.

-- Үҙегеҙен үҙегеҙ ҙә ул, тик бик оҫта сатнаған да кителгән бит әле был быяла ғәләмәттәре. – Йылап ҡына берәм-берәм ҡалҡытып барларға керештем. – Һәй был заводтыҡыларҙы, балға менән ҡайһылай оҫта һуҡҡандар! Һәр киҫәге дүрткел генә оҙонса – оләсәйемдең аяҡлы көҙгөһө менән бер иш геометрик формала. Хәйер, был ҡәҙәреһе миңә, ябай ҡарауылсыға, әллә ни яҡты түгел – ҡараңғы, -- тинем. Оҙон һираҡлыға әйләнеп баҡтым. – Бәлки, был сатнауҙың мәғәнәһен көҙгөсө ағай әйтер?..

Икеһенең дә бер ыңғай күҙҙәре мөлдөрәп, муйындары һәленде.

-- Ҡара әле, кем...

-- Кем түгел, ә иптәшитдин ҡарауыл. Минең менән аңлашырға теләһәгеҙ, конторама инегеҙ. – Ҡапҡа төбөндәге ярым емерек өшәләгемә ыңғайланым. Прораб, ыш-ыш итеп, артымдан уҡ йүгереп килеп етте...

Объекттың нигеҙ төбөнән алып ҡыйығынаса ҡыл ҡымшатҡандарҙың йәмғеһенең ҡапҡаға бәйле мутлыҡтарын берәм-берәм ана шулай энә күҙәүенән үткәрҙем, ә энә осон, онотмаҫҡа, диктофон таҫмаһына беркеттем. Кискә табан, ялҡынлы эш сәғәттәре һүрелеп, артыҡ бүрәнә баштары һирәгәйгәс, ҡапҡаға типке һалдым да келә муйынын ат башындай йоҙаҡтан ҡаптырҙым. Өшәләгемә инеп, боттарҙы ипле киреп, аяғы һыныҡ өҫтәл артында һыра һемерергә ултырҙым.

Түшәмгәсә зәңгәр ебәген һуҙылдырып махра менән хозур ғына мауыҡҡанда, ихата төпкөлөнән сәйер йөклө самосвал ҡалҡып сығып, тәҙрә күҙенә бәрелгән күгәүендәй, ҡапҡаға морон төрттө, шоферы, шашынып, баҡыр борғоһон баҡыртырға тотондо. Мин аяҡты тәҙрә тупһаһына һалдым, зәңгәр төтөндө асыҡ тәҙрәнән ирәүән генә өрҙөм.

-- Эй, балда, йоҡланыңмы әллә? – тип аҡырҙы шофер. – Ниңә һорамай бикләйһең?

-- Ә һин ниңә һорамай тейәйһең?

-- Был ни хәл, ниндәй башбаштаҡлыҡ? – Кабинанан ҡыҙарып бүртенгән яһил – мине эшкә алған түрә үҙе килеп төштө, тәҙрә төбөнә өңөлдө. – Күҙең тондомо әллә, ҡушала дипломлымын тигәс тә!

Һис иҫем китмәй генә, һаман шул ҡырын ятҡан килеш, түрәкәйҙең муйынына зәңгәр төтөн галстугы ураным.

-- Танымайһыңмы әллә, мин кем?! – тине йөҙө буҙарынып.

-- Һинме? Үҙебеҙҙең данлы төҙөлөш башлығы.

-- Һуң эш ниҙә, ниңә асмайһың?

-- Аулаҡ ҡына әйтәһе бер һүҙем бар.

-- Иртән контораға кил.

-- Юҡ! Хәҙер үк үҙегеҙ минең янға конторама инегеҙ. Ишек ана теге яҡтан асыла. – Тәҙрәне шартлатып яптым.

Күҙҙәрен ҡан баҫҡан башлыҡ йоҙаҡты шалтыр-шолтор тартҡылап ҡараны ла, биш аҙымын бер ырғып, өшәләгемә ябырылды.

-- Эш ниҙә, мөртәт?

-- Эш һиндә... жулик.

-- Ни-ни... нимә?!

-- Жулик, тим. Жу-лик. Жу-лик. – Ике бармаҡ арама ипле ҡыҫтырып, башлыҡ танауы тирәләй утлы тәмәке әйләндерҙем. – Аңлашылмаймы әллә? Мәғәнәһен әйтеп бирәйемме был һүҙҙең?

-- Юҡ, кәрәкмәй, -- тине башлыҡ, зәһәр торомбашты танауы аҫтынан ситкә этәреп. Күҙҙәрен аҡырайтып, өҫтәл янына ултырҙы.

-- Бына шулай, ағайым. Беҙ бик яҡшы аңлаша ла башланыҡ шикелле инде.

-- Юлбаҫар! Самосвалда йыйын әкәм-төкәм – кирбес ватыҡтары!

-- Бик яҡшы. Ә беҙ уны, ҡала буйлап саң туҙҙырып барыуын киҫәтер өсөн, өҫкө ҡатлам ғына онтағын аҫҡа һыпырып ташлайбыҙ, аҫтағыларын өҫкә әйләндерәбеҙ.

Башлыҡ өҫтәлгә һуҡты:

-- Ух, мөртәттең дә мөртәте! – Шунда уҡ йомшай ҙа төштө. – Ярар, һинеңсә булһын икән, ти: бөтөн-мөтөн кирбес, ти. Әммә беренсе тапҡыр, ауырыу бер пенсионерға ярҙам булһын тип кенә. Бахырсыҡ, йоҙроҡтай ғына өйөнә мейес сығарта алмай ыҙалана.

Ҡуйындағы ғәмәл дәфтәрен асып, саҡ ҡына элек бынан башҡа тағы ла нисә машинаның, ошондай уҡ “әкәм-төкәм” артмаҡлап, ошо ҡапҡанан нисә сәғәт тә нисә минутта ошо түрәнең бурала башланған дачаһы яғына ғыжылдап сығып киткәнен, борт номерҙарын уҡып ишеттерҙем.

-- Береһендәге шыйыҡ бетон, икенсеһендәге ҡорос каркастар ҙа шул уҡ бахырсыҡ пенсионерға инеме?..

Тештәрен шыҡырҙатты:

-- Белгең килһә, ул бетон да, каркас та, кирбес тә объекттан артып ҡалған кәрәкһеҙ нәмәләр улар!

-- Артҡас, ниңә артыҡ алдығыҙ?

-- Һинең һымаҡ башлы егет аңларға тейеш: былар диңгеҙҙән бер тамсы, ҙур тауҙың саң остоғо.

-- Ә ниңә ул “остоҡ” тап һеҙҙең яҡҡа оса?

-- Беҙ быға ғына хаҡлы. Ал-ял белмәнек, кирбескә ватылырға, бетонға ҡатырға, тимергә тутығырға юл ҡуймаҫыҡ. Материалдың эш барышында юҡҡа сығырға тейешле тип планлаштырылған өлөшөн һаҡлап ҡалдырҙыҡ.

-- Тимәк, план нормалары иҫкергән, йәки промышленносыбыҙ продукцияны күп тапҡырға сифатлыраҡ эшләп сығара башлаған. Был хаҡта дәррәү хөкүмәткә, редакцияларға хәбәр итергә, төҙөлөшкә бүленеүсе материалдың күләмен кәметергә кәрәк.

Ошо тәҡдимдән һуң башлығымдың өҫтөнән, ҡыҙған мунса ташына һыу һипкәндәй, эҫе боҫ бәреп сыҡты, маңлайынан шыбырҙап тир ҡойолдо:

-- Ух, ике аяҡлы ҡаза! Ниңә әҙәмсә һөйләшмәйһең, ҡарауыл?

-- Иптәшитдин ҡарауыл!

-- Уртаҡ телгә килергә ваҡыт, иптәшитдин ҡарауыл.

-- Ваҡыт, бик ваҡыт, ағайытдин-туғанитдин түрәкәй! Ике ҡулың мин һинең.

-- Хуп, ниндәйерәк вариант? – тине мутлыҡ эйәһе. Бармаҡ бөкләмәйенсә үк иҫәп-хисаплап бирҙем:

-- Был үҙе йөрөшлө арбала, кәм тигәндә, мең кирбес – дәүләт хаҡы менән ҡырҡ ике һум. Тегеләрендә һыпыртҡан бетон менән каркас – минимум ике йөҙ илле һигеҙ һум. Йәмғеһе була өс йөҙ һум.

-- Шунан?

-- Ултырған да шыуған. Ата-баба ғөшөрө иҫәбенсә... ундан бер өлөшө.

Башлығым, ҡаҙандағы ҡыҫалалай ҡыҙарып, һыйыр телендәй өс ҡыҙыллыҡты алдыма ырғытты:

-- Мә, һоғон, королдәргә тиң ғөшөр!

Утыҙ һумлығы өҫтөнә эшләп торған баяғы япон ғәләмәтен сығарып һалдым:

-- Факт алдыбыҙҙа: дәүләт милкен сумырғаныңда тотолғас, ҡарауылсыға аҡсалата ришүәт бирҙең. Һүҙҙәрең дә диктофонға яҙылған. Милиция саҡыртайыммы, әллә рәшәткә артына үҙ теләгең менән ултыраһыңмы?

Күҙҙәренә ҡан һауҙы, бала башы дәүмәлле йөнтәҫ йоҙроғон башым өҫтөндә уйнатты:

-- Кем һин, әйтеп ҡотол!

-- Минме? Мин – Виртуоз.

-- Аферист һин! Совет власының ҡан дошманы! Үҙеңде тимер ситлеккә яптыртырмын!

-- Оккей, икебеҙ бергә ябылабыҙ улайһа. – Диктофондың бер төймәһенә баҫтым. Тәүҙә матур һандуғас йыры сыңрағас, башлыҡтың тупаҫ екеренеүҙәре теҙелде, бөтәһен дә баш баҫып, дикҡәт менән тыңланы. Ахырҙа, маңлай тирҙәрен һөртөп, һораны:

-- Йә, минән нимә кәрәк һиңә, ике дипломлы бәдбәхет?

-- Ике дипломлы башымды иҫәпкә алып, иртәгә үк приказ менән үҙеңдең урынбаҫар итеп ҡуяһың, кабинетың эргәһенән келәм юллы айырым кабинет бирәһең!

Уҫка-ус шапылдата һуғып килештек.

1974.

Һуңғы могикан

Һыуҡай ағыламы был? Юҡ.

Сүпер-сүпер, сүпер-сүпер ҡан аға. Түтә юл ҡабырыйында, емерек машина киҫәктәре араһында, енәйәт донъяһының ҡара короле – һуңғы могикан – хәл өҫтөндә ята. Әле генә уны үрҙән елдереп төшкән самосвал бәреп йыҡты. Еңел машинаһы менән ҡуша. Йыҡты ла туҡталып та торманы, ҡара юлын дауамланы. Хәҙер инде бөйөк могикан һыныҡ бил һәм муйын менән аҡтыҡ сәғәтен кисерә. Иҫәнгерәгән мейеһе һәләкәтте осраҡлылыҡ бәләһе тип баһалай.

“Ҡайҙан килгән самосвал йөрөтөүсегә был ҡырағайлыҡ, әҙәм ғүмерен сүпкә лә һанамау? – тип, һүрелеп барған ғүмеренең һуңғы сатҡыларын йыйып, аҡтыҡ фәлсәфәһен ҡора рәхимһеҙ әжәл әсеһендә әүәлге әҙәми сифаттарына ҡайта башлаған могикан. – Төптән уйлап ҡарағанда, көллөбөҙ тыуып үҫкән был илдең (бындай бөткән баш енәйәтсенең дә тыуған ил тойғоһо була, күрәһең?.. – *Автор.*), юридик кенә түгел, әхләҡ һәм әҙәп бизмәне лә “кеше – кешегә дуҫ, иптәш һәм туған” тип билдәләй ине түгелме? Мәктәптең тәүге баҫҡысынан аҙағынаса кешелеклелек ҡағиҙәләрен ятлатмайҙар инеме? “Бөтәһе лә кеше өсөн!”, “Кеше – ғорур яңғырай!” – шул шиғарҙар тыуа-тыуғандан был кешеләрҙең мейеһенә әсә һөтө менән ҡуша һеңдерелеп килмәнеме? Аҙаҡ килеп, фашизмды еңеү өсөн иң кәмендә егерме миллион ғүмер биргән ошо халыҡ (әжәл алҡымдан алғанда быны ла иҫенә төшөрөп уйлай могикан!.. – *Автор.*) хатта себен ғүмеренең дә ҡәҙерен белергә тейеш ине түгелме?! Ә был самосвал йөрөтөүсе мине тәүҙә “Волга”м менән ҡуша тапатып иҙҙе, ә шунан һуң әйләнеп тә баҡманы – себенгә лә һанаманы...”

Тормоштоң ошо аяныслы күренешен билдәләрлек баҙыҡ ҡына тамға-һүҙ таба алмай йөҙәй могикан. Ғүмере буйына тәүҙә цифр-һандар менән, ә артабан йоҙаҡ ҡайырғыс шөшлө һәм хәйләр менән генә эштәр ҡылғас ни, күңелендә кәрәкле һүҙҙәр ҙә ҡалмаған... Ғүмер тигәнең тамырҙарҙан сүпер-сүпер ҡойола ла ҡойола, һәр секунды был сәғәттең йыллыҡ мәғәнәгә эйә. Ә ул ошо ғәзиз һуңғы секундтарында шул бер һүҙҙе таба алмай интегә. Ҡайһы сифаты менән зиһенен томаланы, баш һөйәген бураулап керҙе был машина йөрөтөүсе? Ни тип баһалана ысын исеме? *Ҡанһыҙлыҡмы? Ҡурҡаҡлыҡмы?* Сифаттарҙың икеһе лә, айырым-айырым алғанда һәм үҙ урынына ҡуйғанда, могикандың инаныуынса, тәбрикләүгә генә лайыҡ, әлбиттә. Сөнки уның ябай әҙәм аҡтығынан могиканға әүерелгән бөтә тәржемәи хәле шул икәүҙең бер-береһенә бәйлелеген, могиканлыҡҡа юл асыусы ҡорал кеүек кәрәклеген иҫбатлай. Тик могикан үҙенең әжәл сәғәтендә эҙләп интеккән берәгәй һүҙ түгел ул. Нимә һуң, нимә?!. Тәртипһеҙлек... илтифатһыҙлыҡ... вайым... туҡта-туҡта, *вайымһыҙлыҡ!* Эйе, вайымһыҙлыҡ! Бына ҡайҙа ятҡан ул иң кәрәкле һүҙ! Һәй, был ғүмерҙең аҡтыҡ сәғәте-минуты!.. Аҫтындағы алашаһын алты ай эҙләгән, тигәндәй, могикан үҙе ғүмере буйына йөрәк түрендә йөрөткән, “еүеш эш”тәр һуҡмағында бөтә “шәкерт”тәренә лә уның асыл мәғәнәһен асып бирергә тырышҡан һәм, аҙаҡ килеп, улар үҙҙәре ҡаса-боҫа тере тиреһен тунаған ошо илдең “халыҡ” тип аталған, ә могиканса асылы уның туналыусы “фраер” булған һәммә вәкилдәрендә лә шул сифаттың, ныҡлы тормош ҡанунына әйләнеп, тамыр йәйеүен теләүсе күңелдәге берҙән-бер һәм зарур һүҙ, йоҙаҡ ҡайырғыс шөшлө кеүек кәрәкле һүҙ, ҡайҙалыр хәтер ҡырыйында күренмәй күмелеп торған.

Вайымһыҙлыҡ! Могикан был баҙыҡ һүҙҙең ләззәтен үҙ ғүмерендә тәүге “еүеш эш”ен үтәгәндән аҙаҡ татыны. Ул ваҡыттағы шомло даны, хәҙергеләй, көллө енәйәт донъяһында танылған могикандыҡы түгел ине әле, ул ни бары ҡаланың нефть базаһында оялсан ғына кесе бухгалтер ине. “Яға аҫына” ҡырыҡ градуслыны һалырға һәүәҫ ине. Төшөрөп ҡайтҡаны һайын, дөйөм үткелекле коммуналь фатирҙы дыу килтереп, нәҙекәй генә билле бисәһен тас-тос түбәләп ләззәтләнер, ә үҙен садист тип йөрөтөрҙәр ине. Дөрөҫөн генә әйткәндә, был шөғөл

оялсан тәбиғәтле кесе бухгалтерға илһамы ҡупҡан минуттарында театр һәм концерт залдарын бер ыңғай алмаштырыр ине. Нәҙекәй билле бисәһенең “концерт биргән” таушы килә башлаһа, күрше-күлән күҙен йомоп бүлмәләренә олағыр, садист тағы тотондо, тип, ишектәрен эстән тартып ябыр ине. Ә һуңынан, иртәгәһен, бер ни ҙә булмағандай, кесе бухгалтер менән һин дә мин һөйләшеп көлөшөр ине. Был моңло эш бер йыл самаһы барҙы, ләкин бер тапҡыр ҙа кесе бухгалтер ишеген управдом йә милиционер ҡулы килеп шаҡыманы, сөнки өйҙән сүп-сар сыҡмай – күрше-күлән һуҡыр сыҫкандай күҙһеҙ һәм моңһоҙ ине, һыуҙағы балыҡ шикелле өнһөҙ ине.

Таң тишегенән тороп, баш төҙәткес таба алмай, ҡара толомдарын ҡулға урап, ҡабырға буйҙарын һуңғы тапҡыр йәнтәслим ярып һалғанда, нәҙекәй билле бисәһе үҙе, бесәй тырнағына тарып ҡанға батҡан сәпсектәй, урамға сорғолоп сығырға итеп ҡараны. Был ни эш?!. Көтөлмәгән саялыҡтан кесе бухгалтер уғата ярһып, сәмләнеп, беләк буйы уҡлауҙы эшкә екте. Нәҙекәй билле бисәһе үҙәге өҙөлөрҙәй ҡыҫҡырҙы: “Ни ҡылығың? Тамам үлтерәһең бит!” – “Һиңә шул кәрәк! Эт кеүек дөмөк, әйҙә!”

Күрше-күлән-аҡмыйыҡтары, ҡолаҡтарын иңрәтмәҫ һәм шаһитлыҡҡа тарымаҫ өсөн, һәр береһе үҙ ишеген тышҡы яҡтан йоҙаҡлап, берәм-берәм урамға тая ине. Нәҙекәй биллеһе йән әселе ҡыҫҡырыуҙан ыңғырашыуға күсте, шунан һуң ҡапыл тынды. Оялсан кесе бухгалтер, ҡанлы бысағын тотоп, хәл йыйырға өйҙән сығып олаҡты...

Күршеләре шулай ҙа, моғайын, милицияға илтеп еткергәндәрҙер, бына-бына килеп муйындан матҡырҙар тип көттө ул, тыҡрыҡ буйлай өй тирәһен ҡыҙырып. Кире ҡайтып бүлмәне асып ҡарағас, нәҙекәй билле бисәһенең тәне тамам һыуынып, уҡлау кеүек ҡатып ятыуын күрҙе. Ишекте ныҡ итеп тыштан бикләне лә туры эшенә китте. Ғәжәпкә ҡаршы, контораһына барып еткәнсе лә бер кем дә эҙәрләмәне. Хатта кассанан аванс яҙҙыртып алып, асыҡ ауыҙлы берәүкәҙең машинаһында ҡаланан елдергәнендә лә һәр саҡрымын иҫән вә аман уҙҙы...

Һуңынан шул мәғлүм булды: күрше-күлән барыһы ла “белмәнек тә күрмәнек” тип берҙәм яуаплағандар. Ә стена аша торған ут күршенең бикле ишек ярығында ҡыҫтырыулы ҡағыҙ киҫәгенән тәфтишселәр ошоно уҡығандар: “Һаҡалтайым-айнанайым, шаһитлыҡҡа эләгеп ҡуйма бер үк! Күршең һары таңдан алып ҡатынын шул тиклем дөмбәҫләне, аныһы шул тиклем сарбайланы – йәне сыҡҡандыр, моғайын. Беҙ, тиҙ генә йыйына һалып, табанды ялтыраттыҡ, һин дә йәһәт дачаға шыл. Һораһалар, “күрмәнек тә белмәнек!”. Һаҡал төбөңдән һурып үбеп, айнанайың”.

Буласаҡ могикан аңланы: уның ҡотҡарыусыһы – *вайымһыҙлыҡ.* Йәшәһен вайымһыҙлыҡ!

Шунан һуң күпме ялған паспорт алмаштырманы ла “еүеш эш”кә барманы, нисәмә-нисә ҡаланың ҡараңғы серҙәрен сисмәне! Йәшерен донъя короллегенең ниндәй генә королдәрен күрмәне. Нисәмәһенең башына ла үҙ ҡулы менән етмәне! Күптәрҙе дер-ҡалтыратҡан, ишеткәндән ултыра төшөрлөк “могучий могикан” ләкәбенә лайыҡ булды (аҙаҡ могикан тип кенә йөрөттөләр.) Әммә һаман *вайымһыҙлыҡ* тигән тылсым уның иң-иң ярлыҡаусыһы булды.

Ҡара короллектә бер саҡ донъялар алмашынып, һуңғы хөкөм уның үҙ ҡулына ҡалғас, элекке кесе бухгалтер эште төптән иҫәпләп йөрөтөргә тотондо.

“Фраерҙың (йәғни ҡара короллеккә инмәгән, могиканды танымаған ябай әҙәми заттың) ҡотон алайым тиһәң, арҡаһына бысаҡ ҡаҙа, йәки үткер бритва менән танауын сый”, -- тигән иҫке тәғлимәтте ул түңкәреп ташланы. “Термоядро энергияһын буйһондороу осоронда фәҡәт “еүеш” сараларға йәбешеп ятыу – хөрт, -- тип өйрәтте үҙенең “шәкерт”тәрен. – Короллектең именлеген бөгөн фраер танауына уҡталған бритва түгел, ә уның йөрәк тамырына инеп оялаған ҡорт билдәләй. Ул гүзәл ҡорттоң исеме – *Вайымһыҙлыҡ”.*

Инанып етмәүҙәр ҙә булды, әлбиттә. “Вайымһыҙлыҡ – һирәк ҡунаҡ. Фраер көндән-көн үҙгәрә, саялана, король һуҡмағына ҡарата түҙемһеҙерәк була бара”, -- тип киҫәтте уны ҡайһы берҙәре. Яңы королдең яуабы әҙер ине: “Һирәклекте йышайтыу, оторо үҙгәреште элекке ғәмәленә ҡайтарыу, фраерҙың сапсыныуын вайымһыҙлыҡҡа алмаштырыу – йәшәйеш бурысыбыҙ. Фраерҙың бик шәп бер сифаты бар: башына төшһә, барлыҡ шарттарға ла күнә, хатта тырнағы аҫтына энә батырһаң да ҡыҫҡырмай башлай. Ә һәр нәмәгә күндәмлек – вайымһыҙлыҡтың әсәһе”. Һәм шул вайымһыҙлыҡ-ҡортто йөрәктәргә таратыуҙың сараларын билдәләне: “Үҙ елкәгеҙҙә татып беләһегеҙ: мильтон (йәғни милиционер) тоҡомо беҙгә ҡаршы өҙлөкһөҙ аҫтыртын эш башҡара, ә был эшмәкәрлек улар теленҙә “профилактика” тип атала. Бына шул, беҙ ҙә үҙебеҙҙең контрпрофилактиканы йәйелдерергә тейеш: вайымһыҙлыҡ ҡорто менән фраерҙың ғына түгел, мильтондың да бәғеренә үтеп кереп, йөрәген төптән бөрөп, граждан әүҙемлеге тигән иң ҡурҡыныс ҡоралды дәүләт ҡулынан бәреп төшөрәйек. Бының өсөн бритва һәм хәнйәрҙәрҙе, пистолет һәм шөшлөләрҙе икенсе планға ҡуяйыҡ, фраерҙың үҙ ҡиәфәтенә кереп, араларына һарҡыйыҡ. Беҙҙең аяҡ баҫҡан ерҙә көндәлек эшкә һүлпәнлек, эскеселек, бурыҫҡа тоғролоҡһоҙлоҡ, намыҫҡа хыянат, тәртипһеҙлек, әҙәпһеҙлек, ваҡ хулиганлыҡ сәскә атһын, мул емештәрен бирһен. Фраер тоҡомо, шул мөхиткә күнегеп, тормошта был ғәҙәти хәл тип ҡараһын. Күнекмәгән йәндәр тауыш ҡуптарһа, уға ҡаршы шул уҡ фраер араһынан үҙенән дә нығыраҡ боғаҙ ярып һөрәнләүселәр ҡурпыһын. Һеҙ шуларҙы ҡушҡуллап тотанаҡлағыҙ. Йәмғиәттә йәшәй тороп, йәмғиәттең хәленә керməүҙә -- башҡаларҙың кескәй генә йомшаҡлыҡтарын да кисерә алмауҙа, урынлы-урынһыҙға шаулап, илдең кәйефен боҙоуҙа ғәйепләгеҙ тиктормаҫ тынғыһыҙ йәндәрҙе, аталарса хуш күңелдән битәрләп ҡыҙҙырығыҙ – фраерҙар араһында бындай тон үтемле хәҙер. Мильтон ҡулына ҡапҡан бәғзе хулиганды гонаһһыҙ бер ҡулсыр бала рәүешендә аралағанда ҡиәфәтегеҙ эштән арып ҡайтып килгән эшсенеке, бик абруйлы йәмәғәтсе-пенсионерҙыҡы, йәки илһамлы ижад эйәһенеке булһын, һүҙҙәрегеҙҙән саҡрымдарға ҡайнар хеҙмәт ипкене бәреп торһон. Әгәр мильтон шунан һуң да туғарылмай хулигандың беләгенән ҡамтарһа, боғаҙығыҙға бысаҡ ҡаҙалғандай яман аҡырып уны ғәҙелһеҙлектә, ҡаты ҡуллылыҡта, демократияны боҙоуҙа ғәйепләгеҙ, башҡаларҙы ла һөсләтегеҙ. Берәй ерҙә һыу краны шабырҙап асыҡ торһа ла – япмаҫҡа, ут сыҡһа – һүндермәҫкә, кеше аяҡтан ауһа – ҡул биреп торғоҙмаҫҡа, ә бәлки асыҡ ауыҙ тамашасы булып баҫып торорға, йәки һуҡыр уҙғынсы булып тыныс ҡына үтергә күнектерегеҙ фраерҙы. Берәй ерҙә берәй бәндәне машина төкөп йығһа, йәки башҡа сәбәп

менән йәлпәшһә, барса зирәклекте егеп, тәьҫир ҡылығыҙ мөхиткә -- ашығыс ярҙам машинаһына япһартығыҙ барса ғәйепте. Әгәр фажиға кисереүсегә яҡынларға, ярҙам ҡулы һуҙырға теләүселәр төҫмөрләнһә, ундайҙарҙы шаһитлыҡҡа эләгеү, судтан-судҡа һөйрәлеп йөрөү менән киҫәтеп шөрләтегеҙ. Йығылған фраер дөйөм вайымһыҙлыҡта ғәзиз ҡаны сүпер-сүпер ағып ятып үлергә, ә йығылмағандары эргәһенән йәһәт кенә шылырға ғәҙәтләнһен. Шул сифаттарға өлгәшһәк, донъя ҡуласаһы беҙҙең ҡулда булыр: бер табында ҡара-ҡаршы күгәрсендәрҙәй гөлдөрләшеп сәй эсеп ултырған ике фраерҙың береһенең ҡабырғаһы аҫтына бысаҡ һабы күмелгәнсе “сиртһәң” дә, икенсеһе ләм-мим өндәшмәйәсәк – бер ни ҙә булмағандай, сынаяғын тыныс ҡына түңкәреп, өйөнә ҡайтып китәсәк”.

Һуңғы могикан, һуңғы ғүмер сатҡыларын өйөрөп, ғәзиз донъяһын барлай.

Эй Илаһым, короллек уға бик ҡаҡшаған килеш килеп эләкте. Әшнәләрҙең иң саялары ла, бер йылдан артыҡҡа тҮҙмәй, йә ҡанын ҡоҫоп ауҙы, йә тимер рәшәткә артына инеп бөттө. Нығытырға күпме тырышып ҡараһа ла, короллек бөлгәндән-бөлдө, сөнки вайымһыҙлыҡ ҡортон ул теләгәнсә үрсетеп ебәреп булманы... Инде король тажын дәғүә ҡылыусылар ҙа ҡалмай бара. Һуңғы “шәкерт”тәре һаман күҙ алдында баш эйеп табынһалар ҙа, артынан көлөп, һуңғы могикан тип атаусылар күбәйҙе. Һәм был ҡушамат инде уның исеменә әйләнде...

Шулай ҙа ул үҙен һуңғы тип һанамай ине әле. Үҙе менән бергә бик күп ҡырын һуҡмаҡтар үткән, усынан ем ялаған, бик күп “еүеш”лектәр менән артҡапҡаһы бикләнгән мыҡты уң ҡулы бар ине. Уға ҡарағанда күпкә йәш ине, әммә тапҡыр ине. Ҡалған ғүмерен күңеленең иҫәп-хисап төймәләрендә самалап, йоҡоһоҙ төндәр кисергәс, үҙенән ҡала король тажын кейеүсе итеп шул нөгәрен билдәләргә булды ул. Ошо айҡанлы йәшерен йыйын билдәләнеп, ышаныслы башкиҫәрҙәре тап бөгөн бер аулаҡ ерҙә сабышҡа (шабашҡа) тупланырға, шунда уның үҙ ауыҙынан бөйөк ҡарар иғлан ҡылынырға, ә буласаҡ яңы король, ҡанундарға тоғролоҡ һүрәтендә, көллөһөнөң күҙе алдында теҙ сүгеп, бөтә түбәнселектәргә тәкмәсеп, һуңғы могикандың яланғас осаһын үбергә -- шул тоғролоҡ йолаһын тоғро атҡарырға тейеш ине...

Сүпер-сүпер итеп ғүмер бүҫкәрә... Их был заман-заманалар! Ул үҙе, короллеккә тәғәйенләнгәс тә, нисәмә йылдар буйынса әүәлге ҡарт королдең табанын ялап, мәреткә китеүен дүрт күҙҙән зарығып көтөп, түбәнһенеп йәшәне. Таж кейгәндә баяғы тоғролоҡ йолаһын үтәүҙең уҡшытҡыс ғәләмәте ирендәрендә гел мөһөрләнеп торҙо. Һәм үҙе ла шаҡшы йоланы нәүбәттәге вариҫынан еренә еткереп үтәтәсәген һағынып көттө...

Эй ғүмер!.. Әле генә спидометрға йөҙ саҡрымды уралдыртып килә ятҡанында ла ул бына-бына буласаҡ тантананы алдан уҡ йәне-тәне менән кисереп ҡыуана, хатта нисек үтәлешен йөрәк төбө семерҙәп тоя ине. Көтмәгәндә... вайымһыҙлыҡ... Эйе, ваймһыҙлыҡ! Һуңғы могикан ғүмере буйына йөрәгендә ҡәҙерләп-һөйөп һаҡлаған, һәм донъялағы барлыҡ фраерҙарҙың да бәғеренә тәрән кереп урынлашыуын күрергә теләгән ҡара башлы аҫыл ҡорт – вайымһыҙлыҡ! Уның үрсем алырына һуңғы йылдарҙа өмөт ныҡ ҡаҡшағайны. Бынан һуң инде һис ҡасан да уны Илаһи ҡиәфәтендә осратып булмаҫ, тип бошондорғайны. Юҡ! Аһ, был ҡайһындай ҙа бәхет – тәрән яңылышҡан икән! Бына бит ул үҙе: ниндәйҙер “намыҫлы граждан”, удар хеҙмәт алдынғыһы, йәғни яҡындағы “удар

төҙөлөш”тә самосвал йөрөтөүсе – туп-тулы шул вайымһыҙлыҡ эйәһе рәүешендә могикандың күҙ алдында тулы һынлы кәүҙәләнде. Тап шул Илаһи вайымһыҙлыҡ бит уны, “Волга”һында түңкәртеленгән юлсыны, ярыҡ ҡан тамырҙарынан ғүмеркәйе сүпер-сүпер ҡойолған хәлдә юл уртаһында ҡалдырып ташлап китте! Тимәк, әфәнде Вайымһыҙлыҡ – тере, тере! Ул йәшәй! Ул үҙ эшен башҡара! Был – королдең бөйөктәрҙән бөйөк ҡаҙанышы, еңеүе!

Ғүмеркәйе бүҫкәргәндән-бүҫкәрә, сүпер-сүпер уның һуңғы тамсылары ағыла. Могикан тыныслана. “Вайымһыҙлыҡ йәшәгәс, короллек тә йәшәйәсәк, -- тип, һуңғы сатҡыларын йыйып, һөҙөмтәләргә көсәнә. Күҙҙәре аҡрынлап ҡата, аяҡтары һуҙыла. Әммә мейе төпкөлөндәге фәлсәфә тынмай быраулай һаман, һуңғы боролоштар яһап осланырға ҡырҡыша. – Эйе, йәшәйәсәк! Королдәр ҙә буласаҡ. Ҡанундар ҙа ҡаласаҡ. Тимәк, сабыштағы минән ҡала йәш король, вариҫым, йола ҡушыуын барыбер үтәйәсәк: емерек машина киҫәктәре араһынан үҙемде эҙләп табып, баяғыса баяғы яланғас урынымды супылдатып үбеүе менән короллеккә тоғролоғон нығытасаҡ”.

Әммә һуңғы могикан шуны белмәне: уны шатландырған самосвал йөрөтөүсе теге бәндә -- намыҫлы граждан да түгел, удар хеҙмәт алдынғыһы ла түгел, хатта ябай ғына фраер ҙа түгел, ә үҙенең баяғы иң тоғролоҡло уң ҡулы, короллекте тапшырырға һайланған, үҙе шуның тоғролоғон үҙ тәнендә татырға тип китеп барған хәләл вариҫы ине. Һәм ул вариҫ, башын баҫып бик оҙаҡ уйланғандан һуң, һуңғы ҡарарға килеп, самосвалға ултырған да уның һуңғы сәғәтен һағалағайны. Илде ҡаҡшатҡан шаҡшы ҡорт – ҡанундарға вайымһыҙлыҡ инде ҡара донъя ҡанундарына ла үтеп кергәйне...

1974.

Ҡомға ҡойолған зәхмәт

(Фельетон)

Баш ҡаланың элекке асфальт-бетон заводының, ә хәҙерге өҫтәлмә етештереү һәм комплектлаштырыу идаралағының башлығы Шихалев Николай Дмитриевичтың шәфҡәтле көр ораны көллө асфальт юлдар буйлап, юлдарҙың тирәс таштарын йылытып таралды, хатта газондарға тиклем йәйелде. Йылытмаҫлыҡ та түгел шул: Николай Дмитриевич заводтың айлыҡ ҡына түгел, ә һәр квартал, йыллыҡ пландарын да йылы ҡулдан баштан-аяҡ үтәргә, тыуған ҡаланың коммуникация тармаҡтарын аҙым һайын күҙ ҡараһындай һаҡлаясаҡ урам тирәсе таштарын ҙур күләмдә һәм тиҙлектә етештерергә һелтәнде. Шул йылы орандан газондарҙа үләндәр тороп ултырҙы:

-- Әһәлүк, әле йәшәйбеҙ икән!

-- Машина тәгәрмәстәре ситкә сыҡмаясаҡ, беҙҙе тапамаясаҡ!

Идаралыҡты торғонлоҡтан сығарырға хыялланған баш инженер В.П. Казанцевтың, инженер-лаборант Л.Е. Лаптевтың көллө тәне эҫеле-һыуыҡлы булып зымырҙап китте:

-- Урра, ҡалабыҙҙа яңы эра башлана!

Был данлы һәм шанлы оран идаралыктың ҡомдан ҡойған аҫыл таштарын юлдарға теҙәсәк юғары ойошмаға – ҡала Советы башҡармаһының юл йүнәтеү-төҙөү тресына ла олғашты. Трестың баш инженыры Пудовин Дмитрий Андреевич шатлығынан ике усын бер-береһенә бетон ҡомона ышҡығандай ҡыҙҙырып ыуаланы:

-- Афарин, Николай Дмитриевич! Шихалев иптәш бирһә, өҙөклөктән сығырбыҙ, өҙәрем юл буйҙарын да өр-яңы таш менән көпләп ҡойорбоҙ!

Көллө йәмәғәт ошолай ҡыуанып ҡына, завод ҡапҡаһына инеп киткән һоро ҡом менән ҡылдай нәҙек тутыҡ сымдың икенсе ҡапҡанан мәрмәрҙәй аҡ тирәс таштарына әйләнеп сығыуын көтөп кенә ятҡанда, цех эсенән оран урынына әсе һөрән урғылды:

-- Ҡарауыл, тимер-бетондың тимер сымы стандартҡа тап килмәй!

-- Ҡом һәм ҡырсын бетон булып берекмәй, беркетеүсе өс компонент етешмәй!..

Әсе һөрәндән газондарҙағы үләндәр йығылдылар, ә белгестәр ҡолаҡтарын ҡапланы. Бөтәһе лә цехҡа ҡарап күҙҙәрен йомдо, идаралыҡ башлығына ҡушылып оранланы:

-- Их, ҡомдан арҡан ишеп булһа ла, игелекте игәйек, айлыҡ пландың үтәлешен бетон һымаҡ ҡаҡшамаҫлыҡ ҡояйыҡ!

Һүҙҙәр йылы булһа ла, күҙҙәр йомоҡ булғас ни, ҡом-ҡырсындың тимер сымға берекмәүенең сәбәбен асыҡларға береһенең дә күҙкәйе асылманы, тимер сымдары тырпайып, ҡырсын-ҡомдары ҡойолоп торған тирәс таштары ихатала тау-тау булып өйөлдө.

Таш тау түбәһе күк асманға терәлгәс, тирәстәрҙән ел ашаған ҡом туҙаны күҙҙәрҙе ышҡып асты:

-- Йәмәғәт, шәфҡәтле эштәребеҙ менән ишәк сумары ишмәһәк ярар ине! Ташҡа ҡойолған шәфҡәт ыуалып оса, төйәкте зәхмәт баҫа!

Ыуалыусан, саңланыусан тау тоҡомон үҙ ваҡытында уҡ сос приборҙар ярҙамында тартып-һуҙып, иҙеп, утҡа-һыуға сумырып һынап ҡарарға ла һис ҡулдары теймәгәнлеген иҫтәренә төшөрҙөләр, һуңлап булһа ла үтәргә уҡталдылар. Ләкин инженер-лаборант ҡапыл утҡа янған эзбизташтай ағарҙы, һыуға сумған пробкалай артҡа сирғып ялбарҙы:

-- Зинһарҡайым, лаборатория ишеген аса күрмәгеҙ! Унлап бизмәндең бишәүе лә ғәҙел тартмай – герле башы башҡа төшөргә самалай!

-- Һем... Ни ҡылырға?..

Алай ҙа башлы етәксе янда икән:

-- Цехтан сыҡҡан тирәс таштарына, бизмәнләтмәй генә, елле завод маркабыҙҙы баҫырға, яҡшы сифатлы тауар билдәһен һалырға, ОТК мөһөрөн сәпәргә лә зарығып көткән ҡулланыусыларға оҙатырға! – тип бойорҙо зәһәр тау янында йылы ҡарашы һалҡыная башлаған башлыҡ. Изге бойороҡто үтәмәккә завод маркалы мөһөр менән таш маңлайын саҡ ҡына сирткәйнеләр, таш тигәндәре көтмәгәндә урталай сатнаны ла сыҡты. Икенсеһенә ҡағылмаҫ борон уҡ ҡомо ҡойолдо, өсөнсөһө, дүртенсеһе... Күҙ асып йомғансы тырнаҡ еленән бер-бер артлы 384 дана тирәсташ, үҙҙәренә шәфҡәт урынына зәхмәт ҡойолғанлығын белдертеп, ҡомдан ишкән арҡандай таралып төштө, ә таш тауҙың ҡалған яҡтары

ла үткән-һүткәндең салғый еленән ыуалып ҡойола башланы. Ай араһы ғына ишкән ишәк сумары зәхмәт һанлы 167,4 кубометр һып-һыуыҡ ҡом убаһына әүерелде лә елгә оҫкан 5900 һум саф алтын һумдарҙы күмде. “Был убала сифаттың башына еткән, технология ҡағиҙәләрен һәм ГОСТ 6665-74-те тишек кәмәгә ултыртып ташҡа ҡойолған зәхмәт үҙенә яңы ҡорбандар һағалап ята, алыҫтан уҡ урап үтегеҙ!”, -- тип шәфҡәтле белдереү яҙаһы ғына ҡалды. Шәфҡәт хаҡын, моғайын, әле әйтелгән зәхмәт эйәләренең кеҫә төбөнән ҡырсыу шәфҡәтле булыр?!.

1974.

Әллә төштөммө Айға?..

(Фельетон)

Ул Салауат ҡалаһына күктән осоп килеп төштө. Самолетта. Үҙенең ауылынан. Исеме Көләс ҡарт ине.

-- Туҡтағыҙ әле, йәшлек ҡалаһын күреп, татлы һыйҙарын ейеп, бер йәшәреп ҡайтайымсы! – тине. Хатта әбейе ҡаҙанға һалған аштың бешеүен дә көтмәне. Юл тоҡсайына килене тығҡан ҡаҙы менән ялыны ла алманы:

-- Һәй, урыҫтар Тулаға самауыр тейәп бармағандай, ниңә кафеле, ресторанлы ҡалаға ризыҡ йөкмәп йөрөргә? Шеф-поварҙар бешергәнең, боҫо борлап торғанын ғына ялмармын!

Көләс ҡарттың хыялы алдына килде. Йәшлек ҡалаһының ҡалҡыу ҡапҡаһын уҙып, аҡ ҡайындай ағарып баҡҡан “Березка” кафеһенә керҙе. Күктә йөҙгәндә бушап ҡалған билбау аҫтын тултырырға. Ҡапҡаны һайын мығытланып, Ерҙең татлы тартыу көсөн татырға. Уғата көләсләнергә.

Ысынлап та, бында төрлө-төрлө аштар күп ине. Ләкин...

Билмәнен дә алып ҡапты Көләс ҡарт, тефтелдәрен дә төфөлдәтте, ҡаймаҡлы ҡайнар ҡоймаҡтарын да ялманы, булкиҙарын да бүлкелдәтте. Артынан ҡара кофе менән какао ла ҡағып ҡуйҙы. Билбау аҫты ауырайыуын ауырайҙы, әммә мығытлыҡ артманы. Йөҙө бер тамсы ла көләсләнмәне. Повар-бригадир А.А. Домнина ханымға ҡарап һөмөрөләнде генә. Сөнки аҙағы – кеҫә төбөн һәрмәүе шөйлә аҙаплы ине.

Табындан таптай ҡубынып, көләслек көҫәп китте-барҙы Көләс ҡарт. Билбау аҫты тулмаҫы борон уҡ бушағайыуын тойоп, өҫтәүенә аҙағы хәйерһеҙ булды, тип, маңлайында аҡ неондар уйнаҡлаған “Аҡъяр” ресторанына инде. Ерҙең татлы тартыу көсөн татып мығытланырға. Һөмөрөһөн юйып көләсләнергә.

Көләс ҡартты ресторан директоры С.Т. Поляркина үҙе ҡосаҡ йәйеп ҡаршыланы, етештереү мөдире Н.Н. Ғәлиуллина үҙе килтереп ултыртты.

Атаҡлы “Девон” салатын да салтылдатты Көләс ҡарт, балыҡсы ухаһын да ухылдап һемерҙе, гуляшен дә геүелдәтеп елгәрҙе, котлетын да келтелдәтте, майлы бутҡаһын да ялтылдатты, тик... билбау аҫты ауырайыуын ауырайҙы, әммә йөҙө артыҡ көләсләнмәне. Аҙағы еткәс һөмөрөһө ҡойолдо.

Табындан таптай ҡубынып, йәнә көләслек юллап китте-барҙы Көләс ҡарт. Билбау аҫты ярты юлда уҡ бушағайыуын тойоп, сағыу нурҙар урғылдырған “Урал” ресторанына уҙҙы. Ерҙең татлы тартыу көсөн татырға. Һөмөрөһөнән һөрөлөп көләсләнергә.

Көләс ҡартты ресторан директоры Г.Г. Ғәлиев үҙе табынға яҡынларға ҡоторттo, производство мөдире В.Ш. Мортазина ултыртты.

Әсе кәбеҫтә һурпаһын да һупылдатты Көләс ҡарт, гуляшын да гөүелдәтеп елгәрҙе, “Курортный” кәнфиттәрен тешләп сәй-мәйҙәрен дә ебәрҙе. Билбау аҫты ҡаҙимгесә ауырайһа ла, йөҙө көләсләнмәне, ә күмерҙәй ҡарайҙы. Ресторандан һыңар аяғы сыҡмаҫтан уҡ:

-- Харап булдым! – тип үкһеп-илап ебәрҙе. – Бирән сиренә тарыным, буғай! Күпме генә ашаһам да, кеҫә төбөн ҡапшаһам да тамаҡ туймай...

Көләс ҡарттың күҙ алдары ҡараңғыланды, йәшлек ҡалаһының йәшнәп торған матурлыҡтарын да күрә алмаҫ хәлгә килде. Ҡыҙыл тәреле машинаны туҡтатып, үҙен алып китеүҙәрен ялбарҙы.

Ҡаланың ҙур профессоры илап торған Көләс ҡарттың ауыҙын астырттып, билбау аҫтарын үҙе тотҡалап ҡарағас, ҡысҡырып көлөп ебәрҙе:

-- Бирән сирен төшөндә ла күрмәйәсәкһең, Көләс ҡарт! Шулай ҙа аҙыҡты ғилем ҡушҡанса калорияһын кәрәк белеп ашарға!

-- Аны беҙгә нисек шәйләп белергә?

-- Күпме ҡалъя ҡабыуыңды, йотоуыңды бизмәнеңдә үлсәп барырға тырыш!

Мәсьәләне салт төшөндө Көләс ҡарт. Төбөнә төшөргә булды. Кеҫәһенә теүәллекле үлсәгес һалып алып, ҡапҡан берен үлсәп ҡарарға китте.

“Березка”ла уға билмән урынына тефтель бирҙеләр һәм шул ыңғайҙа уҡ “һул яҡ”ҡа ике тинен һелтәп тә өлгөрҙөләр. Ашаған берен үлсәп барғас, гарнирлы тефтель ҡаҙимге Ер тартымы нормаһынан – 65, ҡаймаҡлы ҡоймаҡ – 30, аҡ булки 13 грамға еңелерәк булып сыҡты. Ләкин хаҡы еңел түгел – тап Ер тартымынса ине.

“Аҡъяр”ҙа ашаған “Девон” салаты – 20, икенсе блюдо тигәндәре – 90, гуляш ите – 10, гарниры – 90, котлет – 10, бутҡа – 20, ә балыҡсы уханындағы хәйләкәр балыҡ 30 грамға Ерҙең тьартым көсөнән кәм булып ҡуйҙы.

“Урал”да ла икенсе блюданың – 45, гуляш итенең – 15, ә 300 грамм итеп үлсәткән “Курортный” кәнфитенең 30 грамы планетабыҙҙың тартым көсөнән арынып елгә осҡанлығы асыҡланды. Ә әсе кәбеҫтә һурпаһы өсөн түләгәндә бер тинде “һулға” һелтәп тә өлгөрҙөләр, өлгөрйәндәр! Йөрәгенең яныуына сыҙамай, ресторандарҙың кулинария магазиндарына инеп һыуһын ҡандырғайны, һәр стакан какао һәм кофе өсөн йәнә “һулға” икешәр тинде шылдырҙылар, шылмалар! Етмәһә, үҙен бөтә шеф-поварҙар Илаҡ ҡарт тип атанылар, әллә башҡа планетанан килдеңме, тип төпсөндөләр. Көләс ҡарт үҙенең ысынлап та ниндәйҙер икенсе бер планетала икәнлеген шәйләне. Ҡаланың эектрон-иҫәпләү үҙәгенә инеп, тиҙ генә иҫәпләткәс, ашханалар тресына ҡараған туҡланыу төйәктәре Көләс ҡарт кеүек иләҫ-миләҫ клиенттарының кеҫәләрен бер ай эсендә 1565 һум да 41 тингә икенсе планета файҙаһына һыҙғыртҡанлығы фашланды.

-- Бәй-бәй, мин ҡайҙа -- әллә төштөммө Айға?!. Алай тиһәң, үлсәгестәре ауырыраҡ итеп тарта... Мине дөрөҫ тартҡан ергә, көләслегемә ҡайтарыу сараһын

күрегеҙ! – тип Көләс ҡарт урамға сығып һөрәнләне. Тейешле хакимдар уның зарын ишетер әле, бәлки?

1974.

Их-ма!..

(Фельетон)

Ҡандракүл буйҙарын көтмәгәндә тәрән итеп көрһөнөү, ауырлыҡлы уфтаныу, аяныслы аһылдауҙар ярһытты. Балыҡ ҡаптырырға килгән ағай-эне һиҫкәнде, күлдә шашынып, ҡабырға ем һорап көмөш суртандар ҡарпыуын да онотоп, ҡармаҡтарын атып-бәрҙе, яңаҡтарына таянды.

-- Юҡ, изге выждан ғазаптарын Ҡандракүл дә баҫа алмай! – тине береһе.

-- Минең дә эстә ут ҡайнай, төтөнө генә тышҡа сыҡмай!.. – тине икенсеһе.

-- Эш уға китһә, көллөбөҙҙөң ғәмдәр бер – намыҫыбыҙ кимерә, -- тине ҡалғандары. Тиҫтәгә яҡын намыҫлы ирҙең ҡәҙерле ял сәғәттәрен бүлдергән, ҡармаҡтарын атып-бәрҙергән ил ғәменән хатта Ҡандракүл йөҙө ҡобараланды.

-- Фамилияларҙы аташмаһаҡ та, балыҡсы балыҡсыны алыҫтан күрә: бындағы кемдең кем икәне, уның йөҙө ул баҫҡан ерҙең йөҙөнә ҡарауҙан уҡ таныла, -- тине "Туймазынефть" идаралығы башлығы. – Минең йөҙҙө, мәҫәлән, беҙҙең үткәргес торбалар эргәһендәге ҡошсолоҡ фабрикаһы урынлашҡан ергә етер-етмәҫтән үк шәйләп алалар. – Етәксенең керпектәрен үкенес хисе сылатты. – Беҙ унда һары себешкәйҙәр утлай торған 12,5 гектар йәшел ерҙе нефть теленән ялаттыҡ та ҡарайттыҡ, себеш танымаҫлыҡ иттек... Уф!..

-- Юҡ, коллега, беҙҙе элегерәк таныйҙар, -- тип күҙҙәрен ҡулъяулығы аҫтына йәшерҙе күрше "Октябрьскнефть" идаралығы етәксеһе, -- Сөнки беҙ "Большевик" колхозының һәм Илсембәт совхозының йәйрәп ятҡан баҫыуҙарына ашлама урынына ярыҡ торбанан девон майы урғылттыҡ, ужым бойҙайҙарын шыр-тоҙло иретмә менән һуғарҙыҡ. Өҫтәүенә, байтаҡ ҡына майҙанды һыныҡ-һаныҡ бетон, тимер-томор менән тултырҙыҡ...

-- Бүтәк! – "Туймазы" совхозы директорының иламһыраған "аһ"ы килеп ялғанды. – Һеҙ баҫыуҙарҙы ярыҡ торба аша ғына сылатаһығыҙ, ә беҙ суҫка фермаһы һәм ауылдың зәһәр торбаларынан зөмбөрләүсе буръяҡтарҙы Бишәнде йылғаһына болғатып оҙатабыҙ...

-- Их-ма, юҡ менән һүҙ оҙайтма! – Медицина быялаһы заводы, буҫтау комбинаты, стена материалдары заводы, ҡошсолоҡ фабрикаһы етәкселәренең берҙәм һулҡылдап һыҙланыуы ҡушылды. – Эш уға ҡалһа, егеттәр, беҙҙән аша һыҙылып аҡҡан Өсән менән Ҡаҙаш һыуҙарын яҡыныраҡ барып ҡарағыҙ, тик алыҫтан уҡ танауҙарығыҙҙы ҡапларға онотмағыҙ!..

-- Их-ма, ағай-эне, мыртыҡай, изге хистәр һәммәбеҙҙең күңелдәрҙе ҡытыҡлай! Ап-аҡ күлдәктәргә лайыҡлы пак күңелле лә икәнбеҙ – Ер-әсәйҙең сафлығы өсөн йән яна "уф"ылдата!

-- Их-ма, ярамағанса эшләйбеҙ: Ерҙең ҡышҡы аҡ тунын да, йәшел хәтфә елəнен дə, йəйге ҡускыл камзулын да, көҙгө алтын сəкмəнен дə күҙ ҙə йоммай ҡойма арты дегетенə буяйбыҙ...

Моңһоулыҡ хәттин ашты, ҡайҙандыр ҡамыш араһынан: "Их-ма, меҫкен ҡуяндар, бахыр балыҡтар, көнө-төнө ябырылған браконьерҙарҙан һеҙҙе мин генə йəшерə алырмынмы һуң?" – тигəн аяныслы ауаз ишетелде. Тал-тирəк үҫкəн яҡтан: "Ə Ҡайынлыкүл ауылы янында көпə-көндөҙ кем атып йыҡҡан боланды? Ə йылғыр ҡуллы Г.Б. Грачев тирəһен һыҙырып алып киткəн һуҫар?.. Ниңə уларҙың ысын йөҙҙəрен тейешле кешеләр күрмəй, танымай? Эштəр былайға китһə, бер көн килеп Ҡандракүлде лə ҡороторҙар!.. – һымаҡ һағышлы өндəр ҙə һулҡылданы.

-- Их-ма! – тип ҡабатланылар Ҡандракүлгə ҡарап яңаҡтарына таянып уйланған ирҙəр. Мыҡты беляктəрен яңаҡ аҫтарынан алдылар, еңдəрен һыҙғанып, үҙҙəренең көндəлек эш урындарына елләнеп ҡайтып киттеләр. Имеш, ерҙең йөҙөн аяныслы шауҡымдан ҡотҡарырға, йөҙҙəренəн килешмəгəн ҡара тапты йыуырға.

Һəр хəлдə, беҙҙең ихлас фантазия фельетонды оптимистик осланыуға этəрə. Исемдəре билдəле булып та аталмаған ағай-эненең ҡылыҡтары ихласлыҡты киреге этəрһə лə.

1974.

Гиппопотам

Гиппопотам – Африкалағы көйшəүсе мыҡты хайуан. Төнө буйы юшай ҙа, таң һыҙылыу менəн һаҙлы йылғаға сумып, көноҙон көйшəп ята. Һыу аҫтынан танауының Рəсəйҙəге Əбей батша тəңкəһе дəүмəлле ҡуш божоро, Николай батша биш тинлеге ҙурлыҡ түп-түңəрəк күҙҙəре генə күренə бүлтəйеп. Уларын да донъяға сығармай һыуға сумыр ине лə, əгəр ҙə ки тауҙай лырҡыш кəүҙəне ҡурсаларға кəрəкмəһə. Ике иле тирəһе аҫтында алты ая майы бар – ер йөҙөндəге йыйын йыртҡыс тəғəйен шул тирене тишеп тунарға, шул майҙы һыҙырырға ла баяғы хəйерһеҙ Николай батша аҡсаларына алмаштырырға ғына яҫҡана кеүек. Бына ниңə гиппопотам ҡыҙарып ҡалҡҡан Ҡояштың илаһилығын, зəңгəр күктең сафлығын, сəскəләрҙең сағылығын тамаша ҡылып ҡыуанмай, был донъяның ғəйре кейек, ҡош-ҡортолай ырғып-һикереп уйнамай, борғоһон да əсир иткес моңло көйгə һалып тартмай. Һыу аҫтында – ҡолаҡтары, һыу өҫтөндə керпектəре һелкенмəй. Əммə уға яҡын бара күрмəгеҙ: һаҙлы йылға-төйəген һəм үҙ тирəһен ҡурсалап ҡуҙғалған гиппопотам – иң ҡурҡыныс, мəкерле йəн: тыштан тыныс булһа ла, эсе тулы ут ҡайнай.

Ҡаланың мин торған тыныс тыҡрығында ла бар Гиппопотам. Тик алыҫ Африканан түгел, ə үҙебеҙҙең йəмле Дим буйҙарынан. Африканыҡынан айырмалы булараҡ, ләҡəб исеме генə уның Гиппопотам, ə мулла ҡушҡаны – Фəтхелислам. Аяғы ла дүртəү түгел – икəү генə. Икеһе ҡул атала. Ə тышҡы көптирəһе – ҡышын йыртыҡ ҡыптыр тун, йəйгеһен – ҡаҡашып ҡатҡан ҡара халат. Африкалағы дүрт аяҡлы йəн эйəһе төнө буйы урманда юшап май йыйһа,

бындағы ике аяҡлыһы көпә-көндөҙ баҙар тунап бол йыя. (Баяғы хәйерһеҙ Николай батша заманынан ҡалған ошо бол тигәне – хәҙерге аҡса була инде ул). Ҡыптыр тунын түшәп кисен “бол...бол...бол...” тип болҡолдап йоҡлап китә, таң тишегенән “бол...бол...” тип боларып ырғып тора. Африкалағы бер ҡатлы иҫәр-исемдәше майын ғүмергә тире аҫтына бөрһә, был иһә тунап тапҡан болон һандығындағы оҙон ҡуныслы ҡатын-ҡыҙ ойоғона төйә. Ойоғо ла үҙенә күрә уның: аҡса йотҡолоғо оло портманеттың шартлап ябылмалы ҡомһоҙ ауыҙына беркетелгән. Алтмыш ҡолас буйлыҡ ҡалта һандыҡ төбөндә ята, алтмыш тәңкә көн дә тупырлап ҡайта, тип самалай бәғзе бер йор теллеләр...

Ә ҡайһылай тунай һуң ул Гиппопотам, тиһегеҙме? Бик ябай: һәммәбеҙгә уртаҡ Ҡояш менән Ерҙе үҙебеҙгә үк һатып... Ҡанһыҙ Николай батша заманынан ҡалған ҡомһоҙ баҙарҙолдар ысулы менән. Ябайыраҡ әйткәндә, изге Ҡояш менән Ерҙе һәм шуларға өҫтәп ҡала коммуналь селтәренең хәләл электр утын, татлы һыуын һәм башҡаһын, бер кемдән дә һорамай һәм һуҡыр тин дә түләмәйенсә үҙенә ҡарай кәкрәйгән бармаҡтары араһынан үткәреп, шуларҙы шәхси баҡсаһында күҙҙең яуын алырҙай алһыу алмаға, сейәгә, тулышып бешкән еләккә, алтын тамыр кишергә, ҡусҡыл ҡыяҡлы һуғанға, мөртөлдәүек ҡыярға әйләндерә. Уның һалған бер өлөш кенә ҡул көсөнә ун өлөш баяғы буштан килгән ниғмәтлектәр өҫтәлә лә бер тиненә буштан кергән ун тин килемгә әйләнә. Кәрзин-кәрзин баҙарға юлландыра. Ә ул шифалы ниғмәттәр йәшенә лә, ҡартына ла, ауырыуына ла, һауына ла был донъяла йәшәр өсөн берҙәй кәрәкме – кәрәк! Хаҡы шайтан өркөп ҡасырлыҡ булһа ла, йәшәү хаҡына һәр ҡайһыбыҙ кеҫә төбөн ҡырсып биреп аламы – ала! Аҡса-боло әтәс булып ҡысҡырғандарҙың күҙен шулай ҡыҙҙыра ла тондора. Ҡыҙҙырһын да, туҙҙырһын да ине, ти, мәгәр илде көпә-көндөҙ үкертеп тунамаһа. Хәйер, үҙебеҙ ҙә ҡыҙыҡ шул: харам ашап харам кикергәнен күреп-белеп торабыҙ, әммә ләм-мим өндәшмәйбеҙ. Күпкән тәнен ҡарамайынса шеш үҫтергән бәндәләй, күҙ менән ҡаш араһында Гиппопотам еткерҙек...

Африкалағы дүрт аяҡлы гонаһһыҙың үҙ тиреһен һәм төйәген ҡайһылай ныҡ ҡайғыртһа, бындағыһы унан да хәтәрерәк. Сөнки ике ҡуллы ул. Ятбауырҙан, йәғни һеҙҙән һәм беҙҙән, шул ике ҡул ярҙамында ур ҡороп ҡурсалана. Ихатаһы тап боронғо кенәздәрҙең уҡ ала алмаҫ диуарҙарын хәтерләткән таш ҡойма, ҡойма өҫтөнән заманаңың бетонына ватыҡ шешә төптәре, оторо тимер сөйҙәр тырпайтып ҡатырылған. Ҡапҡа төбөнән алып ихата төбөнәсә ике ҡабып бер йоторлоҡ сылбырлы бурҙай һағалай. Ә иң үлемеслеһе – ҡойма һыртын пәрәүездәй селтәрләп үткән баҡыр сымға ебәрелгән электр тогы... Йыш ҡына ул, Гиппопотам, “ҡәлғә”һенең иң бейек бер суҡайына беркетелгән ағас киҫмәккә ата күркәләй ҡуҡырайып менеп баҫа, тап боронғо баһадирҙарса ҡаш өҫтөнә ҡул ҡуйып, үткән-һүткәнде темеҫкенеп күҙәтә: баҡсалағы болланаһы байлыҡҡа ҡул һуҙмайҙармы?! Гиппопотамдың күҙе үткер, аяғы йылғыр, ҡулы ҡаты: алйыуйәндең алҡымынан һыңҡылдатҡансы алыр!

Гиппопотам – кишер һатам,
Япраҡтарын көйшәп ятам, --

тип үсекләп ҡаса ыштанһыҙ малайҙар. Гиппопотамдың ыштан ныҡ – юҡ-барға йыртылып бармай. Ул иртәгә нисә тоҡ кишер-ҡыяр, башҡа үтемле тауар илтерен самалай. Туң сырайы көләсләнеп яҙыла, шырт ҡыл тырпайған ауыҙы майлы көлсәләй йәйелә һәм тәрәндән, йөрәк төбөнән, бүлкелдәп өндәр түгелә:

-- Булыр, булыр...бол...бол...

Бол ҡәҙерен белмәгән йүнһеҙ йәндәргә был, әлбиттә, һаҙға сумған баяғы Африка һыу һыйырының ҡойроҡ аҫтынан бүлкелдәтеүе һымағыраҡ тойола. Әммә беҙҙең Гиппопотамды ул фани донъя фәлсәфәһенең иң юғары нөктәһенә мендерә...

Кис булдымы, Гиппопотам өй тәҙрәләренең ҡалын имән ҡапҡастарын портмонет ауыҙҙарылай шартлатып яба, арҡыры тимер һалып, тәҙрә яңағы аша эскә үткәрелгән күгәндәренә тимер секүшкә тыға. Ятыр элек, һуғышҡа керетер алдынан ғәскәрен барлаған полковниктай етдиләнеп, йәшел түтәл араларын, ағас төптәрен ҡарай. Өлгөргән һәм өлгөрәсәк һәр кәкре ҡыярҙы, томшайған помидорҙы, тыжырайған алма йәки еләк ҡуҙағын һанай, йәмғеһен ҡалын контора кенәгәһенә теркәй. Ҡапҡа йоҙағын тикшереп, сүкеш менән туҡылдатып таш ҡойманың ныҡлығын һынап сыҡҡас, ике ҡабып бер йоторҙай бурҙайҙы сылбырҙан ысҡындырып, йыуантыҡ йөнтәҫ бармаҡ осон йәшерен төймәгә баҫа – “ҡәлғә” баҡыр селтәренә сәсрәткес ток ебәрә. Өй эсендә Африкалағы һыуға сумған һыңарылай тәрән итеп һулыш алыу ишетелә, шырт ҡыл баҫҡан ирендәрҙең талғын һауа ағымына ярашып көйләнеүе – “бол-бол” хырылдау башлана. Был әҙәми өндәр ҙә бында хайран үҙенсәлекле, мәғәнәле: “Булыр, булыр бол-бол... Булыр, булыр бол-бол...” һымағыраҡ тәңкәләнеп тирелә...

Ләкин болдар өнө ҡапыл өҙөлә, ҡара бүлмә ҡәбер төбө тынлығына сума. Гиппопотам төндөң сонтор сиреген инде өркөп-тертләп үткәрә. Имеш, йәшерен электр төймәһенең серен асҡандар, баҡсаһын килеп баҫҡандар. Имеш, һандыҡтағы оҙон ойоҡто һурғандар – ҡатыны ҡара гүрҙән терелеп ҡайтҡан... Һәм ул үҙенең онотолған йәшлеген – бөҙрә таллы Дим буйҙарын, тыуған ауылын, атай нигеҙен, ҡайғыһынан ҡорошоп бөткән әсәй ҡарсыҡты иҫкә төшөрөп төн ҡыҫҡарта. Мәрхүмәнең йөҙөн инде күптән ул төҫмөрләмәй, тик ҡарлыҡҡан тауышын, “ялҡауһың, улым, мал тапмайһың, бол тапмайһың!” тип өҙлөкһөҙ һуҡраныуҙарын ғына хәтерләй. Эйе, Гиппопотам ул саҡта Фәтхелислам – бол ҡәҙерен белмәй ине, тапҡанын да, оҙон ойоҡҡа түгел, ә шешә төбөнә һала ине...

Дим бөгәләндә тимерлектә сүкеш һуғып торған еренән аҙып, Фәтхелислам шаулы ҡала алҡымына тартылды. Йәш ине, күҙҙәре көләс ине. Әммә кеҫәһендә ҡалын ҡалта ла, белем танытмаһы ла, ҡулында иһә һандалға балға һуғыуҙан ғәйре һөнәре лә юҡ ине. Ә тир түгеп тимер сүкеү эшен йәне үҙһенмәй – ҡулҡайҙары шешә тығындарын аттыртырға иллә лә һәүәҫ ине. Ҡайҙа барып һуғылырға белмәй һемтәйеп йөрөгәндә, ошо тыҡрыҡ башында уны бешкән Әстерхан ҡауынылай йоп-йоморо тол ҡатын элде күҙенә. Тап бына ошо өйөнә алып инеп, ҡотороҡ һыйырҙың ыуыҙы менән ирендәрен майланы, телде йоторлоҡ ризыҡ менән һыйланы. Ҡыҙышыуы юғары кимәлгә еткәс, ҡайнар ҡосағына алды...

Мут бисәкәй иртәгәһен Дим егетенән аллы-гөллө ихатаһын ҡыҙыртты. “Ошо “бол-бол” баҡсаһында йәнихластан былбыл һайрар сәғәттәргәсә баш

ҡалҡытмай соҡсонһаң, ҡулың – болда, телең балда кинәнер, бер ниндәй ҙә сүкеш сыңы кәрәкмәҫ!” – тине.

-- Милициялары уҫал: бер ҡайҙа ла эшләмәй тип башты ашамаҫтармы һуң? – тип шомланды мәлйегән Дим егете.

-- Хәстерүш, болло башҡа кемдең буйы еткәне бар? Милицияһы ла, медицинаһы ла үҙебеҙҙеке – үҙебеҙҙең ҡулда булыр ғүмерлек йәнуҙағың, инвалидлыҡ ҡағыҙы.

-- Мин инвалид түгел дәһә, -- тине һаман бер ҡатлы Фәтхелислам.

-- Бол бойорһа боламыҡ та булырһың! – Мутбикәнең боллап тапҡан инвалидлыҡ танытмаһы Дим егетен абышҡаға ғүмерлеккә йәр итте, ҡанун һаҡсылары күҙенән ҡалҡандай ышыҡланы...

Хәтерҙә, баяғы тәүге күрешеүҙә үк, ихата баҡсаһын ҡыҙырып туйғандан һуң, игелекле ҡатын уға һандыҡ төбөндәге оҙон ойоҡ тулы мөлкәтен дә күрһәтте. “Был болдарҙы ҡалдырырға бер балам да юҡ минең... балдай татлы һин болағайымдан башҡа...” – тип иҫәнгерәтте лә һандыҡты “шарт!” иттереп япты. Тап шул мәлдә булды сәйер мөғжизә: һыу һөлөгөләй мосафирҙың теҙ быуындары ҡалтырап, теле тотлоғоп, әйтәһе һүҙе “бол...бол...” булып болҡолдап килеп сыҡты ла ҡатындың ҡайнар ҡосағына инеп майҙай ирене... Шунан һуң донъя үҙгәрҙе: егеттең балалыҡ хистәре, Фәтхелислам тигән инсафлы исеме елгә осҡан иртәнге томандай юғалып, быҫҡаҡ ямғыр һымаҡ шыҡһыҙ Гиппопотам ғына ҡалды...

Был юлдарҙың авторы ул тыҡрыҡҡа аяҡ баҫҡанда, Әстерхан ҡауынылай йоп-йоморо ханым күптән инде яҡты донъяһын, ойоҡ тулы болдарын “балдай татлы”һына ҡалдырап, мәңгелеккә “теге донъя”ға киткән, элекке Дим егете лә, башы-ҡашы салланып, эстән муртайып, мыҡты ир ҡорон үткән дә күҙкәйҙәре сөкөрәйгән, кәүҙәһе лырҡышланған – тамам Гиппопотамға әйләнгәйне. Ләкәбенә тулы ҡалыпланғандай, күрше-күлән менән дә аралашмай, театр һәм киноларға йөрөмәй, радио тыңламай, телевизор ҡарамай, гәзит-журнал алдырмай, ә китапты бар икән тип тә белмәй. Бар донъяһы “ҡәлғә”һенең эсендә лә баҙар урындығында. Даими ҡаҡашып ҡатҡан ҡара халат кейеп, морон аҫтынан “бол...бол...” тип мығырҙанып, аяғөҫтө ҡаты-ҡото кимереп йөрөүен күреү аяныслы ла, ытырғаныс та ине.

Баҙарҙан ҡайтҡан сағында тап килтереп:

-- Кемгә тип туплайһың болдо, үҙең рәхәтен күрмәгәс? Иғәнә итеп етем-еһер балалар йортона бир, исмаһам! – тип аҡылға ултыртырға тырышһаҡ, ут сыҡҡандай йәһәт олағып “ҡәлғә”һенә бикләнер ҙә бурҙайын сылбырҙан ысҡындырыр, ҡойма суҡайына беркетелгән ағас киҫмәгенә менеп беҙгә “ҡуҡыш” күрһәтер:

-- Тешләгеҙ бына бынауымды, бол...бол... Үҙ болоғоҙҙо болғағыҙ, бол...бол...

Тыҡрыҡ халҡының хәбәре дөрөҫ булһа, Гиппопотам, баҡсаһында бол хаҡына йән атып ҡырҡыша торғас, үҙе лә абайламаҫтан, бер-нисә төр яңы сорт еләк-емеш, кишер килтереп сығарған имеш. Ысындыр. Сөнки шуның дөрөҫлөгөн баҙарға ул тейәп илткән нигмәттәрҙә күрер инек. Үтенеп өндәшер инек:

-- Һеҙҙән яҡшы үҫенте, йәшелсә орлоҡтары алып булмаҫмы?

-- Булыр, булыр... бол, бол...

Бол һанарға кеҫәлекте ҡармаһаҡ, төбөндәге йөкмәткене күҙ ҡырыйы менән генә самалар ҫа баш сайҡар:

-- Үҫемә лә етмәй шул, бол...бол...

Шулай итеп, уның сығарған сорттары ла таш "ҡәлғә"не аша атлап сыҡманы – емешләтә генә болланды баҫарҫа. Бер заман мин Гиппопотамдың күңел ҡәлғәһе асылыуға тап килдем – ҡыҫмырлығының төп асылын шәйләнем:

-- Һе! Әгәр һеҙгә яҡшы сортты болғаһам, баҡсағыҙҙа ишерелеп өлгөрһә, кем ҡалтаһына көрәләсәк бол, бол, бол?.. Минең ҡалтаны ҡалтайтмаҫ шул бол, бол, бол...

Йыл артынан йыл үтте, Гиппопотам да аҡрынлап ергә сүкте. "Бол-бол" тип бөгөләп биле лә бөкөрәйгәс, аҙауҙары тупарланып, күңеле лә йомшай биргәндәй булды – йыш ҡына ул кешеләр менән "теге донъя" тураһында гәпләшергә һәүәҫләнде. Беҙ иһә илдәге үҙгәрештәр, ерҙәге синфи алыш, ҡатмарлы донъя хәлдәре менән таныштырҙыҡ уны. Көнсығыш Азияла, ғәрәп илдәрендә, Көньяҡ Америкала дөрләгән ғазаплы көрәш, ҡан ҡойош тураһында һөйләнек. Әммә Гиппопотам ике ҡолағын бер һелкетмәне. Мәғәнәһеҙ ҡараш менән ҡойма буйҙарын һәрмәләп:

-- Булыр, булыр...бол, бол... – тип кенә ҡуйҙы.

-- Океанда ер тетрәгән, бер ҡитға һыу аҫтына убылған... – тине кемдер..

-- Булыр, булыр...бол, бол...

Бер шаяны уның йөрәк тамырына ҡуҙ баҫырға итеп ҡараны:

-- Ҡара әле, кем, ауылығыҙҙа ер күскән, ут сыҡҡан, ә Дим һыуы, киреҫә боролоп, өйҙәрҙе ағыҙып алып киткән!

-- Булыр, булыр...бол, бол... – тине лә ҡуйҙы Гиппопотам.

Оҙаҡламай ауылдан бер ағай тейеш кешеһе килеп, ысынлап та ҡайғылы хәбәр ирештерҙе:

-- Кем, мырҙам, нисәмә тиҫтә йылдар үҙеңде зарығып көтә торғас, әсәйең үлеп китте. Эйе, гүр эйәһе булды...

Гиппопотам бына-бына үкереп илап ебәрер, шырт ҡылдарын илереп йолҡа башлар, һис юғында, әсенеп, ҡулына балға алыр ҫа ауыр төйҙәһе менән ҡойма таштарын пыран-зараң килтерер тип көттөк. Әммә шул уҡ кәлимә ҡыҫтырылды:

-- Булыр, булыр...бол, бол...

-- Аңлайһыңмы, кем, әсәйең!..

Бер ыңғай бойоғошоп, күҙ йәштәребеҙҙе һыпырҙыҡ, ҡыҙғанышып, Гиппопотамға төбәлдек. Бына ул да, ниһәйәт, аңына килде, буғай: күҙҙәрен аҡырайтып, ағай тейеш кешеһенә ҡараны:

-- Ә өй?! – Булды уның әҙәмсә тәүге өнө. Тик шунда уҡ быға Гиппопотам кәлимәһе өҫтәлде. – Булыр, булыр...бол, бол...өй...

-- Сереп бөткәйне бит өй -- әсәйеңдең артынса уҡ ыуалып һеңде ергә...

Гиппопотам ауыр көрһөндө:

-- Булманы был... бол, бол...

-- Бына, -- тине ағай тейеш кешеһе, ашалып бөткән тишек тәңкә тотторҙо, -- әсәйең бахырҙан һуҡыр тин генә ҡалды...

Гиппопотам һуҡыр тинде аттыҡылай эре һарыештәре менән тизып ҡараны:

-- Булыр, булыр...бол, бол... – Ысын көмөш икәнлегенә инанып, тура ҡала үҙәгенә йүгерҙе – ювелир магазинында заманаңың ҡыштырҙауығ болона алмаштырырға ла портмонент ауыҙлы оҙон ойоҡ тамағына тығырға... Әсәй ҡәберенә зират ҡылыу иҫенә лә кермәне – баҡсалағы ағастарҙы ҡышҡылығҡа бәйләргә, түтәлдәрҙе күмергә, портмонетҡа яңы оҙон ойоҡ ялғап тегергә кәрәк ине. Сөнки йәшниктәргә ултыртҡан көҙгө һуған ҡыяҡтары йәшәргән – солан төбөндәге йәшерен теплицаның эсе тәмле баҙар еҫенә күмгән. Шул малдарын йәшерен һемәк шыланғаһынан һуғарғанда буштан килгән һыуына тиклем алтын-көмөш тәңкәләрҙәй күңел ҡылын ҡытыҡлай: селтер-селтер, булыр-булыр...бол, бол...

Ҡаҡашҡан ҡара халатының тышынан ҡыш башында уҡ ҡыптыр тунын кейеп алған – эт йөрөмәҫ боҙлауығта ла баҙар юлын таҡырлаған сәйер йәндең әҙәми затҡа хас түгел ҡырҡмыш-тарамышлығына күршеләре аптырап көн иткәндә, бер мәл йәшелсә баҙарында башҡа һуҡҡандай итте – йән әсеһе менән берәү йөрәк өҙгөс һығтана:

-- Эй раббым! Булмаҫ, булмаҫ!.. Бол, бол...

Тетрәткес таныш тауыш. Әйләнеберәк баҡһам, ни күҙем менән күрәйем, бисә-сәсәләр ҡайнашҡан ҡорҙо ҡап-урталай ҡөҙрәтле караптай ярып, ауыҙ тирәһен шырт ҡыл баҫҡан бөкөрөрәк бер бәһлеүән йүгерә. Терһәктәрен, йәйҙәрен Дим буйҙарында сәмләнеп бесән сапҡандай, уңлы-һуллы һелтәнә, һуҡлығыусы шыйыҡ һираҡлылар ике яҡҡа янтая. Үҙемдең дә тас маңлайға суҡмар төйҙәһе ҡағылыуҙан утлы осҡондар сәсрәп, ситкә кәйлектем. Күҙҙе асыбыраҡ ҡараһам, бәй... Бынағайыш тамаша: үҙебеҙҙең Гиппопотам! Хафаланып һораным:

-- Ни булды?

-- Булмаҫ, булмаҫ, булмаҫ!.. – Мине аша ырғып сыҡты, бәлеш ашап торған ике малайҙы салғый еле менән бәреп йыҡты. Үҙе лә түңкәрелеп, таш иҙәндән дүр аяҡлап мүкәйләне. Ҡыпсыуырҙай ҡулдары менән һәммәбеҙҙең һираҡтарынан алып, табандарҙы ҡалҡыттыртып, аяҡ аҫтарын һәрмәне. Эҙләгәнен тапмағас, эргәләге сүп һауытын башы аша атҡарҙы. Йәшелсәле урындыҡты ҡуҙғалтып, аҫтындағы ҡыу саңды өрөп туҙғытты. Үҙе һаман, йөнтәҫ бармаҡтары менән ҡарманып:

-- Булмаҫ! Булмаҫ! – тип илереп-ҡоторҙо. Йәшермәйем, ошо һүҙҙең сихырынан минең эскә йылы йүгергәндәй булды: Гиппопотам бол ҡайғыртып “бол-бол”лауынан туҡтаны, әҙәмсә һамаҡлай башланы – Гиппопотамлығынан ваз кискәндер! Бәлки беҙҙең күҙ алдында Ер-әсәгә маңлай ороп һыҡтай-һыҡтай, аяҡтары аҫтына ауған кешелек выжданын эҙләйҙер?!.

-- Бахыр, аҡылдан яҙған, -- тине берәү.

-- Ул, моғайын, ғәзиздәрҙән-ғәзиз нәмәһен юғалтҡан.

-- Аяныс хәл, туғандар. Әҙәм балаһы был тиклем дә тилмерәҫ... Ҡарағыҙ әле, теле менән саң ялай!

Йөрәгемде үкенес хисе бөрҙө:

-- Меҫкен... Моғайын, һуңлап булһа ла, әсәй үлеме ҡайғыһынан ашҡынғандыр, бисара. Юҡ-юҡ, ышанам, теге көндә әсәһенең тишекле тәңкәһен дә

ювилерға илтеп һатмағандыр ул – аманат итеп йөрәге тәңгәленә таҡҡандыр. Инде шуны юғалтып тилерәлер. Их, уның хаҡта беҙ, гонаһлылар, яңылыш уйлағанбыҙ!..

Саң аҫтынан ҡулы бына нимәгәлер төртөлдө, табышынан йөҙө көндәй яҡтырып, бәхетле сыйнап ебәрҙе лә ҡалҡынды Гиппопотам, ҡара ҡатҡан тырнаҡтары араһына кеҙәшшәләй ҡыҫтырып, башы өҫтөнә суҫка мороно дәүмәллек баҡыр божор күтәрҙе:

-- Таптым! Таптым! Был, был... булыр, булыр...бол, бол!.. – Баҡыр божор табышын, ожмах ҡапҡаһынан инергә бирелгән изге ярлыҡтай, дүрт тарафҡа әйләндереп күрһәтте. Кеҫәлә күп ышҡылыуҙан көҙгө кеүек ялтыраған сирек тинлек баҡыр тәңкә -- Николай батшаның сите китек боло ине был... Бисмилла итеп төкөрөп, Гиппопотам баҡыр болдо ҡуйынына сумырҙы. – Мәрхүмә еңгәгеҙҙән ҡалған, ҡалта төбөндә маяланып табыш теләп ята торған болдор был, бол...бол... – тине.

Заманалар әленән-әле яҡшы яҡҡа үҙгәрҙе – баҙарҙа ла, магазиндарҙа ла кейем-һалым, ашамлыҡ, йәшелсә һәм емеш-еләк күбәйҙе. Кешеләргә арзан хаҡҡа һатыуҙан ытырғанып, баҙарманыбыҙ бол боллауҙан һүрелде. Ҡул остары оҙонайған күрше-күлән алсаҡланып ҡыуанды, Гиппопотам уның һайын йөҙө ҡыуарып ҡайғырҙы. Бол болағы һайығыуҙан бойоғоп, күҙгә күренеп шиңде, бөгөлөп түбән сүкте. Күҙенә -- йоҡо, тамағына аш барманы. Ул инде йөрәге өҙөлә яҙып йәшел түтәл араларын да һәрмәмәй, баҙарға ла йөрөмәй – “ҡәлғә”һенә бикләнгән килеш, сереп бөткән һандығындағы тултырған ҡаҙылай бөрөп бәйләнгән оҙон-оҙон ойоҡтарҙы аҡтарып, аҡса һанап йыуанды. Йыуанысы ла оҙаҡҡа барманы шул. Бына ғүмер көрсөгөнә таяныр мәле етә, ә болдарҙы “теге донъя”ға алып китер әмәл юҡ. Ни ҡылырға? Әллә “ҡәлғә” ҡоймаһының суҡайған ағас киҫмәгенә күтәрелеп, оҙон-оҙон ойоҡтарҙың ауыҙҙарын берәм-берәм сисергә -- болдарҙы ил өҫтөнә һибәләргәме? Әллә ҡаланың йәмғе ресторандарын, ашханаларын бер кискә бер юлы шул болға һатып алып, музыкалар уйнатып, ҡыҙ-ҡырҡындан осаларын һикерттертеп, бар халыҡты ауыҙынан ҡалғансы һыйларғамы? Юҡ шул, зиһене бойорһа ла, йөрәге бармай быға: күпме йылдар ҡарманып йыйған ғәзиз болдо нисек итеп үҙ ҡулың менән ҡулдан ысҡындырырға?! Их, әгәр ҙә ки ошо болдарҙың береһен-бер ҡалдырмай, үҙең генә сәйнәп йотоп булһасы! Ашҡаҙан боҙоҡ тип тормаҫ – Ғазраилға йән биргәнсе бер өҙлөкһөҙ тыҡшынып, бушатыр ҙа ине был ойоҡтарҙы...

Ә төндәрен былбыл һайрар сәғәттәрҙә тыҡрыҡ буйлап уҙғынсылар ҡойма аша ҡарттың сәйер “бол-бол”лауын ишетә. Ҡаралмауҙан ҡырағайланып барған алмағастарын, сейәләрен ҡалтыраған ҡулы менән ҡармалап йөрөп мыңғырҙай Гиппопотам:

-- Их-ма! Минән ҡалһа был, был... кемгә булыр бол, бол... – Шулай көн артынан көндәр, аҙналар һыҡтанып үтә. Хисап көнө лә етә.

Сылбырҙағы бурҙайын ысҡындырып, бына ул өйгә керә, ҡоро әрҙәнәләр һалып мейескә ут тоҡандыра, һандыҡты мейес ауыҙынараҡ шылдырып, ҡаҡ иҙәнгә аяҡ бөкләп ултырып, шыптырҙауыҡ аҡса нышып тултырылған оҙон-оҙон ойоҡтарҙы берәм-берәм һөйрәп сығарып ут алҡымына олаҡтыра, ә үҙе йөрәген тотоп, һуйылғандай ҡыҫкыра...

Аҙна буйына бурҙай олоп ултырҙы ла уның да өнө тығылды. Ҡарттың йәнһеҙ кәүҙәһе янында бушап ҡалған ярым серек һандыҡты, сөйҙәге ҡыптыр тунды, ҡатып туҡмаҡланған түшәк менән яҫтыҡты, яңғыҙ кешелек китек-һыныҡ ҡашығаяҡты теркәнеләр протоколға. Аҡса затына килгәндә, ҡаҡашып ҡатҡан ҡара халаттың ҡуйын кеҫәһендә “теге донъя”лағы Николай батшаның ышҡылып бөткән сите китек баҡыр тәңкәһе табылды...

“Ҡәлғә”, емереп ташлап урынына яңы йорт һалғанға тиклем, ҡапҡаһына арҡыс-торҡос таҡта ҡаҙаҡланған килеш, тирә-яҡты шомландырып ултырҙы. Ағастары тамам аҙып ҡырағайланған баҡсаһында төнгө былбыл һайрар сихри сәғәттәрҙә уҙғынсылар сетерекле ҡыштырҙау, мөңгөрҙәү һәм үҙәккә үткес айырым-асыҡ:

-- Бол...бол...бол... – тигән ауаз тыңларҙар ҙа, ытырғанып, “ҡәлғәғә бол-бол килгән” тип хәүефле баш сайҡарҙар, күптән түгел ошо донъяла булған – бол юлында ғүмеркәйен фиҙа ҡылған Гиппопотамды ҡыҙғанып иҫләрҙәр ине.

1974.

Муйынға аҫылынған арыҫлан

Һәй, был табын түңәрәге йыйын елғыуар буйҙаҡтарҙан хасил даһа! Шырҡ-шырҡ көләһегеҙ ҙә беҙҙең ише ғаиләләләр тормошонан көләмәс тирәһегеҙ. Мин дә ҡушылып көләм. Бәхетегеҙ: ағайығыҙҙың мунса ташылай ҡалсайып ҡатҡан түгел, ә март ҡояшылай мөлкөп йылмайған сағы. Әгәр ҙә мин быйыл ярышта бөтә бригадаларҙы ла бригадам менән еңмәһәм, алдынғылар сифатында баш ҡалаға килмәһәм, бына бынауы, түшемдәге, маҡтаулы билдәне алмаһам, унан да бигерәге, бисәкәйемә ҡул бүләгенә бынауы аҫыл ҡала тауарын эләктермәһәм, еңгәгеҙҙең ҡайнар ҡосағында майҙай ирергә тиҙерәк ҡайтып етәйем тип ашҡынып, вокзалға сәғәтенән элегерәк өлтөрәп килеп төшмәһәм, бригадир башым менән ошо кафе тигән нәмәкәйҙәренә -- һалам аша соҡортайҙан һут һемереүсе әргендектәр ҡатарына аяҡ баҫыр инемме ләә танауы ҡыл көйөгөн дә айырмаған һеҙҙең менән ғаилә хәлдәре тәңгәлендә тел сарлашыр инемме! Юҡ, белмәйһегеҙ шул әле һеҙ ғаилә хәлен! Ә ауыҙ йыраһығыҙ! Тел шартлатаһығыҙ! Йыйын юҡ-бар әкәмәт теҙәһегеҙ! Ә бит ул ғаилә хәле, бик тә белгегеҙ килһә, телеңде йоторлоҡ тултырмаға уттай ҡыҙыу һуған-борос ҡушып төйөлгән кеүек. Абайламай ҡабып ауыҙ яндырмаҫ өсөн, икәүенә лә айныҡ аҡыл, ҡыйыулыҡ һәм тапҡырлыҡ, арыҫлан йөрәк кәрәк ул ғаилә тормошонда!

Былтыр шундай яңылыҡ булып алды: арғы остоң күрше ауылға кейәүгә сыҡҡан Оҙонсәс Хәтирәһе кире әйләнеп ҡайтты. Ире ҡайҙалыр ҡалаға һырт ҡайырып эҙ бутаған, ҡәйнә-килен килешә алмағандар. Бындай мәсьәләгә миндәй бригадирҙың ҡарашын беләһегеҙ: ҡайтҡан малда хәйер бар, тинем дә ошоғаса ҡыҙ-ҡырҡынға баш бирмәүсе тана һыйырҙарға һауынсы итеп ҡуйҙым үҙен. Бирешмәй бит, әй, емертеп эшләй. Иң уҫал таналар ҙа ай араһында бесәйҙәй иркәләнде, һауын көндән-көн артты. Малҡайҙарын һөйөп тә, һыйпап та көйләй белә шул Оҙонсәс Хәтирә. Яйы тура килгән саҡта оҙон көйгә һыҙҙыра, тупырҙап бейергә төшһә, йөрәктәрҙе өҙҙөрә.

Алы ла булыр әле,
Гөлө лә булыр әле.
Беҙгә тигән аҫыл йәрҙәр
Яңынан тыуыр әле, --

Тип кенә ебәрә бит, әй. Ир-ат халҡына – ирмәк, ҡатындарына эс уты. Арҡандай оҙон ҡара сәсле, һығылма билле, ҙур ҡуңыр күҙле Хәтирә, йылтынкүҙ ир-атты ғына түгел, һәр егетте тилертерлек, төштәренә инеп тә илертерлек.

Тап шул арала ауылыбыҙҙың арғы осонан бирге осонаса ҡот осорғос шомло хәбәр таралды: беҙҙең тын төбәктә лә, имеш, ҡайҙандыр алыҫ Уссуриҙан аҙып килеп, арыҫлан пәйҙа булған, бер-нисә бәндәне ботарлап та өлгөргән. Бигерәк тә инә арыҫлан яуыз: кистәрен ағас башында һағалап ултырып, үткән-һүткән ир-атҡа ырғыла имеш... Ә мин, үҙегеҙ беләһегеҙ, яуаплы вазифа эйәһе – бригадир, уның ише ваҡ-төйәктән юғары. Минең өсөн оҙон сәс тә, ҡыҫҡаһы ла бер тигеҙ. Бер ҡаранан бер ҡарағаса дөйөм эште генә ҡайғыртам. Әммә, йәшермәйем, арыҫлан бәләһе беҙгә лә килеп керҙе – еңгәгеҙ ҙә бер заман миңә ҡырын ҡарай башланы. Саҡ ҡына ҡояш байып, күҙ бәйләндеме, өй ишегенең келәһен "шарт!" әлә лә ҡуя. "Эш муйындан, бисәкәйем, колхоз эше", -- тип тә инәлеп ҡарайым – юҡ бит, әй, бер иле лә ебәрмәй. "Колхоз эше тип, үҙеңде инә арыҫландан алдыртып, тыусаҡ өс баламды атаһыҙ ҡалдыраһым юҡ!" – тип кенә ең һыҙғана...Булып ҡарағыҙ бына шунда минең һымаҡ ир арыҫланы-бригадир!..

Ваҡиғалар ҡуйырғандан ҡуйырып, иң юғары көрсөгөнә терәлде: бер кис үҙебеҙҙең урамда – Аппарат Әҡлимә тип танылған көмөшкәсе ҡарсыҡтың өй алдындағы өйәңке башында төнөн арыҫлан аҡырған. Килделе-киттеле бер килке бәндә шунан шөрләп, ҡараңғыла өйөнән сыҡмай башлаған – дөйөм хужалыҡ эшенә тотҡарлыҡ. Мыҡты ғына ирҙәрең дә, күҙ бәйләнер-бәйләнмәҫтән үк Аппарат Әҡлимә тауарын һемереп ала ла, арыҫландан ҡурҡам, тип, бригадир танауы салыныу менән үк ишегенә бик һала ла ҡуя. Тукҡылдатһаң, мине ирһеҙ ҡалдыраһыңмы ни, тип, бисәһе ҡарыулаша. Шуның арҡаһында байтаҡ йөрөмтәлдәрҙең төнгө юлы киҫелде, Аппарат Әҡлимә ҡарсыҡтың да төнгө килеме кәмене. Келә һалдыртмай маташыусыларҙың өйөндә буран ҡупты, ҡашығаяҡ шалтыраны...

Ҡойто хәлгә артыҡ түҙеп торор әмәл ҡалмағас, беҙ, йәғни ауыл өсөн яуап биреүсе өс етәксе ир арыҫланы, бисәләрҙең ай-вайына ҡарамай, һаҡлыҡ келәләрен кистән үк ыскындырып, Ай нурына ҡойонған урамға сыҡтыҡ -- өсөнсө әтәс ҡыскырғансы күҙ йоммаҫтан йәмәғәт именлеген ҡурсаланыҡ. Тәүәккәллек таш яра, тип әйткәндәре хаҡ икән: ил маҙаһын ебәреүсе мут яныуарҙы ҡырпаҡ ҡарҙа эҙенән юллап барып, ауыл осондағы имән башынан мылтыҡлап алдыҡ – аҙауҙары ҡаҡшаған ҡарт һеләүһен булып сыҡты. Улъяны халыҡ мыжғып торған магазин алдына һалып, өс көн тамаша ҡылдырттыҡ: "Ошоноң менән вәссәләм – бөттө инә арыҫлан!" – тинек. Бүрек кейгән йәмәғәт иркен һуланы, әммә яулыҡлы баштарҙа шик касафаты ҡалды...

Бер көн эштән һуң еңгәгеҙ менән икебеҙҙе ут күршебеҙ күмәк ҡунаҡ табынына тыуған көн туйына саҡырҙы ла кис буйы уйнап-көлөп, тигәндәй,

үткәрелде. Үҙе шәп механизатор, үҙе ҡурайсы, үҙе нәфис һүҙ оҫтаһы – күршене әйтәм. Шулай итеп, ваҡыт ҡайһылай ағылғанын абайламай ҙа ҡалдыҡ. Өйөрөлөшөп ҡайтырға тип ҡуҙғалһаҡ, төн уртаһы уҡ еткән.

-- Юҡ-юҡ, ҡунаҡтар, мин һеҙҙе яҙмыш ҡосағына тапшырып ебәрә алмайым! – ти ҡомарланған ут күршем. – Яңғыҙ-ялпы ҡыҙырырға хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре ҡушмай!

-- Эйе шул! – тип элеп ала хужабикәһе, -- тирә-яҡта ҡош-ҡорт бар. Ишеттегеҙме: кисә генә әле тағы Янбулат олатайыма кәкре ҡайын башынан инә арыҫлан ырғый яҙған. Әйгенәм, дырылдат атһыҙ арбаңды, илтеп ҡуй ҡунаҡтарҙы!

Күршем гараждан “Жигули”ен сығарып, мәжлес халҡын, ҡушарлап-ҡушарлап, өйҙәренә атҡара. Сират көтөп тороусылар ҡапҡа төбөндә уйын ҡороп ебәрҙе. Шунда шаталаҡ Оҙонсәс Хәтирә килеп сығып, табандарынан ут сәсрәтеп, еңгәгеҙгә бейергә баҫмаһынмы. Үҙе үткер ҡаяуын ҡаҙап ала: “Эй апай-апай, ошо мөһәбәт кәүҙәң менән еҙнәмә һөймәлекле бәпес тә табып бирә алмайһың бит, әй – вәт булыр ине, исмаһам, туй! Миңә ҡалһа, мин бер юлы игеҙәкте, хатта өстө тупырлатыр ҙа бирер инем!” – тип ут өҫтәп ебәрә. Сыҡты елеп еңгәгеҙ, унан да хәтәрерәк итеп бейеп китте. “Барған ереңдә табыр инең өстө -- булмаһаң әгәр пусто!” – тине. Шуның менән иҫәптәр тигеҙләнеп, бөтәһе *лә ал да гөл* була ине, әммә шаталаҡ, әлеге бер таҡмағын һөйрәп сығарып, һүрелеп барған ҡуҙға май өҫтәмәһә:

Алын да алдырырбыҙ,
Гөлөн дә алдырырбыҙ.
Һөйгән йәрен тартып алып,
Йөрәген яндырырбыҙ.

Төҫө ҡасты еңгәгеҙҙең, уратымын көскә бейеп бөтөрөп, хужабикәгә баҫты *ла* мине һөйрәкләп алып ҡайтып та китте. Төнө буйы шунан өйҙә, төпкө аулаҡ бүлмәлә, буран уйнатып сыҡты.

-- Әйт, -- ти, -- дөрөҫөн әйт: Хәтирә менән ни эшегеҙ булды?

-- Бер эшебеҙ ҙә булманы, -- мин әйтәм, -- төшөбөҙгә *лә* инмәне.

-- Әһә, “төшөбөҙгә” тиһеңме?! – Сиңерткә йотҡан балыҡ һымаҡ ҡарпып алды еңгәгеҙ. – Бергәләшеп төштәр ҙә күрә башланығыҙмы ни әле? Хәйерле сәғәттә әйт, дөрөҫөн әйт!

-- Дөрөҫө шул: эш урынынан башҡа мин Хәтирәне күрмәйем *дә*, белмәйем *дә*!

-- Әһә, шулаймы ни әле? Күрешмәй генә өс игеҙәк табырға йыйынаһығыҙмы? – тип сикәләремә салт та солт ус ялатып ебәрмәһенме. – Дөрөҫөн әйтмәйһеңме? Ҡурҡаҡ һин, бына кем! Ҡурҡаҡ! – тип мәсхәрәләй үҙе.

-- Минме ҡурҡаҡ?! – Сикәм ҡыҙышты минең дә. – Бына һин *ул* ҡурҡаҡ! – тип һөжүмгә ябырылдым. – Мине Оҙонсәс Хәтирә тартып алмағайы тип ҡурҡаһың. Тиккәме ни мин ишектән инеү менән келәне ҡаптыраһың!

-- Әһ-һә, шулаймы? – Иҙеүемдән бөрөп алды еңгәгеҙ. Тупһа төбөнә дөһөрҙәтеп килтереп, тимер келәне һурҙы. – Иҫем киткән икән иҫке сәкмәнгә! Бар, аҙғын ата арыҫлан, олаҡ Оҙонсәсеңә! – Ҡаңғырып сығып барғанымда

артымдан өçтәкләп ҡалды. – Ысматри, инә арыçлан муйыныңа ырғылғанда йөрәгең ярылып ҡуймаһын!

Шул секундта ағағыҙҙың арыçлан йөрәге ҡуҙғалды. Ауыҙ асып әйтмәнем, буçағаны арыçландай ғорур ырғып, ишекте тыш яҡтан яптым. Моғайын, иçенә килгән еңгәгеҙ тәҙрәнән башын тығып ҡысҡырыр, кире ҡайтарыр тип көттөм. Әммә ул да арыçланбикә икән: “шылт!” та итмәне.

Төнгө күк йөҙө болот, күңелкәйем ҡараңғы, тын урамда яңғыҙ башым ҡаңғырам. Инде ҡайҙа барырға? Ни урында төнәкләргә?.. Кемгә керһәң дә -- оят. Булһам икән килделе-киттеле бер ир, мин бит әле бригадир!.. Бер талай шәңгеп торғас, йүнәлдем арғы остағы бесән эçкерттәренә. Инде төн ауышҡайны, таң әтәстәре ҡысҡыра башлағайны. Юл тигәнең дә, хәйерһеҙ, ошо төн кеүек оҙон, ә етмәһә Оҙонсәс Хәтирәләр ҡапҡаһы янынан үтә -- колхоз бесәне уларҙың кәртә артында. Самаланҡырап торҙом да бәрәңге баҡсалары аша юлды ҡыçҡартмаҡ булып, ҡапҡаларына ауышып үçкән йыуан ҡарама төбөнән үрелеп кенә ҡулды ҡоймаға һалғайным, баш осомда ниндәйҙер сәйер ыһылдау ишетелде *лә* ҡарт ағастың ботаҡтары шатор-шотор бөгөлдө. Ҡалҡынып ҡараһам, был ни хәл – бөттө ғәзиз башҡайым! – ҡарама ҡыуын һындыра-емерә, йомғаҡ һымаҡ йомарланған ҡот осорғос оло яныуар ябырыла иңемә -- арыçлан!.. “Әсәй!” – тип йән бирергә *лә* өлгөрмәнем, боҙҙай һалҡын ике тәпәйе үңәстән алды ҡармап – инә арыçлан! Раз-бо-о-ой, муйынға аçылынды инә арыçлан!..

Йөрәк ярылыр саҡта ғына, көтмәгәндә, әжәл йомғағы еңгәгеҙҙең сейәләй һутлы ирендәрен ирендәремә убылдырып, ысын еңгәгеҙ тауышы менән наҙлы көйләмәһенме:

-- Йәнем, ғәзизем, арыçланым, ҡайт өйгә! Арыçланымды бер кемгә *лә* бирмәйем, бирмәйем!..

Артабанғыһы ысынлап та төш кеүек: күҙҙе асып ебәрһәм, үҙебеҙҙең йылы өйҙә еңгәгеҙҙең ҡайнар ҡуйынында ятам иҙерәп...

Шәйләнегеҙме инде? Ғаилә хәле бына шулай ул, мырҙалар. Әгәр ҡулығыҙҙан килһә, үҙегеҙгә ҡаш һикерткән инә арыçланды тотоп, буйһондороп, үҙегеҙ буйһоноп ҡарағыҙ – булырһығыҙ ир арыçланы! Тап бына ошо тәңгәлдә донъялағы әлегәсә неҙ белмәгән ғәжәп сер – ғаилә тормошо башлана, эйе!

1974.

Шпорҙар – ышҡырҙар

Саттарвәлиҙе мөдир итеп ҡйғандарының иртәгәһенә бисәһе, ah-вah килеп, универмагтан ҡайтты:

-- Бына һиңә яңы модель ботинка, түрәкәйем. Биçтәбеҙҙең бөтә түрә ҡатындары, сират тороп, ҡырылышып алып ята – саҡ-саҡ эләктерҙем. Фабрикала “Был йылдың иң шәп моделе” тигән призға *лайыҡ* булған, ти... Йоморо ғына йылы аяҡтарыңа кейеп ебәр, түрәкәйем. Башҡаларҙан беҙҙең ни еребеҙ кәм?.. Улар һинең тәүҙә йөҙөңә түгел, ә башың менән аяғыңа ҡарайҙар.

-- Быныңнимәһе яңы булһын, үҙебеҙҙең ҡала фабрикаһының йышылып бөткән моделе бит, -- тип тел ҡалҡытып ҡарағайны ла Саттарвәли, тегеһе ауыҙын тыҡты:

-- Аяҡ кейемдәре фабрикаһының иң главный модельеренең тайыш бисәһенә тиклем туйтаңдап килеп еткән. Унан минең ҡай ерем кәм?!

Китте эшкә Саттарвәли яңы ботинкалар кейеп. Тупһанан төшөү менән үк ул, ҡойроғо ишеккә ҡыҫылған бесәйҙәй, тажылдап-аҡырып ебәрә яҙҙы: яңы бүләк үксәне тимер ишектән дә хәтәрерәк ҡыҫа һәм ышҡый ине. Кире әйләнеп керергә кәре етмәне. Йөрөй-килә йомшап йүнәлер әле тип, тешен ҡыҫҡан килеш тәпәйләй бирҙе. Уның ете тире аҡты, конторағa, ҡапҡанға төшкән бүреләй, тештәрен шыҡырҙатып барып инде, телефон аша хеҙмәткәрҙәренең кәрәктәренә бирергә, ҡабырғаларын һанарға тотондо...

Эштән ҡайтканда Саттарвәли башын ҡалҡытып та ҡарай алманы, яңы модель ботинкаларҙы саҡ ҡалҡытып һөйрәлде. Ғәжәпкә күрә, ул үҙенеке шикелле үк байтаҡ ҡына ботинкаларҙың асфальт арҡаһын тырнап һөйрәлеп барыуын, ә ботинка хужаларының, энә йоттан бурҙайҙай кәкрәйеп, шыңшып-ыңғырашыуҙарын абайланы.

Саттарвәли аяҡ хәлен бисәһенә әйтмәне: тауыш-тынһыҙ ғына иртән эшкә иҫке ботинкаларын кейергә уйланы. Ләкин бисә бөтә артыҡ аяҡ кейемдәрен ҡайҙалыр олаҡтырған, үҙе лә олаҡҡайны. Саттарвәли был юлы эштә кабинетына бикләнде, күнәккә һыу ағыҙып, кискә тиклем аяҡтарын һыуға тығып ултырҙы. Эштән ул телен арҡыры тешләп, биле һынған йыландай үрмәләп ҡайтып инде: ике аяҡтың да үксәһе бармаҡ ҡалынлыҡ күпкәйне. Бүләк зәхмәте икәнен ул бисәһенә белдермәне – аҙаҡҡаса ир ҡалды. Иртәгәһенә, өйҙә һөйрәй торған иҫке ҡаталарының үксәләрен ҡырҡып ташлап, шулары менән шым ғына һыпырылырға иткәндә, магазиндан ҡайтып килгән хәләл ефете тотоп алды:

-- Түрәкәйем, ниңә ҡырын тәпәйләп янтайлайһың?

-- Үксәләргә әллә ни булған.

-- Эһем, һал әле ойоҡбаштарыңды. – Бисә ҡапыл ҡул сәпәкәйләп, ҡыуаныслы бейене. Түрәкәйем, әйтәм бит, башҡаларҙан беҙҙең ни еребеҙ кәм? Яңы модель ботинка алған башҡа түрә бисәләренең дә ирҙәре бөгөн иртүк торған, аҡһай-аҡһай поликлиникаға шылған. Түрәкәйем, һиңә лә шпорҙар үҫкән!

Үксәһеҙ ҡата кейгән мыҡты ирҙәр хирург бүлмәһе алдында теҙелешеп ултыра, был заманда абруйлы ғына уҙамандарҙың үксәләренә ҡанығыусы “шпор” тигән сир тураһында тел ҡаға.

Табип бүлмәһенә беренсе булып аяҡ кейемдәре фабрикаһының иң главный модельере ингәйне, бераҙыраҡ торғас, хирург үҙе ишекте асып ҡараны ла сатандарҙың барыһына ла эркелеп керергә ҡушты.

-- Рәхим итегеҙ гуртым. Берәмләп ҡарау ҡайғыһы юҡ – үҙем дә бөгөн сатан, -- тине ул. Кушеткала йөҙтүбән ятҡан баш модельерҙең тәпәйҙәрен күрһәтте. – Һәммәгеҙҙең дә үксәләр ошондаймы?

-- Тап шундай, һуйған да ҡаплаған! – тинек хор менән. – Шпорҙар!

-- Шпорҙар түгел, ә ышҡырҙар был.

-- Уныһы ниҙән була тағы? – Тороп ултырҙы баш модельер. Хирург өҫтәл аҫтынан үҙенең бөтәбеҙгә ифрат таныш яңы модель ботинкаларын тартып сығарҙы, эске үксәһенә бармағын төрттө:

-- Элек бында, йөйөн ҡаплатып, артҡы эслек һалына ине. Яңы модельдә ул юҡ...

-- Шул яңылыҡ беҙҙең фабрикала ботинкаларҙың һәр кейеменән – ноль бөтөн ундан бер тин экономия бирҙе! – Баш модельер ултырған урынында ғорур кирелде.

-- Ҡулға тоторҙай иҫәпләп ҡарағанда, күпмерәк була был?

-- Һәр ун кейем ботинканан – бер тин! Йөҙҙән – ун тин, меңдән теүәл бер тәңкә! Күпме экономия!

-- Бына шул экономия өйкәп, ышҡып күптергән дә инде беҙҙең шпорышҡырҙарҙы... – тине хирург. – Барыбыҙға ла бюллетень алырға, өйҙә ятып дауаланырға тура килә хәҙер. Олатайым әйтмешләй, бер тин ҡуян – ун тин зыян була был экономия...

-- О, елле экономия! – тиеште кинәт күңеллеләнеп гөжләшкән мыҡты ирҙәр; бюллетень алғас тиҙерәк шәхси гараждарға барып етеү, баҡсаға китеү тураһында ҡыҙыу ғәм ҡупты. Улар “дыу!” килешкән арала хирург ишекте асып коридорҙы барланы:

-- Сират көткәндәр бармы? Ваҡытығыҙҙы әрәм итмәй, башҡа врачҡа үтегеҙ, башҡаларға ла әйтегеҙ. Мин бюллетенгә китәм!

Саттарвәлиҙең дә, гараж уҡ булмаһа ла, өй ҡырында тутыҡ ҡалайҙан ҡоршалған келәт киҫәге, ә эсендә өс тәгәрмәсле өр-яңы “матай”ы бар ине – ҡайһылай ҙа шәп килеп сыҡты, инде мөмкин ҡырын һуҡтырып йәнгә сихәт тәбиғәтле ҡала ситенә елдерергә, тип хозурланып уйланы. “Был юлы бисәкәйҙе лә суҡайтып ултыртып алмай булмаҫ – сираттан тыш ял көндәренең сәбәпсеһе тап ул бит!”

Абруйланып үҫеп киткән үксә шәрифтәренә эйелеп ҡарап, ҡапыл күңеле йомшарҙы, үксәһеҙ ҡатаһын кейеп маташҡан баш модельерҙең яурынына яратып ҡулын һалды:

-- Иллә башлы икәнһегеҙ ҙә, мырҙам! Ошо йәшемә етеп, игелекле шпорҙарҙың ҡайҙан шытҡанын шәйләгән-белгән юҡ ине!

Красноусол курорты, 14.06.1975.

Дөйә -- төймә

Бөтәһе лә төймәгә барып бәйләнде. Эйе, магазинда чек яҙҙыртып алғас ҡына, ул нәҡ шуны күреп ҡалып дау ҡуптарҙы:

-- Ниңә былары һәлберәк тә елберәк?! Башҡаһын алып бирегеҙ!

Ирендәре ҡыҙыл буяу мискәһенең ауыҙы һымаҡ һатыусы ханым урҙалағы теҙелеп торған салбар иштәрен берәмтекләп күрһәтте:

-- Йә, тынысландығыҙмы инде? Йөҙ салбарҙың йөҙөһөнөң дә төймә ғәлиһөссәләмдәре бына-бына өҙөләм, тип кенә тора...

-- Тыныcланманым! Миңә төймә ғәлиһөccәләме берәгәйле салбар кәрәк!

-- Уныһын фабриканан барып юллағыҙ!

Ғәбделвәзихтең, үлә яҙып, шаҡмаҡлы салбар кейгәһе килә ине. Китте сәмләнеп тегенсе фабрикаға. Унда ҡағыҙҙы уңлы-һуллы әйләндерҙеләр, һораштылар, телефондан шылтыраттылар. Ғәбделвәзихҡа саҡ ҡына көтөп торорға ҡуштылар. Мәсьәләнең төймә күҙәүен ҡырҡ тапҡыр әйләндереп, иң яуаплы, иң оло иптәштең үҙенә йүнәлттеләр. Ә ул, төймәнән дә бәләкәс булып ҡалып, кеселекле баш эйҙе:

-- Хәлегеҙҙе төшөнәбеҙ, аңлайбыҙ, һеҙҙең өсөн көйөнәбеҙ, янабыҙ. Әммә ярҙам итеү көсөбөҙҙән килмәй.

-- Фабрика тиклем фабриканың эт күҙендәй төймәгә лә көсө етмәйме? – Илерә яҙҙы Ғәбделвәзих.

-- Эш төймәлә түгел, дуҫ кеше, ә тишегендә!.. – Яуаплы иптәш ҡапыл ғына дөйәләй үҫеп китеп, өҫтәл тартмаһынан йылтыр әнә, нәҡ шаҡмаҡлы салбарҙағы шикелле төймә сығарып, тишектәрен машина теккән һымаҡ типсеп күрһәтте. – Аңланығыҙмы инде, дуҫ кеше, кем ишкән ул һеҙгә ишәк сумарын? Образлы итеп әйткәндә, беҙҙең теген машиналарының энәһе – уҡлау, ә төймә тишектәре – сыҫкан күҙе!

-- Ниңә уҡлау һыйырлыҡ тиштертмәйһегеҙ?

Иң яуаплы оло етәксе Ғәбделвәзихты, еңенән һөйрәп, тәҙрә төбөнә килтерҙе, ҡала ситендә төймә-төймә дүңгәләктәр урғылдырып төтәп торған оҙон мөрйәне күрһәтте:

-- Ана тора фабрикаһы – төймәләрҙең ояһы. Һорауыңды шунда түңкәр. Төймә күҙе асылмаһа ла, үҙеңдеке асылыр, бәлки.

Ғәбделвәзихтың үлә яҙып шаҡмаҡлы салбар кейгәһе килә ине, күҙҙе йомоп, төтәп торған оҙон мөрйә төбөнә елтерәне. Һәм ундағы иң яуаплы оло иптәште эҙләп табып, һорауын ҡабатланы:

-- Ниңә бушҡа төтәйһегеҙ, төймәләрегеҙҙең күҙҙәрен киңерәк астыртып тишмәйһегеҙ?

Ундағы иң яуаплы оло етәксе лә ҡапыл ғына бөрөштө, төймәләй бәләкәсләнде. Һораусыны тәҙрә төбөнә килтереп, күрше кварталды ыҫлы ҡара төтөнгә сорнаған оҙон мөрйәгә баҡтыртты:

-- Ана тора энәләрҙең инәһе – түңкәр шунда һорауыңды. Төймәнең күҙен түгел, ә энәнең үҙен нәҙек итергә кәрәк ине!

Сәсәй-сәсәй йүгереүҙән Ғәбделвәзихтың күҙ алдында күк йөҙө шаҡмаҡлы салбар балаҡтарылай сыбарланды, ә шулай ҙа мөрйә төбөн эҙләп тапты. Мәсьәләне ҡабырғаһы менән килтереп ҡуйғас, ундағы иң яуаплы һәм оло иптәш ярһып өҫтәлгә һуҡты:

-- Һеҙ кем? Әллә аҡылдан яҙҙығыҙмы?

-- Яҙманым, тиер инем... ниңә?

-- Эштең төймәләме, энәләме икәнен дә шәйләмәйһегеҙ ҙәһә...

-- Уныһын һеҙ шәйләргә, ә мин хаҡына аҡса бәйләргә тейеш! Сыҫкан күҙендәй төймә тишеге өсөн ҡуласалағы тейендәй бейетәһегеҙ!

Иң яуаплы оло иптәш өҫтәл артынан торҙо, баштан-аяҡ һөҙөп-теклəп ҡараны:

-- Кем һеҙ? Фәнни-техник революция осоро кешеһеме, әллә, ғәфү итегеҙ... таш быуаттан мүкләнеп ҡалған бүкәнме?

-- Әгәр таш бүкән булһам, өйөмдә генә ултырыр, шаҡмаҡлы салбар артынан сапмаҫ инем, -- тине Ғәбделвәзих, йәберһенеп.

-- Алығыҙ ҙа кейегеҙ – магазиндарыбыҙ тулы!

-- Алыр ҙа кейер инем дә ул... шәлдәү төймәләре өҙөлөргә тормаһа... Ә һеҙ кейер инегеҙме шундайҙы?

-- Дәәә, мөһим мәсьәлә... – Етәксе баш сайҡаны.

-- Мөһимлеген шәйләгәс, ниңә һеҙ, шул төймәгә бәйле иң яуаплы оло өс етәксе, төймәләй хәлде дөйәләй итмәҫ өсөн, бер табынға ултырып һөйләшмәйһегеҙ, мәсьәләне әнә һымаҡ тишеп үтерлек уртаҡ тел тапмайһығыҙ? Ана, өсөгөҙҙөң дә яурындар аша мөрйәләр һерәйеп тора!

-- Дәәә, аңлайым хәлегеҙҙе... – Иң яуаплы оло етәксе шаҡмаҡлы салбар көҫәүсене, аталарса арҡаһынан һөйә-һөйә, тәҙрә төбөнә килтерҙе. – Күҙҙәрегеҙҙе асыбыраҡ ҡарағыҙ әле: күрәһегеҙме анауы мөрйәне?

Күҙҙәре алдында бөтә донъя шаҡмаҡлы салбар төбөләй ҡалып илерә башлаған Ғәбделвәзих урамға атлығып сыҡҡанда, әлеге завод мөрйәләре шул салбарҙың балаҡтарылай күренде. Офоҡ аҫтына тәгәрләп барған түп-түңәрәк Ҡояш иһә шул салбарҙың шәлдәүенән өҙөлөп төшөп киткән төймәләй тойолдо... Аһылдап килеп ул кире магазинға керҙе, үлә яҙып кейгеһе килгән шаҡмаҡлы салбарҙы алып, һатыусы ханымға ялбарҙы:

-- Зинһар, өҙөлөргә торғанын тағып бирегеҙ!

-- Нимә?! Әллә ҡатынығыҙ юҡмы?

-- Юҡ шул.

-- Буйҙаҡмы?

-- Буйҙаҡ. Тик бының төймәгә ниндәй бәйләнеше бар?

-- Дөйәләй. Беҙҙең завод-фабрикаларҙың тауары ҡатынлыларға көйләнгән, бәйләнгән.

-- Тимәк, минең һымаҡ буйҙаҡтарға салбарһыҙ йөрөргәме?

-- Үҙегеҙ таға белмәгәс – эйе шул.

-- Их шаҡмаҡлы салбар!.. Әгәр ҙә белгән булһам, тәүҙә Бюро ЗГС-ҡа барыр инем...

Һатыусы ханымдың күҙҙәре мызылданы:

-- Быны эшләргә һуң түгел. Мәҫәлән, мин дә буйҙаҡ, ә салбар төймәләре тағырға ифрат яратам.

Ҡыҙыл ауыҙлы ханымдың наҙлы ҡулын усланы Ғәбделвәзих:

-- Тағып күрһәтегеҙ әле, улайһа!

-- Хәҙер үкме? Әллә тәүҙә Бюро ЗАГС-ҡа барып яҙылышып, өйҙә икәүләшеп кенә тағыр ҙа ҡуйырбыҙмы?..

Уф... төймәһе дөйәләй булды был...

1978.

Серек йомортҡа

Ғәбделсафа менән Миңлеғата икеһе лә бер йылғы, икеһе лә, өйләнешеп, башлы-күҙле булған, икеһе лә колхозда механизатор, икеһе лә ауылдың үҙәк урамында йәшәй, икеһенең дә өйө бер ҡойма аша ғына терәлешеп тора – йәғни ут күршеләр ине. Айырма тик шунда ғына: Миңлеғата бәләкәстән үк йоҡо тәмен белеп үҫте, ә Ғәбделсафаның, имеш, күҙе йоҡо таныманы – йоҡлағанда ла “ике күҙе асыҡ” ҡалыр ине икән. Әллә шуғамы, Ғәбделсафаға колхоздың яңы ғына ҡайтарылған иң дәү К-700 тракторын ышанып тапшырҙылар, Миңлеғатаны ябай ДТ-75-кә генә ултырттылар. Ғәбделсафаны һәр саҡ байрамдарҙа ҡиммәтле бүләктәр менән ҡотлайҙар, йыйылыштарҙа президиумдың түренә мендерәләр, ә Миңлеғатаға дөйөм исемлектән ябай ғына маҡтау менән залдың билдәһеҙ эскәмйәһе эләгә. Аҡса менән игенде лә Ғәбделсафа көрәп алһа, Миңлеғата услап ҡына ҡайтара. Шуға күрә Ғәбделсафаның ихатаһы ла бейек – зәңгәр рәшәткәле таҡта ҡойма менән уратып алынған һәм аҡ ҡалай япҡан йорто бойҙай ашаҡҡан күркә кеүек ҡуҡырайып ҡалҡынған, ә Миңлеғатаның серек ситән ихаталы, мүкләнеп бөткән шифер менән генә ябыулы өй генәһе һимеҙ күркә янындағы төләгән тауыҡтай күренә.

Тора-бара ошо хәлдәр Миңлеғатаны сәмләндереп ебәрҙе, ул нисек тә Ғәбделсафанан бер иле уҙҙырырға, бер баш юғары ҡарарға ҡарар ҡылды. Тап шул йылда ут күршеләр икеһе лә ихаталарына ҡарбуз-ҡауын сәскәйнеләр, бер үк ер һәм бер үк орлоҡ булһа ла, үс иткәндәй, Миңлеғатаныҡы мантый алманы, ә Ғәбделсафаныҡы ҡотороп уңды. Урамдан уҙған һәр бер халыҡ, ҡояшҡа бешеп тумарлап ятҡан оло-оло ҡарбуз-ҡауынға һоҡланып, Ғәбделсафаны маҡтай, ә Миңлеғата тәңгәленән баш сайҡап ҡына китә. Һәм шул көндәрҙең береһендә, көтмәгәндә, урам халҡы Миңлеғаталар ҡаршыһында йыйыла, серек ситән аша ҡарап тел шартлата башланы. Унда, ҡабаҡ ояларын янлатып үҫтерелгән ҡауын һәм ҡарбуз елеләре араһында, Ғәбделсафаларҙыҡынан кәм тигәндә ике тапҡырға дәүерәк ала-ҡола ҡарбуздар, алтын кеүек һары ҡауындар күҙҙең яуын алып тумарлап ята имеш! Ике ут күрше, ҡапҡаларынан сығып, халыҡ алдына баҫты.

-- Миңлеғата уҙҙырған бит, әй!

Ғәбделсафа өндәшмәне, ә Миңлеғата күркәләй ҡабарынды.

-- Йә, Ғәбделсафа ҡусты, быға нисек ҡарайһың? – тинеләр тағы.

Ғәбделсафа, бер ни әйтмәй, ихатаһына инеп китте, ике ҡулына ике иң ҙур ҡарбузды һәм ҡауынды күтәреп сыҡты. Бәкеһен йәшендәй уйнатып, һәр кем ҡулына берәр телем ҡарбуз һәм ҡауын тотторҙо:

-- Ҡабып ҡарағас әйтерһегеҙ кем кемдән уҙҙырғанын!

-- Шәп! – тине тәмләп ҡараусылар. – Инде сират Миңлеғата ҡустыла!

Миңлеғата ауыҙ асып та өлгөрмәне, өлгөр йәнле ике малайы шунда уҡ серек ситәнде аша ырғып, Миңлеғата баҡсаһына төшөп тә китте:

-- Бәкеңде әҙерләй тор, атай, хәҙер үк иң дәүҙәрен алып киләбеҙ!

Ах-бах итеп, береһе тауҙай ала ҡарбузды, икенсеһе ҡауынды йөкмәп тә килде. Миңлеғатаның төҫө ҡағыҙҙай ағарҙы, ҡулдары ҡалтыраны, бәкеһен сығарманы. Унан да нығыраҡ тулҡынланған бер ағай, Ғәбделсафа ҡулындағы үткер бәкене алып, тәүҙә ҡауынды, артынса уҡ ҡарбузды ҡап-урталай яра телеп ебәргәйне, йәмғе йәмәғәт “ah!” итте, шунан шарҡылдап көлдө:

-- Ҡарағыҙ: ҡабаҡ бит былар, ҡабаҡ!

-- Ҡарбуз-ҡауынға оҡшатып, тыштарын буяп ҡуйған ҡабаҡ!..

-- Ала башмағына телгеләп бирегеҙ!

Ә бер хәйерһеҙе, башын салҡайтып ҡарап, Миңлеғата ыҙмаһының ҡапурталай бөкөрәйгән түбәһенә төртөп күрһәтте:

-- Ҡарағыҙ әле, әй, төн сыҡҡансы өй генәһе лә, буш һауанан ҡыуыҡланып, ике башҡа бейегәйгән бит бының! Күршеһенекенән аша ҡарап тора!

-- Ҡайҙа? Ҡайҙа? – тиештеләр бөкөрөнән башҡаһын күрмәгән кешеләр.

-- Күктәге анауы болот – шуның түбә ябыуы түгелме ни?

Хахылдап көлөштөләр:

-- Өйө бейек, өйрәһе шыйыҡ икән шул!

Көллө урам енләнгәндәй шарҡылдап көлдө, төҫө тап өй түбәһенең шиферы кеүек күкле-йәшелле булған Миңлеғата өйөнә кереп бикләнде. Уртын сәнәп яһил уйлана торғас, төплө ҡарарға килеп, төн сыҡҡансы, ысынлап та, күршеһенән уҙҙырмаҡҡа ул йортон да “бейегәйткән” йәғни тутыҡ мейес мөрйәһен оҙон торба ялғап оҙонайтҡайны. Ошонан һуң азаматтың исемен дә оноттолар – күҙ астыртмай йә -- Ҡабаҡ, йә Мөрйә тип кенә ләҡәпләнеләр...

Әммә йүнле бәндәнең ләҡәбе лә тик берәү – берәгәйле булырға тейеш. Был берәгәйлек яҙғы сәсеү ваҡытында – ҡырҙа ҡуна ятып эшләгәндә килде.

Яҙғы саҡ -- әҙәм балаһына витаминдар етешмәгән миҙгел бит. Шуны иҫәпкә алыпмы, Ғәбделсафаның өйөнән һәр төрлө еләк-емеш ҡаҡтары, сей йомортҡа килә ине. Ғәбделсафа емеш-еләкте иптәштәренә тарата, ә сей йомортҡаны һәр саҡ аш алдынан һытып эсә. Шуны күрептер инде, бер көн Миңлеғатаға ла ҡатыны бер күнәсек сей йомортҡа ебәргән. Киске ашҡа ултырғас ул, Ғәбделсафа эргәһенә йәпләнеп, күнәсектән бер йомортҡаны өҫтәлгә сығарып һалды:

-- Кемдеке ҙур?

-- Их-ма!.. Һинеке бик бәләкәс! – тип ут төрттө Миңлеғатаға бер ағай.

-- Нимә?! Минекеме бәләкәс?!

-- Һүҙ әйтмәгеҙ Миңлеғата ҡустыға, бәләкәс бәләле була ул! –Быҫҡыу утҡа май ҡойҙо икенсе бер ағай. Ләкин бирешмәнеләр:

-- Юҡ шул, Ғәбделсафаныҡы бәләлерәк!

Миңлеғатаның ҡапыл талағы ташып, эсендә ут ҡайнаны: күренеп торған өҫтөнлөктө лә Ғәбделсафа тартып алырға тора!

-- Ҡарап ҡарайыҡ, әйҙә: кемдеке икән бәләлерәк? – тине, үҙе һымаҡ уҡ эсенән ҡайнашып-ҡабарғандай иң дәү йомортҡаһын күнәсектән услап алып. Ғәбделсафа ла шул ыңғайҙан өҫтәлдәге йомортҡаһын күтәрҙе:

-- Әйҙә!

-- Ағай-эне, ҡупты бөйөк тарихи мәл: донъяға тыуасаҡ ике әтәс көс һынашып төкәшә! – тип һөрәнләп тә өлгөрмәне иң сәмле тамашасы, ут күршеләрҙең йомортҡалары осло маңлайҙары менән “сыҡ!” итеп бәрелеште һәм... Миңлеғата ҡулындағы яман сәсрәп, донъялағы иң-иң һаҫы, шаҡшы шыйыҡлыҡ тамашасыларына зәһәр бөркөлдө.

-- Серек! Серек йомортҡа!.. – Көллө йәмәғәт, танауҙарын устары менән ҡаплап, табындан ситкә сирғыны. Шул көндә үк Миңлеғатаға “Серек Йомортҡа” ҡушаматы йәбеште...

Ошонан һуң Миңлеғата тешен ҡыçты, Ғәбделсафаның ваҡ ҡына кәмселектәрен, уңышһыҙлыҡтарын күргәндә лә атҡа менгәндәй ҡыуанды, ләкин быны ҡырҡ йоҙаҡ аçтына йәшерҙе. Инде ул ут күршеһенән бер башҡа юғары булыу өсөн түгел, ә уны аçтан киçеп сүктертеү юлдарын уйлап баш ватты.

Йәй буйы көтөп йөрөнө уңайлы мәлен. Ниһайәт, хәйерле сәғәт һуғып, ил аяғы һил арала серек йомортҡа эйәһе бригада гаражы артында пәйҙә булды, Ғәбделсафа һабанының кәç таҡталары болттарын, саң түгел серәкәй тейһә лә ысҡынмалы итеп, бик ныҡ бушатып ҡуйҙы. “Кәкре ҡайынға терәттем!” – тип кинәнде. Эш шунда: тракторы менән тирмәнгә киткән Ғәбделсафа, кис ҡырын ҡайтып, төнгөлөккә баяғы һабанды тағырға ла тәжрибә участкаһы итеп билдәләнгән Кәкреҡайын баçыуын туңға һөрә башларға тейеш...

Зәңгәр таңдан зәңгәр велосипедында ҡырҙағы тракторы янына эшкә елдергән Миңлеғата үтеп барышлайы Кәкреҡайын баçыуына һуғылды, унда кәç таҡталарһыҙ һерәйеп торған һабанды, шул арҡала бөтөнләй ҡаплатмай һөрөлгән – ҡамылдары тырпайып ятҡан баçыуҙы, Ғәбделсафаны уратып алған етди ҡиәфәтле етәкселәрҙе күреп, һарымай йотҡандай эстән генә ҡыуанды – бураҙналарын ҡаплатмайынса брак һөрөлгән баçыу өсөн терәткәндәр һөмһөҙҙө кәкре ҡайынға! Шулай ҙа шатлығын йәшереп, йөҙөнә ҡайғылы төç сығарырға тырышып:

-- Их-ма! Һәләк ителгән бит баçыу айнанайым! – тип көрһөнгән булды. Ә кешеләр иһә уға, алйотҡа тарығандай, йылмайышып ҡараны. Агрономдың һүҙҙәре ҡаушаған Миңлеғатаның сәстәрен үрә торғоҙҙо:

-- Маладис, Ғәбделсафа, төрән таҡтаһыҙ эш итмәле алдынғы яңы ысул менән юғары класлы һөргәнһең! Нисек итеп төн сыҡҡансы өлгөрҙөң?

-- Һис өлгөрмәç инем дә, ут күршем ярҙамға килмәһә! – Миңлеғатаның йөрәгенә ут һалды тегенеһе.

-- Вәт маладис, әллә тракторы менән төндә килеп һөрөштөмө?

-- Юҡ, мин тирмәндән ҡайтҡансы, һабанымдың төрән таҡталарының тутығып ҡатҡан гайкаларын бермә-бер бушалтып ҡуйған, быны гараж ҡарауылсыһы күргән. Һөҙөмтәлә күҙ асып йомғансы шалт-шолт алдым да ташланым, күпме ваҡытымды янда ҡалдырҙым! Ысын күңелдән рәхмәт һиңә, ут күрше!

Миңлеғатаға йәне һөймәç Ғәбделсафа терәтеләсәк кәкре ҡайын кинәт кенә турайғандай, Миңлеғата үҙе иһә төп башына ултыртылғандай тойолдо...

Йәне көйөп көноҙоно йөрөй торғас, саҡ еткерҙе алмашыныу сәғәтен. Кисен эштән ҡайтышлай, балағынан шайтан ҡотҡоһо тартып, колхоздың орлоҡ келәтенә һуғылды, “Һаҡ булығыҙ! Ағыулы!” тип яҙылған бер мискәнән аҡ онтаҡ һоçоп алды, ҡараңғыла ихатаһының ситәне аша үрелеп, Ғәбделсафаның ике күнәк һөт һауҙыртҡан ала һыйыры ялай торған таш тоҙ өçтөнә һипте.

Һары таңдан бисәһенең әсе тауышы уятты:

-- Ғата, тиҙерәк салып ал – һыйыр харам үлә бит!

-- Кем һыйыры?! Сафаныҡымы?! – Йөрәге һыйыр тулағандай яман тибеп, ырғып торҙо йәшерен ҡыуаныслы.

-- Уф Аллам, кемдеке булһын инде – үҙебеҙҙең һыныҡ мөгөҙ!.. Күпме тукыным үҙеңә, һыйыр алдына тоҙ һал тип! Я раббым, тоҙ темеҫкенеп, төн уртаһында ситәнде емереп сығып киткән, күршеләрҙең тоҙон ялап күбенгән...

Һөҙөмтәлә Миңлеғатаға иптәштәр хөкөмө алдына баҫырға тура килде, инде башҡаса алай ҡылмам, тип, һүҙ бирep саҡ ҡотолдо. Әммә талағы ташыуын тыя алмай, тештәрен нығыраҡ ҡыҫты.

Бер саҡ Ғәбделсафа бөтә ғаиләһе менән күрше ауылдағы ҡәйнәһенә ҡунаҡҡа елдергәйне. Төндә туңға ер һөрөүсе Миңлеғата тракторын туҡтатып, велосипедта бик ашығыс ҡайтты ла, күршеһенең түгел, ә үҙенең ҡыйшайып ҡоларға ултырған ҡара мунсаһына кәрәсин һибеп ут төрттө, артынса уҡ дәррәү кире елдерҙе. Ике аралағы баяғы һыйыр ҡазаһынан һуң яңы ғына уратылып йәшелгә буялған таҡта ҡойма уның мунсаһына терәлеп үк һуҙыла, урам яҡ башы, ҡырт боролоп, Ғәбделсафа йортоноң шулай уҡ яңы буялған таҡта болдорона барып тоташа. Миңлеғата иҫәбенсә, ҡойма бикфорд-шнур бурысын үтәп, "ҡыҙыл әтәс" күҙ асып йомғансы һөмһөҙҙөң йортон суҡыр, Сафа күршелә сыҡҡан ут мунсамды килеп яндырҙы, мине ҡазаға ҡалдырҙы, тип даулашырға форсат тыуыр...

Алмашсыһының килеп етеүен дә көтмәҫтән, йөрәге сығырҙай тулап, велосипедында ишкән ирҙең, үҙҙәренең тәңгәлендә урамда илашып ултырған ҡатыны менән ике улын, зыҡ-ҡубышҡан халыҡ төркөмөн шәйләүҙән йөрәк кенәһе һулығып, күҙҙәре шарҙай булды: Ғәбделсафаның йорто һаман күркәләй ҡабарып ултыра, ә уның ата нигеҙендә ҡуйы төтөн: ыҫмаҡланған торомбаштар зәһәр аунап ята ла завод мөрйәһеләй оҙон мөрйә генә һерәйеп тора ине. Ғәбделсафаның таҡта ҡоймаһы, ҡәһәрең, ут ҡапмай торған махсус буяу менән ҡапланған булған – мунса һикерткән "ҡыҙыл әтәс" кире яҡҡа -- серек ситәнгә үрмәләп, Миңлеғатаның үҙенең өйөнә ҡунған...

"Әтәс"тең кем салғыйы аҫтынан сыҡҡанлығы билдәһеҙ ҡалғанлыҡтан, фажиғәгә тарыған ғаиләне колхоз арғы остағы буш йортҡа керетте, иғәнәле илдән урын-ҡаралты, мал-тыуары ла йыйылды. Әммә Миңлеғатаның эсе – ҡабарынҡы, теше ҡыҫыҡ килеш ҡалды, сөнки йүкә телефон уға, имеш, Ғәбделсафа әйткән һүҙҙәрҙе еткерҙе:

-- Их, ут күршем елле ине, елһеҙ төндә еңе буйынан ут сығып ҡына араланы!..

Миңлеғатаға бөтәһен дә Ғәбделсафа үтәнән-үтә күрә, уның нимә уйлағанын да белә, аҫтыртын этлектәр эшләтеп, унан көлә һымаҡ тойолдо. Хәҙер инде ут күрше булмаһалар ҙа, утлы һулышы сикәләрен көйҙөрҙө. Етте, ике тәкә башы бер ҡаҙанға һыймай, тигән хәтәр ҡарар алға һөрөлдө.

Ҡыр эштәре тамамланып, районда гөрләтеп уҙғарыласаҡ баҫыу батырҙары парадына барырға йәнә лә шул Ғәбделсафа тәғәйенләнгәс, иртәгә парад тигән төндә Ғәбделсафа ла, Миңлеғата ла йоҡламаны. Парад ҡарарға бараһы башҡа кешеләр, автобустарға тейәлеп, кистән үк китеп бөткәйне. Ғәбделсафа колхоздың еңеү флагы тағылған К-700 тракторын бәйге юртағы һымаҡ итеп көйләне, ә Миңлеғата, төнө менән ҡаса-боҫа ауыл осона сығып, ошо таңда Ғәбделсафа тракторы юлланасаҡ таҡта күпер аҫтына төштө, урта билендәге ике ағас бағананы төптән ҡыялатып бысты: бына ҡайҙа буласаҡ уға, Ғәбделсафаға, ысын серек

йомортҡа!.. Ҡайтҡас, йөрәге ҡағып, серем итә алмай ятты. Күҙҙәрен йомһа, күпер уға шартларға торған бик ҙур серек йомортҡалай төҫмөрләнде...

К-700 тракторы таң тишегендә урамдан гөрөлдәп уҙғас (Ғәбделсафа хәйерһеҙҙең, парадҡа һуңламаҫ өсөн ҡабаланып, тракторҙы урау юллы күперҙән түгел, ә тура кисеүҙән йүнәлткәнен Миңлеғата белмәне), йөрәгенең тырнауын, талағының ҡабарыуын, эсендә ут ҡайнауын һәм өшөткөс ҡурҡыуын баҫа алмай, тутыҡ мылтығын аҫып, “һунарға барам” тигән булып олаҡты.

-- Әгәр мине таптырһалар – кисә үк айыу аңдырға сығып киттем! – тип киҫәтте ҡатынын. “Этлекле йән этлек ҡылған еренә барып тотолор” тигән мәҡәл тура килмәһен өсөн, серек йомортҡалай шартларға тейешле күперҙән кире яҡҡа – тау араһына артылды. Күҙ алдары ҡараңғылана, башы әйләнә ине. Бер заман ир күҙен асып ебәрһә, үҙенең шомло Енлеҡая түбәһенә үрмәләүен шәйләне – юғарынан бына-бына күпер күренәсәк ине. *Ләкин* аңы томаланған Миңлеғата ҡалҡынып баға алманы: Ғәбделсафаның ҡурҡыныс К-700 тракторы, дәһшәтле Дәжжалдай үкереп, текә ҡая башына уны баҫтырып менеп килә имеш... Миңлеғата, ҡото осоп, артына ҡайырылғайны, тубылғыға тотонған ҡулдары ысҡынып, ҡая аҫтына тәгәрәне...

Иҫһеҙ-ҡоҫһоҙ илереп ятҡан Миңлеғатаны көтөүсе тейәп алып ҡайтты. Күҙен аҡайтып аса *ла* башын ҡалҡытып ҡарай, теле көрмәлеп, бер һүҙ ҙә әйтә алмай. Әбей-һәбей араһында: “Енлеҡаяла Миңлеғатаны ен һуҡҡан”, -- тигән имеш-мимеш тә таралғас, ирҙе тиҙерәк район больницаһына илтергә йыйындылар. Бахырҙың бер туған ҡустыһы, шофер, ауыр йөк машинаһын тоҡандырҙы – башҡа машиналар китеп бөткәне. Ҡузлаһына бесән түшәп, сирлене ятҡырҙылар, баш осона ҡатыны, туғандары ултырҙы. Әлеге бысылған баҫаналы таҡта күпергә етеп барғанда ғына Миңлеғата ҡапыл аңына килде, ҡайҙа ятҡанлығын билдәләй алмай, зәңгәр күккә ҡаҙалып үҫкән ағас баштарына текләне. Шул саҡ уның күҙҙәренә күпер башындағы олоно һыныҡ йыуан ҡарағай салынды *ла* Миңлеғата, барлыҡ йән көсөн һалырға тырышып:

-- Күү-ү-пер! Туҡтағыҙ! Се-рек йо-морт-ҡа... – тип илереп ҡысҡырҙы. *Ләкин* ирҙең тауышы шундай зәғиф ине – хатта эргәһендә башын тотоп ултырған ҡатыны *ла* аңламаны. Машина иһә дөбөр-шатор күпергә барып керҙе, урта биленә тиңәлде. Шул мәлдә, бик дәү серек йомортҡа ҡабығы шартлағандай хәтәр ауаз сығарып, таҡта күпер шатор-шотор умырылды...

1980.

Ете ҡат ер аҫтында өс көн

Бөгөн дә кис ҡашығаяҡ шалтыраны.

-- Ниңә һунар бурҙайылай һоғаланып ҡабаһың? Әллә атайым эшенә ҡабаланаһыңмы?! – тип маңлайында ҡарлуғас ҡаштарын һикертте бисәкәйем. Һуңғы аҙналарҙа уның холҡо әптән көйһөҙләнеп, киске аштарыма теле борос, хатта тараҡан булып төшә башлағайны. Бындай саҡта ҡарыулашыуҙың ҡырыҡ

бәләләргә юлыҡтырасағын үҙ елкәмдә етерлек татып белгәнлектән, бер ҡолағымдан индергәнде икенсеһенән елләтергә ашығып, ҡашыҡ ҡуйҙым.

-- Өнөң тыҡлығып, һауыт төбөндә ике ҡалаҡ аш ҡалдыраһыңмы? Итәгеңә ут ҡабынып баралыр ни, бахырым.

-- Ҡабаланам бит, йәмле Йәмиләкәйем, ҡабаланам. Күҙ тилмертеп көтөп ултыраларҙыр.

-- Көтөп тораларҙыр шул ни, атам арбаулыһын. Ҡулы-ҡулға йоҡмаҫ шәп кешеһең бит! – Бисәкәйем табаҡ-һауытты шалтор-шолтор босмаҡ яҡҡа быраҡтырҙы.

-- Әттә, һин төндә урамда нимә уйнайһың? – Көтмәгәндә, күҙҙәремә төбәлеп ҡараны өс йәшлек улым Ғәлийән.

-- Ҡхым...хым... Мин урамда уйнамайым, улым. Өйҙән сығам да туп-тура Солтан олатайҙарыңа барам. Беләһең бит урамда тыр-тыр йөрөй торған Солтан олатайыңды?

-- Беләм, ул олатай матур. Ул мине тыр-тырға ултыртты, -- тине улым.

-- Бына шул матур олатайыңдың тыр-тырының матур моторы “сырт!” иткән. Ә ул тыр-тырһыҙ йөрөй алмай – ике аяғы ыҡ булған. Көн дә шул матур олатайыңа ватылған тыр-тырын өф итеп бирешергә барамын, улым.

-- Бахыр, өф итәһегеҙҙер, итмәй ҙә ни! – Элеп алды бисәкәйем. -- Өф итерҙәй ағай-эне эркеләһегеҙ бит унда... Бер ай буйы эт һуғарып йөрөгәнсе, келтерҙәк инвилад арбаһын ғына түгел, йөҙ ат көслө дизель трактор ҡороп бирер инегеҙ инде. Көнәлгәре кендеге ҡанаған мәжнүн бит һин! Эштән ҡайтҡаның һайын көндөкөн-көнгә китеп олағыуың етмәгән, инде йылына бер алған отпускаңды ла ҡуна-төнә шунда ятып үткәрергә иттеңме?

-- Эй бисә-бисә, әйттең бер кәбисә! Бүтән ҡайҙа барайым һуң?

-- Бынағайыш тамаша! Һинең өйөң юҡмы ни? Өйҙә ҡатының, балаң юҡмы ни? Йәки бик тә өйҙә ултырып сыҙамаһаң, культурный клуб кем менән уртаҡ һиңә?

-- Ташҡүлсәйем инде шул культурныйыңды. Ишектән ел һыҙғыртып, тәҙрәләренән ҡойон уйнатып тора.

Бисәм мыҫҡыллап көлдө:

-- Уй эсем ауырыуы, нимә ләпелдәгән була бит әле ул! Оноттоң дамы ни? Шул “ташҡүлсәйем” клубта ла артымдан бер иле ҡалмай бик тәтәй һикерәңдәп йөрөгәйнең түгелме? Хатта тайыш табандарың менән бейеү түңәрәгенә лә яҙылып ҡырҡышҡайныңы. Егетлегеңдә күрһәтәм тип ырғылғаныңда түшәмгә бәреп тишкән башыңдың йөйө бөтәштеме әле?..

-- Һинең менән ине бит ул, бисәкәй! – Йәмиләкәйемдең нәҙекәй билкәйенән ҡосоп алдым. -- Һинең менән мин утҡа ла, һыуға ла керергә әҙер, йәнекәй.

-- Китсәле, кит, нимә ҡыланған була тағы! – Хәләл ефетемдең болоттары офоҡ артына китеп таралды. Ҡара ҡарлуғас ҡаш ҡанаттары нур күленә мансылды. -- Кис һайын аҙып-туҙып, юҡты бушҡа ауҙарып йөрөгәнсе, берәй файҙалы шөғөлгә мауығыр инең, исмаһам! – Тап ҡыҙ ваҡытындағыса, ауыҙын үпкәле турһайтты.

-- Ниндәй шөғөл ул, йәмле Йәмиләкәйем?

Бисәмдең йөҙө асылып, күҙ ҡараштары яҡтырҙы:

-- Үҙебеҙ йәш саҡтағылай, драмтүңәрәк ойошторoп ебәрәбеҙме әллә, тип әйтеүем... юҡһа клуб тупһаһына шайтан таяғы үҫә бит. Шаулатып-гөрләтеп спектаклдәр ҡуйыр инек, исмаһам. Халыҡта дәрт ҙур әле, тик ҡуҙғатып ебәреүсе генә юҡ. Яҙ көнө үҙең күрҙең: нефтселәр килеп ҡуйған тамашала энә төртөр ҙә урын булманы. Спектакль бөткәнсе, "дыу!" ҡубып, дауай ҙа дауай тип алҡышланы йәмәғәт. Шуны уйлап ҡына ла эсеңдә көсөк юртмаймы, тип әйтеүем. Клуб тамам һүнде бит беҙҙең, һүнде!

Бисәм йәнә теҙгенләп алды яратҡан арғымағын. Хәҙер инде уны туҡтатам тимә! Былтырҙан бireле күрше Тирәкле ауылы эргәһендә нефть эҙләүселәр ҡуна-төнә ятып ер быраулай башлағас, ундағы клуб эштәре ҡапыл йәнләнеп, күсмә тетар менән бөтә тирә-яҡты шаулатҡайнылар ине шул. Бисә тигәнең хәҙер өҙмәй ҙә ҡуймай – ҡолаҡ итемде ашай:

-- Һүнде беҙҙең клуб, һүнде! Их... һүнде!

-- Һүннһә лә, туңһа ла, беҙҙең өҫтән төшкән инде, бисәкәй, -- тип, тулыш яурын башынан һөйөп-һыйпаштырып, һырт ҡайырырға иттем. – Юҡҡа ҡайғырма, йәмлем. Кәрәкһә, әнә, үҙ усаҡтарын йәштәр ҡабыҙып дөрләтһен. Үлгән йөрәктәр өсөн беҙ ғәйеплеме ни? Етер, ваҡытында күп уйнаныҡ. Беҙҙән үтте инде хәҙер!

-- Юҡ шул, бабайғынам, яңылышаһың. Беҙгә самай хәҙер ул уның ваҡыты! Баҫҡан ерҙе ҡуҙлатып йөрөр сағыбыҙ ҙаһа! Их, әллә, тим, бабайғынам, ошо отпускы айҙарыңда сәхнәгә менеп, бер елкенеп, бер һелкенеп алабыҙмы? Ә?

Зарығып, ҡарашымды түшәмгә текәнем. Ниндәйҙер бер сәбәп табып асыуланырға, ишекте шартлата ябып сығып китергә ине ниәт. Әммә бисәмдең күҙ ҡаралары таш иретерҙәй яғымлы, тауышы тиһәң – кәүҫәр-шараптай иҫерткес ине. Яҙмышымдан шәфҡәт һорап инәлә-инәлә сигендем артҡа:

-- Башыңда аҡылың бармы һинең, Йәмилә? Үҙеңдең ни һөйләгәнеңде белəһеңме? Тай типмәнеме маңлайыңа? Аҙыраҡ ҡына булһа ла йорт, мал-тыуар, бала хаҡында уйлап ҡараманыңмы? Беребеҙ һауынсы, икенсебеҙ тракторист – иртә китәбеҙ, кис ҡайтабыҙ, тигәндәй...

-- Ҡотоң осмаһын – уҡаң ҡойолмаҫ әле! Донъя, мал-тыуар былай ҙа минең елкәлә... Ә баланы ҡарарға, тиһәң, кистәрен ҡартәсәйемде саҡырып килтерербеҙ. Бынамын тигән бик көлкөлө француз пьесаһы бар. Тиҙерәк өйрәнәйек, ҡуяйыҡ. Күп һуҙмаңлама, Мифтахитдин! – Тулы Айҙай ихлас нурланған бисәм, эҫе һыуға ҡыҙарып бүрткән еүеш беләктәрен киң йәйеп, Ҡояштай йылмайып, туп-тура өҫтөмә дөрөп килә башланы.

-- Ярай, йәмле Йәмиләкәйем, ярай, тотонорбоҙ, бик тотонорбоҙ! – Ыңғай һыпырыуҙан башҡаһы ҡалмағанын төшөнөп, үҙем тиҙерәк артым менән ишекте төртә һалдым. – Тик ҡарале, йәнекәй, бынауы бахыр Солтан ағайымдың арбаһын ғына бөтөрөшөп бирәйем инде...

Бисәм кинәт үҙгәреп, йоҙроҡтарын йомарланы:

-- Ишетһен ҡолағың: бөгөн тағы ла теге апараға сумған өйрәк кеүек ғарыҡ булып ҡайтһаң... – Артымдан уҡлаумылыр, сүмесмелер даңғор-доңғор оскандыр – белмәйем. Иҫән-аман сығып ҡотолоуыма хәтһеҙ ҡыуанып, ҡотороп үҫкән оҙон тилебәрән үләндәренә әләгә-тәгәрәй, йүнһеҙ тығрыҡ буйлап Солтан ағайымдарға дөбөрҙәнем.

Ихата төпкөлөндәге ситәндән үргән йәйге аласыҡҡа барып кергәндә, бер килке ағай-эне изге түңәрәккә йыйылып өлгөргәйне инде. Көндәгесә, түр башында, үҙенең тирәсләп эшләнгән махсус креслоһында, боронғо япон императорылай иркен кирелеп, аҡ быймалы иҫһеҙ аяҡтарын өҫтәл аҫтына тәртәләй һуҙып, мөкиббән киткән Солтан ағайым иҙерәп ултыра. Унан ҡала өҫтәл тирәһен вағыраҡ мырҙалар һырыған. Ер иҙәнгә эре утын сәрпәкләп индереп һалғандар – мейестә шартлап ут яна. Көлдөксәлә, ҡоңғорт арыш һаламдары менән тырпайып, әле генә баҫҙан сығарылған бер күнәк бәрәңге көтә.

-- Йә, Мифтахитдин килде, башланыҡ! – Түҙемһеҙләнеп тыпырсынды мине күргән йәмәғәт.

-- Иң элек эште теүәлләйек, ҡустылар, -- тине ағайым. – Мифтахитдин, ҡайҙале, йәшел ҡумтаны елтерәт!

Мейес ҡашағаһына үрелеп, йәшелгә буялған, алыҫтан уҡ тәмәке еҫен аңҡытҡан ҙур посылка йәшниген төшөрҙөм. Ағайым, бөткөһөҙ ләззәтләнеп, фанир ҡапҡасын асты. Оҙонсалап ҡырҡылған бер шәлкем гәзит ҡағыҙы ташланы өҫтәлгә:

-- Ябырылығыҙ, егеттәр, бөтә мөрйәләрегеҙҙән йәлләмәй борлатығыҙ! Һатып алынмаған – үҙем сәсеп үҫтергән, үҙем киптереп төйгән төрөк тәмәкеһе!

Ауыҙ-морондарҙан минут эсендә ҡуйы төтөн борғолоп, өрлөк аҫтын ыҫлы болот ҡапланы. Ағайым, түшәмгә төбәлеп, хыял диңгеҙенә сумды. Йәшел ҡумта – уның ғорурлығы, күңел йыуатҡысы. Шаулы йәмәғәт кинәнеп таралғансы, асыҡ килеш, ошо табын уртаһында торасаҡ.

-- Мифтахитдин, мейес булған түгелме? Ҡуҙҙы усаҡҡа ышыр, -- тигәйне ағайым, тырышып, кәкре тәртишкә менән эш итергә керештем. Мейес ҡалағы тығылды, ут күршем Ғәббәс эргәмә баҫты. Икебеҙ тиң күнәктән берәр ҙур бәрәңге әләктереп, юғары күтәрҙек. Ағайым, ауыҙынан тәмәкеһен һалып, ҡалҡына биреп, бөтә иғтибарын ошо бүлбеләргә йүнәлтте. Һәр яҡлап күҙәмәләгәс, үлсәгәс:

-- Дауай, тәгәрләтегеҙ! – тип командирҙарса ҡул һелтәне. Бәрәңгеләрҙең ул шулай яраҡлыһын мейескә, яраҡһыҙын мөйөшкә ырғырттыртып ултырҙы. Мейес табаны буйҙан-буйға түшәлгәс, тимер ҡапҡасты ябып, урындыҡ аҫтынан инвалид арбаһының ватыҡ тәгәрмәстәрен, тимер-томор сығарҙыҡ. Сүкеш-саҡыш, майлы сепрәктәр менән ҡуша уларҙы тап ишектән ингән ерҙә сүмәләләй итеп өйҙөк -- йәнәһе бында ремонт өмәһе бара! Ысынында иһә ағайым ошо араларҙа дәүләтебеҙҙән бушлай яңы “Запорожец” машинаһы алырға тейеш булғанлыктан, ватыҡ арбаға ҡул да тейҙертмәй, беҙҙе үҙенә күңел асып, төн ҡыҫкартып ултырырға эйәләтә... Бына ул бармаҡ шартлатты, өҫтәлгә бер иле майланып бүрткән кәрт усмаһы ырғытты:

-- Бисмилла. Башланыҡ өмәне, ҡустылар!

-- Изге сәғәттә!

-- Хәйерле минутта!

Тәүге күлем уйында минең уң яҡ күршем отторҙо – “дурак” ҡалды. Бөтәбеҙ бергә һөләләйләп ҡысҡырҙыҡ, аяҡ типтек. Отолған мырҙа, мыштым ғына тороп китеп, мейес башына үрмәләне, ундағы күпкәк алюмин феләктән сәйгүнгә асы бал һөҙөп килтерҙе...

Күңелдәр мөйөшләнеп, ҡарайған эре шаҡмаҡтоҙ һипкән ҡайнар бәрәңгеләрҙе ҡаба-ҡаба, стакан күтәрәбеҙ:

-- Их, үҙебеҙҙең ошо кирамат шәп клубыбыҙ йәшәһен!

-- Йәннәт баҡсаһы!

Ҡулда кәрт, алда стакан, мейес башында феләк. Хозурлыҡты ер тетрәп тә ҡаҡшата алмаҫ кеүек...

Ошо тылсымлы минуттарҙың минутында, нескәлекле күңел ҡылдарын селпәрәмә килтереп, ишек ҡаты шаҡылды. Аласыҡҡа ағайымдың төпсөк малайы килеп инде:

-- Атай, һөйөнсө, һөйөнсө! Клубтың әртистәр биҙәнә торған бәләкәс бүлмәһе асылды!

-- Һәй сәбәкә малай, ҡотто осораһың икән! Һөйөнсөһөнә тараҡан бото! – тине ағайым.

-- Йәмилә еңгәйем менән Ғәзимә апайымдар клубтың шул бәләкәс бүлмәһендә репетиция үткәрә башланылар, вәт! Әллә ниндәй ағайҙар менән ҡосаҡлашып бейенеләр, үбештеләр, вәт!

Ике исемде ишеткәс, Ғәббәс күршем менән минең тамаҡҡа эҫе бәрәңге тығылды.

-- Һәй мәлғүн малай, юғал! – тип ҡул һелтәп өлгөрҙө ағайым.

-- Юғалмайым, ә кире клубҡа сабам!

Ғәббәс күршем менән мин, малай артынан елтерәп, шампанский шешәләренең бөкөләреләй атылдыҡ. Эй йүгерәбеҙ, һөрлөгөп тәгәрәй-тәгәрәй йүгерәбеҙ. Урам яҡлап клуб нигеҙенә дөһөрҙәп барып менгәнебеҙҙе, тәҙрә тәңгәлендә маңлайға маңлай төкөшкәнебеҙҙе һиҙмәй ҙә ҡалдыҡ. Эстән ҡороулы туҡыма үтә беҙгә сәйер хәрәкәттәр яһап сөңгөр-сөңгөр килгәндәре лә ҡыскырып көлгәндәре генә ишетелә. Улар көлгән һайын, йөрәгебеҙҙе ҡара ҡанға туҙҙырып, маңлайҙарҙы быялаға төйә-төйә, ыңҡылдашып алабыҙ.

-- Етте, хеүәтит, өҫтән етерлек көлдөләр! Ишектәрен ҡайырып инергә лә кәрәктәрен бирергә! – тип йоҙроҡ төйнәй ут күршем.

-- Сәстәрен беләккә урап, һөйрәкләп алып ҡайтырға! – тип аяҡ тибәм мин. Көкөрткә ышҡып аҙҙырылған шырпы кеүек ҡыҙышып, күгән һурырға етешәбеҙ. Шул саҡ минең йөрәк итен “Аҡъял батыр” әкиәтендәгеләй ас сәмреғош умырып алғандай булды:

-- Ғәббәс күрше, бөттөк! Һәләк булдым! Өйҙә минең кеше юҡ – бала ни хәлдә икән? – тип нигеҙҙән ырғып төштөм.

-- Уй бәпескәйем-бәпесем! Минең дә өйҙә бәпесем!.. – Икебеҙ тиң клуб мәхшәрен онотоп, ҡайтыу яғына дөндөк.

...Өй эсе болахәт, ҡаралтылар пыран-зыраң килтерелгән. Шкафтағы һауыт-һаба иҙәндә, ә иҙәндә аунар мөлкәт шкаф кәштәләрендә. Арыҫландай ата бесәйебеҙ иһә юлбалаҫҡа кәтүк итеп төрөлгән, бөтә көсөнә разбуйлап ята. Бисараны ҡойроғонан яҡты донъяға ылыҡтырып, шикле тынлыҡ ҡамап алған төпкө бүлмәгә үттем. Бисмиллаға муйынымды һоноуым булды, маңлайға кемдер бик елле итеп дағалы үксәһен ҡундырҙы. Күҙҙәремдән ике көлтә ут баҙлап, салҡан әйләнеп төштөм. Тағы ла мең бәләләрҙән йәнселергә әҙерләнеп, күҙ ҡырыйын йырсайтып ҡына үргә ҡараным һәм... ғәрлегемдән илап ебәрә яҙҙым. Хәйерһеҙ

малай! – минең эшкә кеймәле еҙ дағалы, тупаҫ күнле ботинкамды ҡайҙандыр соҡоп сығарып, ишек башына баулап аҫҡан имеш... ә үҙенән елдәр иҫкән. Киңәйтелеп ике мендәр һалынған диван-карауатта бисәкәйҙең туҡһан йәшлек һаңғырау ҡартәсәһе Лотфиә әбей ирендәрен “пөф-пөф!” өрҙөрөп ята. Минең һаҡһыҙ ҡағылыуҙан булһа кәрәк, уянып, ҡорошҡан ҡулдарын һуҙып ян-яғын һәрмәргә, ниҙер эҙләргә кереште.

-- Әбей, әбекәй, әйт әле тиҙерәк: ейәнең ҡайҙа һинең?

-- Ә, нимә?

-- Ғәлийән балаҡайым ҡайҙа?

-- Ә? Йомғағыммы? Йомғағым ошонда ине шикелле. Ғәлийән, балаҡайым, килсәле бында! Йомғағымды ҡайҙа иттең, сәсрәп китмәгере!

Ҡарсыҡтың ҡорош ҡулы осонан иҙәнгә һуҙылған еп буйынса карауат аҫтына дөбөрҙәп инеп киттем, ундағы бер-нисә быяла банканың аҫтын-өҫкә әйләндереп, бер нисәһен тирмән ташылай онтағас, ике усым менән тубыҡтарымдан ҡаҡ иҙәндә әллә ниткән ебешкәк сәйер таптар ҡалдыра-ҡалдыра, ҡараңғы мейес араһына имгәкләнем. Еп мине үрмәксе ауы баҫҡан утынағастар өҫтөнән үрмәләтеп, туп-тура көллө мейес эсенә индерҙе. Бер-нисә тапҡыр йүткереп, бер-нисә тапҡыр бышҡырғас, бүҫкәргән йомғаҡты тотҡан килеш мейес төбөндә бер ни белмәй кинәнеп йоҡлап ятҡан малайымды төтөн йотҡолоғонан һөйрәп алдым. Аталы-уллы сөскөрөшөп көлдөксәнән төшкәндә, өй эсен бисәмдең йән өшөтөкөс моңһоу тауышы иңрәтте:

-- Әсәкәйгенәм, ни күрәм? Был донъяға ни булған? Карауат аҫтына һыуытырға ғына ҡуйып торған вареньеларымды ауҙарғандар, ватҡандар, әйтәүергенәм! Уф Аллам, бөтә иҙәнгә тапап иҙгәндәр!.. Ғәлийән, балаҡайғынам, һинең эшеңме был, ҡайҙа һин?!

-- Әсәй, мин бында. Атайым менән бергә мейес эсенән сығып киләбеҙ! – тип ғорур һөрәнләне малай аҡтығы. Бисәм беҙгә күтәрелеп кенә ҡараны ла, һыны ҡатып, диванға аушарылды...

Иртәгәһен яңғыҙаҡ итеп ҡалдырылған түшәгемдә барлыҡ бисә-сәсә затын лағнәтләп, тунымдың тиҫкәреһен кейеп уяндым.

-- Йә мин, йә драмтүңәрәк – икеһенең бере! – Мәсьәләне ҡырт ҡуйҙым.

-- Йә мин һәм драмтүңәрәк, йә Солтан ағайыңдың һөрһөп бөткән эскелек аласығы! – Булды яуап һәм был уҡтай йәнемә килеп тейҙе:

-- Етте, бөгөндән башлап ул тарафҡа ике аяғыңдың береһен атламайһың. Мин һине битаңдап драмтүңәрәктә һикерәңләтер өсөн бисә итеп алмаған!

-- Ә мин һине асы бал мискәһе, кәрт ҡоҙғоно яһар өсөн бармаған!

-- Ҡара уны, терһәгеңде тешләрҙәй булырһың. Ир – баш, ҡатын муйын икәнде онотма! Аҫыл башым ҡайҙа китһәм дә юғалмаҫ!

Ошо киҫәтеүҙән йомшара төштө:

-- Һантый ғынам, ниңә ҡыҙып бараһың, кем һине баш түгел ти? Муйын булғаным өсөн әйтәм дә инде. Муйының итеп танығаң, мин борған яҡҡа ла бер әйләнеп ҡарар инең, исмаһам. Денең ҡатып, тыумаҫ борон ҡартаймаҫ инең...

-- Әһә, һинеңсә, мин инде ҡартайған булып сығам? Ярамай башлағанмын? Яр-рай, эс сереңде белдерҙең! – Елләнеп китеп, ултырғысты тибеп осорҙом. Дер-дер ҡалтырап, еҙ дағалы эш ботинкаларын аяҡҡа әләктерҙем. – Рәхмәт, бисә,

бөтәһе лә аңлашылды. Бына ни өсөн өйҙә ғәзиз балаңды, иреңде тилмертеп ҡалдырып, әллә кемдәр менән ҡосаҡлашып та үбешеп бейеп йөрөй икәнһең!

Йәмиләкәйемдең ҡапыл йөҙө һулыны, ирендәре ҡалтыраны.

-- Мифтахитдин, йәнем, ни һүҙең был? Ниңә киреғә һаплайһың? Нисек телең бара?

-- Үҙеңдән ишеткәнде әйтәм. Минең кеүек ҡартайғандар хәжәт түгелдер һиңә, тим. Аңлашылды! Бөттө! Минән йәшерәкте тапҡанһың!

-- Мифтахитдин, йәнем...

-- Бына тора өйөң, ана тора малың. Ҡамасауламайым. Китәм.

-- Мифтахитдин, туҡта! -- Өҙәләнеп, ҡапҡағаса йүгереп ҡалды Йәмиләм. Балаҡайымдың да, әсәһенең итәгенә йәбешеп, сеңләп илауы ишетелде. "Әнә шулай була ул, иҫеңә төшөрмөн әле. Бына хәҙер үк сәсеңде услап йолҡа-йолҡа урам буйлап артымдан һөйрәлмәһәңме, ҡарап тор, буду сәбәке!" – тип бисәмде эстән генә битәрләй-битәрләй, алдымды-артымды ҡарамай елтерәнем. Тиҙерәк-тиҙерәк әҙәм белмәҫ, ҡолаҡ ишетмәҫ яҡҡа олағып юғалғым килде. Ауылды сығып, бөгәлдәге йәшел болонлоҡҡа йығылғас ҡына, йөрәк саҡ ҡына урынына ултырып, башҡа уй килде: ниңә һаман Йәмиләм күренмәй әле, өҙәләнеп илай-илай артымдан ниңә өйгә өндәп йүгермәй? Ҡайҙа китеп барам мин? Кемгә? Күҙ төбәп инер кемем бар? -- Әҙәм балаһының дүрт яғы ҡибла булғанда ла ғаиләнән башҡа таяныр төйәге юҡ икән. Айныған күңел, һыҙлап-һыҙлап, арт яҡҡа тартты аяҡты. Ҡатыным, балам янына. Ләкин инде донъяһына бер төкөрөп сығып киткәс, бисәң шуға ризалығын күрһәткәс, нисек итеп кире әйләнеп ҡайтаһың? Үлгәндә лә ир – ирлеген итергә, баш иһә муйынды бороп йөрөтөргә тейеш. Маңлайҙы ташҡа ороп булһа ла, Йәмиләкәйемдең, ялынып-ялуарып, итәгемдән өйгә һөйрәүен сабыр көтөргә булдым. Теште ҡыҫып, Тирәкле ауылы янындағы нефть вышкаһы яғына ҡарай юл тоттом. Колхоздан алған хәләл отпускым тулғансы, ваҡытлыса ғына булһа ла шунда эшкә урынлашып торормон. Был хәл үҙе үк сәсе оҙон аҡылы ҡыҫҡаны шөйләҫ ҡалыпҡа ултыртыр. Ҡуҙға баҫҡан бесәй кеүек бейеп кенә йөрөр...

Буровойҙа мине мастерҙың бил тиңентен сисенеп ташлаған суйын тәнле ярҙамсыһы ҡаршыланы. Төбөнә туҙ ҡуйып төпсөнгәс, һынамаҡҡа өйрәнсек итеп алыныуым ихтималлығын белдерҙе. Тик мастер әлегә йомош менән Өфөлә -- иртәгәсә шуның ҡайтыуын көтөргә кәрәк икән. Киң күңелле хужалар булараҡ, тамағымды туйҙырҙылар ҙа палатка мөйөшөнән урын күрһәттеләр. Бөгөнгә ял итеп, буровой тирәһе менән таныша торорға ҡуштылар.

Бына палатка күләгәһенән алыҫтараҡ дөбөр-шатор ер кимергән вышкаға ҡарап ятам. Оҙаҡ ултырып ҡоңғортланып бешкән ҡылған араһы сейәһеләй йөҙҙәре ҡарағускыл янған ир-егеттәр, сатнау Ҡояш аҫтында, шыбыр тиргә батып эшләйҙәр. Йылмайғанда аҡ тештәре һиҙәп кеүек сағыла. Күҙҙәрендә ут яна. Моғайын, берәһе лә үҙен минең һымаҡ меҫкен итеп тоймайҙыр. Һә-ә-әй донъя, мин дә меҫкен түгел инем бит, үҙ көсөмдө ныҡ тойоп, дөңкөлдәтә баҫып йөрөй инем бит. Ни булды, юлымды кем бутаны? Ах был аласыҡ, ах хәйерһеҙ кәрт!

Кис булды, буровойҙа кешеләр алмашынды. Ҡунаҡсыл егеттәрҙең үлтереп ҡыҫтауын йыҡмаҫ өсөн генә, теләһәм-теләмәһәм дә, үҙемде көсләй-көсләй, йәнә аш-һыуҙарынан ауыҙ иттем. Ни эшләргә белмәй, унда һуғылып, бында ҡағылып йөрөгәс, палаткамда бөгәрләнеп йоҡларға яттым. Мейелә шаулап ҡан тибә,

ҡолаҡтар сыңлай, ят урында тынғы тапмай, әйләнәм дә тулғанам. Йөрәк башым һулығып-һулығып әсетә. Йәмиләкәйем, Ғәлийәнем, ниңә мин бында?!.

Түҙмәҫ, бына-бына килеп етер төҫлө ҡарлуғас ҡашҡайым. Әммә ҡараңғы төштө -- ул юҡ. Инде Ғәббәс күршене булһа ла илсе итеп ебәрер, ҡош-ҡорт йөрөгән төн үҙәгендә яңғыҙ-ярпы юлға сыҡмаҫ, тип һаман өмөт итәм – юҡ. Күкрәк тулып ҡабара үпкә һағышы...

Тышта йәштәр гармун уйнай, тыпыр-тыпыр бейейҙәр. Ҡайһылыр ауылға спектакль ҡуймаҡ барырға йыйыналар. Шат көлөүҙәре үҙебеҙҙең клубты, моғайын, ошо сәғәттә унда гөрләп барған репитицияны иҫкә төшөрә ләбоғаҙға килеп эҫе тулҡын ҡаҙала. Юҡ-юҡ, ҡайтмаясаҡмын! Көҙ етһен, ҡыш булһын – ирһеҙ йәшәп, үҙәгенә үтһен!

Көрһөнөп, урынымдан торҙом, егеттәрҙең береһенән ҡағыҙ-ҡәләм һорап алдым. Донъяһына үс итеп, хат яҙырға ултырҙым:

“Бисәкәй, бәхил бул! Мине эҙләп, аяҡ табандарыңды ҡабартып йөрөмә. Барыбер ярҙам итмәҫ. Сөнки мин бөгөн үҙем теләп бик секретный эшкә яҙылдым. Яңы уйлап табылған махсус буровойҙың бырау осона ултырып, ете ҡат ер аҫтына төшөп китәсәкмен. Ишетһен ҡолағың, баланы рәнйетмә! Иҫән булһам, ете айҙан һуң булһа ла ер йөҙөнә бер әйләнеп ҡайтырмын. Тик был хаҡта ләм-мим: юҡһа, ҙур дәүләт серен фашлағаның өсөн, ҡаты яуапҡа тарттырырҙар... Минһеҙ донъяның рәхәтен татып кинән!”

Конвертлап, марка баҫып, уйынға китеүсе йәштәр ҡулына тоторҙом. Иртән уны асып уҡығас, бисәнең йөҙө нисек үҙгәрәсәген, күҙҙәренән әсе йәштәр бытлығасағын төҫмөрләп, иркен тын алдым да ҡабат инеп яттым. “Инде үгеҙ үлгән, уртаҡ айырылған”, -- тип үҙемде ышандырып, күҙ йомдом. Тик йоҡо тигәнең энә күҙенә инеп боҫто...

Бына тышта ла шау-шоу баҫылды, донъя тәрән йоҡоға талды. Йөрәгемдең һандал һуғыуын тыңлай-тыңлай баш ҡынайым тубалдай булып ятҡанда, яҡында ғына ишетелгән, күкрәк төбөнән һулығып сыҡҡан ҡатын-ҡыҙ көлөүе һүрҙе йәнде.

-- Йәмиләкәйем, һинме был?! – Талпынып, ҡысҡырып уҡ ебәрҙем. Палатканың тәҙрә ҡорғанын һыпыра тартҡас, ошондағы ашнаҡсы йыуан ханымдың бер йәш кенә егет менән эре сирттереп үтеүен күрҙем...

Йөрәгем йыландан сағылғандай әсенеп, ботинкаларымды кейҙем. Йәмиләкәйем, берҙән-берем, ни хәлдә икәнһең был мәлдә? Ни ҡылдым мин, ни ҡылдым?! Ә иртәгә теге хатымды алғас?.. Әсәкәйгенәм, минме был?!.. – Тиҙ көндәрҙә нимә булырын күҙ алдыма килтерҙем: ирһеҙ ҡатынды шайтан ҡотортмай ҡалмаҫ... йомошо бары ла, юғы ла сәбәп табып күҙ һалыр. Бигерәк тә минең Йәмиләкәйем ише һылыу ҡатынға...

Дөрөҫөн генә әйткәндә, уфтаныу ғына түгел, ә башты тотоп үкереп иларлыҡ ине! Йәшермәйем, бер саҡ ҡыҙышҡан баш менән киҫкырын мин үҙем дә икенсе яҡ ут күршем Ғәҙиләгә, һыу һөлөгөләй тол ҡатынға, утын-фәләнең бармы, бесән-месәнең бөтмәнеме, ярҙам-маҙар кәрәкмәйме, ут күршем, тигән булып өлтөрәп барып кергәйнем. Ғәҙилә күршекәйем күп уйлап торманы: “Утын-бесәнемде ҡайғыртыр булғас, ниңә көндөҙ инмәнең, төн уртаһы еткәнен көттөң!” – тип тәртешкә менән ҡолаҡ төбөмә ин һалды ла сығарҙы, сығарыуын. Эйе... Тик бөтә тол ҡатындар ҙа шулай булып бөтһә икән... Тиҙерәк өйгә, өйгә!

Ҡайтып еткәнсе ете тирем һарҡылып, әлһерәп үк төшкәйнем. Әтәстәр, һуҙып ҡына, беренсе таң борғоһон тарта. Ҡайҙалыр урам буйында ҡаҙҙар ҡаңҡылдаша. Һиртмәле ҡоҙоҡтан һыу сумырып, эстәге ялҡынды бер аҙ баҫтырғас, һөйәүле баҫҡыстан өй башына үрмәләнем. Ҡыйыҡ ишеген һаҡ ябып, ҡасандыр үргә мендереп ташланған иҫке-моҫко балаҫ, тун ярпыларынан урын ҡоршаным да, арманһыҙ булып, телде арҡыры тешләп тәгәрәнем. Өйгә кем ингәне, сыҡҡаны хәҙер һыулыҡ тишеге аша ишетелеп-күренеп торғанлыҡтан, иртәнге изге сәғәттәрҙә хатымды алып уҡыясаҡ тол бисәкәйемдең әсе сеңләү ауаздарын ишетәсәгемә инанып...

...Күҙҙәремде асып ебәргәндә, өйҙә бисәмдән елдәр иҫкәйне инде. Берсә улым, берсә Лотфиә әбекәй генә инеп-сығып йөрөйҙәр.

-- Ҡәрсәй, ҡәрсәй, ниңә кисә атайым өйгә ҡайтманы? Соландағы кәштәлә уға тауыҡ бото ҡалдырҙыҡ, -- тип үҙәге өҙөлә балаҡайымдың. Солан мөхите уларҙан бушанған арала, һыулыҡ буйынан ғына кәштәгә һонолоп, ҡалъялы кәстрүлде эләктерҙем. Бот ҡына түгел, ярты тауыҡ булып сыҡты был. Ҡарҡ кикерә кинәнеп, һауыт-һабаһын кире аҫҡа этәрҙем. Сәсрәп киткер кәстрүл, ҡулымдан яңылыш ысҡынып, иҙән таҡтаһында яман шалтыраны.

-- Берес, берес! Ҡәрсәй, атайымдың итен бесәй урланы! – Соланда йәнә улғынамдың керпе башы күренде. Бисә тигәнемдең һаман моронламауына үтә үкенгәнлектән, шау-шоуға иғтибар итмәй, ҡабат әүен баҙарына йүнәлдем.

Өйлә еткәс кенә бисәм эштән ҡайтты, уға Ғәҙилә күршеһе тағылып килде. Ҡотосҡос шат тауыш менән иһаһайлап, тиҙҙән сәхнәгә ҡуйыласаҡ спектакль, шуға бөгөн үткәреләсәк тәүге яуаплы репетиция хаҡында ләстит һаттылар ҙа киттеләр. Шул арала Ҡояш арҡан буйы күтәрелеп, эҫе нурҙары миңә тамуҡ тыуҙырҙы. Эҫе ҡомда тыпырсынған балыҡтай, ауыҙымды бер асып, бер ябып, ниңә былтыр өй түбәһен тимер менән япҡаным өсөн, үҙ башыма әсе ләғнәт яуҙырып ятып ҡалдым. Ни өсөн, тигәндә, түбә утҡа ултыртылған таба кеүек ҡыҙышып, һуңғы соңҡай төктәремде ыҫлап ҡура башланы. Бая тумырған һимеҙ тауыҡ ғазаптарҙы икеләтә арттырҙы. Бер тамсы һыу хаҡына күҙемде соҡоп бирер хәлгә етештем. Әммә түбәнән ысҡыныу юлым ябылған – бисәм баҫҡысты ҡайҙалыр алып киткән. Өҫтәүенә, көллө әҙәмдән оят. Бер ҡат тирем өтөлөп төшһә лә, кискә тиклем түҙергә кәрәк. Эй Хоҙайым, тим, ете ҡат ер аҫтына төшһәм дә мең шөкөрана икән, тик былай тамуҡ киҫәүе генә итмәһәнсе!..

Боғаҙы салынған тауыҡтай, ни ҡылырға белмәй тыпырсынып ятҡанда, һыулыҡ тишегенән соландағы бер күнәк серек бәрәңгегә күҙ төштө. Ҡыуанысымдан һулығып илай-илай, мөрйә көргөгөс оҙон сымды яңы эшкә яраҡлаштырып, бүлбеләрҙе берәм-берәм сәнсеп өҫкә алырға, ике уртымды ҡабартып, һуттарын сәйнәп һурырға керештем...

Илле Алла, ҡырҡ мулла менән иҫән килеш кисте шулай еткереп, ҡараңғы төшөртөп, бисәм ҡабат урынына килтереп һөйәгән баҫҡыс буйынса яза төбәгемдән түбән һыпырылдым. Ҡаса-боҫа ҡоҙоҡтан бер күнәк һыуҙы һоҫоп алып бүҫкәрткәс, ерҙә лә йәннәт барлығына тамам инанып, ихаталағы киске дымлыҡҡа туйынған һалҡын бесәй үләненә ҡоланым. Тик ләззәтле мәл оҙаҡҡа һуҙылманы: Лотфиә әбейҙең ҡайтып китеүе, шуның артынса уҡ бисәм янына, ҡаса-боҫа, ниндәйҙер шомло “ҡараҡ бесәй” үрмәләүе салынды күҙгә. Көллө тәнем

эшләп торған ракторҙай ҡалтырап, өйгә яҡынланым. Аҡтыҡҡы ҡайтыуым булыр был, мин әйтәм, бөтәһе аңлашылды – ҡараңғыла ҡараҡ менән ҡауыша!..

Ә шулай ҙа аҙған хәләл ефетемдең нурлы йөҙөн һуңғы тапҡыр күреп китергә уҡталып, тәҙрә ҡапҡасын асам. Пәрҙәне ҡороп эш ҡылалар, ләғнәттәр! Әммә минең күҙҙәр салт: аҡ менән ҡараны айыра. Күләгәләренән үк күреп торам: өҫтәлгә шешә ҡуйып, ҡара-ҡаршы ултырышып алғандар. Эйе, көр ирҙәр тауышы! – Бисәм ниндәйҙер ят ир менән һайраша, суп та суп үбешә!.. Ҡолағымды быяла егенәрәк терәгәс, арт яғыма тәкмәсләп китә яҙҙым: мәлғүн бәндә Йәмиләмде, һөйөклө бисәкәйемде, ҡосаҡлап алып үҙ яғына ҡайыра. Тегеһе ҡарыша, бынығы маташа. Ә ҡулдарын, ҡулдарын ҡайҙа йүгертмәксе мөртәт... уф!

Солан ишеге артымдан сыйылданы, өй ишеге алдымдан иңрәп асылды. Тегеләр сөңгөрҙәгән төпкө бүлмәнекен дә шартлата тибеп осорҙом. Шул арала бисәкәйемде нескә биленән ҡармап өлгөргән оҙон мыйыҡлы шаҡшы, күренеүемдән йәшен һуҡҡандай тертләп, ауыҙын асҡан килеш шаҡ-ҡатып ҡалды.

-- Ух! Йәнеңде алыр-р-рмын! – тип яралы айыуҙай үкереп ебәреүемә, хәләлемде ҡосағынан ысҡындырып, карауат аҫтына тумарланы. Йыуан һирағынан эләктерҙем, дөбөрҙәтеп яҡтыға һөйрәп сығарҙым:

-- Баҫ, әҙәм аҡтығы, тура ҡара күҙҙәремә!

-- Уй йәнем, Мифтахитдинем, теймә уға! – тип йүгереп килеп еткәйне хәләл ефетем, ул да, тубырсыҡтай, бер ситкә сирғып китте.

-- Йә, мошенник, уҡы һуңғы доғаңды, йәнеңде аласаҡмын! – Мыйығынан тартып осаһына типмәксе булғайным, ни күрәм! – мыйыҡ килбәте тиреһе менән ҡуша йолҡоноп сыҡты ла мошеннигым Ғәҙилә ут күршем тауышы менән сәрелдәп көлдө – теге саҡта сикәмә тәртешкә ине һалып ебәргән Ғәҙилә үҙе!.. Сәйер асыштан теҙ быуындарым ҡалтырап, өҫтәл ҡырындағы ултырғыҫка сүгәләнем.. Нахаҡтан ҡул күтәреүемә үкенеп, йөрәк яныуын баҫтыртырға өҫтәлдәге ярымтулы стаканды усланым.

-- Һыу бит ул, Мифтахитдинкәйем, ябай һыу. Ысынын килтерәйем! – Атҡа атланғандай ҡыуанып, ҡауырһындай осоп сығып китте бисәкәй. Саҡ-саҡ һушыма ҡайтып, Ғәҙиләгә ябырылдым:

-- Ни ҡылығығыҙ был? Ниңә мине үҙ өйөмдә әҙәм хуры иттең, күршекәй?

-- Ah-ah, бынағайыш тамаша! Нишләп һине хур итәйек, ти? Үҙең бит ул, көтмәҫтән ҡайтып инеп, ҡотобоҙҙо бот буйына ебәрҙең. Беҙ бит бөгөн пьесалағы икебеҙҙең генә ролде ысынтылап, кейем кейеп һәм яҫанып өйрәнергә булғайныҡ. Үҙең драмтүңәрәктә ҡатнашыуҙан баш тартҡас, мыйыҡлы ир роленә кеше тапмай, миңә уйнарға тура килә... Йәмилә ни, өйҙә кеше юҡ, тип, клубҡа бармағайны...

-- Барһын ине, уны кем бәйләп тота? – тигән булдым, еңел һулап. Шул арала Йәмиләм пәйҙә булып, өҫтәлгә ысын “аҡбашлы”ны дөңкөлдәтеп ултыртты, үҙе ихлас йылмайҙы:

-- Әлеге лә баяғы шул француз пьесаһы инде. Әгәр ҙә ҡаршы килмәһәң, киләһе аҙнанан уҡ уйнарға иткәйнек...

-- Уйнағыҙ һуң, -- тинем.

-- Күршекәйем, әү, күршекәйем! Пьесалағы был көнсөл ир ролен, минән алып, әллә үҙеңә генә йөкмәтәйекме, күршекәйем? Әле генә һин ул ролде ҡайһылай ҙа шәп башҡарҙың!

-- Йөкмәтһәгеҙ йөкмәтерһегеҙ инде... – тигәйнем, шатланып ҡул сәпәкләнеләр. Йәмиләкәйем аҡҡош ҡанаттарылай аҡ беләктәрен муйыныма уралтты, танау осомдо яндырып үбеп алды:

-- Их, мин нидәй бәхетле! – тине. Ләкин уға ҡарағанда ла үҙем бәхетле инем – ете ҡат ер аҫтында өс көн томаланып ятҡандан һуң, ниһайәт, йылы өйөмдө, бисәмдең, баламдың яҡты йөҙөн күреп сикһеҙ бәхетле инем. Ошо ысын бәхет хаҡына сәкештерҙек тулы соҡортайҙарҙы.

-- Баштан уҡ шулай бер һүҙҙә генә булһаҡсы! – тип күкрәгемә һыйынды бисәм, икебеҙ генә ҡалғас. -- Теге көндә кәкре тырмаңды һөйрәп сығып киткәс, өҫтөмә Күк емерелеп төшкәндәй булды. Әллә ниндәй ер аҫты хаттары ебәреп ятаһың тағы...

-- Ай-һай, бик бошоноп бармағанһыңдыр әле, -- тигән булдым. – Эсеңдә йәнең булһа, өс көн буйы тынып ятмаҫ – артымдан һөрәнләр инең...

-- Эйе шул, урамға сығып, илгә исемеңде генә һатаһым ҡалған икән!

Ҡаҡ соңҡама аҡыл сүкеше һуҡты: өйҙән сүп сығармаҫ өсөн, ҡан йотоп түҙгән аҡҡошом!

Ә иртәгәһен ни булды, тиһегеҙме? Ғәббәс күршем менән әллә нисә көн буйы баш ҡалҡытмай тир түктек. Клуб сәхнәһенең серек иҙәндәрен алмаштырҙыҡ, декорациялар яһаныҡ, ишек-тәҙрәләрҙе нығыттыҡ. Спектакль булаһы кистә, икәүләшеп йүгереп барып, Солтан ағайымды креслоһы-ние менән ҡуша клубҡа күтәреп килтерҙек. Төрөк тәмәкеһе менән кәрт усмаһы мейес башында ятып ҡалды...

Спектакль хайран шәп барҙы. Бисәләребеҙ менән ҡуша тирләп-бешеп уйнаныҡ. Ғәббәс күршем шаршау асып-ябып торҙо, ә мин харап көнсөл ир ролен башҡарҙым. Солтан ағайым суфлер булып кинәндерҙе. Сәхнә һайын халыҡ түшәмде күтәрә яҙып ҡул сапты. Ошоно күргән әлеге зерә тәмәкесе-кәртсе әшнәләребеҙ ҙә, тамаша барышында уҡ берәм-берәм сәхнә артына уҙып, драмтүңәрәккә яҙылды. Шулайтып, серек ситән аласыҡҡа һөрөмлө һуҡмаҡ өҙөлдө.

Хәҙер беҙ, Солтан ағайым етәкселегендә, клубта бик ҙур яңы әҫәрҙе сәхнәгә ҡуйырға әҙерләнәбеҙ. Кис һайын, бөтә ауыл, тип әйтерлек, ирле-ҡатынлы, күршекүләнле күмәкләшеп репетицияға йөрөйбөҙ. Һәм, әмәлгә ҡалғандай, беребеҙҙең дә өйҙә әлегәсә буран уйнамай, ҡашығаяҡ шалтырамай. Башты – муйын, муйынды баш тыңлаһа, хәйерле була икән ул.

1980.

Нескәлек

Ҡаты холоҡло сатира журналының нескә күңелле штаттан тыш хәбәрсеһе, ә ҡалабыҙҙың нескә еп иләү фабрикаһының штаттағы механигы Ҡәҙермәтев көтмәгәндә бер һылыуға тилереп ғашиҡ булды. Йөрәге уттай яна, теле осонда

“ғүмерлеккә!” тип әтер һүҙе өҙөләм тип кенә тора, тик, аяныс! -- өҙөп әйтә генә алмай. Һылыуҡайҙы ситтән генә күҙәтеп йөрөп һөйә, ә тегеһе уны бар тип тә белмәй, буғай... Күңелдең иң нескә ҡылдарымы, ептәреме шартлап өҙөлдө тигәндә, ярай әле егетебеҙҙең йән дуҫы шул ҡыҙ менән бер сменала бер цехта эшләй икән: икеһен фәләнсә сәғәттә фәләнсә баҡсала күрештерергә, таныштырырға һүҙ бирҙе. Сер итеп кенә ул һылыуҙың, Ҡәҙермәтев фабрикаһы иләгән иң нескә ептәй, ҙтә нәҙек-нәҙберек күңеллелеген, көйәҙлеген киҫәтеп, Ҡәҙермәтев иптәшкә лә егет бәҫен һаҡларға – осрашыуға нескә заттың һушын алырлыҡ шау энәнән-ептән генә кейенеп килеүен шарт итеп ҡуйҙы. Ни эшләргә? Гардеробында ул тиклем үк иҫ китерлек кейем юҡ. Ә шуның арҡаһында ғына мөхәббәттән ҡолаҡ ҡаҡһа?!. Бына ниңә Ҡәҙермәтевтең дә күңелкәйе иң-иң нескә энә күҙәүенән ҙтәсәк аҫыл ептәй нескәргән мәл ине. Ғишыҡ тигән нескә нәмә хатта механик-сатириктарҙы ла саманан тыш нескәртеп ҡуя икән шул. Сәғәтенә ҡараны ла ҡала универмагына йүгерҙе, нәҙек-нәҙберек ҡулдар теккән иң нескә йөн туҡыма костюм һайлап алды. Касса менән хисаплашты. Йә Хоҙай, күрешергә бер һаплам ептән дә ҡыҫҡараҡ минуттар ҡалғанда, мораҙына иреште! Ошо мәлдә Ҡәҙермәтевтең ҡыуанысы кисә генә цехтарында үҙе көйләп ебәргән “заграничный” машинала иләнеп йомғаҡланған ептәй йоморо ине. Ләкин... ah, ошо хәтәр “ләкин”де!..

Күрешеү мәле орсоҡҡа уралған еп тиҙлегендә осланып килгәнлектән, иңендәге иҫке костюмды тиҙ генә “дипломатка”һына йәшереп, яңыһын кейеп алды ла сығып һыҙайым тигәйне, иңендәге ошо өр-яңы пинжәгенең дә, салбарының да иң-иң нескә яуаплылыҡлы урындарындағы төймә шәрифтаре... “шырт!” өҙөлөп төшмәһенме!.. Ҡалғандары ла, ағасында бешеүе үткән алмалай, бына-бына өҙөләм, тәгәрләп китәм-китәм тип кенә тора...

Күҙҙәре төймәләй түңәрәкләнеп аларған Ҡәҙермәтев, икешәр төймәне ике усына ултыртып, күңел сазының иң нескә еп-ҡылҡайын әрнетеп-тирбәлдертеп өндәште һатыусыға:

-- Әйтегеҙсе, был... был нимә?!.

-- Төймә, -- тине һатыусы ханым, үҙ сиратында ике күҙен төймәләндереп.

-- Ниңә улар минең ҡулда?

-- Үҙегеҙ һатып алғас ни, минең ҡулда булмаҫ инде! – Һулышынан шундай һалҡынлыҡ бәрелде – иң нескә ҡылды һуйыл менән һуғып өҙҙөләрме ни!

Рәнйетелгән Ҡәҙермәтев бүлек мөдирен таптыртып, һөжүм ҡеүәһен нығытмаҡҡа үҙенең штаттан тыш сатириклыҡ таныtмаһын да күрһәтергә уҡталғайны, һиҙгер мөдир үҙ күңеленең нескә ҡылдарын өҙҙөртмәй һаҡлап ҡалдырҙы – Ҡәҙермәтевте, ҡупшы ҡултыҡлап ҡына, костюмдар һәм пальтолар теҙелгән хәтәрлекле аранан алып китте:

-- Ҡәҙерле сатирик иптәш, төймәләргә үсегеп, беҙҙең ике аралағы нескә епте тоткан тәңгәлдән өҙөргә ашыҡмағыҙсы әле! Алйот ата-бабалар ғына бит хөлләләренә төймәне ул үҙе ярылып төшкәнсе түҙерлек тарамыш еп менән һипләп таҡҡандар. Ә хәҙерен – аҡыллы замана! Бына ҡарағыҙ: һәр төймәне ике бөртөк нескә еп кенә тота... Әлбиттә, һәр нәмә лә нескә урындан өҙөлә!

-- Ә ниңә ике еп кенә?

-- Уныһын, ҡустым, тегенселәрҙән һорағыҙ.

-- Ә ниңә шуны үҙегеҙ тегенселәргә әйтмәнегеҙ?

-- Беҙ әйтеүҙән ни фәтүә, улар ҡағыҙ инструкцияға таянғас. Йәнәһе һәр һатып алыусы һәр төймәне үҙенең тән ағзалары төрткән тәңгәлгә күсереп тағырға тейеш...

-- Төймәләрҙе шулай күсереп таҡҡас, фасон-масондан ни ҡала?..

-- Ә уныһы, ҡәҙерле Ҡәҙермәтев иптәш, икебеҙҙең хәсрәт түгел – фасонсылар баш ватыр нескә урын.

Мөхәббәте менән күрешергә ашҡыныусы Ҡәҙермәтев һуңғы минуттарын һанап ҡарышты:

-- Ләкин төймә тигәнегеҙ, нисек кенә тағылһа ла, иң кәмендә минең өйгә ҡайтып етергә тейеш!

-- Әлбиттә, әлбиттә! Усығыҙға йомоғоҙ ҙа алып ҡайтып еткерегеҙ. Тик ҡарағыҙ уны – юлда төшөрөп ҡалдырмағыҙ! – Мөдир ике күҙен төймәләндереп, Ҡәҙермәтевкә моңһоу тултырып ҡараны. – Зинһар, тим, артыҡ ярһымай ғына сыға күрегеҙ, баҫҡысты ипләп төшөгөҙ – усығыҙҙағыларҙан башҡа ла төймәләрегеҙҙең яҙмышын ҡайғыртығыҙ!

-- Минең үҙемдең яҙмышым хәл ителә! Беләһегеҙме, хәҙер үк миңә ҡайҙа барып етергә кәрәк?

-- Әлбиттә, әлбиттә! – нескә тойомлаусы бүлек мөдире уны оло тәҙрә ҡаршыһына килтереп, офоҡ ситендә һерәйеп ҡатҡан нәҙек мөрйәле бинаға төртөп күрһәтте. Ана тора кейем тегеү фабрикаһы, үҙегеҙ барып тылҡығыҙ. Зинһар, беҙҙең ялыуҙар кенәгәһен буяй күрмәгеҙ!

Ҡәҙермәтев мәсьәләне нескәлекле төшөнөп, сәғәтенә ҡараны ла бер ҡулына иҫке костюм йәшерелгән дипломатын, икенсеһенә төймәләрҙе услап тотоп, ах-вах килеп йүгерҙе, тегенселәр янына барып керҙе.

-- Был нимә?! – Һушын алмаҡ булды цех башлығының.

-- Төймә.

-- Ҡайҙа урынлашҡан, тим?

-- Бәй, һиммәтле усығыҙҙа.

-- Ләкин улар ҡайҙа теҙелеп торорға тейеш?!

Цех башлығы ғауғасының иңендәге йылҡылдауыҡ костюмға, ундағы төймә урындарындағы бушлыҡҡа күҙ һалды ла, әйтергә теле бармай, ялыусы ҡуйған мәсьәләнең нескәлеген төшөндө:

-- Ауыр хәлгә ҡалыуығыҙҙы аңлайым, ҡайғығыҙҙы уртаҡлашам, әммә һис тә ярҙам итә алмайым. Беләһегеҙме, ҡайһы заманда йәшәйбеҙ? Үкенескә ҡаршы, егерменсе быуат аҙағында шул... Йәғни бөтә эш алымдары ла юғары дәрәжә механикалаштырылған, цехта, хата фабрикала бер генә дана ла ҡул эһәһе юҡ... Ә автомат линиябыҙ ике бөртөк еп үткәреп һәлендереүҙән артығын һис тыңламай. Бер генә юл ҡала: бөтәһе лә өҙөлөп төшмәҫе элек ҡатынығыҙға ҡайтып йығылыу.

-- Ә минең ҡатыным юҡ.

-- Ҡыҙғаныс, бик ҡыҙғаныс. Яңы костюм кейергә теләһәгеҙ, кисекмәҫтән өйләнергә кәңәш итәм, егетем.

-- Дөрөҫ! Ләкин миңә хәҙер үк, ошо ҡылдан нескә, ҡылыстан үткер минуты-секундында үк, шул буласаҡ кәләшем эргәһенә ошо яңы костюмымдың төймәләрен элеп барырға кәрәк, беләһегеҙме шуны?! – Тыны быуылып һыҡтанды

яҙмышҡайы ысынлап та төймәләр аша үткәрелгән хәтәр нескә ике епкә эленеп бәүелгән ғашиҡ йән. – Ниңә ат күҙендәй төймәләрҙе үрмәксе ебе менән ике тапҡыр ғына үткәреп таҡтығыҙ?!

-- Аңлайым. “Нескә урындан өҙөлә” тип әйтмәксенегеҙ, -- тине цех башлығы тыныс ҡына. – Тик мәсьәлә нескәептә түгел, ә йыуан энәлә, туған.

-- ?! – Ҡәҙермәтев-механиктың ике күҙе аҡайҙы.

-- Бына ҡарағыҙ, -- тип аңлатты цех башлығы, тап Ҡәҙермәтев өҫтөндәгеләй һуңғы фасон йөн костюмға төймә ҡаҙап сытырҙаған машинаға төртөп күрһәтеп. – Нескә епте *лә* йыуанайтып булыр ине *лә ул*, туған, әгәр төймә тишегенә энә һыйһа...

-- Нескәрәген ҡуйығыҙ.

-- Ҡайҙан алайыҡ уны, энә заводынан фәҡәт йыуан энәләр сығҡас? – Ҡәҙермәтевте бынығы *ла* үҙ сиратында, еңенән тартып, тәҙрә эргәһенә килтерҙе, Күккә зәңгәр ебен һуҙған йыуан энәләй төтәп тороусы завод мөрйәһен күрһәтте:

-- Ана тора үҙе, шунан барып һорағыҙ: ниңә нескә энә сығармайҙар икән?

Ҡәҙермәтев сәғәтенә ҡарағайны, йөрәге төймәләй өҙөлөп төшә яҙҙы – һылыу ҡыҙ менән күрешеү мәле иң нескә урындан өҙөлгән... Үҙен тамам һәләк итешкән энәселәрҙең иң-иң нескә урындарына һуғылырға тип елләнеп барып кергәйне, ундағы башлыҡ кабинетының бикле ишеген нәфрәтләнеп тартҡанында һуңғы төймәләре шыртлап өҙөлдө *лә* пинжәк сабыуҙары асылды, салбары тубыҡтарынаса һыпырылды.

-- Хи-хи-хи... – Көлә-көлә ярҙамға килгән һылыу ханым хәйерһеҙ кейемде алйыу механик-сатириктың биленәсә күтәреште, булавкаһы менән нығытып та ҡуйҙы.

-- Бы*л* ишекте тиҙ генә аса алмаҫһығыҙ, директор кәңәшмәгә китте, -- тине у*л*.

-- Ғәфү итегеҙ, үҙегеҙ кем булаһығыҙ?

-- Энәләр цехы башлығы.

-- Әһә, эләктегеҙ! – Ҡәҙермәтев ҡулындағы төймә тишегенә бармаҡ төртөп һораны. – Ниңә ошо тишекте биш-алты ҡабат типсерлек нескә энә яһамайһығыҙ?

-- Яһаһаҡ, планды кем үтәр һуң? Беҙҙең продукция бит һан менән түгел, ә тонналар менән үлсәнә. Энә йыуан булған һайын, план тиҙерәк тула. Шуға күрә конструкторыбыҙ станоктарҙы йыуан энәгә көйләгән. Бына ниҙә у*л* мәсьәләнең нескәлеге.

-- Ә у*л* конструкторығыҙ әле ҡайҙа?

-- Фатирында.

-- Ә?! Ошо эш сәғәттәрендәме?

-- У*л* бит әсә кеше, бала бағып ултыра. Эштәрен дә өйҙә эшләп килтерә.

Ҡәҙермәтевтең һәүәҫкәр сатириктарға хас яҡшы сифаты бар ине: башлаған эшен аҙағынаса еткерә. Конструкторҙың фатирын эҙләп табып, ишеген астыртып керҙе тәки. Ҡаршыһындағы йәш ханымдың һылыулығынан шаңҡый биреп, иҫен йыя алмай торҙо. Ишек төбөндә, Ҡәҙермәтевтең балаҡтары эргәһендә йәшел һаплыҡай сүлмәгенең өҫтөнә бөксәйеп ултырып, ых-бых килеп, ике күҙе уттай янған ике йәшлек ҡара малай донъялағы иң мөһим хәжәтен башҡарып маташа ине. Инеүсе саҡ һушына килеп, конструкторбикәне шаңҡытырға кеҫәһендәге

штаттан тыш сатириклыҡ танытмаһын һурып ҡына сығарғайны, абау ғынам! – сүлмәк эйәһе көр ауаздан яугир “ура!” ҡысҡырҙы ла, ҡуш ҡуллап йәбешеп, ағай кешенең ике балағынан шытырҙатып аҫҡа тартты. Һуңғы нескә тотанаҡта саҡ эләгеп торған салбар, булавкаһы сирғып китеп, йәнә баяғы мәсхәрәле фажиға ҡабатланды. Шуның менән Ҡәҙермәтевтең ажары ла, абруйы ла юҡҡа сыҡты – ҡатын кеткелдәп көлдө.

-- Етте! Һеҙҙе илатырлыҡ итеп, журналға фельетон яҙам! – Ҡәҙермәтев, һыңар ҡулы менән салбар бөрмәһен бөрөп тотоп, малайҙарса иҙән буйлап мүкәйләне – сирғып киткән булавкаһын эҙләне. Табып алып, үҙен саҡ ипкә килтерҙе.

-- Етте, бөттө -- фельетон яҙасаҡмын!

-- Ә?! Фельетон? – Ханым иһә эшен бөтөрөп торған малайын тәрбиәләп маташты. – Бынауы “ура!” һөрәнләүсе баһадир тураһындамы? Яҙығыҙ, яҙығыҙ! Үҙебеҙҙең дә баштар зырлап әйләнә! Беләһегеҙме, икебеҙҙе тиң нисек бейетә был герой?

-- Унығыҙҙа эшем юҡ, -- тине Ҡәҙермәтев. – Мәгәр нескә энә-менә мәсьәләһе һеҙгә килеп төртөлдө. Эш урынында ла булмайһығыҙ икән.

-- Әһә, нескә энә мәсьәләһе генә борсоймо һеҙҙе? Улайһа, бер көнгә генә ошо геройым менән ултырып ҡарағыҙ.

-- Башымды әйләндермәгеҙ! Ниңә станоктарығыҙҙы ылғый йыуан энәгә көйләнегеҙ, тонналар биреп план тултырырғамы?!

Һылыу ханымдың күҙҙәренән йәш бытлыҡты:

-- Дөрөҫ, беләм, беҙҙең автомат линияһында хата киткән – нескә урынына йыуан итеп көйләнгән. Ләкин мин мәжбүр ителдем...

-- Кем ул мәжбүр итеүсе? Исем-фамилияһы?! – Ҡәҙермәтев шул яһилды нескә үңәсәненән тешләп сәйнәп ташларҙай ярһыны. -- Әйтегеҙ, мин ул бәндәнең тарамышынан еп һуҙам, энә күҙәүенән үткәрәм!

-- Бына ултыра ул, бына! – Ҡатын, бәхетле күҙ йәштәренә төйөлөп, малайҙың башынан һыйпаны. – Шул хәйерһеҙ линияның энәгә бәйле бер узелын ватман ҡағыҙына анауы өҫтәлдә һыҙғайным, бөтөрөп кенә барғанда... күҙ менән ҡаш араһында балконға сығып һыҙған. Киреллдертеп елләтергә ҡуйған зонтигымды алған да, “ура!” ҡысҡырып, телевизорҙағы Карлсондай осоп төшкән дә киткән... Тап ошоноң шойҡанында чертежда хата һыҙылған...

-- Ә баш конструктор, башҡа яуаплы иптәштәр ни ҡараған?

-- Улар ҙа, моғайын, минең һымаҡ уҡ өйҙәрендә бала бағып ултырған... Беҙҙең завод әһелдәре, беләһегеҙҙер, -- һылыу ханым ауыҙын мыҫҡыллы бүлтәйте, -- яңы цехҡа нигеҙ һалырҙан элек балалар яслеһе, балалар баҡсаһы төҙөтөргә онотҡандар... һантыйҙар.

Ҡәҙермәтев ҡатындың һуңғы һөйләмдәрен ҡолағына элмәне – үҙенә ҡалһа, мәсьәләнең нескә урынын тотто:

-- Завод директоры ниңә ҡылын да һелкетмәгән? “Герой”-ығыҙҙың тыумаҫы элек үк ясле төҙөтмәгәне өсөн ул яуап бирергә тейеш. Иң нескә урынынан энә осона элергә!

-- Их иптәш, иптәш, нескә урын һеҙ тигәнсә генә булһа икән ул... Ошо улыбыҙҙың атаһы, минең хәләл ефетем бит ул директор – бына ҡайҙа ул иң-иң

нескә урын... Бәлки, ҡәҙерле Ҡәҙермәтев, бынауы геройым хаҡына директорҙы кисереп, үҙегеҙгә кәрәкле нескәлектәрҙе ҡаланың Химия заводынан табырһығыҙ? Әйтәйек, ниңә төймәләр ҡойғанда тишектәрен киңерәк ҡалдырмайҙар?! Юҡ-юҡ, иң дөрөҫө ҡалабыҙҙың еп иләү фабрикаһын ҡыҙыу табаға баҫтырығыҙ – нескә епте тарамыштай ныҡ итеп иләмәйҙәр!..

Нескә күңелле һәүәҫкәр сатиригыбыҙ һылыу ҡатындың ҡойто хәлен үҙенекенән дә ҡыҙғанысыраҡ тойоп, ул әйткән юҫыҡҡа уҡталғайны ла ярты юлда туҡталды. Сөнки еп иләүсе лә бил тайҙыртыр – сифаты түбән вискоза ғәйепле, тир. Химия заводындағы вискозасылар насар иһә сеймал өсөн нефтселәргә һылтаныр, ә улары девон ҡатламына уҡ оҙатһа?.. Бына ҡайҙа ул нескәлек!

Ҡырт боролоп, һөйгәне менән күрешергә вәғәҙәләшкән, ләкин барып сыҡмаған баҡса алдына килде. Һәм тертләне. Әйтәйек, костюмының төймәләре ҡырылмай, бөгөн осрашҡан булһа... өйләнешһәләр... бала тыуһа... икенсе бер түрә иптәш үҙенең дә, уларҙың да ҡәҙерле улы өсөн алдан уҡ ясле-фәләп төҙөтөп ҡуйырға онотһа... уланды алмашлап өйҙә тәрбиәләргә тура килһә?.. Ҡәҙермәтев үҙ ғүмерендә иң яуаплы фельетонын яҙып ҡына ултырғанында шул “герой”ы эш бөлдөрөп, баш китерлек берәй хата ебәртһә?.. Бына ҡайҙа бит ул ҡот осҡос нескәлек! Ярай, Хоҙай аралаған!

Юҡ, донъялар баш-күҙ алғансы, түрә-ҡаралар кеше күңелендәге нескәлектәрҙе аңларҙай иҫ йыйғансы, һөйөшмәй һәм өйләнешмәй тороуыбыҙ хәйерле, тип һөҙөмтә яһаны Ҡәҙермәтев. Нескәлекле донъялағы йоморо ғына бер бәхет йомғағы ана шулай һүтелмәҫтән симәлде.

1980.

Ҡом һәм табан

Урындағы сауҙа селтәрендә электр изолентаһы һәм медицина лейкопластыре ҡапыл һатылып бөтөп, дефицитҡа әйләнеүен ишеткәс (уларҙы, боҙлауыҡта тайып йығылмаҫ өсөн, граждандар табандарына йәбештерә!) ҡала башҡармаһы рәйесе (йәғни “мэр” була инде!) Таймаҫ Бөркөтбаев иптәш ауыр көрһөнөп ҡуйҙы. Сөнки шул ябай ғына ике таҫмаға бында баш китерлек эштәр бәйле. Бәләкәйҙән бәлә сыға, тигәндәй, бәләкәй генә Төбәк ҡалаһының үҙенә күрә ҙур ғына бәләһе ул. Төптән уйлап ҡараһаң, бөтәһенә ата-бабалар ғәйепле: ниңә бында нигеҙләнергә инде! Урал армытының төньяҡ битләүендә ултырғас, ҡотоп һөстөрткән көллө боҙлауыҡ ҡалаға һуғылып үтә лә урамдарҙы себен тайып йығылырлыҡ быяла итеп ҡатыра. Был бәлә урам ҡыҙырған мирҙың ғына түгел, йылы кабинетындағы “мэр”ҙың да (ҡала башлығы Бөркөтбаев була инде!) тере теңкәһенә тейә. Сөнки кемдер табаны тайып йығыла ла аяҡ-ҡулы һына, ә Бөркөтбаев яуап бир. Аңышһыҙ граждан аяғы аҫтына ҡарамай тәкмәс ата ла муйынын йә ҡабырғаһын имгәтә, ә юғарынан һорау бер: ни ҡараған “мэр”?!. Эйе, һатыуҙа баяғы ике тауар бөттөмө, метеосводкаһыҙ уҡ, иртәгә нисә тиҫтә әрпештең юл түтәһен танауы менән һөрөүөн, йәки маңлайы урам сутырмағын тигеҙләрен көт тә тор. Ул ғына ла етмәһә, ҡаҡ елкәгә боҙлауыҡтай һыланырға аҡайкүҙ

дворник Һөймәнбайы һағалап тора бит әле! Күктән төшмәгән ике аяҡлы бәлә булды бынығы! Яҙлы-көҙлө баяғы ике нәмәгә ҡытлыҡ тыуҙымы, урамдарҙа себен тайып йығылыр ҡиәмәт көн килдеме, изолента һәм лейкопластырь етешмәүҙән ҡороғул ҡалған электрик һәм медиктарҙың әлеге шул таҫмаларҙы таптыртып теңкәгә тейеүҙәре етмәгән, теге Һөймәнбай Шоңҡаров тигән һөмһөҙ дворниктың илаһи илһамы ҡуҙғала ла шикәйәттәр яҙыу өсөн ҡулы ҡәләмгә үрелә. Йәнәһе ҡала гөрләп үҫә, ә әҙәм табандарына иғтибар кәмей. Йәғни “мәр”ыбыҙ һауаланып күккә баҡҡан, ә ергә эйелеп тә ҡарамай... Бына хәҙер ҙә, ҡала әле йоҡоһонан да уянмаған, ә Һөймәнбай, моғайын, һепертке-көрәк келәтендә мауығып ултырып нәүбәттәге шикәйәтнамәһен яҙа. Серелдәүек серәкәй генә тип ҡул һелтәп ҡара – үҙеңдән юғарыраҡҡа осоп ҡуныр, ҡуҙғалмаған креслоларҙы ҡуҙғалтыр. Серәкәй ул, бер ҡанығһа, һағыҙаҡтан яманыраҡ тейә йәнгә. Һәүетемсә тыныс ҡына ултыраһы креслоның ҡотон ебәрҙе Һөймәнбай...

Аэродромдай өҫтәлендә “донъя әһәмиәтендәге” эштәр – ҡул ҡуяһы ҡағыҙ тауы зарығып көтөп ятһа ла, “мәр”ыбыҙҙың ҡулына эш барманы – һөмһөҙ Һөймәнбай тураһындағы уйҙары бығауланы... Хәтерҙә: Бөркөтбаев рәйес итеп һайланған көндә үк өҫтәленә шул дворник Шоңҡаров Һөймәнбайҙың һөймәндәй оторо талапнамәһе төнгө ябалаҡтай осоп инеп ятты: “Етәкселек йоҡлай, ҡышҡылығын ҡайғыртмай. Кисекмәҫтән ҡалабыҙға фәләнсә йөк ҡом килтереп ҡалмаһаҡ, көҙгө-яҙлы боҙлауыҡтарҙа тайып йығылып, фәләнсә йөҙ кешенең, фәләнсә мең баш малдың аяҡ-ҡулы, ҡабырғалары һынасаҡ, баштары ярыласаҡ. Фәләнсә йөҙ машина түңкәреләсәк”... Әйтерһең, Бөркөтбаевҡа тиклем түрәләр булмаған – инде бөтәһен Бөркөтбаевҡа өйөргә, фәҡәт Таймаҫ Бөркөтбаевтан башлап ҡом ташытырға!.. Шул һөймәндең төрткөләүе арҡаһында бит йыл да, башҡа эштәре ҡырылып ятмағандай, илдән элек ҡом әҙерләү, урамдарға ҡом һиптертеү мәшәҡәттәрен көн элгәре ҡайғыртып, “мәр”ҙың ике сикәһендә нисәмә тиҫтә сәс бөртөгө ағарҙы...

Йылдар йүгереп, ҡалаға ҡом тейәгес һәм һиптерткес махсус машиналар ҡайтартылып, иркенерәк һуларға ла өлгөрмәне, Һөймәнбайҙың башына тағы тай типте: “Ҡом бик ҡиммәткә төшә, ғәмәлдә “мәр” урамдарҙы алтын менән түшәтә!” – Бына ниндәй этлекйән! Был юлы үҙенең кәкес-бөкөс ҡулдан сыймаҡлаған ялыунамәһен түгел, ә заманса ташҡа баҫҡан гәзит биттәренән хеҙмәтсәндәрҙең күҙҙәренә, ә “мәр”ҙың сей яраһына ҡом ҡойҙо.

Ҡомдай ваҡ-төйәк юҡ-барға күҙе тоноп, мәсьәләгә дәүләт юғарылығынан ҡарай белмәгән Һөймәнсене “мәр” үҙенең кабинетына саҡыртты. Сеймәлгән мейе юлаҡтарын туралап, аҡылға ултыртырға. Алйып йөрөмәһен өсөн. Энә осондай ҡом бөртөгөнә ымһынып, донъяла дәү күбәташтар ҙа барлығын онотмаһын. Һөймәнбайҙан былайыраҡ аҡыл эйәләренең был тәңгәлдә ең һыҙғанып эшләүен, урамдарҙағы күкбоҙҙо ут-ялҡынлы комбайн ярҙамында иретә барып, ыңғайында түтәгә ҡомдо наждак һымаҡ йәбештереп китеү әмәлен уйлап табыуҙарын кино таҫмаһынан аҡ экранға мөһөрләтеп күрһәттерҙе. Һөймәнбай иптәш әгәр үҙенең һепертке-көрәк келәтендәге урынын ғына белеп, яман аттай сапсынмай, үҙен ипле генә тотһа, етәкселек тәғәрмәсенә һөймәнен арҡыры тыҡмаһа, яҡындағы киләсәктә уны шул аҡыллы тимер айғырҙың эйәренә ултыртасағын тумбытты.

Шуның менән мәсьәләнең көн тәртибенән алынасағына, йәне тынысланасағына өмөт ҙур ине. Ләкин...

-- Ә ул аҡыллы айғырығыҙҙың ал яғынан тәүлегенә нисә тонна яғылыҡ матдә кереп, арт яғынан күпме кубометр ҡара төтөн урғыласағын иҫәпләп сығарҙығыҙмы? Юҡ, Бөркөтбаев иптәш, бөркөттәрсә түгел был! – Һөймәнбай һануз мәсьәләгә үҙ һөймәнен ҡыҫтырҙы...

Бына бөгөн дә рейес, әйтерһең, ҡуҙ өҫтөндә ултыра, нәүбәттәге һөймән этлеген көтә...

Ҡунаҡсалағы тауыҡтарҙай теҙелешкән биш телефон аппараты араһынан әтәс кикерегеләй сөм-ҡыҙылы ҡолаҡ ярып шылтыраны, баш ҡалалағы олораҡ етәксенең ҡырыҫ тауышы яңғыраны:

-- Йә, Таймаҫ, ни яңылыҡ менән шатландыраһың? Тайып йығылманыңмы әле?

-- Боҙлауыҡ... – "Мэр"ҙың теле тотлоҡто.

-- Бынығы яңылыҡ түгел!

-- Халыҡ тая... Табандарға арҡыс-торҡос йәбештерергә изолента менән лейкопластырь етешмәй. Юғарынан ярҙам кәрәк...

-- Түбәнгәрәк эйелеп ҡарамайһыңмы? Әллә башың урынында кәбеҫтә күсәнеме?

-- Баш бар ҙа ул...

-- Булғас, стратегик пландарыңды еткер, ҡыҫҡараҡ!

Бөркөтбаев, ҡабаланып, ҡыҙыл тышлы ҡалын папкаһын асты, кәрәкле ҡағыҙын алды:

-- Ҡыҫҡараҡ әйткәндә, ул түбәндәгеләрҙән ғибәрәт: 1. Ҡаланың үҙәк урамдары түтәһен көслө электр ярҙамында асфальт аҫтынан йылытып боҙлауыҡты юҡ итеү; 2. Йылытылмаған юлдарҙа тайып йығылмаҫ өсөн, ҡәҙерле граждандарыбыҙҙың һәр береһен табанға һөртмәле елемле ҡом һалынған шәхси пакеттар менән тәьминәтләү...

-- Шунан?! – Етәксенең тауышы йәшендәй күкрәне.

-- Шунан ни... беҙҙең Төбәк бюджетына йоморо ғына өҫтәлмә сумма бүлеү йәғни... баяғыларға етерлек итеп...

-- Сумма һорарҙан элек, үҙеңдең ҡул аҫтыңдағы белгес менән кәңәшләшеп ҡараныңмы?

-- Ғәфү итегеҙ, ҡайһы белгес?

-- Бәй, әллә ҡаланда Һөймәнбай Шоңҡаров тигән шундай ҙур белгес барын да белмәйһеңме? Саҡыртып алып һөйләш, уның әүҙемәл диплом эше менән таныш! – Ошо урында өҙөлдө баҡыр сым күкрәүе. "Мэр"ҙың сәстәре үрә торҙо: һепертке-көрәк эйәһе һәм... "диплом эше"! Баҡһаң, бәләле был Һөймәнбай, һөймәненә ышыҡланып, ҡаш менән күҙ араһында вуздың химия факультетын ситтән тороп тамамлаған, ҡышҡы аяҡ кейемдәре өсөн таймаҫ синтетик табанды ла диплом эше итеп яҡлап өлгөргән... Әле килеп, Төбәктең аяҡ кейемдәре фабрикаһында шул ҡытыршы табандарҙы ғәмәлләштереү йәһәтенән ҡырҡышып йөрөй...

Ошоғаса ҡотһоҙ ҡағыҙҙары аша ғына белгән Һөймәнбай Шоңҡаровтың, ҡултығына күн тышлы папкаһын ҡыҫтырып, эксперимент үткәрергә ҡала

бюджетынан ярҙам ныҡып интектереүен һорашып ишеткәс, “мэр”ҙың күҙ алдары ҡараңғыланды: был ни хәл?! Ҡайҙан шытҡан алхимик?! Дәүләт аҡсаһын табан аҫтына һалып тапатырғамы?! Кемдәргәлер эксперимент, ә миңә экскримент, тфү! Бик шәп булһалар, Госплан аша үткәртеп, юғарынан күрһәтмә бирҙертһендәр! Йыл аҙағында минән табанды түгел, ә юғарынан төшөрөлгән планды һораясаҡтар! Их, пенсияға ҡалған һуңғы ғүмерҙе лә тыныс ҡына ултырып үткәрергә бирмәйҙәр!

Телефондарҙың тағы береһе йәнде өҙгөс хәбәр һалып шылтыраны: “ЧП”! Дворниктарҙың береһе, граждандарҙан элек үҙе тайып йығылып, түбә ҡапҡасын күсерткән...

-- Кем? Һөймәнбай Шоңҡаровмы? – Мәсьәләнең көтмәгәнсә йәһәт теүәлләнерен өмөт итеп, “мэр”ҙың һулышы ҡысылды.

-- Юҡ, башҡа берәү.

-- Их-ма! – Телефон трубкаһы кире тәгәрәне. – Ике аяҡлы ҡаза булды был Һөймәнбай Шоңҡаров!.. Көт тә тор: күҙ менән ҡаш араһында һөмөрәйеп килеп инер!

Шуны иҫбатлағандай, ишектән Һөймәнбай Шоңҡаров үҙе күренде – ысын ғалим ҡиәфәтле лә имеш... Яҙыулы ҡағыҙ ярпыһын болғай-болғай, тура түргә ябырылды:

-- Таймаҫ Бөркөтбаев иптәш, һаңдарға иғтибар итегеҙ, һаңдарға! Ғәжәп һаңдар! Кешеләрҙең дә, машиналарҙың да табандарын таймай торған яһаһаҡ, ҡом бөтөнләй кәрәкмәҫ! Күпме фонд янға ҡалыр! Урамдарҙа саң кәмер, нисәмә тиҫтә машина, эш ҡулдары бушаныр! Ә быны бөтә ил күләмендә иҫәпләп сығарғанда...

-- Йә, шунан?

-- Шунан ни, һис кем тайып йығылмай, автобустар ҙа бер урында ғыжылдашып ултырмай.

“Мэр” Һөймәнбай Шоңҡаровты бер ҡарауҙан аңланы. Ҡағыҙын ҡулынан алып, ҡатырға тышлы ҡалын папкаға текте. Еңел һулап, аяғөҫтө тороп, ҡуш ҡуллап ҡулын ҡыҫты:

-- Маладис, изге ынтылышың тарихҡа керҙе, юғалмаҫ. Хәҙергеләр аңламаһа, килер быуындар аңлар. Ә бөгөн баш ватмайыҡ, халыҡ менән дуҫтарса килешеп йәшәйек. Мә, дуҫ кеше! -- Өҫтәл тартмаһынан алып, уҙамандың ике ҡулына ике дефицит тотторҙо – изолента менән лейкопластырь. – Һеҙ уйлап сығарып ҡаңғыртҡан ҡытыршы табан түгел был -- халыҡ үҙе ҡулланған иң йәтеш сара. Бейек тупһаларҙан менгәндә тайып йығылмаҫ өсөн, табандарығыҙға арҡыс-торҡос йәбештереп алығыҙ. Бына тап минең кеүек. – Креслоһына әүшәрелеп, табандарын күтәреп күрһәтте. – Беҙгә генә эшләп бөтөрөргә тимәгән – беҙҙән һуңғыларға ла ҡалһын. Бөркөт менән шоңҡар кеүек бер ҡор булып талпынһаҡ, икебеҙ тиң таймай ғына пенсияға тиклем барып етербеҙ, аҡһаҡалдар булырбыҙ!

Һөймәнбай өндәшмәне. “Мэр” услатҡан түңәрәктәрҙе өҫтәленә бираҡтырып, сығырға ыңғайланы. Тупһаны ашҡанда ҡапыл боролоп ҡарап, һөймән осон ҡаҙағандай киҫәтте:

-- Ә шулай ҙа һеҙҙең ҡомо койолған заман үтә, минең таймаҫ табан заманы етә!

1980.

Ҡөҙрәт вулканы

Ҡөҙрәт уның исеме. Исеменә тура килә есеме.

Ни өсөн, тиһегеҙме?

Үҙ вулканын аттырғаны өсөн. Эйе-эйе, Ҡөҙрәт вулканын. Алыҫ Сахалин йәки Курил утрауҙарында түгел, ә тыуған төйәгендә. Ҡаланың үҙәк майҙаны уртаһында. Шул тиклем дә ниндәй ҡөҙрәт эйәһе ул, тиһегеҙме? Күңелегеҙ ҡытыҡланмаһын өсөн, ҡиәфәтен тасуир ҡылып бирәйем.

Тәгәрмәстәй түп-түңәрәк ирекәй ул Ҡөҙрәтебеҙ. Йәғни алдан – ҡап ҡорһағы, арттан ултырмаҡлы ҡалҡыу ҡуш “мендәр”е үҫкән убалай өрөлөп. Күкрәк – тәгәрмәстең туғыны. Ике бөйөр тәңгәле иһә ҡара-ҡаршы ҡауыштырып түңкәрелгән ҡоштабаҡ. Күңел донъяһы ла тымыҡ күлдәй теүәл-түңәрәк уның. Сөнки тәбиғәте шундай – арҙаҡлы.

Ҡала буйлап атлағанығыҙҙа суйын ҡапҡаслы түңәрәк ҡоҙоҡтар тәңгәлендә ваҡыт-ваҡыт талғын ғына дөһөрҙәү-геүләү йәки шыжылдау ишеткәнегеҙ барҙыр? Заманабыҙҙың йәшәйеш тамырҙары – тулыш торбалар улар, шуларҙың һулҡылдап тибеше. Завод-фабрикаларҙың, зиннәтле һарайҙарҙың, үҙебеҙ йәшәгән торлаҡ йорттарҙың тере кендектәре тоташҡан урын. Шул кендек өҙөлдөмө, ҡайҙа ла булһа бер төбәк йә йәмәғәт ут-һыуһыҙ ҡала, йәиһә, киреһенсә, утҡа-һыуға күмелә. Ҡыҫҡа ғына әйткәндә, тормош пульсе болара. Ҡөҙрәт бына шул мөхәддәс кендектең мәңге тоташ булыуын, һулҡылдап тибеүен ҡурсалаусы эшем эйәһе бригадир, ватылмаҫ элек йүнәтеүсе “ремонтир”.

Әллә шуғамы икән, иллә дуҫ-иш-тамырҙары күп уның, Ҡөҙрәттең. Шуның менән ҡөҙрәтле. Ҡулындағы бармағы һайын етмеш ете дуҫ-иш тә таныш, яҡын-белеш. Бармаҡтарының береһен генә һелкетһә лә, етмеш ете ектән кемдәрҙер елтерәп килеп етә, Ҡөҙрәт ымын өлтөрәп көтә.

Бармаҡ һелкетмәгәндә лә ҡырмыҫҡалай мыжғып йөрөй бит улар, бәҫле дуҫ-иш-тамырҙар. Һәр береһендә ҡармауыс-ҡул йәбе – икешәр, ҡул бармаҡтары бишәр. Ҡөҙрәтте тырнап-тартҡылай башлаһалар, ер аҫтында кендек һәрмәп һуҡыр сыҫкандай соҡсонорға форсат ҡайҙа!

Береһенә түбә ябырға шып-шыма ҡалай кәрәк.

Икенсеһе баҡсаһындағы ҡоҙоғона бетон тирәстәр һорай.

Өсөнсөһө һыу үткәргес торба-торпо тамшана.

Дүртенсеһе ҡыҙыл кирбес гараж бурарға самалай.

Бишенсеһенә бер нәмә лә кәрәкмәй, тик бер-ике йөк асфальт менән цемент ҡына бирә тор. Ниңә бирмәҫкә, өлтөрәүек дуҫ-иштәрҙең һауаптарын алмаҫҡа ла үҙең һауаплы булмаҫҡа?! Ер аҫтында торбаланып ятып серей күпме мал!.. Ер өҫтөндә елле дуҫтар ҡулына йомарланһын – күңелдәр ҡомарланһын! Бына һеҙгә игелекле Ҡөҙрәтбайҙың һул ҡулындағы биш бармаҡ йомарт һелкенде, баяғы ер аҫтына керергә тейешле тимер-томор, кирбес-мирбес дәүләтебеҙ келәтенән “шалт!” – “һул”ға ҡарай аяҡланды ла осто. Ҡөҙрәт ҡайһындай һауаплы, арҙаҡлы!

Инде уң ҡул дуҫ-иштәр, таныш-белештәр арҙаҡланып күҙ төбәп килеп етә. Ҡөҙрәт уҙаман уларҙы, уң ҡулын һелтәп кенә, ауыҙлыҡһыҙ айғырға атландыра – баяғы һул ҡул бармаҡтарының игелеген күреп киткән йән дуҫтарына ебәрә, ҡулға ҡул тоташтыра. Баҡһаң, уларында ла шул уҡ дәүләт келәте, усты уска ышҡып дуҫлашыу һәләте. Аҫыл малдар күлкеп-күлкеп һул ҡулдағы дуҫ-иштәрҙән -- уң ҡулдағы әшнәләрҙең, ә уларҙан Ҡөҙрәттең үҙенең кәкре бармаҡлы устарына ултыра ла келтерҙәп “һул”ға оса.

Ҡөҙрәттән шыма ҡалай шылдырып киткән – промтауарҙар кибетендә мөдир икән, прилавка аҫтына аҫыл мал өйгән.

Ҡоҙоғо өсөн “һул”ға ҡарай бетон тирәстәр тәгәрләткән ағай-эне – февралдән үк теплицала йәш ҡыяр өлгөртөүсе.

Торба-торпо һәрмәп тайған уҙаман – румын гарнитурҙарына юл аса икән һаман.

Машинаға ҡайнар асфальт артып һыпыртҡан өлгөр – күҙ асып йомғансы гараж өлгөртөү ҡеүәһенә эйәлер.

Ҡузлаһына ҡыҙыл кирбес өйөп эҙ һеперткән мыҡты, ай-һай, майлы бөйөр булып сыҡты: ҡаҙы-ялылар менән һуҡты ла йыҡты. Бына һеҙгә һелкенде тағы ла биш бармаҡ, йәмғеһе баяғы ун бармаҡлы ике ҡул. Дәүләтебеҙ менән сикһеҙ ҡеүәтле, киң ҡоласлы дуҫлыҡ ҡулы, Ҡөҙрәт ҡулы! Бәй, дәүләт келәткәйе барҙа Ҡөҙрөт йомарт булмайынса кем булһын?!

Ана шулай йырлай-йырлай, майлаған тәгәрмәстәй, тәгәрләп кенә бара ине Ҡөҙрәттең ҡөҙрәтле көндәре. Һил ине донъялары. Ун бармаҡлы йомарт ҡуш ҡулын алпауытса артҡа олпат ҡайырып, сәмле үҙәк төбөнән өҙөлдәп кенә көйләп, ҡайтып бара ине Ҡөҙрәт-арҙаҡлы. Тағы ла нисәмә-нисә ҡулды ҡулға тоташтырғанын, был донъяға күпме игелек арттырғанын самалап, йөрәккәйе ләбәр-ләбәр талпынып тибә ине. Ялтыр штиблет кейгән ҡупшы аяҡтары, ҡаҙерле уҡыусыҡайым, тап һеҙҙең менән беҙ торған билдәле туғыҙ ҡатлы йорттоң кендеге тоташҡан ер аҫты тәңгәленә тиңәлеп килә ине. Киске сәғәт теүәл алты ла ун минутын һуҡҡайны. Иҫегеҙҙәме, тап шул тарихи мәлкәйҙәрҙә тап һеҙҙең менән беҙ йәшәгән туғыҙ ҡатлы йорт подвалына күңелдәрҙе болғатҡыс һәм уҡшытҡыс туфан ҡалҡып, фатирҙарҙың “аҡҡош” сүлмәкле хәжәтхана түрҙәренә йән тетрәткес шомло “зәхмәт-зат” ҡойтоһо урғылды. Нимә тығып туҡтатырға саралар таба алмай, ауыҙҙарға бармаҡты ҡабып ҡаттыҡ. Тап шул ҡөҙрәтле мәлдә, күңелкәйе тулыр-тулмаҫ өҙләп кенә, майҙан аша Ҡөҙрәт ҡайтып бара ине. Сетерекле бүлкелдәгән суйын ҡапҡас тәңгәлендә аҙымын аҡрынайтып, донъяһы иң теүәл йәндәй йылмайҙы. Былтыр бында, тап ошонда, кендек ямарға килтертелгән нисәмә ҡорос торба менән бетон тирәсте фәләп яҡтың фәләндәренең шыма устарына йомдортоп, фәләп-төгән туғандарҙың күңелкәйен иреткәйнем бит әле, тип кинәнеп иҫләгәндер, моғайын. Бүлкелдәүҙең саяланыуын абайлап, бер мәлгә генә беҙҙе ләә иҫкә алғандыр. Тик иҫе китмәгәндер: беренсе генә тапҡыр түгел, меңенсе тапҡыр һыналған билдәле хәл – торбалар менән тирәстәр беҙҙә, ғәзиз совет илендә, бишләтә артыҡ ныҡлыҡ менән эшләнә, туҙҙы-бөттө тигәс тә, бүлкелдәй башлағас та, тағы биш йыл буйы һулҡылдап түҙә. Сөнки серек капитал иленеке түгел – хәләл үҙебеҙҙеке! Түҙегеҙ, ғәзиздәрем, түҙегеҙ – үҙебеҙҙеке бит һеҙ!..

Тап шул мәлдә уҙамандың аяҡ астында бүлкелдәү томаланып, дөһөр-шатор итеп шаулау, артынса уҡ аждаһа-йыландай зәһәр ышылдау асфальт астын тетрәтте. Әммә баллы хыялдарҙан мәлйерәгән Көҙрәт иғтибар итмәне, сөнки илаһи ирәүәнлек – бөркөт ҡанаттарылай киң йәйелгән ике ҡулы тирәһендә баяғы дуҫ-иштәрҙең, туған-тыумасаларҙың, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарҙың мөләйемләнгән түп-түңәрәк, ҡәнәғәт йөҙҙәре һүрәтләнеп, татлы хистән эс-бауырын “сем!” иттереп, рәхәтләндереп ебәрҙе. Ысынлап та, ҡайһындай ҙа игелекле ул, ҡөҙрәтле ул! Ҡәнәғәтлек сәме ирҙең нескә мейе юлаҡтарын һулҡылдатып, таңғы шифалы елдәй ҡытыҡлап үтте:

Вулкандарҙы бөрөп ҡулда тотам,
Ҡулда ҡөҙрәт, дуҫтар барында!

Йыры менән ҡуша үҙе лә зәңгәр күккә осоп китерҙәй талпынып, йылтыр штиблетлы һул аяғы аңғармаҫтан түңәрәк ҡоҙоҡ ҡапҡасына баҫҡайны, шул урында ете ҡат ер йәһәндәмгә ишерелеп, дөһөр-шатор итеп вулкан атылды – Көҙрәт вулканы! Йылтыр штиблеттың суртандай башы, эсендәге игелекле биш бармағы менән ҡуша суйын ҡапҡас менән бергә умырылып, әле генә Көҙрәт бағып хозурланған зәңгәр күккә сорғолдо ла әллә ҡайҙа йорттар башына олаҡты, ер асҡынан тын алғыһыҙ зәһәр туфан ағылды...

Көҙрәтме? Больницанан ямалып сыҡты Көҙрәт. Дуҫ-иштәре арҡаһында “йыйын юҡ-бар” бәләләрҙән, тел-тештән дә араланды. Үҙен хатта йыйылышта президиумға ла һайлағандар, тинеләр. Булһа булыр, һауаплы шул...

Илдә яңы елдәр иҫеп, иҫке-миҫкене осортоп, заманалар үҙгәрһә лә, сатанлай-туйтаңлай, әлегәсә игелекле шул тирәлә уралыпмы-уралыуы – дуҫ-иш күңелен күрергә тырышыуы. Йәнәһе, йәмәғәт өсөн өҙҙөрткән аяҡ бармаҡтары йәл түгел – ил хаҡына хатта ҡуш ҡулындағы ун бармағы ла... дәүләт келәте генә һау булһын. Был заманда тик бер генә хәүеф бар: вулкан атылғандағылай, бәгзеләрҙең урындарынан башкөлләй осҡан сағы. Көҙрәтебеҙ ҙә, тибеҙ, вулканһыҙ ҙа ҡубынып, һәр бармағы һайын бер йыл ураҙа тотоп ултырмаға рәшәткәле ҡаҙна йортона ҡапмаһа ярар ине...

1988.

Өлгөрлөк

Ҡарауылсы Малтабар ағай көтмәгәндә өлгөрләнеп өлгөрҙө үҙгәртеп ҡороу касафаты тап өлгөрлөк талап иткән был көҙҙә. Тормош үҙе өлгөрттө. Сөнки оло түтә юлдан үткән-һүткән ылаулылар уның ҡарауыл өшәләгенә һуғыла, күҙ ҡараһын талдырып ҡурсаған мең тонналы кәбеҫтә тауы итәгенә арҡа терәп ултырып, ҡарауылдың таш бәғерен иретергә тотона:

-- Күсәндәрҙе йыйып өйгәнһегеҙ ҙә ул... ҡайҙа һеҙҙең өлгөрлөк?! Үҙгәртеп ҡороу заманында ла үҙгәрмәй, ҡала халҡына еткермәй, кәбеҫтәне кәбәндә күмһетәһегеҙ!

-- Әүәлгеләй, аҡ себендәр осканын, арт һынығыҙ ҡарға боҙланып ҡатҡанын көтәһегеҙме?

-- Тауыңдағы дейеү баштарын тәгәрләтсе багажникка, ағаҡай! Бер урындан икенсеһенә күскән күсәндән күс иҫәбе кәмеңәс, ә кеҫәңә көмөш тәңкә тирелер!

Ҡыштың ҡулы шаҡырҙатҡыс ҡырауы менән ҡолаҡ суҡтарын ҡармап, күләүектәр күҙенә боҙ шекәрәһе тартылғас, ылауланған өлгөрмәндәр ҡарыулығы ҡарлауҙай ҡырҙы йәнде:

-- Уян, ойоған торғонлоҡ! Совхоз байлығын серетмә! Бесән өҫтөндәге эттәй, үҙең дә ашамайһың, кәзәгә лә бирмәйһең. Тауыңа ҡалҡынып ҡара: сурайған Ирәмәлдәй, күкбоҙға уҡмашып ҡата!

Ҡарыуы ҡаҡшаны Малтабарҙың: кәбеҫтә тауын ваҡытлыса ҡатынына ҡалдырып, илдән элек сәңгеп өлгөргән бер туң күсәнде ҡултығына ҡыҫтырып, совхох контораһына ябырылды, директорҙың яғаһынан алырҙай ларылданы:

-- Олоно бер, кесене бер тыңла, түрә! Кәбеҫтәне өлгөрттөк, Ирәмәлдәй өйҙөрттөк. Ниңә ҡыш еткерәбеҙ, күсәндәрҙе ҡала баҙы үҙе килеп күсергәнде көтәбеҙ? Кәбеҫтә көҫәп йөрөүселәрҙең ылауына тейәтәйек, аҡтыҡ ҡатламы ҡатҡансы ил баҙына йомдортайыҡ. Аҫыл малды ҡышлатыуҙы халыҡ үҙ иңенә алыр, кассаға аҡса ағылыр. Бүре лә туҡ, һарыҡ та теүәл ҡалыр. Өлгөрлөк етмәй беҙгә, өлгөрлөк!!!

Түрә-ҡараға атҡан һәр һүҙе таш диуарға ташборсаҡтай кире ҡаҡлығып күнеккән Малтабар көтмәгәндә конторала шул диуарҙың өр-яңыса үҙгәртеп ҡоролоуын, әйткән бере юғарыға юлығыуын абайлап албырғанды:

-- Һәй афарин, бәрәкалла, уҙаман! – Ике күҙе уттай янып ырғып торҙо директор, уны ҡайнар ҡосағына ҡарманы, туң кәбеҫтә сәңгеткән ҡулдарын ике усы араһында иретеп, йәшел газик машинаһы аңдып көткән болдор алдына һөйрәне. -- Өлгөр килеп өлгөрҙө өлгөрлөгөң! Тап туң күсән мәсьәләһе бөгөн район масштабында ҡарала -- өлгөрәйек шул өлгөр ҡоролтайға!

-- Ә беҙҙең күсән тауы?.. – Ауыҙ асырға ла өлгөрмәне Малтабар, түрәһе итәғәтле итеп ирендәрен йомдортто:

-- Их-ма, нимә ул беҙҙең күсән? Мәсьәләгә юғарыраҡтан ҡара – һин ҡаҙанған, уйлап тапҡан өлгөрлөктөң районға йәһәт сорғолоуы һорала! Һөйләп бирерһең ҡоролтайҙа ҡороғоро күсәндәрҙе күсереүҙең яңы ысул-тәҡдимен!

Ысынлап та был мәсьәлә район күләмендә ине, колхоз-совхоз ҡырҙарында бойомға ашмаған кәбеҫтәнән тауҙар өйөлгәйне шул. Телһеҙ ҡалған Малтабар ағай туң күсәне менән ҡуша атһыҙ арбаның майҙай йомшаҡ урындығына сумырылды, иләҫләнгән өлгөрмәнде арттан зәңгәр төтөн хайран гөжләп оҙатып барҙы. Теге хәйерһеҙ торғонлоҡ заманында сиратһыҙ тороп һатып алған ҡәһәр һуҡҡыр күк шешәнән ҡырлы-мырлы стаканға нәҡ йөҙ илле грамм ҡойоп ҡапҡандай, совхоз директоры ҡатарында иләҫ-миләҫ килеп керҙе район түрәһе ҡаршыһына туң күсәнле Малтабар. Директоры телефондан шаңғыртып уҡ өлгөргән: күсә алмаған күсәндәрҙе күҙ асып йомғансы ялмап алырға әҙерлекле уҫлаптай ил баҙы хаҡында ауыҙ асыуы булды, төртөлгән һәр өлгөрлөктө кире ҡаҡҡыс теге диуарҙың бында ла тамам үҙгәртеп ҡоролоуын белдертеп, район түрәһе лә уны туң күсәне менән ҡуша ҡайнар ҡосағына ҡыҫты, ҡара-йылтыр “Волга”һына күтәреп, тигәндәй, ултыртты:

-- Өлкә үҙе күтәреп алырлыҡ өлгөрлөк! Өлкә ҡоролтайында тап ошо мәсьәлә төп үҙәккә ҡуйыла – барып өлгөрһөн һинең аша түбәндән төрткән өлгөрлөк!

-- Ә совхозда? Районда?.. – Туң күсәнен һелкетеп ауыҙ асырға иткәйне лә Малтабар, түрә ифрат яғымлылыҡлы яптыртырға өлгөрҙө:

-- Совхоз нимә? Район нимә? Өлкә киңлегендә ҡанат кирер һинең өлгөрлөк!

Баяғыға өҫтәп баяғынан нәҡ йөҙ грамм ҡапҡандай, алйыу-малйыу булды тағы Малтабар. Өлкәнең иң зиннәтле бер ҡунаҡханаһында ҡунаҡлап, ҡоролтай ултырыштарынан ҡайтҡаны һайын аҙна буйы түшәмгә төкөрөп ятып, түрәләр телендә "командировка сығымы" тип нарыҡланған елдән килмеш һумдарға тамаҡ ялғаны. Кистәрен шундай уҡ елдән килгән билет менән театрҙарға барҙы. Ғүмерендә лә татып күрмәгән рәхәтлектән нәҡ ике йөҙ грамм ҡапҡандай ҡыҙышып, хатта үҙенең ҡарауыл өшәләге ҡырындағы зарлы кәбеҫтә тауын, шунда моңайып ултырып ҡалған ҡатынын да онота башлағайны. Тап шул хәтәрлекле мәлдә өлкә ҡоролтайындағы көнүҙәккә ул килтергән туң күсән һәм өлгөрлөк төртөп сығып, юйылып барған хәтерен кире ҡайтарҙы ла тетрәткес телмәр телеп һалырға өлгөрҙө Малтабар шул бейек трибунанан. Өлгөрмәнде өлкән түрә үҙе ҡосаҡлап алды:

-- Афарин, ир арыҫланы! Үҙгәртеп ҡороу бына шулай түбәндән, һәр кемдең үҙенән башлана! Өлгөрлөккә өлгөрлөк килеп ялғана! Бөркөтөм, өлкә киңлегендә ҡанат кирҙе һинең өлгөрлөк! Теләйһеңме, уҙаман, иртәгә үҙеңде кремлле мәркәзгә алып осам?!

-- Совхозым... кәбеҫтә тауым... – Теле шунда тотлоҡто.

-- Эйе, кәбеҫтә тауың! Киң Тыуған илде иңләйәсәк һинең сая өлгөрлөк!

Малтабарҙың ауыҙы был юлы үҙенән-үҙе ябылырға өлгөрҙө, сөнки ул теге заманда мөлдөрәмә тулы ҡырлы стакандан ҡапҡандай иҫергәйне. Ҡоролтайҙан сыҡҡас ҡына, асфальт һыртында ҡарыш ҡалынлыҡ ҡар күреп һәм селлә зәһәре һуғып сирағын һындырғандай ҡалтыранып, теше-тешкә теймәйенсә айныны. Ҡулындағы ҡара көйгән күсәнде сүп әрйәһенә бираҡтырып, кеҫә төбөн ҡырҙы ла йылы ойоҡ, бейәләй алып кейҙе, муйынына ҡалын шарф ураны. Кисекмәҫтән электропоезға эләгеп, өлкә күләмен уҙып киткән өлгөрлөгөнөң ауылдағы һөҙөмтәләрен күрергә теләгәндәй, тәҙрә боҙон тыны менән иретеп, күҙе тишелерҙәй булып текләне. Ләкин ҡалаға килгәнендә юл буйынса күҙен ҡырған күсән тауҙары әле булһа күсмәгән, ә ҡарауылдары, көн бойорғанса, ҡолаҡсын һәм толоптарға уранған...

Бына поездан төштө, тыуған баҫыуына ла ҡайтып етте һәм... кәбеҫтә тауы торған ерҙә ҡара сәүкәләй халыҡ, мәхшәр күреп тертләне. Күсәндәрҙе пыран-заран таралтып, билмән сапҡандай тураҡлап, иҙгеләп ташлағандар – һәнәк-көрәк тотҡан ир-ат, ҡатын-ҡыҙ, хазина эҙләгәндәй, туң ярпылар араһында туңмай ҡалғандарын көҫәп соҡсона. Һыуыҡ тейҙереп ҡаһ-ҡоһ йүткергән ҡатыны килеп етте, яғаһынан бөрөп алды:

-- Ҡайттыңмы, афаринланған алйотйән?! "Өлгөрлөк" тип радионан аҡырып, өйөңдә ни ҡылғандарын белмәйһең. Түрәләр ҡоролтайҙан ҡайтып, баҙар ҡороп өлгөргәнсе, күсәндәр шаҡырҙап ҡатты... Ярай уртаһына баҫтың – бәлки, бер өйрәлек кәбеҫтә йолоп өлгөрөрһөң!..

1988.

Үҙемдән башланым

Замана заңы йөрәкһетеп арбаны күңелемде: “Һәммәбеҙ, һәр беребеҙ – донъяның төп тотҡаһы, шуға күрә был донъяны үҙгәртеп ҡороуҙы иң элек үҙеңдән башла!”

Дөрөҫ, йәшем – илле, йәнем елле булһа ла, мин – инвалид-пенсионер, ике ҡулым эшкә ашмай, тиерлек. Икмәк, ҡалаҡ тоторға, гәзит аҡтарырға ғына етә дарманым. Ике аяҡ, ҡуш яурын, баш мыҡты уның ҡарауы! Ошондай уҡ мыҡтылыҡтар ил буйынса, тим, аҙмы ни? Бына бит ул файҙаланылмай ятҡан күпме мөмкинлек! Әйтәйек, ауылыбыҙ ҡасандан бирелә почтальонһыҙ интегә. Был эшкә, тим, йырлап ҡына һабан һөрөр, гөбөрҙәтеп һыйыр һауыр ҡөҙрәт эйәләрен ниңә ҡуйырға, ҡуш иңемә сөмкә аҫырҙай мин барҙа?! Әйттем – бөттөм, вазифаны ҡабул иттем – үҙгәртеп ҡороуҙы тап үҙемдән башланым!

Ике аяҡ, ҡуш яурын үҙгәртеп ҡоролдо хәҙер -- өйҙән өйгә инвалидлығым түгел, ә ил ғәме менән тулы көндәлек почта илтәм, илемә хеҙмәт итәм. Бынамын тигән баш та бар бит әле йәнә муйында – ниңә уны ла үҙгәртеп ҡороуҙы үҙемдән башламаҫҡа?!

Барып индем сөмкә артмаҡлап баштүрәбеҙҙең абруйлы йорт ихатаһына. Түрә ҡатыны сая – ауылдың бар ғәйбәт тоҡсайын сайҡалта үңербауында. Тәғәйенләнгән һәр почтальонды тәүге көндән үк шул үңербау тоҡсайына улъя ташыусы итеп ҡуя. Оҙон телен эҫкәкләтеп, ир һәм ҡатын, егет һәм ҡыҙ, түрә һәм ҡара араһына ҡыҫыла. Ошо арҡала күпме йөрәктәр селпәрәмә килде лә етәкселек менән ялпы араһында яу ҡупты. Әле лә шул саялығын сыя һайыҫҡан Фатима:

-- Ҡарале, связной, Бөкөрө Усман Нисаһының бүкҫәһе ныҡ бүлтәйгән, тиҙәрме? Кем муйынына аҫылынып сығырға шәйләй икән?

-- Яңылышмағыҙ, ханым, -- тинем. – Мин үҙ ҡатыным менән генә связға кергеләйем, ә һеҙҙең связной, хаталанмаһам, үҙегеҙҙең хәләл ефет Хисам баштүрә түгелме? Һеҙгә, мәктәбебеҙҙә замананың матур әҙәбиәтен уҡытыусы кешегә, әҙәплерәк булырға кәрәк ине. Ә инде Усман Нисаһына килгәндә, үҙ ҡыҙығыҙ Хәйерниса барлығын онотмағыҙ – шуның менән бутамайһығыҙмы икән?

Шаңҡыуынан саҡ ултыра төшмәне Һайыҫҡан Фатима. Ҡыҫалалай ҡыҙарынып, көскә-көскә тын алды:

-- Аб-бау, ҡорошҡул, һыныҡ ҡанат сиңерткә! Эш башламаҫ элгәре үҡ ырғаңдайһың, аҙағында һыныҡ аяҡ ҡалмаһаң ярар ине.

-- Баш ҡына булһын аман. Сонтор сираҡ һайыҫҡан да шыҡырыҡлап йөрөп ята бит әле! – Һайыҫҡан Фатиманың донъя ярып сарылдауын ишетмәҫкә ике ҡолағымды ҡаплап олаҡтым.

Ауыл сауҙа төйәгенә юғарынан төшөрөлгән ҡаҙна ҡағыҙын тапшырырға тамшанып, магазинға һуғылдым. Йән көйҙөргөс бер үк хәл: ил илертеп яманатланған көмөшкәсе Сәйфелмөлөк уҫлаптай тоҡ ауыҙын тотоп тора, ә мутйән Әпхалиҡ һатыусы, тырышып-тырмашып, шунда ҡомшәкәр ҡоя. Ингән берәү хитлыҡтарын күҙенә элеп ала, әммә тел-тешһеҙ ҡала – тик баш сайҡап уфтана.

Ошоғаса мин үҙем дә тап шулай ҡыланыр инем, тик был юлы мутлашыуға сик ҡуйыуҙы илдән элек тап үҙемдән башланым:

-- Хай-хай, Әпхалиҡ-Сәйфелмөлөк, халыҡ башын шаңҡытыусы һулаҡай кооперативығыҙ, көмөшкә аппаративығыҙ һемәгенән күк ялҡын ялматамы? Ҡомшәкәрле киндер ҡапсыҡ кейҙертелгән моңло-зарлы башҡайҙарығыҙҙы ҡаҙнаның таш ҡапсығында интегә тип күрмәйһегеҙме, тим, татлы төшкәйҙәрегеҙҙә?..

Ҡулдары ҡалтыраны, Әпхалиҡ һоҫкоһо ҡушкөбәктән атылған өкөләй ҡоланы:

-- Ҡәһ-ҡоһ... Ниндәй көмөшкә? Ниндәй кооператив?

-- Әпхалиҡтан – ҡомшәкәр, Сәйфелмөлөктән ыу-кәһәр; аппараттан өлөшкә ағып тора көмөшкә -- бына шул аппаратив-кооператив. Дөрөҫ ләпелдәйемме?

Ҡыҙара бүртенгән Сәйфелмөлөк тоғон йөкмәп йүгерҙе, Әпхалиҡтың бүкән башы прилавка аҫтына бөгөлдө...

Тура барып тарыным мал фермаһына, бер ҡосаҡ гәзит-журнал индереп һалдым ҡыҙыл мөйөшөнә. Ғүмерҙә булмаған хәлдән унда малсыларым шаҡ-ҡатты:

-- Бәй, ҡыҙыл ҡар яуҙымы әллә?! Ҡыҙыл мөйөшкә тип яҙҙыртылғандың яртыһы ла килеп етмәй – баштүрә башкөлләй үҙендә ҡалдырта ине, "Агитатор блокноты"н ғына бында атҡарта ине...

-- Инде киреһе булыр – почтальонығыҙ үҙем, ғәҙеллекте тергеҙеүҙе мин үҙемдән башланым!

Шул арала тышта ферма мөдиренең тамаҡ ярып аҡырыуы бүлдерҙе:

-- Быҙауҙарҙы ҡаҡ һөйәккә ҡалдырҙың, емде талаф ҡылдырҙың!

Малсылар сәйер йылмайҙы:

-- Быҙау ҡараусы Самиға һылыуҙың ҡабырғаларын һанай Ялмауыҙ Моратша ағай... Ҡарағыҙ әле үҙен: санаһында тап ана шул талафланған быҙау емен оялағы ҡаҙҙай баҫып ултыра!

Ялмауыҙ Моратша мөдирҙең, быҙау емен генә түгел, быҙауҙың үҙен дә ялмап алыр, салғыйы аҫтына бөкләп һалыр таҫыллығы көллө илгә билдәле, әммә ауыҙ асып әйткән һис кем юҡ әле... Егетлекте үҙемдән башларға итеп, елтерәп барып еттем:

-- Һин, туҡта!

-- Бәй, -- тертләп ҡуйҙы Ялмауыҙ, -- бында һин, артыҡ бүрәнә башы, ҡайҙан килеп сыҡтың?

-- Шул уҡ һин сыҡҡан урындан! Тор әле, осаһыҙ ҡалып ҡуйма -- аҫтыңда ҡара йылан!

-- Кем әйтте?! – Ялмауыҙ ырғып торҙо. – Ҡайҙа йылан?

-- Һин үҙең ул йылан! – Яурыным менән этеп ебәреп, аҫтындағы емле тоҡто өҫкә тартып сығарҙым. Шул арала Самиға һылыу эләктереп тә алды, быҙауҙарына илтеп тә һалды.

-- Ныу ҡорошҡул!.. – тип кенә ҡалды Ялмауыҙ Моратшабыҙ, тештәрен шыҡырҙатып. Ҡаҡ санаға лыпайып, ҡара йыландай сыбыртҡыһын башым осонда сыжылдатып болғаны ла ат арҡаһына тартты. – На, алабарман алаша! Дилбегә төбө кем ҡулында икәнлекте белмәһәң, белдертербеҙ әле беҙ! Ҡорошҡул!

Өйҙән-өйгә почтаны өләшеп бөтөрөп, аҙаҡ сиктә идараға баштүрә ҡатына керҙем, баяғы ҡыҫыр “Агитатор блокноты”н алдына шыпылдатып һалдым.

-- Бәй, быныһы ни әкәмәт? Ҡайҙа миңә тейешле оло пресса?

-- Һеҙгә тигән, үҙ кеҫәгеҙҙән сығарып яҙылған ике бөртөк пресса өйөгөҙҙә, нәзәкәтле Фатима ханымдың престай ҡыҫмыр ҡулында. Ышанмаһағыҙ, ҡайтып, яҙылыу квитанцияларығыҙ менән барлап ҡарағыҙ, ә ҡыҙыл мөйөш мөлкәттәре ҡыҙыл мөйөшкә ҡайта!

-- Ә “Блокнот” ниңә йөнтәҫ ҡулыңда?

-- Сөнки ул тейешле юлында -- үҙегеҙгә һәм Фатима ханымға һәр битен ентекле ятлап, үҙгәртелеп ҡорола башлауға өгөтнамә.

-- Кем ҡушты?

-- Үҙем!

-- Бонопартист! – Яман екерҙе баштүрә, үҙгәртеп ҡороу осоронда юғары даирәләр һүгенеүенә әүерелгән, телевизорҙан отоп алған сәйәси ләҡәпте таҡты. Мин дә отоп алғанымды тондорҙом:

-- Мин булһам бонопартист, һеҙ үҙегеҙ монархист!

– Һе! Бына һинән башларға кәрәк уны, үҙгәртеп-мүҙгәртеп ҡороуҙы!

-- Һуңланығыҙ, баштүрә, һеҙҙән элек үҙемдән башлауымды әле күреп тораһығыҙ.

-- Олаҡ күҙемдән! – тип аҡырҙы баштүрә.

-- Олаҡмайым, ә ипле генә йәйәүләп сығып китәм!

Эште бөтөп, тамаҡ сарсап төшкөлөккә моронлаһам, табында еҙ самауырҙың үтәнән-үтә Мәскәү ҡалаһы күренмәле аҡ һыуы ҡаршыланы. Мутйән Әпхалиҡ магазинда ҡәйнәмә сәй бирмәгән – кейәүең үҙенән башлаһын, тип сығарған...

Көрһөнөп тә өлгөрмәнем, гел “бишле”гә генә уҡыған ейәнсәрем шарылдап илап ҡайтты – уҡытыусы Фатима апаһы “икеле” ҡуйып сығарған...

Көтмәгәндә райсобестан телефон шылтыраны, таныш түгел ханым әсе сыйылданы: имеш, ҡулыңда нышып тултырылған почтальон сөмкәһен генә түгел, фермалағы фураж тулы кесерткән тоҡтарҙы ла орсоҡтай уйнатҡанһың – инвалидлығың ялған, тимәк. Яңынан комиссия үтмәй, инде пенсия тәтемәй...

Ауыртҡан башты услап тотоп кис еткерһәм... иң алдынғы, алсаҡ һауынсы тип танылған, хәләл ялына сығыры алдынан һуңғы биш йылын йүгереп йөрөгән ҡатыным да һөмөрөһө ҡойолоп ҡайтып инде лә кәлимә-һүҙ әйтмәне. Боҙҙай һалҡын ҡарашын йөрәккә ҡаҙап, һерт-һерт баҫып йоҡо бүлмәһенә үтте, кире әйләнеп сыҡманы. Өлкән улымдан һорашып шуны белдем: баштүрә фермала булған, ҡатынымдың һауын һыйыр төркөмөнә ҡайтарылған һөтлө тоҡом таналарҙы көтмәгәндә икенсе берәүгә беркеткән...

Утты һүндереп, йоҡо бүлмәһенә инеп ятҡас та аралағы туңды иретеп булманы, бөтә донъя, әйтерһең, тоташ боҙланып ҡатҡан. Ҡулымды алып ташланы, мыш-мыш килеп иланы... “Беләм кемдәр рәнйеткәнен! Үҙгәртеп ҡороуға аяҡ салған эскерле ул бәндәләрҙе иртәгә үк аҡылға ултыртырмын – башбаштаҡ баштүрәне лә, Һайыҫкан Фатиманы ла, мутйән Әпхалиҡ һәм Ялмауыҙ Моратшаны ла... Фәкәт өҙөп әйт, бәғерем, кемеһенән башларға?!.” – тип йөрәкһеп ялбарғайным, артынса уҡ себен осканы ишетелерлек үле тынлыҡ урынлашты –

дауыл алды тынлығы. Ниһайәт, боҙ ҡуҙғалды: күрек һымаҡ тәрән һулыш һурҙы ла хәләл ефетем, шаҡ ҡатырып тетрәндергес ике генә һүҙ әйтте: “Үҙ-еңдән башла!!!” – Үкһеп-үкһеп иланы. Ультиматумы үтәлмәйенсә аралағы боҙ тауының мәңге-мәңге иремәҫен белдереп, үҙгәртеп ҡороуҙарым барышын ҡоймалай яҫы арҡаһы менән ҡапланы...

1988.

СӘХНӘ САТҠЫ-СОТҠОЛАРЫ

Сүлмәк

(Сәхнә)

Ҡатнашалар:

Бабай.
Әбей.
Күрше.
Староста, ауыл халҡы.
Хәҙрәт.

Хәл революцияға тиклемге башҡорт ауылында бара.

Өй эсенең күренеше. Стена буйында ике кеше һыйырлыҡ ҡына ҡаҡ һике. Киндер тышлы ике мендәр ята. Алғы планда оҙон эскәмйә. Сөйҙә бабайҙың ҡаткан туны эленеп тора, унан бер ситтәрәк әбейҙең кәзәкейе. Шаршау асылғанда әбей менән бабай атҡа атланғандай эскәмйәлә ҡара-ҡаршы ултырып, урталағы сүлмәктән һоғаланып бутҡа ашайҙар. Икеһенең араһында бутҡа өсөн ыҙғыш бара. Бабай ҡулына сүмес, әбей ҡалаҡ тоткан. Бабай, түшәмгә күҙентөбәп, тырыша-тырыша сүмесен ялап ултыра.

Әбей *(халыҡҡа ҡарап).* Ҙур сүмес менән бутканы бер үҙе ашап бөтөрә инде, Алланың ҡәһәре төшкөрө бирән! *(Бабайға һиҙҙертмәҫтән, сүлмәкте үҙ яғына шыуҙырып ашай башлай. Бабай сүмесен элек сүлмәк ултырған урынға һуҙа, ләкин эскәмйәгә төртөлә).*

Бабай *(һиҫкәнеп).* Ах, Иблистән тыуған ҡарсыҡ! Бутканы ҡайҙа алдың, бир тиҙерәк!

Әбей. Һин, бирән, әлдә күп тығындың. Етер һиңә.

Бабай. Күп тығынаммы, аҙмы – ул минең эш. Һин миңә хисапсы түгел.

Әбей. Хисапсы түгелһең тип ни, үҙең генә тығынып бөтөрөргәме? Минең дә тамағым бар!

Бабай. Етер һиңә! Күп лыҡылдама! Ултырт сүлмәкте уртаға!

Әбей. Әйттем бит мин һиңә, етер тип. Һаман тик үҙ ҡорһағыңды тултырыу яғын ҡарайһың, ҡарт күҫәк. Мин һинең өсөн генә тиеп этләнеп бешермәнем быны.

Бабай. Ә, шулаймы ни әле, серек толомло шайтан! *(Ырғып тора).* Ә ярма кемдеке ине? Һин, Иблис тоҡомо, минең бутҡаға хужа булма. Юғиһә, ауыҙыңды ҡайырып, һуңғы тештәреңде һуғып ҡойормон!

Әбей. Ташҡүлсәйем. Улай телгә шәп булғас, бешерергә лә шәп бул инең, сүбек һаҡаллы шайтан! Үҙең бешергәнгә хужа булырһың, хәҙер бутҡа минеке!

Бабай *(мыҫҡыллап).* "Бутҡа минеке", имеш! "Мин бешерҙем", имеш! Ярманы кем тапты һуң? Әйтеп бир әле һин миңә, көл тубалы, кем тапты был ярманы? Минең ярма булмаһа, башыңдың һөйәген һалып бешерер инеңме?

Әбей *(халыҡҡа ҡарап).* "Ярманы кем тапҡан"! Харап инде! *(Бабайға).* Әгәр ҙә мин булмаһам, шул өс бөртөк ярмаң менән ни эш ҡыйратыр инең? Тауыҡтарға сығарып һибер инең.

Бабай *(ҡапыл сүмесенә бутҡа әләктереп ала ла ашай-ашай һөйләнә).* Ни эшләтергә икәнен һинән һорамаҫ инем, ҡарасҡы!

Әбей. Ах бирән, ах убыр, тағы умырып алған! *(Сүлмәк эсенә ҡарап).* Бер тығылыуҙа ни хәтлемен харап иткән! Төбөн күрһәткән, убыр! *(Асыу менән бабайҙың ашап ултырған сүмесенә һуғып ебәрә, сүмес бабайҙың битенә ҡаплана – танауы, һаҡал-мыйыҡтары бутҡаға буяла).*

Бабай *(сүмесен болғай-болғай).* Ни ҡылығың был, тинтәк баш? Аҡылдан яҙҙыңмы әллә? Һаҡалды симәлтәһең бит! Әгәр бөрсәләй башлаһа, һин, Иблис тоҡомо, староста ҡаршыһына баҫып үҙең яуап бирерһең, ишетһен ҡолағың! Үҙеңдән сүплә термен ул ырғаңдаҡтарҙы! Хәйерле сәғәттә бирep ҡотол сүлмәкте, юҡһа эт урынына ярырмын! *(Еңе менән битен һөртә. Сүлмәкте тартып алып, һоғаланып ашай, әбей асыу менән ҡарап ултыра).* Әллә-лә, төкөрөгөңдө йотоп ултырыу яҡшымы? Ураҙа тотоңҡора әле, белерһең шунан ҡәҙеремде.

Әбей. Ашат миңә лә!

Бабай. Башыңдың һөйәген аша!

Әбей *(халыҡҡа ҡарап).* Йүнһеҙҙән йүн сығмаҫ, ахыры, хәйлә ҡорорға кәрәк. *(Бабайға).* Бабаҡайым, ҡара әле, сүмесеңдә тараҡан йөрөй. Яңылыш ашап ҡуйма тағы.

Бабай *(бутҡалы сүмесенә ҡарап).* Ҡайҙа, күренмәй бит?

Әбей. Туҡта әле, бабай, туҡта. Сүмесеңде миңә табан һуҙ әле, үҙем алып ташлайым.

Бабай *(сүмесен һуҙа).* Бираҡтыр тиҙерәк, көттөртмә.

Әбей. Хәҙер *(йәшен тиҙлегендә ҡалағы менән бабай сүмесендәге бутҡаны тырнап алып ауыҙына атҡара).*

Бабай *(ыуаланып).* Ах хәйерһеҙ! Ах мәлғүн! Тамағыңа Ғазраилдың ҡылысы сәнселгере! Сүлмәк төбөнән ҡырып алған һуңғы ҡабым бутҡам ине, харап итте бит мөртәт! *(Ырғып торо п туҡмарға итә).* Өйрәтермен мин һине, Иблистән тыуған тоҡом!

Әбей, Күтәрмә ҡулыңды, һаҡаллы бирән. Юҡһа сүлмәкте лә үҙем ялармын.

Бабай *(урынына ултырып).* Ялатырмын ялпағыңды! Аҡтыҡ бутҡаны һоғоноуың етмәгән, инде сүлмәкте ялтыратмаҡсы икәнһең.

Әбей. Ялтыратырмын да шул! Ҡара суйынын сығарғансы ялармын.

Бабай. Яларһың атаңдың башын! *(Сүлмәккә ҡулын тығып, шап-шоп яларға керешә, ялап та бөтә).* Иншалла, алып ҡуй инде сүлмәкте.

Әбей. Мин яламаным бит уны, һин яланың. Шулайғас үҙең алып ҡуй.

Бабай. Һауыт-һаба йыйыштырыу минең эшем түгел ул, төшөндөңмө, тинтәк? Ашты кем бешерһә, табынын да шул йыя.

Әбей. Әллә-лә, аҡылың алтын икән! Ашағанда мин-минлегең ҡупҡайны, үҙең алып ҡуй инде.

Бабай. Йә ҡарсыҡ, етер, күп лыҡылдама. Уны бит һин дә ашаның, мин дә ашаным. Тимәк, икебеҙ тиң алып ҡуйырға тейеш. Тот һин дә бер ҡолағынан! *(Сүлмәкте икәүләшеп тотоп бер мөйөшкә илтәләр).* Иншалла, бер ыңғай йыуып та ҡуй инде, әбекәй, ҡатып ултырмаһын.

Әбей. Бына һиңә ҡуҡыш! Үҙең йыу!

Бабай. Ах шайтан ҡотҡоһо, ҡасан күргәнең бар ир-аттың ҡаҙан-сүлмәк йыуғанын? Ысынлап та, атаң Иблистер һинең, юҡһа бындай ҡолаҡҡа яҡмаған һүҙҙәр һөйләмәҫ инең.

Әбей. Ай Алла, Иблис тине лә ҡаныҡтысы! Үҙең белгән Бөкөрө Муллахмәт тәһә минең атайым. Иблис тоҡомо булһам, сосолоп төшкән ҡойроғом булыр ине.

Бабай. Анауы сәс толомо тигән сосолдоғоң, ҡойроҡ булмай, ебәк суҡ тип беләһеңме?

Әбей. Ҡойроғо эйәгенә үҫкән Иблис һин үҙең! Юҡһа былай мәсхәрә ҡылмаҫ инең.

Бабай. Был һүҙҙәрең өсөн ҡамсы менән ярырға кәрәк һине!

Әбей. Минеме, әллә һинеме?

Бабай. Йә ҡарсыҡ, теленә күп һалышма. Төн уртаһы етеп килә, серем итергә ваҡыт. Йыуаһыңмы, йыумайһыңмы – икеһенең берен әйт.

Әбей. Йыумайым!

Бабай. Мин әйтәм, йыуырһың!

Әбей. Һин кем, Хоҙайҙың аҡ бәпесеме әллә?

Бабай. Һәр хәлдә, һинең кеүек теге Хоҙай орғандың ҡара бәпесе түгел инде.

Әбей *(мыҫҡыллап).* Күрегеҙ аҡ бәпесте! Ҡарт күҫәк һин!

Бабай *(халыҡҡа ҡарап).* Был һантыйҙы былай ғына ипкә килтереп булмаҫ, аҡыллы эш итмәһәк. *(Әбейгә).* Эй әбекәй-әбекәй, уртаҡ тел табышайыҡ. Мин ҡарт күҫәк булһам, һин бөкөрө көйәнтә. Сүлмәк йыуылһын өсөн, шыбаға һалышыу фарыз.

Әбей. Ҡайһы шыбаға, таяҡ тотошоумы, әллә кәпәс ырғытышыумы?

Бабай. Юҡ, әбекәй, йоҡо шыбағаһы.

Әбей. Ҡалай була ул?

Бабай. Икебеҙ ҙә ятып йоҡлайыҡ. Кем дә кем алда уяна –сүлмәкте шул йыуа. Аңланыңмы?

Әбей. Аңланым. Тик мин төндә ике тапҡыр тороп сығам, ә һин бер генә.

Бабай. Һин дә бер генә тороп сыҡ. Ленин бабай әйткән бит -- равноправие.

Әбей. Ярар, Ленин бабай әйткәс, түҙермен.

Бабай. Яттыҡ, әйҙә, бисмилла.

Әбей. Яттыҡ *(бабайҙың тунын түшәп, һикегә һуҙыла).*

Бабай. Нишләп минекен алаһың, үҙемә кәрәк бит ул? *(Әбей өндәшмәй).* Бир тунымды! Ишетәһеңме, үҙемә кәрәк, тигәнде? *(Әбей йоҡлағанға һабышып хырылдай).* Ҡара һин уны, бутҡаһын боҡорҙата ла башланы, төбө көйөп ҡуймаһын! *(Ҡушҡуллап тунын тартып ала, әбей тумарлап иҙәнгә төшә).*

Әбей. Уй билем! Уй башым! Уй Аллаҡайым, уй!

Бабай. Аллаға тел тейҙермә, Иблисеңдән һора!

Әбей *(ырығып тороп тунға йәбешә).* Үҙең Иблис икәнһең – кеше аҫтындағын йолоп алаһың! *(Тартҡылашалар).*

Бабай. Ана тора кәзәкейең!

Әбей. Кәзә аҫтына ла етмәҫ кәзәкейҙе нисек итеп түшәйем?

Бабай. Миңә тимәгәйе, ҡаҡ таҡтала ауна. Таштай ҡатҡан ҡабырғаларың һынмаҫ.

Әбей. Бир тунды, бир!

Бабай. Туҡта, ирек ҡуй, исмаһам, түшәргә! Икебеҙгә *ла* етер. Бына ошолай. Әйҙә, башланыҡ шыбағаны!

Әбей. Башланыҡ!

Арҡаға-арҡа бирешеп, бөгәрләнеп яталар. Пауза. Бабай, күҙен аҡайтып, әбей яғына әйләнеп ҡарай. Әбей, ыңғыраша-ыңғыраша, ҡулдарын ике яҡҡа йәйеп кирелә, бер йоҙроғо бабайҙың битенә төшә. Бабай йәшен тиҙлегендә кире ята.

Бабай. Уй, шыбаға... харап була яҙҙым бит! Һиҙмәһә генә ярар ине шайтан тоҡомо! *(Йоҡлаганға һабышып хырылдай).*

Пауза. Хырылдауҙан туҡтайҙар. Икеһенең дә ҡаты йоҡоға талыуы күренә. Таң яҡтыра. Тышта һыйырҙар, һарыҡ-кәҙә баҡырыша, көтөүсенең, сыбыртҡы шартлатып: "Һайт-һайт! Һәш! Алаһыйыр, вернись!" – тигән тауышы ишетелә. Бер аҙҙан һуң көтөү киткәне беленә. Өй алдында быларҙың көтөүҙән ҡалған кәзәһе баҡыра башлай. Ырғып торорға иткән әбей, шыбаға иҫенә төшөп, кире ята. Ҡулына һоҫко тоҡан күрше ҡарсыҡ ут алырға керә.

Күрше *(аптырап).* Абау, нишләп яталар былар? *(Әбейҙе төрткөләй).* Мәрфуға ҡоҙағый, тор, тор! Нишләп һамҫып ятаһың, кәзәң көтөүҙән ҡалған! Тор, ҡоҙағый, тор! *(Ләкин әбей ҡуҙғалмай, бабай ҙа тик ята).* Бынағайыш тамаша, уятып булмай бит, әй! Ғүмерҙә ҡыланмағанды! Ҡуй, был ҡоҙағыйға бер-бер хәл булғандыр. *(Бабайҙы төрткөләй).* Ҡоҙа, тим, ҡоҙа, нишләп ятыуығыҙ был? Тор инде тиҙерәк, тор! Ҡояш тышау буйы киткән бит инде, ә һеҙ һаман әүен баҙарынан ҡайтмай ятаһығыҙ. Аҡылдан яҙҙығыҙмы әллә? Тороғоҙ инде тиҙерәк! Тор! *(Ләкин икеһе тиң ҡуҙғалмай, күрше ҡурҡышынан шаҡ-ҡата).* Тфү-тфү, Аллам һаҡлаһын, бер-берәй хәл булғандыр быларға. Әллә төндә үлтереп киткәндәр инде? *(Әбейҙең ҡулын тотоп ҡарай).* Шул-шул – үлтергәндәр! Һыуынып бөткән ҡулы! Үлгәндәр... *ләхәүәлә... Ләхәүәлә ҡеүәтә... (Иҙеүенә төкөрөнә).* Тиҙерәк сығып илгә хәбәрһалайым! Юғиһә минән күреүҙәре бар, *ләхәүәлә... (Сығып йүгерә).*

Тышта тауыштар: "Ғөбәйҙулла, бар әле, улым, Ғилман старостаға әйт: Әхтәри ҡоҙа менән Мәрфуға ҡоҙаса төн сыҡҡансы ҡатып ҡалған, тиген. Тиҙерәк килеп етһен, йәме?" Икенсе тауыш: "Ярар, хәҙер барып әйтәм". Дөп-дөп йүгереү. Бераҙҙан күмәк шау-шоу: "Бөгөн төндә Әхтәри ҡарт менән Мәрфуға ҡарсыҡ үлеп ҡалған, ти". Ҡатын-ҡыҙ: "Бахырҡайҙарға ясин сығыусы *ла* булмаған икән..." Малай тауышы: "Ҡараҡтар ясин уҡығандыр әле – уларҙы ҡараҡтар үлтергән, ти, бит". Асыулы: "И иманһыҙ суска, ҡыҫылышып йөрөмә әле бот араһында!" Бер төркөм шаулашып инә.

1-енсе кеше. Эйе, ысынлап та үлгәндәр...

2-нсе кеше. Баш китерлек!

1-енсе кеше. Староста ҡайҙа?

Күрше. Килеп етер, Ғөбәйҙулланы йүгерттек.

2-нсе кеше. Бисаралар икеһе тиң бер төндә вафат булдылар. Бала-сағалары *ла* юҡ, исмаһам, донъялары кемгә ҡалыр?

1-енсе кеше. Мир файҙаһына ҡалырға тейеш.

Таяғына таянып, староста килеп инә.

Староста *(таяғын иҙәнгә туҡылдатып).* Ниңә һарыҡ көтөүеләй өйөрөлөштөгөҙ? Йәрминкә ҡорҙоғоҙмо әллә? *(Тынлыҡ урынлаша, староста шыбағасыларҙы таяғы менән төркөслəп ҡарай).* Ҡатҡандар,ысынлап та. Вәли!

2-нсе кеше. Әү!

Староста. Бер аяғың – бында, икенсеһе тегендә: мулла хәҙрәтте алып кил!

2-нсе кеше. Ҡуйсы, бүтәнгә әйт, минең сабатам тишек.

Староста. Минең һүҙҙе тыңламаҫҡа әллә башың икеме? Ысҡын йәһәт! Награтына мир исеменән мәрхүмдәрҙең донъяһынан өлөш сығарырбыҙ.

2-нсе кеше. Алай булһа ярай ҙа *(сығып китә).*

Староста *(таяғын айҡап).* Таралығыҙ, таралығыҙ, слитстүә яһарға ҡамасаулайһығыҙ!

1-енсе кеше. Мәрхүмдәр мөлкәтенә ҡул һалмағыҙ, ул мирҙеке!

Староста. Вылас эшенә ҡыҫылма, ахмаҡ!

Төркөм ҡәнәғәтһеҙләнеп шаулай. Тауыш: “Шаһит кәрәк, шаһит! Өйҙән сыҡмайбыҙ!” Йәшел таяҡлы Хәҙрәт, 2-нсе кеше инә.

Хәҙрәт. Әссәләмәғәләйкүм, йәмәғәт!

Староста. Вәғәләйкүмәссәләм. Мәрхүмдәрҙе иманға килтер, хәҙрәт.

Хәҙрәт *(таяғын әбей менән бабай өҫтөнән йөрөтөп).* Бисмиллаһи рахман рахим... икеһе бер юлы китеп дөрөҫ иткәндәр. Урындары ожмах түрендә булһын... Мәрхүмдәрҙең йорт-йыһазы арыумы?

Староста. Иншалла, гүр саҙаҡаһына һәм слитстүә расхутын ҡапларға етерлек.

Хәҙрәт. Бәрәкалла, бәрәкалла, бик ваҡытлы вафат булғандар икән. Бөтә мәхәлләгә шулай мул саҙаҡалы берҙәм тиҙ үлем бирһен. Аллаһы әкбәр *(доға ҡыла).*

Староста. Слитстүәне башлайыҡ, хәҙрәт.

Хәҙрәт *(устарын ыуалап).* Башлайыҡ, башлайыҡ. Әлхәмдилилла, мәрхүмдәрҙең йәне йәннәттәләр инде.

Староста. Миңә тимәгәйе, йәһәндәмгә китһендәр! Ыстанауай пристав килгәнсе, үҙ эшебеҙҙе бөтөрә торайыҡ.

Хәҙрәт. Әлхасил, кәзәһе менән бураһы фидияға бирелә торғандыр?

Староста. Ҡомһоҙланма, хәҙрәт, һиңә кәзәһе лә еткән.

1-енсе кеше. Мирҙе онотмағыҙ, мирҙе, юғиһә схот йыйыҙырасаҡбыҙ!

Староста. Йорт-йыһаздары миргә ҡаласаҡ. Потомушты бураһын миргә бүлеп биреп булмағанлыктан, мин урынына мир табынына бер мискә асы бал ҡуям. Слидәүәтелне, йорт бураһы миңә тейә.

Хәҙрәт. Тәҡсир, һауыт-һабалары ла гүр саҙаҡаһына теймәһә, йыназа уҡымайым.

Староста. Һәй хәҙрәт, көнөнә алты кеше үлеп торһа ла, нәфесең ҡанмаҫ икән! Һинеңсә булһын: өй эсендәге һауыт-һаба – гүр саҙаҡаһына.

Хәҙрәт. Ярхамикалла, ярхамикалла.

2-нсе кеше. Ә миңә? Хәҙрәт артынан сабып, сабатама икенсе тишек өҫтәнем.

Староста. Станауай килгәс, мәйет аяғындағы сабатаны алырһың.
2-нсе кеше *(бабайҙың аяғын һәрмән).* Уныһы ла тишек бит.
Староста. Тишекте тишек бөтәйтер.
2-нсе кеше. Анауы кәзәкей кемгә һуң?
Хәҙрәт. Тәҡсир, кәзәкей минеке!
Староста. Минеке!

Староста менән хәҙрәт кәзәкейгә ташлана, бер-береһенә төкәлешеп ҡолайҙар.

Әбей *(сәрелдәп ырғып тора).* Ҡуй, ҡуй, ала күрмәгеҙ кәзәкейемде! Үҙемә лә берәү генә! Йүнләп кейгәнем дә юҡ әле, ала күрмәгеҙ! *(Йүгерәп барып сөйҙәге кәзәкейҙе йола).*
Халыҡ *(бер тауыштан).* Аһ! Үлмәгән!

Төркөм шаулашып сығып ҡаса, староста менән хәҙрәт иҫтән яҙып йығыла.

Хәҙрәт *(башын ҡалҡытып).* Физия минеке! Кәзә... кәзә... мәкә-кә-кә-кә... хи-хи-хи... *(Ауа).*
Староста *(ятҡан еренән таяғын болғап).* Ни смит терелергә, ни смит! А-а-а-а! *(Олой).*
Бабай *(ырғып тора, йөҙөндә оло шатлыҡ).* Әллә-лә, иблис ҡарсыҡ, еңелдең! Сүлмәкте һин йыуаһың!

Шаршау

06.12.1947.

Ялҡау колхозсы

Ҡатнашалар:

Ғәптрүш – ялҡау.
Фариза – Ғәптрүштең ҡатыны.
Бригадир.
Фельдшер.

Насар ғына йыйыштырылған бүлмә. Уң яҡта мейес ауыҙы өңөрәйеп тора. Янындағы кескенә өҫтәлгә табаҡ-һауыт түңкәрелгән. Шунда уҡ иҙәндә -- күнәк менән һыу. Сәхнә уртаһында халыҡҡа ҡырыныраҡ ҡаратылып карауат ҡуйылған, одеал-япмаһы ике яғынан да иҙәнгә һәленеп төшкән. Шаршау асылғанда башына бүреген кейгән Ғәптрүш аяҡтарын карауат аратаһына күтәреп, ҡатҡан тунын боттары араһына ҡыҫтырған килеш салҡан ята. Күлдәге аҫтына ҡулын тығып ҡорһағын ҡашый.

Ғәптрүш. Уф! Был ҡатынды ни эшләтергә инде? Мунса яҡ, тигәнемә нисә көн, тыңламай бит тәки. Ҡортлатып үлтерер, ахырыһы *(башын тырнай).* Өҫтәүенә, ҡарға кеүек ҡарҡылдап әрләшкән була бит әле. Имеш, мин ата ялҡау, имеш, тороп сыбыҡ та һындырмайым -- көнө-төнө йоҡо һимертәм. Бына нисек тел сарларға батырсылыҡ итә бит ул ҡәһәр төшкөр шайтан думбыраһы. Тыңлап торһаң, иҫең китер. Уныңса шул: йылы өйҙә яҙылып ятып хәл алыу ҙа ялҡаулыҡҡа керә. Ялҡау булмайым, тип, һәнәгеңде күтәр ҙә ыжғыр буранда сәңге лә йөрө, имеш. Ятам икән, колхозда минән башҡаһы бөткәнме ни? Бер мин эшкә сыҡмағандан колхоз бураларының һайыҡмаҫ әле. Йә булмаһа мин эшләй тип байымаҫ *(тороп ултыра).* Туҡта, берәй нәмәһе юҡмы икән танау аҫтына ҡыҫтырырға? Ята-ята эс үткәште *(төшөп, әкрен генә бесәй аҙымдары менән мейес яғына йүнәлә).* Ҡәһәр төшкөрө яуыз ҡайтырҙан элек, тамаҡты туйҙырып алырға кәрәк *(өҫтәлдәге һауыттарҙың аҫтын әйләндереп ҡарай, сепрәк аҡтара, ләкин таба алмай асыуланып).* Ах яуыз, йылан аяғын киҫкән! Тыҡҡан бит икмәген йәһәндәмдең төбөнә! Миңә тимәгәйе өс көн ашатма, әммә барыбер өйҙән сығара алмаҫһың *(кире ятып, үҙалдына һөйләнә).* Их, ошо карауаттың аҫтында ғына аҙыҡ тултырылған тылсымлы баҙың булһасы! Асыҡҡаның ғына һайын, ҡулыңды тығып ал да һоғон, ал да һоғон, ләкин үҙе бер ҙә бөтмәһен ине! *(Бераҙ уйланып).* Ундай баҙың булыу түгел, Хоҙайҙан ялынып һорағаныңдың икенән бере үтәлеп торһа ла бик ярар ине әле. Хәйер *(бармағының осон маңлайына терәп),* боронғоларҙың әйтеүенә ҡарағанда, ысын күңелдән теләгән теләк үтәлмәйенсә ҡалмаҫ, ти. Бигерәк тә минең кеүек өҙөлөп теләүселәрҙең. Шулайғас *(күккә күрһәтеп),* нисек тә уларға хәлемде белдереү кәрәк. Ярҙам итерҙәр, моғайын. *(Ҡушҡулын рупор рәүешендә ауыҙына ҡуйып, күккә ҡысҡыра).* И Хоҙайым минең, хәлемде белеп аҙыраҡ ярҙам итһәңсе! Мин һинән күп һорамайым, бер ҡапсыҡ... *(Ҡапыл нимәлер иҫенә төшөп, мейес алдына елтерәй, иҙәндә ятҡан самауыр торбаһын алып, ауыҙына ҡуйып, иҙәндә ырғаңдап ҡысҡыра).* Бер ҡапсыҡ икмәк булһа ла етеп торор! *(Ҡоторонып һөрәнләй).* Фәрештәләр, изге фәрештәләр! Изге теләгемде Хоҙай Бабайға еткерегеҙ! Әгәр ҙә тулы ҡапсыҡты йөкмәп осоуы иеҙгә ауыр булһа, бүлеп-бүлеп кенә ташығыҙ. Пока бер ашауға бер икмәк кенә лә етеп торор. Ҡалғанын – һуңынан! Ишеттегеҙме?

Килтерегеҙ тиҙерәк,
Миңә ашарға кәрәк! (Бейей).

Тышта аяҡ тауыштары. Ғәптрүш бер секунд ҡына туҡтап тыңлап тора ла, торбаһын ташлап, йәшен тиҙлегендә карауат аҫтына йомола. Одеал ситен ҡайырып ҡына ҡарай. Ҡулына табаҡ тулы ҡамыр күтәреп Фариза инә.

Ғәптрүш *(карауат аҫтынан сыға-сыға һөйләнә).* Йөрөй тағы ваҡытһыҙ! Әллә бригадир инеп киләме тип торам. *(Табаҡтағы ҡамырҙы күреп шатлана).* Әһ-һә, ҡамыр иҙҙеңме?! Дауай-дауай, бешер тиҙерәк, юҡһа үҙәк өҙөлдө!

Фариза. Тәүҙә ишек алдына сығып ҡар көрә. Шунан ялғарһың.

Ғәптрүш. Ярай, күп ләпелдәмә, бешер тиҙерәк! Ҡар көрәмәйенсә лә бик оҫта һәпелдәтәм.

Фариза. Оçта булһаң, тап та аша. Һап-һау көйөңә көнө-төнө карауатта аунағаның өсөн һимертәйемме?

Ғәптрүш. Уй билем! Ай муйыным! Ауырығанға аунайым!

Фариза. Фельдшер сақыртайыммы?

Ғәптрүш. Ауыҙыңдан ел алһын! Укол ҡаҙатып, үлтертергә итәһеңме? Фельдшер түгел, ә бөп-бөтөн, бер түңәрәк көлсәң кәрәк миңә.

Фариза *(өçтәлгә ҡуйып ҡамыр баҫа).* Икмәкте бит ҡар аçтынан соҡоп ҡына сығармайҙар. Ашағың килгәс, эшләргә *лә* тейеш. Эшләмәһәң, тештәреңдең һыуын һурып ултыр.

Ғәптрүш *(йоҙроҡ йомарлап).* Етер, ҡанымды күп ҡыҙҙырҙың! Бирергә ҡалһа, Хоҙай бирә *лә* ҡуя ул.

Фариза *(мыçкыллап).* Түү-түү, күктән икмәк төшөп килә -- ҡапсығыңды киңерәк тот!

Ғәптрүш. Ә?! *(ышанып, башындағы кәпәсен алып тота).* Миңә бер кәпәсе *лә* етеп торор пока. *(Асыуланып, кәпәсен карауатҡа атып-бәрә).* Их һин, шайтан таяғы! Мине әллә кәзә урынына күрәһеңме? Икенсе телеңә һалышһаң, яҡшылыҡ көтмә. Һалдым-осорҙом, ятырһың һалма бешкәнсе! Уф билем! Ах муйыным! *(Карауатына ауып).* Дауай-дауай, өлгөрт көлсәңдә! Түҙер әмәл ҡалманы!

Фариза. Түҙә алмаһаң, туҙ кимер, ауырыуың биҙеп тайыр. Ауырыуға һалышып, эштән ҡасып ятаһың. Ә минең эштәр һинән башҡа *ла* етерлек *(ҡамырын ҡаплап, кейенеп сығып китә).*

Ғәптрүш *(ҡатынын ҡыуалатып).* Туҡта, ҡайҙа олаҡтың? Тәүҙә бешер икмәгеңде! *(Кире әйләнә).* Ах уңмаған *лә*тсә тел, күрһәтермен әле күрмәгәнеңде! *(Карауатына гөрһөлдәп ауа, карауат арҡаһын типкелә. Салбар бөрмәһе аçтына ҡулын тығып тырнай-тырнай һүгенә).* Тфү! Ҡанәскестәр, ҡоротҡостар! Инде һеҙ ҡалдығыҙмы мине йолҡҡоларға? *(Беттәрен алып ташлай).* Бөтәһе шул яуыз ҡатын арҡаһында – яҡмай бит мунса! Инде астан үлтерә. *(Ырғып тора).* Шалишь, яуыз, булдыра алмаçһың! *(Иҙәндәге торбаны тибеп ебәрә).* Үҙеңдең ҡаныңды эсермен! *(Өçтәлдәге ҡамырҙы тырыша-тырыша әүмәләргә тотона).* Уҡлауы ҡайҙа икән сәнселгерҙең? *(Эҙләнә, таба алмай).* Уныһын да йәшергән! *(Иҙәндәге балтаны алып, һабы менән ҡамырҙы йәйә башлай, үҙе ялт-йолт ҡарана. Ишек ягына).* Эште мин һинһеҙ ҙә көйләрмен, тик бригадир ғына килеп кермәһен. Көн дә эшкә әйтергә килә бит, мәлғүн! *(Мейес эсендә көлсә бешереп ала, һоғаланып ауыҙына тултыра. Ҡалғанын ҡуйынына тығып, икенсе көлсәне әтмәләй).* Тиҙерәк, тиҙерәк! Ҡулға эләккәндә күберәк умырып ҡалырға кәрәк. Шунан һуң өс көн буйына *ла* ялыныуһыҙ, тыныс ҡына карауатта донъя көтөргә мөмкин...

Ишек артында ҡапыл аяҡ тауыштары.

Бригадир. Эһем, Ғәптрүш өйҙәме?

Ғәптрүш *(бер секундҡа таштай ҡатып тауышты тыңлай, йөҙөндә тәрән ҡаушау. Асыуланып).* Шул, шул, әпсәнән тыумағыры! Бригадир! *(Ҡулындағы нәмәләрҙе шалтор-шолтор ырғыта ла карауат ягына атлыға, шул ыңғайы бер аяғын ҡүнәктәге һыуға тыға, күнәк, ауып, дыңғыр-даңғыр һөйрәлеп бара, Ғәптрүш һөрлөгөп*

йығыла. Ишектән бригадир күренә). Уй Хоҗайым, уй Хоҗайым! *(Карауат аçтына үрмәләп инеп китә).*

Бригадир. Туҡта, туҡта, ҡайҙа үрмәләйһең?! *(Ғәптрүштең аяғынан эләктереп тарта, ләкин ойого һурылып сығып бригадир салҡан ҡолай).* Ах шайтан! Ни эшләйһең һин унда, Ғәптрүш? Килгәнем һайын карауат аçтына шылаһың.

Ғәптрүш. Уй билем! Ай муйыным! Радикулит йонсота! Карауат аçтында шифалы ванна алам!

Бригадир. Беләм мин һинең ялҡаулыҡ радикулитын, сыҡ тиҙерәк! *(Балаҡтарынан тартҡан ыңғайы салбар һыпырылып сыға).* Ах шайтан!

Ғәптрүш *(тибәләнеп).* А-а-а-а, о-о-о-о! Ҡарауы-ы-ыл, талайҙар! Ыштанымды һалдырҙылар!

Бригадир. Кәрәк ине һинең бетле ыштаның! *(Салбарҙы карауатҡа ырғыта).* Күрһәтәйем әле мин һиңә ҡарауылды! *(Аяҡтарынан һөйрәп сығара).*

Ғәптрүш. Уй билем! Ай муйыным! *(Карауатҡа менеп ятып, салбарын ябына).* Ҡаты-ы-ын, ҡайҙа олаҡтың? Ауыҙыма ҡалаҡ менән һыу һал, йән бирәм!

Бригадир. Уф, бәләгә килеп ҡаптым! *(Ҡурҡып сигенә).* Баш китмәçе элек фельдшерҙы килтерәйем! *(Сығып йүгерә).*

Ғәптрүш *(шунда уҡ аһылдауҙан туҡтап, тороп ултыра, ашанырға тотона).* Ос йәһәндәмгә! Һинең кеүектәрҙе генә тишек кәмәгә ултыртырға беләм мин! *(Пауза).* Туҡта, тәҙрәнән ҡарайым әле. Юҡһа ҡапыл килеп инеүҙәре бар. *(Салбарын кейеп, тәҙрәгә бара).* Ах мөртәт, килә лә ята. Етмәһә, фельдшер ҡыҙҙы эйәрткән. *(Тиҙ генә кире ята).* Инде уныһын нисек кәкре ҡайынға терәтергә? Термометры менән эçелегемде үлсәһә... юҡ, ирек ҡуймам! *(Тышта мөңгөрҙәшеү)* Киләләр!.. *(Донъя ҡуптарып туларға, аҡырынырға керешә).*

Бригадир һәм ҡыҙыл тәреле сөмкәһен тотҡан фельдшер ҡыҙ инә.

Фельдшер. Оһо! Жарын үлсәргә кәрәк. Ярҙамлашығыҙ, ағай. *(Карауаттың ике ягына баçалар. Фельдшер термометрҙы Ғәптрүштең ҡуйынына тығырға иткәндә, тегеһе ике ҡулын ике яҡҡа һелтәп ебәреп, термометрҙы осора, бер йоҙрого бригадирҙың сикәһенә ҡундырыла. Карауаттың арғы башына тайпылыусыларға Ғәптрүш аяҡтары менән һелтәнә).*

Бригадир. Ғәптрүш, ни ҡылығың был?

Фельдшер. Тынысланығыҙ, Ғәптрахман ағай. Ҡайһы ерегеҙ ауырта?

Ғәптрүш. А-а-а-а! О-о-о-о!

Фариза инә.

Фариза. Был ни хәл, ни тауыш?

Бригадир. Ғәптрүшең йән бирә.

Фариза. Кит, әле генә минән ашарға таптырып аҡырына ине. *(Эргәһенә килеп).* Был ниндәй көлсә һыныҡтары? Йән биргәндә көлсә тыҡшыналармы?

Фельдшер. Ә шулай ҙа тынысландырыр өсөн укол ҡаҙайыҡ. *(Ҡулына ҙур шприц ала).* Һеҙ икегеҙ аяҡ-ҡулдарынан тотоғоҙ.

Ғәптрүш *(башын ҡалҡытып шприцҡа ҡарай).* А-а-а, кәрәкмәй! Унһыҙ ғына йән бирәм, тура ожмахҡа керәм! *(Тибәләнә).*

Фельдшер *(баш сайҡап).* Нишләргә инде хәҙер?

Бригадир. Китте баш, ҡалды муйын һерәйеп!

Тышта бер малай тауышы.

Тыштағы малай. Ғәптрүш ағай!

Ғәптрүш *(тына биреп тауышҡа ҡолаҡ һала ла тағы аҡырына).* Борсомағыҙ, йән бирәм!

Тыштағы малай. Ғәптрүш ағай, һине атайым саҡырҙы. Аш ашарға килһен, ти!

Ғәптрүш *(ҡапыл тынып, ырғып тора).* Ә?! Нимә? Аш, тиһеңме? Хәҙер барам, хәҙер! *(Иҙәндәге бәйләнә ялағап йығыла, һыңар бәйләне кейә-кейә һикерәңдәп йүгерә).* Ҡатын, ҡатын, тим! Һыңары ҡайҙа? Йәһәт артымдан алып сығ, тиҙерәк! *(Олаға).*

Фельдшер. Бына һиңә ауырыу!

Бригадир. Ялҡауҙың ауырыуы кеҫәһендә йөрөй тигәндәре бына ошолор инде.

Шаршау

29.10.1949.

Ҡыйыулыҡ дарыуы

Ҡатнашалар:

Егет.
Сәғиҙә.

Беренсе күренеш: егет.

Егет. Их, мин шат та инде бөгөн, үҙ ғүмеремдә былай шатланғаным юҡ ине. Уйламағанда бәхеткә тарыным, донъялағы иң ҙур, иң күркәм бәхет! Уның ҡаршыһында Билән тауың да, Йылан тауың да тырнаҡ ҡараһындай ғына күренә. Улай ғынамы! Хатта Казбек менән Эльбрусты килтереп ҡуйһалар ҙа минең бәхетем уларҙан бейегерәк буласаҡ. Хәҙер мин бөтә йәнем-тәнем менән шул бәхет тураһында ғына уйлайым, тулҡынланам. Их йөрәк, ниңә былай ныҡ тибәһең? Бер генә сәғәткә туҡтай бireп торһаңсы – аҙыраҡ тынысланыр, буласаҡ бәхетле күрешеүгәсә хәл йыйыр инем, исмаһам. Беләм, арымаҫ-талмаҫ юлдашымһың, бер секундҡа ла туҡтарға теләмәйһең. Шулай өҙлөкһөҙ дөпөлдәп хәрәкәтләндерәһең, мейемде аң нурҙарына мансыйһың. Ләкин ул ғына сәбәп түгел инде. Он тартыусы, ауылға электр уты биреүсе тирмән мөдире Сәфәр ағай ҙа бит әле бик йыш ҡына

моторын ял иттертә ләр тирмәне – хәрәкәтһеҙ, ә ауыл утһыҙ ҡала. Ләкин шуның өсөн берәү ҙә асыуынан башын электр бағанаһына бәреп ярғаны юҡ һис тә, хатта лаяҡын иҫеректәр ҙә дөм-ҡараңғы урам буйлап өйҙәренә иҫән-имен ҡайталар... Ярар, йөрәк дулаһа-дулаһын, бәхетемде ҡаршыларға әҙерләнергә кәрәк. *(Халыҡҡа ҡарап).* Һеҙ: "Ниндәй бәхет икән ул?" – тип аптырайһығыҙҙыр әле. Әйтһәм дә, һеҙгә генә әйтәм инде сер итеп. Теш арағыҙҙан сығара күрмәгеҙ! Ете йыл буйы бер ҡыҙҙы һөйөп йөрөнөм, тик ҡыҙ үҙе генә белмәне быны. Бөгөн тап шул һылыу менән ошонда осрашырға, ялҡынлы йөрәк серҙәремде, ниһайәт, асып бирергә ҡарар иттем. *(Сәғәтенә ҡарай).* Уф, ярты сәғәттән Сәғиҙә килеп етәсәк! Уф йөрәгем! *(Йөрөнә).* Ҡара көҙ тип торманым, тауҙан-тауға йөрөп, бынауы сәскәләрҙе йыйҙым *(төргәктән гөлдәмә сығара).* Их, ҡайһындай хуш еҫле улар! Иң элек Сәғиҙәкәйем менән ҡул ҡыҫышып күрешәсәкмен, үҙебеҙҙең ҡыл муйынсаҡлы өс айлыҡ быҙау кеүек, күҙҙәремде тултырып-тултырып күҙкәйҙәренә ҡараясаҡмын. Бына ошолай... Шулай күңелкәйен бераҙ йомшартҡас:

Сәғиҙәм, бәгерем,
Йөрәгем-тамырым,
Эсәгем-һөйәгем,
Тик һине һөйәмен! –

Тип үҙем сығарған гүзәл шиғыр менән иҫен-аҡылын аласаҡмын. Был шиғырҙан һуң һылыуым ҡамырҙай йомшаясаҡ. Шунан уның алдына теҙләнәм дә ошо гүзәл сәскәләрҙе бүләк итәм. Бынан һуң инде ҡыҙ ҡалас ҡамырылай ҡулымда тамам әүәләнеп:

Әүбәкерем, йәнем, һөйәм мин һине, һөйәм! – тип муйынға асылынасаҡ. Ә артабан?.. Түрәбеҙҙең еңел машинаһын алаһы ла Бюро ЗАГС-ҡа елдерәһе генә ҡала. *(Уйланып).* Уныһы шулай ҙа ул... Тик ошолай матур итеп әйтеп булырмы икән уға был һүҙҙәрҙе? Ҡыҙҙар менән осрашҡанда ҡойолам да төшәм бит... Бөтәһен онотам, телем бригадир Фәйзрахман ағайҙың дилбегәһеләй ҡырылмаһа ҡырҡ урындан төйнәлә ләр бөтә шул. Ауыҙым асылһа ла, былбыл итеп осоролоҡ һүҙ тапмайым. Шуға күрә ете йыл буйы һиҙҙертмәй йөрөнөм дә инде... Их был ғалимдарҙы! Күктә әйләнгән бер Ай етмәгәндәй булып, йыһан төбөнә әллә ниндәй юлдаштар осоралар, ә тормошта миндәйҙәргә шундай кәрәк әйберҙәр тураһында уйламайҙар. Ғишыҡ утында төтөнһөҙ генә янып йөрөгән егеттәр өсөн дә берәй нәмә уйлап тапһындар ине! Моғайын, яһалма Ҡояш та яһарҙар әле улар, ләкин минең ете йыл буйы Сәғиҙәкәйемә эс серҙәремде сисә алмай йөрөүемде һис иҫәпкә алмаҫтар. Бынауы үҙебеҙҙең шәп тимерсе Рәшит ағай ғына сүкеп бирһә лә ярар ине әле ул ҡыйылатҡысты! Их, юҡ шул миндә ҡыйылығ! *(Сәғәтенә ҡарай).* Егерме минут ҡалды, телем-телгә йоҡмаҫлыҡ итеп ятларға кәрәк шиғырҙы!

Сәғиҙәм, бәгерем,
Йөрәгем-тамырым,
Эсәгем-һөйәгем,
Өҙөлөп һөйәмен!

Ух, бөттөм, юғалдым, сәнселдем, ҡаҙалдым! Тел тотлоға... Ҡыйыулыҡ та самаланып бара, буғай *(йөрәген тотоп ҡарай).* Йөрәк ҡотора! Ни эшләргә, ни әмәлен табырға? Әһә, һатыусы ағай әйткәне иҫкә төштө! Ваҡыт бар әле, кибетенә бара һалып, ҡыйыулыҡ дарыуынан берәр йөҙ грамды төшөрөп киләйемсе *(Йүгереп сығып китә).*

Икенсе күренеш: егет ҡыҙмаса булып инә.

Егет. Бына нисек булдыралар уны беҙҙә! Ҡыйыулыҡ дарыуын ситтән эҙләйһе юҡ, ул үҙебеҙҙең Кузьма ағайҙа ла етерлек. Хәҙер мин әллә ниндәй бүреләр, айыуҙар, дейеү бәрейҙәре, хатта Сәғиҙәнең үҙе килеп торһа ла ҡурҡмаясаҡмын! Мин ҡыйыу! Ете йыл буйы өндәшә алмай йөрөгән заманалар үтте инде. Конец! Капут! Их һин минең ҡәҙерле гөлсәсәгем, букет-гөлдәмәкәйем! Һинең менән беҙ хәҙер һөйөклө Сәғиҙәкәйемде күрербеҙ һәм... *(гөлдәмәне үбә)* супылдатып үбеп тә алырбыҙ. “Суп!” иттереп! Һин был донъялағы иң аҫыл егеттең һөйгән ҡыҙы менән нисек итеп һөйләшеүен күрерһең. Ҡыуан, гөлдәмә, ҡыуан, ҡыуан, ҡыуан! *(Гөлдәмәне һикертә башлай).* Һәпестә-һәпестә, бигерәк матур бәпес тә! Туҡта, мин ысын егеткә әүерелдемме һуң әле? Ҡыйыулығым етерлекме? Етмәҫ әле. Туҡта, йәһәт кенә йәнә кибеткә барып киләйем, Кузьма ағай ни әйтер икән? *(Сығып китә).*

Өсөнсө күренеш: егет йырлай-йырлай инә.

Егет *(көйләп):*

Сәғиҙәм, бәгерем,
Тамырым, ҡамырым,
Эсәгем, сәксәгем,
Әсеһен, сөсөһөн!

Сәғиҙәм, йәнем, бәғерем, мин... кемде өҙөлөп һөйәм? *(Йығыла).* Һине һөйәм, һине! Һүп! Һүп! *(Иҙәнде ҡат-ҡат үбә).*

Тәҙәрәгә килгәндәр,
Шыңғыр күлдәк кейгәндәр,
Шыңғырлатып һөйгәндәр...

Һүп! *(Үҙенең иҙәндә аунаған фуражкаһын үбә).* Спорт... шопорт көйөнә, шопорт көйөнә!

Дүртенсе күренеш: егет, Сәғиҙә.

Сәғиҙә. Абау, ниндәй суска аунап ята?

Егет *(тора, теле көрмәлә).* Шопорт... Сәғиҙә... Сәғиҙә... бауырым... Сәскәм ҡайҙа? *(Иҙәндә ятҡан һеперткене алып артына йәшерә).*

Сәғиҙә. Абау, ни күренә күҙемә? Әбүбәкер, һинме был?
Егет. Сәғиҙәм... бәғерем... *(талпынған ыңғайы тәгәрәй, тороп, ҡыҙға яҡынлай).*

Сәғиҙә, бағорым,
Көрәгем, тимерем,
Көсөгөм, һөлөгөм...

Ҡыҙға бүләк итеп һеперткене һуҙа ла уның алдына теҙләнәмен тигәнсе салҡан әйләнеп төшә, шул ыңғайы хырылдап йоҡлап китә. Ҡыҙ ҡулдарын йәйеп ҡатып ҡала. Сәхнә артында ауаз: “Бына һиңә ҡыйыулыҡ дарыуы!”

Шаршау

1950.

Ер аҙығы

Ҡатнашалар:

Бикмәй – колхоз председателе, 45 йәштә.
Ғиндан – бригадир, 35 йәштә.
Бағау – сөгөлдөр үҫтереүсе звеновод, 21 йәштә.
Йомағол – пенсионер, 65 йәштә.
Йосоп – хисапсы, Ғиндандың ярҙамсыһы, 18 йәштә.
Мәғәнәһеҙ яңғырауыҡ һүҙҙәр ҡыҫҡырырға ярата.
Байғазина – партияның өлкә комитеты инструкторы.

Ваҡиға колхоз идараһында бара.

I сәхнә

Ғиндан, Бағау, Йомағол

Бағау. Ер аҙығы кәрәк! Ишетәһегеҙме, ер аҙығы кәрәк, тим! Әгәр быйыл да ашламалар менән тәьмин итмәһәгеҙ, мин сөгөлдөр үҫтереүҙән баш тартам!

Ғиндан. Туҡта, һин ни һөйләйһең? Беҙҙең партия һәм дәүләтебеҙ...

Бағау *(бүлдертеп).* Ағай, партия һәм дәүләтебеҙҙең ни ҡушҡанын туҡыма. Уны һинһеҙ ҙә бик шәп беләм. Һин миңә шуны әйт: ҡасан колхоз етәкселеге сөгөлдөрҙө мыҫҡыл итеүҙән туҡтар?

Ғиндан. Ҡустым, һин үлсәберәк һөйләш. Берәү ҙә сөгөлдөрҙө мыҫҡылларға йыйынмай. Баҫыуҙарыбыҙҙың алтын ҡаҙығы ул.

Йомағол. Пргаҙир, һине тыңлап ултырам да уйға ҡалам. Элекке заманда “алтын ҡаҙыҡ” тип атаның һөйөклө улына әйтә торғайнылар. Әммә беҙҙең сөгөлдөрҙәр һис кенә лә һөйөлгәнгә оҡшамай. Үгәй әсә ҡулында астан киҫелгән

балалай йонсоп, япраҡтары һарғайып, ҡорошоп-сорошоп ултыралар, бисараҡайҙар.

Бабай. Хаҡ һөйләйһең, олатай. Беҙҙең сөгөлдөр ысынлап та аҫҡа интегә.

Ғиндан. Аҡты ҡараға бутама әле, бабай. Үткән йәй ҡоро килде, шуға күрә сөгөлдөрөбөҙ ҡолас кирә алманы. Һалам аҫтына ут төртөп, кеше ҡотортоп йөрөмә, бабай.

Бабай. Тиреҫ кәрәк, тиреҫ! Һәм химик ашламалар! Әгәр ергә тейешлеһен индерһәң, ҡоролоҡло йылдарҙа ла арыу уңыш алып була.

Ғиндан. Һис кем һинең аяҡ-ҡулыңды бәйләп тотмай ҙаһа, ҡустым. Яула, үҫтер, шатландыр Ватанды! Ер аҙығы тураһында бер һин генә янып-көймәйһең, беҙ ҙә ҡайғыртабыҙ уны. Идара әллә ҡасан уҡ минераль ашлама һорап "Сельхозтехника"ға ҡағыҙ атҡарҙы. Дәүләтебеҙҙән кредит та юлланыҡ.

Бабай. Беҙҙең баҫыуҙарҙың күбеһенә органик ашлама кәрәк. Ә был байлыҡ ферма артында тауҙай өйөлөп ята.

Ғиндан. Тиреҫ сығарыуҙың мәшәҡәте ҙур, ҡустым. Күпме транспорт кәрәк. Ә минералдың эш башҡаса – услап та һибеп була.

Йомағол. Һе! Мәшәҡәтһеҙ икмәкте лә ашап булмай, пргаҙир. Бабай улым әйтмешләй, тиреҫкә зарыға беҙҙең ер. Йыл да һөрөп-сәсәбеҙ, ә тупраҡты ашатырға онотабыҙ. Шул арҡала саңға әйләнде баҫыу. Ә һин унда, аҡса түләп алып, йәнә саң һибергә итәһең. Элек беҙ, ҡәһәр төшкөрө яңғыҙаҡ заманда, ағас сөй батырҙай урынға тимер сөй ҡаҡмай торғайныҡ. Кеҫәңдәге аҡсаң әтәс булып ҡысҡыра һинең.

Ғиндан. Яңғыҙаҡ замандар үткән инде, бабай. Хәҙер – колхоз, бөтәһе алдынғы ғилемгә таянып эшләнә. Аҡса мәсьәләһенә килгәндә, береһен үлтермәй тороп, икенсеһен терелтеп булмай, тип тә әйткән боронғолар. Эйе, беҙҙең өсөн иң ҡулайлыһы – минераль ашлама!

Бабай. Уны берәү ҙә кире ҡаҡмай. Ул – ҡиммәтле ер аҙығы. Ләкин тиреҫ менән дуҫлашһа – уңа.

Йомағол. Колхозыбыҙҙың ауыҙын асһа үпкәһе күренеп тора. Шул көйөнсә һин, пргаҙир, эш хикмәтен бер минералға ҡайтарып ҡалдыраһың. Ыштанһыҙ билгә ҡайыш билбау түгелме был? Әлегә йүкә бауы ла ярап торор. Аҙ-маҙ мус туплап, ыштанды ипләгәс, ҡайышын да алып быуырбыҙ.

Бабай. Үҙебеҙҙең органиканы ҡулланһаҡ, баҫыуҙарыбыҙҙы бер ниндәй ҙә кредит-маҙарһыҙ ер аҙығына туйҙырырбыҙ.

Ғиндан. Органик ашламаның көсөн үтә шаштырып ташлайһың, ҡустым. Беҙҙең ҡоролоҡло дала шарттарында ул файҙа бирмәҫ – ундағы файҙалы матдәләрҙе иретергә дым етешмәй.

Бабай. Ха-ха-ха! Былтыр мин бер гектар ерҙе тиреҫләгәйнем, үҙегеҙ күрҙегеҙ, ошоғаса булмаған уңыш алдым.

Йомағол. Улым дөрөҫ әйтә. Былтыр мин дә унан күреп баҡсамды тиреҫләгәйнем, быйма башы ҙурлыҡ картуфтар йыйып алдым.

Ғиндан. Осраҡлы уңыш! Әйтәм бит, ямғырһыҙ шарттарҙа тиреҫ ҙур эффект бирмәй. Быны ғалимдар раҫлай.

Бабай. Ҡайһы ғалим?

Йомағол. Ғиндан-ғалимдыр, улым.

Ғиндан. Һин, Баһау ҡустым, ҡарт-ҡороно тыңлама, ә бөтә колхоз масштабында фекер йөрөтөргә өйрән. Әгәр беҙ ҙур габаритлы органиканы ташып ғүмер уҙҙырһаҡ, башҡа эштәребеҙҙе кем башҡарыр? Кем малға бесән килтерер, кем яҙғы сәсеүгә әҙерләнер? Уның өсөн ни тиклем көс, ылау, ваҡыт кәрәк! Тоҡҡа тултырылғанға етмәй ул, ҡустым. Эше лә еңел, аҙағы ла тыныс. Үҙ башыңа үҙең бәлә саҡырһың!

Йомағол. Юрғаныңа ҡарап аяҡ һуҙырға кәрәк, пргаҙир.

Баһау. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы – миңә ылау, кешеләр бир бөгөндән. Сөгөлдөр баҫыуын ашларға тотонам.

Ғиндан *(көлөп).* Тотон, тотон, һүҙең һүҙ булһын.

Баһау. Ҡабатлап әйтәм: ылау һәм кешеләр!

Йомағол. Егеттең башын ҡаңғыртма, әмереңде асыҡ әйт, пргаҙир.

Ғиндан. Был мәсьәлә бөгөн миңә ҡағылмай. Ярҙамсым Йосопҡа мөрәжәғәт итегеҙ.

Баһау. Юҡ, мин һиңә мөрәжәғәт итәм. Бригадир – һин!

Ғиндан. Мин бөгөндән бригадир түгел.

Йомағол. Бәй, кем әләйһә? Тәхетеңдән ҡолаттылар ҙамы ни?

Ғиндан. Председатель өлкә кәңәшмәһенә китте – шуның вазифаһын башҡарам. Минең вазифаны Йосоп башҡара.

Баһау. Эт – эткә, эт – ҡойроҡҡа икән дә... *(Сыға).*

Йомағол. Тишек кәмәгә ултыртыуҙары ошо була инде ул, улым.

Ғиндан. Ҡарт, дезорганизовать итәһең!

Йомағол. Ҡустым, һин безорганизовать итәһең.

Ғиндан. Һин кем, әйтәйемме? Йылан аяғын ҡыйған төлкө!

Йомағол. Ә һинең эштәрең – көлкө *(сыға башлай).*

Ғиндан. Һәй, ҡартлас, телең дегеткә ҡанған ҡамсылыр һинең!

Йомағол. Ҡамсы, тараҡан түрәләрен ҡайыҙлай торған ҡамсы *(сыға).*

Ғиндан. Тфү-тфү, телеңә төйөр сыҡҡыры!

II сәхнә

Ғиндан, Йосоп.

Йосоп *(ҡағыҙ болғап).* Телеграмма, телеграмма! Фонограмма, криптограмма! Апофеоз, бенилюкс!

Ғиндан. Тфү, шайтан алғыры малай, ҡотто осорҙоң бит! Ни һөрәнләйһең, ниндәй телеграмма?

Йосоп. Феномен, баритон, резонанс! Бикмәй ағайҙың үҙенән – председателдән!

Ғиндан. Йә, йә, ни һуға?

Йосоп. Грандиоз яңылыҡ, уҡыйым: “Кәңәшмә тамам тчк беҙҙең колхоз территорияһында ҡиммәтле ашлама склады тчк транспорт әҙерләргә тчк”.

Ғиндан. Бына һиңә иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ. Ҡайһы тәңгәлдә икән ул ҡиммәтле склад, әйтмәгәнме?

Йосоп. Әйтмәгән. Әммә тимер юл буйындалыр, әлбиттә. Бер көндө салышкүҙ Ғилман тимер юл станцияһына әллә нисә вагон минераль ашлама килеп туҡтағанын күреп ҡайтҡайны.

Ғиндан. Минераль ашлама? Ауыҙыңа бал да май, ҡустым!

Йосоп. Мулыраҡ сумырып ҡалырға кәрәк, ағай, бүтән колхоздар өлгөрмәҫе боронораҡ!

Ғиндан. Хужа шуның өсөн һуҡҡан да инде телеграмманы. Ҡуҙғалайыҡ, мырҙа, ҡуҙғалайыҡ, юҡһа һемәйеп ҡалыуыбыҙ бар. Халыҡты аяҡҡа баҫтыр, бөтә булған тартыу көстәрен тәртә араһына индер. *Любой момент юлға сығырға әҙер торайыҡ.*

Йосоп. Есть! Айн момент! Гибралтар, балтасар, гонорар! *(Сығып йүгерә).*

III сәхнә

Ғиндан, Баһау.

Баһау. Шуны әйтегеҙ: сөгөлдөр кәрәкме һеҙгә, юҡмы? Әллә күҙ буяу өсөн генә сәсәбеҙме уны?

Ғиндан. Кәрәк, ҡустым, бик кәрәк! А как же! Сөгөлдөрһөҙ бер ҡайҙа ла бара алмайбыҙ.

Баһау. Шулайғас, ниңә ҡаңғыртаһығыҙ? Йособоңа барғайным, ылау бирегү тураһында ҡолағына ла элмәне. Үҙең өҙөп әйт!

Ғиндан. Ылау булмай.

Баһау. Нисек булмай?

Ғиндан. Просто булмай ҙа ҡуя, и все. Тиреҫеңә ҡарағанда ла мөһимерәк улъя бар.

Баһау. Бөгөн унан да мөһимерәктең булыуы мөмкин түгел! Былай мәсхәрә ҡылһағыҙ, өҫтөгөҙҙән райкомға ялыу яҙам.

Ғиндан. Яҙ, яҙ, ҡустым.

Баһау. Яҙырмын да!

Ғиндан. Яҙ, яҙ, ҡустым *(Баһауҙың танауынан тотоп һелкей).* Йә, асыуың һүрелдеме? Бушҡа дауыл ҡуптараһың. Быйыл да беҙ тиреҫһеҙ обойдемся.

Баһау. Тимәк, быйыл да шул бармаҡ йыуанлыҡ сөгөлдөр үҫтертмәксеһең?

Ғиндан. Ҡыҙма, егет, ҡыҙма! *(Ҡосағын киреп күрһәтә).* Быйыл беҙ бына ошо йыуанлыҡ сөгөлдөр үҫтерәсәкбеҙ. Уның ғына түгел, арпаның, бойҙайҙың, тарының уңышын да ҡырҡа күтәрәсәкбеҙ. Мә, уҡы телеграмманы, төшөнөрһөң айышына *(түш кеҫәһенән сығарып телеграмманы бирә).*

Баһау *(уҡып).* Төшөнмәйем. Ҡайҙан сыҡҡан был әкәмәт?

Ғиндан. Әкәмәт түгел, ҡустым, хаҡиҡәт! Хужа белмәй һуҡмағандыр. Бына-бына үҙе ҡайтып төшәсәк һәм складтан ер аҙығы ташый башлаясаҡбыҙ. Бөтә ылау һәм ресурстар – тик шуға! Туҡта, тимер юлдың склад мөдиренә шылтыратайым әле, ул минең яҡын дуҫым *(телефондан шылтырата).* Алло, алло! Һинме был, Моталлап Зарипович? Һау ғына йөрөп ятыумы? Кем, тиһеңме? Мин, мин – Ғиндан дуҫың. Эйе, эйе. Моталлап Зарипович, ҡарале, һеҙгә минераль ашлама

килгән тиҙәрме? Ҡарале, Моталлап Зарипович, һин уны бүтән колхоздарға ысҡындырмайыраҡ тор әле. Эйе, беҙ алабыҙ бөтәһен дә, бөтәһен дә! Беҙҙең заявка беренсе сиратта тора, унан килеп, беҙ – артта ҡалған колхоз. Артта ҡалған колхоз, тим. Эйе, иң тәүҙә беҙгә тейеш, сөнки ныҡ артта ҡалған! Директорығыҙ менән беҙҙең Бикмәй Рамазанович өлкәлә, беләһең. Уртаҡ тел табышҡандар. Шулай итегеҙ, шулай итегеҙ. Пока, Моталлап Зарипович! *(Трубканы ҡуя, устарын ыуалап).* Эштәр бешә, Баһау ҡусты! Туҡһан туғыҙ процентҡа тәьмин ителдек. Онот, егет, ташландыҡ тиреҫ тауыңды – егерменсе быуаттың аҙаҡҡы ярты һында йәшәйбеҙ! Химия фәне ете милле аҙымдар менән киңлек яулаған заманда органикаға йәбешеп ятыу – алйотлоҡ!

IV сәхнә

Ғиндан, Баһау, Йомағол.

Йомағол. Бик шыма һыҙыраһың, пргаҙир. Йәғни ярмаңды бик эре ярҙыраһың. Йомшаҡ түшәп ҡатыға ултыртмаһаң ярар ине.

Баһау. Яңылышаһың, Ғиндан ағай. Ашламаның бер төрөнә генә табыныу – һыңар терһәккә таяныу. Икеһен дә урынын, ваҡытын белеп ҡулланыу фарыз. Әммә беҙҙең ошо наҡыҫ көнкүрештә урындағы мөмкинлеккә көс һалыу реаль булыр ине.

Ғиндан. Ярай, ярай, үҙ фекереңдә ҡал, ҡустым. Әммә барыһы мин әйткәнсе барасаҡ. Себештәрҙе көҙ һанарбыҙ.

Йомағол. Себештәреңсығырмы икән, пргаҙир? Серетке баҫтыртаһың.

V сәхнә

Ғиндан, Баһау, Йомағол, Йосоп.

Йосоп. Сенсация! Клептация! Бикмәй ағай ҡайтып төштө!

Ғиндан. Шулаймы? Улайһа, хәҙер үк ул бында килеп етәсәк. Ылау, ылаусылар әҙерме?

Йосоп. Әп-әҙер! Саналарға тәрән йәшник ултыртылған. Ҡапҡа төбөндә көтәләр.

Ғиндан. Бынығы шәп!

VI сәхнә

Ғиндан, Баһау, Йомағол, Йосоп, Бикмәй.

Бикмәй. Иҫәнмеһегеҙ *(өҫтәл артына үтә).* Йә, нисек тәгәрләй эштәр? Телеграмманы алдығыҙмы?

Ғиндан. Алдыҡ. Ылауҙар һым ылаусылар любой момент юлға сығырға әҙер, Бикмәй Рамазанович.

Баһау. Кәңәшмә нисек үтте, ағай?

Бикмәй. Шәп үтте. Докладтарҙан әле булһа ҡолаҡ зыңлап тора.

Баһау. Телеграммала ниндәй ашлама складын атанығыҙ? Ысынмы шул?

Бикмәй. Бәй, ысын булмайса! Ысын, иптәш сөгөлдөрсө, бик ысын! Ул ашлама баштан ашҡан! Арымай-талмай баҫыуыңды ашлаһаң, күр ҙә тор, быйыл көҙгә үк күкрәгеңә орден ҡаҙаясаҡтар. Сап-саф минераль ашлама – сүбе лә юҡ, мәшәҡәте лә аҙ, һинең органигың ише түгел. Шатланырға кәрәк, ҡустым!

Йомағол. Ай-һай, аҙаҡ иларға тура килмәгәйе. "Иртә саҡырған кәкүктең башы ауырта", тигәнде онотмағыҙ, мырҙалар.

Ғиндан. Ҡарҡылдама, ҡарт бүре! Ни юл менән баҫтығыҙ ул хазинаның өҫтөнә, Бикмәй Рамазанович?

Бикмәй. Уйламаған-көтмәгәндә килеп сыҡҡан хәл инде. Кәңәшмәлә тәнәфес ваҡытында тәмәке тартып тора инем, эргәмә икенсе секретарь үҙе килеп, һүҙ башланы: "Ни өсөн колхозығыҙ аҡһай?" Бәйнә-бәйнә теҙҙем дә бирҙем эсемдәген. Аҙаҡ: "Әгәр дәүләттән ашлама бирелһә, бер-ике йыл эсендә аяҡҡа баҫыр инек", -- тип осланым. Ҡолағына һалып, бераҙ уйланып торҙо. "Үҙегеҙҙә юҡмы ни ул?" – тип һораны, күҙҙәремә тура ҡарап. "Ҡайҙан булһын, "Сельхозтехника" ҡайғыртмай", -- тип тура яуапланым. "Миңә мәғлүм булыуынса, ҡул аҫтығыҙҙа ғына меңәрләгән тонна ҡиммәтле ашлама склады бар, ниңә ҡулланмайһығыҙ? Үҙем ярҙам итермен, ахыры, һеҙгә уны табырға", -- тине серле итеп секретарь. Шунда ғына үҙебеҙҙең эргәләге тимер юл станцияһына минераль ашлама килтереп бушатыуҙарын иҫемә төшөрҙөм дә әйтә ҡуйҙым: "Һеҙҙән булышлыҡ көтәбеҙ, иптәш секретарь!" – "Ярар, булышырмын", -- тине.

Ғиндан. Ҡайҙан күреп-белеп тора тиерһең, ә?!

Бикмәй. Моғайын, теге ваҡыт үҙебеҙгә килеп киткән корреспондент тишкән уға.

Йомағол. Ә-ә-ә, теге күн тужурка кейгән оҙон һираҡмы? Ҡәләме бик осло күренә ине шул. Таң тишегенән ат эҙләргә тип сыҡһам, фирмы артындағы тиреҫ тауында соҡсона. "Улым, әллә балыҡ ҡармаҡларға селәүсен ҡаҙаһыңмы?" – тигән булам. Ҡысҡырып көлдө лә былай ти: "Алтын ҡаҙам мин, бабай. Көтмәгәндә ошондай бейек алтын тауға юлыҡтым!" Үҙе атаған "алтын тау"ҙың бейеклеген, оҙонлоғон яҙып алды дәфтәренә. Ҡәләме осло икән...

Йосоп. Антропос! Тирмәнең ярҙыртып тарта -- әкиәт һөйләмә, олатай!

Йомағол. Ә һин осоҡ бәрейе кеүек сапсынма. Ауыҙыма келәп һала алмаҫһың!

Бикмәй. Урындағы етәкселек тураһында ниҙәр әйтте осло ҡәләм, хәтерләмәйһеңме?

Йомағол. Нишләп хәтерләмәй, ти, әллә алйығанға һанайһығыҙмы?

Бикмәй. Нимә тип һуҡаланы, колхоз етәкселеге дөрөҫ бара, тинеме?

Ғиндан. Бригадала эштәр шәплеген әйттеме?

Йомағол. Етәкселек-митәкселек, прагат-мрагат тураһында уны-быны һөйләмәне. Әммә һеҙҙең шәхсәнә үҙегеҙ тураһында бер-ике ауыҙ һүҙ ысҡындырҙы.

Бикмәй, Ғиндан *(икеһе бер юлы).* Йә, йә?!

Йомағол. Прсиҙәтелегеҙ мал көтә белмәгән көтөүсе, пргаҙирығыҙ көтөүсегә ярҙам итә белмәгән һуҡбай, тине.

Бикмәй. Ҡхым-ҡхым... *(Йүткерә).*

Ғиндан. Һә-һә-пчи! *(Сөскөрә).*

Бикмәй. Кем унда ишекте шар-асыҡ ҡалдырған? Сквозняк елгәнен күрмәйһегеҙме?!

Ғиндан. Ябығыҙ ишекте!

Йосоп. Бронхит! Стриптоцид! Грип-поза! Арттарын йыйнап йөрөй белмәйҙәр, сарматтар! *(Барып ишекте яба).*

Йомағол. И Илаһым, был заманда грип күп гиҙә башланы!

Бикмәй. Бабай, эшләргә мишайтлайһың!

Йомағол. Ҡыҙғанып әйтәм инде. Варис тигәнең ниграмутный икән шул – нәсәлниген-патсинунныйын ҡарап тормай йәбешә.

Йосоп. Варис түгел, ә вирус!

Йомағол. Миңә ҡалһа, барыбер.

Ғиндан. Теле оҙон һаҡалтайҙарға күберәк йәбешһен ине ул. Йәшәрен йәшәгән, ашарын ашаған улар.

Йомағол. Йүкә өҙөләме, ҡайышмы -- уныһын Алла белә *(сыға).*

Бикмәй. Ну лә́тсә тел!

Ғиндан. Шайтаны бойора, тирһең.

Йосоп. Дыңғырҙауыҡ барабан. Йәки шағырҙауыҡ арба күсәре. Реликт!

Бикмәй. Корреспондент тигәне арт һабаҡты уҡыттыртмаһа ярар ине. Тиреҫтә соҡоноп йөрөүендә ғиллә бар. Яҙғыһын кукуруз баҫыуына һибергә тип ҡайтарҡан бөртөклө суперфосфатты ҡайҙа иттең? Әллә шунда күмдерттеңме?

Ғиндан. Што һин, Бикмәй Рамазанович, аҡылдан яҙмаған бит. Беҙ уны йылғаға ауҙарҙыҡ. Балыҡтарға ашарға, хи-хи-хи...

Бикмәй. Ҡара уны, осо килеп сығыр булһа, башыңды киҫермен!

Ғиндан. Һем... Ҡасан складҡа ылау юлландырабыҙ, Бикмәй Рамазанович?

Бикмәй. Бәләкәй сабыр итәйек. Әйттем бит, булышырға өлкә комитетынан секретарь үҙе тәғәйенләгән инструктор киләсәк. Юлға минең менән бер ҡатарҙан сығасаҡ ине.

Ғиндан. Әҙер торайыҡ, Бикмәй Рамазанович.

Бикмәй. Как штык һерәйегеҙ!

VII сәхнә

Бикмәй, Ғиндан, Йосоп, Баһау, Байғазина, һуңынаныраҡ Йомағол.

Байғазина. Сәләм, иптәштәр! Партияның өлкә комитеты инструкторы Байғазина (*(һәммәһе менән ҡул биреп күрешә).* Колхоз председателе һеҙ булаһығыҙмы?

Бикмәй. Эйе, мин булам. Рәхим итеп түрҙән уҙығыҙ, иптәш Байғазина.

Байғазина. Ашламалар мәсьәләһе буйынса һуғылғайным.

Бикмәй. Бик яҡшы, бик яҡшы, иптәш Байғазина. Беҙгә уны бөгөндән үк ташый башларға мөмкинме? Ҡасан юлланырға складҡа?

Байғазина. Миңә тимәгәйе, хәҙер үк юлланығыҙ.

Ғиндан. Булған ашламаның бөтәһен дә бирҙертәһегеҙҙер бит беҙгә?

Байғазина. Әлбиттә.

Бикмәй. Дөрөҫ эшләйһегеҙ, иптәш Байғазина, сөнки беҙ – артта ҡалған хужалыҡ

Ғиндан. Дәүләтебеҙ туҡтауһыҙ биреп торһа, алға ла сығырбыҙ.

Бahay. Байғазина иптәш, урындағы ашламалар ҙа бик күп бит.

Байғазина. Беләм, ҡустым, беләм. Үҙең кем булып эшләйһең?

Бикмәй. Беҙҙең сөгөлдөр үҫтереүсе ул, иптәш Байғазина. Йәшлек – йүләрлек, тигәндәй, саҡ ҡына иҫәрлеге бар: минераль ашламаларҙың ҡәҙерен белеп еткермәй. Органик, ти ҙә ныҡыша.

Байғазина. Һммм... Бик ҡыҙыҡ. Һеҙ үҙегеҙ ҡайһы ашлама яҡлы һуң?

Бикмәй, Ғиндан. Минерал яҡлы, әлбиттә!

Бикмәй. Беҙ алаһы ашлама аммоний сульфатымы, әллә суперфосфатмы?

Байғазина. Уныһын арҙаҡлы аҡһаҡалығыҙ Йомағол ағай әйтер.

Бикмәй, Ғиндан. Ә?!

Тулы ике моҡсай күтәреп Йомағол инә.

Йомағол. Әссәләмәғәләйкүм, мөмкинме?

Байғазина. Әйҙә, ағай, әйҙә, килтер моҡсайҙарыңды. Етәксе иптәштәр үҙҙәренә ниндәй ашлама кәрәклеген белергә теләйҙәр.

Йомағол. Уф, ну йүгерҙем дә һуң, һеңлекәш! Үҙегеҙ бойорғанса, тап әлеге корреспондент соҡсонған “алтын тау”ҙан тултырҙым. Ер аҙығыбыҙ шундай матур, шундай матур, Байғазина һеңлекәш – буталлы һандыҡтарға ғына һалып ташырлыҡ алтын! *(Моҡсайҙарҙы өҫтәлгә һала).*

Байғазина *(моҡсай ауыҙҙарын сисеп).* Бына, күрегеҙ алаһы ашламаларығыҙҙы.

Бикмәй менән Ғиндан эйелеп, маңлай төкөшәләр.

Бикмәй. Тир-тир... тиреҫ?! *(Ултыра төшә).*

Ғиндан. Ти... ти... ти... *(Ҡатып ҡала).*

Бahay. Бына был, исмаһам, мин тигәнсә ер аҙығы!

Йомағол. Ә Бикмәй менән Ғиндан мырҙаларға был – сир ҡаҙығы!

Байғазина. Районығыҙға туҡталып, колхозығыҙҙың тупраҡ картаһын ҡараным. Баҫыуҙарығыҙ хәҙер, химик ашламанан да бигерәк, органик матдәләргә мохтаж. Бөгөндән башлап ылауҙарығыҙҙы егегеҙ, фермағыҙ артындағы “алтын тау”ҙы баҫыуҙарға сығарығыҙ. Һеҙҙең ҡулда районығыҙҙағы иң затлы органик ашлама склады! Бындай ҙа ҙур хазина барҙа гектарынан мең центнер шәкәр сөгөлдөрө үҫтереп алырға мөмкин. Ә һеҙ һаман ике ҡуллап дәүләт муйынына аҫылынғанһығыҙ, бәпес булып имергә күнеккәнһегеҙ! *(Сыға).*

Бикмәй *(маңлай тирен һөртөп).* Дааа... һәләк булдыҡ, Ғиндан туған...

Ғиндан. Яндыҡ, Бикмәй Рамазанович...

Йосоп. Емерелдек, ҡыйралдыҡ, етмеш киҫәккә тураЛдыҡ! Трррагедия! Комедия! Фантасгармония!

Бикмәй. Инде хәҙер ни ҡылырға?

Баһау. Ылауҙар әҙер бит. Һәнәк-көрәк алырға ла “алтын тау”ын штурмларға!

Йосоп. Салют! Абсалют! Резонанс!

Марш уйнай. Баһау менән Йомағол ғорур атлап,
ҡалғандары танауҙарын һалындырып сығып баралар.

Шаршау

1959.

Көрәш дауам итә

Ҡатнашалар:

Булат – 20 йәштә, суҫка ҡараусы.
Хамрай – 28 йәштә, суҫка ҡараусы.
Мәғрүф – 65 йәштә, Булаттың оләсәһе.
Халиҡ – 30 йәштә, суҫка фермаһы мөдире.
Ғилман – 45 йәштә, колхоз председателе.
Таһирский – 35 йәштә, өлкәнән килгән лектор.

Ваҡиға колхоз клубының администрация бүлмәһендә бара, лекторҙың килеп етеүен көтәләр. Ишек асылғанда тамаша залындағы халыҡтың шау-шоуы ишетелә.

Мәғрүф *(ойоҡ бәйләп ултыра).* Ликтор тигән тел тирмәнегеҙ ҡасан килә -- көтә-көтә көтөк булдыҡ бит инде. Американы ҡыуып етеү, уҙып китеү тураһында бер кәлимә-һүҙ әйтмәҫме, тип ултырам.

Булат. Көттөртһә лә, оҙаҡламаҫ ул, оләсәй.

Халиҡ. Инәй, мин әйтәм, үҙең ҡартайһаң да, ойоҡ бәйләргә бик шәп икәнһең әле. Энәләреңә ҡыҙыу әйләнгән велосипед тәгәрмәстәренең спицтарылай ялҡ-йылҡ килә.

Мәғрүф. Күҙең тейеп ҡуйһын, мөстән! Минең энәләр, бәлки, афтамашина тәгәрмәстәренән дә шәптер, унда эшең булмаһын.

Халиҡ. Хай-хай, инәй, зерә лә сос күренәһең! Былайһа, тиҙҙән яңғыҙың ғына ла Американы ҡыуып етәһең икән.

Мәғрүф. Түрә кеше – һин ҡыуып ет иң тәүҙә Американы. Мин һинең кеүек күн картуз кейеп бойороп ултырмайым, примирҙы үҙең күрһәт.

Халиҡ. Күрһәтербеҙ, инәй, күрһәтербеҙ. Ләкин ойоҡ бәйләп кенә ҡыумабыҙ ул “дядя Сэм”ды.

Мәғрүф. Төшөндөм, улым, һин уны сускаға атланып ҡыуасаҡһың. Суска түрәһе бит һин.

Халиҡ. Суска түрәһе түгел, ә сускасылыҡ фермаһы мөдире. Культуралы һөйләшергә кәрәк, инәй.

Мәғрүф. И балам, көл түрәле булыу ҡайҙа инде ул беҙгә! Көл йыйғыс итеп ҡуйылған көл түрәһе Садри ғына ул үҙенсә “көл түрәле” итеп һөйләшә белә. Көн дә таң тишегенән күнәген тотоп инә лә: “Баҫыуҙарға һибергә йә көлөңдө һоҫоп алып бирәһең, йә пркарулға тарттырылырһың!” – тип йәнде ала. Күнәген тултырып бирмәй тороп, ҡотолормон тип уйлма. Вәт бына ул “көлтүрәле”...

Халиҡ. “Көлтүрәле” тимәйем мин, инәй, куль-тураллы!

Мәғрүф. Әллә тағы, уныһы миңә барыбер.

Халиҡ. Барыбер булһа, ишектән йөрөмәҫтәр ине бит, тәҙрәнән йөрөрҙәр ине!

Мәғрүф. Әллә инде. Иллә мәгәр һинең сускасыларың, кисәге бурандан һуң, ҡар көрәргә иренеп, фирмаңдың тәҙрәһенән инеп баралар ине. Шуға күрә генә әйтәм.

Булат инә.

Булат. Әссәләмәғәләйкүм, тип әйтәйемме?

Халиҡ. Вәғәләйкүмәссәләм, тип яуап ҡайтарайым микән?

Мәғрүф. Ниңә улай “микән”ләп ослайһығыҙ? Әллә борсаҡтарығыҙ бешмәй микән, улдарым?

Булат. Шулай микән, оләсәй...

Мәғрүф. Тағы ла “микән”! Былайһа “микән” бөтмәҫ микән?

Булат. Ярай, ярай, оләсәй, “микән”һеҙ генә һөйләшәйек. Халиҡ ағай, суска станоктарын ватырға, хайуандарҙы иркенәйтергә ҡасан рөхсәт бирәһегеҙ?

Халиҡ. Ашыҡмай тор, ҡустым, ватырға өлгөрөрбөҙ. Уны хәл ҡыла торған урын бул түгел.

Булат. Ҡайҙа һәм ҡасан хәл ҡылырға самалайһығыҙ?

Халиҡ. Һәр йондоҙҙоң – үҙ урыны, һәр емештең үҙ миҙгеле бар, тигән боронғолар.

Булат. Ҡолаҡҡа бармаҡ тығып ҡына күк күкрәүҙән ҡотолоп булмай, тиҙәр хәҙергеләр. Тормош талабына ҡолаҡ һалмай йөрөүең тормош ағылышын туҡтатмаҫ, беҙ барыбер үҙебеҙҙекен итербеҙ!

Халиҡ. Кем ул “беҙ”? Һәм ни менән шәхсән миңә угрожайт итәһегеҙ?!

Булат. “Беҙ” – ул суска ҡараусы мин һәм фермалағы минең һымаҡ егеттәр. Бер һәйбәт көндә ҡулдарыбыҙға балта алабыҙ ҙа, рөхсәт-мөрөхсәтегеҙҙе һорап тормаҫтан, мал һанын арттырырға ҡамасаулап торған бөтә станоктарҙы, ситлектәрҙе һүтеп ташлайбыҙ. Автоашатҡыстар-эсергестәр ҡорабыҙ, иҙән йыуырткыстар ҡуябыҙ. Һәм һәр суска ҡараусыға ике мең баш мал бүлеп бирәп, дәүләтебеҙгә иң арзан суска ите етештереп тапшырырға йөкләмә алабыҙ ҙа атаҡлы Ярослав Чиждың үҙен ярышҡа саҡырабыҙ! Бына шуның менән “угрожайт” итәбеҙ һеҙгә.

Мәғрүф. Һаҡлан, Халиҡ, һаҡлан! Фирмаңдың аҫтын өҫкә килтерәсәктәр икән.

Халиҡ. Миңә тимәгәйҙәре, өҫтөн аҫка әйләндерһендәр! *(Булатҡа).* Һин нимә, әллә мине яңы ысулдың дошманы тип белдеңме? Бер һин генә баш ватмайһың, энем, партиябыҙ туҡып торған ул арзанлы ит хаҡында. Беҙ бөтәбеҙ, бөтә совет халҡы, шул турала янып-көйәбеҙ. Ярослав Чиж менән Антон Бартулистың тәжрибәләре көллө Ватан малсыларын яңы еңеүҙәргә ҡанатландыра.

Булат. Бер ҙә ҡанатығыҙ күренмәй әле.

Халиҡ. Толпарҙың ҡанаты ҡултығы аҫтында ул, ҡустым.

Мәғрүф. Тотоғоҙ, мөдиребеҙ осоп китмәһен!

Булат. Бына ҡыҙыҡ! Беҙҙә берәү ҙә прогрессив ысулға ҡаршы килмәй, шул уҡ ваҡытта тормошҡа ашырыусы ла юҡ. Яңылыҡты етәкселәр ҡолас йәйеп ҡаршылай, арымай-талмай шуны ҡулланырға өгөтләй, уны маҡтай, уны яҡлай, уны иркәләп һөйә... Әммә-ләкин эш шунан ары үтмәй. Әүҙемлеккә һәр саҡ юл бикле: һалҡын таш ҡоймаға төкәлгәндәй туңа ла ҡала. Шундай бик аҡыллы баш шул беҙҙең етәкселәр: ҡаршы ла түгел, яҡлы ла түгел – урталыҡта тапаныусылар.

Мәғрүф. Халиҡты әйтәһеңме? Ике ҡойроҡло кәмә ул беҙҙең Халиҡ. Бушҡа уны юл ярырға өгөтләйһең, артын "ҡыҙыл әтәс" суҡымай тороп, ҡуҙғаласаҡ түгел ул.

Халиҡ. Һин дә инде, инәй, шыттырып ебәрәһең... Ғүмер илаһи дуңғыҙҙың тере дошманы инең – нисек инде яҡлаусыһына әүерелдең?

Мәғрүф. Әстәғәфирулла тәүбә, ауыҙыңдан ел алһын, мең аждаһа, мең дейеү бәрейе һүҙҙәреңде ат итеп менеп тамуҡ соҡорона сапһын, тфү-тфү! Харам малдың яҡлаусыһы булмай уҡ ҡуяйым, әстәғәфирулла тәүбә...

Халиҡ. Бушҡа төкөрөнәһең, инәй. Беҙ ни, шул фермала эшләгәс тә, донъя шаҡшыһына әүерелгәнме әллә?

Мәғрүф. Мин һиңә улай тимәйем. Әммә-ләкин мине харам малға ҡушып телгә алма.

Булат. Һис кенә лә харам түгел ул, оләсәй. Донъялағы иң һимеҙ, иң туҡлыҡлы, иң арзан ит. Уны ашаһаң тамағың туйып, көрәйеп тороп китәһең өҫтәл эргәһенән. Хәйер, быныңтап шулай икәнен һин үҙең дә яҡшы беләһең бит, оләсәй.

Мәғрүф. Тәүбә, тиң, мин уны ҡайҙан беләйем? Һеҙҙәрҙәй, харам ашап үҫкән гонаһ шомлоғо түгелмен!

Булат. Ашап үҫкәнһеңмелер, юҡмы, -- ул яғы миңә ҡараңғы, оләсәй. Әммә-ләкин бынан бер ай элек кенә үҙеңә күҙлек ала барғанда район ашханаһында һәпелдәтеп ҡайттың – был яғы миңә яҡты.

Халиҡ. Әл-лә-лә!

Мәғрүф *(ырығып тора).* Тәүбә, тиң, гонаһ шомлоғо, тамуҡ утына киҫәү булырһың! Ниңә юҡ һүҙ һөйләп минең нирвымды ҡаҡшатаһың? Мин ҡасан, ҡайҙа сыҫка ите ашаған?

Булат. Әйттем дәһә, оләсәй, күҙлек ала барғанда, район ашханаһында, тип. "Ниндәй тәмле, йөрәккә йоғошло ҡалъя!" – тип маҡтай-маҡтай һоғондоң.

Мәғрүф. Теге божра-божра теленгән ит тултырмаһын әйтәһеңме?

Булат. Тап үҙен, оләсәй.

Халиҡ. Ха-ха-ха!

Мәғрүф. Һәй дәжжәл, ҡайҙан килеп ҡош ите харам булһын? Аҡ алъяпҡыс бәйләгән мәрйәһенә тиклем: “Бабушка, ҡош ите, ҡош ите”, тип ҡыҫтаны бит.

Булат. “Ҡош ите” тимәне, ә “кушайте” тине бит ул, оләсәй. Ашағаның суҫка ҡалъяһы ине.

Халиҡ. Ха-ха-ха!

Мәғрүф *(уҡшымаҡ булып көсәнә).* Ҡхаҡ! Ҡаҡ! Уаҡ! Харап иттегеҙ, зимагурҙар, харап иттегеҙ! *(Артына ауғанда ейәне тотоп ҡала).*

Булат. Тыныслан, оләсәй, һинең күңел болғанмай. Уҡшымаһаң да беләбеҙ – харамды өнәмәйһең.

Мәғрүф. Шулай шул, ейәнем. *(Энәләрен йылҡылдатып ҡул эшенә керешә).*

Халиҡ. Бер ай үткән бит инде, ә ауырып үлмәгәнһең, тап-таштайһың, хатта ике бит алмаң ун һигеҙ йәшлек ҡыҙҙарҙыҡылай ҡыҙарып-янып тора.

Мәғрүф. шулаймы ни, Халиҡ улым?

Булат. И оләсәй-оләсәй! Өҫтөмдәге бынауы яҡшы костюмым, үҙең кейгән ебәк күлдәк, яҫтаған яҫтыҡтарыбыҙ, ашаған аштарыбыҙ – бөтәһе лә суҫка аҡсаһына бит ул, оләсәй. Бөтәһен дә суҫка тирәһендә тир түгеп йөрөп тапҡанмын.

Халиҡ. Шулай уҡ хәҙер үҙебеҙ рәхәтләнеп ял итеп ултырған ошо яҡты, йылы, иркен клубыбыҙ ҙа суҫкасылыҡ тармағынан килгән килемгә һалынған. Тояһыңдыр, инәй, унан суҫка еҫе сыҡмай. “Аҡсаның еҫе юҡ”, -- тигән бит Маркс бабайыбыҙ.

Мәғрүф *(сәбәләнеп).* Һөйләмәгеҙ, һөйләмәгеҙ! Ишеткем килмәй! Миңә тимәгәйе, арттарынан алтын тәңкәләр ҡойолоп торһон – малға һанамаясаҡмын!

Булат. Ярай-ярай, оләсәй, һинеңсә булһын! Тик шуны ғына һорайым: урам буйлап сәй эскән һәр ереңдә беҙҙең эшкә бәддоға ҡылып йөрөмә.

Халиҡ. Эйе, эйе, беҙҙә эшең булмаһын, инәй. Яңы заман – яңы заң инде хәҙер. Сәүит хөкүмәте, Мәғрүф ҡарсыҡ суҫка ите ашамай икән, тип һарыға һабышмаҫ – ашаусылары уның етерлек. Йәнең һөйгән йылҡы ҡаҙылығыңды һоғон да ойоҡтарыңды тыныс ҡына бәйләй бир, коммунизм төҙөүселәргә бөйөк тарихи мәсьәләләрҙе хәл ҡылырға ҡамасаулама. *(Ҡаранып).* Лектор ниңә юҡ һаман? *(Сыға).*

Булат. Әллә нишләп һуңланысы. Халыҡ йыйылып бөттө микән, залды байҡап киләйем *(сыға).*

Хамрай инә, иҫерек.

Хамрай. Ә-ә, кешеме тиһәм, пенсионерка Мәғрүф ҡарсыҡ икән дә. Иҫәнме, ветеран?

Мәғрүф. Ҡыҙылғолаҡ! Зимагорҙай иҫереп йөрөйһөң һаман.

Хамрай. Иҫерһәм дә иҫкермәмен – иҫегеҙ китмәһен иҫкегә! Ни күрәм: шаһ-ин-шаһ суҫка ғали янаптары “хорх-хорх” итеп һалып биргән яҡты клубта күңел асып ултырыуҙары рәхәтме?

Мәғрүф. Рәхәт булһа, һинән күргән рәхәтлегем түгелдер. Юғал күҙемдән!

Хамрай. Ҡара-ҡара, үҙенең һарыҡ көтөп йөрөп төҙөткән бинаһы, тирһең! Кәнишнә минән күргән рәхәтлегең түгел. Шаһ-ин-шаһ суҫка ғәли янаптары күрһәткән рәхәтлектер был. Бөтәбеҙ тиң шуның рәхәтен күрәбеҙ.

Мәғрүф. Тфү, һепертке тел! Хәмер эсмәй бер көн түҙә алмайһың.

Хамрай. Дөрөҫ әйтәһең, ветеран, түҙә алмайым! Мин уны күренгән бер ерҙә һәләк итергә яратылған. Сөнки араҡы ул минең синфи дошманым, ә Сталин бабай синфи дошмандарҙы юҡ итергә бойора!

Мәғрүф. Тәүбә, тиң! Кәбе үҙеңде юҡ итеп ҡуймаһын!

Хамрай:

Телем тартмай тәүбәгә,
Йәнем барҙа ҡәүҙәлә.
Йәнем сыҡһа ҡәүҙәнән,
Терелмәмен тәүбәнән.

Эсеүем – эсеү, ветеран: шаһ-ин-шаһ ғәли янаптары үҙе эсергә ҡуша! Мин кем хәҙер, беләһеңме?

Мәғрүф. Кем булһын – харам Хамрайы. Суҫка ҡойроғон бороп йөрөүсе бер мөртәт.

Хамрай *(бармағын юғары сөйөп).* Во, бына кем мин! Храм Хамрайы! “Храм” тип урыҫтар ниҙе әйтә? Изгелек һарайын! Йәғни ҡорам!

Мәғрүф. Храм тимәйем – харам!

Хамрай. Икеһе лә бер инде. *(Күкрәк ҡағып).* Белегеҙ кем икәнемде! Хәҙер миндә бөтәһе – во! *(Тамағын ышҡып күрһәтә).* Шулайғас, мин эсмәй кем эсһен? *(Ҡыҫҡа пауза).* Һинең ейәнең Булат – дурак ул! Туҡһан туғыҙ процентлы. Йөҙгә берәү генә тулмай *(кикерә).* Ни өсөн дурак ул, беләһеңме? Белмәһәң, әйтеп бирәйем. Һинең ейәнең Булат ысын файҙаның ҡайҙа ятҡанын белмәй. Ул бына шуның өсөн дурак. Ысын файҙа ҡайҙа, беләһеңме? Вот, белмәйһең, ветеран. Ейәнең Булат та белмәй. Ысын файҙа – суҫканың ауыҙында ул! Уны суҫканың ауыҙына инмәҫе борон бына ошолай ҡайырып алырға кәрәк! Ниңә уға, үҙең әйткән ҡәбәхәт суҫкаға, алтындай арпаны ашатып әрәм итергә? Ожмах йәнлеге түгел бит ул, юғиһә үҙен “ҡаты морон” тимәҫтәр ине! Ярамағанмы шуға алам-һолам, ҡаҡы-шоҡо, әшәке-мәшәке – шуларҙы тыҡшынып йөрөп кенә беҙҙәйҙәргә файҙа килтереү өсөн яратылған бит ул! Ә Булат – дурак: арпа ашата. Минең һымаҡ тоҡлап-тоҡлап урыҫка илтеп осорһа, йәки берәй тай алып ебәреп шул арпа менән һимертһә, ҡырын китер инеме ни уға ла? Эсеренә -- шешәле, ҡабырына ҡаҙылы булыр ине. Йәйен-ҡышын ҡарҡ кикереп йөрөр ине. Дурак ул, дурак, ағаларынан аҡыл алырға ғәрләнә. Етмәһә: ситлектәрҙе боҙорға ла урындарын киңәйтергә, ә беҙҙең кеүек малсыларҙың һанын аҙайтырға ла эштәрен арттырырға, тип, район буйынса “яңылыҡ” һөрәнләп йөрөй. Унан ни файҙа беҙгә, йәғни ейәнең Булат менән Хамрайға? Аҙығын бирергә лә, тиреҫен түгергә лә машиналар ҡуйһындар әле – ауыҙыңдағы йомшаҡ ҡалъяның төшөп киткәнен хатта һиҙмәй ҙә ҡалырһың. Ҡушҡуллап сумыра алмаҫһың! Үҙ бәхетенә үҙе аяҡ сала ул, һинең ейәнең Булат. Шуны шәйләп еткермәй: беҙҙең кеүектәргә файҙа – эштең етлегеп етмәгән осоронда, ошоноң кеүек ығы-зығылы заманда. Ҡайҙа беспорядок – шунда беҙҙең порядок! Ейәнеңдең ҡолағына бер өр әле, ветеран:

улай мөдиргә лә, миңә лә ыржайып теш ҡайрамаһын. Алла бирһә, тайҙы һуйһам, ҡаҙыһын бергәләп имербеҙ!

Мәғрүф. Һи ахмаҡ, әллә мине урлап һимерткән бер телем ҡаҙыңа һатып алмаҡ булдыңмы? Минең Булатым көллө районға һөрәнләп йөрөһә лә, белеп һөрәнләй ул. Суска ҡарарға ул һинең һымаҡ бурлыҡ өсөн кермәгән. Күҙемдән юғал, тутыҡҡан тәре!

Хамрай *(кинәт айнып, артҡа сигенә).* Бөттө-бөттө, инәй, мин быны әйткәнем юҡ, инәй. Мин шаяртып ҡына...

Мәғрүф. Катай-катай, табаныңды ялтырат! Юғиһә ҡыҙыл еңлеләргә хәбәр бирәм! *(Хамрай олаға).* Бәдбәхет, һинең кеүек сускалар бөтмәгән шул әле донъяла!

Ғилман инә.

Ғилман. Нимә-нимә?

Мәғрүф. Юҡ, һиңә түгел, анауы алкашҡа әйтәм. Әллә нәмәләр һөйләнеп донъяны бутап йөрөй.

Ғилман. Әллә мине һүтәһеңме тип торам. Шөрләп, хата сәләм бирергә лә онотҡанмын, ғәфү ит, апай.

Мәғрүф. Ярар инде, үҙ кешеләр бит.

Ғилман. Пенсияға сыҡҡаныңдан һуң һирәк күренәһең. Ни йомош килтерҙе беҙгә?

Мәғрүф. Ни йомош тип ни, йомошһоҙ әллә килергә лә ярамаймы?

Ғилман. Ғәфү ит, апай, мин яңылышлыҡ менән...

Мәғрүф. Яңылышма. Колхоз персиҙәтеленә яңылышырға ярамай. Сускасылыҡ мәсьәләһендә лә яңылышаһың икән тип ишеттем әле.

Ғилман. Бәй, иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ! Ейәнеңдең һәр аҙымына юл асып ҡына торам.

Мәғрүф. Ә шулай ҙа эштәрен үҙгәртеп ҡороуҙы оҙаҡҡа һуҙаһың икән.

Ғилман. Яңылыҡ бит, апай. Ете үлсәп бер киҫергә кәрәк.

Мәғрүф. Ашағаныңда ла ете үлсәп бер ҡапмайһыңдыр бит? Итте, тим? Тиҙ һәм арзанлы ит етештереү тураһында радиолар көн-төн шаулай. Дуңғыҙ ите беҙгә харам булһа ла, башҡаларға хәләл бит. Шуны арттырырға һыҙғанған ейәнем.

Ғилман. Эйе, беҙҙең ул мөкәддәс бурыс. Әммә алдан уҡ ныҡ уйлап, серҙәренә төшөнөп эш итеү кәрәк. Бына шуның өсөн өлкәнән лектор саҡырттыҡ әле.

Мәғрүф. Яңы тармаҡ тураһында сафсата һатасаҡмы?

Ғилман. Улай тип үк әйтеү килешеп етмәҫ. “Арзанлы ит етештереү – колхоздарҙың мөһим бурысы” тигән лекция була. Беҙҙең өсөн бик мөһим тема. Ҡиммәтле кәңәштәр алып ҡалырға өмөтләнәбеҙ.

Халиҡ инә.

Халиҡ. Сәғәт ун бергә китте инде, Ғилман Мозаффарович, халыҡ тарала башланы.

Ғилман *(сәғәтенә ҡарап).* Тотҡарларға кәрәк ине уларҙы. Сәғәт туғыҙҙа уҡ бында булырға тейеш ине, район менән телефондан һөйләштем *(сыға).*

Халиҡ. Юл аҙабы – гүр ғазабы, тиҙәр бит.

Мәғрүф. Күҙ менән ҡаш араһында аҙашҡандыр ул һеҙҙең ликтурығыҙ. Хамрай ишеләрҙән булһа...

Халиҡ. Што һин, инәй! "Белем йәмғиәте" үҙе юлландырған дәрәжәле инсан ул. Ғалим тип әйтергә була. Йомортҡанан ҡаяу эҙләйһең, инәй.

Мәғрүф. Йомортҡала ҡаяу-маҙар булмаһа ла, сереткелеһе осрай торған, мырҙам...

Хамрай инә.

Хамрай. Здрастуй, бригадир! Бала-сағалар һаумы?

Халиҡ. Беренсенән, Хамрай, мин бригадир түгел, ә үҙең илке-һалҡы эш ҡырған СТФ мөдире. Икенсенән, бөгөн минең менән дүртенсе тапҡыр иҫәнләштең инде.

Хамрай. Кашу маслом не испортишь, бригадир! Беҙ һине яңы һайлауҙа барыбер бригадир итеп ҡыскырасаҡбыҙ. Бригадир булыу һинең ҡулыңдан килә.

Халиҡ. Юҡты һөйләмә әле, Хамрағол. Бар, лутсы ҡайтып ял ит.

Хамрай. Һинең кандидатураны беренсе булып үҙем һөрәнләйәсәкмен, Әпхалиҡ ағай. Тәүге йыйылышта уҡ! Ә Булат дурак бит ул: һинең дөрөҫ етәкселекте аңламай. "Яңы ысул!" тип бөтә районға яу һалып, ҡотҡо таратып йөрөй. Танауы еҫ белмәй әле уның. Һуҡты ла – күпте лә булһын уға. Яңы ысул, тигәс тә, условия кәрәк бит. Ус-ловия! Ярослав Чиж артынан ҡыуаларға иртәрәк әле беҙгә. Кишка тонка! Һин дөрөҫ әйтәһең, Әпхалиҡ ағай, -- беҙгә берәр йыл сабыр итергә, болғансыҡ һыуҙың тонғанын көтөргә ине. Ситлектәрҙе ватырға өлгөрөрбөҙ.

Халиҡ. Уф, был суска булманы, башыма бәлә булды әле, Хамрағол. Инде генә эште ипкә һалдым тип тынысланып йөрөй башлаһаң, яр аҫтынан – яу, тигәндәй, яңы бәләһе килә лә сыға, килә лә сыға. Шунан, әйҙә, янып-көйәһең. Быйыл ғына бит кәртә-ҡураны хәҙерге хәленә килтереп эшләтеп бөтөрттөм. Мин мөдир булып килгәндә фермала серек ситән һарай эсендә кәкрәйешкән ун баш сусҡанан ғәйре бер ни ҙә юҡ ине. Ғилман Мозаффарович миңә шул ваҡыт: "Бына һиңә кешеләр, бына ағас, бына ҡаҙау – үҙ фермаңды үҙең бөтәйтеп ал!" – тине. Бөтәйттем, алдым. Өҙөндөм, йолҡондом, төн йоҡоларымды йоҡламаным. Ситлектәрен, станоктарын үҙ ҡулдарым менән, тигәндәй, ҡорҙом. Күрәһегеҙме хәҙер нисек торалар унда хорхолдаҡтар? Фон-барон булып торалар! Сит ил делегацияһына күрһәтһәң дә оялырлыҡ түгел. Борон заман олатайым да йәшәмәгәндер ундай зиннәтле йортта!

Мәғрүф. Ҡайҙа инде ул, балаҡайым, һинең мәрхүм олатайыңа ундай ситлекте күреү! Кейеҙ тирмәлә ҡымыҙ эсеп, ҡурай шыңғырҙатып үтте ғүмере.

Халиҡ. Шул зиннәтле мөғжмзәләрҙе бөгөн ват та ташла, имеш!

Хамрай. Хан һарайы бит ул беҙҙең суска йорто!

Булат. Да, хан һарайы. Хужалыҡтың өс йөҙ илле мең һумын йотто был "һарай"...

Хамрай. Зато хәҙер колхозды биҙәп тора.

Булат. Йорто бейек тә, өйрәһе шыйығыраҡ шул...

Мәғрүф. Тышы – ебәк, эсе кәбәк, тиһәң дә булыр, ейәнем.

Халиҡ. Беҙ төҙөгән капитальный ҡоролоштар – мәңгелек ҡоролоштар. Бер ун йылдан үҙен аҡлай был ферма.

Булат. Ун йыл көтөргә ваҡыт юҡ. Быйыл уҡ бир доходты!

Мәғрүф. Шуныһы үкенесле: Халиҡ мырҙаны делегат итеп Мәскәүгә ебәрмәгәнбеҙ. Әлеге ете йыллыҡ планды ун йыллыҡ итеп үҙгәртеп ҡайтаһы икән.

Хамрай. Ағай дөрөҫ бара! Мин уны тотанаҡлайым. Мин уны под-держивать итәм!

Ғилман, Таһирский инәләр.

Ғилман. Ниндәй шау-шоу? Әллә йыйылыш асып ебәрҙегеҙме? Таныш булығыҙ, лектор иптәш Таһирский.

Таһирский. Иҫәнмеһегеҙ.

Мәғрүф. Бик шатбыҙ. Ҡәҙерле ҡунаҡ көттөрөр, тигәндәй, үҙ дәрәжәгеҙҙе белеп йөрөйһөгөҙ икән.

Таһирский. Маршрут, маршрут... Әле яңы ғына күрше колхозда тамамланым лекциямды *(сәғәтенә ҡарай).* Һеҙҙә ровно бер сәғәт буласаҡмын. Ишек төбөнә машина килтереп ҡуйығыҙ, миңә лекция бөткәс тә немедленно бүтән колхозға барып өлгөрөргә кәрәк. Маршрут, маршрут...

Ғилман. Саҡ ҡына көтә бирәйек, тамашасылар ыраһын.

Булат. Ғилман Мозаффарович, белгес барҙа кәңәшләшеп ҡалайыҡ. Быйыл колхоздың суҫка һанын күпмегә арттырабыҙ?

Ғилман. Быйылға кирелеп булмаҫ әле, Булат ҡусты.

Булат. Улайһа дәүләткә ике мең центнер итте ҡайҙан алып тапшырырбыҙ? Быныңөсөн кәмендә мең баш мөгөҙлө эре мал кәрәк бит?

Ғилман. Бик ныҡ йолҡонорға тура киләсәк.

Мәғрүф. Йолҡошланып күпме йәшәргә була?

Булат. Яңы ысулға көйләнгән суҫкасылыҡ тармағы ҡотҡарыр беҙҙе. Ошо хаҡта лектор иптәш, бәлки, үҙ фекерен әйтер?

Таһирский *(түҙемһеҙләнеп).* Минең тема төбәктәге конкретлыҡтарға ҡағылмай. Бөтә Союз масштабында күпме ит, күпме һөт етештереү тураһында һүҙ барасаҡ.

Булат. Масштабығыҙ ҙа маршрутығыҙға тиң икән. *(Ғилманға).* Мин әйткәнде эшләмәһәк, ит буйынса ете йыллыҡтың тәүге йылында уҡ ҡомға ултырасаҡбыҙ.

Хамрай. Ниңә уның өсөн башың ауырта? Начальствоның башы ҙур – улар уйлаһын. Беҙҙең эш – һәнәк-көрәк тотоу ҙа тиреҫ түгеү.

Ғилман. Был тармаҡтың әһәмиәтен беләбеҙ, Булат ҡусты. Һикереү өсөн яҡшы трамплин кәрәк, шулай бит, иптәш Таһирский?

Таһирский. Быйыл өлкәбеҙ дәүләткә 165 мең тонна ит етештерергә тейеш. Шул иҫәптән миллион баш суҫка һимертеп һатырға кәрәк. Мин һеҙгә бына шуларҙы әйтә алам.

Мәғрүф. Ата-баба баҡҡан мал аҫырап та күтәреп булыр ине илде.

Булат. Оләсәй, ҡолағыңа күпме туҡыным инде: һыйыр малын өлгөртөү өсөн ике йыл көтөргә кәрәк, ә бынығы алты айҙа өлгөрә.

Мәғрүф. Уныһын аңлайым да ул, әммә йән ҡабул итмәй. Ата-баба аҫырамағанды аҫырап, ауылды рисуай ҡылдығыҙ...

Халиҡ. Бына ниндәй һөрһөп бөткән ҡараштар бар, лектор иптәш, беҙҙең ауылда. Беткә үсегеп, тунын утҡа яҡҡандай. Лекцияғыҙҙа, бәлки, шуларға иғтибар бүлерһегеҙ, иптәш Таһирский.

Таһирский *(ҡәнәғәтһеҙ).* Минең тема дин һәм милли ғөрөф-ғәҙәттәр түгел, ә пленум цифрҙары! (?*(Сәғәтенә ҡарай).* Йыйылдымы публика, башлайыҡ!

Халиҡ. Халыҡтың яртыһы һеҙҙе көтөп-көтөп таралышҡайны. Йыйып килтерергә кешеләр ебәрҙем.

Таһирский. Тиҙерәк ҡымылдағыҙ. Оҙаҡ була алмайым. Маршрут...

Халиҡ. Арҡан менән һөйрәтеп килтерәйекме?

Таһирский. Уныһы һеҙҙең эш. Ә минеке – маршрут.

Булат. Баяғы бер нәмә тынғы бирмәй әле, иптәштәр. Ярослав Чиж 11 айҙа бер үҙе дәүләтебеҙгә центнерының үҙкиммәте 224 һумлыҡ 560 центнерҙан артығыраҡ ит тапшырған. Бына ҡайҙа ул бейеклек! Беҙҙең бригада иһә ул яңғыҙ үҙе яулағын ҡаҙаныштың яртыһын да бирә алманы.

Халиҡ. Шуның өсөн дә “бөркөт” тиҙәр бит уны, ҡустым. Бөркөт юғары оса ул.

Булат. Ә беҙ кем һуң?

Хамрай. Беҙ – ер сәпсектәре. Беҙгә ерҙәнерәк йөрөргә кәрәк. Юҡһа, йығылып, муйынды һындырыу мөмкин.

Ғилман. Һеҙ ҙә бөркөт булып осорһоғоҙ, ҡустылар. Тик сабыр ғына итегеҙ. Бер йылға ғына.

Булат. Тимәк, бөтәбеҙгә бер йыл буйы Хамрай артынан сәпсек булып соҡсоноп йөрөргә? Юҡ, мин быға риза түгел! Ни өсөн беҙ етештергән иттең центнеры 1200 һумға төшә? Яҡшы хужа күҙе булмағаны өсөн. Ярослав Чиж бер үҙе 1500 башты аҫырап һимерткән булһа, беҙҙә кеше башына ни бары 40-50 генә сыҫка беркетелгән. Аҡыллы әҙәмдәр силос, арзанлы ем ашата малға, ә беҙ уны һатып алынған ҡиммәтле концентрат менән һыйлайбыҙ. “Экономия” тигән һүҙҙе оноттоҡ. Ҡайҙан килеп арзан булһын беҙҙең продукция?

Халиҡ. Беҙгә Ярослав Чиж булырға иртәрәк, ҡустым. Халҡыбыҙҙың милли үҙенсәлектәрен онотма. Әнә оләсәйеңдә лә тыңла. Ғүмер илаһи ата-бабаларҙан “харам хайуан” тип ишетеп, ҡанына һеңдергән кешеләрҙән попробуй һин Ярослав Чиж яһарға! Был – милли мәсьәлә, быны сисеү өсөн сабырлыҡ, ваҡыт кәрәк.

Хамрай. Эйе, һин быны оләсәйеңдән һорап ҡара.

Мәғрүф. Һеҙ миңә тәүҙә дахутын күрһәтегеҙ. Байытығыҙ колхозды. Шунан һорарһығыҙ фекеремде. Ҡоро ҡалаҡ ауыҙ йырта ул!

Таһирский *(түҙемһеҙләнеп).* Башлайыҡ, иптәштәр! Маршрут...

Халиҡ. Маршрут... маршрут... Да, онотоп ебәрә яҙғанмын: “Лекция ниндәй телдә уҡыласаҡ?” – тип төпсөнәләр ине. Үҙегеҙ беләһегеҙ, бында ылғый башҡорттар, ҡарт-королар урыҫсаны әллә ни төшөнөп етмәйҙәр әле.

Таһирский. Икенсе әсә телебеҙ – бөйөк рус телендә, әлбиттә, что за вопрос? Өлкәләге бер-нисә нацмен ауылы өсөн айырым текст төҙөп булмай бит инде.

Халиҡ. Ярай, шулай тип әйтәйем, әләйһә *(сыға).*

Ғилман. Үҙебеҙҙең әсә телендә үткәрергә кәрәк ине, иптәш Таһирский. Үҙегеҙ башҡорт балаһы бит.

Таһирский. Что за проблема! Бөйөк Октябрҙең 43 йыллығын ҡаршылайбыҙ инде, иптәштәр. Шул срок эсендә икенсе әсә телебеҙҙе лә һыу кеүек эсергә ваҡыт бит!

Булат *(оялыбыраҡ).* Ғилман ағай, колхоз өсөн бик кәрәкле бер проект йөрөтәмен башымда. Өлкәнән килгән абруйлы иптәш барҙа әйтһәм, ҡиммәтле кәңәштәрен бирер ине, бәлки...

Ғилман. Йә, йә, әйтеп ҡара.

Булат. Үҙегеҙгә мәғлүм: кәртә-ҡура етешмәүе тотҡарлай мал һанын арттырыуҙы. Әгәр, тим, боронғо башҡорттоң ерҙе ҡаҙып мал арандары яһауын иҫкә алып, буш ятҡан силос траншеяларын торлаҡ итеп йәтешләһәк?.. Унда бер юлы меңләгән баш суҫка тоторға мөмкин, ифрат арзанға төшә. Һөҙөмтәлә бер йылда уҡ ит етештереүҙең ике йыллыҡ планын үтәйәсәкбеҙ. Бына ҡайҙа ул күренмәй ятҡан резервтар!

Ғилман. Да... ҡыҙыҡ фекер. Әммә-ләкин... *(Таһирскийға ҡарай).*

Булат. Ә һеҙҙеңсә, иптәш Таһирский?

Таһирский. Фекер ҡыҙыҡ, ләкин ҡулланыу тәжрибәһе юҡлығы насар. Тәжрибә юҡ, тәжрибә...

Ғилман. Вот-вот, мин дә тап шуны әйтәм!

Булат. Беҙ башлайыҡ тәжрибәне. Беҙгә ҡарап башҡалар эйәрерҙәр.

Ғилман. Юҡ-юҡ, мин быға бара алмайым. Урау булһа ла, юл яҡшы, тигән ҡарттар. Иҫке юлдан ҡайырылһаң, икенең бере була ул.

Хамрай. Точно! Йә ботоңдо, йә ҡабырғаңды һындыраһың.

Булат. Тиреҫ ҡорто кеүек көнгә сыҡмай ятҡас, һинең ҡабырғаларыңдың төгәллегенән кемгә ни файҙа?

Хамрай. Тиреҫ ҡорто ер һөрә, балыҡ ҡармаҡларға ла эшкаша.

Булат. Һинең кеүек һамҫыған ҡортто балыҡ йотамы ни ул?

Мәғрүф. Йотһа, араҡы шешәһе генә йотор ул Хамрағолдо.

Хамрай. Эсһәм, һеҙҙекен эсмәйем!

Таһирский. Иптәштәр, түҙемлегем ҡаҡшаны. Башлайым!

Халиҡ инә.

Халиҡ *(ҡаушағаң).* Ғилман Мозаффарович, халыҡты йыйнап булманы тәки! “Иртәгә байрам түгел”, -- тип, булғандары ла таралды. Пенсионерҙар ғына көтөп ултыра ине, лекция башҡорт телендә булмай, тигәс, улары ла күтәрелеп ҡайтып киттеләр.

Ғилман. Былайғас, һеҙгә ҡунып ҡалырға тура килә инде, иптәш Таһирский. Иртәгә клубты шығырым-тултыртырбыҙ.

Таһирский. Юҡ-юҡ, артыҡ бер минут та ҡала алмайым! Өлкә масштабындағы белгес мин. Ошонда ултырып һөйләшеү – үҙе бер лекция булды!

Миндә маршрут... Председатель иптәш, рәхим итеп, путевкаға ҡултамға һәм мисәт сәпәгеҙ ҙә!..

Ғилман. Маршрут... Масштаб... Их-ма, беҙҙеке ҡайҙан килеп ҡайҙа китмәгән! *(Ҡағыҙға ҡул ҡуйып мөһөр һуға).* Хамрай, хәҙер үк шоферҙы уятып, лектор иптәште күршеләргә оҙатышып ҡуйығыҙ!

Хамрай. Күҙ асып-йомғансы, Ғилман Мозаффарович!

Таһирский, Хамрай сыға.

Булат. Бындай эшем эйәләрен ниңә колхозға ебәрәләр? Дөйөм установкаларҙы, цифрҙарҙы үҙебеҙ ҙә беләбеҙ.

Мәғрүф. Ярай, ҡайтайым инде. Һуған һаттығыҙ ҙа борсаҡ аттығыҙ, ә мин шул арала бер ойоҡ бәйләп бөтөрҙөм. Эштәрегеҙ былай бара, һеҙҙән элегерәк ҡыуып етәм, уҙып китәм икән мин Американы! *(Сыға).*

Булат. Булыр, оләсәй, булыр. Беҙҙең аяҡ-ҡулдарҙы ҡыйыуһыҙлыҡ бәйләй бит...

Ғилман. Ә шулай ҙа үҙ-ара татыу йәшәргә кәрәк, ҡустым.

Ғилман. Эйе шул.

Булат. Ә шулай ҙа мин һеҙгә татыулыҡ вәғәҙә итә алмайым. "Тормош ҡапма-ҡаршылыҡтарҙың мәңгелек көрәшенән тора", тигән бер философ. Шуға иманым камил: иртәгә һеҙ ҙә яңыса уйларһығыҙ, яңылыҡ үҙенә юл ярыр. Көрәш дауам итә!

Шаршау

1959.

Өҫтәүес: кәмитсенең әҫәргә бәйле хаты.

Иҫәнмеһегеҙ Баязит[5] ағай!

Сускасылыҡ тармағын үҫтерергә өндәп яҙған ошо пьесамды ебәрәм. Минеңсә, был бик актуаль тема. Тик минең ҡәләм аҫтында ул нисегерәк килеп сыҡҡандыр – һеҙҙең хөкөмгә тапшырам.

Бынан алда "Ер аҙығы" исемле бер шаршаулыҡ комедиямды ебәргәйнем. Ул да, ошоноң һымаҡ уҡ, партияның Пленум ҡарарҙарына эйәреп яҙылған. Ләкин һеҙҙән уның хаҡында хәбәр юҡ әле. Ябай хат менән һалғайным – барып етмәнеме икән әллә? Алып-алмауығыҙҙы хәбәр итһәгеҙ ине, ағай! Әгәр юғалған булһа, яңынан күсереп ебәрермен. Сөнки ул, минең уйымса, уңышлы ғына килеп сыҡҡан әйбер.

Үҙегеҙгә һаулыҡ, уңыштар теләйем. Түҙемһеҙлек менән һеҙҙән хат көтәм. Хушығыҙ.

Йыһат Солтанов.

Оренбургская обл., Буртинский район,
Желтинский с/с, дер. Санкем-Биктимер.01.03.1960.

[5] Баязит Бикбай.

Ҡулъяҙма аҫтындағы яҙыу:

*Артыҡ натурально. Художество әҫәренән хәҙергә алыҫ тора. --**Ә.М**[6].*

Ҡотҡарыу түңәрәге

Ҡатнашалар:

Беренсе.
Икенсе.

Катер палубаһы, йәки яр сите. Алғы планда тотоноу кәртәһе, йәки парапет. Телефон өшәләге. Кәртәгә таянып Беренсе тора һәм алыҫҡа тексәйгән. Икенсе килә.

Икенсе. Сәләм! Нимәгә тексәйҙегеҙ?

Беренсе. Аңлайһығыҙмы, ниндәй хәл: мине бөгөн һыуға батыусыларҙы ҡотҡарыу хеҙмәте мөдире итеп ҡуйҙылар, ә бына какрас бер әҙәм сумып китте лә ни өсөндөр өҫкә ҡалҡмай ҙа ҡалҡмай…

Икенсе *(бошонып).* Ҡасан?

Беренсе. Иртә менән.

Икенсе *(сәғәтенә ҡарап).* Улайһа батҡан бит ул!

Беренсе. Юҡ, иртә менән мине ҡуйҙылар, тим. Ә ул баяраҡ ҡына бата башланы. Бер бата ла бер ҡалҡа. Әнә, күрәһегеҙме, йәнә ҡалҡты!

Икенсе. Улайһа уны ҡотҡарырға кәрәк бит!

Беренсе. Һеҙ ниңә уны кәрәк тип… йәғни ҡотҡарырға кәрәк тип иҫәпләйһегеҙ?

Икенсе. Һеҙ бит үҙегеҙ, батып бара, тинегеҙ.

Беренсе. Әгәр мин быныҡ шулайлығына инанһам икән!.. Әгәр ул, уйламағанда, һыуға сумып йөҙөү буйынса рекорд ҡуйып ятһа?

Икенсе. Улайһа ни өсөн ул һаман һыу аҫтына китә?

Беренсе. Кем белә уны – бәлки, йөҙөү стиле шундайҙыр?

Икенсе. Ниндәй стиль тағы! Шлюпка төшөрөгөҙ, ул бата!

Беренсе. Шәхсәнә мин үҙем ышанмайым.

Икенсе. Һәр хәлдә һөйрәп сығарырға кәрәк.

Беренсе. Бер ҡатлы кеше һеҙ! “Һәр хәлдә”! Ә һеҙ беләһегеҙме, ни өсөн мине бассейн менән етәкселек итеүҙән тайҙырҙылар? Мин унда ла “һәр хәлдә” баяғыларҙы… сумып-йөҙөүселәрҙе бассейндан һөйрәй инем, һыуҙы ҡойтҡаҡламаһындар өсөн. Ә мине спорт рекордтарын өҙгән өсөн тип

[6] Әсғәт Мирзаһитов.

бырағтырҙылар. Ә бәлки был да шундай бер рекордсмендыр? Уны тартып сығарырһың, ә үҙеңде батырырһың!.. Әнә, тағы сумды…

Икенсе. Мин уға түңәрәк булһа ла ырғытайым *(ҡотҡарыу түңәрәгенә тотона).*

Бернсе. Алығыҙ ҡулығыҙҙы! Мин уны юғалтмаҫҡа һүҙ биреп ҡул ҡуйғанмын. Ул һантыйың түңәрәкте алыр ҙа йөҙөп китер, ә миңә яуап бир уның өсөн!

Икенсе. Ну, ни әмәл ҡылаһығыҙ һуң?

Беренсе *(көрһөнөп).* Халыҡ менән кәңәшләшергә кәрәк.

Икенсе. Ниндәй халыҡ?

Беренсе. Ну, тәбиғи, начальство инде! *(Сәхнә төпкөлөнә китә, телефон трубкаһын ала. Икенсе ҡул һелтәп сығып китә).* Алло, ҡырҡ алтынсы. Нина Павловна, был мин. Мине, зинһар, Василий Васильевич менән тоташтырығыҙ! Василий Васильевич, бында бына ниндәй мәсьәлә тыуҙы… Әйтәйек, кеше бата… Ләкин конкретно, мотлаҡ рәүештә бата тип әйтеп булмай. Ә былай, бәлки, баталыр, ә бәлки... водолазға өйрәнәлер. Алыҫтан айырыу ҡыйын. Бына шул, ошо хәлдә һеҙҙең күрһәтмәгеҙ нисек булыр? Ҡотҡарырғамы, әллә ҡотҡармаҫҡамы? Ҡотҡарырға?.. Аңлашыла *(трубканы әлә).* Тик быны нисек аңларға? Юҡ, ҡотҡарырға ярамай! Әгәр ҙә мәгәр Василий Васильевич ҡотҡарырға ти икән, тимәк, Михаил Семенович принципиально әйтәсәк – ҡотҡармаҫҡа кәрәк ине! Ә кем ғәйепле булып ҡалыр? *(Трубканы ала).* Һигеҙенсе. Евгения Львовна, был мин. Михаил Семеновичты һорарға мөмкинме? Алло, Михаил Семенович, был мин… Нимә? Ни өсөн ҡотҡарыу монаяттарын ҡабул ҡылмайым? Һаман ваҡыт юҡ, Михаил Семенович, ҡул теймәй… Әле бере́не бата, әле икенсе́не – даими бүлдертәләр. Һүҙ ыңғайында мин һеҙҙең менән бына нимәне ризалыҡлатырға теләйем: әйтәйек, батып барыусы бәндә… Ләкин уның ысынлап та батып барыусы икәнлеген гарантиялап булмай. Алыҫтан насар күренә. Шул, һеҙҙең фарман нисек булыр? Василий Василильевич ҡотҡарырға, ти, ә мин… Нимә?! Ҡотҡарырға? Һеҙ ҙә мотлаҡ ҡотҡарырға тиһегеҙме? Есть! Аңлашыла *(трубканы әлә).* Юҡ, ҡотҡарырға ярамай! Һүҙ ҡуйышҡандар… мине батырырға. Шаҡшыны һөйрәп сығарырһың, ә һуңынан әйтерҙәр: ялған паника! Бере́не лә фарманын ҡағыҙға яҙып бирмәй… *(Кәртә янына килә, ҡарана).* Юҡ. Тағы сумған. Ниңәлер ул йышыраҡ сума, һирәгерәк ҡалҡып сыға башланы. Шулай ҙа бахырҙы ҡотҡарырға кәрәк ине. Их, ни булһа ла булыр… *(Пинжәген сисеп ташлай).* Ә шулай ҙа бәләһенән башы аяҡ – яҙылма бойороҡ теләнселәп ҡарайым әле *(трубканы ала).* Һигеҙенсе. Михаил Семенович! Был йәнә мин… Баяғы һыуға батыусы тип һаналған тураһында… Һеҙ миңә яҙылма бойороҡ бирә алмаҫһығыҙмы икән, ҡотҡарыу мәсьәләһендә… Ә?!. Ҡайҙа кит тиһегәҙ?! Өҙҙөләр… *(Трубканы әлә).* Әллә ниндәй инстанцияға ебәрәһен белдем дә шул. Ә ҡайҙа – айыра алманым. “Х” менән башлана, буғай… Хоҙай түгелме икән? Их!.. *(Трубканы ала).* Һигеҙенсе, Михаил Семенович. Был йәнә мин… Ғәфү итегеҙ, үҙегеҙҙең бик ҡиммәтле инструктаж буйынса бәләкәй генә аныҡлау. Бына һеҙ миңә әйттегеҙ – “китегеҙ!” Ә аныҡ ҡайҙа китергә? Ҡиммәтле күрһәтмәгеҙҙе ишетеп еткермәнем… Ә?! Ҡайҙа?! *(Ҡалтыранып, һаҡлыҡ менән трубканы әлә).* Нимә ти?.. Ә үҙе яуаплы работник… Интеллигентлы әҙәм… *(Кәртәгә таянып ҡарана).* Күренмәй!.. Ни эшләргә? Һыуға батыусы һәр шаҡшының

ихтыярына буйһона алмайым да инде мин! Ну туған, беҙгә һинең менән ни ҡылырға кәрәк инде – башыма килтерә алмайым!

Икенсе инә.

Икенсе. Ни ҡылырға һуң инде. Ул күптән…

Беренсе. Ниңә һуң? Нимә аңлата ул һүҙең – “күптән”?

Икенсе. Батты…

Беренсе. Батты?! Ни хаҡы бар?!

Икенсе. Хаҡ һорап тормаған шул…

Беренсе. Ә үҙе, һөмһөҙләнеп, рекорд ҡуйыусы булып ҡылана тағы… Бына симулянт! *(Тулҡынланып).* Ә шулай ҙа беҙҙең менән дәғүәләшергә хаҡы юҡ! Беҙ бит мәсьәләне инструкцияларға таянып хәл иттек. Ул үҙе ҡабаланған!

Икенсе. Ярар инде, тулҡынланмағыҙ, мин шаярттым. Уны ҡотҡарҙылар.

Беренсе. Ҡотҡарҙылар? Кем?!

Икенсе. Ну, мин ҡотҡарҙым.

Беренсе. Һеҙ?! Ни рәүешле?

Икенсе. Просто һыуға ташландым да ҡотҡарҙым.

Беренсе. Һыуға? Кемдән ризалыҡ алдығыҙ? Юғары инстанциялар фатихаһын бирҙеме?

Икенсе. Уныһы мөһим түгел.

Беренсе. Бик мөһим. Башығыҙ судҡа китәсәк! Ф-фу, һеҙҙең өсөн үҙем яна башланым! *(Ҡотҡарыу түңәрәген муйынына кейеп, сығыу яғына ыңғайлай).*

Икенсе. Бәй, ҡайҙа киттегеҙ?

Беренсе. Янып барам – һыуға сумырға!

Икенсе. Ә был крәндил ниңә?

Беренсе. Әгәр бата башлаһам?

Икенсе. Ҡотҡарырбыҙ.

Беренсе. Юҡ инде, мин өйрәнгән. Юғарынан һеҙ ҡасан ризалыҡ алғансы, миңә көтөп торорғамы? Ҡотҡарыу түңәрәге – ул минең өсөн!

Шаршау

1960.

Ҡибланың дүрт яғы

Ҡатнашалар:

Шәкәр һатыусы.
Әсе бал ҡойоусы.
Балды һатып алыусылар.
Похмельгә эсеүсе.
Милиционер.
Ике санитар.

I күренеш

Бал ҡойоусы *(феләк һөйрәп сыға):*

Эш беште – бал әсене,
Инде һатырға кәрәк.
Кәсеп итеп, эшләмәй
Ашап ятырға кәрәк

Алйоттар күп донъяла –
Эсәләр минең балды! *(Кеҫәһенә һуғып).*
Аҡсаларын кеҫәмә
Шыплатып ҡына һалдым. *(Сүмесен болғап).*

Бал һатамын, бал һатам,
Йүгерешегеҙ бында!
Был феләккә бикләнем
Ҡибланың дүрт яғын да!

Шәкәр һатыусы инә.

Шәкәр һатыусы:

Таныйһыңмы? Ике бот
Шәкәр алғайның минән.
Бал эсерһәң, бер юлы
Бер ҡапсығын да бирәм!

Бал ҡойоусы:

Тәүҙә -- аҡса, унан – бал,
Елгәр болоңдо бында!

Шәкәр һатыусы:

Игелекһеҙ икәнһең! *(Аҡса бирә).*

Бал ҡойоусы:

Ҡибланың дүрт яғын да
Бикләнем был феләккә! *(Бал бирә).*

Шәкәр һатыусы *(эсә):*

Әллә тәмәке ҡуштыңмы?
Әсе ҡаба йөрәккә... *(Йығыла).*

Бал ҡойоусы:

Етте быға – кәңкәйҙе! *(Сүмес болғап).*
Бал һатам, әй, бал һатам!
Ҡибланың дүрт яғын да
Бал арҡылы аңлатам!

Бал һатып алыусы:

Нимә тиһең?

Бал ҡойоусы:

Ҡибланы
Бикләнем был феләккә.
Быны эсһәң, үтәлә
Ҙур өмөт тә, теләк тә!

Бал һатып алыусы *(Аҡса бирә):*

Сумыр берҙе, сүмесең
Күҙенән ташып тулһын!
Ҡибланың дүрт яғы ла
Сүмес эсендә булһын!

Бал ҡойоусы *(һоҙоп бирә):*

Рәхим ит. Мә. Ҡапландыр,
Дүрт яғың ҡибла һинең!

Бал һатып алыусы *(эсә):*

Балың ҡырҡыу. Эсәкте
Айҡыта – ағыу тирһең...
Һал йәнә бер! *(Аҡса ырғыта).* Эсемдең
Яныуы туҡтар, бәлки... *(Ике йота ла тәгәрәй. Бал ҡойоусы сүместәге балды түгелдертмәй тотоп ҡала).*

Бал ҡойоусы:

Балым шәп! Был ғифритте лә

Төңкәйтеп һалды тәки!
Ә сүмесе – мөлдөрәмә.
Шәп ҡалған. Файҙа миңә!

Похмелгә эсеүсе инә.

Похмелгә эсеүсе *(сүмескә үрелеп):*

Аҡсаһы бер ҡат түләнгән –
Теймә һин балға, теймә! *(Сүместе тартып ала).*
Бик шәп булды! Похмелемдән
Мин йөрәй инем янып... *(Эсә).*
Әллә ниңә эс-бауырым
Тора әле һыҙланып... *(Йығыла).*

Бал ҡойоусы:

Бына уңыш! Йөҙ ахмаҡты
Йығамын, былай булһа!

Милиционер инә.

Милиционер:

Һуңланығыҙ. *(Йығылып ятҡан бисараларҙың ҡулдарын тотоп, йөрәктәрен тыңлап ҡарай).*
Йән биргәндәр...
Аламын һеҙҙе ҡулға! *(Наганын тоҫкай).*

Бал ҡойоусы:

Ҡыҙғанығыҙ!.. Бал эсегеҙ...
Биклəгән инем бында
Алйоттарҙы алйытырға
Ҡибланың дүрт яғын да...

Милиционер:

Оҙаҡ тоттоғоҙмо балды?

Бал ҡойоусы:

Теүəл бер ай...

Милиционер:

Ни ҡуштығыҙ?

Бал ҡойоусы:

Биш кило шәкәр, тәмәке,
Тауыҡ тиҙәге һәм ҡуңғыҙ...

Милиционер:

Шагом арш! Ташҡапсыҡта
Шәп урын көтә һине!

Бал ҡойоусы *(үле кәүҙәләргә өндәшеп):*

Балымды эскән кемһәләр,
Тороп яҡлағыҙ мине!

Ике санитар инеп, үлектәрҙе носилкаға һала башлай,
милиционер енәйәтсене алып сығып китә.

II күренеш

Квадратты дүрткә бүлеп, сатраш формаһында яһалған тимер рәшәткә артында бал ҡойоусы ултыра.

Бал ҡойоусы:

Дүрт яғым да ҡибла ине,
Дуҫтар, бер заман минең.
Рәшәткәле ташҡапсыҡҡа
Тиҙ генә килеп индем...

Бына ҡиблаларым минең *(рәшәткәнең дүрт тишегенә бер-бер артлы ҡулын тығып күрһәтә)* –
Дүртәү. Дүрт ҡибла миндә...

Милиционер:

Бындай бәндәләр ҡиблаһы –
Ошо зиндан эсендә!

Шаршау

“Пенсионер”

Ҡатнашалар:

Пенсионер.
Үгеҙ.
Полевод.
Комментатор.

Колхоздың кукуруз баҫыуы. Пенсионер, үгеҙен етәкләп, кукуруз ашатып йөрөй.

Пенсионер. Аша, аша, үгеҙем, күп итеп аша! Ҡорһаҡҡайыңды күпәсләндер, һутлы кукуруз сәкәндәрен төрөп-төрөп тыҡ! Тәүлегенә кило ярым ауырлыҡ арттыр, һырт йөндәреңмайға сумып сыҡҡан сыҫкандыҡылай йылтырап торһон!

Үгеҙ. Му-му, тығынам, тығынам!

Пенсионер. Күберәк һоғон, һутлырағын һоғон, ҡалғандарын тапап үт! Баҫыуҙың уртаһынараҡ ин, ятҡаныңда ҡуйыраҡ тошона ят. Йоҡлағанда ла көйшә!

Үгеҙ. Му-му, ашап туйҙым, ял итәм!

Пенсионер. Бына бындараҡ әүеш, ҡабырғаларың ҡаҡҡа теймәһен *(кукуруз һабаҡтарын йығып, үгеҙҙе ятҡыра).* Бына шулай *(үгеҙенең арт ягын ҡосаҡлап ултыра, ҡойроҡ осон тегәнәктән таҙарта).* Былтыр һин башмаҡ инең, быйыл буралай үгеҙгә әүерелдең. Ә өсөнсө йыл һарыҡ тәкәһендәй генә быҙау инең. Киләһе йыл ер йыртып үкереүсе дәжжалға әйләнерһең! Белермен нимәләр эшләргә! *(Хыялланып).* Их еңел кәсеп-кәсеп, китһәңсе миңә алтын тәңкәләр сәсеп! *(Йырлай, таҡмаҡлап бейей).*

Мин – ауырыу, мин – хәстә,
Мин пенсионный йәштә.
Унда-бында юртамын,
Уны-быны йолҡамын –
Колхоз мөлкәте миңә
Юртаҡлап килеп инә.
Шулдыр минең миссия,
Кәрәкмәй комиссия!

Мин пенсионер,
Мин миссионер.
Ары йөрөһөн
Милиционер!

Былтыр ҡолон, быйыл тай –

Кәсеп итәмен шулай.
Колхоз емен шыуҙырам –
Донъяла шунһыҙ булмай!

Ашау-эсеү колхоздан,
Тунау-бесеү колхоздан.
Ә кәсеп аҡсалары
Оборот бирә ҡырҙан.

Мин пенсионер,
Мин миссионер.
Ары йөрөһөн
Милиционер! *(Ҡулын маңлай өҫтөнә ҡуйып ҡарай).*

Шым, берәү килә түгелме? Ен һуҡҡыры полевод! *(Яңағын яулыҡ менән бәйләп, таяҡҡа таяна, ҡыхылдап йүткереһә).*

Полевод инә.

Полевод. Был ни хәл, ниңә кукурузды тапатаһың? Вәхшилек бит был!

Пенсионер *(ҡаж-ҡаж йүткереп).* Ай-буй, яңылыш килеп кергәнмен! Кукурузмы ни был, ниндәй шырлыҡ тип торам... Их, ҡартайылды, күҙ күрмәй башланы...

Полевод. Күҙең күрмәһә лә, кукуруздың ҡуйы урынын һайлай белгәнһең әле! Ҡыуала үгеҙеңде!

Пенсионер. Ох, ух, аяҡтарым ауырта! Ух, ох, тешем һыҙлай, тешбаҡаһы! Ҡыуалар хәлем юҡ.

Полевод *(үгеҙҙең мөгөҙөнә йәбешә).* Мин уны хәҙер үк ябып ҡуям, штраф түләйәсәкһең!

Пенсионер *(таяғын атып бәрә, яулығын йолҡоп ала, етеҙләнеп).* Ҡағылма малҡайыма! Бөртөк йөнө төшмәһен!

Полевод. Ай-һай, аҡһаҡлығың да, тешбаҡаң да елгә осто түгелме? Цоб, лырҡышйән! *(Үгеҙҙе һуғып торғоҙа ла мөгөҙөнән етәкләй).*

Пенсионер. Мөртәт, теймә малҡайыма! *(Үгеҙҙең ҡойроғона йәбешә, үгеҙ туҡтай. Полевод – мөгөҙҙән, пенсионер ҡойроҡтан һөйрәйҙәр. Үгеҙ тәбиғи рәүештә алға атларға тырыша, ләкин пенсионерҙың тартыу көсөн еңә алмай. Шулай бер алға, бер артҡа китеп, ике яҡ оҙаҡ тартыша. Ниһайәт, пенсионер үгеҙ менән полеводты ҡуша һөйрәп алып китә, шулай сәхнәнән сығалар).*

Комментатор инә.

Комментатор. Беҙҙә шундай “пенсионер”ҙар бар – үгеҙҙе төртөп йығырға, йәки ҡойроғонан һөйрәп алып китергә лә булдыра. Лайыҡлы пенсиялары иҫәбенә намыҫлы йәшәү урынына, колхоз өлөшөнә кереп, һәр төрлө харам

кәсептәр менән шөғөлләнәләр. Бындай йәмһеҙ күренештәр беҙҙең арала булмаҫҡа тейеш!

Шаршау

21.05.1961.

Сәхнәнән саян йырҙар

Бригадирҙан ат һораным,
Бирмәне. Ярты литр
Күрһәткәйнем, шундуҡ әйтте:
“Мә, машинаға ултыр!”

Магазинға ситса килгән,
Тик беҙгә түгел икән.
Һатыусы туғандарына
Ситсаны бүлеп бөткән.

Беҙҙең көтөүсе шәп егет –
Эшенә таңдан сыға.
Төндә көтмәгән аттарын
Шулай ашлыҡтан ҡыуа.

Кукурузды маҡтай ине
Беҙҙең бригадир ағай.
Сәсеп бөтөргәс мал тапай,
Ә ул баҫыуға бармай.

Ғиззәт эшкә сыҡмай ята,
Тамағым ауырта, тип.
“Сирле” тамағын дауалай
Әсе араҡы эсеп.

Ҡышын, бүрек таба алмай,
Ҡолаҡты туңдырғайным.
Йәй булғайны, бүрек кейеп,
Башымды яндырамын.

Ялҡау ҡайғырып ултыра,
Указ бик ҡаты, тиеп.
Иң язалы пунктына
Башҡайым ҡапты, тиеп.

Һабан туйында “һөйөлөп”,
Танауһыҙ булып ҡайттым.
Биттәге шеш бөткәс кенә
Мин танауымды таптым.

“Мәй” һатып байыған ине
Беҙҙең Хәлимә апай.
Указ сыҡҡас: “Мин ярлы”, -- тип
Соцобес юлын тапай.

Рәхмәт һеҙгә, тыңланығыҙ
Беҙҙең шаян йырҙарҙы.
Арағыҙҙан таҙартығыҙ
Паразит, лодрҙарҙы!

24.05.1961.

40 градуслы атом пушкаһы

Ҡатнашалар:

Балтасы.
Урмансы.

Урман. Балтасы устарына төкөрә-төкөрә ағас ҡырҡа. Иҫке төптәр, улар араһында иҫке араҡы шешәләре.

Балтасы. Ух, урманы ла урманы! Ох, ағасы ла ағасы! Һикер, балтам, шәберәк һикер, ағастың эшен бөтөр!

Сәхнәгә урмансы тамаша залынан инә, килешләй үк, балтасыға төртөп күрһәтеп һөйләнә.

Урмансы. Күрегеҙ, граждандар, күрегеҙ урман ҡороткосон! Ниндәй вәхшилек! Ниндәй хозур урманды, ниндәй гүзәл ағастарҙы һәләк итә! Тәбиғәт кешенең иң-иң яҡын дуҫы икәнде беләһегеҙме? Тәбиғәтте һаҡлау тураһындағы яңы указды беләһегеҙме? Белгәс, ни тип ултыраһығыҙ, ниңә дәррәү күтәрелеп, шул ғазраилдың ҡулдарын бығауламайһығыҙ? Нисек түҙеп тораһығыҙ вәхшилекте? Выжданһыҙ икәнһегеҙ! Хәҙер үҙем барам, мин ул ҡанәскес балтасыны ҡулға алам! Башын төрмәлә серетәм! *(Сәхнәгә менә, балтасыға мылтыҡ тоҫҡай).* Стой, руки вверх! Мин һеҙҙе ҡулға алам!

Балтасы *(балтаһын ташлай).* Отставить! *(Кеҫәһенән шешәле араҡы сығарып, шешәне пушка һымаҡ итеп урмансыға тоҫҡай).* Руки вверх! *(Урмансының ҡулынан*

мылтығы төшөп китә, ҡулдарын күтәрә. Балтасы шешә төбөнә усы менән һуға, тығын атылып урмансының битенә тейә).

Урмансы. Уй-уй, харап булдым!

Балтасы. Зарар юҡ, төшөрөгөҙ егәрле ҡулдарығыҙҙы. Урмансы туған, әйҙәгеҙ әле, икәүләшеп, ошо пушканың яҫауын бушатып алайыҡ! Ҡырҡ градуслы мөйөштән ата торған мәргән пушка был, ҡөҙрәтле йәҙрәһе теләгән бер сәпкә тейеп ауҙара.

Урмансы. Да-а-а... Минең мылтыҡ ише генә түгел икән. Ҡөҙрәте алдында баш эйәм! *(Ултырышалар, шешә боғаҙынан алмашлап эсәләр ҙә шешәне тәғәрләтеп ебәрәләр – тамаша залына барып төшә).*

Балтасы:

Ҡара ла ғына урман, ҡуйы урман –
Үткер балталар кәрәк киҫергә...

Урмансы:

Үткер балталарҙан киҫтерергә --
Әсе эсемлектәр кәрәк эсергә...

Балтасы:

Ҡара ла ғына урман, ҡуйы урман –
Нисек һирәгәйтергә икән?

Урмансы:

Һирәгәйтеү өсөн шешәләрҙе
Нисек итеп күбәйтергә икән?

Балтасы. Әмәт Әлмәтович, һин мине таныйһыңмы?

Урмансы. А как же, һин бит минең иң шәп балтасым! *(Ҡосаҡлап үбә).*

Балтасы. Иҫеңдәме, Әмәт Әлмәтович, былтырғы... ошо төбәктәгеләр? *(Урмансыны ҡосаҡлап үбә).*

Урмансы *(иҫке төптәргә күрһәтеп).* А как же, төптәре бына һерәйешеп тора *(балтасыны ҡосаҡлап үбә).*

Балтасы *(төп янында аунап ятҡан шешәләрҙе күрһәтеп).* Ә пушкаларыбыҙ әле лә аунап ята *(урмансыны ҡосаҡлап үбә).* Их, йәшәйбеҙ икән, туған!

Балталар туҡ-туҡ...

Урмансы:

Шаһиттар юҡ, юҡ!

Балтасы:

Ауалар күп, күп...

Урмансы:

Дауалар ныҡ, ныҡ!

Дуҫкайым минең, туғаным минең, күҙ нурым минең! Дауаларың килеште, мораҙына иреште! Был урмандың бөтәһе, бөтәһе – һиңә! Ҡырҡ, емер, шыуҙыр, олаҡтыр! Бөтәһе, бөтәһе – һиңә!

Балтасы *(урмансыны ауыҙынан үбә).* Өм!

Урмансы *(балтасыны ауыҙынан үбә).* Өм!

Ҡабат-ҡабат үбешәләр.

Шаршау

24.05.1961.

Йөкмәткеһе

ПОВЕСТӘР

Ҡултыҡ пираттары...4
Туклҡын өҫтөндәге күбектәр...32

ХИКӘЙӘЛӘР

Серле һөнәр эйәләре...107
Һыңарғолаҡ Әпүш...120
Әжәрғәп мажаралары...134
Ветеринар...134
Мине нисек муйынлы-ҡойроҡло иттеләр...138
Аймылыш...143
Милли ғәҙәт...150
Кем мин?..154
Ырымбур ысулы...156
Беҙ нисек сик мәсьәләһен хәл иттек...164
Тағы ла сыландым...167
Характеристика...171
Ғәҙелһеҙлек...174
Билсән...179
Хөрмәт күҙлегенән ҡарағанда...181
Бәҫле бүрек...185
Кемдән – хеҙмәт, кемгә -- хөрмәт...189
Ҡойроҡһоҙ компот...193
Хәсән трибун...194
Тракторист һәм ғорурлыҡ...198
Бер көнлөк браконьер...200
Иблескә көн бөттө...203
Авторучка...210
Боғаҙ Бәҙәмша...214
Яҡуп Яҡубыч...219
Яҙлыҡҡан игелек...224
Мин бригадир булғас...227
Һөйәлле бармаҡ...231
Бер атаның өс улы...234
Түңәрәккүл әкиәте...239
Аҡыл теше...247
Виртуоз...249
Һуңғы могикан...256
Ҡомға ҡойолған зәхмәт...262

Әллә төштөммө Айға?..264
Их-ма!..266
Гиппопотам...268
Муйынға аҫылынған арыҫлан...276
Шпорҙар – ышҡырҙар...280
Дөйә -- төймә...282
Серек йомортҡа...285
Ете ҡат ер аҫтында өс көн...291
Нескәлек...303
Ҡом һәм табан...309
Ҡөҙрәт вулканы...313
Өлгөрлөк...316
Үҙемдән башланым...319

СӘХНӘ САТҠЫ-СОТҠОЛАРЫ

Сүлмәк...325
Ялҡау колхозсы...331
Ҡыйыулыҡ дарыуы...336
Ер аҙығы...339
Көрәш дауам итә...348
Ҡотҡарыу түңәрәге...361
Ҡибланың дүрт яғы...364
Пенсионер...368
Сәхнәнән шаян йырҙар...370
40 градуслы атом пушкаһы...372